Зигат Султанов
Йыһат Солтанов

СОЧИНЕНИЯ
В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

ӘҪӘРҘӘР
УН БИШ ТОМДА

ТОМ
IX

КОММУНИСТ

Роман и повести, мысли
Роман һәм повестәр, фекерҙәр

Солтанов Й.Ә.

Әҫәрҙәр ун биш томда, том IX. Коммунист. *Роман һәм повестәр, фекерҙәр*. -- Өфө: Башҡортостан "Китап" нәшриәте, 2007, 327 бит, 19 табаҡ.

Был томға авторҙың 60-ынсы йылдарҙа яҙылған, ташҡа баҫылып сыҡмай ҡалған әҙәби әҫәрҙәреһәм һуңғы йылдар публицистикаһы индерелде.

КОММУНИСТ

Роман

I КИҪӘК: БЫУАТТЫҢ ТӘҮГЕ УН ЙЫЛЛЫҒЫНДА

1

Гүзәлдәрҙән гүзәл һаҡмар-һыуҙың ҡандай ҡыҙыл ҡаяташлы яр башында ергә төшкән аҡҡоштарҙай аҡ өйҙәре теҙелгән, урталыҡта мөһәбәт ямиғ[1] мәсете һәм мәҙрәсәһе күңелдәрҙе елкендереп ҡалҡынған сал тарихлы Сәнкем-Биктимер ауылы... Һалам, таҡта, ҡалай түбәләре иртәнге тос ысыҡтан дымғылтланып, таңды тәбрикләп асылған асмалы тәҙрәләре, шағор-шоғор тауышланған солан ишектәре ҡаршы тауҙарҙан ағылмыш йәйге һалҡынса сафлыҡты тере йәндәрҙәй һулап, йылға буйы әрәмәлегендәге ебәк елгә бәүелеүсе бихисап төрлө сәскәләрҙең, хуш еҫле күгәремдәрҙең танау ярып керер татлы аңҡышына еңелсә иҫәнгерәгән... 1908 йылдың йәмле июленең сут-сут иткән, кәкүкләгән, саңҡылдаған, һумпылдаған, баҡаҡайлаған, сырылдаған һәр төрлө ҡош-ҡорт, тәлмәрйен, сиңерткә-бөжәк һәм тағы әллә нисәмәлер әкәмәтйән ауаздарының боламығы эркелепме эркелә ҡолаҡтарға. Мәғрур мәсеттең күккә энәләй сәнселгән манара суҡайында – аҫҡы донъянан өҫкөһөнә яҡынлап килгән ҡояштың беренсе сатҡыһына шат ҡойонған көмөш ярымайының нәҡ осонда, төпһөҙ йыһандың күҙгә күренмәҫ саз ҡылына сирткәндәй, ҡыҙыл түшле бер ҡошсоҡҡай талпынып-талпынып сыңраны... Һаҡмар-һыуҙың төҙ ҡамышлы, итләс-ҡусҡыл томбойоҡло, йәшел ылымыҡлы тонйорау ҡолаҡ-ҡултыҡтарынан, күгәрем төплө йәйен ятыуҙарынан ҡуйы-дымғылт һөлөк еҫе, ыуылдырыҡ еҫе, балыҡ еҫе ағыла аңҡауҙарға...

Сыраҡ яғып төндә йәйенгә ултырған Солтановтар сатаһы -- Һантый Хәлил үҙенең ҡәҙимге һуҡмағынан көндәгесә улъяһын йөкмәп уҙҙы – һарыҡ башлы балығының бесәй ҡойроғолай оҙон ҡуш мыйығы, йәбешкәк лайлаланып, ирҙең әрекмән япраҡтары ҡыҫтырған яҫы яурын башынан түше тәңгәленә һәлпелдәй, был ажар “һыу эйәһе”нең бүрәнәләй мыҡты буйы, ялпаҡ ҡойроҡ осо менән ян-яҡтағы буйға үҫкән үләндәрҙе әүшәреп, ергә һөйрәлеп килә. Ят еҫ тойоп эттәр бошонҡо абалай, иртүк тороп һыйыр һауған ҡатын-ҡыҙҙың, егәрле эшен бүлеп, ситән аша тызырайып ҡарауы, ут күршеләренә өндәшеүе:

-- Әстәғәфирулла тәүбә, аждаһамы тип торам! Һантый Хәлил тағы йәйен алған дабаһа!

-- Улъя тиһәң дә улъя – ауыҙы арандай асылған!

-- Ил-ғәләмде туйҙырырлыҡ!

---

[1] Ямиғ – йыйыусы (соборный), бөтә мәхәллә йыйылып йома намаҙы уҡыла торған ҙур мәсет.

Баҙыҡ ағаҫка сабылған ғәмһеҙ балта туҡранлауы ошо әҙәми тауыштарға таҡмаҡланып өҫтәлә: дыңҡ! дыңҡ! дыңҡ! – Сәнкем-Биктимер ауылының тирә-яҡтарға ифрат мәшһүр мәҙрәсә биналары тарафынан бимазалай был балта. Ауыл имамы Мөхәммәткамал ахун хәҙрәт Дәүләтшиндың тынғыһыҙлығы инде: башҡорт һәм ҡаҙаҡ бүлектәренән ғибәрәт шанлы мәҙрәсәнең ҡаҙаҡ өлөшөн йәнә *лә* бер төкөмәгә киңәйтә, сөнки бында, Үҫәргән төбәгенә, терәлеп үк торған ҡанҡәрҙәш ҡаҙаҡ далаларында мәғрифәт нурҙарына һыуһау көсәйеп, хәлфәләргә ихтыяж артты, шуларҙы халыҡтың үҙ улдарынан әҙерләп биреү зарур. Дәүләтшиндар шәжәрәһе боронан уҡ Урал – Иҙел арауығындағы ауылдарҙа имам һәм ахун булыу, илдең мәғрифәт теҙгенен ҡулда бөрөп тоту менән маһир, шулай уҡ сардарлыҡ юлында аҡ батшаның генералдары дәрәжәһенә етешкәндәре *лә* бар, шуға күрә Рәсәй күләмендә абруйҙары ныҡ, һүҙҙәре үтемле уларҙың. Мөхәммәт-камал хәҙрәт тә бит ахун булмаҫы элек үк, Ырымбурҙың баяғы ҡаҙаҡ далаларында шәп алыш-биреш ҡылған атаҡлы татар байы Әхмәт Хөсәйенов менән йәтеш уртаҡ тел табып, һаҡмар башынан ауыл аша ағыҙылған һалдың шаңғырлауыҡ ҡарағай һәм ҡарағастарынан дүрт-биш ауыл йома намаҙы уҡырлыҡ йәмиғ мәсете һалдыртты, атаҡлы мәҙрәсәне бина ҡылдыртты. Сисенгән һыуҙан таймай, тип, инде килеп яңы төкәтмәгә *лә* Әхмәт бай ҡаҙанынан ҡолаҡ сығартҡан (ҡаҙансының ҡулында, ҡайҙан ҡолаҡ сығарһа, тигән мәҡәл бар). Бүрәнәләрҙе өмә ярҙамында күмәк көс менән һөйрәтеп мендергәйнеләр, ә хәҙер ишетәһегеҙ: һары таңдан уҡ тынғыһыҙ балта дыңҡылдай... Аслан үҫәргән башҡортоноң оҙонса-түңәрәк йөҙлө, шыма күлдәй киң асыҡ ҡара күҙле, ихтыяр көсөн белдереп ҡыҫылмыш бүртек ирендәре өҫтөнән һыҙылып ҡына сыҡҡан сөмһара мыйыҡлы, өҫтөндәге хөлләһе[2] *лә*, таушалған ғына булһа *ла*, үҙенә хайран килешле ун һигеҙ йәшлек егет уйната ҡулындағы тапҡыр оҫталыҡ ҡоралын: шыма саған һабын ерекмәндең[3] ҡатып-ҡалсайған устарына ҡаты матҡып, тәҙрә үренәсә үркегән бура арҡаһына һыбайланып. Мөхәммәткамал хәҙрәт уны, шәкерттәре араһынан иң егәрлеһе *лә* эшлеклеһе булараҡ, әртил башлығы итеп ҡуйған, көҙгә тиклем бинаны ҡороп еткереү бурысын йөкмәткән. Егеттәре кистән теүәлләргә өлгөрмәгән мөйөш уртламаларын үҙе уйып еткерә, күмәк көс килеү менән үк, тоҡарлыҡһыҙ, яңыларын өҫтәргә. Әртил тигәндәре *лә* шул күбеһенсә өлкән шәкерттәр ҡоро: быйылғыһын йәйгелеккә һеперелеп илдәренә йәки ҡаҙаҡ далаларына “мулдәкә”леккә[4] таралмайынса, Әхмәт байҙың ҡалтаһы[5] *ла* мәхәллә халҡының хәйер-садаҡаһы иҫәбенә балта оҫтаһы булмаҡҡа ҡалған... Егет мөйөш уртламаһын уйып йәтешләй, бер ыңғайҙан ауыл һыртындағы зират ҡырынан тартылмыш Кершәнник[6] юлында суҡаңлаған яңғыҙ-ялпы йәйәүлене абайлай – биштәр[7] артмаҡлаған серле мосафир. Ҡыҙыҡ, кем булыр? Тау битләүенән

[2] Хөлләһе – кейеме.

[3] Ерекмәндең – ер (ауыл) кешеһенең.

[4] “Мулдәкә”леккә -- уҡытыусылыҡҡа, ҡаҙаҡ балаларын уҡытырға.

[5] Ҡалтаһы – аҡса һауыты.

[6] Кершәнник – атаҡлы урыҫ яҙыусыһы Н.А. Крашенинниковтың бабаһы Петр Крашенинников беҙҙең бабаларҙан һатып алынған ерҙә нигеҙләгән баҙарлы ҡасаба, хәҙерге Петровское (Сәнкем-Биктимергә 18 саҡрым).

[7] Биштәр – арҡа тоҡсайы.

үрмәләүсе ауыл көтөүенә боролоп ҡарап торҙо. Шул мәлдә мәсет манараһынан йәш мәзиндең әсе нескә ауазлы аҙаны таралды, аһәңе менән һуғарҙы -- иртәнге намаҙ бөтә ығы-зығыларҙан өҫтөнлөгөн белдерҙе. Ғәрәп телен һыуҙай эскән был ике йәнгә, балтасы һәм мосафирға, аҙан һүҙҙәре әсә телендәгеләй аңлашылһа, наҙандарға иһә тәржемәләгәндә ошолай яңғырар ине: *“Алла бөйөк. Бер Алланан башҡа хоҙай юҡлығын раҫлайым. Мөхәммәттең Алла илсеһе булыуын раҫлайым. Намаҙға ашығығыҙ. Имен булырға ашығығыҙ. Намаҙ йоҡонан хәйерлерәк!”* Юлаусы йәһәтләп биштәренән намаҙлығын сығарҙы, ә оҫтабыҙ үткер балта һағағын, ыңҡылдатып, һимеҙ бүрәнәгә батырҙы. Ауыл ҡуҙғалды: тәһәрәттәрен алып өлгөргән көллө ир-ат тыҡрыҡтарҙан, урамдарҙан ағылды мәсеткә табан. Аҙан әйтелеп бөттө, мәхәллә мәсеткә тулды. Юлаусы юл намаҙлығын йәшкелт бүтәгәгә[8] түшәп бөксәйҙе, балтасы иһә бура өҫтөндә ултырғаны килеш уҡынды. Мосафир, намаҙын теүәлләп, зираттың иң боронғо өлөшөн ҡыҙырҙы, ярты биленән ергә һеңеп мүк ҡаплаған ядкәрташтарҙың тамғаларын, яҙыуҙарын тикшерергә, ентекләргә кереште. Балта оҫтаһының күңелендә был сит кешегә ҡарата хөрмәт моронлап, берәй изге заттыр был, Хызыр-Ильяс үҙе түгелме икән, тип тә уйланы. Бисмиллаһын әйтеп ҡабат балта саба башлағас, мосафирҙың ҡай арала янына килеп еткәнлеген абайламай ҙа ҡалды: тәбәнәгерәк тарамыш буйлы, ҡарсығараҡ танаулы нәҙек-оҙонса йөҙлө, ике күҙе уйға сумған, һуңынан мәғлүм булыуынса, тап уның менән бер йәштәге тау башҡорто ине ул. Юғары ҡалҡынып ҡарап:

-- Әссәләмәғәләйкүм, эштәр уң булһын, оҫта! – тине.

-- Вәғәләйкүмәссәләм, ауыҙыңа бал да май, юламан! – Балтаһын бүрәнәгә кәнҙәп ҡалдырып, ырғып төштө лә ҡуш ҡуллап күреште – һәр мосафир изге бит. – Сәлимйән шәкерт Шәһәргәрәй улы Мырҙағолатов буламын, урыҫсалатыбыраҡ әйткәндә, -- тип, “урыҫса”һы өсөн уңайһыҙланыбыраҡ өҫтәне.

-- Әләйһә мин Әхмәтзәкир Ишмөхәммәт хәҙрәт улы Йәлитов булам, -- тине юламан, көлөп.

-- Кем? Ишмөхәммәт хәҙрәт?! – Сәлимйәндең маңлайы бураҙналанды. – Мәшһүр Күҙән мәҙрәсәһен нигеҙләгән хажимы?

-- Тап үҙе була инде.

-- Ғәфү ит, тәҡсир, аҙ ғына ултырып торайыҡсы бынауы шаңғыр бүрәнәгә, Мөхәммәткамал хәҙрәт намаҙҙан сыҡҡылағансы. Аяҡтарың талғандыр.

-- Ә үҙең ниңә йәмәғәттән ситтә ҡалдың, әллә ҡиблаң ҡыйышмы? – Көлөүен йәшермәй һынай бирҙе юламан, шулай ҙа йәштәше ҡатарынан бүрәнәгә уңайлы йәпләшеп.

-- Әстәғәфирулла тәүбә, тәғәйен үҙең кеүек үк, рәсүлаллаһ Мөхәммәт ғәлиһөссәлләм ҡиблаһына тура ҡарайҙыр йөҙөм. Үҙең дә изге бурысыңды анауҙа атҡарҙың бит, мин дә шулай – бура арҡаһына һыбайланып ултырғаным килеш мөкиббән үтәнем. Ҡөрьән Кәримдә сөнки ҙә, һыбайлы яугир йәки сәфәр әһеле, ҡабалан эш бәндәһе булараҡ, ошо изге бурысын, хатта ҡибла тарафына боролмайынса ла, эйәрендә барышлай атҡара ала, тип әшкәртелгән түгелме?!. Мин дә ҡабалан эш кешеһе – иманыбыҙҙың яҡты усағы мәҙрәсәгә бина ҡорам.

---

[8] Бүтәгә -- даланың ер йөҙөн япҡан ҡылдай нескә йомшаҡ һабаҡлы үлән (ковыль), ә уның көмөштәй ҡыл-сәскәһе – ҡылған.

-- Дөрөç. -- Әхмәтзәкир юламан етдиләнде. – Гәрсә үҙем биш намаҙымды ҡалдырмаç йән булһам да, динилекте диуаналыҡҡа алмаштырыу тарафында түгелмен. Изге йола ла донъяуилыҡҡа аяҡ салмай ярашырға, мәсьәләнең ике яғы ла бизмәнләнеп тигеҙләнергә тейеш. Юғиһә бит, тәүәрихтәрҙән беләһеңдер, Урта Азиялағы ислам мәмләкәттәренең Рәсәйгә әсир төшөүҙәренең төп сәбәбе лә уларҙың, бабабыҙ Сыңғыҙ ҡанундарынан айырылып, ылғый шәриғәт ҡанундарына йөгөнөүҙәренән тора. Һаааай, төрки-ислам донъяһының бәкәленә ныҡ һуҡты был торғонлоҡ, йәғни ҡатып ҡалғанлыҡ...

-- Эйе, мәғзүм[9], тап шулай...

-- Ә имамығыҙ ниңдәй? Таш мәсеткә ағас мулла түгелме? Мәҙрәсәгеҙҙә “яңы ысул” елдәре туламаймы?

-- Юҡ, беҙҙең Мөхәммәткамал хәҙрәтте ҡатҡан тип әйтеп булмай, әммә “яңы ысул”ға ла бик иçе китеп бармай: мәҙрәсәбеҙҙәге ҡәҙимге дәрестәргә йәнә килеп күк есемдәрен танып белеү, хисап, жәғрәфиә фәндәренән һабаҡ өçтәп ҡотолдо. Шуға күрә Ырымбур шәкерттәренең йәдитселек болаһы ла болартманы беҙҙәрҙе.

-- Инш-Алла, тап атайым мәҙрәсәһендәгеләй икән дә... Ә һин, тәҡсир, ошо ояңда ҡаҡланаһыңмы инде һаман? Әллә юҡһа яңы ғилемдәр эстәргә минең һымаҡ баш ҡараған яҡҡа юçыҡланаһыңмы?

-- Аллаға шөкөр, мин бындағы уҡыуымды осланым. Әммә аяҡ тартҡан яҡҡа ғилем эстәп китер өсөн кеçә төбөм шомотор. Атай ҡарттың ҡураһында ла бер Ҡантурат менән һыйырҙан ғәйре капитал юҡ. – Ҡантурат тигәндән егеттең сырайы яҡтырып, тауышы ҡалтыраны. -- Әммә малҡай һис бер алтынға биргеһеҙ – елдәй елеп йөрөмәле йор юрға, Шүлгән күлдән сыҡҡан аçыл йылҡыларҙың тоҡомо! Беләһеңме?

-- Беләм, минең бөрйән башҡорттары араһындағы Ибраһим тигән йән дуçымдың да тап шундайын юрғаһы бар – шул Шүлгән тоҡомонан. – Икеһе тиң берталай уйға талды, моғайын, Күктәге Көндәй (урыçса Коньдай) нур балҡытып елеп барған ҡантурат (конь-турат) юрғаларҙы күҙ алдына килтерҙе. Күңелдәре йомшарып, бер үк башҡорт йөрәге менән йәшәүҙәрен тойҙолар.

-- Ә мин бына, атайымдың малдары ишле булһа ла, Ырымбур тиклем Ырымбурға йәйәүләп китеп барышым – Әхмәт байҙың “Хөсәйениә” мәҙрәсәһенә морон төртөргә иçәп...

-- Инерһең, Инш-Алла. Яҡшы уҡып, байҙың махсус хәстәрлегенә лә ирешерһең. Ҡаршыңдағы бына был мәсет-мәҙрәсәләр ҙә бит уныҡы. Йомарт бәндә ул Әхмәт бай. Йылына бер-нисә тапҡыр, изге байрамдарыбыҙға арнап, шәкерттәргә хәйер-садаҡалары ла килеп тора, йыртыҡҡа ямаулыҡ, тигәндәй... Татар аҡылы төштән һуң, тиһәләр ҙә, быныҡы теүәл: -- биргәнгә -- бирермен, һаҡланғанды – һаҡлармын, тигән бит Аллаһы Тәғәлә. Ә һинең тик ятмауың да хәйерле. Мин дә хәлдән килгәнсә ҡыбырлайым – көҙгә тиклем кеçә ҡалынайтырға ҡалдым. Аллаһы бирһә ҡырпаҡ ҡарҙан берәй ауылға мөғәллим йәки ҡаҙаҡ далаларына мулдәкә булып сығып китергә ниәт.

[9] Мәғзүм (эскерһеҙ) – мулла улдарына хөрмәтләп өндәшеү.

-- Амин, ниәтеңде ҡабул ҡыла күрһен Аллаһы Тәғәлә. -- Әхмәтзәкир уҡынып бит һыпырҙы.

-- Ә һин, йәштәш, Өфөгөҙҙән Ырымбурға тоҙалаған таш юлды белмәнеңме ни – был бөгәрем яҡҡа һалыулатып китеп бараһың?

-- Беләм мин уны, әммә бында боролоуыма сәбәп бар: юл буйынса ҡараңғы башҡорт ауылдарында атайымдың элекке шәриҡтәштәренә[10] һуғылып, күп михнәтле халҡымдың тын алышын өйрәнеп киләм (өҫтәүенә, мөхтәрәм Мөхәммәткамал хәҙрәтегеҙ – атайымдың ҡорҙашы, шәриҡтәше). Йәнә килеп, тарихи Перовский юлы тап ошонда ослана тигәйнеләр, шуны ла күрергә ине, хәҙрәтегеҙ фатиха бирһә...

-- Киттек үҙенә, тап иртәнге сәйенә "тып!" итергә! – Сәлимйән мут йылмайҙы. – Перовский утары иһә ана анауы күгәреп торған Артышлы тауҙың артында ғына – нәҡ мин тыуған Мырҙағолат ауылы төбәгендә. Насип итһә, унда ла етеп әйләнерһең, Инш-Алла. Сеү, хәҙрәт мәсеттән сыҡты, беҙ ҙә ҡуҙғалышайыҡ.

Урам буйлап ирәүән генә аҙымлаған ахун хәҙрәттең таҡта ҡапҡалы ихатаһына инеп китеүен көтөп, мәҙрәсәнең төп бинаһы алдындағы яңғыҙ ағас төбөнә ышыҡландылар. Әлеге мәҙрәсә булмаған замандарҙа уҡ, Ырымбурҙағы Каруанһарай баҡсаһына ултыртырға йәш сығындар тейәп алып китеп барышлай, ошонда ҡуналҡалаған Йылайыр башҡорттарының иҫтәлеге ине был ҡола ялан яғы өсөн ят күренгән ҡарт ҡарағай; тәүҙә улар ишле булып, йылдар үтеү менән башҡалары ҡороп, яңғыҙы һерәйеп ҡалғайны (уныһы ла утыҙынсы йылдарҙа юҡҡа сыҡты). Уйсан ҡарағай төбөндә ошо хаҡта һөйләшкәс, фекерҙәрен боронғолоҡ биләне.

-- Дәүләтшиндар нәҫеле гел указлы муллалар булып, бөтә һаҡмар буйҙарына Ырымбурҙан Орскиғаса таралған... – тине Сәлимйән.

-- Алыҫҡараҡ алдырт, туған, – Силәбегәсә, тиһәңсе!

-- Ул яҡта ла бармы ни орлоҡтары?

-- Мөхәммәткамал хәҙрәт үҙе әйтмәнеме ни әллә? -- Әхмәтзәкир тағы ла мут йылмайҙы. – Мәҫәлән, шөһрәтле батша чиновнигы Ғабдулла ахун Дәүләтшин хәҙрәттәре, 1865 йылда кантонлыҡтар бөтөрөлгәс, билендәге чиновник ҡылысын һалып, һөйөклө аҡ картузын кире-ҡабат аҡ сәлләгә алмаштырып, тап шул яҡтағы Ишкинда ҡылысһыҙ ғына имам булып торҙо, тип...

-- Ул әйтмәһә лә беләм, беҙҙең Мөхәммәткамал хәҙрәт менән икеһе бер туған. Һаҡмар түбәнендәрәк Себенле аулы мәҙрәсәһен нигеҙләүсе Дәүләтшаһ ишан улдары лаһа улар.

-- Дөп-дөрөҫ, ауыҙыңа бал да май!

-- Был яҡтарҙа Абдулла мулла, хатта Апуш мулла тип тә йөрөтәләр уны, һин әйткән "ҡылыслы ахун"ды. Беҙҙең ауылдың Мәнди ҡурайсыһы йыр сығарып шәп данлаған бит уны, "Абдулла ахун" көйө... беләһеңдер?

-- Һаааай башҡортомдоң көйҙәре лә йырҙары – күктәге йондоҙҙар һанынса бихисап, барыһын да нисек белеп йә иҫләп бөтмәк кәрәк?.. Әле барғас хәҙрәт ҡашында йырлап бирерһең, бәлки?

-- Еренә еткерепме? – Сәлимйән хәйләкәрләнде.

---

[10] Шәриҡтәштәренә -- бергә уҡыусыларына.

-- Әлбиттә!

-- Уныһы булмай, ҡорҙаш... – Егет кеткелдәп көлдө. – Бесәй арҡаһын ҡаршы һыпырыуға тиң булыр ине был.

-- Бәй, аңламайым. Ошонда ғына бәхетле ит, әләйһә, ҡыҫҡаса ғына булһа ла.

-- Риза. Шаҡтай оҙон ҡиссаның асылы шул: Ғабдулла ахун, имеш, "ҡылыслы кантон" булмышында Ырымбур өйәҙенең кантондар попечителе Филатовҡа ҡуштанланып, башҡортоноң елек майҙарын һурҙыртыусы ямандың яманы икән... Мәнди ҡурайсының Абдулла ахунды яманлап йыр сығарыуын, шуның илгә таралыуын ишетеп, ғәйеплене кантон идараһына килтертәләр. "Йә, кантонға сығарған йырыңды ишеттер әле!" – ти Филатов. Мәнди әйтә: "Яманлап йырлайыммы, маҡтапмы?" – "Яманлағанын йырла". Мәнди ҡурайсы, күҙен дә йоммайынса:

Кантон булып алғандан һуң,
Башҡорт башын ашаның.
Атаң һабағын онотоп,
Урыҫлаша башланың.

Кантон булғас, картуз кейеп,
Салмаңды ла ташланың, --

тип һыҙҙырып ебәргән, ти. Шунан Филатов әйтә: "Инде кантонды маҡтап йырла", -- ти. Мәнди тәрән тын ала ла, бер нимә лә булмағандай:

Абдулла ахун Дәүләтшиндың һәр бер һүҙе тоғоро,
Абдулла ахун кантон булғас ҡалманы бит оғоро.
Урай-урай ат сабырға Тирәклелә ер ҡайҙа?
Һәр хөкөмдө ғәҙел бирә, Дәүләтшиндай ир ҡайҙа?! –

тип маҡтарға керешә. Аймылышланған Абдулла ахун Мәндигә ун һум аҡса биреп ҡайтарып ебәргән, имеш...

-- Һәй маладис, тапҡан бит яйын! – Шарҡылдап көлдө Әхмәтзәкир.

-- Шуға күрә "Абдулла ахун" йыры ла беҙҙә ике төрлө: берене хәҙрәт ҡолағына салынмаҫтай ҡасып-боҫоп тирелһә, икенсеһе Дәүләтшиндар табынында кинәнеп башҡарыла. Ә еренә еткереп башҡарыу тигәнем – беренсеһен дә йырлап, Дәүләтшиндар бесәйенең һыртарҡаһын ҡабартыу була инде ул. Әммә елгә ҡаршы төкөрмәүҙе хәйерле һанаусы, Мәнди ҡурайсы алымы менән йәшәүселәр күберәк...

-- Их был беҙҙең башҡортто!.. – Етдиләнде Әхмәтзәкир. – Түрә-ҡара алдында иһаһайлап, уның мыйыҡ осо һелкенгән тарафҡа тайғаҡланырға әҙер тора... Киттек, төкөр танауына! – Ҡарт ҡарағай төбөн ҡалдырып, хәҙрәт йортона ыңғайланылар. – Шулай ҙа Мәнди ҡурайсы зирәк икән, әй: аҡ батшаның тоғро ялсыһы булһаң, үҙ халҡыңдың башын ашарһың, тигән. Ҡылыслы ахундың, был яҡтарҙан киткәс, Урал артындағы тәржемәи хәле быны дөрөҫләй.

-- Унда ни ҡылған тағы?

-- Мәшһүрҙәрҙән мәшһүр шағирыбыҙ Аҡмулланы, хөсөтләп, төрмәгә яптыртыусы, мөхтәрәм Зәйнулла ишанды, тәфтишләп, кафырлыҡ ояһы Вологдаға һөрҙөртөүсе лә шул уҡ Абдулла мулла Дәүләтшин даһа!

Сәлимйән шөбһәләнде:

-- Был мөхтәрәм Дәүләтшиндарҙы әйтәм, сығыштары оторо татар нәҫеленәнме икән әллә?

-- Ниңә, булһа ни? Барыбер түгелме ни?

-- Түгелдер шул: татар ултырып киткән ерҙе ҡырҡ ҡат ҡырсып ултыр, тигәндәр бит...

-- Беләм, татар барҙа хәтәр бар, тип тә әйткәндәр, донъя бит... Ә шулай ҙа мәҡәл бында урынһыҙ. Шөһрәтле Дәүләтшиндар шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһынып, төпсөнөп ҡарағаным бар. Бабалары Ғәҙелшаһ ишандың үткән быуат башында уҡ мәҙрәсәһе менән дан тоткан Эстәрлебашта имам һәм шәйех булғанлығын, ә сығышы буйынса Бөрө аҫаба башҡорто – тап үҙегеҙҙең боронғо Үҫәргән ырыуынан икәнлеген асыҡланым. Әйткәндәй, -- әшнәһенең бөйөрөнә төрттө, -- ул хәҙерге Бөрө ҡалаһы ла мәжүсилек замандарында Бүре-әсәгә табыныусы үҫәргәндәр нигеҙләгән Бүре ҡалаһы икәнлеген беләһеңме?

-- Уныһы беҙгә мәғлүм, шул риүәйәт эт тиреһенә ядкәрләнмеш сал-боронғо шәжәрәбеҙҙең аҡ ҡағыҙға күсермәһендә яҙылған.

-- Эт тиреһенә?! – Мосафирҙың күҙҙәрендә ут ҡабынды. – Күргә ине ул шәжәрәне!

-- Үкенескә ҡаршы, был инде мөмкин түгел. Эт тиреһенә яҙылғанын баш яҡҡа[11] кейәүгә оҙатылмыш йәш киленсәк атаһынан мал урынына ялбарып алып киткән, ә ҡағыҙға күсермәһен... ошо ауылдың Һантый Хәлиле тәмәке төрөп тартҡан...

-- Ҡыҙғаныс... Ауыҙынан төтәтеүселәр ҙә бар икән был ауылда...

-- Бер Һантый Хәлил генә, ҡасып-боҫоп, тигәндәй... Кершәнниккә балыҡ һатырға йөрөгәнендә урыҫ ызнакумдарынан аҙып ҡайтҡан...

-- Ауыҙынан ел алғыры! Ошондай күркәм, сал тарихлы ауылда...

-- Сал тарихлы, тигәндән, ошо ауыл торған ерҙә, Ҡаҫмарт йылғаһы тамағында, борон-борон замандарҙа үҙебеҙҙең Муйтән хандың байтәхетле баш ҡалаһы булған имеш, тип тә ядкәрләнгәйне баяғы шәжәрәлә...

-- Бына бит! – Шуның менән әңгәмә өҙөлдө -- ахун хәҙрәт ҡапҡаһынан инделәр. Мосафирҙың атаһы Ишмөхәммәт хажи ысынлап та Мөхәммәткамал хәҙрәттең иң яҡын ҡорҙаштарының береһе икән -- Әхмәтзәкир мәғзүм үҙенә лайыҡлы хөрмәт менән ҡаршыланды, түр башына ҡәҙерләп ултыртылды. Эш кешеһе Сәлимйән ни, үҙ бурысы үтәлеүен самалап, остазынан рөхсәт һорап ҡараһа ла, уны ла ебәрмәнеләр; йорт хужаһы тире көртәһе өҫтөнән тәнен ҡаштор-ҡоштор ҡашып (тимрәүҙән интегә ине, буғай):

-- Берюлға эшеңде ҡуйып тор, кем, Сәлимйән мырҙа, оло ҡунағыбыҙ булған йәштәшеңә серҙәш һәм арҡадаш бул, -- тине. Аяҡ бөкләп табын түңәрәкләтеп ултырышҡас, йорт хужаһы Сәлимйәнде мосафирға төптәнерәк танытыуҙы мәғкүл күрҙе: – Иң һәләтле шәкерттәремдең береһе -- милләт өсөн утҡа-һыуға инерҙәй;

[11] Баш яҡҡа – йылғаларыбыҙ (йәғни Ҡаҫмарт, Һаҡмар) башланған яҡҡа – һыу үренә.

киләсәге камил һәм бөйөк, илгә игелек ҡылыр бурыстары ла ҙур, -- тип өҫтәне. Өнһөҙ-тынһыҙ сәй яһаусы абыстайына бороло. – Фатих мәғзүм эт һуғарып йөрөймө, сәйе һыуына лаһа?

-- Бер нимә лә һуғармай. Балта оҫталарыңды ашатырға ҡымыҙ, аш бирep, мәҙрәсә ашнаҡханаһына ебәрҙем. Бына-бына ҡайтып етер.

Ишек шығырлап асылды, ҡауырһыны яңы ғына ҡата башлаған шыйыҡ үҫмер тупһанан ырғып менде; йыйын әҙәм көн эҫеһенә түҙә алмай елпенгәндә, өҫтөнә ул еңел генә төлкөтун, башына төлкөбүрек кейгәйне. Йәй уртаһында ошолай ҙа көпләнеүҙең серен төшөнә алмаған ҡунаҡ менән алсаҡ-ҡыйыу сәләмләшеп, табынға теркәлде үҫмер.

-- Кинйәм – алтын ҡаҙығым, Фатихым[12] ошо инде. Ике туған ағаһы Ғөбәйҙулла[13] мәғзүм кисә генә Ырымбурға киткәйне, мәҙрәсә йомошо менән. Алла бойорһа, уның менән дә күрешерһегеҙ әле, амин, Әхмәтзәкир мәғзүм. – Сыҙай алмай шағор-шоғор ҡашынды. "Их, медицина фәненән маһир табиптар етешмәй илгә! Артта ҡалғанбыҙ шул..." тип көйөнөп уйланды мосафир. Фатих мәғзүм, ырғып тороп, асыҡ тәҙрәне япты:

-- Күпме әйтәм, әсәй, һиңә, өйҙә ел уйнатма, тип!

Абыстай ыуаланды:

-- Уй балаҡай ғынам, биртенмәһәң генә ярар ине бер үк, онотоп ебәргәнмен!

-- Төлкөтун менән төлкөбүрек тә ел үткәрәме ни, Фатих ҡусты? – Сәлимйән шаярып төрттөрҙө. – Йүтәлләйһең дә йүтәлләйһең, күкрәгеңә хут[14] еле һуҡҡан кеүек...

-- Минең урында булһаң, белер инең нимә еле икәнен!

-- Һе-һе, төлкөтуным юҡ шул минең, төлкөтунлыларҙы ғына ҡалтырата бит ул ел!

Фатих мәғзүм дә тел төбөнән тумбытырға уйланы:

-- Ысынлап та, серен әйт әле, ағай: ни өсөн мин, йылы тун кейә тороп та, ел һуғылып сирләйем, ә һин үҙең, йәйен-ҡышын тишек-тошоҡ кейенеп тә, ауырыуҙың ни икәнен белмәйһең?

Үҫмерҙең башынан һыйпаны:

-- Бының сере бик ябай: ел минең сәкмәндең бер тишегенән жыйылдап кереп, шунда уҡ икенсе тишегенән сыйылдап сығып һыҙа – һыуыҡлығы тәнгә теймәй ҙә ҡала. Ә һинең тундың ул салғый аҫтынан ҡыҫыла-ҡыҫыла үрмәләй ҙә, сығыр юл таба алмай, арҡа буйыңа тарала... Туныңды минең йыртыҡ сәкмәнгә алмаштырып кей, ҡустым.

-- Һе, аҡылың палтын икән! – Ирендәрен турһайтты мәғзүм. Ауыҙ йырып тыңлаған хәҙрәт сәй һемереүен белде, абыстай иһә кинйәһенең арҡаһынан һыйпап-һөйҙө:

---

[12] Фатих Дәүләтшин 1917 йылдың 25 – 29 августағы II Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт Мәркәз Шураһының (Башҡорт Үҙәк Советының) малиә (финанс) эштәре бүлеге мөдире итеп һайлана.

[13] Ғөбәйҙула Тажи улы Уразов (Мөхәммәткамал Дәүләтшиндың ҡыҙының улы) 1918 йылда – ҡыйыу ҡыҙыл партизан, 1919 – 20 йылдарҙа -- Муса Мортазин бригадаһының полк комиссары; 1920 йылдың июнендә совет Башҡорт ваҡытлы хөкүмәте ағзалары эш урындарын ташлап киткәс, Шәмиғолов режимындағы яңы хөкүмәттең секретаре итеп һайлана.

[14] Хут – ҡышҡы селлә аҙағындағы шартлама һыуыҡ.

-- Көлмәгеҙ әле, көлмәгеҙ! Ябаға тайҙы хурлама – яҙға сыҡһа ат булыр, тигәндәй, минең улым да мыҡтыланып буйға етер, күрермегеҙ!

-- Амин, абыстай, амин! – Бер тауыштан хупланылар. Күңелле хиссиәтләнеп, табынды ҡалдырҙылар. Фатих мәғүм, атаһы ҡарт әйткәнсә, "эт һуғарырға" йүгерҙе, ҡалғандары ишек алдына сығып, бераҙ баш-күҙ алғас, лапаҡ ҡарама төбөндә ҡуйы күләгәгә түшәлгән сағыу-айбарлы балаҫтағы ҡабарынҡы мендәрҙәргә ирәүән яйтайҙылар. Уртаға ашъяулыҡ йәйелгән, ҡымыҙлы көрәгә ҡуйылған.

-- Их, гүзәл Һаҡмар менән Ҡаҫмарт буйҙарының һаумалы[15] ла һаумалы! – Аяҡсылыҡты Сәлимйән үҙенә алып, балауыҙҙай һары ағас ижау менән һапыра-һапыра, шундай уҡ ағас туҫтаҡтарға һала торҙо, ирәүән генә һемереп бушата торҙолар. Оҙаҡламай Фатих мәғүм дә пәйҙә булып, уҙамандар ҡатарына теҙ сүкте:

-- Тәҡсир, болдорҙағы юлтоҡсайыңа күҙем төштө: тышынан ҡарағанда, китап һымаҡ нәмәләр ятҡандай унда. Ниндәй китаптар икәнен белергә мөмкинме?

-- Әлбиттә, баш өҫтө. Ҡыйын булмаһа, килтер әле бында тоғсайҙы, ҡустым.

-- Хәҙер! – Үҫмерҙең бер аяғы – бында, икенсеһе – тегендә; хәҙрәт үҙе лә ҡыҙыҡһынып шәйләй ине, буғай. Ҡулдан ҡулға күсте серле китаптар: Әбүғл Әләәл Мааризың "Әл-лүзүмиәт"е, урыҫ ғалимы Н.М. Ядринцевтың "Положение инородцев Сибири" тигәне, Аттарҙың "Пенднамә"һе[16]... Егеттең атаҡлы ғәрәп авторҙарын һыуҙай эсеү генә түгел, урыҫсаға ла маһирлығы көслө тәьҫир итте барыһына ла, ә Ядринцев әҫәрендә урыҫ түгел милләттәргә ҡарата ла тәрән ихтирам, яҡлау хисе һалынғанлығы күҙҙәренә йәш эркелдереп, күңелдәрен бермә-бер хушландырҙы, хатта һағайған ахун хәҙрәт тә ҡорҙашының улы тарыған "йәдитлек"тән рыя таба алманы. Һүҙгә һүҙ ялғанып, христиан дине менән ислам дине араһындағы айырманы билдәләргә тотонғас, китаптарҙың йәш хужаһы оҙон телмәргә күсеп: "Христианлыларҙың таянысы "Тәүрат", хикәйәләр йыйынтығынан ғибәрәт булараҡ, инсандың эске рухи булмышын һәм тышҡы тормошон бер-береһенә тап килтереүсе мәжбүри тәғлимәт ролен үтәй алмай. Инсандың эске һәм тышҡы тормошон үҙ-ара яраштыртмайынса, киреһенсә, ҡапма-ҡаршы ҡуйған бер дин ул", тип һалды ла, көтмәгәндә икенсе йүнәлеш алып: "Быныҡ менән бер ҡатарҙан исламиәт тә, ҡасандыр бер тәүәккәл ғәскәри йәмғиәттең дине булһа ла, ваҡыт үтеү менән кешенең ихтыярын йомшартыусы, шәхсәнә фекерен тарҡатыусы бәхәстәр һөҙөмтәһендә фанатизмға дусар ҡылыусы һыҙаттары өҫтөлөк алған бер дингә әүерелгән..." тип тә өҫтәгәс, хәҙрәттең эсендә көсөк юрта башлағаны һиҙелде:

-- Әстәғәфирулла тәүбә, бер юлы ике динде лә гүаһ[17] ҡылмағандай, Аллаға инанмағандай вәғәзләнең, мәғүм...

-- Тәүбә-тәүбә, фекерҙәремде камил аңлата алмағаным өсөн ғәфү үтенәм... Ҡиблабыҙҙан йөҙ ҡайырғаным юҡ, Инш-Алла. Алла һәм дин кешелек донъяһына

---

[15] Һаумал – яңы ғына өлгөргән, ҡырҡыуланмаған йәш ҡымыҙ.

[16] Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Хәтирәләр"енән алынды.

[17] Гүаһ – таныу.

хакимлыҡ ҡылған бер хәкиҙәттер. Быны инҡар иткән һәр кем, милләтенән айырылып, яңғыҙ башы ҡаңғырыуға дусар ителә... Әммә дин кешенең донъя ҡороу эштәренең алдына сығырға, ихтыярын артыҡ сикләргә, уның аяҡтарына тышау булырға тейеш түгел, тип кенә әйтмәксемен. Исламиәтте лә бер тәрән рухи дин тип ҡабул ҡылырға кәрәк, Ҡөрьәндәге: "Әгәр донъялағы диңгеҙҙәр яҙыу ҡараһы булып, Алла менән бәйле ғәләмдең серҙәрен ҡағыҙға яҙырға кәрәк булһа, был диңгеҙҙәр бөтөр, әммә ғәләмдең серҙәре бөтмәҫ-төкәнмәҫ", -- тигән фекер хаҡ. Минең дин менән мөнәсәбәтем деисы[18] доктор Дрейперҙыҡы кеүек, ә мосолманлығым Ҡөрьәндең ижад ителеүен белгән аббасид хәлифе Мәмүндеке һәм либерал мутазилсыларҙыҡы ҡәҙәр[19]...

Өнһөҙ бирелеп тыңлаған хәҙрәт хәүефләнеп баш сайҡаны; әңгәмәгә ҡолаҡ һалып табынға ниғмәттәр өҫтәүсе абыстайы эскерһеҙ ҡысылды:

-- Абау, көфөр һөйләп, тамуҡ киҫәүе була күрмә, балаҡайым! Атайың Ишмөхәммәт хажи, олатайың Хәбибназар хажи, белеп ҡалһа, ни әйтер? Мөхтәрәмә Өммөлхаят абыстай, әсәйең, тим, күҙ йәштәренә төйөлмәҫме бер юлы? Әгәр дөрөҫ аңлаһам, әстәғәфирулла тәүбә, Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге һәр бәндәһе менән, уларҙың эске уйҙары, тышҡы ҡылыҡтары менән идара иткәнлеген шөбһә[20] ҡылаһыңмы?..

-- Һин, әсәһе, юҡ өсөн көйәләнмә. – Йорт хужаһы тыныслығын һаҡланы. – Һәммәбеҙҙән уҙырырлыҡ ныҡ уҡымышлы булһа ла, башы йәш һәм иҫәр әле – донъяһының әсеһен-сөсөһөн татып ултырыр ҡалыпҡа. Беҙ ҙә сапсына инек...

-- Ә шулай ҙа Әхмәтзәкир йәштәшемдең һүҙҙәрендә мәғәнә бар кеүек, тәҡсир[21]! – тип баҙнат итте Сәлимйән.

-- Белмәйем, белмәйем...

Һаумал ҡымыҙ сихәтенән ҡыҙышып алған Әхмәтзәкир үҙенекен туҡыны:

-- Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәтенең киңлегенә шигем юҡ. Әммә күстәге бал ҡортолай миллиардлаған күп төрлө мәхлүҡтәрҙе, иҫәпһеҙ ғәләмдәрҙе яралтҡан Алланың эше – йәшәү ҡанундарын һәм тәбиғәт заңдарын булдырыу тип беләмен. Әммә ҡырмыҫҡа иләүендәге ғауға, йә иһә был Әхмәттең, теге Мәхмүттең эштәре менән махсус шөғөлләнеү Алла эше түгел, улар Алла тарафынан барлыҡҡа килтерелгән тәбиғәт тәртибенә бәйле. Тормоштоң һәм ысынбарлыҡтың башланғысын һәм ахырын, әхләҡ һәм киләсәк тормош мәсьәләләрен яҡшы аңлауҙары, тәжрибәле булыуҙары, башҡалар белмәгән күп нәмәләрҙе белеүҙәре һөҙөмтәһендә донъяның серҙәренә төшөнгән һәм Хоҙай Тәғәләгә яҡын булған күренекле шәхестәр кеше араһында пәйғәмбәр булып танылыр... Күбеһе уҡыйҙа белмәгән һәм ябай ҡатлам кешеләре араһынан сыҡҡан, мәҙәни кимәле буйынса ябай халыҡҡа бик яҡын булған был пәйғәмбәрҙәр кешеләргә үҙҙәренең

[18] Деисылыҡ тәғлимәте буйынса, Аллаһы Тәғәлә ғәләмде яралта ла һуңынан донъя эштәренә ҡыҫылмай, тәбиғәт үҙ ҡанундарынса хәрәкәт итә, ә кеше иһә үҙ ихтыярында.

[19] Мәмүн (813 – 833) – был хәлиф ваҡытында исламдың мутазилсы ағымы рәсми төҫ ала. Мутазилсылар Ҡөрьәндең Алла тарафынан бирелеүен танымай, уны боронғо грек фәлсәфәһенә яҡынайтырға тырыша.

[20] Шөбһә -- шик, икеләнеү.

[21] Тәҡсир – ғәйеплемен, мәғәнәһендә.

фекерҙәрен һәм идеяларын төшөндөрөү өсөн тарихи дастандарҙы халыҡ аңына барып етерлек һәм инанырлыҡ рәүештә аңлаталар... Бына шулай.

Ауыҙ асып һәр һүҙен йотоп тыңлаған Фатих мәғзүм, ҡапыл тәрән тын алып:

-- Ҡөрьән Кәримдең һәр бер һүҙе Аллаһы Тәғәләнең үҙ ауыҙынан сыҡмаған буламы әләйһә? – тип ҡалҡына биреп ҡуйғайны, атаһының ҡулы төртөп торғоҙҙо:

-- Ауыҙыңдан ел алһын, шайтан малай, бар, һарысай менән турысайҙы һуғарып, эйәр-ипсенде иплә -- ағайҙарың тирә-яҡты сәхрә ҡылып ҡайтырҙар, өйлә намаҙына тиклем.

-- Хәҙер, атай. Ә шулай ҙа һорауыма яуап алып китәйем – күңелдә төйөр ҡалмаһын. – Аяғөҫтө көтөп торҙо. Хәҙрәт быға һис тә ҡаршы түгеллеген белдереп һаҡал һыйпағас, Әхмәтзәкир, йәш мәғзүмдең төлкөбүрек аҫтынан сағыу баҙырлаған сөм-ҡара күҙҙәренә төбәлеп, фекерен дәлилләне:

-- Ҡөрьәндә бит, бөйөк маҡсатҡа ынтылыусы инсандар үҙ ихтыярына өлгәшеү өсөн ниҙәр генә эшләмәй, тигән фекерҙе аңлатып, “ике мөгөҙлө” йыһангир Зөлҡәрнәйҙең[22] ҡиссаһы килтерелә. Мәғрип менән мәшриҡты берләштергән был фатих[23] ғәмәлдә Македония батшаһы Филиптың улы... Ҡөрьәндә уның ҡаһарманлыҡтарына бағышланған дастандарҙың ғәрәптәр араһында таралған риүәйәте бирелә. Ҡөрьәндең тәрән мәғәнәле бер ни тиклем фекер-әйтемдәрҙән тороуы уның үҙендә үк Баҡара сүрәһендә һәм башҡа урындарҙа егерме дүрт тапҡыр әйтелә. Пәйғәмбәр үҙе йәшәгән заманда һәм унан бер быуат элгәре Йәмәндең вәлие[24] булған Ебреһигә (сығышы буйынса Абиссиния кешеһе) бағышланған мәғлүмәт, шулай уҡ Ғайса пәйғәмбәр хаҡында “уны йәһүдтәр үлтермәһә лә, аҫмаһа ла, хәдистәрҙә был ваҡиға уларға бәйле ҡалды”, тип әйтелеүе, әлбиттә, тарихи ваҡиғаларҙы сағылдыра. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәнде бөтә хәрефтәре, һүҙҙәре менән ошо килеш барлыҡҡа килтергәнме, әллә тик мәғәнәһенме? Был хаҡта ғалимдар төрлө фекер йөрөтә...

-- Ә хәҡиҡәт?

-- Хәҡиҡәт шул: Ҡөрьәндәге хәреф һәм һүҙҙәр генә түгел, ундағы ҡисса һәм фекерҙәр ҙә пәйғәмбәр шул заманда ғәрәптәргә аңлатыу эшен уларҙың аңына ярашлы рәүештә башҡарғанлығын дәлилләй, үтә күренеп тора был. Йәғни пәйғәмбәрҙең фекере ғәрәптәргә уларҙың үҙҙәре инанған ҡисса, дастан һәм әйтемдәр ярҙамында еткерелә. Ҡөрьәндәге ҡиссаларҙың ҡайһы берҙәренең аңлатыу нигеҙҙәрен ғәрәп әйтемдәре тәшкил итеүе, ҡайһы берҙәренең тарихта булған ваҡиғаларҙы тасуирлауы хәҙерге фәндә иҫбат ителгән инде...

-- Бар, улым, бар – етер һиңә! – тигәйне хәҙрәт, Фатих йылп итеп тайҙы. – Изге Ҡөрьән Кәримде лә дастан итеп күрә башламағайы!

-- Һе, үҙебеҙҙең сәсәндәр ижады һымаҡ икән, -- тине Сәлимйән, тамағы кибеп сарсаған телмәрсегә ҡымыҙлы туҫтаҡ һоноп.

-- Рәхмәт! – Төп күтәрә эсте ул. – Эйе, әгәр беҙҙең төркиҙәрҙән дә пәйғәмбәрҙәр үҫеп сыға ҡалһа, улар ҙа теге йәки был илаһи төшөнсәне аңлатыу өсөн төрки дастандарына, мәҫәлән, хыянатсыл тәбиғәтле бәндәне тасуир итеү өсөн

---

[22] Зөлҡәрнәйҙең – Александр Македонскийҙың.

[23] Фатих – асыусы, башлап ебәреүсе, яулап алыусы.

[24] Вәлие – эйәһе, хужаһы.

Уғыҙ дастанындағы Көлләркин Ябғуның ҡатыны хаҡындағы ҡиссаларға, ғәҙеллекте аңлатыу өсөн “Иҙеүкәй” дастанындағы “Иҙеүкәйҙең дөйәһе” кеүек ҡиссаларға таянырҙар ине һәм фекерҙәрен төркиҙәр ышанырлыҡ формала аңлатырҙар ине. -- Әллә ҡымыҙ сихәтенән иҙерәгән, әллә ҡатмарлы телмәрҙең талғын ағылышынан ойоғандай, күҙҙәрен йомоп ҡалғыған хәҙрәткә ҡарап, ҡартлыҡ баҫа башлаған, ахыры, быны, тип уйлап та өлгөрмәне, тегеһе күҙҙәрен тултырып уға ҡараны ла көтмәгәндә әйтә һалды:

-- Йә, хуш... Ишмөхәммәт ҡорҙашымдың улы булмаһаң әгәр, ике ҡолағымды ҡаплап тыңлар инем быларҙы... хәйер, йәштәр үҫә, ҡарттар сүгә, тигәндәре ошолор... заман заңын аңламай башлағанбыҙҙыр...

-- Улай тимә, остазым, беҙҙең һеҙгә тиңләшһе бар әле.

-- Тәҡсир, үҙем дә икеләнәм, -- тине Әхмәтзәкир. -- Уйымдағын түгелдерҙем.

-- Һәй йәштәр, йәштәр, ошо ҡасабаның хаҡ диндән табан тайҙыра яҙған Хәсәне менән Лотошо булып ҡуймаһағыҙ ярар ине лә, тәүбә-тәүбә... Ярай үҙҙәрен Хоҙайым араланы. Мәжүсилеккә абына яҙғандарҙы, тим... – Ҡунаҡтың һис ни аңлай алмай йөҙәгәнен абайлап ҡул һелтәне. – Сәлимйән шәкертем илтеп күрһәтер үҙеңә шул ике бәндә хаҡ юлдан тая яҙған тәңгәлде – ауыл осонда ғына ул. Аллаһы Тәғәлә тамға ҡылып икеһенең йөҙөнә һалған мөһөрҙө лә баҡтыртыр, тура килһәләр.

-- Булыр, хәҙрәт.

-- Ә хәҙерен, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, сыңратып ебәрһәңсе, шәкертем, аҫыл көйкәйҙәребеҙҙе!

Ҡунаҡ та тапҡыр икән:

-- Һеҙҙең яҡта “Абдулла ахун” тигән шәп йыр барлығын ишеткәйнем... – тип әйтергә лә өлгөрмәне, Сәлимйән, туҫтағын йәһәт ҡуйып, күкрәген күрекләндерҙе лә Мәнди йырының оторонон һыҙҙырҙы ла ебәрҙе:

Кисә генә ахун ине,
Ниңә ситкә ауышҡан?
Ырымбурға бара-бара,
Түрәләргә танышҡан.

Башындағы аҡ сәлләһен
Аҡ картуска алышҡан.
Абдулла ахун кантон булғас,
Ҡолаҡ тынмай тауыштан...

Абыстайҙың ҡымыҙ һапырған ижауы ҡулынан төшөп китте, һаҡалын услап ҡыҫып тотҡан хәҙрәттең дә һөмөрөһө ҡойолдо, ә аттар янында маташҡан үҫмер шарҡылдап көлдө.

-- Фатих, нишләйһең, ишетһен ҡолағың! – тип киҫәтте абыстай.

-- Һай әттәгенәһе, телемә шайтан төкөрөпмө, кәрәкмәгәнен йырлаған да ташлағанмын – ғәфү итә күрегеҙ! – тип өлгөрҙө Сәлимйән. – Кәрәккәнен йырлайыммы инде лә?

-- Әлбиттә, яҡшыһын йырлау фарыз, ниңә бында ылғый ялған мөнәжәтте көйләргә! – тине абыстай, хәләл ефетенә хәүефле ҡарап. Уныһының ауыҙ йырып ултырыуын күргәс, тынысланып, аласығына йүгерҙе. – Уй, эркетем ташып баралыр!

-- Ярай, әсәһе, бар, үҙ юлыңда бул! – Хәҙрәт ҡул һелтәне. – Йырҙың ни уның, йыртығы юҡ, тигәндәй, яҡшыһы ла яманы ла бер сама инде уның – халыҡтыҡы. Халыҡтан оло булып булмай, эйе... Икенсеһен йырламаһаң да ярай, кем, Сәлимйән шәкертем. Бер үк кешене маҡтап та, яманлап та йырлағас, халыҡ яңылышмағандыр – бизмәндең ике яғы ла тиң тартҡандыр, шулаймы?

-- Хәтәрҙер -- ике йөҙлө хәйләрҙер... -- тине ҡунаҡ.

-- Эйе, шундай кеше ине Ғабдулла ахун, ауыр тупрағы еңел булғыры минең бер туған ағайым... Сөнки үҙе ғүмере буйына аҡ батшабыҙҙың ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер салауат күперенән йөрөнө, күҙәтеү açтында булды... Хәйер, урыны ожмахта булғыры атай бахырҙың шойҡаны Әхмәтшаһ һәм Ғабдулла ағайҙарыма ла, минең үҙемә лә тейешенсә ҡағылды, өсөбөҙгә лә аҡ батша ярандары араһында һүҙҙе уйлап һөйләргә, аҙымды үлсәп баçырға тура килде...

-- Ә шулай ҙа ахун итеп ҡуйғандар бит үҙеңде?

-- Әйттем бит: һаҡ һөйләргә, үлсәп баçырға...

-- Бына нисек аңларға икән, тәҡсир?

-- Заманында Эстәрлебашта имам һәм шәйех булған ҡартатайыбыҙ Ғәҙелшаһ ишан кеүек үк, ғәзиз атайыбыҙ Дәүләтшаһ ишан да Бохарала уҡыған, төркисә лә, фарсыса ла әçәрҙәр яҙған һәм ошо Ырымбур виләйәте Себенле ауылында мәҙрәсә аскан ил зыялыһы ине. Француз яуында үҙебеҙҙең башҡорт ғәскәренең полк муллаһы булған, Мәскәү янындағы Бородино һуғышынан алып Парижғаса яу юлы үтеп әйләнеп ҡайтҡан, Инш-Алла. Француз илбаçарҙарын еңгәндән һуң аҡ батша, башҡорттарға рәхмәт әйтәһе урынға, Уралға күплəп ябырылмыш урыç заводчиктарына башҡорт ерҙәрен ҡырҡып бирə башлаған. Илебеҙҙең таланыуына йәне әрнегән атайыбыҙ түҙмәгән – аҡ батша сәйәсәтенә ҡаршы açтыртын көрәшкә ылыҡҡан. Әммә күпме йәшерһәң дә беҙ ҡапсыҡта ятмай бит: батша ярандары эште һиҙеп ҡалып, алтынсы кантондың йорт старшинаһы Буранбай Ҡотосов менән уның сәркәтибе Ибраһим Айсыуаҡовты Себер ҡатырына һөрәләр, ә уларҙың арҡадашы атайым Дәүләтшаһ ҡаҙаҡ араһына ҡасып ҡотола, Бискүрәк тигән тарафтарҙа мулдәкә булып, ҡаҙаҡ балаларына изге исламиәт нурын таратып йөрөй. Әммә аҡ батшаның ҡулы оҙон: күп тә үтмәй атайымды ла тотоп алып, быҙаулап Себергә һөрәләр – ул шундағы ҡатырҙа ҡатып ҡала... Бына шул ҡатырйән балаларына йәшәү өсөн ни ҡылмаҡ кәрәк ине, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ... Шул мөхиттең бәләһелер ул әле йырланған йырҙағы Абдулла ахун... йәғни минең ағайым...

-- Тәҡсир, шуныһын да һорамай булдыра алмайым, еп осон үҙегеҙ сығарғас. Шул Ғабдулла муллаһы, Рәсәй хөкүмәтенә ярамһаҡланып, мәшһүр шағир Аҡмулланы һәм шанлы Зәйнулла ишанды эҙәрләгән, тәүгеһенең үлтерелеүенә, икенсеһенең һөргөнгә ебәрелеүенә сәбәпсе булған, тип ишеткәнем – ысынмы?

-- Ысын да, түгел дә, тип әйтерлек. Сөнки ғәйеп атта ла, тәртәлә лә бар, буғай, бында... Мәшһүр шағирыбыҙ Мифтахитдин Аҡмулланың, бер урында

ултырып сыҙай алмай, ғүмере буйына ҡыҙырынып йөрөгәнен, хатта вафатына тиклем фажиғәле юл өҫтөндә булыуын белəһегеҙ. Шулай бер заман беҙҙең яҡтарға ла килеп сығып, тәрән аҡылы, шағирәнә тапҡырлығы, сәсәнлеге менән барса халайыҡтарҙы хайран ҡылып, бер ыңғайҙан Латифа исемле бик һылыу бер ҡыҙыбыҙҙың йөрәген әсир итеп, ҡыҙҙың атаһы Сәғитдинде лə тылсымлап, яғыбыҙҙың кейәүе булып алғайны ла кәләше менән ҡушарлап ҡуян арбаһына ултырып киткәйне башы ҡараған Троицкий өйәҙе тарафына. Артабан мәғлүм булды: кейәүебеҙ йəш кәләшен Ҡайынлы тигән бер ауылда ҡышлатырға ҡалдырып, йəйгə тиклем кәсеп итеп мал табырға ҡаҙаҡ далаларына олаҡҡан – иҫке ғəҙəте буйынса инде. Кәбеҙтәне ҡарауылларға кəзəгə ҡалдырған һымағыраҡ була был... Бер заман Аҡмулла ҡаҙаҡтан əйләнеп ҡайтыуға, ысынлап та, татлы кəбеҙтə кəзə ҡарынында була – йəғни ҙə баяғы Ғабдулла ағайымдың төпсөк улы Сибəғəтулла мулланың хəлəл ефете рəүешендə... Китə ыҙғыш, талаш-тартыш. Хəлəл никахлы кеше ҡатынына никахланып, шəриғəт ҡанунын тупаҫ боҙоуҙа ғəйепləй Аҡмулла беҙҙең Сибəғəтулланы; ə уныһы иһə Латифаның ирҙəн айырылған тол ҡатын икəнен дəлиллəй – Мифтахитдиндең Латифаға “талаҡ!” əйтеп киткəнлеген үҙ ҡолағы менəн ишеткəн шаһиттарын килтерə. Ахырыһы булмай, Өфөгə юллана Аҡмулла – Диниə назаратының ҡазыйы Ризаитдин бəн Фəхритдингə шикəйəт күндерə, хəлəл ефетен үҙенə кире ҡайтарыуҙарын даулай. Ризаитдин ҡазый уны аҡыллы кəңəше менəн бороп ҡайтара: “Баш бирмəҫ ул байталыңды кире ҡайтартып алһаң да, һис уңдыртмаҫ. Иң хəйерлеһе, нуҡтаһының теҙгенен муйынына ура ла башы тартҡан яҡҡа ебəр һин уны!” Ləкин “баш бирмəҫ байтал” өсөн низағ баҫылмай, Аҡмулланың мөхтəрəм остазы Зəйнулла ишан Рəсүлев тə ҡатнашлыҡ ҡыла, буғай. Шау-шоу ҡабат Өфөгə ишетелеп, мөфтөйөбөҙ Мөхəммəтйəр хəҙрəт Солтановтың үҙенə мəғлүм булып, Сибəғəтуллабыҙҙың муллалыҡ указы тартып алына. Шунан һуң ул нəҫелебеҙ ғүмерлеккə теркəлгəн атлы казак[25] хəленə ҡайтып, үҙебеҙҙең Орски өйəҙенең Яңы Орски атлы казак ыҫтанында[26] вафат булды, нигеҙенə Ғабдулла[27] тигəн алтын ҡаҙығын ҡалдырҙы.

-- Беләм мин ул Ғабдулланы, һарғылт сəсле башҡорт малайын, -- тип иҫенə төшөрҙө Сəлимйəн. – Бер йылда əсəһе менəн бергə хəлегеҙҙе белергə килеп, аҙна-ун көн ҡунаҡ булып киткəйне бит.

-- Атас үҙе.

-- Урыҫса ла, төркисə лə шатырлатып уҡый ҙа, яҙа ла торған оҡорйəн. Һинең менəн минəн, йəштəш, -- ҡунаҡҡа эйəк ҡаҡты, -- дүрт йəшкə кесерəк ул, 1894 йылғы.

-- Бөйөк шағирыбыҙ Мифтахитдин Аҡмулланың вафатына бер йыл ҡалараҡ тыуған икəн... -- Əхмəтзəкир башын баҫып уйланды.

---

[25] Атлы казак – башҡорт казачийҙары.

[26] Ыҫтанында – станицаһында.

[27] Ғабдула (Абдулла) Дəүләтшин – 1918 йылда Ырымбурҙа Автономиялы Башҡорт хөкүмəте большевиктар тарафынан ҡулға алынғас, уның урынына (халыҡ күҙен буяр өсөндөр) шулар ойоштороған Ваҡытлы Башҡорт Революцион Комитеты рəйесе.

-- Эйе, һеҙҙәрҙе ҡыуалатып үҫеп киҫмеше... етемлектә, – тине хәҙрәт. Абыстай ҙа үкенесен белдерҙе:

-- Атаһыҙ ҡалғас, ҡыйындыр, үҙебеҙгә килеп тор, олатайыңдың мәҙрәсәһендә уҡы, тип тә өгөтләп ҡараным, ләкин риза булманы. Әсәйемде, һеңлемде ҡарарға кеше юҡ, унан килеп, һеҙҙең мәҙрәсәлә урыҫса ла уҡытмайҙар, тип янтайҙы.

-- Хәйерле булһын, юҡҡа бошонма, әсәһе, ауыртмаған ҡабырғаһына ятһын. – һаҡалын ҫлап уйланды. – Көслөк менән еңеп булмай был замандағыларҙы. Ни тиһәң дә, атлы казак бит: урыҫса һуҡалауы файҙаға ла ашыр, бәлки. Ғәбделғәзиз янарал[28] олатаһы кеүек үк, аҡ батшаның сәрғәскәре[29] булып китеүе ихтимал, Дәүләтшиндарҙың барыһына ла имам хатиб булырға тимәгәндер бит инде. Мөхтәрәмдәрем, беҙҙең Ғәбделғәзиз Дәүләтшин янаралды ишеткәнегеҙ бармы?

-- Ҡолаҡ осо менән генә.

-- Әле әйтелмеш Сибәғәтулланың бер туған ҡустыһы ул, баяғы Абдулла ахун тип йырланған ағайым мәрхүмдең кесе малайы. Әлхасил, Ғабдулла ағайым шул Ғәбделғәзизен, мәҙрәсә тамамлатҡас, Сибәғәтуллаһы хәленә ҡалмаһын, типме инде, урыҫ ғәскәри мәктәпкә бирҙе. Шунан һуң Ғәбделғәзиз штабта хеҙмәт итте, Төркөстанда Куропаткин янарал яҡындарының береһе сифатында юғары ғәскәри хеҙмәттә булды. Ошо көндәрҙә Петербурҙа Янаральный штабта Азия бүлеге менән идара итә... Бына шул олатаһылай, дәүләтебеҙҙең берәй таһыллы эшмәкәре булырға яҙманымы икән, тим әлеге уланға ла. Сәлимйән шәкертем хаҡлы: ифрат зирәк тә оҡор ул. Күҙе тонған милләтебеҙҙе яҡтылыҡҡа сығарыуҙа бына һеҙҙең икегеҙгә лә ҙур өмөт бағлағандай, уны ла мин илебеҙҙең күҙ терәге итеп күрәм. Хәйер, ғүмер юлдарыбыҙ оҙон да ҡатмарлы, уның берәй боролошонда шул Ғабдулла Дәүләтшин менән дә, бәлки, бер булмаһа, бер осрашырһығыҙ әле... – Мөхәммәткамал хәҙрәт вәғәздең оҙонға һуҙылғанын самалап, буғай, теҙгенде ҡыҫҡарта бирҙе – мөлдөрәгән туҫтаҡтарҙы бушатырға ҡыҫтаны. Үҙе тоҫмаллаған шул юлда уҙамандар осрашыуына теүәл ун йыл ҡалғанлығына – 1918 йылда әлеге Ғабдулла Дәүләтшин да ошолар ҡатарынан Башҡортостандың күренекле бер дәүләт эшмәкәре булараҡ тарихҡа керәсәгенә күрәҙәлек ҡылғандай ине ул..

Мәжлес әңгәмәһе икенсе юҫыҡҡа боролдо, сөнки лапаҡ ҡарама төбөндә ҡаршыларына көтөлмәгән яңы ҡунаҡ пәйҙә булды. Ярһыу йөрәктән уйнаҡлап-бейеп торған сыбай ҡашҡаһының казак эйәрендә шәмдәй төп-төҙ ултырған, оҙон-мыҡты кәүҙәһен орсоҡтай уйнатып ырғып төшкән һәм мәжлес эйәләре менән ҡуш ҡуллап күрешкән асыҡ йөҙлө, яҫы маңлайлы, ҡуңыр сәс аҫтынан алсаҡ ҡараған ҙур ҡуңыр күҙле егет ине ул.

-- Ғәбделәхәт Сәйетбатталов[30] тигән казачий затлы фәкирегеҙ буламын, -- тине, таныш түгел ҡунаҡтың белдереүен иғтибар менән көтөп.

---

[28] Янарал – генерал.

[29] Сәрғәскәр – ғәскәр башлығы, командующий.

[30] Ғәбделәхәт Сибәғәт улы Сәйетбатталов – боронғо шағирыбыҙ Һибәтулла Сәлиховтың дүртенсе быуын тоҡомо (шәжәрәһе: Сәлих – Һибәтулла – Сәйетбаттал – Сибәғәтулла – Ғәбделәхәт), 1917 йылдан – большевик; 1918 йылда Ырымбур казактары йыйынында йыйын президиумына ағза, йыйын сәркәтибе итеп һайлана; Сәнкем-Биктимер төбәгендә ҡыҙыл гвардия ойошторop, уның

-- Әхмәтзәкир Йәлитов, баш өҫтө.

-- Баш яҡ башҡортлоғоң күренеп тора – төҫөңдән дә, телеңдән дә. – Ат өҫтөндә сарсап килгәндер, буғай, тын да алмай ике туҫтаҡты түңкәрҙе.

-- Ә һин үҙең, әйтмәһәң дә, дала яҡҡа оҡшайһың, -- тине Әхмәтзәкир ирәүән көлөп. – Телеңдең осо, үҫәргәнлектән уҙып, нуғайлыҡҡа тартым.

-- Ғәжәп түгел: тыуған ауылымдың бер осо нуғай, күрше Суртанлы ауылы ла – нуғай затлы атлы казактар...

-- Нуғайҙың кемлеген беләһегеҙме һуң? -- Әхмәтзәкир өсөһөнә лә ҡарашын әйләндерҙе.

-- Белмәй ни. Әлеге лә баяғы шул аҡ батшаның ҡылығы: даулы-яулы башҡорт халҡын ҡан ҡәрҙәшебеҙ ҡаҙаҡ халҡынан айырыу өсөн Яйыҡ, Һаҡмар буйҙарына хәрби ҡәлғәләр, редуттар ҡорҙортоп, урыҫтан, башҡорттан, нуғайҙан да мордванан атлы казак ғәскәрлеген хасил ҡылған. Тәғәйен был ҡандауыр нуғайҙарын Ҡаф тауының төньяғынан күсереп килтереп ултыртҡан, тиҙәр. – Аңлатып биргәйне Сәлимйән, Ғәбделәхәт элеп алды:

-- Милли кейемдәре, биҙәктәре, аш-һыуҙары, риүәйәттәре, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәре тап беҙҙең үҫәргәндәрсә, тик телдәре генә үҙгәйерәк – сусылдап та ҫәҫелдәп һөйләшәләр.

-- Ҡыҙыҡ... шулай булырға тейеш тә. -- Әхмәтзәкир мәғлүмәтте ҡуйын дәфтәренә теркәй һалды. – Сөнки боронғо үҫәргәндәрҙең, юрматыларҙың ярсығы бит улар – ун бишенсе быуатта ошонан Ҡубан йылғаһы буйына күсенеп киткәндәр.

-- Ә ниңә, үҫәргән түгел, ә нуғай аталалар?

-- Сыңғыҙ хан бабабыҙ ғәскәрендә был яҡтарға ябырылмыш монгол татарҙары телендә “нуғай” – эт-бүре тигән һүҙҙер... – Абыстай кеткелдәп көлдө.

-- Ауыҙыңды йырма әле, әсәһе. – Хәҙрәт ирәүән киҫәтте. – Белә-белһәң, боронғо үҫәргән бабаларыбыҙ үҙҙәрен “бүре-эт” тип атағандар, шул хаҡта күп риүәйәттәр, хатта ырыуыбыҙҙың, имеш, бүре-әсәнән таралған бүреләр араһы бар. Үҫәргәндең бер сатаһынан, имеш, “бүре йән” – Бөрйән ырыуы хасил...

-- Эйе, “нуғай” атамаһының ул замандағы ислам динле сит халайыҡтар тарафынан ул саҡтағы мәжүси дин тотҡан, бүре-эткә табынған үҫәргәндәргә тап шул атама йәбештерелеүен мәшһүр ҡаҙаҡ ғалимы Чоҡан Вәлиханов дәлилләп яҙа. Үҫәргән һәм Юрматы шәжәрәләре лә иң боронғо нөсхәләрендә “Нуғай шәжәрәһе” тип атала. Ә Төркөстан һарттары ошо көндәргәсә Уралда “башҡорт” тигән ҡәүем барлығын белмәй – беҙ-башҡорттарҙы “нуғай” тип йөрөтәләр. Әлхасил, ярсыҡланып Ҡубанға киткән ҡан ҡәрҙәштәребеҙ үҙҙәренең шул замандарҙағы сит атрафтар тарафынан тағылған ҡушаматын халыҡ исеме итеп ҡабул ҡылған...

-- Бына шулай ул, атлы нуғай казагы Сәйетбатталов! – тегенең бөйөрөнә төрттө Сәлимйән.

командиры була, аҡтар ҡамалышында ҡалған Орскиҙа – ҡаланың оборона башлығы; Ҡыҙыл Армия сафтарында төрлө фронттарҙа һуғыша; 1920 йылда Башчека рәйесе урынбаҫары булараҡ Башҡорт автономияһының дошмандары шәмиғоловсыларҙы рәсми рәүештә ҡыйыу фашлай; шунан һуң Башглавмилиция башлығы вазифаһында 1921 йылдың 6 февралендә ҡапыл үлә.

-- Һе, үҙеңдең дә кемлегеңде онотма!

Егеттәрҙең тел сарлауын көлөмһөрәп күҙәткән хәҙрәт талған тубыҡтарын һуҙыбыраҡ ултырҙы:

-- Йә Раббым, рәхмәтеңдән ташлама! Әхмәтзәкир мәғзүм, мәртәбәле шағирыбыҙ Һибәтулла Сәлиховты беләһеңдер?

-- Әлбиттә, әлбиттә!

-- Тап бына шуның дүртенсе быуын вариҫы инде был атлы казак. Бабаһы кеүек уҡымышлы булыуы өҫтәүенә -- оҙон көйҙәребеҙҙе лә ил кинәндереп һуҙа.

-- Афарин! Беҙҙәргә лә ишеттерсе, уҙаман!

Мәҙрәсә бураһы яғында байтаҡтан уҡ балта туҡылдауҙарына түҙемһеҙләнеп ҡолаҡ һалған Сәлимйән:

-- Мин китәйем инде, йәмәғәт, -- тип ҡалҡынырға иткәйне лә, хәҙрәт яурынбашынан баҫып туҡтатты:

-- Балтаң ҡасмаҫ -- йырҙы тыңлайыҡ, мырҙам. Шунан һуң ҡунаҡты ауыл тирә-яғы менән таныштырып, Перовский янаралдың утарынаса ер-һыу гиҙҙертеп, бауыры аҫтынан ел үткәртеп ҡайтырһығыҙ.

Буй-буй юлаҡланған ҡытыршы ҡарама олонона һөйкәлеп ултырған Ғәбделәхәт, башын салҡайта биреберәк, тәрән һулыш алды, ерҙе-күкте сихриәткә тулыштырып һыҙылды ғәзиз моңобоҙ:

Иҙел буйҡайҙары, ай, ҡаялыҡ –
Полковник Тәфтиләү яу урыны.
Башҡорт илкәйҙәрен утҡа тотҡас,
Алтынланды яһил яурыны.

Тәфтиләүҙең менгән, ай, аттары
Сапҡар ҙа ғына менән тимер күк.
Тәфтиләүҙәй ҡанһыҙ булыр микән –
Һуйҙы илде ҡырағай йәнлек күк.

Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,
Эйәре лә белмәҫ, ат белә.
Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен
Үҙе белмәһә лә ил белә.

Ҡайнап ҡына сыҡҡан Иҙел аша
Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ.
Ир-егеткәйҙәрҙең өмөткәйен
Тәфтиләүҙәр мәңге быуа алмаҫ.

Ҡара ла ғына урман ҡая бите –
Шаулайҙыр ҙа кисен ел саҡта.
Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.

Түбәһе ҡарлы тауҙай салланған хәҙрәттең, ҡыҙыл ебәк ҡулъяулығын ҡулында һәлендереп, күҙйәштәрен һөртөп алыуын күргәс, иҫкелеккә ҡуш ҡуллап йәбешеп ятыусы фанатик һымағыраҡ тойолған был дин әһеленең дә күңелендә эйәрле-йүгәнле ат барлығы хайран ҡалдырҙы ситтән килгән ҡунаҡты. Һигеҙ йылдан һуң ҡарттың донъя ҡуясағын, ә шуның икенсе йылында уҡ бөтә Рәсәй күләмендә тетрәткес зил-зилә ҡубып, донъяларҙың айҡал-сайҡал киләсәген, мең туғыҙ йөҙ ун һигеҙенсе йылда халайыҡтар аҡтарға һәм ҡыҙылдарға бүленеп, йырмоң һөйөүсе был уландар шул ике яҡтан бер-береһенә әжәл уҡтары атасағын, Рәсәйҙә иң беренсе булып Башҡортостанға автономия яулап аласаҡтарын, моғайын, табындаштарҙың береһе лә башына килтермәгәндер...

2

Башҡортоноң ҡайғы-һағышы менән, физакәрлек рухы менән һуғарылмыш йырына тәрән әҫәрләнеп ҡатып ҡалған абыстай ҡапыл, алыҫ яҡтан килгән ҡунаҡты аптыратып, тамағына әсе төтөн тығылғандай йүтәлләп сәсәй башланы:

-- Алла, Алла, үләм, башыма еҫ ҡапты, һулышым томаланды! Анауы яҡтан килә, фуф! – Бармағы менән бер тарафҡа төртөп күрһәтеп, быуылып сәсәй-сәсәй танауын баҫып йүгерҙе.

-- Һәй әттәгенәһе, әҫпең[31] ҡалҡҡандыр, әсәһе, әҫпе еләк төнәтмәңде эсә һал! -- Өтәләнеп торҙо хәҙрәт, барыһы ла ҡуҙғалды.

-- Бер еҫ тә юҡ бит, ни ғәжәп!? – Аптыраны Әхмәтзәкир.

-- Бар шул, бар! Хәлил дуңғыҙҙың касафаты: көпә-көндөҙ, әҙәмдән оялмайынса, ауыҙына иблестең шул торомбашын тыҡҡандыр, хәшәрәт!

-- Төтөн-фәлән күренмәй ҙәһә?

Сәлимйән аңлатып бирҙе:

-- Ауылдың арғы осонда – ярты саҡрым арауыҡта ул тәмәке тартыусының өйө.

Хәҙрәт үҙе әсе тауыштан һөрәнләне:

-- Фатих, тим, күрмәйһеңме ни әбсәңдең хәлен?! Елеп барып томалап кил дуңғыҙҙың ыҫлы томшоғон!

Ҡуранан сығарылған аттарҙың береһенә яйҙаҡ ҡына менә һалған мәҙүм тиҙ үк барып әйләнеп килде:

-- Булды, атай, махраһын табаны аҫтына һалып һүндерҙе лә яр аҫтына әрәмәлеккә тайҙы. Әрекмән төбөнә боҫоп ҡына быҫҡытып ултыра ине.

-- Һәй мөстән!

-- Аждаһалай йәйен алған бит тағы, ихатаһы тулы халыҡ. Һарыҡтыҡылай билдәмәһен Хәнифә еңгәм миңә тотторорға иткәйне лә, туҡталып тора алманым.

-- Дөрөҫ иткәнһең, улым. Биш ваҡыт намаҙын үтәмәгән яһил бәндә ҡулынан мал алыу харам.

Ғәбделәхәт, һыбайланып, юлына елдерҙе, мәҙүм ике ағаһына шыбырланы:

-- Хәнифә еңгәм әйтә, алыҫтан килгән ҡунаҡ бар икән һеҙҙә, Сәлимйән шәкерт менән икеһен йәйен итенән ауыҙ итергә алып кил, ти...

[31] Әҫпе – аллергия йәки астма, әҫпе еләге төнәтмәһен эсеп дауаланалар.

-- Юрғалар ана әҙер, кем, мырҙалар. Һәәәй, үҙемдең йәшерәк саҡ булһа... Барығыҙ, донъя гиҙеп ҡайтығыҙ.

Ике һыбайлы ҡушарлап юрттырҙылар. Саҡма тояҡтар елдән шәберәк елде – күҙ асып йомғансы тауҙы ла артылдылар.

-- Остоҡ теге Перовский утарына!

-- Остоҡ!

Йәшел үҙәндән һуҙылған Әселеүҙәк йылғаһын буйлап барып, ҡаршылағы Оҙонҡырлалар яғынан уға килеп ҡушылған Һаҙлыйылғаны кисеп, һул яры буйынан бара-бара, шуға ҡойған нәҙек кенә Манҡыс һыуын да артта ҡалдырып, был тирәләге иң бейек үр Артышлытау моронондағы Ҡапҡанташ тарлауығына керҙеләр. Уңдан – шаҙра ҡаяташ, һулдан текә түң аҫтындағы ҡара шырлыҡ ҡосағынан Һаҙлыйылғаның һулығып ҡына сылтырауы ишетелә; юл түтәһе – бер арба ла һыбайлы ғына йәнәшә ҡыҫылып уҙмалы. Ҡапыл алда дөбөр-шатор тәгәрмәстәр, еҙ ҡыңғырау сыңлауы һиҫкәндерҙе, аҡ күбеккә батҡан ҡара айғырҙың ауыҙын ауыҙлыҡ йырыуҙан күҙҙәре аҡайып, ҡуш ҡолағын шешләндереп муйыны дуғалай бөгөлгән ярһыу башы йәшен тиҙлегендә ҡаршы ырғылды, дилбегәсеһенең юлбаҫарҙай ҡолаҡ ярып һыҙғырыуы яһилланып һөрәнләүенә әүерелде:

-- Көшшш, ыбыр-сыбыр ҡырҡаяҡ, көшшш! Кит юлдан, Зәхмәт бай үҙе килә! – Һыбайлылар шаҙра ҡаяға аттарын саҡ һырныҡтырып өлгөрҙө -- арҡаһына ялҡ-йолҡ итмеш ҡыҙыл атлас бөркәтелгән ҡара айғыр аҡ кейеҙле һары ситән ҡырандасты өйөрмәләй дөһөрләтеп үтеп китте. Әхмәтзәкир мосафирҙы иң хайран ҡылғаны шул ине: аҡ кейеҙгә баярҙарса ларҡайған мыҡты әфәнденең ситән ҡырынан һәлберәгән аяғында, йәйге эҫе сула булыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙыл буҫтау биҙәкләнгән оҙон ҡуныслы ҡышҡы быйма, өҫтөндә ҡышҡы бүре толоп, башында күк төлкө ҡолаҡсын, ә ҡуш тәртәләй алға һоноп ҡайыш дилбегә йомарлаған ҡулдарында терһәктәренә тиклем еткән оҙон ҡуныслы ап-аҡ сафъян бирсәткәләр – аристократ мәрйә ханымдарҙың затлы кейеме.

-- Зәхмәт әшнә, бер ауыҙ һүҙ бар ине!

-- Тррр! – Атының ауыҙын йыра тартып туҡтатты. – Йә, ләңкелдә, ваҡыт юҡ!

Сәлимйән, юлдашына күҙ ҡыҫып, "ләңкелдәне":

-- Фокан урыҫҡа әсәйеңде һатып ҡайтып киләһеңме?

-- Көшшш! Осраған бер хәйерсегә телемде әрәм итмәйем! – Сыбыртҡыһын шартлатып, дөбөр-шатор олаҡты.

-- Вай-вай-вай, был ни хәл, кем булды?! – Баш сайҡаны Әхмәтзәкир.

-- Ләҡәбе Зәхмәт булһа ла, асылында Әхмәт тигән шәриктәшем, мәҙрәсәне быйыл бергә тамамланыҡ.

-- Аҡылдан шашҡанмы, тиһәм...

-- Столыпин алды уның барлы-юҡлы аҡылын.

-- Батша министрҙарының башлығымы?

-- Тап үҙе. Шуның "ер һатыуға хөрриәт" тигән законы сыҡҡас, атаһы бахырҙан ҡалған һуңғы байлығын – йәйләү ерен Фокан-урыҫҡа осороп, үҙенсә йәнәһе серегән байға әүерелеп, шөһрәтенә түҙмәйенсә, урыҫтан ер хаҡына алған ҡыш кейәһе бай кейемдәрен йәй кейеп маһайып йөрөй... Фокан ҡарт та хәйләкәр:

һылыу ҡыҙына Зәхмәт ызнакумының күҙе төшөүөн шәйләгәс, ер хаҡын бер-нисә өлөшкә бүлеп түләргә һүҙ ҡуйышҡан: килгәнең һайын ҡәҙерле ҡунағым булырһың, табын ҡороп, рәхәтләнеп һөйләшеп ултырырбыҙ, тигән. Тик мәғәнәһе шунда: килгәне һайын эсереп иҫертеп, кәрт уйнап, аҡсаһын отоп алып ҡала Зәхмәттең...

-- Һаааай был беҙҙең ҡара башҡортто! – Әсенеп көлөштөләр.

Ҡыҫыҡты уҙып, түңәрәк аҡланда йылғаны ҡабат кискәс, аптырашып ҡалдылар: юлға кәртә ҡоролған, ә һуйыл күҫәк услаған мыҡты өс урыҫ, күҙҙәре менән ашарҙай, ажырайып торалар.

-- Фокан ҡарттың Зәхмәттән сәлдергән ер сиге – ары уҙҙыртмаҫ, яуыз. – Йылғаны кире кисеп, алыҫтан уратып бата-сума үтергә тура килде.

-- Их, ҡуҙға һалған ҡойҡалай сөрөшөп тарая башҡорт ерҙәре...

-- Столыпин реформаһы ошолай уңышлы барһа, аяҡ баҫыр ғына түгел, ҡәберлек тә еребеҙ ҡалмаясаҡ... – “Перовский юлы”, “Перовский утары” тип тарихҡа кергән урындарға ана шулай ғәмләнеп барып еттеләр.

-- Ана анауы тауҙы ашһаң – минең тыуған Мырҙағолат ауылы...

-- Һеҙҙең аша йөрөгәнме атаҡлы гөбөрнәтер?

-- Эйе. Йәйҙәрен ошонда башҡорт ҡымыҙын эсеп, ҡалъяларын һоғоноп, ҡурайын тыңлап рәхәт ял итер булған. Ат бәйгеһе, милли көрәш, ғәскәри таһыллыҡ, ҡурай һәм йыр, сәсәнлек буйынса ярыштар ойоштороп, еңеүселәргә аҫыл бүләктәр тапшырған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан бейә һауып ҡымыҙ бешеүсе, ашнаҡсы, туҡыма туҡып киндер, балаҫ һуғыусы, дебет шәл бәйләүсе, кейеҙ баҫыусы, тире тун һәм ҡаты күндән тарамыш епләп итек-ҡата, һауыт-һаба тегеүсе, шулай уҡ оҙон көйгә йырлаусы, ҡумыҙҙа уйнаусы һәм бейеүсе иң уңғандарға затлы бүләктәр бирелгән. Ошо Перовский утарынан Ырымбурҙың гөбөрнәтер һарайынаса йөҙ егерме биш саҡрым арауыҡта һәр биш-алты саҡрым һайын атсапҡын ҡуйылып, гөбөрнәтерҙең ҡыҙыл һурғыс мөһөрлө пакет-хәбәрнамәләре утарҙан – Ырымбурғаса һәм киреһенсә ҡулдан ҡулға тапшырылып ҙур тиҙлек менән алып барып еткерелгән...

-- Бағанаһыҙ-сымһыҙ тере телеграф йәғни!

Перовский утарынан тороп ҡалған ҡара күмерҙәрҙе ҡарағас, Перовский юлы буйлап Эйек тамағы йүнәлешенә бара-бара, әйләнеп ҡайтыр яҡҡа һулға – үҫәргәндәрҙең элекке Бейлоғош йәйләүенә тартылдылар. Элекке, сөнки ул да урыҫтар ҡулына күскән, башҡортҡа уҙмаға берләм юлы ғына тыйылмай ҡалғайны. Элеккеләрҙе һағыныуҙан моңло-зарлы Бейлоғош йылғаһы тирәгенә ат бәйләп, һалҡынса һыуҙа тәһәрәт алып, өйлә намаҙын уҡығас, ҡускыл үләнгә янтайып саҡ ҡына хәл алдылар.

-- Шулай итеп хозур йәйләүҙәребеҙ ҡулдан ысҡынып китте, мал йөрөтөр ҙә урын юҡ, ауылдарыбыҙҙа бикләнеп ултырып ҡалдыҡ... Эййй! – Төпһөҙ зәңгәр күккә ҡарап салҡан ятҡаны килеш, һыҡтанып көйләне Сәлимйән:

Башҡорт йәйләүҙәрен һатып эскәс,
Елкә соҡорон башҡорт ҡашына.
Батша һанаунигы Столыпин етте

Башҡорт ерҙәренең башына... –

Үҙебеҙҙең мәҙрәсәлә сығарылған яңы йыр – “Һатылған йәйләү” көйө...

-- Һатып та, һатылып та бөтөп бара шул башҡорт...

-- Әйтсе миңә шуны, уҙаман: бына һин, күп уҡыған, ғәрәпсә менән фарсысаны ғына түгел, урыҫсаны ла һыуҙай эскән ғалим кеше, нисек уйлайһың, ҡасан да булһа йырып сыға алырмы икән бахыр башҡорт ошо ҡоллоҡ, фәҡирлек, ҡара наҙанлыҡ һаҙлығын? Килерме ергә дөйөм хөрриәт[32] һәм тигеҙлек?

-- Үҙебеҙҙән тора инде барыһы.

-- Икһһеҙ-сикһеҙ кафыр-урыҫ донъяһында кескәй утрау ғына булып ҡалған башҡорт үҙе генә нишләһен?

-- Улай тип әйтмә, ҡорҙаш. Кескәй генә ҡырмыҫҡа ла үҙенең кәүҙәһенән ун тапҡырға ҙурыраҡ һәм ауырыраҡ йөктө һөйрәп илтә ала. Бабаларыбыҙ ике быуат буйынса бит ятбауырҙар талауына ҡаршы ҡылыс айҡап ҡарышҡан, фәҡәт шуның арҡаһында Башҡортостан тигән аҫаба ерен, башҡорт тигән исемен, телен, динен кафыр тәреһенән таптатмай ҡурсалап ҡалдыра алған.

-- Әммә халҡыбыҙҙың хәҙер ҡылыс айҡар хәле юҡ...

-- Ни өсөн? Сөнки яһил аҡ батшаның ике башлы сәмреғошо нисәмә быуат буйынса уның бауырын суҡып, ҡанын эсеп, елек майҙарын ҡоротҡан, хатта Аллаһы Тәғәлә биргән зирәк аҡылын да зәғифләтеп бәүелһеҙләндергән. Бая ғына эргәбеҙҙән яндырайланып уҙып киткән Зәхмәтегеҙҙе генә ҡара... Йәки ислам нурына ҡойонған ауылығыҙҙың һауаһын ыҫлап беренсе башлап тәмәке тартҡан, араҡы эскән Хәлилегеҙҙе генә ал... Ысынлап та, зәхмәткә һабыша башҡорт... Бына ниңә ул үҙенең тыуған әсәһен – йәғни таланыуҙан, тартып алыныуҙан тороп ҡалған аҡтыҡ ерен һатып ебәрә килмешәккә. Мылтыҡ һәм туп атып та ала алмағандарын башҡортто аңғыралатып ялмайҙар. Әлхасил[33], үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алһаҡ ҡына балҡыясаҡ беҙҙәргә тигән яҡты хөрриәт таңы. Ә тигеҙлек мәсьәләһенә килгәндә, ҡулыбыҙҙағы бармаҡтар ҙа тигеҙ түгелен беләһең, әммә уларҙы тигеҙләп ҡырҡып булмай. Егәрлейән һәм ялҡау, йылғырйән һәм бәлтерәгән, һәләтле һәм һәләтһеҙ, талантлы һәм талантһыҙ, аҡыллы һәм томана, мәғрифәтле һәм наҙан, тәүәккәл һәм ихтыярһыҙ, батыр һәм ҡурҡаҡ араһындағы айырма мәңге булған һәм буласаҡ.

-- Мәңге-мәңге уларҙың беренсеһе – байыраҡ, икенсеһе фәҡирерәк ҡалырмы?

-- Уныһы ла һәр кемдең үҙенә бәйле.

-- Һем... Тимәк, бына мин, баяғы Фатих мәғзүм әйтмешләй, тишек сәкмәнле йән, әлеге шул ялҡаулығым йә наҙанлығым, ҡурҡаҡлығым арҡаһында ғына фәҡирлектән сыға алмай аҙапланам, һинеңсә?

-- Шулар арҡаһында ғына түгел шул, бына ҡайҙа төп мәсьәлә! Бәндәнең шәхси һәләтлектәренә юл ҡуйыусы, уны быуып тотмаусы сәйәси мөхит булырға тейеш донъяла, шунда ғына йәмғиәттең барлыҡ ағзаларына ла ҡояш яҡтыһы төшә, яҡтылыҡтан файҙаланыу мөмкинлеге асыла, һалҡын күләгәлә ҡалыусылар

[32] Хөрриәт – азатлыҡ.

[33] Әлхасил – ҡыҫҡаһы.

һаны аҙая. Бер-береһенән Күк менән Ерҙәй айырмалы серегән бай һәм ҡаҡҡа таянған ярлы булмаҫ ине шул саҡта; ә сағыштырмаса байыраҡ та фәҡирерәк, әммә һәммәһе Хоҙай ҡушҡан әҙәмдәрсә йәшәү сарыфына эйә азат инсандар булыр.

-- Шулайҙыр ҙа бит... әммә илебеҙҙә, аҫабаларҙан тыш, ерһеҙ йәки аҙ ерле килмешәктәр ҙә бихисап, уларҙың да ауыҙҙары уҫлаптай...

-- Аллаһы Тәғәлә башҡорт ерен Ирәм бағылай бай ҡылып яралтҡан һәм ул тик бер башҡорт халҡын ғына түгел, бәғзеләрен дә бәхетле, ырыҫлы итерлек, әгәр ҙә ки еребеҙҙә заманса мәғрифәтле, ғәҙел хакимиәт урынлаштырһаҡ. Алдынғы урыҫ зыялылары ла уйлана ошо хаҡта.

-- Бая ғына "Тәфтиләү"ҙе йырлаған егет, йәшереп кенә, Ырымбурҙан бер урыҫ гәзите алып ҡайтып уҡығайны: аңлауымса, коммунистар фирҡәһенең етәксеһе Улъянов -- Ленин тигән берәү бишенсе йыл болғанышын яңынан ҡабатларға, йәшәп килгән хакимиәтте түңкәрергә саҡыра.

-- Беләм. Өфө, Силәбе яҡтарынан иҫкән елдәр беҙгә лә һуғылғылай. Шундай мөхит тыуа ҡалһа, беҙгә лә йоҡлап ятмаҫҡа, файҙаланырға кәрәкле, тип һанайым.

-- Тарҡаубыҙ, сәйәси фирҡәбеҙ ҙә юҡ...

-- Ойошорбоҙ. Ойошторорбоҙ. Башҡортҡа ла уяныр ваҡыт етер!

-- Бирһен Хоҙай, бирһен Хоҙай! -- Дәртләнеп атландылар. Һуғарылып, юшанып алған аттар йылдам елдерҙе.

Кершәнник юлынан ҡайтып еттек, тигәндә, ауыл осондағы ҡылғанлы убала ишек бейеклек ике яҫы таш ҡара-ҡаршы ҡаушарылған зиратҡа туҡталдылар. Әхмәтзәкир, ғәҙәтенсә, яҙыу-фәлән эҙләп тә таба алмағас, юлдашына ҡараны:

-- Нимә был?

-- Баяғынаҡ хәҙрәтебеҙ шомланыбыраҡ телгә алған Хәсән менән Лотоштоң ҡылмышы был. Ә асылында боронғо әүлиә зираты – Үҫәргәндең ун алтынсы быуат ахырындараҡ барымтасы ҡаҙаҡ ханы Ҡасимдан яуҙа еңелеп, язалап үлтерелгән Урмәмбәт хан ҡәбере. Әммә эш унда түгел.

-- Эш ниҙә һуң?

-- Эш шунда ки, ата-баба мәжүсилегенән ҡалған йола бар беҙҙә: боронғонан күмелеп ятмыш алтын хазинаһы, имеш, төндә ҡыҙыл ялҡын рәүешле ләүкей. Шуны күргән кеше әгәр кейеменең тиҫкәреһен әйләндереп кейеп, ипләп кенә усы менән һуҡһа, ләүкеү ялҡын шау-алтынға әйләнә... Хәсән менән Лотош игеҙәк ирҙәр шул тылсымлы ялҡынды ошонда күреп, Һантый Хәлил Һандыҡташтан һуғып алған хазина беҙгә лә харам түгелдер, тип, һуғып алырға итәләр, әммә кес кенә яңылышлыҡ ебәрәләр – бейәләйҙәрен әйләндереп кейергә онотҡандар... Һөҙөмтәлә ялҡын кире ер аҫтына умырылып, ер өҫтөндә һип-һил төндә ел-дауыл, зил-зилә ҡубып, ике яҡҡа бираҡтыра икеһен, шул зәхмәттән Хәсәненең күҙе салшайып, Лотошоноң ауыҙы ҡыйшайып ҡала... Ҡәбер өҫтөндәге ике яҫы ташты, башҡаларға асы һабаҡ итеп, имеш, боронғо суҡай таш өҫтөнә шул икәү килтереп ҡаушара...

-- Һабаҡ, тиһәң дә -- һабаҡ... Ә анауы уйһылыҡта ниндәй ике ташбура һерәйә тағы?

-- Уныһы ла әүлиә зираты, Аҡһаҡтимер заманынан ҡалған, тиҙәр.

-- Абба, барып күрәйек аныһын да!

Һулау (мал һыулауы) тип аталған Һаҡмар ҡырсынлығының яр яҡаһында бер-береһенән йөҙ аҙымдай алыҫлыҡта боронғо бер яугиребеҙҙең кәүҙәһе һәм башы айырым-айырым ерләнгән, имеш. Эйек тамағынан яҡынлап килеүсе Аҡһаҡтимер яуының көсөн белергә тип Туҡтамыш ханыбыҙ тарафынан ебәрелгән темеҫкен[34] башҡорт, имеш, үҙенең шунда башы сабылып өҙөлөрөн алдан уҡ белгән; башымды – сабылып төшкән еренә, кәүҙәмде ҡолаған урынына күмегеҙ, тип әйтеп ҡалдырған һәм шулай иткәндәр ҙә.

-- Туҡтамыш һәм Аҡһаҡтимер эҙҙәре... тарихи ер икән шул, ысынлап та!

-- Ошоғаса ер һөргәндә тимер уҡ, һөңгө башаҡтары, тимер күлдәктәр килеп сыға төрәндәргә эләгеп.

-- Башҡорт ерен илбаҫарҙарҙан ҡурсалап шәһит киткәнгә күрә, быуаттар буйына онотмай зират ҡылып, әүлиә тип ҙурлағандар, изгеләштергәндәр мәрхүмде, урыны ожмахталыр... – Ҡыҫҡа аят уҡып доға ҡылдылар ҙа эйәрҙәренә менделәр. Ҡырсынлыҡ кисеүенән бесән тейәп сығып килгән, пар ат егеүле бейек урыҫ арбаһы – ридван ыңғайланы ауылға; бесән башында, арба артынан атлаҡкан һыбайлыларға әленән-әле текләп, ҡуш бағаналай һерәйеп, ҡара кейеҙ эшләпәле ике ирекәй ултыра, береһенең күҙе салыш, икенсеһенең ауыҙы ҡыйыш, әстәғәфирулла тәүбә!..

-- Ошо икәү була инде Хәсән менән Лотош ҡарттар...

Бесән таулы ридвандың алдына сығып, ауылға елдерҙеләр. Ер кешеһе янып-бешеп бесән әҫерләгән мәл, бөтә халыҡ сабында, ҡарт-ҡоро ла бала-саға ғына салына күҙгә. Һыуалғыҫка ҡайырылып, оҙон юлдан һуң туҡталышта тамам һыуынған аттарын һыҙғырып эсерҙеләр ҙә, етәкләп, йылға үрендәрәк Ҡаҫмарт тамағында ҡускылланған әрәмәлек буйынан атланылар. Әлерәк кенә Әхмәт байҙың йылдағыса Йылайырҙан ҡыуҙыртҡан һуңғы һалдары үткән имеш ағылып; ташлы морон яр ҡырында һөрлөгөп ҡалған бүрәнәләр асы сайыр еҫтәре аңҡытып ята тырым-тыраҡай. Бөгәлдәге өйкөм-өйкөм тал артындағы ҡомлоҡта мөңгөр-мөңгөр үҙ алдына һөйләнеүсе сәйер телмәр йәлеп итте иғтибарҙы, туҡтап шым күҙәттеләр. Ғәҙәти киндер күлдәк-ыштан, башына урыҫ картузы кейгән тирәктәй нәҙек-оҙон буйлы, матур сөм-ҡара мыйыҡлы утыҙ йәштәрҙһәге әҙәм, яланаяҡтары менән дымлы ҡомға бата-сума, башы йылғаға ҡаратып ҡармаҡ ҡыуалы сәнселгән һыу ситенә тиңәлә лә әлә ниндәй күҙгә күренмәҫ тиңдәшеме, дуҫымы менәнме сәләмләшә:

-- Дахил[35]-Шарап туғаным, һаумы, һаумы!

Үҙе үк үҙенә яуаплай:

-- Һаумы, Хәлил туғаным, һаумы, һаумы!

-- Иҫән-имен генә торҙоңмо урыныңда?

-- Үҙең иҫән-имен килеп еттеңме?

-- Иҫән, иҫән, туғаным! – Балаларҙай сүгәләп, усы менән ҡомдо көрәп, кафырҙың ҡыҙыл һурғыс башлы, яртылаш бүҫкәртелгән эсемлек шешәһен йолҡоп сығарҙы. Юғары тотоп күҙәләмә кимәлен билдәләгәс, бөкөһөн тешләй

[34] Темеҫкен – разведчик.

[35] Дахил – эскелек.

асып, тамағын ғорҡолдатып берталай йотто; бөкөһөн ҡабат тығып, баяғы ҡом келәтенә күмде *лә* ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып ҡалҡынды. – Һау булып тор, Дахил-Шарап туғаным, мин килгәнсе, һау бул, һау бул!

-- Һау бул, Хәлил туғаным, һау бул! – Йәйен балығын ҡармаҡлау маһиры яр ҡырыйынан әкрен генә күтәрелеп, әҙәм буйына тиңәлеп үркегән күкшелт әремдәргә ышыҡланғас, шарҡылдап көлөштөләр.

-- Баяғы Һантый Хәлил ағабыҙ ошо үҙе була инде! – тине Сәлимйән.

-- Ысынлап та Һантый икән, әй. Араҡыһын эт эсмәһә ярар ине.

-- Дүрт аяҡлыһын белмәйем, әммә ике аяҡлылары эскеләй, тигән хәбәр бар...

Артҡапҡала ҡаршылаған Фатих ҡусты ярҙамында аттарҙы ҡураға ҡуйып, баяғы ҡарама төбөнә янтайҙылар. Хәҙрәт уларҙы өйлә сәйенә көтөп ала алмағас, артабанғыһын абыстай менән мәғүменә тапшырып, мәсет иғәнәһенә бесән сабыусы өмәселәре эргәһенә ашыҡҡан. Самауырҙан баш тартып, ҡымыҙ менән һыуһын ҡандырҙылар ҙа, Фатих мәғүм ҡотҡоһона бирелеп, баяғы саҡырыу ебәргән йортҡа йәйен ите ашарға йүнәлделәр, сөнки Һантый Хәлилде яҡынданыраҡ күрергә тип сәмләнде ҡунағыбыҙ. Тишек-тошоҡ серек һалам түбәле, ус аяһындай ни бары ике ҡарындыҡ тәҙрәле, көмөрәйгән ситән соланлы йоҙроҡтай ғына өйҙөң асыҡ ишегенән һыҙылған моңло ҡурай артынса уҡ шундай уҡ моңло ир һәм ҡатын йырлауынан әҫәрләнеп, соланда туҡталдылар.

-- Хәлил ағай менән Хәнифә еңгәй! – тип шыбырланы Сәлимйән. Бирелеп тыңланылар:

Хәлил:
Ирәм[36] *бағында сән үҫтең,*
Йөрәгем парәһен киҫтең,
Саба еле булып иҫтең,
Хәнифәм, ау, хәләл йәрем.

Хәнифә:
Күгемдең күк шоңҡары сән,
Даламдың буҙ толпары сән,
Бәгеремдең һыңары сән,
Хәлилем, ау, ярты йәнем.

Хәлил:
Сәсрәп китһен донъя малы,
Алтын-көмөш – дуңғыҙ ҡаны.
Төнөмдөң һин һүнмәҫ таңы,
Хәнифәм, ау, ҡояш-айым.

[36] Ирәм (Имир) – шул исемле гермафродит тәүбабабыҙ Дәү Хоҙайҙың (“Урал батыр” эпосындағы Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең) гүзәл баҡсаһы – атабыҙ Өҙәм (Урал), өсөбеҙ һауа (Шүлгән) яралған ожмах.

Хәнифә:
Тәңрем сәме йөҙҙәреңдә,
Йондоҙ шәме күҙҙәреңдә,
Кәүсәр тәме телдәреңдә,
Хәлилем, ау, бар йыһаным.

Ҡушарлап:
Ожмах түре – ҡыуышыбыҙ,
Дахил-шарап – һулышыбыҙ,
Былбыл булып ҡауышығыҙ
Хәлил менән Хәнифәләй.

Ете йәштәрҙәге ауыл аҫырауы[37] -- шарылдаҡ бер ҡыҙ бала ҡайтып инеп, тамаша маҙаһына тейгәс, ипле генә сәләм биреп инделәр, йөҙҙәре ҡояш менән айҙай балҡыған бәхетле хужалар иһә тар өйҙәренә һыйғыһыҙ киң күңел менән ифрат ихлас ҡаршыланы; буй һикегә йәһәт ашъяулыҡ йәйеп, ҡара ҡомғанда ҡаты итеп бешерелгән өрөклө сәй, ҡалын көлсә ҡатарында оло батмуҫка һалынған көрәк яҫылыҡ һимеҙ йәйен ҡойроғо менән һыйланылар. Урындарында тышлыҡтары тап-таҙа бер юрған менән яҫтыҡтан башҡа һис ни күренмәһә *лә*, аштары – тирәсе сым менән тарттырылған ярыҡ ҡаҙанда, сәйҙәре суйын ҡомғанда бешерелһә *лә*, иҙәндәре һәм бөтә ағас әйберҙәре балауыҙҙай һары итеп ҡырсып йыуылған, көллө өй эсе паклыҡҡа һуғарылған, ә үҙҙәре былбылдай һайрашҡан был һантый йәндәр ысынлап та бәхетле, иҫ китмәле бәхетле ине. Йөҙҙәренән түгелгән һәм ҡарындыҡ тәҙрә ҫтә кергән нурҙарҙы аҙһынғандай, көпә-көндөҙ унлы шәм яғып түр башына аҫҡандар, мейес ҡашағаһында *ла* етеле шәм нур сәсә... Ошо һуңғылары ифрат таң ҡалдырҙы алыҫтан килгән ҡунаҡты. Әйтеүҙәре буйынса, ғүмерендә мал-тыуар аҫырамай, иген икмәй, бесән сапмай, йәйен-ҡышын балыҡ тотоп, кейек аулап, Кершәнник баҙарында шуларын һатып, улъя төшмәгән саҡтарында туған йәнле ағай-энеләре хәйеренә таянып саҡлы-соҡло көн күрә *ул* Һантый Хәлил, тигәйнеләр ҙәһә, ә ниңә һуң көпә-көндөҙ сыраҡ яндыра? Уныһы ғына *ла* етмәһә, тар өйөндә аҫырауҙы айҙар буйына ҡундыра, услап-услап табынға өрөк, йөҙөм емеше сәсә?.. Аҫырауы *ла* мишәрсәләп тәтелдәй, өҫтәүенә:

-- Менүәрәләргә кергәнием, өрөксөз-нисез семерәләр ачы мәтрүшкә чәйен, аҡтүтәйем. Сездә эчкән чәйләрем исемә төшөп, күңелем болғанып чығып киттем, ясап биргәнен дә эчмичә. Аҡтүтәйем, әйт әле: өрөксөз дә чәй эчеп буламы икән ни?!. Өйләре ҡап-ҡараңғы, бездәгедәй көнө-төнө шәм дә янмый, ичмасам!

-- Балаҡайым, күрәһеләрең бар икән!.. – тип хафаланды өйҙөң хужабикәһе. Аптыраҡ тоҡкан Әхмәтзәкирҙе ни аралалыр әлеге шул Сәлимйән әшнәһе йәшертен генә әшкәртте: баҡтиһаң, Столыпин законына ярашлы был өй ҙә ҡапыл байыған: Һантый Хәлил, Селек бөгәленә китәм – Һаҡмар ятыуына яҡын утар һалып ултырам, тип, йәмғиәт еренән үҙ өлөшөн киҫтертеп, Рязань яғынан килгән ҡалталы урыҫ мужигына осорған гүзәл тәбиғәтле төбәкте; бер мужик килеп ултырғандан донъя үҙгәрмәҫ әле, тип, ауылдаштар быға ҡул һелтәгәндәр, мужик

[37] Ауыл аҫырауы – аҙна һайын сиратлап өйберенсә йәшәп тамаҡ туйҙырыусы үкһеҙ етьем бала.

төпләнгән утарҙы Селек Мужигы тип исемләгәндәр. Ләкин бер-ике йылдан уҡ Селек Мужигының биләмәләре ныҡ киңәйгән – Ырымбурҙан гөбөрнәтер землямерҙары килеп, хәтһеҙ башҡорт ерҙәрен ҡырҡып биргәс, утар алтмыш йортло урыҫ ауылына әүерелгән, башҡорт аяҡ баҫмаҫ ергә әйләнгән... Бына ниңә көпә-көндөҙ шәм яғып ултыралар, өрөкләп сәй эсәләр, ә Хәнифә ханымдың урта бармағында аҫыл ташлы алтын балдаҡ ялҡылдай... Дөрөҫ, Һантый Хәлил баяғы Селек Мужигына илтер юлдың Ҡаҫмарт кисеүенә етер-етмәҫ һыл яғында Әбейүлгән тауҙың дүрткелләнеп ятҡан Һандыҡташында төн уртаһында ҡыҙарып ләүкегән ялҡын күреп (унда Муйтән бейҙең хазинаһы бикләнеп ята, тиҙәр...), баяғыса, усы менән һуғып алған, имеш, ул алтын балдаҡты; шулай ҙа мужик аҡсаһына бәйләп аңлатыусылар ҙа етерлек...

Әпәр итеп аш ҡайтарғас, изге йола буйынса, алыҫтан килгән ғалим мосафир Ҡөрьән аяты уҡыны, йортта бәхет шулай тулып-ташып тороуын теләне. Ҡунаҡтарҙың өсөһөнә, шулай уҡ етем-еҫер мишәр ҡыҙына ла , ваҡ көмөштән садаҡа тараттылар. Әхмәтзәкир, доға ҡылып алғас, усында тос тартымлы тәңкәнең алтын икәнен абайлап, был фәкирҙәрҙән шунса хәйер алырға ауырһыныптыр, тәңкәне өй хужаһына хәйер ҡылып кире бирҙе; Хәлил уны доға ҡылып алды ла үҙ сиратында Әхмәтзәкиргә хәйерҙән кире ҡайтарҙы:

-- Изге мосафир, әгәр ҙә алмай китһәң, ҡанлы йәштәр менән ҡаты рәнйермен; һинең һымаҡ хаҡ юлдан йөрөгән йәш ғалимыбыҙға ауыр сәфәрен саҡ ҡына булһа ла еңеләйтергә насип ҡылһын ине Хоҙай! – Бәхетле ир менән ҡатын, ҡунаҡтарҙы урамғаса оҙатып, иңгә иң терәшкән хәлдә сөңгөрләшеп тороп ҡалдылар...

3

Һаҡмар һыуында ҡойоноп, һыуынып алырға ла аҡшам намаҙына тиклем игелекле шөғөлгә ылығырға – мәҙрәсә бураусы оҫталарға ярҙамлашырға ниәтләнгәйне улар. Йөҙә-сума кинәнеп өйрәк ҡыуыш уйнағанда, арғы ярҙан, йомарлаған кейемдәрен һыңар ҡулында юғары күтәреп тотоп, ут ҡапҡандай ерән сәсле, йәше яғынан Фатих мәғзүмгә тиңләшерәк татар малайы йөҙөп сыҡты ла, йөгөн ярға атып-бәреп, былар уйынына ихлас ҡушылды. Йөҙгәнендә һыу өҫтөндә туҙбаш йыландыҡылай ерән башы бер әкәмәт булһа, өйрәкләнеп күкте тибеп сумғанында яҫылығы ҡуш аялай, оҙонлоғо аршиндай дәү тәпәйҙәре хайран ҡалдыра ине. Башҡаларҙың иҫе китмәгәнен күргән Әхмәтзәкир:

-- Исемең кем һинең, мырҙам? – тип ҡыҙыҡһынғайны, һә тигәнсе таҡмаҡлатып яуапланы:

Нияз минем исемем,
Яланаяҡ кешемен,
Ҡарға бассам ҡызамын,
Пич башында өшимен.

-- Беҙҙең яҡта бындай һиммәтле инсандарҙы тайыш аяҡ тиҙәр ине, һеҙҙә Нияз аяҡ тип әйтерлек елле өлгө бар имеш. Әллә, тимен, ысынлап та ҡарға баҫып уңдымы был табан бәрәкәттәрең?

Бәрәкәтем – бәрәкәт,
Табан жылым – хәрәкәт.
Көчләп пойма кидерсәгез,
Салып ташлыйм, жамәғәт!

-- Ҡайҙа шытып уңды икән был шанлы татар балаһы?

Шытҡан аулым Чишмәдер,
Ҡызлар ыштан чишәдер.
Жигетләре, жинләнеп,
Суын бушлай эчәдер!

Көләшә-көләшә ҡороға сығып кейенә башлағайнылар, ерән башлының өҫ кейеме үҙенән дә сәйерерәк күренде: татарҙың бай шәкерттәре кеймәлекле фыртый ҡала фасонында аҫыл буҫтау туҡыманан бесеп тегелгән салбар-кәзәкей, кәләпүш; тик улар барыһы тиң ҡырҡ йыртыҡ һәм ямауға ҡалып кеймәлекһеҙ туҙған, әммә һаман ошо “ҡала фасонынан” айырылырға теләмәгәндәй күренә. Хөллә эйәһенең үҙенең әйтеүенсә, ошбу килеш ул Ырымбурға барырға, Әхмәт байҙың үҙенә йә приказчигына “явиться” булырға тейеш -- өҫтөндәге иҫкеләрен өр-яңыға алмаштырырға бушлай. Буштың атаһы үлгән, тип, һуңғы сәйер мәғлүмәткә Әхмәтзәкир тамсы ла ышанмағас, быныһы ла тап ана шулай яланаяҡлап ҡарҙа йөрөү бәрәкәте икәнлеген тарихи йәһәттән Сәлимйән менән икәүләшеп төшөндөрөп бирҙеләр. Баҡтиһәң, Нияз бынан өс йыл элек шартлап торған ҡышҡы сәлләлә атаһы менән Тоҙтүбәнән тоҙ тейәп ҡайтып килешләй, Татар Ҡарғалыһында ҡуналҡаға туҡталғас, донъяға билдәле Әхмәт байҙы үҙ күҙҙәре менән күргә теләп сәмләнгән Нияз, түҙә алмай, “бынауы торған Ырымбурға эт һейгәнсе барып әйләнергә” атаһын ныҡый башлағас, балаһының оҙон юлда ғына кеймәле тишек табанлы быймаларын йәшереп ҡуйған, ти ҡарт. Әммә... таң тишегенән Ырымбурҙың ҡар көрәүселәре ауыҙынан хәтәр хәбәр елә ҡолаҡтан ҡолаҡҡа: “Ҡала буйлап сасҡау ҡарҙан яланаяҡ Хызыр-Ильяс китеп бара Әхмәт байға!..” Мәғлүмәт йәшен тиҙлегендә Әхмәт бай йортона үтеп инеп, ысынлап та яланаяҡ Хызыр-Ильясты ҡаршы сығып алалар ҙа байҙың йылы түренә мендерәләр. Изге йәндең аслан кем икәнлеген, ниңә бында килгәнлеген төшөнгәс, Әхмәт бай, күҙҙәренән эскерһеҙ йәше мөлдөрәп, изге әмерен бирә: “Баштан-аяҡ өр-яңынан ҡаласа кейендерергә, кеҫәһенә ун һум аҡса һалырға. Ошонан һуң да был инсанды күҙҙән яҙҙырмайынса, ошбу беҙҙәр һибә[38] ҡылғандың иҙерәп туҙғаны һайын, ул Ырымбурға килгәнендә йылына бер өр-яңыға алмаштырып торорға. Милләтебеҙҙең сыныҡҡанлыҡ һәм ғалилыҡ үрнәге булһын өсөн, үҙҙәренә күрше ауыл Сәнкем-Биктимерҙең Мөхәммәткамал хәҙрәт

[38] Һибә -- бүләк, бушлай биреү (спонсорлыҡ).

Дәүләтшиндың мәҙрәсәһенә уҡырға урынлаштырып, йылына бер мәртәбә аҡсалата һибә ҡылып торорға”... Шунан бireле Сәнкем-Биктимер ауылының һәр өйөндә яланаяҡ Нияз шәкертте хөрмәтләп ҡаршы алалар, йор таҡмаҡтарын тыңлап, һыйлап сығаралар имеш...

Нияз мырҙаның бөгөн ниңә бында пәйҙә булыуының сәбәбе *лә* аңлашылды: баш яҡтан үтәсәк һуңғы һалға эләгеп, Ырымбурға барырға, Әхмәт байҙың ҡаҙнаһына аламаларын тапшырып, өр-яңынан бөтәйеп ҡайтырға юлланған.

Сәйерһенеүен баҫа алмаған Әхмәтзәкир, азаматтың хөлләләренең бер йыл эсендә ошондай ҙа иҙерәп туҙыуының сәбәбен һорағас, иҫе китмәй яуапланы:

-- Беҙ бит уларҙы, буштың рәхәтен күреп, бөтә ағай-эне иңдән төшөрмәй алмашлап кейәбеҙ. Нияз сисенеп йоҡлай, әммә Әхмәт бай иғәнәһе йоҡламай – кемдеңдер иңендә кейелеп йөрөй бирә!..

-- Аяғыңа бирмәнеләрме ни?

-- Биргәйнеләр ҙә -- алманым, сөнки биргән һәр беренә аяғым һыйманы.

-- Аяҡ, тиһәң дә -- аяҡ, тап килтереү ҡыйындыр шул. Батша үҙеңде һалдат итеп алғас нишләрһең икән?

-- Яланаяҡ йөрөрмөн, бына былай иттереп! – Тәпәйҙәрен өҫкә ғорур сорғолтоп, хәрбиҙәрҙең парад маршын белеүен тамаша ҡылдыртты – Ырымбурҙа гөбөрнәтер һарайы алдында ҡарауыл һалдаттарынан күргән икән.

-- Батшаның бөтә ғәскәрҙәре ошо Нияз һалдаттай яланаяҡ йөрөһәсе! – тине Сәлимйән. – Итектәре ярлы халыҡҡа тәтер ине, исмаһам. Шулаймы, Фатих мәғзүм?

-- Бына үҙең һалдат булғас ни әйтерһең? Риза булырһыңмы икән?

-- Мин риза! – тине Нияз.

-- Һай афарин! Борон заман татар халҡының Нияз кеүек яланаяҡ һалдатлы ғәскәре булһа, Яуыз Иванға Ҡазанды бирмәҫ ине!

-- Ниңә, әле *лә* һуң түгел! – Нияздың бөйөрөнә төртөп ҡеүәтләне Сәлимйән.

Үр яҡтағы бөҙрә таллы бөгәл артынан ҡапыл ғына ҡурай моңо һыҙылып, әңгәмә ебе өҙөлдө *лә* бар иғтибар шул тарафҡа төбәлде: тымыҡ һыуҙа талғын ғына һал йөҙә; ең һыҙғанып, балаҡ төрөп үрә ҡатҡан мыйыҡлы бер мыҡты ағай һал башында ишкәкләп юл алдырта; ун ике йәштәр самалы бер ҡарпыш ҡолаҡ тарамыш үҫмер артҡы ишкәкте тотҡан; урталыҡтағы буралы өй башында иһә ҡарпыш ҡолаҡҡа тиҫтерерәк икенсе улан, ап-аҡ киндер күлдәк иҙеүенең үңер бауын сисеп ебәреп, ирәүән ҡурай шыжылдатып ултыра – быйылғы һуңғы һал килә! Өймәкләшеп тамаша ҡылған ярҙағыларға салт иғтибар иттеләр: ҡурай моңо оҙон көйҙән дәртле таҡмаҡҡа күсеп, ишкәкселәр алмаш-тилмәш мөнәжәт атты ярға:

Данлы Сәнкем-Биктимергә
Тарты аяҡ, килергә.
Хәҙрәтегеҙ рәнйемәһә,
Туҡталырбыҙ был ергә.

Һал килеү хәбәре күҙ асып йомғансы өйберенсә таралып, һыуалғыҫка телгәр халыҡ эркелде – йыр әйтешеү маһирҙары был форсатты ҡулдан ыҫкындырмай ине.

Ярҙан:
Ауылыбыҙ ҡоймалы,
Ҡапҡа асып ҡумалы.
Хәҙрәтебеҙ фатихаһы
Зәм-зәм[39] *кеүек шифалы.*

Аңшайып килеп, һал башын таш моронға бәрҙертә яҙғайнылар, әсе телле Нияз сәнсеп өлгөрҙө:

Кәшмәгең ниҡ ишмәдең,
Исердеме ишкәгең?
Башың тотоп уфтанасың,
Башҡорт абый, нишләдең?

Һалдан:
Мал ағыҙам далаға,
Һаҡмарский ҡалаға.
Һеңлең алып ҡасһам, татар,
Булырһың, тим, ҡайнаға!

Ярҙан:
Ике ҡулың чөйәлле,
Исем-атың кем әле?

Һалдан:
Сөйәлемдән килеп белеш,
Миңә һорау бирмәле!

Ҡашлаҡтағы кешеләрҙе яр буйлатып үҙ артынан ылыҡтырған кәшмәкле һал һыуалғыс таш морон шаршыһын имен уҙып, ауыл осондағы Борам тауы тәңгәлендә һәлмәкләнгән киң ятыуҙың таллы ярына һырныҡты, ике осо тирәктәргә арҡанлап нығытылды. Яр башына ырғып менгән һалсылар менән һәр кем ихлас күреште: Иркәбай исемле мыйыҡлы мыҡты ағай ҙа, уның Ғәбделхәй[40] атлы ҡурайсы һәм мөнәжәтсе улы ла таныш ине һал ағыҙмалы Һаҡмар-һыу буйы халҡына; ҡарпыш ҡолаҡлы улан иһә, бик теремек ҡул бирep иҫәнләшеп, Шаһизада Бәпесовмын, ҡаршығыҙҙағы олоғ шағир һәм ҡурайсы Ғәбделхәй Иркәбаевтың мәҙрәсәләге шәриҡтәше, йән дуҫымын, йәйге форсат барҙа бергәләшеп йәмле Һаҡмар буйҙарын ҡыҙырырға, ил күргә йүнәлдек, тип

[39] Мөхәммәт пәйғәмбәр еренә хаж ҡылып, Зәм-зәм шишмәһенән алып ҡайтмалы изге һыу.
[40] Ғәбделхәй Иркәбаев, буласаҡ шағир, 1919 йылда большевиктар тарафынан яуыздарса үлтерелә.

таныттыла, һеҙҙең Үҫәргәндәлә, тап беҙҙең Бүләрҙәгеләй, ларылдап (“юллар” тип) һөйләшәләр икән (“һөйҙәшәләр” түгел), ә Ғәбделхәй дуҫымдың Ҡыуаҡан яғында иһә дарылдап (“юлдар” тип) һалдыралар, хәйер, минең кеүек һәлбер ҡолаҡҡа уларҙың икеһе лә бер, тип көлдөрҙө.

-- Дуҫым Шаһизада үҙе миңә ҡарағанда ла талантлы олоғ шағир, думбырала, мандолинала уйнау маһирлығы иһә шундай юғары кимәлгә ирешкән ки, хатта аяҡ бармаҡтары менән еҙ ҡылдарҙан көй сиртә! – тип шапыртҡайны Ғәбделхәй, быныһына ышанмайыраҡ торҙолар: ҡул менән булһа – бер хәл, аяҡ менән булмаҫ, тинеләр. Әммә-ләкин Шаһизада, мандолина килтерегеҙ, ошонда уҡ маһирҙарығыҙ-ҙы аяҡ менән уйнарға ярышҡа саҡырам, тип һөрәнләгәс, ундайҙар табылманы. Үҫмерҙәрҙең кемуҙарҙан һауаланыуын мыйыҡ бороп тыңлаған Иркәбай ағай ҙа Шаһизаданың маһирлығын күҙ ҙә йоммай раҫланы, өҫтәүенә, улар икеһе лә Аҡмуллабыҙ булырҙай: юл буйы дәфтәргә мөнәжәт яҙышып ярыштылар, әммә береһен береһе уҙа алманы, тигәс, Әхмәтзәкир уларҙың ярыш дәфтәрен аҡтарып ҡарап, ысынлап та шағирәнә йәнле уландар икән, киләсәктә милләтебеҙҙең ғорурлығы дәрәжәһендәге ижадсылар булмаҡсы, тип күңелдәрен күтәрҙе.

Шул арала яр башына Кершәнник юлы тарафынан ике улан йүгереп килеп етте, береһе, ялтыратып сәсен ҡырғаны, ых-бых һулап:

-- Сәлем Солтанов[41] тигән шәкерт буламын, Хәлил йәйенсенең улы, -- тип таныштырҙы ситтән килеүселәрҙе. – Хәҙрәткә бесән сапҡан ерҙән, ауылға һал тукталған, тип ишеттек тә Төхфи әшнәм менән күҙ йомоп дондоҡ.

-- Төхфәт Ченәкәй[42], -- тип төҙәтте ебәктәй йомшаҡ һары сәсле, аяҙ күктәй зәңгәр күҙле (һыңары сәсәк сиренән аҡлағайны), талдай һомғол буйлы үҫмер егет. – Шушы Саҡмар түбәнендә Сарыҡташтан арыраҡ Рәдүт дигән казачий ауылданмын, шушындағы мәдрәсәдә башланғыс сабаҡ алдым, йәренгә Ҡарғалы мәдрәсәсенең сасы-мососон иснәргә иде ниәт.

-- Бирһен Хоҙай! – Бит һыпырҙы Әхмәтзәкир.

-- Анауы Нияз шәкерттән дә уҙырырлыҡ бынамын тигән бәйетсе, яҙғандары-ның аҫтына “Төхфәт Сенәкәй-Рәдүди” тип тә ҡул ҡуя! – Аңлатырға ашыҡты Сәлем тигәне. – Бик тә белгегеҙ килһә, баш яҡ бәйетсеһе менән әйтешергә килде ул.

-- Аб-баа! – Һалсыларҙың ҡарпыш ҡолаҡлыһы алға сыҡты. – Йә, әйтеп ебәр, әләйһә. Кешнәшепме, тешләшепме алайыҡ.

Төхфәт шәкерт, тамаҡ ҡырып, һалдыра ла башланы – ҡара-ҡаршы әйтеш китте:

Төхфәт:

Диндер-диндер-диндерәү,

---

[41] Сәлем Солтанов – 1918 йылда Ғәбделәхәт Сәйетбатталов әтрәтенең ҡыҙыл гвардиясыһы; 1919 йылда аҡ башҡорт ғәскәре һалдаттары араһында уларҙы ҡыҙылдар яғына сығырға өндәп йөрөүсе өгөтсө-агитатор, шул йылдың февралендә Темәстә башҡорт ғәскәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын ҡарарлаған ғәскәри йыйын делегаты.

[42] Төхфәт Сенәкәй – буласаҡ шағир, Шаһизада Бәпесевтең Ырымбур осор дуҫы, ул һәләк ителгәс, уның түгелеп-сәселеп ҡалған әҫәрҙәрен ил буйынса йөрөп йыйыусы, шағир хаҡында хәтирәләр авторы.

Чабатамда киндерәү.
Кидерәүе төшөп ҡалғач,
Ыштанбаулап жилтерәү.

Шаһизада:
Синекендә -- сабата,
Минекендә -- күн ҡата.
Икесе тиң тишек-тошоҡ,
Шулай да ярап ята.

Төхфәт:
Сөйләмеңдә татар бар,
Татарлыҡҡа ҡатар бар.
Шуны әллә белмисең –
Үзем башҡыртмын, дисең?

Шаһизада:
Ҡойоп ҡуйған башҡортмон,
Бпашҡортлоҡҡа баш йортмон.
Телем минең – ирәкте,
Телеп керә йөрәкте.

Төхфәт:
Син – ирәкте, мин – татар,
Юлларыбыз, дим, ҡатар.
Башҡыртмы, дим, баш тартыр?
Әллә татармы сатар?

Шаһизада:
Татар барҙа – хәтәр бар,
Хәтәрлегә бөтәр бар.
Йәшә башҡорт Бәпесев,
Йәшә Сенәкәй татар!

Бәйетселәр ихлас ҡул ҡыçыштылар ҙа ҡайнар ҡосаҡлаштылар, ә тамаша ҡылыусылар ҡеүәтләп алҡышланы.

-- Афарин! Дус булыйҡ!

-- Булдыҡ! – Ун йылдан һуң илгә билдәле ике шағир Ырымбурҙа осрашып, ысынлап та дуç булышып, берталай бер бүлмәлә йәшәйәсәген; большевиктар Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәгә япҡас, төрмәнән ҡасҡан Шаһизада ошо Сәнкем-Биктимер аша Бөрйәндең Таулыҡай төбәгенә үтәсәген, киләсәктә Башҡортостан гимны булып яңғыраясаҡ атаҡлы “Башҡортостан” шиғырын шунда яҙасағын бере*h*е *лә* белмәгәндер, әлбиттә. Егерменсе йылдарҙа Өфөлә эшләгән Төхфәт Сенәкәй, дуçлығына тоғро ҡалып, шағир ижадын килер быуындарға илтеп

еткереү өсөн тос өлөш индерәсәген; 1919 йылда ҡанлы Йылайыр ерендә яуыздарса үлтереп ташланған дуҫының ҡәберен эҙләп табып, уны ҡабат тантаналы ерләүҙә ҡатнашасағын да, әлбиттә, бындағыларҙың береһе лә башына индермәгәндер... Мосафир ҡунаҡ Әхмәтзәкир Йәлитов иһә үҙенән-үҙе килеп сыҡҡан шиғри әйтештән һоҡланыуын белдерҙе:

-- Күрәһегеҙме, йәмәғәт: күҙ алдыбыҙҙа яңы быуын шағирҙарыбыҙ тыуа, афарин! Киләсәктә был балапандар ҡанаттарын киң кирер, милләтебеҙҙең яңы Аҡмуллалары, Туҡайҙары етешер!

Ауылдың торғон тормошона кескәй генә күңелле ял килтергән һал, йор таҡмаҡсы Ниязды ла арҡаһына ҡундырып, Һаҡмарҙы түбәнләп Ырымбур яғына һыҙҙы, тамашасы ауылдаштар һәрбере үҙ мәшәҡәттәренә таралды. Көнө буйы ығы-зығынан талыҡҡан Әхмәтзәкир мәғүм киң күңелле хәҙрәт йортонда төнәп ҡалды.

Мөхәммәткамал хәҙрәт иртәгәһен ҡырандаҫка ҡуш юрғаһын ектертеп, Сәлимйән шәкертен күсер итеп ултыртып, бер туған ағаһы Әхмәтшаһ имамлығындағы Себенле ауылынаса илттертеп ҡуйҙыртты, ун йылдан һуң Ырымбурҙа аҡтар менән ҡыҙылдарҙың киҫкен көрәше осронда Каруанһарайҙа ҡабат юлдары киҫешәсәген был икәүҙең береһе лә шәйләмәне; Себенленән мосафирҙы Ырымбурғаса имам хәҙрәттең уланы Ғәбделғәлләм мәғүм йәһәт алып барып еткерҙе; ун йылдан һуң был инсан да, Сәнкем-Биктимергә яҡын Һаҡмар аръяғында Һарыяр (Жултый) ҡасабаһының имам хәҙрәте булып етешкән Ғәбделғәлләм Дәүләтшин, ошо уҡ Әхмәтзәкир етәкләгән автономиялы Башҡортостан хөкүмәтенең ялҡынлы бер таянысына әүерелеп, 1918 йылда үҙ мәсете ҡаршыһында уҡ большевиктар тарафынан вәхшиҙәрсә үлтереләсәк ине, ике туған ағаһы Мөхәммәткамалдың яратҡан элекке шәкерте большевик Мырҙағолатовтың ҡоралдаш-ҡорҙашы ҡыҙыл Каширин ҡулынан...

II КИҪӘК: УН ЙЫЛДАН ҺУҢ

1

Эйе, елдәй елеп, һыуҙай һүлеп үтте ла китте йылдар... Мәкерле һәм яуыз батша һанаунигы Столыпин тарафынан башҡорт иленә яңы баҫҡын-килмешәктәр һөстөрөлөп, аҫаба ерҙәренең шаҡтай өлөшө оятһыҙ алдап-йолдап та, көсләп тә тартып алынған, осһоҙ-ҡырыйһыҙ Рәсәй киңлегендә бер-бер артлы ҡупҡан боласыларға ҡаршы һабаҡ өсөн атлы казак ҡамсылары, ҡылыстары сыжлаған, һалдат пүләләре гөрһөлдәп атылған, йөҙәрләгән “Столыпин галстуктары”н[43] әрнеткес ел сайҡаған дәһшәтле ун йыл...

Ҡанлы герман һуғышының башынан уҡ һалдат шинеле кейеп, өҙлөкһөҙ фронтта йөрөгән, 1916 йылдан алып үҙен инанған коммунист итеп һанаған, һалдат массалары араһында большевиктар партияһының рассыльныйы[44]

[43] “Столыпин галстуктары” – батша самодержавиеһына ҡаршы көрәшеүселәрҙең аҫылы кәүҙәләре һәленеп торған дар бағаналарын халыҡ шулай атаны.

[44] Рассыльный – курьер, йомошҡа йөрөүсе.

рәүешендә йәшерен эш башҡарған Сәлимйәнде яҙмышы алай ҙа аяны, әжәлдән араланы. Мөғәллим булғаны өсөндөр, алдағы көндәрҙә лә туған халҡының йәш быуынының күҙҙәрен яҡтыға асып, игелек итеү хаҡыналыр был, бәлки. Ә урыҫ мөғәллимдәрен бит батша хөкүмәте үҙе аҡ билет биреп тылда торғоҙоп ҡалдырҙы -- үҙ халҡына мәғрифәт сәсеү эштәрен дауамларға. Сәлимйән кеүек мосолман мөғәллимдәренә тәтемәне был бәхет, сөнки рәсми мөғәллимлек хоҡуғы биреүсе ҡаҙна мәктәптәрен тамамлау тураһындағы уларҙа юҡ танытма талап ителде, ә мосолман мәҙрәсәләре танытмаһы иҫәпкә алынманы. Шулай итеп, урыҫ мәктәптәре мөғәллимдәре әүәлгесә мөғәллимлек иттеләр, ә мосолман мөғәллимдәре, мәктәптәребеҙҙе мөғәллимдәрһеҙ ҡалдырып, фронттарға киттеләр, ут эсенә инделәр. Ошо хәл үҙе үк мәжбүр ҡылды һалдат шинелле меңәрләгән Сәлимйәндәрҙе империя сәйәсәте һәм милләттәрҙең яҙмышы хаҡында баш ватып уйланырға, ғәзиз халҡын үлемесле бәләләрҙән ҡотҡарыу юлдарын эҙләргә. Ҡанлы окоптарҙа хис менән аң уғата көсөргәнеш кисерҙе лә аҡ һәм ҡараны айырырға, һалдат массалары аңын яулау хаҡына хаҡиҡәттәрен оранлаған һәр төрлө фирҡә-партияларҙың ҡайһыһы тәғәйен кемгә хеҙмәт иткәнлеген танып белергә өйрәтте. Һөҙөмтәлә Сәлимйәнде большевиктар партияһының төп өс маҡсаты арбаны: һуғышты кисекмәҫтән туҡтатыу, ерҙе уның эшкәртеүселәренә тапшырыу, милләттәрҙең үҙ билдәләнешенә ирек ҡуйыу. Бына ошо төп өс сара үтәлһә, ер йөҙөндә ысын ғәҙеллек урынлашыр, Рәсәйҙең бөтә милләттәре лә тигеҙ хоҡуҡлы һәм бәхетле булыр. Өс маҡсаттың бигерәк тә һуңғыһы, милләттәрҙең үҙ билдәләнеше тураһындағыһы, ныҡ йәлеп итте урыҫ булмаған милләт кешеләрен большевиктар ҡорона. Окоптарға таратылған йәшерен әҙәбиәт араһынан РСДРП-ның икенсе йыйынында ҡабул ҡылынған программаһын, Ульянов-Лениндың “Милләттәрҙең үҙ билдәләнешкә хоҡуғы тураһында” хеҙмәтен, шулай уҡ Маркс менән Энгельстең “Коммунистар партияһы манифесы”н ентекле уҡып сыҡҡас, үҙе үк шундағы идеяларҙы ялҡынланып яҡлаусыға, окоптарҙа шуларҙы фиҙакәр таратыусыға әүерелеп, хатта Петербургтағы Сталин һәм Троцкийға ла мәғлүм булды үҙҙәренең фронт курьеры Сәлимйән Мырҙағолатов һалдаттың исеме. Февраль революцияһынан һуң һуғыш ҡырҙарында аслан большевиктар ҡотҡоһо уғата көсәйеп, батша офицерҙарына ышанысын юйған һалдаттар шулар өҫтөнән күҙ-ҡолаҡҡа үҙ кешеләрен һайлап ҡуя башлағас, Сәлимйәнде бер тауыштан полк комитеты рәйесе итеп күтәрҙеләр. Петроград менән тығыҙ элемтә тотоп, партия ҡарарҙарын окопта бойомға ашырырға, ҡанҡойошло һуғышты һаман дауамлаусы буржуаз Ваҡытлы хөкүмәткә ҡаршы көрәшергә, “Бөтһөн һуғыш! Бөтә хакимиәт – Советтарға!” тигән шиғар ҡорона тупларға керештеләр ғәскәрҙе. 1917 йылдың көҙөнә табан ваҡиғалар ифрат ҡырҡыулашып, Петроградтағы большевиктар штабы Смольный менән тура бәйләнеш тоторға, тип, полк исеменән вәкәләтлектәр биреп, Сәлимйәнде делегат итеп баш ҡалаға оҙаттылар. Хәтәр юлдарҙы үтеп, октябрь аҙаҡтарында саҡ килеп етте ул умарта күселәй ҡайнаған Смольныйға: ҡыҫыҡ-оҙон коридорҙары йөҙәрләгән, меңәрләгән уның һымаҡ уҡ һалдаттар һәм матростар, завод еҫенә ыҫланған эшселәр менән мыжғып тора – Советтарҙың ошо көндәрҙә асыласаҡ икенсе йыйынында хәл иткес сәйәси алышҡа әҙерлек бара, барыһы

менән баһадирҙай мыҡты һынлы Троцкий иптәш бойора. Ульянов-Ленин иптәш, ҡулға алырға темеҫкенгән буржуаз хөкүмәт шымсыларынан боҫоп, йәшерен хәлдә етәкселек ҡыла имеш. Керенский әфәнденең шул Ваҡытлы хөкүмәтен түңкәрергә, хакимиәтте тулыһынса эшсе, крәҫтиән, һалдат депутаттары Советына алып бирергә Лев Давидович Троцкий иптәш етәкселегендә бына-бына ҡораллы ҡуҙғалыш буласаҡ, Иосиф Джугашвили -- Сталин иптәш иһә уның менән Ульянов -- Ленин араһында элемтәсе булып йөрөй һәм Ульянов -- Ленин уны үҙенең иң ышаныслы кешеһе, милләттәр белгесе итеп һанай, тинеләр. Баштан-аяҡ әсе дарыға ыҫланған окопсыны ана шул икәү ҡабул ҡылды ла инде. Дөрөҫөрәге, йөҙөн ҡап-ҡара шырт ҡыл баҫҡан Джугашвили -- Сталын тигәндәре бүлмәлә баштан уҡ булмаһа ла, көтмәгәндә, йомшаҡ табанлы кавказ итеге менән бесәй һымаҡ шыпыртын баҫа килеп инеп ылыҡты Троцкий башлаған әҙер әңгәмәгә. Бынығы уның барлығынан ҡәнәғәтһеҙләнгәндәй, йөҙөн сытырайтып:

-- Бына Сталин иптәш тә пәйҙә булды, танышмы? – тине, инеүсене күрһәтеп.

-- Таныш, таныш – беҙҙең шәп рассыльный бит ул, әллә оноттоғоҙмо? – Троцкийға һынаулы ҡарап, күҙҙәрен йырсайтып көлдө тегеһе.

-- Мырҙағолатов иптәш фронттан яҡшы хәбәр килтергән: беҙгә мәғлүм дивизия ҡуҙғалырға әҙер, бынан сигнал ғына көтә.

-- Беләм, бик яҡшы.

-- Күпте беләһең, Коба... Смольныйҙан сыҡмай ултырып. Хәл иткес сәғәт һуҡты – Владимир Ильичтың тиҙерәк бында булыуы мөһим.

-- Беләбеҙ.

-- Был моментта тәрән тылды иғтибар үҙәгендә тоторға, түңкәрелеште бөтә Россия күләмендә тәьмин итергә кәрәк. Беҙҙән хәбәр еткәс тә, урындағы Советтар бөтә хакимиәтте үҙ ҡулдарына алһын. Бынығы һеҙгә лә ҡағыла, Мырҙағолатов иптәш.

-- Аңланым, Лев Давидович.

-- Мырҙағолатов иптәштең, һалдат депутаты булараҡ, съезда ҡатнашыуы ифрат әһәмиәтле булһа ла, стратегик маҡсатыбыҙ уның Уралда – үҙ халҡы араһында ҡайнашыуын талап итә.

-- Мин дә тап шул хаҡта уйлап тора инем әле.

-- Башҡалар уйлап бөткәндән һуң ғына уйлайһың һин, Иосиф.

-- Волга – Урал арауығындағы революцион мөхитте ҡуйыртыр өсөн, борондан уҡ һуғышсан-яугир халыҡ – башҡорт ярлы массалары бөгөн дә мөһим роль уйнай... әгәр ҙә дөрөҫ файҙаланһаҡ.

-- Коба, эш ниҙә һуң? Милләттәр белгесе һин бит?

-- Силәбенән килгән делегат Цвиллинг иптәш хәбәр итеүенсә, Өфө һәм Ырымбур ҡалаларында бөтә башҡорт халҡының бер-бер артлы йыйындары булып үткән, башҡорттар ерле автономия яуларға юҫыҡланған.

-- Ҡыҙыуында һуғырға кәрәк тимерҙе! – Троцкий, урынынан ҡалҡынып, мыҡты-олпат кәүҙәһе менән бүлмә күләмен ҡыҫырыҡлап аҙымланы. – Милләттәрҙең үҙ билдәләнешен танымаған Керенский хөкүмәте идеяны томалау сараһын күрәсәк, хатта штыкка аласаҡ. Шуның менән бер башҡорттарҙы ғына

түгел, ә рус булмаған бөтә милләттәрҙе лә үҙенә ҡаршы аяҡландырасаҡ. Беҙ иһә бөтә милләттәрҙең мәнфәғәттәрен күҙәтәбеҙ. – Мырҙағолатовҡа әйләнеп ҡараны. – Ҡәҙерле башҡорт иптәш, аңланығыҙмы шуны?

-- Әлбиттә, Лев Давидович.

-- Тимәк, хәйерле юл! Коба, Ырымбурға телеграмма һуғығыҙ, Мырҙағолатов иптәште эшкә екһендәр. Юҡһа Коростелев иптәш тигәндәре, милли кадрҙар етешмәй, тип зарлана ине.

Бүлмәнән ҡушарлап сыҡҡас, Сталин һалдаттың яурынбашына ауыр усын ятҡырҙы:

-- Әйҙә, минең янға инеп сыҡ әле, фронтовик.

Төрлө гәзиттәр өйөп һалынған ҡаҡ өҫтәлдә буяуы ҡубып иҫкергән телефон аппараты ла янда лапаҡ тимер сейф, өҫтәлде ике яҡлап берәр ултырғыс, ишек төбөндәрәк стена буйында арҡаһының күне йыртылып ярпыланған тар диван. Әсе тәмәке төтөнө терәй түшәмде. Ултырғыстың береһен һалдатҡа күрһәтеп, үҙе өҫтәл артындағыһына төпләнде, күҙҙәрен хәйләле ҡыҫып:

-- Йә, оҡшанымы һеҙгә Лев Давидович? – тине.

-- Ҡыҙ түгел бит ул, оҡшарға йә оҡшамаҫҡа.

-- Ҡороҡ тота инде ул, нишләтәһең... Мин инмәҫ борон минең хаҡта берәй нәмә әйттеме?

Ике юлбашсы араһында ҡара бесәй йүгергәнлеген шәйләгән Сәлимйән хәлде йомшарта төштө:

-- Ниңә баштан уҡ Сталин иптәшкә инмәнең, милләттәр мәсьәләһен ул яҡшы белә, -- тип киҫәтте.

Сталин, ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып, янға ҡайырылды ла сейфты шалтыратып асты; ҡыйырсыҡ ҡара икмәк, ҡағыҙ ярпыһына төрөлгән тоҙло балыҡ, сиректәйгә төшөп бүҫкәргән шешә алып, туҙрап ятҡан гәзиттәрҙең береһенә һалды. Икмәк ҡыйырсығын ҡап-урталай бүлеп, өҫтәл тартмаһындағы абрек хәнйәре менән балыҡты ҡырҡҡылап, шешәнең барлыҡ мөлкәтен ҡалай көрөшкәләргә тигеҙ бүлә ҡойоп, ғәҙәтенсә, күҙҙәрен хәйләле ҡыҫа бireп һынаны:

-- Әгәр ҙә яңылышмаһам, һеҙ – мосолман, шулаймы? Хәмергә ҡаршы түгелме?

-- Дүрт йыл буйы окоптарҙа үҙебеҙҙең кем икәнлекте лә оноттоҡ, алға килгәндән тартынмаҫҡа өйрәндек...

-- Бына бынығы яҡшы. Хәҙер инде бөтәбеҙ ҙә бер туған – ысын пролетариат. Күтәрҙек!

Асығып йөрөгән Сәлимйәндең башы ҡапыл зыңланы, икмәк менән балыҡты кинәнеп тумырҙы.

-- Буржуйҙарҙан власты тартып алһаҡ, бөтә Россияла Совет власы урынлаштырһаҡ, яҡшы йәшәй башларбыҙ, -- тигәне томан артындағылай баҫлығып ишетелде.

-- Фронтта беҙ яҡшы эшләнек – армия ҡоралын буржуйҙарға ҡаршы бороргә әҙер. Керенскийҙы ҡасан бираҡтырабыҙ?

-- Бик тиҙҙән. Быйыл уҡ. Ләкин, Владимир Ильич (Ульянов -- Ленин иптәш) бөтәбеҙгә ҡат-ҡат киҫәтеүенсә, эш Петроград менән генә осланмай. Бер үк ваҡытта

Россияның бөтә төбәктәрендә ләберҙәм ҡуҙғалып, быға бөтә милләттәрҙе ылыҡтырып, урындарҙа эшсе-крәҫтиән, һалдат депутаттарының Совет власын урынлаштырырға кәрәк. Һеҙҙең башҡорт халҡы быға әҙерме?

-- Әҙерләрбеҙ, ең һыҙғанып керешербеҙ. Әммә быуаттар буйына ҡаты иҙелгән, асыуҙан күҙе томаланған ярлы башҡортто ысынлап большевиклаштырыу өсөн, Ульянов -- Ленин иптәш яҙған баяғы мөкәддәс өс шарттың, бигерәк тә һуңғыһының, тайпылышһыҙ үтәлеше гарантияланырға тейеш. Һуңғыһы, тигәнем, беләһегеҙ, милләттәрҙең ирекле рәүештә үҙ билдәләнешен тәьмин итеү.

Сталин шешәне һәм ризыҡ ҡалдығын сейфына кире йәшереп, төрөпкәһен ҡабыҙҙы ла иҙән буйынса йөрөштөрҙө, ҡалҡынырға иткән Сәлимйәнде яурынынан баҫып ултыртты.

-- Барыһы ла булыр, уға һис шикләнмәйбеҙ. Бының өсөн, Владимир Ильич әйтмешләй, эшләргә, эшләргә һәм тағы ла эшләргә кәрәк... Беләһегеҙҙер, Керенский әфәнде беҙҙе, хаҡ революционерҙарҙы, “большевистик зараза” тип ләғнәтләй. Һеҙҙең бурыс, үҙ яғығыҙға ҡайтып, шул “зараза”ны бөтә илгә таратыу.

-- Эшләрбеҙ, иптәш Сталин.

-- Вәт быныңһы – минеңсә. Һеҙ – ысын коммунист.

-- Хушығыҙ, иптәш Сталин.

-- Сабыр итегеҙ. – Телефондың ҡуласаһын шағырлатып әйләндерҙе, сымдың арғы оскаһына өндәште. – Иптәш Диманштейн, Силәбенән килгән Цвиллинг һиндәме? Йәһәт кенә икәүләшеп инегеҙ әле. – Трубканы урынына ҡаптырып, аңлатты. – Росияның милләттәр мәсьәләһендә соҡсоноп күҙе сығҡан, буғашаған ярҙамсым, Диманштейн иптәште әйтәм.

Саҡырылғандар эйәртенешеп килеп инде – бая күргән Троцкий иптәш кеүек үк, ҙур кәкере танаулы, ҡалын бөҙрә сәсле урта йәштәрҙәге кешеләр ине. Тик Диманштейн тигәненең түбәһе сынаяҡ тәрлинкәһе яҫылыҡ ялтырай.

-- Самуил Моисеевич, Соломон Моисеевич, таныш булығыҙ. – Тороп баҫҡан Сәлимйәнгә күрһәтте. Мырҙағолатов иптәш, фронттан; Урал зонаһында эшләй башлаясаҡ окоп большевигы.

-- Башҡортмо, татармы? – Диманштейн күҙгә текләне.

-- Башҡорт.

-- Һем... автономист икәнең күренеп тора.

-- Совет автономисы.

-- Аңлашыла, аңлашыла. Ләкин унда автономизм идеяһын коммунистар түгел, ә буржуазия эйәрләгән.

-- Сөнки башҡорт коммунистары бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

-- Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, Самуил Моисеевич? – Сталин төтөн бормаслатҡан төрөпкәһенең осон Цвиллингка тоҫҡаны.

-- Беҙҙә 1910 йылдан бирелә партия ағзаһы Шәмиғолов, уның шәкерте Нуриманов бар, тәүгеһе минең ышаныслы ярҙамсым. Беҙ ундай хәрәкәтте, кем генә етәкләһә ләбер, пролетариат революцияһы өсөн ифрат зыянлыҡлы һанайбыҙ.

-- Ләкин ул хәрәкәт һеҙҙән башҡа йәйелә, башҡорт буржуазияһы, танырға кәрәк, гегемонға әүерелеп, башҡорт массаларының башында бара, -- тыныс ҡына киҫәтте ялтас түбәле.

-- Беҙ уны бер һелтәнеүҙә киҫеп ташлarбыҙ.

-- Бик ҡиммәткә төшмәҫме?

-- Әйткәндәй, һеҙ киҫәсәк ул баштар араһында тап беҙҙең партия ағзаһы... кем әле...

-- Манатов, Иосиф Виссарионович. – Диманштейн ярҙамға килде.

-- Эйе, Манатов та бар, тиҙәр, түгелме?

Цвиллингтың сикәләре ҡыҙышты:

-- Шул уҡ йәшерен буржуаз милләтсе-автономист – һарыҡ тирәһе ябынған бүре ул. Бүреләрҙе һарыҡтарға яҡын юлатмаҫҡа кәрәк -- башына етеп булһа ла арынырға! Был мәсьәләлә Бухарин иптәш яҡлыбыҙ.

Сталин, төрөпкәһен сытырлатҡансы тартып, түшәмгә ыҫын өрҙө:

-- Бухаринды беләбеҙ. Ләкин һеҙҙең үҙ башығыҙ ҡайҙа һуң? – Ә, Самуил Моисеевич?

-- Һағыҙаҡ ояһылай ҡайнаған Башҡортостан мөхитендә ҡаты ҡул ғына кәрәк.

-- Тотҡан тоштан үк һындырып бармағыҙ әле, Самуил Моисеевич! – Диманштейн ҡорҙашының иңбашына әшнәләрсә ҡулын һалды. Сталин, төтөнлө төрөпкәһен усында йомған килеш иҙән буйлап йөрөштөрөп алды ла, ҡырт-боролоп өндәште:

-- Ә бына һалдат шинеле кейгән башҡорт коммунисы ни әйтер әле? Мырҙағолатов иптәш, һүҙ – һеҙгә.

Сәлимйән тулҡынланыуын йәшермәне:

-- Цвиллинг иптәштең үтә ҡырҡыулығы менән килешеп етмәйем. Дүрт йыл буйы окоптарҙа ҡаңғырһам да, илдән айырылманым, һулышын тойоп йөрөнөм. Цвиллинг иптәш атаған буржуазия бүреләре артында бөгөн оло көс тора -- ғәйәрлеге ҡанына һеңгән ике миллионлыҡ халыҡ массаһы. Ул, үҙегеҙ үк таныуығыҙса, автономия һорай, милли буржуазия шул идеяны бик оҫта файҙалана. Ләкин был идея улар тарафынан түгел, ә беҙҙең аша бойомға ашырылырға тейеш ине, сөнки партиябыҙ йыйындарында ҡабул ҡылынған резолюцияларҙа милләттәрҙең үҙ билдәләнешкә хоҡуғы асыҡ раҫланған, быны халыҡҡа арымай-талмай илтеп еткереү лазым. Бына мине, ябай башҡорт балаһын, арбаған коммунизм идеялары башҡаларҙы ла бик тиҙ яулар. Самуил Моисеевичҡа мин шуны әйткем килә: бүрене үлтерһәк тә, милләтте үлтереп булмай, яман ҡанҡойош китәсәк. Иң яҡшыһы – массаларҙы үҙ идеяларыбыҙға инандырып, буржуазияны хәрәкәт башынан тыныс сәйәси саралар ярҙамында олаҡтырырға; етәкселек теҙгенен үҙ ҡулыбыҙға көрмәп алып, Совет Рәсәйе эсендәге Совет автономияһын төҙөргә. Башҡортостандағы хәҙерге юлбашсылыҡ, минеңсә, әгәр белеп эш итһәк, Керенский артынса уҡ ауасаҡ.

-- Логично. Бухаринсылар күпме генә маташмаһын, беләбеҙ: хәҙерге һәм яҡын алдағы шарттарҙа иң оптималь сара был, -- тине Диманштейн. – Күп милләтле Россияла башҡаса мөмкин түгел. Цвиллинг иптәш тә, бәлки, үҙ ҡарашын үҙгәртер...

-- Артына ут ҡапҡас... – тип хихылданы Сталин. Цвиллинг ишеккә ыңғайланы:

-- Ҡапмаҫ, һүндерербеҙ!

-- Һүндерешергә ҡалһа, Шәмиғоловто ғына түгел, Мырҙағолатовты ла саҡырығыҙ. Ул Ырымбурға китә.

-- Уныһына ҡаршы түгел.

Сталинға шуныһы мәғлүм ине: Иҙел – Урал төбәгендәге башҡорт автономияһы мәсьәләһе көн үҙәгенә ҡалҡып, уның тирәһендә ҡапма-ҡаршы ике көс тартҡылаша, шуларҙың теҙген остарын бер ҡулда ныҡ бөрөп тотоп уйнатырға...

Иҙел -- Урал мосолмандары араһында революцион эште ни рәүешле йәйелдерергә Цвиллинг иптәш менән арыу ғына килешеп, Мырҙағолатов Ҡазан вокзалына төштө -- йөрәк өҙгөс һағынылған тыуған илгә йәне-тәне менән тартыла ине. Вагонда аслы-туҡлы йоҡлап барғанында беренсе төндә үк һағыныслы төш күрҙе: оҙон-һары ҡуш толомло, көндәй яҡты йөҙлө, аяҙ күктәй зәңгәр күҙле мөғәллимә Гөлсәсәге...

2

Дүрт йыл буйына тубыҡтан ҡан кисеп йөрөп тыуған илен, яҡындарын күрергә өмөтө өҙөлә яҙған егерме алты йәшлек егет ошо 1917 йылдың ҡырыҫ көҙөндә поездары тейешенсә йөрөмәгән аҙаплы тимер юлдан, Ырымбурға туҡталмайынса үтеп, Һарыҡташ станцияһы аша Воздвиженский (Эйек тамағы) разъезына килеп төштө. Тоҙланып һәм уңып бөткән һалдат биштәрен (арҡа ҡапсығын) артҡан килеш Һаҡмар күперенән сығып, баш яҡ башҡорттары һәм дә Перовский атсапҡындары гиҙеп йөрөп таҡырайтҡан түтә юлдан Петровское (Кершәнник) яғына ыңғайлағас, арттан ылау ҡыуып етеп арбаға ултыртып алды – үҙҙәренең ауыл ҡарты; кескәй генә кибет асҡан да Тоҙтүбәнән киҫәкле тоҙ тейәп ҡайтып бара имеш. Ил хәлдәрен һорашҡас:

-- Бөтмәҫтәй ҙә һуғыш булды – күҙ терәр ир-ат ҡалманы. Көнкүрештә көрсөккә терәлдек тамам: тоҙ ҙа, шырпы ла, кәрәсин дә, һабын да юҡ – ҡарама көлөнән һелте яһап йыуынабыҙ. Ә ситса-маҙар тураһында әйтеп тә тормайым. Баҫыуҙарҙы ҡарағура баҫты, тере мал һаны кәмене, сөнки ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-сағанан ғәйре эшләр кеше юҡ... – тип зарланып барҙы. – Һуғыштың тәүге йылдарында батша хәҙрәттәре һалдатҡа алынғандарҙың “һалдатка” тип исемләнмеш ҡатындарына айҙыҡын-айға аҙ булһа ла аҡсалата өлөш сығара ине, был иһә йәш һалдаткаларыбыҙҙы аҙҙырҙы: аҡса алғандары һайын, Кершәнниктән урыҫ хәмере ҡайтартып, йыйылышып эсәләр ҙә:

Кершәнниктең баҡсаһы,
Баҡсаһында мунсаһы.
Үлмәһен дә, ҡайтмаһын да –
Килеп торһон аҡсаһы! –

тип таҡмаҡлап бейейҙәр ҙә илайҙар...

-- Ирҙәрен һағыналарҙыр... – Сәлимйәндең, ҡанға батып үлеп ҡалыусы окопташтарын хәтерләп, йөрәге сымырланы.

-- Уныһы шулай инде. Күптәре тол ҡалып илаша, һалдатка аҡсаһы түләүҙәре ләә әллә ҡасан уҡ онотолдо. Һуғыштан фәкәт йә аяҡһыҙ, йә ҡулһыҙ булып ҡайталар. Йәнәлидтәр күбәйҙе... Хәйер, быйыл февраль селләһендә ниндәйҙер һоро сәкмәнлеләр Петербурҙа Николай батшаны тәхетенән ҡолатҡандар икән, тип ишеткәйнек...

-- Ул һоро сәкмәнлеләр – бына беҙ булабыҙ инде ул, -- тип көлдө Сәлимйән, шинеленә төртөп күрһәтеп.

-- Шулайҙыр, сөнки шунан һуң донъялар тағы буталып, Рәсәйҙә тәртип бөтөп, ошо һинең һымаҡ уҡ, фронттан дезиртир ҡайтыусылар йышайҙы, хатта ҡоралдары менән...

-- Һе! Ундайҙар ни ҡыла һуң?

-- Болғаталар. Керенский тигән яңы батшаны ла түңкәрергә, һуғышты туҡтатырға, сөйәлле ҡулдар хөкүмәте төҙөргә, тип тамаҡ яралар. Уныһы ла булмаҫ тимә -- Петербурҙы әллә ниндәй ҡара сәкмәнлеләр айҡай, ти, бит тағы.

-- Хаҡ һүҙ. Ҡара сәкмәнлеләр тигәнең – ҡара бушлатлы матростар ул, олатай.

-- Керенскийҙы ла ауҙарһалар, тәхетендә ниндәй сөйәлле ҡул ҡалыр?

-- Силәккә ҡапҡас табылыр – силәге генә булһын!

-- Сөйәлле ҡул урынына герман кайзеры ултырмаһа ярай ҙа...

-- Ҡайғырма, Рәсәйҙең үҙ кайзерҙары етерлек.

-- Ләхәүәллә-ҡеүәтә! Беҙҙә ләә донъялар болғансыҡ: урыҫтар – бер яҡҡа, татарҙар -- икенсе яҡҡа, ә беҙ үҙебеҙҙең яҡҡа тартабыҙ.

-- Һуңғыһын нисек аңларға?

-- Батырға ла йән кәрәк, килмешәктәр касафатына күпме түҙергә була? Баҡса эйәһе – түтәлһеҙ, үгеҙ эйәһе – күтәнһеҙ, тигәндәй, аҫаба ерҙәребеҙ таланып бөтөп, ус яҫыһындай тау-таш араһында ултырып ҡалдыҡ. Башҡорт мәнфәғәттәрен ҡайғыртырға, тип, быйыл йәйгеһен Ырымбурҙа йыйылған Икенсе ҡоролтайға мине ләә делегат итеп ебәргәйнеләр, шунда мәсьәлә ҡабырғаһы менән ҡуйылып, Башҡортостан тупрағында үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ хәл итерлек милли-тупраҡлы мөхтәриәт төҙөү өсөн ең һыҙғанып эш башларға ҡарар ҡабул ҡылынды, барлығы ун ике инсандан хасил идаралыҡ – Башҡорт Мәркәз Шураһы һайланды, уның рәйесе – ялан-ҡатай Шәриф Манатов, урынбаҫары – юрматы Әхмәтзәкир Йәлитов, малиә эштәре бүлеге мөдире – мәрхүм Мөхәммәткамал ахун хәҙрәттең кинйәһе Фатих Дәүләтшин, сәркәтибе Шаһизада Бәпес тигән мәшһүр шағирҙыр.

-- Ҡыҙыҡ! – Сәлимйән хатта устарын ыуып сәмләнде.

-- Нимәһе ҡыҙыҡ -- әллә таныштарыңмы?

-- Шулайыраҡ, олатай. Шәриф Манатовтан башҡаларын бик яҡындан күреп беләм, ә Манатовты минең менән фирҡәләш тип ишеттем.

-- Әләйһә, улым, анауы арҡаңдағылай буш ҡапсыҡ түгел икәнһең – ауылға берәй файҙаң тейер?..

-- Эй олатай, файҙа һәр кемдең үҙенән тора лаһа ул.

Бөтәһе ләә йөрәк һыҙлатҡыс таныш та, һәм таныш түгел дә ауыл...

Буралары ҡыйшайып, нигеҙҙәре сүгә төшкән атай йортона ҡара таңда арт ҡапҡанан барып керҙе. Йөрәккәйен сығып китерҙәй ырғылдыртып ҡыуандырғаны – ситән ҡура ышығында уны аяҡ атлауынан уҡ танып һулығып кешнәгән Шүлгән йылҡыһы тоҡомло Ҡантураттың ихлас тәбриге булды. Биштәрен баҡана тарбағына элеп ҡалдырып, ҡураға атлығып инде лә ҡараңғыла ике күҙе ҡуҙҙай мөлдөрәп торған һөйөклөһөн тығыҙ яллы ҡайнар муйынынан ҡуш ҡуллап ҡосаҡланы, сикәләрен яндырып йәштәре ағылыуын да һиҙмәне:

-- Йән киҫәгем Ҡантуратым минең, Ҡантуратҡайым минең! – Кеҫә төбөндә тумарлап йөрөп шымарған, ҡарайып ҡатҡан шәкәр ярсығын һиҙгер бәрхәт иренле ат ауыҙына ҡаптырҙы, тегеһе, башын сайҡап, шаҡырлатып сәйнәне. – Иҫән-һау ғына торҙоңмо, мине онотманыңмы ни, Ҡантуратҡайым минең, туйҙырыусым минең, тоғро дуҫҡайым минең! – Яңғыҙ атлы ерекмән йортоноң бар яҙмышын үҙ муйынына йөкмәгән һиҙгер йөрәкле һәм аҡыллы йән эйәһенең эҫе сикәһенә сикәһен баҫты, ат менән ерекмән күҙ йәштәре икеһе бергә буталды; бер йыл үтер-үтмәҫтән ат эйәрләнеп, ир-егет ҡоралланып, граждандар һуғышына ҡыҙыл ғәскәр булып китәсәктәрен, чехословак фетнәселәренә ҡаршы һуғышта Ҡантураттың, ярһыу йөрәген йәҙрә ярсығы тишеп үтеп, ҡоҙғондарға аҙыҡ булып йығылып ҡаласағын, яраланған ир-егеттең госпиталдә шул ғәзиз Ҡантураты менән яман һаташып ятасағын икеһенең береһе лә белмәне ...

Атаһы Шәһәргәрәй ярты ҡарышҡа сүгеп, күҫе һаҡалы һәм сәсе ҡарҙай ағарған, кәүҙәһе лә ҡорошоп ҡатҡандай күренде. Әсәһе Шәрифә лә шаҡтай бирешһә лә, әүәлгесә бирешмәҫ тәбиғәтле, төҙ һынлы, ныҡ-баҙыҡ аҙымлы ине. Яуҙа юғалған яңғыҙ улдарының ҡәҙимгесә аяҡ-ҡуллы, баш-күҙле ҡайтып инеүенә ҡыуанып бөтә алмай, ҡайҙа ғына ултыртырға, ҡайһылай һыйларға белмәй өтәләнделәр.

-- Башкөлләйгәме инде, балаҡайым?

-- Белмәйем әле, әсәй, донъялар ҡайһы яҡҡа әйләнеп китер...

-- Ҡантуратың һағынып көттө үҙеңде – атайыңдың һабанға сығыр хәле юҡ...

-- Шулай ҙа бесән әҙерләй алғанһығыҙ.

-- Уныһын өмә итеп алдырттыҡ инде.

-- Инш-Алла, яғыр утыныбыҙ ҙа бар. – Һаҡалын һыпырғылап өҫтәне атай ҡарт. – Артабанғыһын Алла белә...

-- Баш һау булһа – башҡа бүрек табылыр -- әҙәмсә йәшәп китербеҙ. Орлоҡ бармы бурала?

-- Аҙыраҡ ҡына бар ҙа ул...

-- Күберәген дә табырбыҙ. Яҙ ғына етһен: Ҡантуратты егеп сығып, яланаяҡланып йөрөп бураҙналар ярырбыҙ. Өймәләмә тубалды муйынға аҫып, ҡолас киреп тос орлоҡтар сәсербеҙ.

Әсәһе зарланып алды:

-- Ҡартайҙыҡ, өй эштәре лә ҡыйын. Егәрле генә киленсәк алып ҡайтып, башлы-күҙле булһаң, ҡот ҡуныр ине йортҡа. – Яулығының мөйөшө менән күҙҙәрен һөрттө. – Үҙебеҙ күҙәтеп йөрөгән, бик уңған бер ҡыҙ ҙа бар – арыу нәҫелдән.

-- Хәҙер ҡыҙ-ҡырҡын аҙҙы; бик яҡшы ҡарап йөрөп, әсәйең әйтмешләй, нәҫел-нәсәбен тикшереп алырға кәрәк.

Һуңғы һүҙҙәр Сәлимйәнгә боҙ аҫтынан аҡҡан һыуҙай тоноҡланып ишетелде, сөнки, зәңгәр күҙле Гөлсәсәген иҫләүҙән һулышы ҡыҫылып, бераҙ өнһөҙ ҡалғандан һуң һораны:

-- Заманында мин уҡытып киткән мәктәп һаман гөрләп торамы, кемдәр эшләй?

-- Кемдәр, тип ни, аҡһап ҡайтҡан һыңар күҙле һалдат ҡына тырыштырған була шунда – үҙебеҙҙә кеше юҡлыҡтан, земствонан ебәргәйнеләр. Мәктәбебеҙ ҙә, түбәһе сереп, емерелергә тора. Мөғәллимә Гөлсәсәк менән һин эшләгән заманалар ҡайҙа инде ул хәҙер...

Сәлимйән, зиһенен кем һүреп иҫәнгерәтеүен белдерергә ҡыймайынса, башын эйеп тәрән уйға батҡан килеш тыңланы, ата-әсәһенең һүҙҙәре һаман әллә ҡайҙан алыҫтан килде:

-- Бала-саға ҡара наҙан ҡалмаһа ярар ине...

-- Земствоға күпме генә мөрәжәғәт ҡылһаҡ та, мөғәллимдәр һуғышҡа китеп бөттө, ә мөғәллимәләр етешмәй; Орскиҙа курс астыҡ, шунда уҡытып сығарғас, берәйһен ебәрербеҙ, тип яуап ҡайтаралар.

-- Гөлсәсәк кеүек мөғәллимә булмаҫ инде ул...

Сәлимйән, тертләп, башын ҡалҡытты:

-- Гөлсәсәккә ни булған? Ҡайҙа ул?

-- Күпме көтһөн... һыуға батҡандай китеп юғалдың бит, балам...

-- Бынан ике йыл элек, ҡайҙалыр бөрйән башҡорттары араһында уҡыта, кейәүгә сыҡҡан, тип ишеткәйнек...

Сәлимйәндең һулышы киҫелде, йөрәге өҙөлөп төшөрҙәй һыҙланы – Гөлсәсәге мәңгелеккә юҡ, тимәк...

Ләкин һөйөклөһө уға шул тәүлектең төнөндә үк төшөнә килеп керҙе.

Бер ниндәй ҙә һуғыш та, айырылышыуҙар ҙа булмаған. Икеһенең, күҙҙәре күҙҙәрҙән китмәй, йөрәктәре ҡанатланып, мәктәптә балалар уҡытып йөрөгән сағы. Яҙғы ялт-аяҙ ял көнө. Яңы заман мәғарифы ҡушҡанса, уҡыусыларын жағрафия дәресе буйынса йәмле тәбиғәт ҡосағына экскурсияға алып сыҡҡандар.

Кәкүк саҡрыуҙары тынмай күкелдәп ғүмер һанаған хуш еҫле әрәмәлектә ҡарҙай ап-аҡ муйыл сәскәләре ботаҡтарын күбекләнеп япҡан мәл... Сәскәнән-сәскәгә ҡунып осҡан наҙлы күбәләктәрҙәй, ҡуҫҡыл үлән араһында балалар сыр-сыу ҡубып ырғып-һикерә, шуларҙы ҡарап хозурланып торалар. Йөрәктәрҙә быуып тыйылғыһыҙ дәрт, күңел тулы әйтеп бөткөһөҙ наҙ ғына... Икеһе хас та сабыйҙарҙай етәкләшеп, көлөшә-көлөшә, үлән кисеп барҙылар ҙа ҡояш һарыһы мылҡып торған түңәрәк аҡланға сыҡтылар, шәкәр кеүек ап-аҡ олонло ҡайын төбөндә туҡталдылар. Сәлимйән ҡыҙҙы кинәт ҡосағына ҡыҫты; Гөлсәсәк, күкелдәүсе бер кәкүкте тирбәлдергән ботағынан өшкөтөп, һауа сыңратып көлдө, яғымлы-йомшаҡ беләктәрен уның муйынына ураltты, төпһөҙ зәңгәр күҙҙәрен күҙҙәренә төбәне; шаян ел ҡыҙҙың арыш һаламылай һары маңлай сәсен бороп килтереп, егеттең сөм-ҡара маңлай сәсенә симәлдерҙе, икеһенең дә биттәрен ҡытыҡлап иркәләне; ә ялҡынлы ирендәре бик тә һаҡ, бик тә яй, бик тә ләззәтле

көйҙөрөп бер-береһенә яҡынланы... Тик шул һуштан ҡалырҙай татлы мәлдә генә Сәлимйәндең ирендәре көтмәгәндә боҙло-тәмһеҙ тимер һалҡынлығы тойоп, башы артҡа салҡайҙы, Гөлсәсәк тә оҫкандай юҡҡа сыҡты; һалҡын уҫаллығы менән ҡара янған яҫы һағаҡлы балта, икеһенең араһынан жыйлап үтеп, аҡ ҡайынға сабылды... һәм әсенеп, йөрәге ярылып ҡысҡырған Сәлимйән төшөнән тертләп уянып күҙҙәрен асты, үҙенең ҡаҡ һикелә -- ата йортонда ятҡанлығын көскә шәйләне. Араларын киҫкән яһил балта уның күҙҙәрендә мөһөрләнеп ҡалғайны...

Иртәнге сәй эскәндә ләбатаһы ҡарт кисәге бүленеп ҡалғандарын дауамланы:

-- Мәғрифәт усағы һүнгән ауыл ул, улым, киләсәге һүнгән ауыл. Ә һин бит атаҡлы Дәүләтшиндың мәҙрәсәһен бөткән зыялы мөғәллим...

-- Ярар, уҡытырмын, саҡ ҡына баш-күҙ алайым. Ил төкөрһә күл була, тигәндәй, күмәкләшеп бура күтәреп, бинаһын да яңыртырбыҙ.

-- Инш-Алла, бирһен Хоҙай.

-- Тик тәүҙә Ырымбурға, шунан өйәҙ ҡалабыҙ Орскиға барып йомошлайһым бар.

-- Тағы китәһеңме ни инде? – тип һыҡтанды әсәһе.

-- Етәр, шыңшыма! – Ҡоро тотто атай ҡарт. – Һалдаттың явитсе итеү бурысы барҙыр – башҡалар кеүек дезертир булып ҡайтмаған бит. Ни тиһәң дә, һуғыш ваҡыты.

-- Хоҙайым, был донъя ҡасан күсәренә ултырыр? Илдә иген ҡалманы, мал бөттө. Өҫтәүенә, анауы Столыпин тигәндәренең шойҡаны...

-- Үлде бит инде ул, әсәй, үлтерҙеләр...

-- Туда ему дорога! Тик, суртан үҙе үлһә лә, теше үлмәй: тирә-яҡ урыҫтары оторо яһилланды.

-- Дөрөҫ әйтә әсәйең. Воронеж, Рязань яҡтарынан күсереп килтереп, тәнебеҙгә шырау итеп ҡаҙаған бәғзе ҡәүемдәр, "тәпир нам свобода!" тип, сабын-лыҡтарыбыҙҙы талап саба, урмандарыбыҙҙы ҡырҡып ҡорота, баҫыуҙарыбыҙҙы малдан тапата. Ҡортомға биргән ерҙәребеҙ өсөн һуҡыр тин дә түләмәй. "Башҡорт бөтөргә тейеш!" – тип лаф оралар.

-- Шулай шул. Шөкәрә утарындағы Василий ызнакумыбыҙҙы беләһең бит, улым?

-- Белмәй ни, атһыҙ урыҫ ине. Ҡышҡыһын рождество байрамдарында бала-сағаһын санаға тейәп йөрөтөп күңелдәрен астыртырға беҙҙең Ҡантуратты һорап алып ҡайтып китә торғайны.

-- Бына шуның ҡарсығын осратҡайным Кершәнник баҙарында. Башы-күҙе аҡырайып яһилланған: "Һин, ҡәҙерле ызнакумка, эш уҙмаҫ борон суҡынып, урыҫса яҙылып ҡал. Башҡорт тиҙҙән бөтәсәк, бөтмәһә -- бөтөрәсәкбеҙ; ер-һыуҙары беҙгә, христиандарға, ҡаласаҡ, килде свобода!" – ти. Йылайыр урыҫтары башҡорт ауылдарына барымта яһай башлаған. Барымтаға ҡарымта китһә -- нишләрбеҙ?

-- Уныһы булмаҫ та ул, әсәй. Урыҫтың да башы бар, үҙ башы үҙенә ғәзиз.

-- Һин, әсәһе, шаштырма! Башҡорттоң тамыры тәрән. 1912 йыл Туҡай ҙа, Өфөгә килеп киткәс, суҡынырға ҡушмаһа ла, тап ана шулай яҙғайны. Әммә башҡорт йәшәне, йәшәй, йәшәр!

-- Ошо болғансыҡ ваҡытта башһыҙҙар күбәйҙе шул.

-- Ләкин башлылар ҙа етерлек, әсәһе. – Улына әйләнеп ҡарап әшкәртте. – Бөгөн берҙән-бер төп таяныс – Ырымбур, Каруанһарайҙан эш йөрөткән Башҡорт Мәркәз Шураһы, ишеткәнһеңдер. Ысын уҙамандар һайланған унда, араларында үҙеңдең һуғыштағы дуҫың Ғәлиәхмәт Айытбаев та бар.

-- Бына нисек! Уныһын ҡайҙан белдең?

-- Ауылына ҡайтышлайы беҙгә һуғылып, бер кис ҡунып, хәлдәреңде һөйләп киткәйне. Икебеҙ тиң коммунистар фирҡәһенә ылығып, ысын бәлшәүик булдыҡ, аҡ батшаны ауҙарыштыҡ, тигәйне. Шул ысынмы?

-- Ғәлиәхмәт юҡты һөйләмәҫ, атай.

-- Әләйһә, бәлшәүик кем дә коммунист кем ул?

-- Икеһе лә бер, тип әйтерлек, атай. Иҙелгән халыҡ мәнфәғәттәренә зерә тоғролоҡлораҡ, ҡыйыуыраҡ көрәшсе була ул большевик.

-- Башҡорт Мәркәз Шураһының рәйесе Шәриф Манатов кеүекме?

-- Уны мин яҡындан белмәйем, әммә Петербурҙа Ульянов -- Ленин иптәш етәкләгән яугир фирҡәнең ағзаһымын, шуға күрә большевикмын, тип әйтһәм дөрөҫ булыр. Бөтә Рәсәй халыҡтарын, шул иҫәптән башҡортто ла, бөгөнгө афәтле тормоштан шул фирҡә генә ҡотҡарасаҡ.

Атай ҡарт елкәһен тырнаны:

-- Ай-һай, алыҫ Битирбурҙан тороп белерҙәрме беҙҙең хәлде? Аҡ батша ла белмәне. Бабалары ҡул ҡуйған шартнамәләрҙе боҙоп, ярлы башҡортто үлем хәленә килтереп еткерҙе.

-- Ярлы башҡорт хәлен беҙ, бындағы башҡорт большевиктары, яҡшы белә. Һәм беҙ бөтә Башҡортостанда башҡорт ярлы-ялпыларының Совет хакимиәтен урынлаштырып, халыҡҡа ысын хөрриәт бирәсәкбеҙ.

-- Ни тигән һүҙ ул Совет?

-- Шул уҡ Шура ул.

-- Әләйгәс, Каруанһарайҙағы Шәриф Манатов һин әйткән ул Ульянов -- Ленин менән фекерҙәш икән – ул да башҡорт шуралары төҙөй бит.

-- Ләкин беҙҙең шуралар бер башҡорттоҡо ғына түгел, ә Башҡортостанда йәшәгән барлыҡ милләттәрҙеке буласаҡ.

-- Ай-һай, улым, ҡырҡҡа бүленгән бөтөн икмәкте ҡабат йәбештереп-бөтөнәйтеп булырмы икән?..

Сәлимйән өндәшмәне. Өйберенсә, тигәндәй, йөрөп ауылдаштарының хәлен белгәс, Ҡантуратын эйәрләп, тирә-яҡты, шул иҫәптән урыҫ араларын, көнкүреш һәм сәйәси һулыш йәһәтенән барлап ҡыҙырҙы – ҡайҙа ла шул бер тын алыш... һамҫып ятмаҫҡа кәрәк!

Һарыҡташ тимер юл станцияһынаса илтеп ҡуйырға бер ылаусыны яллап (атай ҡарт сирләп тора), таң һарыһынан биштәрен тотоп сыҡҡас, Ҡантураты янына инеп хушлашыуҙан тыйылды – китеүе оҙаҡҡа булмаһын. Ләкин оҙаҡ юғалып тороп пәйҙә булмыш йәш хужаһын күреп туймаған арғымаҡ ситән аҙбарҙан оҙон итеп кешнәп ҡалды.

3

Каруанһарайлы ҡалабыҙҙа Әхмәт бай ҡунаҡханаһының аҫҡы ҡаттағы арзан бүлмәһенә урынлашып, саҡ ҡына баш-күҙ алғас, тимер юл мастерскойҙарында эшселәр араһында юллап тапты партияһының урындағы етәксеһе Александр Алексеевич Коростелев иптәште. Үҙенән күп булһа ике-өс йәшкә өлкәнерәк, ләкин 1905 йылдан уҡ партия ағзаһы, 1905 – 1907 йылдарҙа Самаралағы ҡораллы көрәштә әүҙем ҡатнашҡан; ҡуҙғалыш баҫтырылғандан һуң батша жандармерияһынан оҙаҡ ҡына боҫоп йөрөп, 1910 йылда ялған исем менән ошонда килеп, эшселәр араһында тәүҙә -- йәшерен рәүештә, ә Февраль революцияһынан һуң Ульянов -- Ленин иптәш менән Троцкий иптәш ут сағып дөрләткән пролетариат революцияһы хаҡына асыҡтан-асыҡ сәйәси эш алып барыусы ине ул. Теге саҡта Смольныйҙа Троцкий иптәш үҙенә атап яҙып биргән хитапнамәгә күҙ йөрөткәс, мастерской ыҫына ҡаткан ҡырыҫ йөҙө яҡтыра төшөп, “окоп большевигы” менән ихлас асылып һөйләште.

-- Самаранан уҡ башҡорттарҙы яҡшы беләм; мәҫәлән, 1905 йылда уҡ минең менән бергә партия билеттары алған ағалы-энеле Ғәбйәлиловтар[45] бар ине – бөгөн башҡорт массаларын ағыулаған милләтселек сиренән азат ысын пролетариаттар ине...

“Милләтселек” тигәне һағайтты Сәлимйәнде:

-- “Сир” тигәндән нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ? – Фирҡәләшенең күҙенә тура төбәлде.

-- Кешене, синфи сығышына ҡарап түгел, ә милли сығышы буйынса туплаусы – пролетариат революцияһына ҙур зыян килтереүсе буржуаз идеяны. Каруан-һарайға оялаған башҡорт милләтселәре күтәреп сыҡты уны.

-- Белеүемсә, Каруанһарайҙағы Шура – һеҙ үҙегеҙ етәкләгән Ырымбур Советы һымаҡ уҡ, халыҡ һайлаған Совет, ни бары милли колоритлы Башҡорт Советы лаһа. Әллә “шура” һүҙен аңламайһығыҙмы, шул уҡ “совет” бит ул.

-- Советын совет та, ләкин ярамаған Совет. Башҡорттарға *ерле* автономия даулап боғаҙ яралар. Нацмендарға *мәҙәни* автономия биреү тураһында һүҙ алып барырға мөмкин, ләкин *ерле* автономияға ҡырҡа ҡаршыбыҙ, сөнки ул бөйөк Россияны бүлгесләүгә, тарҡатыуға килтерәсәк. Бөтәһенән элек *синфи* принцип өҫтөнлөк итергә тейеш, ә *милли* хис – икенсе йәки иң һуңғы урында. Үҙен коммунист һанаған һәр кем, милли сығышын ситкә этәреп, синфи принциптарға таянып эшләргә бурыслы, беләһегеҙҙер. “Бөтә хакимиәт – Советтарға!” тигән бөгөнгө төп лозунгыбыҙ йөкмәткеһен дә тап ана шулай күрәбеҙ.

-- Килешәм. Иң элек бөтә Россияла, ә айырым алғанда Башҡортостанда, Советтарҙың хакимиәтен урынлаштырырға, ә ҡалғаны шунан һуң хәл ителәсәк. Һәм мин уйлайым, Россияның барлыҡ милләттәре өсөн дә ыңғай хәл ителәсәк. Бында мин партиябыҙҙың быйылғы етенсе Бөтә Россия конференцияһының “Милли мәсьәлә буйынса” резолюцияһын күҙ уңында тотам. – Шинеленең эске кеҫәһенән коленкор тышлы, ус яҫыһындай дәфтәр тартып сығарҙы. – Беләһегеҙ, аҡҡа ҡара менән хатта бына нимә яҙылған унда: “За всеми нациями, входящими в

[45] Ғәбйәлиловтар – 1921 йылда Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республикаһына ҡаршы хәҙерге Ырымбур өлкәһендә ҡораллы фетнә ойоштороған һәм Муса Мортазин тарафынан баҫтырылып ҡулға алынған ағалы-энелеләр.

состав России, должно быть признано право на свободное отделение и на образование смостоятельного государства”...

Ырымбур большевигының сыра йы сытырайҙы:

-- Документтың бер пунктын ғына башҡа өлөштәренән йолоп алмағыҙ. Белеүегеҙсә, артабанырағ ифрат дөрөҫ юрау бар: “Вопрос о праве наций на свободное отделение непозволительно смешивать с вопросом о целесообразности отделения той или другой нации *в тот или иной момент”.* – Һуңғы һүҙҙәр Коростелев тарафынан айырым баҫым аҫтына ҡуйып әйтелде. – Тап беҙҙең төбәк һәм шарттарға тап килә был! В данный момент никому не позволим играть с огнем!

Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: милли яҡтан бербөтөн, гранит һымаҡ нық-монолит партиябыҙ етәкселегендәге Советтар төрлө милли өйҙәргә бүленә аламы? Каруанһарайҙағы һөрһөп бөткән буржуаз милләтселәр берәгәй һәм бүленмәҫ Россияны милли йорттарға бүлгесләп тарҡатырға йыйына!

-- Берәгәй һәм бүленмәҫ Россия, тигәнегеҙҙән мәрхүм батша самодержавиеһының төп лозунгыһын хәтерләттегеҙ әле, ғәфү итегеҙ... Һеҙ әйткән ул милләтселәр, минең яшы белеүемсә, ватаныбыҙ Рәсәйҙән айырылып сығырға йәки уны бүгесләргә һис тә йыйынмай, ә күп милләтле Россияла хәленән килгән һәр милләттең ошо Россия эсендә үк үҙ өйөн, үҙ ғаиләһен ҡороп йәшәргә хаҡы барлығын даулай. Һәр хәлдә, уларҙың сәйәси документтарында шунан башҡаны күрмәнем.

Коростелев, күҙҙәрен уҫал ҡыҫып, ҡаты ҡарашын тимерлектәге һандал аҫтынан сирғыған ярсыҡтай ҡаҙаны:

-- Тимәк, һеҙ ҙә, Шәриф Манатов кеүек, шулар арбаһына ултырып йырлай-һығыҙ? Ниңә тәғәйен *ерле* автономия? Татарҙар юллаған *мәҙәни* автономия етмәйме?!

-- Башҡорт һәм татар аңы, тәбиғәте берҙәй түгел шул, Александр Алексеевич. Башҡорт өсөн ер – уның милли өйө, халҡының ғаилә усағы. Башҡорт бит ул кеше өйөнә йәки дөйөм баракка инеп һыйына алмай. Ул тәғәйен үҙенең милли өйөндә, башҡаларҙың милли өйҙәре менән берлектә бер ауыл йәғни буласаҡ Россия федерацияһының үҙенә күрә үҙ аллы бер штаты булып йәшәргә ниәтләнә. Ҡабатлап әйтәм, бөйөк Россия ҡанаты аҫтында! Беҙгә хәҙер мәсьәләне ҡырҡылаштырырға ярамай. Халыҡ үҙе юғары сөйгән автономия идеяһын беҙ, коммунистар, иң элек үҙебеҙ күтәреп алмайынса, башҡаларға ирек ҡуйып, ауыҙ асып ҡалғанбыҙ икән – кисекмәҫтән хатаны төҙәтергә, әлеге тарихи факт менән иҫәпләшеп, уйлап эш итергә кәрәк. Минең белеүемсә, уларҙың Советтары асылда Россия Советтары өлгөһөнә эйәреп бара, тимәк, беҙҙең өсөн сәйәси ҡапҡа асыҡ – шунда үтеп инеп, коммунистик идеяларыбыҙ менән халыҡ аңын яулап алып, буржуазия эйәрләгән Советтарҙы коммунистик Советтар яһаһаҡ, теңкәгеҙгә тейгән буржуаз автономия ла ысын Совет автономияһына әйләнәсәк. Манатовтың Каруанһарайға төпләнеүен зыян итеп түгел, файҙа итеп ҡарайыҡ, һуңынан үҙегеҙ күрерһегеҙ.

-- Ҡарап ҡарарбыҙ... Дөрөҫөн әйткәндә, Лев Давидовичтың сәләме булмаһа, һеҙҙең менән һөйләшеп тә тормаҫ инем...

-- Аңлағыҙ мине, Александр Алексеевич, бер үк йөктө тартабыҙ бит!

-- Һеҙ ҙә мине аңлағыҙ. Беҙгә, коммунистарға, һис шикһеҙ, милли амбицияларҙы ситкә ҡуйып тороп, берҙәм тотоноу мотлаҡ. Ырымбурҙа хәҙер һағыҙаҡ ояһы, төрлө партиялар мыжғый: кадеттар, монархистар, уң һәм һул эсерҙар, меньшевиктар, центристар, максималистар һәм һәм башҡа сволочтар (һеҙҙеңсә әйткәндә, сыуалыштар)... Һәм шуларға тамырланып, ағыулы бәшмәктәрҙәй шытып сыҡҡан буржуаз ойошмалар: татарҙарҙың Милли шураһы һәм шуға бәйле Милли хәрби комитеты; казак Хәрби идаралығы, мосолман казактарының Үҙәк хәрби комитеты; Ҡала граждан комитеты. Үҙ ағыуы менән шуларҙы һутландырып, йәшәп ята, әлбиттә, Керенский буржуаз Ваҡытлы хөкүмәтенең комиссар Архангельский башлығындағы Губерна земская управаһы. Был ойошмаларҙың көллөһө лә буржуазия – капиталистар, алпауыттар һәм барлыҡ эксплуататор синыфтар яҡлы, бөтәһе лә пролетариат мәнфәғәттәренә ҡаршы; барыһы тиң "Тамам еңгәнгәсә!" лозунгыһы аҫтында империалистик һуғышты дауам иттереү тарафдарҙары. Әммә беҙҙең өсөн потенциаль ҡурҡыныс тыуҙырыусыһы – баяғыларҙан айырылыбыраҡ торған, үҙҙәрен ике миллионлыҡ башҡорт халҡының берҙән-бер ҡурсаусылары һанаған һәм шул йәһәттән аңһыҙ ялпы араһында абруй ҡаҙанып өлгөргән буржуаз Башҡорт Мәркәз Шураһы. Мин һеҙҙең менән Лев Давидовичтың фатихаһын алып килгән коммунист булараҡ ышанып һөйләшәм: беҙ ул автономистарға юл ҡуймаҫҡа, Россия нацмендары өсөн улар күрһәткән зарарлы өлгөнө яралғыһында уҡ юҡ итергә тейеш. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн төбәктә ыңғай шарттар тыуып тора.

-- Мәҫәлән?

-- Комиссар Архангельский ҙа, татарҙарҙың баяғы ойошмалары ла, улай ғына ла түгел, башҡорт монархистары ла, бер төптән, тип әйтерлек, Башҡорт Мәркәз Шураһына, уларҙың тупраҡлы милли автономия иғлан итәсәктәренә ҡырҡа ҡаршы сыҡтылар; улар ҙа был идеяны бишегендә үк быуып ташлау яғында. Быны беҙ иҫәпкә алып, үҙ файҙабыҙға хеҙмәт иттертергә тейеш. Тик шуныһы үкенес: ошо яуаплы моментта партиябыҙҙа башҡорттар исеменән оранларлыҡ башҡорт кадрҙары етешмәй (һеҙ ҡайтып шәп иттегеҙ әле!). Әммә беҙҙең идеялар, аҙлап булһа ла, күҙгә күренеп тарала, яңы шытымдар бирә.

-- Кемдәр бар таянырлыҡ? Башҡорттарҙан?

-- Партияға алырға тип Мартынов иптәш әҙерләп өлгөрткән ышаныслы бер егет – Бәхтегәрәй Шәфиев бар, ошондағы фельдшер-акушер мәктәбе уҡыусыһы, урыҫса грамоталы. Йәнә береһен мин үҙем яҡшы беләм – "Хөсәиниә" мәҙрәсәһенең урыҫ теле уҡытыусыһы, башҡорт казактарынан Ғабдулла Дәүләтшин.

-- Дәүләтшин?! – Сәлимйәндең ҡолағы ҡарп итеп ҡалды – зерә таныш фамилия!

-- Эйе, Дәүләтшин. Әйткәндәй, һеҙҙең Орски өйҙәнән. Сәйәси ҡарашы дөрөҫ, Каруанһарайҙағыларҙан ситтә тора, башкөлләй беҙҙең платформала... Ә татарҙарҙан, ваҡ буржуаз соуслы булһалар ҙа, бөгөнгө башҡорт мәсьәләһендә беҙгә теләктәш Мөхәммәтйән Таһиров һәм Шанил Ғосманов һәм уларҙың эрелеваҡлы эйәрсендәре – татар зыялылары бар. Сәйәси йәһәттән шыйығыраҡ һәм тайғаҡ булһалар ҙа, тыңлаусандар, иплеләр; һеҙҙең башҡорт әйтемендәгеләй,

әлеге моментта улар беҙҙең ҡурайға бейей. Тактик яҡтан шуларға ла таянырһығыҙ, берыңғай ҡҙҙәрен ысын большевик итеп тәрбиәләргеҙ... Ҡыҫҡаһы, тонйораған мосолмандар массаһын таяҡ тығып болғатыу һеҙҙең бурыс. Ә бөгөнгө лозунгы – "Бөтһөн империалистик һуғыш! Бөтә власть – Советтарға!"

-- Советтарға! – тине Сәлимйән. "Бер үк йөк"төбер ҙәм тартырға һүҙ ҡуйышып хушлаштылар.

4

Коростелев иптәш әшкәрткәндәй, мосолмандар араһында нығлап өгөт-нәсихәт эштәрен йәйелдереү өсөн, тәүҙә башҡорт милли буржуазияһының киләсәккә сәйәси ҡарашын, тотасаҡ юлын асығыраҡ аныҡларға кәрәк ине. 1917 йылдың 25 – 29 августында Өфөлә булып үткән II ҡоролтайҙа Башҡорт Мәркәз Шураһына үҙенең фирҡәдәше Шәриф Манатовтың һәм күптәнге яҡын таныштары Фатих Дәүләтшин менән Ғәлиәхмәт Айытбаевтың да һайланғанлығы үҙе үк һорап тора ине Каруанһарайға барыуҙы. Хәйер, хәрәкәттең идеологы Әхмәтзәкир Йәлитов та бынан байтаҡ йылдар элек Сәнкем-Биктимер ауылында осратҡан өс көнлөк танышы булып сыҡты.

Шинель салғыйҙарын ялпылдатҡан һалҡын елле октябрҙең иртәнге бер сулаһында тимер юл вокзалын тоташтырған оҙон урам буйынса йәйәүләп үтеп, тарихи бинаның бөгөнгө тарихи ваҡиғаларҙың үҙәгенә әүерелгән һул ҡанатына кергәндә, коридорҙарында умарта күселәй ҡайнашҡан кешеләре, шау-шоуҙары менән ул Сәлимйәнгә яңыраҡ ҡына үҙе күреп ҡайтҡан Петроград Смольныйын хәтерләтте.

Ишектәрҙә яҙыу-фәлән юҡ ине. Һораша-һораша тарыған Мәркәз Шура рәйесе бүлмәһендә лә байтаҡ ир-ат өйкөлөшөп, теңкәләренә тейгән Ваҡытлы хөкүмәт комиссары Архангельскийҙы телдән төшөрмәй гөж килә. Өҫтәл артында ултырған, ҡуйы шоморт-ҡара сәсен уңға ҡайырып тараған матур ҡиәфәтле, яҡынса Сәлимйәндең йәшендәге башҡорт уға ҡуңыр күҙҙәрен тура төбәп, кемлеген һәм ни йомош менән килеүен һорағас, йылмайып: "Ишеткән бар ине һине, фронттан ҡайтҡан коммунист, ә мин Шәриф Манатов тигән кеше буламын, -- тип таныш-тырҙы. – Тик, үкенескә ҡаршы, әле генә иркенләп һөйләшеп ултырыр форсат юҡ – күрәһегеҙ бит: ҡорҙаштар менән сығып китергә генә тора инем – Архангельский хөсөтөнән баш ҡатҡан. – Туҙрап ятҡан ҡағыҙҙарын йыйыштыра башланы.

-- Ярай, күп тотҡарламам. Үҙебеҙҙең партия эштәре буйынса йөрөй инем...

-- Партия эштәре, тип ни... беҙҙә бер ниндәй ҙә партия юҡ әле. Урынбаҫарым Әхмәтзәкир Йәлитов әйтмешләй, беҙ – большевик та түгел, меньшевик та түгел, ә башҡорт.

-- Ә үҙең ни әйтерһең? Коммунист була тороп? Ошо Каруанһарайҙа ла партиябыҙҙың күҙәнәге эшләргә тейеш тәһә!

-- Тейеш тә бит... -- Тирә-яғына шикле ҡаранды, -- тик әлегә уның ваҡыты түгел. Киләсәк эше!

-- Ҡалған эшкә ҡар яуа, тигәндәй, ваҡыты түгел, тип ойоп йөрөп, киләсәкһеҙ ҡалмаһаҡ ярар ине...

-- Ойомайбыҙ, халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ изге хыялын бойомға ашырабыҙ – ерле автономия алырға ең һыҙғанып көрәшәбеҙ. Ләкин башҡорт түгелдәрҙең барыһы ла беҙгә ҡаршы...

-- Быға артыҡ ҡаршылыҡһыҙ, еңелерәк өлгәшер өсөн, Рәсәй коммунистары менән бер ыҙандан барырға, башҡорт коммунистарының ойошмаларын төҙөргә...

-- Әйттем бит: киләсәк эше! Тәүҙә Федератив Рәсәй штаты рәүешендәге автономиябыҙҙы иғлан итәйек, йоҡонан уянған милләтебеҙҙең барлыҡ көс-ҡеүәтен тик шуға арнайыҡ... Ярай, ғәфү ит – сығып китергә ваҡыт. Ҡалғанын урынбаҫарым аңлатып бирер. – Түҙемһеҙләнеп көтөп торған ҡорҙаштарына ылыҡты.

Оҙон коридор башындағы асыҡ тәҙрәнән тын алып торған Фатих Дәүләтшинды сырамһытып ҡына саҡ таныны: буйға һуйҙанланып, яурындары ҡалынайып, әүәлге ул күреп белгән сибек үҙмер йөҙөнә лы һыҙылып мыйыҡ сыҡҡан, күҙ ҡараштары үткерләнгән, әммә ҡиәфәте һаман сирләшкә-аҡһылт ине (бер йылдан һуң ул үпкә сиренән вафат). Ҡосаҡлашып күрештеләр:

-- Хай-хай, Фатих мәғзүм, кемде күрәм: финанс министры булып киткәнһең! Ә шулай ҙа онотмаған икәнһең дә мине!

-- Һе, нисек итеп онотайым: атайым мәрхүмдең иң яратҡан шәкертен!

-- Остазым да мәрхүм булып ҡуйған икән шул... йәне йәннәттә булһын инде. – Икәүләшеп доға ҡылдылар.

-- Шулай... Шәйләүемсә, фронттан ысҡынғанһың?

-- Башҡа ҡайҙан булһын инде...

-- Иҫке һоро шинель һаман өҫтөңдә...

-- Һин үҙең, мәғзүм, хәтәр ҡалын кейенгәнһең, әллә һаман ҡуйыныңа ел кереүенән ҡурҡаһыңмы? – Үткәндәрҙе йылмайып хәтерләне.

-- Шулай шул... – Ситкә боролоп, бер быуа йүтәлләне. -- Ә һинең батша буҫтауынан ел үтеп инә алмайҙыр?

-- Эйе, пүләнән башҡа бер нәмә лә үтмәй миңә хәҙер.

-- Оторо бәлшәүик булып ҡайтҡанһыңдыр, шәт? – Йүтәлләне. – Ғөбәйҙулла ағайым кеүек...

-- Кем?! Ғөбәйҙулла Уразовты әйтәһеңме?

-- Тап үҙе. Атаһы Тажи мулла, минең бер туған еҙнәйем, атайым урынына ҡалған имам хәҙер. Шуның һүҙен тыңламай, үҙең белгән казак аҡтығы Ғәбделәхәт Сәйетбатталов менән икеһе бергә Жултый тимер юл станцияһының башлығы господин Расщепкин менән еҫкәшеп, яһил Ырымбур большевиктары өлгөһөндә донъяны болғаталар.

-- Болғатһындар, -- тип көлдө Сәлимйән, -- болғата-болғата май төшөрөрҙәр, бәлки.

-- Ҡөрьәнел-хафиз[46] ағайым да бәлшәүиктәр ҡотҡоһона эйәргәс, нишләрбеҙ инде?.. – Тыны ҡыҫылып, тәҙрә асығына өңөлдө, Сәлимйәнгә ҡыҙғаныс булып китте:

[46] Ҡөрьәнел-хафиз – Ҡөрьәнде яттан белеүсе.

-- Ә һин үҙең, мәғзүм, сирләшкә генә көйөнсә, ниңә ошбу хәтәр хәрәкәткә килеп ҡушылдың? Донъяларҙың айҡал-сайҡал килеп тыныуын йылы ғына өйөңдә, йомшаҡ ҡына түреңдә сүрәләр уҡып көтөп ятһаң ни булды?

-- Утыпша[47] түгел бит мин, әҙәм балаһы! Нисәмә быуаттар көтөп ятып, еребеҙҙән дә, телебеҙҙән дә, динебеҙҙән дә ҡолаҡ ҡағырға торабыҙ, етте! Эсендә йәне булған башҡорт йоҡлап ҡалмаҫ – яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алыр ваҡыт! Һин, бәлшәүик, ошоға ҡаршымы әллә?

-- Мин улай тип әйтмәйем, әммә ныҡ хәүефләнәм. Башҡаларға ҡушылмай, үҙ аллы ғына алҡынып, ауыр күтәреүҙән билде биртендереп ҡуймаһаҡ ярар ине.

-- Башҡалар бит тере дошман – бөтәһе лә беҙгә ҡаршы.

-- Улай уҡ тип әйтмәҫ инем. Өҫтәүенә, сәйәси йәһәттән уңыш ҡаҙанһағыҙ ҙа, иҡтисади яҡтан биртенәсәкһегеҙ: тупраҡлы автономияның идаралығын бит өр-яңынан башлап ҡорорға тура киләсәк, бының өсөн хәтһеҙ сығымдар кәрәк. Татар буржуазияһы тиккәме ни тупраҡлы автономияны үҙһенмәй – аҡса ла, милли белгестәр ҙә етмәҫ тип ҡурҡа.

-- Беҙ бит татар түгел, беҙ – башҡорт!

-- Бына һин, мәғзүм, мәркәздең финанс министры, әйтеп бир: ҡаҙнағыҙҙа күпме аҡса бар?

-- Ҡаҙнабыҙҙа елдәр һыҙғырып тора, уны яңы ғына ҡаҙана башланыҡ. Көндәлек сығымдарҙы ҡаплатыр өсөн дә халҡыбыҙҙың йән башынан тинләп кенә йыябыҙ.

-- Тимәк, көрсөк төбө шомотор.

-- Йән биргәнгә -- йүн биргән, ил төкөрһә -- күл булыр. Сисенгән – һыуҙан таймаҫ.

-- Ярай, тинләп кенә булһа ла йыйып, барлы-юҡлы булһа ла, идаралыҡты тарҡатмай тоттоғоҙ, ти. Күпкәме? Әгәр Рәсәйҙә Ваҡытлы хөкүмәт ҡолатылып, уның яҡлылары менән уға ҡаршылар араһында ҡораллы тартыш башланһа, һеҙҙе кем һаҡлаясаҡ, үҙең әйткән дошман көстәрҙең ҡораллы хөсөтөнән, тим?

-- Шуға күрә лә үҙебеҙҙең ғәскәрҙе булдырабыҙ, яугир халҡыбыҙ был юлы ла һынатмаҫ.

-- Ер мәсьәләһен нисек хәл итмәксегегеҙ?

-- Уның буйынса тап үҙең һымаҡ уҡ фронттан ҡайтҡан һалдат Ғәлиәхмәт Айытбаев шөғөлләнә. Әйҙә, булмаһа, ҡырына уҡ илтеп ҡуяйым үҙеңде! – “Министр” ныҡышмал яҡташынан арыныу сараһын тиҙләтә ине, буғай.

Мәркәз Шураһы ағзалары бер ҙур залда стеналар буйлап теҙелешкән эрелеваҡлы яҙыу өҫтәлдәре артында бөтәһе бергә ултырып эш йөрөтә, ултырған урындан бер-береһе менән фекер ҙә алыша имеш. Тәбәзерәк буйлы, түп-түңәрәк күҙлектәре үтә төртөп ҡараған быжырыраҡ ҡаҡса йөҙлө, ҡылыс танаулы уҙамандың бынан тиҫтә йыллап элек Сәнкем-Биктимер ауылында үҙе күргән, Ҡапҡанташ ҡыҫығынан үтә Факан утарына, Перовский дачаһының урынына бергәләшеп сәйәхәт ҡылған зыялы мосафир Әхмәтзәкир Йәлитов икәнлеген бер күреүҙән таныны.

[47] Утыпша (утопший) – һал ағыҙғанда төпкә батып ятып ҡала торған бүрәнә.

-- Сәлимйән Мырҙағолатов буламын, йәһәт сырамыттым үҙеңде. Иҫеңдәме: 1908 йылдың томра йәйе, Һаҡмар буйы – Ҡаҫмарт тамағындағы мәҙрәсәле ауыл, иртә таңдан балта туҡылдатып бура бурап ултырған шәкерт... Шунан һуң Мөхәммәткамал хәҙрәт ихатаһындағы ҡымыҙ...

-- Ә эйе, мәҙрәсә бураһы... Йә, эш ниҙә? -- Әхмәтзәкир мәшәҡәттәрҙән арығандай ҡоро һөйләште. – Күрәм, фронттан ҡайтҡан һалдат. Моғайын, большевик ене ла һуҡҡандыр?..

-- Һуҡты шул.

-- Ен һуҡҡандар күбәйеберәк бара... Ғәфү ит, кем, эштәр бына бынауындан – муйындан, тын алыр ҙа форсат юҡ. Иркенерәк саҡта килһәң, гәпләшеп тә алырбыҙ, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп. – Ҡаршылағы буш өҫтәл яғына ҡарап өндәште. – Ғәлиәхмәт ҡайҙа, ҡабул ҡылһын үҙенең фронтташын. – Тимәк, Ғәлиәхмәт минең хаҡта һөйләгән, тип аңланы Сәлимйән. Буш өҫтәлдең күршеһенән өндәштеләр:

-- Айытбайҙың тышта бер эше ҡалған – хәҙер килеп инәсәк. Кил әле бында, һалдат, шүрәле бармаҡтарым менән бер ҡытыҡлап алайым. – Шапылдатып усын уҫка һуҡты. – Йәллә́т, таныйһыңмы мине?

Сәлимйән, күҙҙәрен тызырайтып, егеткә яҡынлағайны, уныһы, матур хәтфә таҡыя аҫтынан тырпай-ҡарпыш ҡолаҡтарын аттыҡылай ҡайсылатып-һелкетеп шарҡылдап көлдө. Хәтере ҡапыл уянған һалдат бармағы менән маңлайын һыпырып һөйләнде:

-- Вәт әй, был нисек булды был?! Һаҡмарҙан һал ағыҙыусы ике шағирҙың береһе түгелме һин?

-- Ҡуш итектең һыңары – Шаһизада Бәпесев! Икенсебеҙ Ғәбделхәй Иркәбаев та бында, Ырымбурҙа. Ҡәҙимгесә донъя көтөп, йөн тетеп, тегенеһен һелкетеп ята, ха-ха-ха!

-- Егеттәр, етте, эшкә ҡамасаулайһығыҙ! – Баш күтәрмәй яҙған рәйес урынбаҫары киҫәтте.

-- Беҙҙең даһи көйһөҙләнә, таяйыҡ. Телеграф аша Ленинға күндермәккә хитапнамә ижад итә ул, Манатовтан элегерәк өлгөрөргә. Мин ни, ике куплет таҡмаҡ ҡына оҙатайыҡ та ҡотолайыҡ, тиһәм дә, күнмәй – етди сәйәси эш был, ти...

Коридорға сыҡҡас, Сәлимйән һорай ҡуйҙы:

-- Һин, ҡустым, ни эш ҡыраһың бында?

-- Бәй, ике күҙеңде герман газы киҫтеме әллә, ағайым, башым осондағы аҡ ҡанаттарын яҙған Ябраил фәрештәне лә күрмәйһең? Бөйөк Мәркәз Шураһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы, ул ғына ла етмәһә, Әхмәтзәкир даһи менән бер ҡатарҙан Шура рәйесенең урынбаҫары ла мин!

-- Үҫкәнһең икән, ҡустым.

-- Ярай, бына һиңә адрес, берәй кис резиденцияма рәхим ит, шунда үҙең белгән шәп егеттәрҙе -- Әбделхәйҙе лә, Сенәкәйҙе лә һәм башҡаларҙы ла күрерһең.

-- Сенәкәй тигәнең дә -- шағир, теге Рәдүт татарымы?

-- Тап үзе, минең иң яҡын дуҫым, уның менән бер фатирҙа һауаны быҫҡытабыҙ... Йә, ана килә һиңә кәрәкле Ғәлиәхмәт Айытбай! – Адресы (Каруанһарай урамы, 53-өнсө өй) яҙылған ҡағыҙ киҫәге тотторопо, йәһәт ысҡынды. Ғәлиәхмәт иһә алыҫтан уҡ ҡосағын йәйеп елтерәп килә ине – ҡосаҡлашып гөрләштеләр.

-- Киттек ҡарауылсы бабай төйәгенә -- сәй янында ирәүәнләшергә!

Мәтрүшкә сәйенең хуш еҫе бүлмәгә аңҡыны ла күңелдәрҙе хисләндерҙе.

-- Һин, арҡадаш, минән алдараҡ тайғайның, инде күрәм: милли хәрәкәттең үҙәгендә ҡайнашырға өлгөргәнһең.

-- Нисек ситтә ҡалаһың: еребеҙ, динебеҙ, телебеҙ өсөн бара бит көрәш.

-- Тегендә беҙ ҙә һинән һуң да тик ятманыҡ, Петроград большевиктары менән һаман да тығыҙ элемтәлә Керенский хөкүмәтен бәреп төшөрөргә, власте Советтар ҡулына алырға һалдат массаларын яҡшы аңғартып әҙерләнек. Оҙаҡламай түңкәрелеш буласаҡ, хакимиәт башына үҙең белгән Ульянов -- Ленин партияһы – коммунистар менәсәк. Ә һин бында, үҙеңдең шул большевиктарға теләктәшлегеңде онотоп, буржуйҙар арбаһында йырлап йөрөйһөң.

-- Ерле автономия дәғүәләүсе башҡорттарҙың башында барған берҙән-бер көс шулар бит. Ә һинең бындағы урыҫ большевиктарың да, татар эсерҙәры ла, йәшел ислам флагын күтәргән һөрһөү милләтселәре лә бер төптән беҙгә ҡаршы – башҡортҡа ерле автономия бирҙертмәҫ өсөн көрәшә, хатта башҡорттоң барлығын да танымай. Ҡалалағы Коростелев етәкләгән РСДРП(б) ойошмаһы ла, татар байҙарының "Ырымбур мосолман виләйәт шураһы" һәм уның "Мосолман хәрби комитеты" ла – бер һап та бер ҡалып: "Башҡорт тигән айырым милләт юҡ – шул уҡ татарҙың боҙоҡ телле бер ҡәүеме улар; шуға күрә татарға ни кәрәк – уларға ла шул кәрәк; ә татар бер урында ҡатып ҡалмаған – бөтә Рәсәй буйынса һибелеп йәшәй, уның бер ерҙә генә уҡмашыр урыны ла юҡ, шуға күрә Рәсәй мосолмандарына ерле милли мөхтәриәт кәрәкмәй, сауҙабыҙ һәм динебеҙ өсөн милли-мәҙәни мөхтәриәт булһа – шул еткән!" – тип лаф оралар, урыҫтар шуны тик хуплап ҡына тора. Тегеләре лә, былары ла беҙҙең ҡан-дошмандар ул.

-- Бөтәһенән дошман яһарға ашыҡма әле улай. Окопта сағыңда һин дә, бик мауығып, РСДРП(б)-ның "Милли мәсьәлә буйынса" апрель айындағы етенсе конференция резолюцияһын ятлай инең...

-- Инем шул... "За всеми нациями, входящими в состав России, должно быть признано право на свободное отделение и на образование самостоятельного государства", -- тип ауыҙға бал да май тамыҙылғайны унда...

-- Һуң? Йот ана шул ҡапҡаныңды!

-- Йотор инем дә, алҡымымдан алдылар...

-- Бәй, кем алды алҡымыңдан?

-- Шул уҡ большевиктарың. Илгә ҡайтҡас ҡына аңланым шуны. Әхмәтзәкир Йәлитов ҡорҙашыбыҙ ҡаҡмай-һуҡмай аңлатты.

-- Йәғни ҙә?

-- Йәғни ҙә, ауыҙыма ҡаптырылған бал да майҙың зәһәр әсеүташ икәнлеге резолюцияның эсендә үк асыҡлана: "Вопрос о праве наций на свободное отделение непозволительно смешивать с вопросом о целесообразности отделения

той или другой нации в тот или иной момент". Тимәк, теләгән бер милләт ерле-милли үҙ аллылыҡ даулап ҡуҙғалған моментта: "Юҡ! Моменты был түгел!" – тип милләт алҡымынан алырға юл ҡалдырған большевиктар. Ырымбурҙыҡылар шул форсаттан файҙалана ла инде, ә был иһә татар партияларына ла ҡулайлы.

-- Ләкин сәйәсәттә улар ғына түгел бит әле, беҙ ҙә бар. Беҙ, башҡорт коммунистары, "моменты тап ошо!" тип әйтергә әҙер.

-- Әйтегеҙ һуң!

-- Әйтербеҙ, тәүҙә халыҡты әҙерләйек.

-- Халыҡ инде әҙерлектең сигенән ашып киткән, үҙен үҙе әҙерләгән.

-- Уныһын киләсәк күрһәтер. Шулай ҙа ер мәсьәләһе һәммәбеҙҙең уртаҡ ғәмелер бөгөн.

-- Килешәм.

-- Шул йәһәттән һөрлөгөп ҡуймаһағыҙ ине.

-- Уныһы беҙҙең башты ла ауырттыра.

-- Ауылда булып килдем, ерекмәндәрҙең бик хәүефле тын алышын шәйләнем. Күп ерлеләр, аҙ ерлеләр, бөтөнләй ерһеҙҙәр һәм күпләп ситтән күсеп килгән урыҫ арендаторҙары бар унда. Аҫабалар үҙ биләмәләрен ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырышһа, ҡалғандары ерҙе социалләштерергә -- йән башына ҡарап тигеҙ бүлешеп алырға ҡырҡыша.

-- Ҡоролтай ер мәсьәләһен ҡараны, ғәҙел ҡарар сығарҙы.

-- Ғәҙеллеген күрмәйем: күп ерле байҙар, алпауыттар мәнфәғәте өҫтөнлөк иткәндәй унда.

-- Уныһы шулайыраҡ, таныйым. Әммә башҡалар мәнфәғәте лә күҙәтелгән. "Киләсәктә Башҡортостанда ерҙәр бүлгәндә, -- тип аҡҡа ҡара менән яҙылған унда, -- ҡаҙна һәм башҡа ерҙәр кире ҡайтарылһа, әлегә тиклем припущенниктар, типтәрҙәр, "яңы башҡорттар" тип йөрөтөлгән ҡан-ҡәрҙәштәргә ер башҡорттар менән бер тиң биреләсәк".

-- Йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртыу түгелме был? "Ҡаҙна һәм башҡа ерҙәр кире ҡайтарылһа" тигән үтәлмәҫ шарт ҡуйғанһығыҙ. Кем уны кире ҡайтарыр һәм ҡасан? Керенскийҙан өмөт итәһегеҙме?

-- Учредительный собраниеға депутаттар һайланыҡ, араларында күренекле башҡорт инсандары Әхмәтзәкир Йәлитов, Шәриф Манатов һәм Ғәли Шәмиғоловтар бар. Һуңғы икеһе, беләһең, коммунистар. Ул ерҙәрҙе бына шулар шыҡырлатып юллап аласаҡ.

-- Учредиловкала тел тирмәне тартыпмы? Көтмәгеҙ! Башҡортҡа ул ерҙәрҙе, урыҫтар әйтмешләй, "как своих ушей не видать"!

-- Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин дә шикләнәм быға. Бая әйткән ҡағиҙәне тикшергәндә ҡоролтайҙа ла һөйләнем, әгәр иғтибар итһәң, матбағала сыҡҡан ҡарар аҫтына ла: "Ғ. Айытбаев үҙ фекерендә ҡалды", -- тип яҙылған. Фронттан ҡайтҡан башҡорт йәштәренең дә байтағы ҡараҙың был өлөшө менән килешмәй: мәсьәләне Учредительный собраниеға ҡалдырыу – күҙ буяу; ерҙе хәҙерҙән үк ғәҙел бүлешә башларға кәрәк, тип хатта йыйын залынан сығып та киттеләр. Ә баҫҡынсы урыҫтарҙы һәм башҡаларҙы әйтеп тә тормайым...

-- Бына бит. Ер – төп мәсьәлә. Шуны дөрөҫ сисмәһәк, Башҡортостан тупрағында һәр төрлө үҙ-ара тартыштар, хатта ҡан ҡойоштар башланыуы ихтимал. Шуға күрә лә беҙ, коммунистар, ерҙе социалләштереү шиғарын алға һөрәбеҙ, ә быныңөсөн Рәсәйҙең дә, атап әйткәндә, Башҡортостандың да хакимиәт башына ярлы-ялпы пролетариаттың коммунистар партияһы килергә, буржуазияның көнө бөтөргә тейеш.

-- Уҫал һөйләйһең, ҡорҙаш. Буржуазия тигәнең – ошо беҙ, әлге Башҡорт Мәркәз Шураһы түгелме? Милләттең берҙән-бер күҙ терәп торған таянысын ауҙарырға итәһеңме?

-- Беҙ уны ауҙармабыҙ, ә тыныс юл менән генә большевиктарҙың Советтар нигеҙенә ултыртырбыҙ.

-- Беҙ, тигәнең – автономияның хас дошманы Шәмиғолов һәм уның эйәрсендәре буламы?

-- Башҡорт коммунистары тик шәмиғоловсыларҙан ғына тормай, беҙ ҙә бар. Беҙ иҙеүсе синыфтарҙан арындырылған Совет автономияһы яҡлы. Совет автономияһында бөтә хакимиәт үҙ ҡул көсө менән көн күреүсе ябай халыҡ депутаттары ҡулында буласаҡ.. Быныңөсөн арымай-талмай халҡыбыҙға сәйәси хәлде аңлатырға, дәррәү уның күҙҙәрен астыртырға кәрәк – башҡорт мәнфәғәттәренең дә бер иш кенә түгеллеген, синыфтарға бүленгәнлеген, беҙҙә лә аҫтыртын синфи көрәш барғанлығын һәм барасаҡлығын күрһен. Шунда ғына илебеҙгә ысын хөрриәт килер.

-- Уныһын Алла белә. Әммә бөгөн башҡортобоҙҙоң ике күҙе Каруанһарайға төбәлгән. Күктәге торнаға ымһынып, ҡулдағы турғайҙы ысҡындырып ебәрмәйек.

-- Торнаһы ла, турғайы ла нәҡ беҙҙең ҡулда булыр. Шулай ҙа һин, ҡорҙаш, ер мәсьәләһен күҙҙән ысҡындырма әле.

-- Аңлайым. Алдағы өсөнсө ҡоролтайҙа шул хаҡта һүҙ ҡуйыртырға тура килер.

Ошоноң менән әңгәмәне теүәлләп, Сәлимйән ашығыс һаубуллашты, сөнки төндә йоҡламайынса уйланып ятып тәғәйенләнгән көндәлек эш бурыстары күп ине.

5

Киседә ул ҡала зыялылары йыйыла торған мосолман мәғрифәт төйгенә -- Ғабдулла Туҡай исемендәге татар китапханаһына юлланды. Ҙур булмаған уҡыу залы ҡара бәрхәт кәләпүш, уҡалап сиккән таҡыялы татар сауҙагәрҙәре һәм уларҙың йылғыр ялағайҙары – эреле-ваҡлы кибеттәрендә аршинлап ситса, мыҫҡаллап тәм-том үлсәүсе һыҡмыр приказчиктар, трактир половойҙары, шулай уҡ мәҙрәсә шәкерттәре, дворниктар менән шығырым тулы; араларында йөҙҙәре төтөнгә ыҫланған бер-ике пролетарий – тимер юл депоһы эшселәре бар. Барыһының иғтибарын тартыусы – Башҡорт Милли Мәркәзенән килгән шағир Шаһизада Бәпесев һәм уға һырныҡҡан ҡыҙ-ҡырҡын – түбәләренә мәрйенле ҡалпаҡ сөйгән, ҡаштарына һөрмә тартҡан бер килке милли туташ. Сәлимйән кергәндә мәжлес аҙағына етеп, буғай, гөжләй ине: бәҙзеләре хатта сығып та

киткеләй. Түрҙәге йәшел буҫтау япмалы өҫтәл артында -- европаса ҡара костюм, текә тирәсле кәләпүш кейеп затлы бурҙай эттәрҙәй суҡайып ултырған икәү: ҡала байы Борһан Шәриф ("Урал" ресторaны хужаһы) менән уның тоғро ялсыһы – "Мосолман шураһы" рәйесе, "Ваҡыт" гәзите мөхәррире Фатих Кәрим залдағыларҙың аҡтыҡ һорауҙарына яуап бирep, мәжлес һуҙымын йомғаҡлай:

-- Ҡабатлап тәкрарлайым: беҙ – йәмғебеҙ мосолман затлы бер үк халыҡ, бөгөнгө көндә асылы фәҡәт шыр-наҙан һәм сеп-сей хаталы рәүештә үҙҙәрен "башҡорт" тип атаған һәм берҙәм мосолман донъяһын ҡырҡа бүлгеҫләп ҡаҡшатҡан бәғзе бер йүгәнһеҙ әһелдәрҙең "башҡорт милли тупраҡлы мөхтәриәте" тигән баштан-аяҡ зыянлыҡлы идеяһына ҡырҡа ҡаршы беҙ. Ләғнәт һәм бәддоға уларға! Мосолманлыҡты емерергә, тамырынан тарҡатырға тырыша улар. Беҙ, эске Рәсәйҙең, Себерҙең вә Ҡафҡаздың әһле[48] мосолмандары, әһле Исламдың йәшел әләме төбөндә бөйөк төркиселек шиғары илә мәҙәниәтле уҡмашып, һәммәбеҙгә уртаҡ булмыш, ер ҡыҫаларында нәһи сикләнмеш[49] милли-мәҙәни мөхтәриәт хасил ҡылырға тейешбеҙ...

-- Татар байҙарының сауҙа даирәһен киңәйтеп, уныһыҙ ҙа күпкән ҡорһағын ҡалынайтырға, ә беҙҙәрҙәй хеҙмәтсән халыҡтың арыҡ тәнендәге һуңғы ҡанын һығып эсергәме?! – Эшселәрҙең береһе тороп бүлдерҙе.

-- Һин, кем, Сәхи Ғәйфи, һаман да шул томаналығыңа барып, көфөр һүҙҙәр һөйләйһең! -- Өҙөп алды Борһан Шәрәф. – Был болғансыҡ заманала һин – уфалы, мин – ҡазанлы, һин – бай, мин – ярлы, тип бүленергә ләә, ерле мөхтәриәт сиктәре эсендә ҡамалырға ла ярамаҫ. Бөтөн төрки-татар донъяһы, туғандарса ҡулға-ҡул тотоношоп, бер ыҙандан һөрөргә бурыслы...

-- Беҙ – һөрөргә, ә һеҙ урып алырғамы? – Сәхи Ғәйфи тигәндәре тынманы.

-- Мосолманлығыбыҙ яҙмышы ҡыл осонда торғанда, беҙҙә айырмалыҡ юҡ, асы яҙмыш яғаһында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ.

-- Һе! Ҡаланың иң затлы "Урал" ресторaны хужаһы Борһан Шәрәф әфәнде ләә, бына бынауы ҡалсайып ҡатҡан ҡулдарҙың эйәһе мин дә, тимәк, бер тигеҙ булып сығабыҙ?! – Көрәк ҡулдарын юғары күтәрҙе. Йәмәғәт әллә хуплап, әллә ғәйепләп шауланы. Фатих Кәрим тигәндәре туларға торған был ороларҙы еҙ ҡыңғырау шалтыратып тонсоҡторҙо.

-- Һин, Сәхи Ғәйфи, большевиктар ҡотҡоһон таратма бында! Ҡараңғы башҡорт башың менән яһил урыҫ арбаһына ултырып, урыҫ картузы кейеп, донъя болғатаһың, хәсис!

-- Ә һин, Ғәйет ауылының башҡорт аҙғыны, башың-тояғың менән татар байҙарына һатылып, таҡыр башыңа фәсле кәләпүш ҡундырып, шуларҙың оса араһын ялап йөрөйһөң, тфү! – Сикәләре ҡыҙышып, тоғариштары менән сығыу яғына елтерәне, шау-шоу ҡупты. Заманса ыҫпай кейемле, аҡ йөҙлө һәм һары сәсле бер азамат (Сәлимйәнгә уны ҡалабыҙҙың билдәле зыялыһы, "Хөсәйениә" мәҙрәсәһенең учителе, башҡорт казагы Ғабдулла Сибәғәт улы Дәүләтшин тип аңлаттылар) ҡалҡынып, көр тауышы менән шау-шоуҙы ҡапланы; өҫтәл артындағыларға кинәйәле баш сайҡап өндәште:

---

[48] Әһле (әһел) – эйә.

[49] Нәһи сикләнмеш – сикләнеше тыйылған.

-- Әфәнделәр, бындай тупаҫлыҡ һис тә кәрәкмәҫ ине. Томана башҡорт тигәс тә, уңды-һулды зерә шәп тойомлай ул.

-- Һин дә, мөхтәрәм Дәүләтшин әфәнде, мосолман казагы башың менән ылғый шуларға эйәреп, Коростелевтар мөхитендә алйыйһың. Өҫтәүенә, тупраҡлы мөхтәриәтселәр оялаған Каруанһарай тупһаһын шымартаһың. Һин дә тупраҡ тарафдарымы әллә?

-- Эйе, йәшермәйем, мин дә башҡорт халҡының ғәзиз өмөттәрен ҡәнәғәтләндереү яҡлымын.

-- Хәсис! Автономист!

-- Эйе, автономист. Башҡорттоң тәрән тамырҙары сәмүм елдәренә осортмай тотоп торған сал Урал тупрағында Рәсәй эсендәге ерле-милли автономия төҙөргә ваҡыт. Ләкин беҙҙең ул автономия большевиктар сәйәсәтенә яраҡлы төҙөлөргә, бөгөн-иртән большевиктар яулап аласаҡ Советтар хакимиәтендәге автономия булырға тейеш. Ул хакимиәттә, әлбиттә, һеҙҙең кеүек аҡса ҡапсыҡтарына урын булмаясаҡ!

-- Һатлыҡйән! Кил, йөҙөңә төкөрәйем! – Шәриф Борһандың һимеҙ йөҙө ут ҡапҡандай ҡыҙарҙы. Ҡуштаны ауыҙ асырға өлгөрмәне – залдағы аҡ ҡалпаҡлы нәфис туташтарҙың береһе, муйылҡара оҙон толомо арҡаһына ағылып төшкән һәм ут-янып баҡҡан ҡара күҙлеһе, тулҡынланып киҫәтте:

-- Бай ағай, был ни хәл? Сығырыңдан сығаһың!

-- Һеңлем, миңә аҡыл өйрәтергә кем әле һин?

-- Мөғәллимәләр курсының уҡыусыһы. Ә Ғабдулла ағай Дәүләтшин – мөхтәрәм уҡытыусым, уға ундай тупаҫ һүҙҙәр әйтергә хаҡығыҙ юҡ! Ғәфү үтенмәһәгеҙ, нәфрәт белдереп сығып китәбеҙ!

-- Эйе, сығып китәбеҙ! -- Әхирәттәр берҙәм ҡуҙғалды.

-- Бына бит ул – большевик сире... Сәхи Ғәйфиҙән йоҡто... – Борһан Шәрәф баш сайҡаны.

-- Юҡ! Бер кемдән дә йоҡманы!

-- Сабыр итегеҙ! Ундай талаптар ҡуйырға башығыҙ йәш әле! – Тороп баҫҡан Фатих Кәрим баштар аша ҡараҡайға төбәлде. – Яңылышмаһам, Бөрйән яғының ҡарлуғасы һиң, һеңлем?

-- Яңылышманың.

-- Һайрауыңдан яҡшы тойолоуынса, Каруанһарай ене ҡағылған һиңә лә?

-- Ене түгел – еле, шифалы еле!

-- Башҡорт еле! – Тотанаҡланы әхирәте.

-- Ялған ел ул, һеңлекәш: башҡорт тигән айырым ҡәүем дә, ер ҙә юҡ. Ул уйлап сығарылған.

-- Аллаһы Тәғәләнең үҙе тарафынанмы? Башҡорттоң үҙ ере лә, көнө лә, теле лә бар – ерһеҙ мөхтәриәт яҡлы татар ҡәрҙәштәребеҙҙән шул яҡлап айырылабыҙ.

-- Уйлап ҡара әле, һеңлекәш: шул ҡараңғы-төпкөл Бөрйәнеңдән ошо мәғрифәт усағына килеп, аслан кем телендә белем алғаныңды, кем хәрефтәрендә яҙғаныңды шәйләйһеңме?

-- Башҡорт шәжәрәләренең телендә. Үҙебеҙҙең яҙма тел. Бабаларыбыҙ яҙған тел! – Бөрйән ҡыҙы менән әхирәттәре залды ҡалдырып сығып барғанында Фатих Кәрим арттарынан ҡысҡырҙы:

-- Татар теле ул, һеңлем! Татар теле! Татар муллалары һеҙҙе кеше иткән, уҡырға-яҙырға өйрәткән!

-- Улар юҡта ла беҙ кеше инек! Үҙегеҙ кеше булығыҙ!

-- Ҡара-ҡара: ҡарлуғас тигәнем – ҡарсыға!..

-- Күренеп тора -- Абдулла Дәүләт шойҡаны! – Борһан Шәрәф тә үртәлде. Ҡыҙҙар артынан дәррәү ҡуҙғалған Шаһизада Бәпесев иһә эре-эре аҙымлап барышлайы әйләнеп ҡарап нәфрәтләнде:

-- Тфү! тип төкөрәйемме, әллә өшкөрәйемме? Тонсоҡтора был тынсыу татар мөхите!

-- Һин, шырмый шағир! – Борһан Шәрәф сыҙамай бармаҡ янаны. -- Иртәгә кем матбағаһына килереңде онотма!

Гәзиттең мөхәррире хужаһы янауын ҡеүәтләне:

-- "Ваҡыт" ишеге дуңғыҙ мороноң алдында уҡ ябылыр!

Елтерәп барған шағир бер мәлгә туҡталды:

-- Ҡарап-ҡарарбыҙ әле. Һөрһөп бөткән татарҙарҙың эстәрен көтөрләтеп, ерле-милли мөхтәриәт кенә яулап алайыҡ – үҙ телебеҙҙә уҡырбыҙ, үҙ телебеҙҙә яҙырбыҙ! Һәм һеҙҙең "Ваҡыт" ише серек матбағаларға яҡын да юламабыҙ!

Сәлимйән дә ҡуҙғалды:

-- Артабан бында ҡалыуҙың мәғәнәһе юҡ, киттек! – тине Ғабдулла Дәүләтшинға. Барышлайы ҡулын ҡаты ҡыҫып хупланы: – Дөрөҫ юлдан киләһең, иптәш Дәүләтшин. РСДРП(б)-ға ағза булып керәһең икән тип тә ишеттем.

-- Эйе, йыйынам.

-- Тиҙләтергә кәрәк, сөнки башҡорттарҙан коммунистар аҙ, юҡ барәбәрендә, тип әйтерлек. Үҙем тотанаҡ бирермен.

-- Рәхмәт, яҡташ.

Ҡалпаҡлы һылыуҡайҙарҙың күбеһе таралған, ишек алдында баяғы сая ҡараҡай менән Шаһизада Бәпесев йөҙгә-йөҙ килеп, шарҡылдашып көлөшөп тора. Сәлимйән ҡыҙ алдында туҡталып баш эйҙе:

-- Буржуйҙарҙың ауыҙына әсеүташты шәп ҡаптырҙың, һылыуым, маладис! Үҙеңде әллә оҙатып ҡуяйыммы?

Ҡыҙ ауыҙ асырға өлгөрмәне, Шаһизада өҙөп алды:

-- Һуңланың шул, ағайым, оҙатыусыһы эргәлә! – Ҡыҙҙы ҡултыҡлап этәрҙе. – Бисмиллаһи рахман рәхим, аҡ юл беҙгә, Әҡлимә туташ! – Һоро шинелле ағайға өндәшергә ирек бирмәй, ҡойондай өйөрөп алып китте.

-- Их, ҡайҙа беҙҙең йәш саҡтар – кеҫә тулы борсаҡтар!.. – Теклəп ҡалды Ғабдулла Дәүләтшин.

-- ...һаламдан тәртә ҡайырып, сиңерткә еккән саҡтар... -- Йөрәгендә абайлатмай татлы хис тоҡанып семеткеләгән Сәлимйән иҫен саҡ йыйҙы. -- Һылыу ҡыҙ... ҡыйыу ҡыҙ... Бирһә, бирә икән Хоҙай Тәғәлә!

-- Иң яратҡан уҡыусым. Халҡыбыҙға бынамын тигән мөғәллимә ҡайтасаҡ.

-- Ә Бәпесев менән аралары нисек? – Сәлимйән үҙ хистәрендә болғанды.

-- Бер нисек тә түгел һымаҡ. Һәр хәлдә, нүкталанмаған тай-тулаҡ. Фатирҙаш ике шағир, ике дуҫ, ҡыҙыҡайҙың тирәһендә урала, ҡороҡларға ынтыла. Әммә, белеүемсә, һылыуыбыҙ береһенә ләбаш бирмәй.

-- Икенсеһе кем?

-- Бәй, үҙеңдең яҡташ-мәҙрәсәләшең Төхфәт Сенәкәй. "Рәдүди" тип тә тамғалай шиғырҙарын.

-- Төшөндөм: Рәдүт ауылының татар казагы. Бынан туғыҙ йыл элгәре олатайың Мөхәммәткамал хәҙрәт ауылында Һаҡмар буйында шиғыр әйтешеүҙәренең шаһиты булғайным. Икеһе лә малайҙар ғына ине...

-- Эййй... һәммәбеҙ ҙә малайҙар ғына инек шул... яһилдар менән яғалашыр көнөбөҙ килеп етте.

-- Шуны аңлай алмайым, -- тине Сәлимйән, байтаҡ ҡына өнһөҙ уйланып барғас. – Татар буржуазияһы ниңә, революция тыуҙырған бөйөк форсаттан файҙаланмай, бушҡыуыҡтай тотанаҡһыҙ ерһеҙ мөхтәриәткә йәбешеп ята?

-- Сөнки тамыр тартҡан үҙ ере юҡ бит.

-- Теләктәре ҙур булһа, Ҡазан гөбөрнәһендә генә булһа ла, төпләнә алырҙар ине.

-- Теләктәре ҙурҙан да ҙурыраҡ шул: Рәсәйҙең төрки телле барса халыҡтарынан берҙән-бер милләт – *татар милләте* уҡмаштырып, Рәсәйҙең яртыһын татар Рәсәйе яһарға. Шул уҡ ваҡытта буржуйҙарының һәр береһенең бармағы үҙенә ҡарай кәкере – сығарып һалған бер тине йөҙ тин файҙа килтермәһә, ҡуҡыш күрһәтә милләтенә. Миңә татар капиталистарынан йыш ишетергә тура килде: "Әгәр беҙ ерле автономия алһаҡ, -- ти улар, -- тишек кәмәгә ултырыуыбыҙ ихтимал. Сөнки халҡыбыҙ фәҡир, дәүләт аппараты сығымдарын фәҡәт беҙ, бер-нисә бай, күтәрергә тейеш булабыҙ, ә был беҙҙең кеҫәгә ныҡ һуғасаҡ". Алтын Урҙа емерелгәс төрлө төрки ярсыҡтарҙан эркелгән, үҙ дәүләте булмаған ҡәүем бит ул.

-- Ә Ҡазан ханлығысы?

-- Уныһын да башҡорт хандары төҙөгән, ә һуңынан татар хандары бөлдөргән.

-- Ерле мөхтәриәт яҡлы башҡорт буржуазияһы ла үҙ ҡалтаһын ғына ҡайғыртмаймы икән?

-- Уныһына шик тә юҡ. Әммә башҡорт ҡамғаҡтай тәгәрләп йөрөп ҡалта тултырырға күнмәгән: үҙ ерендә үҙ дәүләтен ҡороп байымаҡ уның мөкәддәс теләге. *Ерле дәүләт ҡороп*, -- бына ҡайҙа айырма!

-- Минеңсә был, беҙҙең коммунистик идеялар күҙлегенән ҡарағанда ла, тәбиғи хәл, -- тине Сәлимйән.

-- Мин дә шулай уйлайым.

Муйыл күҙле, һумалалай ҡуш толомло бөрйән һылыуын күргәндән һуң, күңеле айҡал-сайҡал килеп, туңып торған йылға боҙо аҡтарылғандай булды, боҙ араһынан, йөрәк һыҙлатып, аяҙ Күктәй зәңгәр күҙле, арыш һаламылай һары ҡуш толомло Гөлсәсәге ҡалҡып сыҡты ла онотолмаҫ ҡиәфәте күҙ алдынан китмәҫкә мөһөрләнде. "Күптән тормошҡа сыҡҡан -- итәк тултырып бала ла үҫтерәлер,

минең менән булғандары төш һымаҡ ҡына ҡалғандыр... ә мин...” – Ҡаты түшәгендә әйләнеп-тулғанды.

6

Дүрт йыл буйына герман һуғышының ҡанлы окоптарында дары төтөнөнә ыҫланған Сәлимйән Мырҙағолатов, фронт большевиктарынан дөйөм Рәсәй пролетариатының хәле, революцион бурыстары тураһында шөйлә төплө сәйәси һабаҡ алһа ла, бындағы тәрән тылда, йәғни үҙенең тыуған Ырымбур гөбөрнәһендә, синфи нисбәттәрҙең аслан нисек торошон, бигерәк тә Ырымбур казактарының тын алышын белеп еткермәй ине. Был хаҡта ул Коростелев иптәш менән бер осрашыуында ентеклерәк һорашты һәм, ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, ошондай мәғлүмәт алды.

Казактарҙың, бигерәк тә бай ҡатламдарының, ере күп; шул төп байлыҡты ҡулдан ысҡындырмаҫ өсөн, улар батша ҡушҡандың барыһын да күҙ йомоп эшләргә әҙер. 1905 – 1907 йылдарҙағы революцияны ҡанға тонсоҡтороп баҫырыуҙа казактар, шул иҫәптән Ырымбур казактары, батша самодержавиеһының төп көсөн тәшкил итте. Дөрөҫ, сикһеҙ оҙаҡҡа һуҙылған герман һуғышы, аҡ батшаны бәреп йыҡҡан Февраль революцияһы арҡаһында улар ҙа шаҡтай бөлдө, атамандарының бойороҡтарын үтәүҙән баш тартырға ла әҙер торған ярлылар ҡатламы барлыҡҡа килде. Беҙҙең бурыс – коммунистик өгөт-нәсихәт ярҙамында уларҙы нығыраҡ тарҡатыу, бигерәк тә һуғыш яфаһынан биҙгән фронтовиктарын үҙ яғыбыҙға ауҙарыу. Әммә хәҙерге моментта Ырымбур казачествоһы, дөйөм алғанда, беҙҙең өсөн ҙур ҡурҡыныс менән янай.

Ошо 1917 йылдың йәйендә Ырымбурҙа уларҙың Войсковой кругы саҡырылып, урында хакимлыҡ ҡылыу өсөн “малый круг” һәм уның тарафынан “хөкүмәт” һайланды. Шуның башында торған казак офицеры Дутов Петроградҡа барып, Ваҡытлы хөкүмәт менән уртаҡ тел табып, унда бөтә Россия казактарының хәрби Советы ағзаһы итеп һайланды; Ырымбурға ҡайтып, казак юғары ҡатламдарының контрреволюцион хәрәкәтен етәкләне. Каруанһарайҙа оялаған башҡорт милләтселәренең идеологы Әхмәтзәкир Йәлитов үҙен буласаҡ башҡорт ханлығының ханы итеп хыялланһа, Дутов Көньяҡ Уралдағы казак дәүләтенең диктаторы булырға йыйына. Уларҙың икеһе лә беҙгә, большевиктарға, ҡурҡыныслы.

-- Ә татарҙар?

-- Улар ике яҡҡа ла ҡойроҡ болғай: ысын сауҙагәрҙәрсә, ҡайһы тарафтан күберәк файҙа килер икән, тип һағалай...

Петроградта I бөтә Россия мосолмандары съезын саҡырыу алдынан Ырымбур казак ғәскәрҙәренән һайланған мосолман делегаттар ҡалабыҙҙа йыйылып, “Казак-мосолмандарҙың I ғәскәри съезын саҡырыу буйынса ойоштороу комитеты” һайлайҙар, билдәле мөғәллим Ғабдулла Дәүләтшин шуның рәйесе була. Был съезд 1917 йылдың 30 майында Ырымбурҙа эш башлап, Ырымбур мосолман казактарының Үҙәк ғәскәри комитетын төҙөй, уның рәйесе итеп Әбдерәүеф Абдулла улы Богданов, урынбаҫары итеп Ғабдулла Дәүләтшин һайлана. Ләкин комитет етәкселегенең, күп тә үтмәй, съездың шөйлә демократик

ҡарарҙарынан тайпылыуы сәбәпле, елкәненә большевистик елдәр өргән Ғ. Дәүләтшин комитетта эшләүҙән тайшана...

Сәлимйән Мырҙағолатов алған тарихи мәғлүмәт булды был.

Һәм бына шул һалҡын елле октябрҙең 25-ендә Петроградта большевиктар тарафынан Ваҡытлы хөкүмәттең ҡолатылыуы, бөтә хакимиәт Советтар ҡулына күсеүе тураһындағы хәбәр, Ырымбур большевиктары, шул иҫәптән Сәлимйән дә, һағынып көткән танһыҡ хәбәр, ерҙе-күкте тетрәтеп килеп етте; күрше Өфө гөбөрнәһендәге кеүек үк, бында *ла власть* үҙенән-үҙе Советтар ҡулына күсер һымаҡ тойолдо. Әммә РСДРП(б)-ның Ырымбур ойошмаһы һәр яҡтан да ҙтә шыйыҡ булғанлыҡтан, Совет яҡлыларҙың өмөттәре аҡланмай. Октябрь түңкәрелешенән һуң ике көн үтер-үтмәҫтән, йәғни 1917 йылдың 27 октябрендә, "Ырымбур йәмәғәт ойошмаларының берләштерелгән кәңәшмәһе" йыйыла һалып, көнүҙәк саралар тураһында үҙ-ара килешә. Большевиктарға сығып һөйләргә *лә* ирек бирмәйҙәр. Эсерҙарҙар һәм меньшевиктар етәкселегендәге "Йәмәғәт именлеге комитеты", татарҙарҙың Фатих Кәрим, Борһан Шәрәф башлығындағы "Мосолман гөбөрнә шураһы", казактарҙың Войсковой круты һәм уның эсендәге мосолман казактарҙың Үҙәк ғәскәри комитеты, Башҡорт Мәркәз Шураһы, *ул* саҡтағы "ҡырғыҙ" тип аталған ҡазаҡтарҙың Алаш-Урҙа вәкилдәре үҙ-ара уртаҡ тел табышып, хакимиәт теҙгенен "ҡала һәм гөбөрнә буйынса тулыһынса" атаман Дутов ҡулына тапшыра; урындағы большевиктар, үҙҙәренең телмәре менән әйткәндә, "иҙән аҫтына боҫорға" йәғни йәшерен эшкә күсергә мәжбүр була. Башҡорттарҙың автономия өсөн хәрәкәте бөтә башҡорт халҡы берҙәм тотанаҡлаған ҙур көс икәнлеген урындағы большевиктар ойошмаһы баһалап еткермәһә *лә*, Дутов быны аңланы һәм, Башҡорт Мәркәз Шураһы менән йәшерен килешеп, Рәсәй эсендәге казак дәүләте һәм Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш хәрәкәттәрен бер-береһенә зыянлыҡһыҙ, йәнәшә алып барырға һүҙ ҡуйыштылар. Был көндәрҙең сәйәси нисбәтен ҡыҫҡа һәм аныҡ еткереү өсөн, заманының зыялыһы Кәрим Иҙелғужиндың башҡорт хәлдәренә бәйле хитапнамәһенә мөрәжәғәт итәйек:

"Мәркәз Шураның эше көндән-көн киңәйә. Башҡорттар араһында Башҡорт автономияһын төҙөү юлында эшләүгә димләүҙәр көсәйә. Мәркәз Шура, үҙ вәкилдәре аҡылы Керенский хөкүмәтенә хәбәр итеп, Башҡорт автономияһын ойошторооуға һәм башҡорт ер-урмандарын башҡорт съездары хәл итеүенсә идара ҡылыуға рөхсәт һорап ҡарай. *Ләкин* һөҙөмтәһе булмай. Керенский хөкүмәте башҡорт вәкилдәрен вәғәҙә менән туйҙырып, бөтә мәсьәләне Учредительный собраниеға бәйләп, шуның ҡарамағына тапшыра.

Август айында Керенский хөкүмәте бөтә ерҙәрҙе Үҙәк ерҙәр комитетына алырға бойороҡ сығара. Быға Башҡорт Мәркәз Шураһы риза булмай, Ваҡытлы хөкүмәткә телеграмма һуғып, башҡорт ерҙәрен Башҡорт Мәркәз Шураһының ер бүлегенә биреүҙәрен һорай. Ваҡытлы хөкүмәттең ерҙәр тураһында сығарған бойороғона башҡорттар күнмәйәсәк, башҡорт съездарының сығарған ҡарарҙары буйынса эшләйәсәктәр, тип аңлатыла.

Башҡорт Мәркәз Шураһы, бөтә ауылдың *мулла* һәм хәҙрәттәрен ойошторoп, өйәҙ һәм төбәк шураларҙы йыйнарға, һайлау эштәренә юлбашсылыҡ

итеүҙе уларға тапшырып, милли флаг астында милли капитал тупларға, башҡорт илен буржуаз демократия нигеҙенә ҡоролған бер хөкүмәт итеп ойошторорға тырыша.

Ауыл муллалары бөтә эштәрен дә дингә бәйләп эшләргә тырышыуҙары арҡаһында, башҡорттар араһында синфи айырымлыҡтар булмай. Башҡорт өсөн фәҡәт ерҙәрҙе ҡайтарыу, автономия алыу ул үҙе бер тарихи вазифаларҙан һанала. Төбәк һәм өйәҙ шура һайлауҙары ла, шулай уҡ дөйөм Башҡорт ҡоролтайына вәкилдәр һайлау ҙа милли тупраҡлы автономия алыу флагы астында үткәрелә. Ҡоролтайға һайлау алдынан шулай уҡ Башҡортостан тупрағында йәшәгән татар халҡына айырым хитапнамәләр таратып, һайлау тәртиптәре күрһәтелә. Ләкин, башҡорт һәм татар ыҙғышы киң урын алып киткәнлектән, күп урында татарҙар һайлауға ҡатнашмай. Шулай уҡ урыҫ крәҫтиәндәре лә, Башҡорт автономияһына дошманлыҡ күҙе менән ҡарап, башҡорттар ерҙе үҙҙәре генә биләргә тырышалар, тип, башҡорт ҡуҙғалыштарына ваҡытлы бер эш итеп кенә ҡарайҙар.

Ул арала Октябрь көндәре етеп, мәркәз ҡалаларҙа власть большевиктар ҡулына күсә. Тик Ырымбурҙа һаман Ваҡытлы хөкүмәт тарафынан ҡуйылған комиссарҙар эш итә. Башҡортостандың ере икегә бүленә: Ырымбур гөбөрнәһе – ул Дутов шауҡымы астында ҡала; Өфө гөбөрнәһе – уныһы өлөшләтә Совет яғында була. Мәркәз Шура, быға ҡарамаҫтан, декабргә саҡырырға билдәләгән дөйөм Башҡорт ҡоролтайын йыйнарға һаман әҙерлек күрә.

Власть Советтар ҡулына күсеү менән Мәркәз Шура, үҙенең партиялар көрәшенә ҡарашын белдереп, синыфтар көрәше мәлендә башҡорт халҡының тоткан юлын күрһәтеп, 1-енсе һанлы фарманын сығара. Ул фарманды, Мәркәз Шураның Октябрь революцияһы һәм синфи көрәштәргә ҡарашын асып бирә торған бер тарихи документ булғанлыҡтан, бында ҡыҫҡаса булһа ла күсереп китеүҙе тейеш таптым.

Дөйөм башҡорт халҡына,
Төбәк шураларға

Фарман №1[50]

Ошо 1917 йылдың 25 октябрендә Рәсәйҙең Ваҡытлы хөкүмәте большевиктар партияһы тарафынан төшөрөлөү айҡанлы, Рәсәйҙә үҙ-ара һуғыш китте. Большевиктар, Ваҡытлы хөкүмәтте таркатып, Петроград, Мәскәү, Ҡазан, Харьков, Саратов, Һамар, Өфө үә башҡа эске Рәсәй гөбөрнәләрен үҙ ҡулдарына алдылар. Күп илдәр большевиктарҙы танымай. Хәҙер үҙ-ара һуғыш китте. Рәсәйҙә кем баш, кем хужа булырын белер хәл юҡ. Большевиктар бөтә ерҙе крәҫтиәндәргә биреүҙе белдерҙеләр. Шуның арҡаһында Башҡортостандағы ерһеҙ халыҡтар менән башҡорттар араһында талаш сығырға мөмкин. Хәҙер талауҙар, үлтереүҙәр хөкөм һөрә, суд юҡ, яза юҡ. Бигерәк тә былар башҡорт халҡы һәм законға, тәртипкә буйһоноп өйрәнгән халыҡтың ҡанын ҡыҙҙыра. Фронттан ғәскәрҙәр үҙ ихтыяры менән ҡайта башланы. Большевиктар быға үҙҙәре юл ҡуя. Дөйөм халыҡ тарафынан танылған бер хөкүмәт булмауы, Ваҡытлы хөкүмәттең большевиктарға ҡарата йомшаҡлығы менән иғтибары төшкән

[50] Ҡыҫҡаса алына.

Керенсмкий хөкүмәте лә, башҡорттарға йүнле эшләргә ирек бирмәй, өйәҙ һым ылыҫ[51]идараларын тамам ҡаҡшатты.

Был хәлдән нисек ҡотолорға? Ере, мөлкәте булған һәр халыҡ үҙ ҡайғыһын үҙе ҡарау, ерен, малын үҙе һаҡлау мөһимдер. Башҡортостан өсөн дә идараны үҙ ҡулына алыу тейеш. Большевиктар үҙҙәре, бөтә милләттәргә ирек, телә̆һәләр, автономия алырҙар, телә̆һәләр, Рәсәйҙән бөтөнләй айырылырҙар, ти. Украина, Бессарабия һәм Дағстан мосолмандары үҙ алдына йәшәгән бөтә идараларҙы үҙ ҡулына ала башланылар. Башҡорт халҡы дөйөм съезда ла: "Мәмләкәттә тәртип̆еҙлек китһә, идараны үҙ ҡулына алыр", -- тип ҡараҙар сығарғайны. Хәҙер Башҡорт Шураһы, һис кемгә буйһонмай, Башҡортостанды айырым идара итеү юлына кереште. Өфө, Һамар гөбөрнәләрендә башҡорттар татар һәм урыҫтар менән бергә ереген ултыра. Шуның өсөн ул ерҙәрҙә Башҡортостан автономияһын хәҙерҙән иглан итеп булмай. Ырымбур гөбөрнәһендәге башҡорттарҙың фекере асыҡ билдәле, бында автономияны иглан итергә әҙерлек бара. Хәҙер Башҡортостан икегә бүленә. Өфө яҡтары большевик ҡулында, Ырымбур яғында казактар большевиктарҙы танымай. Шул сәбәпле Башҡортостандың һуғыш аҫтында ҡалыуы мөмкин. Башҡорттар бер-бере менән һуғышырға тейеш түгел, сөнки башҡорт большевик та, меньшевик та түгел. Ул – башҡорт. Һуң, кем яғында? Бер кем яғында ла түгел, үҙебеҙҙең яҡта. Беҙҙең был талашлы-ыҙғышлы эштәрҙә эшебеҙ юҡ. Беҙҙең эшебеҙ – үҙ мәмләкәтебеҙҙең тыныслығын һаҡлау. Ике миллионлы башҡорт халҡы, юҡ-бар сәйәси уйындарға ҡыҫылып, уйынсыҡ булыуы мөмкин түгел. Беҙҙең сәйәсәтебеҙ – фәкәт тупраҡлы мөхтәриәт алыу. Шуның өсөн һеҙҙең Мәркәз Шурағыҙ Киевтағы милләттәр съезына инде. Унда ике вәкил ебәрҙе. Съезға кереү менән башҡорт мөхтәриәтен тормоҡа ҡуйырға бер-береһенә алмаш ярҙам итәсәктәр.

Мәркәз Шура һеҙҙең тапшырған эштәрегеҙҙе атҡарыу юлында Керенский хөкүмәтенә барып ҡараны, ләкин бер ҙә эш сыҡманы. Башҡорт идараларын зестволан айырыу тураһында саралар күреп ҡараны, бер ҙә эш сыҡманы. Ерҙәр мәсьәләһен хәл итеү өсөн Черновҡа барып ҡаралды, ул да булманы. Сөнки Керенский хөкүмәте милләттәрҙең мәсьәләһен хәл итеүҙе Учредительный собраниега ҡалдырыуҙы һөйә ине. Керенский хөкүмәте беҙҙең теләктәрҙе атҡарырға ашыҡмаһа ла, беҙ халҡыбыҙҙы ойоштороп бөттөк.

Шуның өсөн башҡорттар һәм башҡорт һалдаттары дөйөм Рәсәй сәйәсәтендә төрлө милләттәр менән бергә булғанда ла, Керенский хөкүмәтен аяҡҡа баҫтырып тороу ихтималы юҡ. Бәлки бөтә милләттәрҙең хоҡуғын таныған, ныҡлы тәртип-низам ҡылыуға көсө еткән хөкүмәт төҙөү өсөн генә тороу тейештер. Хәҙер большевиктар бөтә халыҡтарға ирек бирә, ләкин тәртип̆еҙлек менән бергә бирәләр. Башҡорт халҡы бындай бүләкте ҡабул итергә тейеш түгел. Татар ҡәрҙәштәребеҙ ҙә, башҡорттар менән бергә эшкә тотонып, мөхтәриәт алыу юлында эшләргә тейеш. Бөтә урындарҙағы хәлдәрҙән ашығыс рәүештә Мәркәз Шураға хәбәр биреп тороргә тейештәр. Учредительный собраниега һайлау эштәре үҙ юлы менән бара. Хәҙер Мәркәз Шура төрлө ерҙәргә таралған башҡорт ғәскәрҙәрен ҡайтарыу өсөн вәкилдәр ебәрҙе. Ил араһындағы бөтә ҡорал иҫәпкә алынып башҡарып, төбәк шуралар ҡарамағына тапшырылырға тейеш. Һәр эште Мәркәз Шура менән аңлашып, һәр көндө Мәркәз Шуранының бойорогон көтөп тороргә тейешбеҙ.

---

[51] Ылыҫ – улус, волость.

Башҡорт Шураһының рәйесе ***Манатов,***
урынбаҫары ***Зәкир Йәлитов.***
Ағзалар: ***Фатих Дәүләтшин, Х. Әмиров, Ғ. Ғәйетбаев,***
Муса Смаков, Ғ. Хәсәнов, Илдархан Мутин.
Яҙыусы ***Ш. Бәпес.***
Ырымбур, Каруанһарай, 1917 йыл, 11 ноябрь.

Башҡорт Мәркәз Шураһы, баштан алған юлы менән барып, башҡорт ерҙәрен һаҡлау, милли капитал тыуҙырыу, буржуаз демократия нигеҙенә ҡоролған милли хөкүмәт төҙөү эшен дауам итергә тырыша. Башҡорттоң хәлле ерекмәндәре һәм ауылдарҙа эш башында йөрөгән руханиҙар өсөн милек мәсьәләһе мөкәддәс бер эш һанала. Улар, Мәркәз Шураның шул нигеҙҙә ҡора башлаған милли ойошмаларының хеҙмәтселәре, шуның менән бөтә башҡорт халҡының теләктәре үтәлә, тип уйлайҙар. Ләкин мәсьәлә урыны менән икенсе төҫ ала. Ҡайһы бер ылыҫ һәм ауылдарҙа фронттан ҡайтҡан йәштәр һәм фәҡир башҡорт ерекмәндәре араһында большевиктар партияһына тартылыу, синфи айырмалыҡтарҙың башланыуы күренә.

Шулай ҙа күпселеге большевиктарҙың идеологияһын йәнәһе помещиктарҙың, алпауыттарҙың барып утарын талап, ҡаралтыларын алыу, ут төртөп яндырыу тип кенә ҡабул итәләр. Октябрь революцияһы булғас та, унан һуң да башҡорттар араһында артыҡ синфи айырмалыҡтар күренмәй.

Шул хәл эсендә Башҡорт Мәркәз Шураһы, һәр ерҙә һайлауҙар уҙғарып, дөйөм башҡорт ҡоролтайына әҙерлек күрә. Үҙенең 1-енсе һанлы фарманында күрһәткәнсә, дөйөм Башҡорт ҡоролтайы үткәргәнсе үк Башҡортостанды автономиялы бер хөкүмәт итеп иғлан итергә йыйына.

Урындарҙа һайлау эштәре бөткәс, бигерәк тә Мәркәз Шура Киевтағы Милләттәр союзына ағза булып кергәс, 15 ноябрҙә башҡорт илен автономиялы бер хөкүмәт итеп иғлан итәләр. Шул айҡанлы Мәркәз Шура рәйесе Шәриф Манатов Украина үә башҡа өлкәләргә телеграмма ебәрә, башҡорттарҙың автономиялы бер хөкүмәт булып эшкә керешеүҙәрен белдерә. Ленинға һуғылған телеграмма, телеграфта Ырымбур власе кешеләре тарафынан тотолоп, тапшырылмай. Был хәбәр Ырымбур гөбөрнә эшмәкәрҙәренә һәм татарҙарҙың Мосолман виләйәт шураһына ишетелеп, башҡорттарҙы: “Әле Дутов, әле Ленин менән эш итергә тырышҡан халыҡ”, -- тип ғәйепләргә тырышалар.

Башҡорт автономияһы иғлан ителгәс, 21 ноябрҙә Ырымбур урыҫ гәзитендә Керенский хөкүмәте тарафынан ҡуйылған гөбөрнә комиссары Архангельскийҙың бер иғланы баҫылып сыға. Унда былай тиелә: *“Башҡорт Мәркәз Шураһының рәйесе Шәриф Манатов Өфө, Ырымбур, Һамар һәм Пермь гөбөрнәләрендә йәшәгән башҡорттарҙы Рәсәй йөмһүриәтенең мөхтәри өлөшө итеп иғлан итә. Был турала төрлө ҡалаларға телеграммалар биргән. Ырымбур халҡына белдерәм: Ырымбур ҡалаһының мосолман халҡы Башҡорт Мәркәз Шураһының эшләгән эшенә һис риза түгел, быға уларҙың ҡатнашлығы юҡ. Мосолман милли шураһы һәм уның Хәрби комитеты тупраҡлы мөхтәриәт иғлан теүгә ҡушылмайҙар. Улар тик милли-мәҙәни мөхтәриәт алыу яғында. Был турала Мосолман виләйәт шураһы һәм уның Хәрби комитеты вәкилдәре хәбәр иттеләр миңә. Шул рәүештә Ырымбур ҡалаһының*

мосолман өлөшө һәм уға юлбашсылыҡ иткән виләйәт милли шураһы башҡорттарҙың хөкүмәттән айырылып эш итеүҙәренә һәм шул йөмләнән Ленинға телеграмма һуғыуҙарын яман күҙ менән ҡарай.

Ырымбур гөбөрнә комиссары ***Архангельский".***

Башҡортостан автономияһы иғлан ителеү менән үк, шул уҡ мәлдә уға ҡаршы татар буржуазияһының Ырымбур Мосолман виләйәт шураһы, уның Хәрби комитеты һәм Керенский тарафынан ҡуйылған Ырымбур комиссарҙары көрәш башлай. Ырымбурҙа 8 декабрҙә саҡырылырға тейеш III Ҡоролтайға ҡаршы фекер таратыу, Өфөлә татар буржуазияһы тарафынан ойоштороlған Милләт мәжлесенә ҡушылырға димләү һымаҡ эштәр Мосолман виләйәт шураһының көндәлек эшенә әүерелә, хатта Мосолман виләйәт шураһы вәкиле булып килгән Фатих Кәрими, ҡоролтайға килеп: "Башҡорт менән татар айырылырға тейеш түгел. Өфөләге Милләт мәжлесенең ҡарарына ҡушылырға кәрәк. Улар – ҙур, нигеҙле һәм иғтибар-лы милләт хәҙимдәре. Шулар менән бергә барғанда ғына сәләмәтлек ярына сығырбыҙ, милләт тип сәсебеҙ ағарған", -- тип өгөтләй.

Бына шуның һымаҡ талаштар арҡаһында Башҡорт Мәркәз Шураһына ойоштороу эшен алып барыу эше ауырға төшә. Мәркәз Шураның иҡтисади хәле сикһеҙ ҡыҙғаныс була. Бер ерҙән килер килем юҡ. Халыҡ араһынан иғәнә йыйнау өсөн кешеләр сығарыу, йән башына һалынған һалымды йыйнау өсөн айырым кешеләр билдәләү ҙә артыҡ сығымдар талап итә. Мәркәз Шура, был хәлдәрҙән ҡотолоу өсөн, йән башына һалынған 10 тин һалымды (1917 йыл 18 октябрь йыйылышында) 25 тингә еткерергә ҡарар сығара. 10 һәм 25 тинләп йыйылған аҡса башҡа ерҙән бер килеме булмаған Мәркәз Шураның иҡтисади яҡтан ниндәй хәлдә булғанлығын күрһәтә.

Икенсе яҡтан, Башҡортостан ере икегә айырыла. Өфө яҡтары большевиктар ҡул аҫтында ҡалып, Ырымбур гөбөрнәһе атаман Дутов ҡулында була. Был да күп эштә аяҡ сала, автономияны тулыһынса иғлан итеүгә ҡамасаулай"...

Шулай итеп, Ырымбурҙа атаман Дутов диктатураһы, большевиктарға рәхимһеҙ һунар...

Эшсе Сәхи Ғәйфиҙең ҡала ситендәге ышаныслы бер танышы өйөндә диктатура террорынан боҫоп ятҡан Сәлимйән Мырҙағолатов Башҡорт Мәркәз Шураһының был 1-енсе номерлы фарманын бошоноп һәм ҡәнәғәтһеҙләнеп уҡыны – бөтә Рәсәй күләмендә туҡтауһыҙ йәйелеүсе Советтар хакимиәтенә итәғәтлек белдермәүҙәре, хатта ҡарышып өтөрәйеүҙәре алдағы көндәрҙә башҡорт халҡына ҡан ҡойошло көрәш менән янай ине. Был хәтәр документта, әлбиттә, башҡорт буржуазияһының Коростелев иптәш уҫал тамғалаған идеологы Зәкир Йәлитовтың шауҡымы көслө (ә коммунист Манатов ни ҡараған?!). Артабан да былай барһа...

Сәлимйән түҙмәне, йәшеренгән төйәгенән ҡубынып, ҡаса-боҫа, тигәндәй, Каруанһарайға йүнәлде. Әхмәтзәкир Йәлитовты ул коридорҙа осратты – ҡайыш

портупеялар менән ызбурыйланған ҡораллы ике егеткә хәрбиҙәрсә ҡәтғи тауыш менән бойора. Хәрбиҙәрен йәһәт ебәреп, Сәлимйәнгә боролдо:

-- Әһә, килдеңме, большевик шауҡымы? Артыңа ут ҡаптымы, шуны һүндертергәме?

-- Үҙем дә һүндерермен. Тик бына һеҙгә ҡабасаҡ зәһәр утты...

-- Һин, мырҙам, нимә һуҡалайһың?

-- Беренсе номерлы фарманығыҙ...

-- Сей елкәңә тейҙеме? Әйҙә, тегендә һөйләшәйек.

Коридор осонда боролоп, тар ғына бер аулаҡ бүлмәгә инделәр, көрән ҡара таптары менән сыбарланған яланғас таҡта өҫтәл ҡырына йәпләштеләр.

-- Йә, беҙҙең беренсе номерлы фарманға ни булған?

-- Үҙегеҙгә мәғлүм: бөтә тирә-яҡ гөбөрнәләрҙә бөтә власть пролетариат ҡулына күсте, Советтар урынлашты; дөрләү ялҡын оҙаҡламай беҙҙе лә ялмап аласаҡ, социалистик революцияның ошо еңеүле хәрәкәтен туҡтатыр көс-ҡеүәт юҡ; атаман Дутов диктатураһы ла бөгөн-иртән серек ситәндәй ауасаҡ; күрәләтә башығыҙҙы пролетариат суҡмары аҫтына ҡуйҙығыҙ! – Мейеһенә тынғы бирмәгән борсолоуҙарын бер тынанан түгелдерҙе.

Әхмәтзәкир, башын баҫып байтаҡ уйланып ултырғас, кинәт кенә һораны:

-- Ә һин үҙең нимә тәҡдим итәһең?

-- Ул фарманығыҙҙы йәһәт юҡҡа сығарығыҙ, Совет хакимиәтенең ҡанаты аҫтына инегеҙ. Урындағы большевиктар партияһы ойошмаһы менән тығыҙ берҙәмлектә эшләгеҙ.

-- Ни һөйләйһең, әллә башҡорт түгелме һин?!

-- Башҡорт булғаным өсөн әйтәм. Бөтә ҡитға ҡуҙғалғанда, беҙ бер кем яҡлы ла түгел, тип, ситтә тороп ҡалып булмай – дөйөм өйөрмә өйөрә барыбыҙҙы ла. Иртәме, һуңмы, йәмғиәттең синыфтарға бүленешен танымай әмәлебеҙ юҡ.

-- Ваҡытынан элек саҡырған кәкүктең башы ауырта. Беҙҙең Марксыбыҙ ҙа, Лениныбыҙ ҙа юҡ, хәҙергә кәрәкмәй ҙә. Башҡорт Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан хәлендә йәшәп ята. Синфи бүленеш тигәнегеҙ – эре завод-фабрикалары, ҡеүәтле аграр тармаҡтары шәхси ҡулдарға тупланған, иҡтисади йәһәттән үҫешкән, алға киткән йәмғиәттәргә хас күренеш ул. Тап шундай булғаны өсөн дә урыҫ ҡапма-ҡаршы синыфтарға айырылып, аҡ һәм ҡыҙыл флагтар аҫтында бер-береһе менән ҡыйыша. Ҡыйышһын, ҡайһы яғы еңһә лә, урыҫтың йән һаны кәмеməҫ, сөнки улар ер сүбеләй бихисап-күмәк. Ә башҡорт йәне миллиардлаған йәнле кешелек донъяһы эсендә ни бары ике милион дана ғына; уларҙы, ҡапма-ҡаршы сафтарға теҙеп, үҙ-ара һуғыштырһаҡ, бөтөн башҡорт халҡы юҡҡа сығасаҡ. Ырымбур большевиктары беҙҙе тап ана шул юлға тарта.

-- Әммә самодержавиены кем тар-мар ҡылды? Большевиктар түгелме? Әллә батша яҡлымы һеҙ?

-- Башҡорт өсөн икеһе лә барыбер.

-- Бәй, ни өсөн?!.

-- Урыҫ батшалары Башҡортостандың бөтә ер-һыу байлыҡтарын, ер өҫтө һәм ер аҫты мәғдәндәрен үҙҙәренә бушлай тейешле, теләгәнсә таларға яраҡлы мал итеп ҡаранымы – ҡараны. Башҡорт халҡын үҙенең бөтмәҫ һуғыштарында пушка

ите итеп ҡулланырға ғына лайыҡлы өнһөҙ ҡолдар итеп һананымы – һананы. Ырымбур большевиктары ла батша хәҙрәттәренең шул сикләнмәгән хоҡуҡтарынан ҡолаҡ ҡаҡмаҫҡа ҡырҡыша.

-- Ә Дутов әфәндегеҙ һеҙҙе ҡан диңгеҙенә батырасаҡ, белегеҙ!

-- Ярай-ярай, тай, мырҙам! – Йәлитов, ырғып тороп, ишеккә бармаҡ тоҫкап күрһәтеп екерҙе. – Ыштанһыҙ малай!

-- Кем ыштанһыҙ икәнен әйтеү ҡыйын – икебеҙ ҙә бер йәштә.

-- Ошо сәғәттә үк үҙеңде бикләтеп ҡуйыр инем, ихлас башҡортлоғоңдо күреп кисерәм. Бар, аҙашҡан башҡорт балаһы, ауыртмаған яғыңа ят!

Бынан һуң Сәлимйән йәшерен еренән сыҡманы; иректәге таныш-белештәре менән, ышаныслы йомошсоһон йөрөтөп, күберәген хат аша хәбәрләште. Сөнки Дутов охранкаһы большевиктарҙы ауларға ныҡ темеҫкенде.

7

Ошо декабрь айында дөйөм Башҡорт ҡоролтайы йыйылырға ла төп сәйәси мәсьәләләрҙе уртаға һалып тикшерергә тейеш ине; Сәлимйән, йәшеренмәй йәшәп ятмыш йәш коммунист ҡорҙашы Ғабдулла Дәүләтшинға ҡош телендәй яҙыу күндереп, уны шул мөһим ҡоролтайҙа ҡатнашырға ла ваҡиғалар йөкмәткеһенән үҙен ҡыҫҡаса хәбәрдар ҡылырға димләне.

Дөйөм тип аталған был ҡоролтай ашығыс, алдан билдәләнгән ваҡытынан элек йыйылды – оҙаҡламай Петроградта асыласаҡ Учредительный собраниены Башҡортостан автономияһының иғлан ителеү факты алдына ҡуйырға. Икенсенән, гөбөрнәлә бөтә власте үҙ ҡулына алған ҙур ғәскәрле атаман Дутовтың башҡорт мәсьәләһенә ыңғай ҡарауын, автономияға хас дошман Ырымбур большевиктарының, үҙҙәре әйтмешләй, “подполье”ла эшкинмәй боҫоп ятыуын, һәм милләттәр мәсьәләһендә бер төрлө һөйләп икенсе төрлө эшләүсән Ленин менән Сталиндың да был арала был яҡтарға ҡулы етмәүен йәһәт кенә файҙаланып ҡалырға уйлағандарҙыр, буғай. “Дөйөм Башҡорт ҡоролтайы” тигәндәре – буласаҡ Башҡорт ерле автономияһы сиктәре эсендә йәшәүсе эре милләттәрҙең бөтәһенән дә унда күпмелер вәкил ҡатнаша, тигән һүҙ.

1917 йылдың 8 декабрендә Каруанһарайҙа йыйылған был III Ҡоролтайҙа тәүге көндә 194 кеше ҡатнашып, урыҫтарҙан – 44, сирмеш (мари), сыуаш һәм татарҙарҙан берәр вәкил була. Аҙаҡҡа табан барлығы 223 вәкил йыйыла. Баяғы Кәрим Иҙелғужин шаһитлыҡ ҡылыуынса:

“Вәкилдәрҙең күп өлөшө ауыл муллалары, хәлле ерекмән-крәҫтиәндәр һәм бик аҙы ғына зыялы синыфтан һәм фронттан ҡайтҡан һалдаттарҙан тора.

Ҡоролтай Ҡөрьән уҡып асыла. Көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәләләр ошоларҙан ғибәрәт:

1. Мәркәз Шураның доклады.
2. Башҡорт автономияһын тәсдиҡлау.
3. Идара ойоштороу.
4. Ер, мәғариф һәм ғәскәр мәсьәләләре.

5. Ситтәр менән эш итеү һәм башҡалар.

Ҡоролтай асылғас та, Әхмәтзәкир Йәлитов һүҙ ала: *“Автономияның төҙөлөшө, автономия булған өлкәләр, бер милләт нисә процентта булырға тейеш? – тигән һорауҙарҙы ҡуйып, ул үҙе үк яуап бирә: “Башҡортостандың бәләкәй һыҙығында башҡорттар 60 процент тәшкил итә, шуның өсөн беҙ уны Башҡортостан тип иҫәпләйбеҙ. Борон башҡорттарҙың тарихын уҡыу менән генә уларҙың ниндәй халыҡ икәнен белә инем. Хәҙер ул көн дә күҙ алдымда. Мин хәҙер бер ягымда Мөхәммәт Ғәлиәссәләмдең күләгәһен һәм бер ягымда Сыңғыҙ күләгәһен күргәндәй булып торам. Большевиктар хөкүмәте хәҙер өҫкә сыҡты. Улар бөтә милләттәргә ирекле юл бирҙе. Ләкин казачийҙар уларҙы танымайҙар”.*

Ҡоролтай көн үҙәгенә ҡуйылған мәсьәләләрҙе тикшерергә керешә. Ырымбур комиссары Архангельский, Ҡоролтайға килеп, бер кемдең рөхсәтенән башҡа йыйылған Башҡорт Ҡоролтайын ҡыуырға тырышһа ла, вәкилдәрҙең ҡаршы тороуҙары менән эшен дауам ителә. Мәркәз Шура етәксеһенең докладын тыңлағандан һуң, Ҡоролтай “Башҡортостан тупраҡлы мөхтәриәтен ойоштороу, урындағы төбәк шуралар менән етәкселек итеү буйынса күргән саралары бөтәһе урынлы һәм ҡәнәғәтләнерлек эшләнгән” тигән ҡарар сығара.

Шулай уҡ Мәркәз Шура ағзалары, Ҡоролтай саҡырылыуын көтмәйенсә, “Башҡортостан автономияһын иғлан итеүҙәрен, уны хәҙерҙән тормошҡа ашыра башлауҙарының бик ваҡытлы эшләнгәнлеген” әйтеп үтәләр. Ойоштороу мәсьәләһендә Башҡортостандың сиктәрен билдәләү ҙә ҡарала. Бында Мәркәз Шура тарафынан ике төрлө проект күрһәтелә. Береһе – Бәләкәй проект, икенсеһе – Ҙур проект. Бәләкәй проектҡа Ырымбур, Һамар, Пермь һәм Өфө гөбөрнәләренең Эстәрле өйәҙендәге башҡорттар керә. Ҙур проектҡа Ырымбур, Һамар, Өфө, Пермь гөбөрнәһенән, Екатеринбург, Шадрин, Красноуфим башҡорт, мишәр, татарҙары керә. Ҡоролтайҙың көн тәртибендә ятҡан мәсьәләләр, айырым комиссияларҙа тикшереү өсөн, һәр бер мәсьәлә тураһында доклад тыңланып, фекер алышыуҙар булғандан аҙаҡ, комиссияларҙа тикшереүгә бирелә.

Иң бәхәсле мәсьәләләрҙең береһе – ер мәсьәләһе була. Йәштәр һәм аҙ ерле башҡорт вәкилдәре ерҙең тигеҙ бүленеүен һәм ер һатыуҙың ҡырҡа туҡтатылыуын даулай. Шул рәүешле күп ерле һәм аҙ ерле вәкилдәр араһында байтаҡ ҡына һүҙ көрәштереүҙәр булғандан аҙаҡ, ер мәсьәләһе лә комиссия тикшереүенә тапшырыла.

Ҡоролтай ҡарарҙарынан:

15 ноябрҙә Мәркәз Башҡорт Шураһы тарафынан иғлан ителгән Башҡортостан милли һәм тупраҡлы мөхтәриәтен Ҡоролтай бер ауыҙҙан тәсдиҡ итә (20 декабрҙә 18-енсе мәжлестә тәсдиҡ ителә).

Рәсәйҙәге Мәркәз хөкүмәте тураһында:

1. Рәсәй йөмһүриәте – төрлө милләт окраиналарҙың иттифағынан (союз федерацияһынан) ғибәрәт бер мәмләкәт. Башҡортостан шуның автономиялы бер өлөшө булыр.

2. Рәсәй Федерацияһына ингән автономиялы өлкәләр сәйәси һәм башҡа хоҡуҡтарында бер тигеҙ булалар.

3. Рәсәй Союз идараһы һәр бер автономиялы өлкәләрҙең бер тигеҙ һанда һайланып ҡуйылған вәкилдәр палатаһынан (Союз палатаһынан) һәм шул милләттәрҙең союзы нигеҙенә ҡоролған Союз судынан ғибәрәт булыр. Союз хөкүмәте төҙөлөүҙә (һан яғынан күпме артыҡ булһа ла) бер ваҡыт өстән артыҡ урын бирелмәҫ. Идара шул Союздың вәкилдәре тарафынан һайланған президент ҡулында булыр...

Ҡоролтайға вәкил булып һайланған, ғөмүмән башҡорт автономияһына ҡаршы хәрәкәт ойоштороусылар татарҙарҙың Ырымбур Хәрби комитеты һәм Өфөнән барған өлкәселәр ойошмаһында була.

Хәрби комитет рәйесе Сәхипгәрәй Ғәбделбәширов һәм секретаре Сәғди Мостафин 1917 йылдың 18 декабрендә Ҡоролтайға ошо ғаризаны бирә:

“Ҡоролтайҙың тотҡан юлына һәм Башҡортостан хөкүмәтенең башында ултырыусыларға ҡаршылыҡ күрһәтеп, 12 сәғәт эсендә түбәндәге һорауға яуап бирелеүен теләйбеҙ.

1. Башҡортостан исеме менән сағылған башҡорттарҙан башҡа татар, типтәр, сирмеш һәм урыҫтарҙың вәкилдәренә халыҡ тарафынан тапшырылған йомоштарын атҡарырға съездың башында ултырыусылар ирек бирмәнеләр.

2. Съезды үҙ ҡулдарына алып һәм башҡорт ҡуҙғалышын үҙҙәренә ҡаратып, Башҡортостанда бер милләттең хакимлыҡ итеүен, башҡорттарҙың мөхәддәс тип танылған ойошмаларын хурлыҡлайбыҙ.

3. Эске Рәсәй һәм Себер мосолмандарының органдары булған Милләт мәжлесен, шулай уҡ мосолман ғәскәрҙәре тарафынан һайланып ҡуйылған Мосолман Хәрби шураһын хуплайбыҙ.

Был талаптар ҡабул ҡылынмағанда яуаплылыҡты ҡаршы килеүселәр өҫтөндә ҡалдырабыҙ”...

Сәлимйән, әлбиттә, ошо шаулы-даулы, шул уҡ ваҡытта тарихи ҙур әһәмиәтле йыйындың ултырыштарына бара алманы, сөнки ҡалала Дутовтың йәшерен хеҙмәт (охранка) темеҫкендәре ҡасып-боҫкан большевиктарҙың эҙҙәренән һунар эттәреләй еҫкәнеп, әләккәндәрен атып йөрөр мәл ине. Шулай ҙа ул үҙенең кешеләре аша ваҡиғалар шаңдауында ҡайнашты. Бер ҡараңғы төндә уның бүлмә тәҙрәһе һаҡ ҡына сиртелде лә асыҡ тындыҡтан ҡағыҙ төргәге төштө -- күптән сәмләнеп көтөлгән, иректәге йәш коммунист Ғабдулла Дәүләтшин атҡарған сәләм ине:

“Хөрмәтле өлкән арҡадаш, Ҡоролтай ваҡиғаларынан ҡыҫҡаса хитапнамә.

Үҙең белгән башҡаларға ла әһәмиәтле булыр тип, урыҫса сыйғыслайым.

Артабан айырым дәфтәрҙә -- ваҡиғалар шаңдауы:

Курултай работал восемь дней, с 8 по 20 декабря 1917 года в здании Каравансарая.

Курултай прошел оживленно, с большим подъемом. В нем хотя участвовали все слои населения, даже представители пролетарской интеллигенции, верившие в демократичность этого движения, но абсолютное большинство состояло из представителей имущего класса и руководящую роль в

Курултае играло большинство, состоящее из феодалов, баев, духовенства, офицерства и буржуазно-национальной интеллигенции...

Были приглашены в качестве гостей известный татарский журналист, редактор газеты "Вакт" и представитель Оренбургского губернского Мусульманского шуро Фатих Каримов, который выступил против башкирской автономии. Он в слезах заявлял, что "нация расколится, что в отдельности мы погибнем".

От имени Оренбургского казачества и казачьего Войскового Круга и "правительства" поздравил Курултай А. Богданов, высказавший большую речь.

Поздравляли Курултай и представители русского и украинского кулачества, Алаш-Орды и т.д.

О провозглашении автономии сделал доклад Ахметзакир Ялиди и представил проект автономии на утверждение Курултая.

Известный татарский писатель Галимзян Ибрагимов, приехавший как делегат от имени "Миллят Маджлеси" ("национальное собрание", которое в это время происходило в Уфе) выступил в основном в защиту точки зрения Ф. Каримова в национальном вопросе, но чтобы не разъединиться с башкирами, предложил от имени "Миллят Маджлеси" проект штата "Идель – Урал" (Урало-Волжская республика), составленный и принятый "Миллят Маджлеси" под влиянием татарских левых эсеров и меньшевиков, чтобы вводя в него все нации, отгородиться от советской России и спасти частной собственности богатых слоев; призывал башкирских депутатов присоединиться к этому проекту.

Я высупая говорил об отдельной народно-демократической Башкирской республике, но мне очень трудно было говорить – З. Ялиди беспрерывно звонками мешал мне высказать свое мнение, делая замечания, что я задеваю личность Ф. Карими и т.д... Например: о социализации земли – я сказал, что не надо бояться социализации, никто не будет трогать, отнимать у башкир их земель (потому что так пугали народ), при социализме все будут равными, не будет помещиков и бедных, батраков; в газете "Башкорд" это писано очень сокращенно, схематично – "пока не будет социализации на всем Земном шаре, никто не имеет права делить башкирские земли". В газете "Вакт" и др. буржуазных газетах о моем выступлении ничего не было печатано.

Я хотя и участвовал в Курултае в качестве гостя, с совещательным голосом, но работал в комиссии Курултая по народному просвещению в качестве ее секретаря (председателем был Муллазян Халиков, членами: Н. Тагиров, Багбестан[52] Ханым, В. Габидов и другие, фамилии которых не помню).

Активное участие принимал на Курултае вам известный талантливый поэт башкирского народа, мой друг Шахи-Задэ Бабич. На торжественном многолюдном вечере, посвященном Курултаю, он с огромным успехом прочел свое знаменитое стихотворение, посвященное Курултаю... Здесь были сыновъя и известного башкирского черносотенного ишана ("святого") Курбангалиева, которые поверх военных мундиров (они были царскими офицерами) надели елян

[52] Багбестан – Бағбостан Вилдан ҡыҙы Мөьминова (1884, хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Ҡабан ауылында – 1963, Өфө ҡалаһында) – танылған мәғрифәтсе, Ырымбурҙа ҡыҙҙар мәктәбе аскан, Совет осоронда Өфөлә уҡытыусы.

(чапан), а на голову чалму. Один из них во время перерыва перед всей публикой подарил Ялидову и Ш. Манатову царские сторублевые бумажки...

Напоследок в Курултае был избран предпарламент из 22 членов (своего рода временное правительство) в нижеслудующем составе: Шариф Манатов, Закир Ялидов, Мирасов Сагит, Илдархан Мутин, Аллабирде Ягафаров, Хабибулла Габитов, Юныс Бикбов, Нурый Тагиров, Хажиахмет Рамиев, Муса Смаков, Галиахмет Гаитбаев, Риза Фахритдинов, Харис Юмагулов, Халик Амиров, Госман Токымбятов, Г. Идельбаев, Гумер Куватов, Аксулпанов (полковник), Гимран Магазов, Искандяр Султанов, Г. Фахритдинов, Гайнулла Гифранов.

Кандидаты: Гани Табизов, Шакиръян Кылысбаев, Габдулла Адигамов.

Между прочим, в Курултае возник спор между молодыми делегатами и стариками по земельному вопросу и насчет выборов, который быстро был улажен.

Надо сказать, на этот раз Курултай принял частично вполне демократичные постановления по земельному вопросу, а именно параграфы 7,8,11, в которых говорится, что земли разделяются прежде всего между безземельным, малоземельным населением, независимо от их пола, возраста, национальности и вероисповедания; оставшиеся после разделения излишки земли остаются в фонде земельных запасов Башкортостана; правом пользования землей обладает каждый гражданин, независимо от его пола, возраста, вероисповедания, национальности и независимо от того, издавно живет он на данной территории или является пришлым (припущенником)"...

"Дәәә, быныһы яҡшы – сәйәси аң айлап түгел, көнләп керә халҡыбыҙға", тип ҡәнәғәтләнеп уйланы Сәлимйән. Шулай ҙа, инанған коммунист булараҡ, хәбәрҙең барлыҡ йөкмәткеһенән үҙенең партияһы өсөн күңелһеҙерәк төп һөҙөмтәгә килде: "Тимәк, ваҡыт беҙҙең йоҡлап ятҡанды көтмәй – буржуаз-милли автономия де-факто пәйҙә булды алдыбыҙҙа. Ни хәл итәһең, быныңменән ваҡытлыса килешмәй мөмкин түгел, сөнки, ит юғында үпкә лә танһыҡ, ти халыҡ. Күп тә үтмәҫ, беҙ был буржуаз автономия локомотивын коммунистик рельскә күсерербеҙ, әммә һис тә, Петроградтағылай, ҡораллы көс ҡулланып түгел, ә парламент алыштары аша шөйлә тыныс юл менән; сөнки бында дөйөм Рәсәйҙең Октябрь түңкәрелеше ҡулайһыҙ – шарттар башҡа. Башҡорт халҡының һиҙемләүе, сәйәси тойғоһо көслө; әгәр аҡтыҡ сиктәргә бәрелмәй-һуғылмай, халыҡ араһында ең һыҙғанып дөрөҫ сәйәсәт үткәрһәк, ул үҙенән-үҙе коммунизм ҡояшына үреләсәк, буржуаз юлбашсыларын да һелкеп ташлаясаҡ иңенән. Быныңөсөн беҙгә, коммунистарға, массалар араһында коммунизм идеяларын таратыуҙы киң йәйелдерергә, ысын башҡорт коммунистарын күпләп өлгөртөргә кәрәк!"

Хитапнамә аҙағында Ғ. Дәүләтшиндың ыҫпай һыҙылышлы матур ғәрәп хәрефтәре менән өҫтәлгәнен диҡҡәтләнеп уҡыны:

"Ҡоролтайҙың түрендә ҡатнашҡан мөғәллимә Бағбостан Ханым башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ысынлап та ғөлбаҡсаһы, аҫыл сәскәһе рәүешендә ғәләмебеҙҙе мәғрифәт нурына ҡойондороп балҡыны. Һәм мин бына ни уйланым: тыуасаҡ Совет Башҡортостанының мәғариф халыҡ комиссары булырҙай бөйөк ғалиә был!

Әйтелгәндәргә өçтәп, дуçым Шаһизада Бәпестең өçтәрәк телгә алынған аçыл-ынйы шиғырын күсереп бирмәйенсә хәлем юҡ:

Олуғ шатлыҡ

(Башҡортостан мөхтәриәте иғлан ителеү һәм Каруанһарай ҡулыбыҙға алыныу мөнәсәбәте илә)

Яңғырап, шаулап сыҡҡан шатлыҡ йырын
Фәрештәләр һөйөнөп тыңлаһын.
Шатландырҙың, Тәңрем, һибеп нурың,
Башҡортостан халыҡ донъяһын.

Ябраил мәләк, елпеп ап-аҡ ҡанат,
Осоп йөрөһөн Башҡортостанда.
Хәбәр итһен тиеп: “Булдың азат!
Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға”.

Азат булды ғәзиз Каруанһарай,
Азат булды барлыҡ ерҙәрең...
Йырлап ебәр һөйөнөп, уйнап ҡурай,
Сыҡһын тиҙерәк шатлыҡ йырҙарың.

Теләктәрең алға килүб тора,
Азатлыҡҡа ошбу ғәләмәт.
Инүб тора “дәүләт”, ҡунуб тора,
Киләсәгең яҡты, сәләмәт...

“Бәхет ҡыҙы” матур йөҙөн асуб,
Һиңә табан көлөп бороло...
Шатлан, уйна, һикер ярһып-ярһып!
Күпме шатланһаң да урынлы...

Үләм... Ташам... Тормайым, күккә ашам...
Үкенмәйем инде үлһәм дә...
Үкенмәйем инде тыуған йортҡа
Күкдин ҡарап көлөп торһам да...

Ҡоролтайҙан ҡала яңылыҡтар шул: дуçым Бәпес тырышлығы менән башҡорт зыялы йәштәренең “Тулҡын” ойошмаһы тыуҙы, үҙенең шиғри тулҡындарын Башҡортостан киңлектәренә йәйелдереп ебәрҙе. Ойошма идаралығына ағза итеп (үҙем юҡта Ш. Бәпес тәҡдиме менән) мине лә һайлағандар. Йәштәрҙең сәйәси тормошондағы бик мөһим ваҡиға һанап, Шаһизада Бәпес яҙған иғланнамәнең “Башҡорт” (1918, 5 ғинуар) гәзитендә баçмаһының киçентеһен теркәйем (беҙҙең партия эшендә лә, бәлки, кәрәге тейер):

“Дулҡын” оешмасы

(мөһим иғлан)

1917 ел 18 декабрда, 3-нче Башҡортостан Ҡорылтаена һәр тарафтан килгән яшь фикерле вәкилләр һәм Башҡорт Мәркәз Шурасында эшләүче яшьләр һәм бәғзе яшь мөғәллимләр үз-ара жыйналышып бик мөһим, бик матур бер маҡсатҡа бисмилла әйтеп нигез ташы салып киттеләр.

Улдыр кем:

“Башҡортостан яшьләре берлеге”.

Соңғы жыелышта ҡушылған исеме белән әйтсәк:

“Дулҡын” оешмасы.

“Дулҡын” оешмасының күзәтә торған маҡсады, әлбәттә, һәрбер аңлы яшьләргә мәғлүм. Чөнки ул маҡсадлар ихтыярсыз һәр яшь кешенең күңелендә дулҡынлана. “Дулҡын” оешмасы көчләнеп чығҡан бер нәрсә булмаенча, яшьләрнең күңел дулҡынынан хасил булған табиғый бер оешмадыр.

“Дулҡын”ның алға алған маҡсадлары филжөмлә шуннан ғыйбарәт: Башҡортостанға яшь фикер, матур аң тарату, һәр төрлө ҡара фикер вә хөрриәт микрублары, ҡара көчләр белән көрәшү, таралған яшьләрне оештыру, милли тел, милли әдәбиятның һәм аның хадимләренә мөхәббәт иттерү, күмелгән хазиналарын аҡтарыб чығару, Башҡортостан халыҡ әдәбиятын жыю, ҡаләм әдәбиәтенең һәр төрен күбәйтергә тырышу, оешма исеменнән әдәби журнал вә газеталар нәшер итү, Башҡортостанның жыр, көй һәм музыкасын тәрәҡҡый иттерү, һәр жирдә милли кичәләр ясау өчен һәвәскәр труппалар вөжүдкә китерү, һәр төрле әдәби юллар белән яшьләр йөрәгенә рух, ямь бирү, үлгән, тупасланған, туңған хаятны жанландыру, нәфисләү, бизәкләү, яшь талантларға, әдәби көчләргә юл күрсәтү, ярдәм итү, бу көнгә ҡадәр ҡара көчләр тәсәллыты[53] астында ҡараңғы тормышта изелгән ханым вә туташларыбызны ағарту, аларның яҡты, азат яшәүләренә тырышу.

Ҡысҡасы, Башҡортостан яшьләренең йөрәк вә рухларын тәрбия һәм Башҡортостанда тел-әдәбиятҡа вә сәнаиғ нәфисәгә хезмәттер.

Икенче тәғбир белән:

Тигәнәк, әрекмән, аҡсырғаҡлар, шайтан таяғы, эт эҙәгесеннән вә маәшбәһәләрдән[54] ғыйбарәт баҡчабызны әрчеп гөлләндерү, чәчәкләндерү, һәр төрле хашаратлар вә уҡралардан тазартып былбыл вә күбәләкләргә зәмин хәзерләүдер.

Менә шундый бөек, матур маҡсадларға терәтеп төзелгән бу оешманың барлыҡ истиҡбалы, барлыҡ өмиде, әлбәттә, яшьләрдә генә.

Шуңа күрә оешманы хәзердән һич ҡаҡшамый торған нигезгә утыртыу өчен дулҡынны бөтен Башҡортостанға жәйеп, яшьләрне дулҡынландыру өчен озаҡламастан, Уфа яки Оренбургта ғаят тантаналы съезды ясау лазым[55] дип ҡарар биреләе.

---

[53] Тәсаллыт –тәьçире, йоғонтоһо.

[54] Маәшбәһә -- шуның кеүек.

[55] Лазым – тейешле.

Хәзер төзелгән “Дулҡын” оешмасы баш оешма саналып, һәр авыл, һәр шәһәрдә шөғбәләре[56] ачылырға тиештер. Шөғбәләр дә шулай уҡ “Дулҡын” дип аталыр. Илдәге дулҡынлар һәр нәрсәдән бигерәк ҡара көч, ҡара груһ[57] фирҡаләр белән көрәшүне, әдәбият вә сәнаеғ нәфисәнең ансат вә тиз һазым[58] ителүенең чараларына керешүне иң беренче хезмәт вә маҡсад итеп тотарға тиешләр.

Хәзергә “Дулҡын” оешмасының башҡарма һәйәтенә сайланған кешеләр барлығы 9 кешедер. Устав вә төзү өчен махсус комиссия төзелде. Оешмаға ағза итеп язылу хаҡы елына алты сомдыр.

Ошбуның белән иғлан ҡыламыз: моңа ҡадәр илләрдә төзелгән яшьләр оешмалары бүгеннән иғтибарән үзләрен “Дулҡын” шөғбәсе дип хисаплап, хәбәрләшә башласыннар, бүгеннән башлап ағзалар жыю чарасына керешсеннәр.

Килегез, яшьләр! Килегез! Әдәбиять, сәнаеғ нәфисә сөючеләр! Донъяда милләтнең үз әдәбият вә сәнаеғ нәфисәсеннән дә мөҡаддәс нәрсә юҡлығын белсәгез, “Дулҡын” оешмасына бағланығыз!

Ишетегез! “Дулҡын” нинди мөхәббәтле, нинди сөекле исем!

Яшьләр йөрәгенә нинди мөнасип[59], нинди муафыйҡ[60] исем!

Яшәсен “Дулҡын” оешмасы!

Яшәтегез “Дулҡын”ны! Һәм дулҡынландырығыз Башҡорт донъясын!

Сөендерегез әдәбият, шиғыр һәм моңлар фәрештәсен!

Утырышның Баҡшарма ағзалары: **Ш. Бабич, Хәбибулла Ғабитов, Нуриәғзам Таһиров, Ғайнулла Ғыйрфанов, Ғабдулла Дәүләт, Фәтхи Әхмәдуллин, Вәлирәхман Ғабитов, Сәхи Рәхмәти.**

Оешманың идарәсе хәзерге Караван Сараенда, Башҡорт Мәркәз Шурасы хозурында.

Хәбәрләшү өчен адрес:

г. Оренбург, Башкирский Областной Совет, для об.-ва “Тулкун”.

Сәлимйән, ойошманың Башҡармаһына ул үҙе яҡшы белгән большевик рухлылар Ғабдулла Дәүләтшин (Ғ. Дәүләт), Фәтхи Әхмәҙуллин, Сәхи Рәхмәти-ҙәрҙең дә кереүенән ҡәнәғәтлек кисереп, бөгөнгө ғөмүми Рәсәй мөхитенең азатлыҡ дәрте ҡуҙғалтҡан был йәш тулҡынды Башҡортостан мосолмандары араһында коммунистик идеялар таратыу ҡоралы рәүешендә файҙаланыу тейешле, тип уйланы.

8

[56] Шөғбә -- бүлек.

[57] Груһ – төркөм, группа.

[58] Һазым – һеңдереү.

[59] Мөнасип – тиңдәш.

[60] Муафыйҡ – килешле, ярашлы.

Рәсәйҙең ошо елле-дауыллы йылдарында сәйәси мөхит тигәндәре ваҡыт ағылышы тиҙлегендә үҙгәрә, көтөлмәгән хәлдәр килә алдыңа. Ваҡиғалар сылбырының сыңғырлауын большевиктар атаған “иҙән аҫтында” – йәшерен фатирға бикләнеп тыңлауҙан биҙәрләгән Сәлимйән, ҡаланың үҙәк майҙанында башҡорттарға ҡапма-ҡаршы ҡуйылған ҙур ваҡиға – татар байҙарының, сауҙәгәр һәм приказчиктарының алҡышлауында “Ырымбур Мосолман виләйәт шураһы”ның Хәрби комитеты ойошторған мосолман полкына әһле-Ислам әләме тапшырыу тантанаһы буласағын ишетеп, түҙмәй, атлығырға йыйынды. Өҫ-башын ябай татар дворнигыныҡына алмаштырҙы ла, байтаҡтан бирелә ҡырынмаған йөҙөнөң дә һаҡал-мыйыҡ ҡурпыуҙан шаҡтай үҙгәреүенә шөйлә ҡәнәғәтләнеп, саф һауалы урамға сыҡты.

Майҙанға килеп еткәнендә мәжлестең иң ҡыҙған сағы: күбеһенсә татар дворниктарынан, фәсле шәкерттәрҙән, аҡ кәбеҫтә салмалы муллаларҙан һәм хөрриәт тәмен татырға эркелгән ханым һәм туташтарҙан хасил тамашасылар теҙеме алдына үркетелгән тәпәшәк кенә ағас мөнбәрҙән офицерҙар һәм байғуралар вәғәздәрен һөйләп бөткән, Хәрби комитет рәйесе Сәхипгәрәй әфәнде телмәр тота, ә ҡаршыла майҙан уртаһында, шыйыҡ ҡына теҙелеп, оҙаҡ тороп өшөүҙән йәшерен ҡалтыранып, заманынса иҫке-моҫҡо кейемле мосолман полкы һалдаттары шаҡырайған. Мөнбәр йәнәшәһендә, еҙ торбаларын ялҡылдатып, ҡаланың ут һүндереүселәр командаһының тынлы оркестры хәйерле мөҙҙәтен көтә. Телмәр теҙеме осланып, полкка әләм тапшырыу тантанаһы иғлан ҡылынып, башы осонда йәшел туҡыма елберләткән аҡ салмалы, аҡ еләнле имам хәҙрәт тамаҡ ҡырып алға сыҡты, полк теҙеменең урталығ тәңгәлендә хәрбиҙәрсә яҡшы кейемле тиҫтәләп ғәскәриҙәре төркөмөндә көтөп торған полк командиры Ғосманов алдында туҡталды. Имам хәҙрәт ҡулындағы йәшел әләм ҡаршы елгә ҡанатын киреп ялпылдауы һәм Ғосманов аҡ бирсәткәле ҡулын күтәреүе ыңғайына хәрби төркөм ауыҙҙары берҙәм һәм киң асылып, гөрләтеп тә ебәрҙе:

Пушка берлән жир селкетеп атарбыз без,
Дошманларның баш сөйәген ватарбыз без.
Хисабы күп хәсисләрнең[61] ҡаршысында
Хисабы аз, ғайрәте күп татарбыз без!

Шанлы йыр бөтөр-бөтмәҫтән, Сәхипгәрәй әфәнде бейек мөнбәренән тамаҡ ярып һөрәнләне:

-- Жәмәғәт, иғтибар ҡылыңыз: әле генә жырланған бөйек гимныбызны ижад итүче ғаләмәт мәшһүр шағиремез, полкның үзе теләп язылған ғайрәтле йәш суғышчысы Нияз Чишмәле әфәнде нәҡ үзе туп-тура имам хәзрәт ҡулларыннан изгелекле әһле-Ислам әләмен ҡабул ҡылыб ала! Ура!

-- Ур-рааа! – Оран шаңдаулатты майҙан.

Оркестр гөрләтеп тантаналы марш уйнаған арала йәшел әләм ышаныслы ҡулдарға тапшырылды: уны ҡабул ҡылып алған тәбәнәк буйлы шағир Нияз Чишмәле, эргәһендәге башҡалар кеүек үк шаҡтай яңы һоро шинель, ҡырма

[61] Хәсис -- әшәке, түбән, һаран кеше.

бүрек кейһә ләү аç яҡтан бик имәнес – аяҡтарында ирнәүҙәре иҫкереп-тетелеп үк бөткән, ҡара һумалалы киндер еп менән эре алдырып табанланған аршын башлы урыҫ быймаһы ине; өҫтәүенә, береһенең үксәһе дөйә ауыҙылай асылып, олтан итеп һалынған йомарлам һаламы ҡарыш оҙонлоҡ тышҡа тырпайып сыҡҡан. Тамашасы ир-ат быға иҫе китмәй ҡараһа ла (заманаһы шундай бит!), аҫыл заттар ҡыҙғаныбыраҡ сырылданы:

-- Уй бахырғынам, аяғы туңмый микән?!

-- Адәм рәтле киез итек тә табып кидермәгәннәр!

-- Әхирәткәйем, шүрәле аяғыдай бит! Андый кәттә аяҡ киемен, монда түгел, Мәкәржә йәрминкәсендә дә тапмассың!

-- Ҡазанға заказ бирергә кирәк иде!

Ер тетрәтеп уйнаған марш ыңғайына аҙымдарын ҡайсылатырға тырышып, арҡыры баҫып барған шанлы шағир-байраҡсы, аҙымы һайын һалам олтаны уғата тышҡа сығып, икенсе аяғына һуғылыуҙан тышауланғандай һөрләктө; ә шулай ҙа мах бирмәй, саҡ ҡына йылмайҙы ла, бер һелкеүҙә "кейеҙ итек"тәрен ситкә бираҡтырҙы; сылғауҙары ла ҡуныстарҙа һурылып тороп ҡалып, таш урамдың боҙланып шымарған түтәһенә ҡыҙарған ялан табандарын тыҫкылдата баҫып, оҙон-оҙон аҙымдар менән әләмде алға илтте; уның һайын ҡыҙышып гөрләгән еҙ оркестр аһәңендә ғәйәр полкты үҙ артынан эйәртте.

-- Ур-рааа! Ур-рааа! – Күк күкрәтеп тәбрикләне көр майҙан. Мөнбәрҙең ике ҡанатындағы тик тороуҙан өшөңкөрәгән ябай йәмәғәт аптырап та, һоҡланып та һөйләнде:

-- Вәт әй, салдат дисәң дә -- салдат! Челлә суығында яланаяҡ, исе дә китми, ҡарға тычҡылдата басып бара!

-- Автономия диб кәпәренгән надан башҡыртҡа баҡтыртырға кирәк иде моны!

-- Безнең татар салдатларыдай түземле салдат юҡ шул ул!

-- Яшәсен бер нигә дә бирешмәс, утны-суны кичеп үтәр жиңелмәс татар ләшкәре! Ур-ра!

Бер-нисә башҡорт тауышы ла ишетелде:

-- Беҙгә лә кәрәк ине полк!

-- Ҡайһы яҡтан икән ул яланаяҡ?

-- Эйек тамағындағы Шишмә ауылынан, тиҙәр бит...

Сәлимйәндең ҡылт итеп иҫенә төштө: бынан тиҫтә йылдар элек уның менән бер осорҙа Сәнкем-Биктимер мәҙрәсәһендә тырышып һабаҡ алған, ә бер заман һалда килеүсе Шаһизада Бәпесев менән ҡара-ҡаршы мөнәжәттәр әйтешкән аршин табанлы Нияз шәкерт үҙе бит был – ҡыш көнө лә, өйҙән-өйгә ҡыҙырып, төрлө таҡмаҡтар әйтеп, ҡар өҫтөндә яланаяҡ йөрөр ине...

Оркестр гөрөлтөһө тынды, мөнбәрҙәгеләр төштө. Казармалар тарафына йыраҡлашыусы полк теҙеме артынан бер малай-һалдат, шинель салғыйҙарын ярғанаттай ялпылдатып, дәррәү йүгереп килде лә "ғайрәтле"нең бираҡтырған быймаларын яурын баштарына һалып, һөрләгә-һөрләгә кире йүгерҙе; йәшел әләм елберләткән шанлы ғәскәр уның менән ҡуша күҙҙән юғалды. Майҙан ығы-зығыһы ла үҙенән-үҙе шиңде.

9

Әсе буранлы ҡышҡы кисәләрҙең береһендә йәшеренеү урынында эшсе Сәхи Ғәйфи үҙе пәйҙә булып, Сәлимйәнгә яңылыҡ – татарҙарҙың Хәрби комитет рәйесе Сәхипгәрәй Ғәбделбәширов әфәнденең сәркәтибе Сәғди Мостафиндан сәләм килтереүен, Сәлимйәнгә уның бик мөһим һәм ашығыс йомошо барлығын, шул йәһәттән күрешергә рөхсәт һорауын күндерҙе.

-- Минең бында икәнде ҡайҙан белгән, провакация түгелме?

-- Һис тә юҡ, ышаныслы. Минең аҡылы элемтәгә керҙеләр.

-- Дутов охранкаһы булһа, ни эшләрбеҙ?

-- Дутовтың инде һеҙҙәрҙә ҡайғыһы юҡ – күтенә ут ҡапҡан, тиҙәр. Ыҙаулыҡ яғынан Ҡыҙыл Армия дөрә, казактарҙың ике полкы ҡыҙылдар яғына сыҡҡан. Сәхипгәрәй әфәнденең йәшел әләмле мосолман полкы ла болғана, сәркәтибенең йомошо, моғайын, шул хәлҡә бәйлелер. Осрашыуҙың йәшеренлеген һаҡлау вәғәҙә ителде.

-- Килһен, алайһа. Ә шулай ҙа запас фатирҙы байҡа.

Шул төндә үк Сәхи Ғәйфи үтенеүсене килтереп еткерҙе; Сәғди Мостафиндың йөҙө ҡурҡынып ағарынған, ҡулдары ҡалтырана. Баҡтиһәң, Ыҙаулыҡ яғынан ҡыҙылдар етеп килеү сәбәпле Дутов штабы ҡаланан сығып ҡасҡан, артауыл командаһының да һуңғы казактары ашығыс олаға...

-- Инде ҡалада ике төп сәйәси көс: башҡыртларның бушҡуыҡ хөкүмәте дә безнең Хәрби комитет хөкөм сөрә, Дутов безне хыянатчыл ташлап тайды; башҡыртларда эшебез юҡ, теләсә ни эшләсеннәр, әммә безнең һич кенә дә ҡызыл тигермән ташынан тартыласы килми; без автономислар түгел, һәр жәһәттән без ҡызылларға тоғро хезмәт итербез, без алар белән уртаҡ тел табырға әзер. Рәйесебез Ғәбделбәширов әфәнде тап шул хаҡта сезнең, абруйлы мосолман большевигының, аныҡ фикерен белергә ҡушып жибәрде мине. Хәрбиләрчә әйткәндә, аҡ әләмле парламентер ҡылып...

-- Вәкәләтлегегеҙ ни менән иҫбатлана?

“Парламентер” гимнастеркаһының түш кеҫәһенән дүрткә бөкләүле ҡағыҙ сығарып бирҙе; унда ошо Мостафин Сәғди әфәнденең Хәрби комитет исеменән һөйләшергә вәкәләтлеге раҫланып, рәйестең ҡултамғаһы, мөһөрө сәпәлгәйне.

-- Хәлегеҙ шәптән түгел, аңлайһығыҙ. Дутов ҡанаты аҫтында төҙөлгән, Дутов арсеналынан ҡоралландырылған полктың кем яҡлы икәне ахмаҡҡа ла аңлайышлы.

-- Ләкин без әле яңа ғына төзелдек, ҡызылларға ҡаршы бер пүлә дә атмадыҡ.

-- Өлгөрә алмай ҡалдығыҙ.

-- Алай димәгез әле. Бизмән табағына безләрне казак Дутов берләп бергә салмағыз.

-- Ни айырма?

-- Алайса, Каруансарайдағы башҡырт хөкүмәте дә Дутов ҡанаты астында борынлады бит, алар бездән ни яғы белән айырыла?

Сәлимйән көлдө:

-- Икегеҙҙең айырмаһы – Ер менән Күк араһы. Каруанһарайҙағылар – бер һалдаты ла булмаған барлы-юҡлы сәйәси ойошма ғына. Ә һеҙ – ҡораллы ғәскәр.

-- Алайса, ҡаланы ташлап чығарғамы?

-- Ул саҡта һеҙ Дутовҡа ярҙамға киткән һаналырһығыҙ. Кәңәш итмәйем. Ҡыҙыл Армия командирҙары алдында ышаныс ҡаҙанығыҙ.

-- Ничек итеп? – "Парламентер", ҡороҡһоған тамағына төкөрөгөн саҡ йотоп, маңлайына бөрсөк-бөрсөк ҡалҡҡан тирен усы менән һыпырҙы.

-- Ярымайлы йәшел әләмегеҙҙе кисекмәҫтән ураҡ-сүкешле ҡыҙылға алмаштырығыҙ. Түшегеҙгә һәм бүркегеҙгә ҡып-ҡыҙыл таҫма тағығыҙ. Ҡыҙылдарға шул ҡиәфәтле делегация ебәреп, тәбрикләп ҡаршылағыҙ...

Һәм тап шулай булды ла: Сәлимйән Мырҙағолатов иптәш ярҙамында ҡыҙыл әләмләнгән Ғәбделбәширов иптәш һөжүм итеүсе ҡыҙыл ғәскәр башлыҡтары Кобозев Петр Алексеевич (Ырымбур – Турғай өлкәһенең ғәҙәттән тыш комиссары), Цвиллинг Самуил Моисеевич (Ырымбур гөбөрнә Ваҡытлы Хәрби-Революцион Советы рәйесе) иптәштәр менән уртаҡ тел табып, татарҙарҙың Мосолман Хәрби комитеты ҡып-ҡыҙыл төҫтәге "Ҡыҙыл Мосолман Хәрби комитеты"на әүерелде, ә әләм йөрөтөүсе яланаяҡлы шағир Нияз Чишмәле хеҙмәт иткән ғәйәр "ҡыҙыл полк" Шанил Ғосманов командирлығында Һайылмыш йылғаһы буйына аҡтарға ҡаршы һуғышҡа йүнәлтелде. Каруанһарайҙағы "Тулҡын" йәштәр ойошмаһы етәкселегенең дә большевиктар тәьҫире аҫтында башҡорт автономиясыларынан айырымланған Ғабдулла Дәүләтшин, Бәхтегәрәй Шәфиев, Сәхи Рәхмәти кеүек бер өлөшө татарҙарҙың баяғы йәһәт ҡыҙылланмыш Хәрби комитетына һырнығып, Цвиллинг рәйеслегендәге Ырымбур Хәрби-Революцион Советтың милләттәр эше буйынса комиссары Ғәли Шәмиғолов (Башҡортостан автономияһының ҡан дошманы) һәм уның тоғро ярҙамсыһы Баһау Нуриманов етәкселегендә буржуаз башҡорт хөкүмәтен аҫтан киҫеү юҫығында эш йәйелдерҙе. Шулай ҙа тәүге осорҙа урыҫ большевиктары был хөкүмәтте асыҡтан-асыҡ үҙ ҡулдары менән тар-мар ҡылырға әллә баҙманылар, әллә форсат көттөләр.

Ҡала үҙәгендәге билдәле Панкратовтар йортонда урынлашҡан Хәрби-Революцион Советтың яҡты, иркен бүлмәһендә Сәлимйәнде Цвиллинг үҙе ҡабул итте, ҡыҫҡа ғына хәтирәләргә бирелеп, теге саҡта Смольныйҙағы Сталин иптәш бүлмәһендә танышыуҙарын иҫкә алдылар. Дутов диктатураһы осорондағы подполье, Башҡортостан хәлдәре һәм буржуаз башҡорт хөкүмәте тураһында баш баҫып фекер алышҡас, рәйес һынаулы ҡарашын серҙәшенә күсерҙе:

-- Мосолман большевик булараҡ, бөгөнгө башҡорт хәрәкәтен ҡайһылайыраҡ аңлайһығыҙ?

-- Милли аңы уянған айырым төбәктәге үҙенә күрә тыныс юл менән башҡарылған буржуаз революция. Уны шундай уҡ тыныс юл менән социалистик революция еңергә тейеш.

-- Татар патриоттарынан Борһан Шәрәф, Фатих Кәримов иптәштәр булып киткәйне... Автономиясылар Башҡортостанды Россиянан айырымландырыуға юҫыҡланды, тип еткерҙеләр.

-- Башҡорт буржуаз милләтселәренә һаҡ ҡараған кеүек үк, ул “патриот”тарға ла шулай ҡарарға кәрәк. Миңә, мәҫәлән, бер факт билдәле: ошо көндәрҙә Каруанһарайҙан Ленинға телеграмма һуҡҡандар, унда, әгәр үҙебеҙҙең полкты булдырып, эске эштәребеҙ менән үҙ аллы шөғөлләнеү мөмкинлеге бирелһә, Советтарҙың юғары хакимиәтен бер һүҙһеҙ ҡабул ҡылабыҙ, тип әйтелгән. Айырымланыу мәсьәләһе лә ялған, сөнки баштан уҡ улар Россия эсендәге бер штат булып йәшәү – федерализм яҡлы. Милләт-ара ҡанҡойош булмаһын өсөн, башҡорт мәсьәләһен бик һаҡ, түҙемле сисергә кәрәк, минеңсә.

-- Беҙ шулай итәбеҙ ҙә. Вәкилдәрен саҡырып, ойоштора башлаған полктарын беҙҙең төп шарттарға яраҡлаштырыу маҡсатында йылы ғына һөйләштек, Зәкир Йәлитов әфәнде үҙе килде. Тик һеҙ, ысын коммунист булараҡ, яҡшы аңларға тейеш: был – ваҡытлы сара, тактика, сөнки бер территорияла ике хакимиәт йәшәргә тейеш түгел. Минең Силәбенән саҡыртып алған иҫке танышым – милләттәр эше буйынса кәңәшсем Ғәли Шәмиғолов иптәш әйтмешләй, бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай, хе-хе-хе...

-- Уныһы хаҡ. Тик был хаҡлыҡ автономияның асылына ғына бәйле: буржуазмы ул, әллә социалистикмы? Социалистик автономия Ғәли Шәмиғолов иптәштең мәкәленә ярашмай. Шул уҡ Зәкир Йәлитов әфәндене лә, яйлап-майлап, партияға алырбыҙ, социалистик ҡалыпҡа ултыртырбыҙ. Ултырмаһа, урынына башҡаны – үҙебеҙҙекен ҡуйырбыҙ.

-- Поживем – увидим. Әйткәндәй, ул урынға үҙебеҙҙән кемде ҡуйыр инегеҙ?

-- Башыма килгәне юҡ. Һәр хәлдә, Ғәли Шәмиғолов түгел. Әммә лайыҡлы инсандар күренгеләй, үҙегеҙ белгән Ғабдулла Дәүләтшин кеүектәр, мәҫәлән.

Цвиллинг дуҫтарса бармаҡ янап көлдө:

-- Һәй мошенник, үҙегеҙҙең исемде атарһығыҙ тип көткәйнем!.. Йә ярай, әлегә йөрөп тороғоҙ. Өйәҙ ҡалағыҙ Орскиға барып, шундағы тарҡау большевик-тарҙы һәм теләктәштәрҙе бер ҡорға уҡмаштырып, партиябыҙҙың яугир өйәҙ комитетын төҙөп ҡайтығыҙ. Граждандар һуғышының әле ҡайнаған сағы – башҡорттарҙан ҡыҙыл гвардия ойоштороуҙы тиҙләтегеҙ. Башҡорт еренә һипкән орлоҡтарыбыҙ яҡшы шытһа, унда һеҙ әйткән тыныс юллы социалистик революция ла, социалистик автономия ла булыр!

Бәйләнеште өҙмәҫкә, осрашып торорға һүҙ ҡуйышып, иптәштәрсә ҡул ҡыҫышып хушлаштылар.

Сәлимйән Орскиҙа был йөкләмәне уңышлы үтәп, унлап коммуниска партия билеттары тапшырып һәм уларға алдағы эш бурыстарын тәғәйенләп, үҙенең Үҫәргәнендәге башҡорт ауылдарына тартылды, урындарҙағы “Тулҡын” ойошмаһына береккән йәш йөрәктәр араһында коммунистик идеялар йәйелдереп, киләсәктең милли коммунистарын әҙерләргә, тәрбиәләргә кереште, ойошмалар араһында һәм өйәҙ партия комитеты менән тығыҙ бәйләнеш булдырҙы; аҡрынлап ҡына башҡорт йәштәренә ҡыҙыл гвардия ойоштороу идеяһын һеңдерҙе. Ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына булһа ла, ауылға һуғылып китмәйенсә түҙмәне, сөнки атай менән әсәй ҡартайған, унан башҡа ҡарар кешеләре юҡ; Ҡантурат та уның ҡайтыуын зарығып көтөп торған. Йәшлегенең Гөлсәсәге йөрәк һыҙлатып төштәренә керһә лә, яҙмышты яңы аҡ биттән яҙа башларға – берәй

матур ғына һылыуға өйләнеп, башлы-күҙле булып, талығҡан иңдән һуғыш шауҡымдарын һелкеп ташларға, ата-бабаның мәңгелек шөғөлөнә -- ерекмәнлеккә ерегергә ҡыҫтаны ерҙе өҙөлөп һағынған ерекмән тәбиғәте. Һәм шулай булыр ҙа ине, *ләкин*...

Өйәҙ халҡы ҡапыл ҡубынып нәфрәтләнде – 4 февралдә Ырымбурҙа большевиктар башҡорт хөкүмәтен ҡулға алғандар, был енәйәтте Ғәли Шәмиғолов етәкселегендә татар һалдаттары башҡарған. Сәлимйән тәүҙә ышанмайыраҡ торһа *ла*, Орскиҙағы иптәштәре ебәргән -- Ырымбурҙың шул уҡ числола баҫылған "Известия" гәзите килеп етте; С.М. Цвиллинг ҡул ҡуйған рәсми белдереүҙе йөрәкһеп һәм көйәләнеп уҡыны: *"Ҡалалағы Мосолман Хәрби комитетының талабы буйынса һәм улар тарафынан ҡулға алынған башҡорттарҙы совет төрмәһенә бикләргә рөхсәт бирелде".* Сәнкем-Биктимер төбәгендә бергәләшеп ҡыҙыл гвардия ойошторошҡан ҡорҙашы – казак большевигы Ғәбделәхәт Сәйетбат-таловтан юлаусы аша килеп еткән "Казачья правда" гәзитендә "Башҡорт контрреволюционерҙары" тигән дөйөм баш аҫтында татар әһелдәре Камил Кәримов менән Ибраһим Бикчәнтәйевтәрҙең[62] мәкәләләре бирелеп, ҡулға алыныусылар "монархист һәм ер биләүсе реакцион капиталистар" тип тамғаланғайны; Борһан Шәрәф менән Фатих Кәрим иһә Зәкир Йәлитовты ҡулға алыуҙарын ябай ғына: шәхсән үҙен күрә алмауыбыҙ арҡаһында, тип аңлатҡандар... Һуҡты *ла* күпте *лә*, тигәндәй, шул уҡ 4 февралдә "контрреволюцион" башҡорт хөкүмәте урынына Совет Башҡортостанының Ваҡытлы Революцион Советы төҙөлөүен, ваҡытлы рәйесе итеп Ғабдулла Дәүләтшин, урынбаҫары – Бәхтегәрәй Шәфиев, сәркәтиптәре Ғ. Алпаров менән Ж. Шәрипов һайланыуын хәбәр иттеләр. Ылғый большевик һәм теләктәштәрҙән хасил был яңы совет хөкүмәтенә Сәлимйән һәм уның тирәһендәге йәштәр бик ыңғай ҡараһа *ла*, күпселек халыҡ ҡабул ҡылманы быны – үҙҙәре һайлап ҡуйған элекке башҡорт хөкүмәтен яҡлап туланы башҡорт һәм был – бөтә Башҡортостан буйынса ине. Мәғлүмәттәргә ҡарағанда, шул көндәрҙә илдең төрлө төбәктәренән етмеш инсан Ырымбурға нәфрәт белдерергә килде, Мәскәүгә *лә* телеграммалар һуғылды. Сәлимйән ауылдағы эштәрен ташлап, Ҡантуратына атланып, Орскиға елдерҙе – ошо ҡатмарлы осорҙа өйәҙ хәлдәрен асыҡларға, партия комитетының эшен дөрөҫ юлға һалырға кәрәк ине. Бигерәк тә башҡорттарҙың иң әүҙем һәм яугир өлөшөн тәшкил иткән Бөрйән төбәге борсоно уны: Ырымбурҙа дыуамалланып сағылған оҫкон бында ялҡын дөрләтеп ҡуймағайы!..

Хәйер, бынан алда Орскиҙа сағында уҡ шул ялҡынды булдыртмаҫҡа ҡайһы бер саралар күрелгәйне, күрелеүен: тулыһынса Совет платформаһында торған Баймаҡ Советы төҙөлөп эшкә егелде, әллә ни ҙур булмаһа *ла*, эшселәрҙең үҙ теләкле ҡыҙыл гвардияһы ойошто, киләсәктә уны Орскиҙағы арсеналдан ҡоралландырыу ҡаралды. Шул уҡ ваҡытта Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте *лә* төбәккә үҙенең хәрбиҙәрен ебәреп, башҡорт полкы ойоштора башлауы асыҡланғас, Сәлимйән дәррәү төбәккә бара һалып, Башҡорт хөкүмәте исеменән

[62] Ибраһим Бикчәнтәйев – 30-ынсы йылдарҙа РКП(б)-ның Ырымбур өлкә комитетының татар телендәге органы – "Коммуна" гәзите редакторы, совет яҙыусыһы Әнүәр Бикчәнтәйевтең ата яғынан туғаны.

эш иткән уның Хәрби бүлек мөдире Ғимран Мағазов, уның ярҙамсыһы Ғабдулла Иҙелбаев менән осрашты; уларҙы Ырымбур осоронан уҡ яҡшы белә ине. Һөйләшеү баштан уҡ зыялыларса шөйлә итәғәтле, аҡыллы үҙәндән ағылды. Һөҙөмтәлә Баймаҡ Советы етәкселеге менән берлектәге кәңәшмә үткәреп, ундағы төрлө сәйәси ҡарашлылар араһында бәхәсле һәм көсөргәнешле фекер алышыу барышында ваҡытлыса килешеүгә өлгәшелде: әүҙем уҡмашҡан күп һанлы башҡорт әтрәте менән Баймаҡ эшселәр әтрәтен Рәсәй Федерацияһы эсендәге демократик Башҡортостан мәнфәғәттәренең һағында торған Совет әтрәте итеп берләштерергә *лә*, Ырымбур гөбөрнә хакимиәте менән яңы Башҡорт хөкүмәте шул йәһәттән уртаҡ тел табыуын көтөп, өйәҙ халҡының тыныс тормошон һәм именлеген һаҡлаусы көс итеп тоторға. Сәлимйән Орскиға ҡайтып, советтар нигеҙендә төҙөлөргө тейешле шул башҡорт ғәскәре штабына ярҙамға ҡала большевиктарына теләктәшле, 19-20 йәштәрҙәге ете поляк офицерын юлландырғайны...

Орскиҙа уны яман яңылыҡ ҡаршыланы: Ырымбурҙан Цвиллинг мандаты менән килгән билдәле Ғәбделәхәт Сәйетбатталов тигән большевик Баймаҡҡа барып, унда үҙен башҡорт патриоты Арыҫлан Баталовмын тип танытып, башҡорт буржуйҙары араһында темеҫкенеп ҡайтҡан да Баранов әтрәтен алып Баймаҡҡа киткән...

Сәлимйән ашығып барып еткәндә эш үткәйне шул инде: алдап ышандырыу ярҙамында штабты ҡулға алып, Цвиллинг телеграммаһына ярашлы Баймаҡ Совете ҡарары менән 22 февралдә (яңы стиль менән 7 мартта) Ғимран Мағазовты, Ғабдулла Иҙелбаевты, биш поляк офицерын һәм ун һалдатты тотоп атҡандар, ә "Арыҫлан Баталов" иптәш Цвиллингка хисап бирергә ҡайтып киткән... Цвиллингтан ундай бойороҡ булыуына ышанмай, таптырта башлағас, Баймаҡ Советында уға телеграмманы күрһәттеләр: *"**Баймак. Совет рабочих депутатов**. По постановлению Оренбургского Мусульманского революционного комитета арестуйте главарей башкирского отряда, находящегося в Баймаке. В случае неисполнения того приказания Баймакский Совет рабочих депутатов будет объявлен контррево-люционным и понесет самое строгое наказание. **Цвиллинг**".*

-- Ҡулға аалыуын-алғас, уларҙы ниңә Ырымбурға оҙатманығыҙ? Ниңә ҡан ҡойҙоғоҙ?

-- Орскиҙан килгән әтрәт башлығы Баранов беҙгә Цвиллингтың икенсе телеграммаһын да күрһәтте: башҡорт контрреволюционерҙарын, ҡулға алғас та уҡ, рәхимһеҙ атырға бойоролғайны...

Сәлимйән ауылына тура елдереп, атаһының яҙғы һабанға күҙ терәп көткән Ҡантуратын ҡалдырып, күмер тейәгән юлаусылар санаһында Һарыкташ станцияһына килеп төштө. Пассажир поездары һирәк йөрөй йәки йөрөмәй ине; тауар вагонына эләгеп китте.

Каруанһарайлы мәркәз ҡала ниндәйҙер һөжүмгә әҙерләнгәндәй ҡайнаша, Совет урынлашҡан Панкратов йортоноң коридорҙарында ҡораллы кешеләр мыжғый. Рәйес бүлмәһенә ҡыйынлыҡ менән үтте. Йоҡламауҙан арып-талған, ябығыуҙан ҡылыс танауы уғата ныҡ көкерәйгән Цвиллинг ҡәнәғәтһеҙ ҡаршыланы:

-- Йә, Мырҙағолатов иптәш, ни йомош? Әллә башҡорт буржуйҙарын юллап килдеңме?

-- Юлламайым, әммә ул буржуйҙарҙы сәбәпһеҙҙән ҡулға алыуығыҙ халыҡ асыуын ҡуҙғатты.

-- Беренсенән, сәбәптәре етерлек. Икенсенән, ҡулға алдыртыусы һис тә мин түгел.

-- Аңламайым.

-- Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин үҙем дә аңламайыраҡ ҡалдым. – Цвиллингтың ҡотә сәйер фәлсәфәһе Сәлимйән аңында урыҫса нөсхәһендә ярылып ҡалды: – *Члены Башкирского правительства арестованы по просьбе нескольких человек от имени Мусульманского военно-революционного комитета*[63]*. Я спросил, в чем их вина. Они мне ответили, что члены Башкирского правительства – контрреволюционеры, работали в союзе с Дутовым и что есть еще ряд других причин. Полагая, что дело будет расследовано потом, я дал разрешение на арест. Но я и сам сомневаюсь в том, что Закир Ялиди был контр. Поэтому для основательного решения вопроса счел необходимым избрать комиссию по расследованию. Если хотите войти в комиссию, вы тоже можете ввести одного человека. Тогда и ознакомитесь как следует вопросом. Если комиссия по расследованию найдет их невиновными, они, естественно, будут освобождены. По этому вопросу я сам в недоумении. Ежедневно отовсюду я получаю телеграммы с требованием об освобождении членов предпарламента. В некоторых телеграммах даже заявляют, что, если татарский революционный комитет Оренбурга все еще хочет держать наших руководителей в заключении, мы в отместку за это пойдем войной на соседние татарские деревни...*

-- Самуил Моисеевич, ғәфү итегеҙ, бесәй-сыҫкан уйынына оҡшай был...

Цвиллингтың күҙҙәрендә уҫал ут ялтыраны:

-- Һеҙ кем, әллә миңә судъямы?!

-- Кисерегеҙ, мин дә, һеҙ ҙә судъя түгелгә оҡшай. Ысын судъялар булһаҡ, Баймаҡта ҡан ҡойоуға юл ҡуймаҫ инек. Ундағы ҡыҙыл гвардия...

-- Етте! Хәрби мәсьәлә буйынса Кобозев шөғөлләнә, шуның теңкәһенә тейегеҙ! – Ашығыс тороп хушлашты. Был уларҙың һуңғы күрешеүе ине. Революцион пролетариаттың ас тамағын туйҙырмаҡҡа әтрәте менән иген таларға (продразверстка яһарға) барғанында Изобильная станицаһы казактары, сиркәү манараһындағы пулеметтан һиптереп, Цвиллингтың ғәскәрен ҡырып ташлай, иң алғы рәттәге Самуил Моисеевичты иң беренсе пүләләр киҫеп һала...

Цвиллингтан бешелеп сығып, тәҙрә тәңгәлендә уйланып торғанда, “Тулҡын” ойошмаһы буйынса уға яҡшы таныш бер килке егеттәр пәйҙә булды: яңыртылған ваҡытлы Башҡорт хөкүмәте рәйесенең урынбаҫары Бәхтегәрәй Шәфиев, беренсе сәркәтибе Ғариф Алпаров һәм улар янында шағир Шаһизада Бәпес, йырсы Ғәзиз Әлмөхәммәтов...

-- Тоҙ яларға әселәгән малдарҙай, түрә эргәһенә эркелдегеҙме? – Көлөп күреште Сәлимйән. – Татарҙар менән бергәләшеп башҡорт буржуйҙарын төрмәгә япҡанһығыҙ икән, тип ишеткәйнем, ҡасан сығараһығыҙ? Ыристандарығыҙҙы, тим.

Шәфиев өҙөп алды:

---

[63] Татар милләтселәренең баяғы “ҡыҙыллашҡан” ойошмаһы.

-- Ул ыристандар бер ваҡытта ла азат ителергә тейеш түгел, ә мәңге-мәңге шул үҙҙәре ултырған зинданда ҡатырға тейеш! – Шаҡылдатып та тормай, Цвиллинг бүлмәһенә атлыҡты.

-- Көн дә ошонда килеп, ыристандарҙы атырға кәрәк, тип юллай, йәһүт иһә уны арҡаһынан һөйөп ҡайтара; ә мине, башҡорт хөкүмәте ғәйепһеҙгә ултыртылған, тип килгәнгәме, тупһаһынан үткәрмәй! Алпаров, яҙып ҡуй: бөгөндән үк һеҙҙең ҡурсаҡ хөкүмәттә эшләүҙән баш тартам! – Йырсы егет ныҡ рәнйеп сығып китте.

-- Нимә, һеҙҙә ағзамы ни ул да? – Сәлимйән Алпаровтан ҡыҙыҡһынды.

-- Эйе шул. Башҡорт буржуаз хөкүмәтенең ҡулға алыныу сәбәбен тикшерергә Ҡазандағы Рәсәй Мосолман һалдаттары съезынан комиссия килгәйне; комиссия ағзалары был акттың законға ярашлы икәнлеген раҫлағас, шуларҙың Муса Мортазинды, Таһир Имаҡовты, Усман Ҡыуатовты, Зәкәриә Айытбаевты һәм Ғәзиз Әлмөхәммәтовты ла хөкүмәт ағзалығына кереткәйнек...

-- Карабығыҙҙан ҡомаҡтар ҡаса ла башланы инде әллә?..

Ҡобараһы осоп тыңлап торған шағир телгә килде:

-- Таш мәсеткә ағас муллалар! Күреп торорҙоҙ: бер-ике айҙан бере һе ләү ҡалмаясаҡ: Цвиллинг, Шәмиғолов, Нуримановтар уларҙы берәм-берәм ҙур "Х" хәрефле ғәфләттәренә олаҡтырасаҡ! Бар, алпар-толпар йылғырйән, Шәфиев мишәреңдең эргәһенә ин! – Төкөрөп сығып китте (оҙаҡламай уның да ҡулға алыныуы мәғлүм).

-- Нимә һөйләй был, мишәрме ни Шәфиев?

-- Тел һөйәкһеҙ, тигәндәй, төрлө әкиәт йөрөй: отставкалағы һалдат мишәр бабаһын, имеш, заманында гөбөрнәтер хәҙрәттәре Иманғол башҡорттары обществоһына теркәткән... Хәйер, беҙ милләт айырмайбыҙ.

-- Шуның өсөн дә, үҙ башығыҙ менән эшләмәй, татар Мосолман комитетындағы хәрҙәштәрегеҙҙең бойороғон ғына көтөп ятаһығыҙмы?

Алпаров, уңайһыҙланып, муйынын эскә тартты, тик яуапһыҙ ҡалыуы ҡыйын ине:

-- Каруанһарайҙан ҡыуа башлағастары, шуның сәбәбен һорағас, Таһиров беҙгә әйтте: сөнки һеҙ контрреволюционерҙар менән ҡулалмаш эшләнегеҙ. Шуға ла ҡарамай, ҡулға алынғандарҙың ғәйебен танымайһығыҙ. Әгәр ҙә ки үҙ башығыҙҙы ҡотҡарырға теләһәгеҙ, предпарламент ағзалары – контрреволюционерҙар, уларҙы ҡулға алыу законлы, тип ҡул ҡуйығыҙ һәм бөтә булған эштәрегеҙҙе беҙҙең контроль аҫтында ғына эшләгеҙ, бына шул саҡ Каруанһарай ябылмаҫ, эштәрегеҙҙе дауам итерһегеҙ, тине. Каруанһарайҙы яптыртмаҫ һәм башҡорт автономияһына бәйле эш туҡталмаһын өсөн, беҙ контроль аҫтында эшләргә ризалаштыҡ та Таһиров талап иткәненсә ҡул ҡуйҙыҡ...

-- Их һеҙ, бахырҙар!... – тине Сәлимйән, баш сайҡап.

Хәрби етәксе Кобозевтың да ваҡыт тар, ә эштәре тауыҡ сүпләп бөткөһөҙ ине, буғай. Баймаҡ төбәгендәге ҡанлы ваҡиғаны ҡыҫҡаса һөйләп, ҡыҙыл гвардия ойошторoу эшендә тупаҫ хата ебәрелеүен әйткәс, иҫе китмәй генә хехелдәп ҡуйҙы ла, йәнгә теймеш күгәүендән арынырға теләгәндәй, ҡәнәғәтһеҙ тамаҡ ҡырҙы:

-- Улайһа, ул төбәктә ҡыҙыл гвардия ойошторoуҙы үҙегеҙгә йөкмәгеҙ.

-- Йөкмәгәйнем дә бит, эшләгән эштәремде юҡҡа сығарттығыҙ.

--Урман киҫкәндә таптар осколай инде ул. Большевикмы һеҙ – большевик. *Хаталарҙан һабаҡ алабыҙ*, ти Владимир Ильич. Әйткәндәй, үҙең белгән Троцкий иптәш тә синфи дошмандарға шәфҡәтһеҙ булырға ҡуша!

-- Юҡ! Был хәлдәрҙән һуң унда дарылы мискә шартлау -- халыҡ восстаниеһы дөрләү ихтимал. Минең бурыс – башҡорт халҡын тынысландырыу, массалар араһында сәйәси тәрбиә эшен киң йәйелдереү, тип һанайым.

-- Мәйлегеҙ, бында бәйләп тотмайбыҙ.

Башҡортостанда аҡтарҙың һәм ҡыҙылдарҙың ҡанҡойошло граждандар һуғышы башланыр алдынан һөйләшеү һәм ҡайтып китеү ине был.

Илде ут ялмап алды, һәр ауылға, һәр өйгә ғәрәсәт килде; ир-ат, ҡоралланып, алышыусы ике яҡтың береһенә ылыҡты.

Сәлимйән Мырҙағолатов, атаһы ҡарттың яҙғы һабанға әҙерләгән Ҡантуратын эйәрләп, ғәрәсәттең үлемесле ҡырҙарында тағы ла ике йыл гиҙергә сығып китте.

10

Иҙел – Урал араһында ғәмәлдә Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыу һәм беренсе башҡорт полкын атыу менән ҡабынып киткән граждандар һуғышы ялҡыны Рәсәй империяһының ҡапма-ҡаршы аҡтар һәм ҡыҙылдар фронттарына тоташып, Башҡортостан киңлектәрен ике йыл буйы ут һәм ҡанға батырып дауамланды. Ҡыҙыл Армияға ҡаршы үҙенең аҡ армияһы менән һуғышҡан Башҡорт хөкүмәте 1919 йылдың февраль айында, ниһайәт, батша самодержавиеһының империя сәйәсәтен дауамлаусы аҡ Колчак хөкүмәтенән тамам биҙеп, ваз кисеп, килешеү аша ҡыҙылдар яғына сыҡты, советтар нигеҙендәге Башҡорт автономияһы тураһында Совет хөкүмәте менән шартнамәгә ҡул ҡуйҙы – Автономиялы Совет Социалистик Республикаһын төҙөү осоро башланды...

Бер уйлаһаң, автономиялы буржуаз Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыуҙар, автономиясыларҙы атыуҙар, фронт менән фронт ҡара-ҡаршы тороп һуғышыуҙар, ике йыл буйына илдең ябай тыныс халҡын талау һәм үлтереүҙәр – Сәлимйән кеүек коммунистар тәҡдим иткән тыныс юл менән хәл итәһе сәйәси мәсьәләләрҙе ғәрәсәттәр тамуғы аша уҙғарып, илдең даръялай ҡандарын ҡойоп, ҡабат шул уҡ, тәүҙә үк, тәҡдим ителгән тыныс юлға кире әйләнеп ҡайтырға – былар барыһы-барыһы большевиктарға ниңә кәрәк булды һуң, ябай синфи ҡаршылыҡтарҙы үҙҙәре уйлап тапҡан яһалма синыфтар һуғышына әйләндереү, шуның аша үҙ хакимлыҡтарын ауҙарылмаҫлыҡ итеп нығытыу өсөнмө?!.

Яҙға табан көнсығыштан колчаксылар фронты яңы хәл иткес һөжүмгә күсеп, ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе Иҙелгәсә сигендереп, Башҡортостан тағы тулыһынса аҡтар ҡулы аҫтында ҡалғанлыҡтан, социалистик Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Комитеты (БВРК) тип аталмыш Совет хкүмәте ваҡытлыса Саранск ҡалаһына күсенергә мәжбүр булды.

Яңыса хөкүмәт ҡоролошо һәм башҡорт ҡыҙыл армияһын төҙөү мәсьәләләре буйынса һөйләшеү өсөн апрель аҙаҡтарында Мәскәүгә барған Хәрби комиссар Әхмәтзәкир Йәлитовты Ленин үҙе ҡабул итте.

-- Совет хакимиәте, ябай ғына әйткәндә, “өс ҡот[64] балығы” өҫтөндә баҫып тора, -- тине ул, хәҙер инде Рәсәй күләмендә танылған башҡорт лидерын иғтибарлы тыңлап бөткәс. – Йәғни Совет хөкүмәте, туранан-тура уға буйһонған Хәрби Революцион Совет (Реввоенсовет) һәм контрреволюцияға, саботажға ҡаршы көрәшеүсе Бөтә Россияның Ғәҙәттән тыш Комиссияһы (ВЧК). Был архияуаплы постарҙы архышаныслы иптәштәр етәкләргә тейеш. Һеҙҙең Хөкүмәт һәм Хәрби комиссариат башындағы иптәш Йомағолов һәм иптәш Йәлитовты тап шундай итеп беләмен. Архимөһим һорау бар: ә өсөнсө “ҡот”ҡа кемде ҡуйҙығыҙ? Йәғни БЧК рәйесе итеп?

-- БЧК беҙҙә яңы ғына моронлай башланы, Иптәш Ленин. Уның нескәлектәрен дә белеп еткермәйбеҙ.

-- Эээ батенька, был архимөһим мәсьәләне артҡа ҡуйып тороп булмай! – Телефондан шылтыратып та өлгөрҙө. – Феликс Эдмундович, бында совет Башҡортостаны чекаһын ойоштороу проблемаһы килеп тыуҙы – хәҙер һеҙгә иптәш Йәлитов барасаҡ, уға ярҙам итеүегеҙҙе һорайым. – Йәһәт тороп, ишеккәсә оҙатты.

-- Кемде билдәләнегеҙ? – тине Дзержинский, тәүҙә дөйөм һүҙ барышында булдырыласаҡ комиссияның эш бурыстарын ҡыҫҡаса аңлатҡас.

-- Вакансия әлегәсә буш тора, милли кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Был яуаплы һәм сетерекле эш башында, минең уйлауымса, милли кадр булырға тейеш.

-- Дөрөҫ, был бик мөһим. Ойоштороу йәһәтенән беҙ һәр яҡлап практик ярҙам күрһәтергә әҙер. Ә кадрҙар мәсьәләһендә Милләттәр буйынса Халыҡ комиссары Сталин иптәшкә керегеҙ.

Һуңғы ваҡытта Сталин менән йыш күрешергә тура килгәнлектән, аралары яҡын ине – ҡабаланмай ғына ихлас һөйләште. Иң элек башҡорт ҡыҙыл армияһының ҡасан төҙөлөп бөтәсәге, нисә мең штык йәки ҡылыс тәшкил итере менән ҡыҙыҡһынды. Йәлитовтың яуаптарынан шөйлә ҡәнәғәтләнеп, өҫтәле өҫтөндә төтөн бормаслатып ятҡан төрөпкәһен ҡапты ла, тороп, йөрөштөрә башланы; торорға иткән серҙәшен яҫы ҡаты усы менән яурынынан баҫты:

-- Дзержинский иптәш шылтыратҡайны, беҙҙән ни ярҙам кәрәк?

Кәрәген һөйләп биргәс, уйға ҡалып, өҫтәленең артына кире төпләнде, алдындағы ҡалын дәфтәрҙе асып, күҙ йөрөттө:

-- Шәмиғолов иптәште алып булмай, уны Өфө гөбөрнәһенә Эльцин иптәшкә беркеттек – мосолмандар мәсьәләһе буйынса. Бына, -- төрөпкәһенең һемәген дәфтәргә төрттө, -- Мырҙағолатов Сәлимйән Шәһәргәрәй улы. Һыналған иптәш, коммунист, башҡорт – тап һеҙгә кәрәкле кеше. Граждандар һуғышын үткән, уны Гая, Каширин иптәштәр ҙә яҡшы белә; әлеге көндә Самарала Көньяҡ фронттың Сәйәси идаралығында хеҙмәт итә.

-- Мин дә уны күпмелер беләм, буғай. Һәр хәлдә, ыңғай яҡтан.

-- Шулайғас, ул һеҙгә иң ҡулайлыһы.

Май башында, үҙенең хөкүмәт вагонында Саранскиға ҡайтып барышлайы, Йәлитов Самарала туҡталды, Мырҙағолатов менән күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләште.

[64] Ҡот – кит, кит балығы.

-- Беләһегеҙ, мин һеҙҙең буржуаз автономия тарафдары түгел инем, -- тине Сәлимйән. – Фронттарҙа ла йыш ҡына һеҙҙең аҡ армияға ҡаршы һуғыштым. Ләкин инде ҡыҙылдар яғына сыҡтығыҙ, Совет Рәсәйе эсендәге Совет автономияһы төҙөргә керештегеҙ – быны мин ҡыуанып хуплайым һәм был йәһәттән Совет Башҡортостанына бөтә көсөмдө, һәләтемде бирергә әҙермен.

-- Килештек, уҙаман! – Ихлас ҡул ҡыҫыштылар. – Фронт штабында һөйләштем – ризалар. Бындағы эштәрегеҙҙе тиҙ генә теүәлләгеҙ ҙә, мин көтәм, Саранскиға бергә китәбеҙ!

1919 йылдың 5 майында уҡ Башҡорт хөкүмәте Мырҙағолатовты БЧК рәйесе итеп тәғәйенләне; шунда уҡ ул Пензаға барып, ундағы чека эштәре менән танышып, тәжрибә туплап килде лә БЧК-ны уның тәүге нигеҙ таштарынан башлап ҡорҙо. Бер ыңғайҙан партия эшенә керешеп (Хөкүмәттә бер-ике коммунист булһа ла, РКП(б) ойошмаһы юҡ ине), етәксе башҡорт уҙамандарын коммунистар партияһына ағза итеп алыуҙы юлға һалды, сөнки юғарынан үткәрелгән ҡаты сәйәсәт буйынса, хатта кешенең белеменә, һәләтенә лә ҡарамай, совет хакимиәтендә мөһим етәксе кадрҙар коммунист булырға тейеш; ә был иһә фирҡәһеҙҙәрҙе аяуһыҙ ситкә бураҡтырып, партия билетлы төрлө карьеристарға, авантюристарға юл аса... Оҙаҡламай Петроградты аҡ Юденич ғәскәрҙәренән ҡурсаларға Ленин иптәш саҡыртып алған башҡорт дивизияһының күпселек фирҡәлеләре лә Мырҙағолатов тәрбиәләп өлгөрткән, ағза итеп алған коммунистар ине...

Көнсығыш фронтта Ҡыҙыл Армия Башҡортостанды аҡтарҙан арсалағас та, Хөкүмәт органдары йәһәт Эстәрлетамаҡҡа ҡайтып, йәш Совет республикаһы органдарын ҡороп нығытыуға керешелде, был иһә бер йыл эсендә ике тапҡыр фронт ғәрәсәте көйҙөрөп үткән илдәге аслыҡ-яланғаслыҡ, бандитлыҡ, өҫтәүенә, Ырымбур, Өфө кеүек күрше өлкәләрҙең милли автономияға ҡаршы нығышмалы көрәшеүҙәре, хас дошманлыҡ ҡылып аяҡ салыуҙары шарттарында барҙы. Элекке аҡ империя урынына аҫтыртын ҡыҙыл империя ҡорорға юҫыҡланған Мәскәү ҙә башҡорт үҙ аллылығының аяҡ-ҡулын ҡыҫҡартыу яғында ине; шул йәшерен маҡсатында хилаф сәйәсәт үткәреп, Башҡортостан автономияһының хас дошманы Ғәли Шәмиғоловты, башҡорт хәрби көстәрен үҙ ҡулында тотор өсөн, Башҡортостан Хәрби комиссариатының сәйәси бүлек башлығы итеп күсерә -- башҡорт хөкүмәте өҫтөнән күҙ-ҡолаҡ булырға, автономияға ҡаршы ҡара көстәрҙе етәкләргә...

РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетында автономияны емертеүселәр өҫтөнлөк ала, йәшерен алыш нәтижәһендә БЧК рәйесе Мырҙағолатов Ҡазандан килтерелгән һәм Шәмиғолов төркөмөнән булған Абдрахман Измайлов менән алмаштырыла. Аҫтыртын көрәш юғары нөктәһенә етеп, Хөкүмәт башлығы Йомағолов 1920 йылдың 15-енән 16-һына ҡараған төндә Башҡортостан автономияһына ҡаршы фетнә әҙерләүселәр рәүешендә партия өлкә комитеты ағзалары Ғ. Шәмиғоловты, А. Измайловты һәм башҡаларҙы (яңылышып, буғай, БЧК Коллегияһы ағзаһы С. Мырҙағолатовты ла) ҡулға алдыртҡас һәм Ленин бойороғо менән уларҙы азат иттерткәс, шау-шоу тыуҙырған был ваҡиға Мәскәү алдында шәмиғоловсыларҙың абруйын уғата күтәреп һәм уларҙы уғата рухландырып,

яһил төркөм Эстәрлетамаҡта һәм республика кантондарында башҡорт Хөкүмәтенә ҡаршы хәрәкәтен көсәйтте; башҡорт ерҙәрен көслөк менән бағып алыусы урыҫ килмешәктәре хатта ҡораллы “коммунистик” әтрәттәр ойоштороп, ауылдарҙа башҡорттарҙы талап, атып йөрөнө. Шундай хәлдәрҙе тикшереү һәм үҙ сиратында ҡораллы һаҡлыҡ саралары күрә башлаған башҡорт халҡын тыныслandырыу өсөн, республика етәкселеге танылған коммунист Сәлимйән Мырҙағолатовты бер юлы Хөкүмәттең, РКП(б) өлкә комитетының, БЧК-ның вәкәләтле комиссар-ревизоры рәүешендә ваҡиғалар ҡатмарлашҡан төбәккә – үҙенең тыуған ере Үҫәргән кантонына юлландырғайны. Ифрат яуаплы, хәтәрлекле вазифаһын башҡарып йөрөгәндә, республиканың сәйәси хәле уғата ҡатмарланды, ҡырҡыуланды.

Сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, Үҙәк хакимиәт – ВЦИК һәм РСФСР СНК-һының М.И. Калинин һәм В.И. Ленин ҡул ҡуйған “Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының Россия Социалистик Федератив Совет Республикаһына мөнәсәбәттәре” тигән 1920 йыл 19 май декреты автономия хоҡуҡтарын тамам юҡҡа сығарырлыҡ итеп мөнтәп-ҡыҫҡартҡас, илдә ҙур ҡәнәғәтһеҙлек, бола алды мөхите килеп тыуҙы. Үҙәк Хөкүмәт Әхмәтзәкир Йәлитовты Мәскәүгә саҡыртып алып, ҡайтармай тотҡарлағас, кантондарҙа халыҡ массалары шартларға әҙер дары хәленә етеп, бер туҡтауһыҙ шаулы йыйылыштар уҙғарып, Эстәрлетамаҡҡа ла, Мәскәүгә лә нәфрәтле хитапнамәләрен, телеграммаларын яуҙырҙы; 19 май декретын юҡҡа сығарыуҙы, Әхмәтзәкир Йәлитовты Башҡортостанға ҡайтарыуҙы талап ҡылды. Тамъян-Ҡатай, Үҫәргән, Бөрйән-Түңгәүер кантондарында сәйәси көсөргәнеш саманан ашып, тауҙар араһында ятҡан Байым ауылының бығаса билдәһеҙ бер ерекмәне Хажиәхмәт Унасов төркөмө ҡалҡынып сығып, ҡоралланып, урындағы Советтарҙы ҡыйратып йөрөүе, ҡораллы әтрәтенең, епшек ҡарҙа тауҙан тәгәрләгән ҡар йомарлағылай, көндән-көн ҙурая барыуы ныҡ борсоно. Сәлимйән берыңғайҙан шул яҡтарҙы ла тикшереп үтергә юҫыҡланып, Силәбе – Орск тимер юл станцияһына килгәс, телеграфтан уғата яманыраҡ хәбәр һуғылды: 15 июндә баш ҡала Эстәрлетамаҡта башҡорт Хөкүмәте ағзалары эш урындарын ташлап киткән, республикала юғары хакимиәт Шәмиғолов һәм уның кампанияһы ҡулына күскән. Артынса уҡ шәмиғоловсы -- мансыревсы яңы Башревкомдың 1920 йылдың 26 июнендә сығарылған 1-енсе номерлы хәрби фарманы Урал тауҙары араһына ла килеп етеп, Башҡортостанда ғәмәлдә *хәрби диктатура* иғлан ителеүе асыҡланды, был иһә дары мискәһенә сағылған оҫкон ине. Сәлимйән, үҙен комиссар-ревизор итеп хәтәр эшкә юлландырған республика хакимиәте алмашынһа ла, коммунислыҡ бурысым үҙ урынында ҡалды, тип, башлаған яуаплы эшен еренә еткереүҙе хуп күрҙе; барыһы үҙ ҡалыбына ултырыр, коммунистар партияһы иҫән саҡта Башҡортостан Совет республикаһы йәшәйәсәк, ә ваҡытлыса өҫтөнлөк алған шәмиғоловсылар күп тә тормай һепереп түгеләсәк, ә минең тикшереү һөҙөмтәләре республикаға һәр саҡ кәрәк буласаҡ, тигән фекерҙә ҡалып, йөкмәтелгән вазифаһын үтәүҙе дауамланы. Һәр хәлдә, бола ҡубынған төбәкте арҡылы-буй йөрөп үтеп, ваҡиғаларҙың айышына төшөнөп, партия өлкә комитетына һәм башҡаларға ысынбарлыҡты бөтә дөрөҫлөгөндә

еткерергә, халыҡ яҙмышы ҡыл осонда торғанда хата ҡарарҙарға юл ҡуйҙыртмаҫҡа тәүәккәлләнде...

Төрлө юл һәм һуҡмаҡтарҙан тимер юлға барып сығып, бәләкәй генә станцияла поезд көтөп ҡаңғырғанда, тау араһын оҙон борғо ауазы яңғыратты, баштан-аяҡ тимер көплө вагондарҙан пушка һәм пулемет көбәктәрен уҫал кәшкәйткән бронепоезд шау-гөр килеп туҡтаны; алдағы вагондан өҫтө-башы шау-һары ҡайышҡа бөткән, арҡыс-торҡос портупеяларына бер түгел ике кобура аҫҡан йәш егет мылтыҡлы бер төркөм ҡыҙыл әрмис оҙатыуында һикереп төшөп, һуҡыр себендәй туп-тура Сәлимйәнгә ыңғайланы, тәмәке төтөнө һарғайтҡан һуҡ бармағын уның маңлайына нәҡ наган көбәгеләй тоҫкап, тамаҡ төбөнән екерҙе:

-- Эй, чучмек! Кто ты – башкир?

-- Да, башкир.

-- Взять! – Наган көбәгеләй тоҫкалған бармағы менән бейек таш пакһауз[65] стенаһына төртөп күрһәтте. – К стенке!

Ҡыҙыл әрмистәр Сәлимйәнде елтерәтеп алып барып ҡоймаға терәнеләр. Бойороусы, ҡан баҫҡан күҙҙәре менән ашарҙай төбәлеп, уң яҡтағы кесерәк кобураһының ҡапҡасын ысҡындыра башлағайны, поезд яғынан киҫкен тауыш яңғыраны:

-- Стой! Отменить! Ты что делаешь, Голиков?!

-- Как что, бандита пускаю в расход!

-- А ты дознался, на самом деле кто он?

-- Башкир он, вот кто. Значит, сто процентный бандит. Ему к праотцам прямая дорога!

Киҫәтеүсе йүгереп килеп етте:

-- Эх Аркадий, Аркадий, неисправим же ты! Этот башкир – мой хорошо знакомый, настоящий коммунист. Прочь по своим местам! – Сәлимйән, ҡапыл иҫенә килеп, аралаусыһын таныны – 1918 йылдан алып аҡтарға ҡаршы бергә һуғышып йөрөгән яугир ҡорҙашы, 1919 йылда Ырымбур хәрби нығытмалы район комендантты, шунан һуң Төркөстан фронтындағы 49-ынсы ҡәлғә дивизияһы башлығы, ә хәҙерен Урал хәрби нығытма район башлығы, ә асылы Верхнеуральскиҙың ҡыҙыл казагы Николай Каширин ине. Шунда уҡ башҡортсаға күсеп өндәште. – Гареевич, бында ни эшләп йөрөйһөң?

-- Йомош менән, Николай Дмитриевич.

-- Ярай килеп өлгөрҙөм, юҡһа... Киттек, брат, аяғөҫтө тороп ҡына аңлашаһы хәл түгел!

Паровоз һыу һәм ташкүмер тейәгән шаҡтай оҙайлы арала вагонға инеп ултырып, осрашыу айҡанлы тултырылған соҡортайҙарҙы тұңкәрҙеләр.

-- Кем был Голиков тигәнегеҙ, ниңә бармағын наган көбәгеләй күҙгә терәп екеренә?

Каширин көлдө:

-- Малайка, ләкин хәтәр малайка: ун алты йәшенән – полк командиры, коммунист: 1918 йылда беҙҙең Белорет Реввоенсоветының беренсе рәйесе Борис

[65] Пакһауз – тимер юл станцияһындағы йөктәр келәте.

Варфаломеевич Точисский[66] үҙе партияға алған һәм һеҙҙең Закир Йәлитиҙең аҡ армияһына ҡаршы әтрәт командиры итеп изге һуғышҡа аяҡландырған бер фрукт. Әтрәтенең алдында гел: “Гайда! Гайда!” – тип оранлап барғаны өсөн Гайдар[67] (һәйҙәр) тип йөрөтәләр үҙен. Борис Варфоломеевичтың фатихаһы буйынса тирә-яҡ ауылдарҙы айҡап, наганы менән йөҙәрләгән башҡорттоң башына еткән, шул арҡала психикаһы зәғифләнеп, үҙе һис белештермәй, кеше менән ябай һөйләшкәндә *лә ул* һуҡ бармағын наган көбәгеләй тоҫҡап екеренә... уға һәр башҡорт – бандит... Әммә боевой командир. Ошо ғәйәрлеген тейешле баһалап, Дзержинский иптәш уны, ғәҙәттән тыш вәкәләтлектәр биреп, аңһыҙ алтай көтөүселәренең восстаниеһын баҫтыртырға юлландырҙы...

-- Бынығы хәтәр икән...

-- Хәтәр эштәр етерлек *ул* беҙҙә, брат. Тамбовтағы Антонов восстаниеһын ишеткәнһеңдер? Инде килеп һинең гүзәл Башҡортостаның болара...

-- Шул бола усағын томалау әмәлен табырға китеп барам... партиябыҙ ҡушыуынса. – Эстәрлетамаҡта бирелгән мандатын күрһәтте.

-- Дааа брат, әгәр үҙеңде электән үк белмәһәм, ары ебәрмәҫ инем. Мандатыңдың көсө бөткән – хәҙер унда власть башына кемдәр килгәнен беләһең. Һин бараһы районда яңы хәрби көстәр тәртип урынлаштыра -- һине мандатың менән ҡуша стенаға ҡуясаҡтар, тап баяғы Голиков кеүек...

-- Башҡорт мәҡәлен беләһең: бүренән ҡурҡҡан – урманға бармаған, -- тине Сәлимйән.

-- Шулай ҙа төпкә йәшер был ҡағыҙыңды, ә һәр ерҙә ҡулланмаҡҡа үҙемдең мандатты бирәм. Ҡыҙыл Армияның махсус бурыс йөкмәтелгән ғәҙәттән тыш ревизор-комиссары тип.

-- Рәхмәт, шулай итермен. Тик мине тейешле тәңгәлгәсә еткереп ҡуйығыҙ инде.

-- Һүҙһеҙ. Тик ниңә ҡоралың юҡ?

-- Хәҙер минең ҡоралым – телемдә, коммунист телмәре.

Каширин баш сайҡаны:

-- Береженного Бог бережет, тигәнде *лә* онотмайыҡ. Йәтеш кенә көбәк бирәйем, кеҫәңә генә һыйырлыҡ?

-- Кәрәкмәй, халҡым араһына барам.

Бронепоезда хәтһеҙ генә юл үтеп, Бөрйәнгә иң яҡын тәңгәлдә тау араһында төшөп ҡалды.

III КИҪӘК: УТ ЭСЕНДӘ

1

Урал...

---

[66] Б.В. Точисский – башҡа ҡараштағы һис кем менән килешмәүсән ҡарт большевик; 1918 йылда уны өйөндә Н.Д. Кашириндың ҡыҙыл казактары үлтереп, мәйетен ҡала ситендәге тиреҫлеккә сығарып ташлап, бер-нисә көн үткәс өҫтөнә сүп өйөп яндыралар.

[67] Гайдар – һәйҙәр, хәйҙәр, әйҙәр (һуғышҡа әйҙәүсе).

Күккә ашҡан мәғрур сағыл-ҡаяларын сурайтып, текә урҙай ҡарурманың итәктәренә мәскәүләтеп, ҡарыулы ел-дауылдарға оторайып күкрәк киргән Урал тауҙары... Аҫта, бик аҫта, ҡаяташтар араһында шау-шырлыҡтан шарлап сығып, ярһып, ауыҙлығын сәйнәп тулаған аҫауҙай аҡ күбектәр төкөрөп, һоҫоп алғанда күҙ йәшеләй үтәҙек-саф һыулы йылғалар аға; өҫтә, бик бейектә, суғыртмаҡ-суғыртмаҡ яланғас түбәләр тәңгәлендә, ҡанаттарын ҡара йәйәләй киреп, балапанлы ояларына улъя һағалаусы бөркөттәр ҡыйғырлай, зәңгәр Күктән саңҡыуҙары саҡрымдарға тарала...

Суҡай-суҡай сал тауҙар ҡосағында, уралып-уралып аҡҡан йылға бөгәлендә киң үҙәнгә йәйерәгән ҡасаба Исламғол. Тәү ҡарауға ул тәрән йоҡоға талғандай: дүрт тарафҡа ҡарурманды ярып ингән тарлау арба юлдары – ылауһыҙ, шөңгөр йылға буйҙары – балыҡсыһыҙ, өҫкә ауа яҙып торған ҡарағай аралары кешеһеҙ – хәүефле ауҡан-аулаҡ. Бары тик ауыл ситендәге ҡуҫкыл әрәмәлек кенә аңлашылмаҫ һиллек уйынын боҙоп, ҡапыл һелкенгеләп ала – ғәмһеҙ ойоған йылтыр ылыҫ аралығынан ҡара беҙҙәй мылтыҡ көбәге төртөп сығып, һирәк-һаяҡ уҙғынсыға ас күҙен өңшәйтеп тоҫҡала:

-- Стой, кем бар унда?

-- Үҙебеҙҙекеләр!

-- Пароль?

Артынса уҡ мылтыҡ шартлай һәм:

-- Ах сволочь!.. – Уҫал һүгенеү яңғырай.

Ҡайһы саҡ, ҡылыҫҡа-ҡылыс сыңҡып, йән әселе ыңғырашыу булғылай. Ҡара-ҡаршы тороусылар ниңәлер хәтәр буталып, китте һуйыш-ҡаңҡойош, тигәндә генә, хәрбиҙәргә генә мәғлүм тылсым менән бер-береһен аңлашып, ҡыҫҡа тынлыҡ урынлаша. Урмандан сыҡҡан ҡораллы, ҡыҙыл йондоҙ таҡҡан картузлы кешеләр, йотлоға-йотлоға тәмәкеләрен тарта ла, штаб урынлашҡан кантон бинаһына йүнәлә.

Ҡайһы ваҡыт: “Туҡта, кем килә?” – тигән ауазға үтә шикле тынлыҡ яуап була ла шатор-шотор ботаҡтар ҡырылғаны, шырлыҡ йырып кемдеңдер олаҡҡаны ишетелә. Артынса уҡ өҙөк-өҙөк һулығып мылтыҡ шартлай. “Ыш-ыш” килеп, ағас араһынан берәй ҡанлы кәүҙәне һөйрәп сығаралар...

Ауылдың шығай ҡаялар һерәйгән осондағы берләм юлда арҡаһына ат башындай тире ҡуржын артмаҡлаған япа-яңғыҙ егет йораты һынланды. Ҡулына, ауыл малайҙарынса, йәш талдан ҡырҡып алып, йәшел ҡабығын бәке менән һуйып-семәрләгән сыбар таяҡ тотҡайны. Һағауыл тәңгәленән әллә ни тоткарлыҡһыҙ үтеп, 1918 йыл Һайылмыш һуғышында йәҙрә ярсығынан киҫелеп Ҡантураты менән ҡуша ауғандан һуң зәғифләнә биреп ҡалған һул аяғына саҡ ҡына сатанлай-сатанлай (сыбар таяғын юғары күтәреп таҡмаҡлатып болғап бара ине), юл ситенә сыҡты ла дымлы һулышын тиртеп ялтырап ятҡан уйсан йылға ярына баҫты. Сыбар таяғын ергә ҡаҙап, бер талай ҡарап торғас, артабан туйтаңланы. Ҡабаланмай ғына күпер урталығына етеп, туҡтаны; күҙҙәрен сөрөштөрөп, йәнә һыу өҫтөнә оҙаҡ текләне – үҙенең тыуған ауылының йылғаһын һағынды, буғай. Ҡыуаҡ төбөндә ҡалған ҡырыҫ һаҡсылар ҙа ниңәлер күҙ яҙҙыртманылар унан. Әллә һаман шикләнеп, әллә сәйерһенеп, тауыш-тынһыҙ

күҙәттеләр артынан. Юлаусының тоҙланып ҡатҡан һалдат гимнастеркаһы, шул уҡ төҫтәге галифе салбар өҫтөнә төшөп, яҫы ҡайыш менән ҡыҫа быуылып, һуйҙан, ыҡсым кәүҙәһенә егеттәрсә төҙөклөк бирep тора. Еемерек һалдат фуражкаһын башынан тырнап алды, ҙур аҡ (ғәжәп: ошо болғауыр заманда – аҡ!..) ҡулъяулығы менән тирле маңлайын һөрттө. Ҡырып алынған ҙур таҡыр түбәһе ҡояшҡа ялтыраны. Һыу битендә бер-берәй нәмә шәйләпме, йылмайҙы. Ҡарпышыраҡ ҡолаҡтары сәсheҙлектән уғата ҡарпайыбыраҡ күренһә *лә*, был кешенең көньяҡ башҡорттарына хас эре һыҙатлы, ҙур ҡара күҙле ҡуңыр йөҙө шул берҡатлы йылмайыуында үҙенә күрә яғымлы, эскерheҙ ине. Шәп-шәп атлап күперҙе сыҡты, йылға ситенә төшөп, шәкәрҙәй аҡ шау-ҡырсынды шағырлата баҫып һыуға яҡынланы, артмағын ергә ҡуйҙы. Һәрмәнеп, иҫке "Правда" гәзитенә төрөлгән итек таҙартҡыс, һабын, таҫтымал алды. Бүкәнташҡа алмаш-тилмәш баҫып, таҙартҡысын ҡыҙыу-ҡыҙыу ышҡытып, итектәренән юл саңдарын осортто *ла* вакса һөртөп ялтыратты. Аҡтүбәлә дошман ҡамауын йырып сыҡҡас батырлығы өсөн бирелгән бүләк итек ине был: махсус поезында фронттарҙы айҡап йөрөмөш Реввоенсовет рәйесе *Л*ев Троцкийҙың үҙ ҡулынан берәүҙәр – затлы сәғәт, икенселәре – ут-ялҡындай ҡыҙыл "комиссар ыштаны" алды, ә Сәлимйәнгә ошо "батша итектәре" эләкте (ысын булһа, Николай батша өсөн махсус тектертелгән)... Яр башында ауыҙын асып ҡарап торған малай аҡтығы һоҡланып тел шартлатты: йылтыр хром ҡуныстар, һыу көҙгөһөнән нур көлтәһе сағылтып, күҙ яуын ала ине.

Аяҡтары ялт-йолт килгән сәйер юлаусы тәү ҡарашта үлектәй тын ауыл буйлап хайран ҡала бирep барҙы: ҡайҙа һеңгән был халыҡ? Бынауындай ҙа уттай ҡыҙыу эш миҙгелдә, көпә-көндөҙ, сүп ҡалҡытмай һамҫып ултыралармы? Хатта эттәренә тиклем, өндәре тығылып, өрмәй: ҡасабаға шомло һағайыу тулышҡан.

Ауыл уртаһына етәрәк хәүефле тойғоноң икенсе төрлөһө сорнаны; йөрәге йыш дөпөлдәп, үҙе *лә* белештермәй, аҙымдарын йышлатты – ҡайҙа ҡарама, ҡораллы кешеләр генә гиҙә урамда...

Бейек таҡта болдорло кантон идара бинаһы алдында фуражкаһына ҡыҙыл буҫтау йондоҙ баҫҡан, мыйыҡтары һәленеп төшкән зәһәр ҡарауыл туҡтатты:

-- Стой! Кем килә?

-- Үҙ кеше.

-- Документтарығыҙҙы!

Каширин биргән ҡағыҙын һондо:

-- Әтрәт командирын күрергә кәрәк.

-- Штабҡа инергә рөхсәт юҡ. – Тексәйгән күҙҙәре йылтыр хром итектәрҙе һәрмәне.

-- Ашығыс йомош менән.

-- Уныһы беҙгә ҡараңғы.

Болдор ишеге шығырлап асылды *ла* соланда тәмәке тартыусының ҡәнәғәт һәм тулыш йөҙө күренде: остары бормаслап суҡайтылған йыуан казачий мыйыҡлы, кадровый хәрбиҙәрсә төҙ һынлы әҙәм -- моғайын, әлекке яугир офицер:

-- Михайло, ни ғауға?

-- Бер туземец үтергә ныҡый, иптәш начштаба.

-- Ә ниңә һүҙ ҡуйыртаһың, патроның юҡмы әллә?

-- Мандаты бар бит, Кашириндан.

Мыйыҡлы болдорға сыҡты:

-- Ҡара һин уны, ниндәйерәк ҡош икән?

-- Үҙәктән ебәрелдем, үтә мөһим эш менән, -- тине хром итекле, һағауылдың мандатты тегегә тотторояын һаҡ күҙәтеп.

-- Ҡара һин уны! Башҡортмо?

-- Башҡорт. Ләкин бында уның ни кәрәге бар?

Мыйыҡлы, тәмәкеһенең ебек төбөн аттыҡылай оҙон һарыештәре менән өҙә тешләп, ергә төкөрҙө:

-- Михайло, ҡамшаштыр шара-бараларын, живо!

Һаҡсы, өйрәтелгән эттәй алғыр ташланып, хром итекленең ек-япҡыттарын һыпырып-тентекләне, тире ҡуржындың булмышын болдорға ауҙарҙы:

-- Ҡорал-фәлән юҡ, иптәш начштаба. Шулай ҙа бынауы хромдарын...

-- Ашыҡмай тор, Михайло! – Егеткә ҡул киҙәне. – Киттек, малайка!

Егет, ауҙарылған мөлкәтен ашыҡ-бошоҡ йыйып алып, бер ҡулына – сыбар таяғын, икенсеһенә ҡуржынын тотҡан хәлдә мыйыҡлыға эйәрҙе.

Изәне – иле балсыҡ, тәмәке төпсөктәре менән ҡаҡашып ҡатҡан далбаҙарылай бүлмә уртаһында оҙон өҫтәлгә йәйеп һалынған хәрби картаға күкрәге менән әүешә биреп, урта буйлы ҡаҡса-арыҡ әҙәм инеүселәргә төбәлеп ултыра ине. Һары күндән бөткән шығырлауыҡ тужурка, шундай уҡ салбар, башында ла һап-һары күн фуражка. Биленда һары портупеялар менән тотторолған яҫы һары ҡайыш, шуға быҙау бото ҙурлыҡ һары таҡта кобуралы маузер аҫылған. Тәү ҡарауҙа был әҙәмде өҫтәл артына һөйәп ҡуйылған күнҡурсаҡ тип уйларлыҡ...

Ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡылай нәҙек тауышы ҡәнәғәтһеҙ сыйылданы:

-- Был ниткән эш тағы, иптәш начштаба? Ниңә тәмәкең менән инәһең?

-- Ғәйеплемен, иптәш командующий. Бынауы мәшәҡәт тыуып, ташларға онотҡанмын. – Итек үксәләрен йылғыр сәкәштереп, һарыештәрен ыржайтып көлдө.

-- Элекке культуралы атаман, офицер тип атала тағы. Батшаға хеҙмәт иткәнеңдә бер ҙә онотмағанһыңдыр... Етмәһә, әҙәм рәтле папирос та түгел; сыуаш мужигы кеүек, һаҫы махра бораһың.

-- Ах, инде бит батша хәҙрәттәре юҡ, иптәш командующий. Үҙем дә элекке генә. Ә хәҙерен власть үҙебеҙҙеке – теләгәнебеҙҙе рәхәтләнеп тартабыҙ.

-- Был изәнде шуға күрә аҙбарға әйләндерҙеңме?

-- Ғәйеплемен, иптәш командующий. Изән йыуыусы башкирка ҡасып киткән, ә ҡыҙыл әрмистәр бындай түбәнселеккә тотонмай, сөнки власть – үҙебеҙҙеке.

Ҡайышҡа бөткән әҙәм һыуына төштө. Бер ҡулына – ҡуржынын, икенсеһенә сыбар таяғын тотоп аңшайып торған егеткә иғтибар итте:

-- Быныһы ниндәй субъект?

-- Ниндәйҙер бер малайка, иптәш командующий. Йәғни башҡорт.

-- Башҡорт? Бандитты ниңә кереттегеҙ, шул урынында уҡ расходҡа сығарманығыҙ?!

-- Пардон, иптәш командующий: бандит үҙен, үҙәктән ебәрелмеш комиссармын, тип таныта. – Мыйыҡлы хихылданы.

-- Ҡайҙан? Эстәрлетамаҡтанмы?

-- Унан да өҫтәнерәк, ти, ха-ха-ха! Бына грамотаһы.

-- Мин – нығытылған хәрби район башлығы командарм Николай Дмитриевич Каширин тарафынан юлландырылған ғәҙәттән тыш комиссар-ревизор Сәлимйән Мырҙағолатов, -- тине егет. Һарыға бөткән бәндә һары ҡайыштарын шығырлатып турайҙы, ҡағыҙҙы ентекле тикшерҙе:

-- Һем... ревизор... Кашириндың үҙ ҡултамғаһы, мисәте... Тимәк, беҙҙең өҫтән ревизия яһарға йыйынаһың?

-- Кантон администрацияһы өҫтөнән.

-- Беҙ үҙебеҙ администрация.

-- Ғәфү итегеҙ, мин белгән иптәштәр...

Начштаба тигәндәре мыйыҡ остарын борғослап хәбәр итте:

-- Шахта төбөндә улар... һеҙҙең иптәштәр...

-- Шаяртаһығыҙмы әллә?

-- Еп-етди: “теге донъя”ға бабалары янына олаҡтырҙыҡ бандиттарҙы. Теләһәгеҙ, ревизия үткәрергә шунда китә алаһығыҙ, хе-хе-хе... – Үҙәккә үткес һыуыҡтан Сәлимйән ҡалтыраны:

-- Аттығыҙмы?

-- Аттыҡ. – Һары күнгә бөткән әҙәм, иҫе китмәй генә дөрөҫләп, үҙенең һәм иптәшенең кем икәнлеген таныттты: – Партияның яңыртылған кантон комитеты рәйесе һәм коммунистик батальондың, шуға беркетелгән ҡыҙыл отрядтарҙың командующийы Владислав Евгеньевич Поленов буламын. Ә был иптәш – беҙҙең штаб башлығы Иван Степанович Барановский. Ғәли Камалитдинович Шәмиғолов менән Михаил Савельевич Мансырев иптәштәр етәкселегендәге яңы Башҡорт Ревкомы беҙҙе ғәҙәттән тыш һәм сикләнмәгән вәкәләтлектәр биреп, башҡорт-бандиттарҙы тамам юҡ итергә ебәрҙе, яҡшы беләһегеҙҙер.

-- Яҡшы беләм. Һәм бындағы алты коммунисты ла белә инем.

-- Коммунист түгел улар, ә зәкирйәлитовсыларҙың ҡойроҡтары. Ундайҙарҙы һаҫы ҡандалалай һыттыҡ һәм һытасаҡбыҙ!

-- Судҡа ла бирмәйенсәме?

-- Хе-хе, беҙ үҙебеҙ – суд та, суд приговорын бойомға ашырыусы ла! – тине Барановский. – Беҙҙең бурыс – бандиттарҙы төбө-тамырынан көйҙөрөп юҡ итеү. Быны беҙгә йәлитовсылар заразаһынан таҙартылған республиканың коммунистик Ревкомы ышанып йөкмәтте.

-- Ләкин һеҙгә самосуд яһарға тимәгән.

-- Хе-хе-хе, үтә бер ҡатлы малайка икәнһегеҙ. Һуғыш ваҡытында ни эшләргә кәрәген белмәйһегеҙ.

-- Кантонда бит һуғыш ваҡыты түгел.

Поленовтың ҡайыштары шығырланы – ҡәнәғәтһеҙ бороллдо:

-- Ысын коммунисҡа хас булмаған сәйәси наҙанлыҡ күрһәтәһегеҙ! Кантонда ғына түгел, бөтә Башҡортостанда һуғыш хәле иғлан ителеүен кире ҡағаһығыҙ! Бына яңы Башревкомдың 1-енсе һанлы фарманының 4-енсе параграфы:

“Неисполнения или противодействия распоряжениям Башревкома будут караться по законам военного времени”. Шул фарманды беҙ еренә еткерәбеҙ!

Сәлимйән өндәшмәне.

-- Ҡыҙыҡ, ә һеҙ аслан ниндәй бурыс йөкмәп килдегеҙ әле? – тине Барановский.

-- Уныһын мин белдерҙем, мандатымда ла яҙылған. Минең хәҙерге статусымды ВЧК рәйесе Феликс Эдмундович Дзержинский иптәш раҫлаған, Кашириндан барып һорағыҙ.

Командующий менән штаб башлығының мәғәнәле күҙ ҡараштары осрашҡас, һуңғыһы ҡулын һуҙҙы:

-- Дөрөҫләүсе ҡағыҙ? Шунһыҙ танымайбыҙ!

-- Вазифамды үтәүгә аяҡ салһағыҙ, Ревтрибунал ҡаршыһына баҫтыртылып танырһығыҙ, биғәйбә.

Тынып фекер тупланылар. Поленов, арыҡ йөҙөн сытырайтып, комиссарға ҡаҙалды:

-- Электән белеүемсә, Мырҙағолатов иптәш, һеҙ бит буржуаз милләтсе Йомағолов хөкүмәтендә эшләй инегеҙ?

-- РКП(б) өлкә комитеты ҡарары буйынса мин ул хөкүмәттән киттем – ВЧК-ның йәшерен ҡарарына ярашлы Каширин иптәш етәкләгән хәрби нығытма районына күсерелдем.

-- Һе! Ә ниңә буржуаз әтрәгәләм менән бергә таймanығыҙ?

-- Сөнки мин буржуаз түгел.

-- Каширинсы тимәккә бараһығыҙ?

-- Каширин иптәш менән бергә Ҡыҙыл Армияның Көнсығыш һәм Төркөстан фронттарында аҡтарға ҡаршы алыштарҙа ҡан ҡойоп, күп тоҙ ейгән инсанмын.

-- Ғәфү, ә һеҙ аслан ҡайһы партияла тораһығыҙ: меньшевикмы, эсермы, әллә зәкирйәлитовсымы?.. – Владислав Поленов күҙҙәрен хәйләле ҡыҫты. Мырҙағола-тов, сырайының бер йөйөн дә сирытмай, түш төймәһен ысҡындырып, ныҡ тештәре менән гимнастеркаһының иҙеүен тешләп йыртты, йәшерен кеҫәнән ябай ҡыҙыл ҡатырға тышлы кескәй кенәгә сығарҙы -- Ырымбур гөбөрнәһе Орск өйәҙендә үҙе ойошторған партия комитетының 1-енсе номерлы ағзалыҡ билеты ине.

-- О! Ырымбур! – Командующий Ырымбурға айырым ышаныс тотҡанлығын тойҙортто. Түшен кәперәйтеп, шығырлаҡ портупеяларын бармаҡ остары менән төҙәтә-төҙәтә, ниһайәт, ҡулын биреп күреште:

-- Һеҙҙең кеүек үк, 1918 йылдан партия ағзаһымын – шанлы большевик Точисский Павел Варфаломеевичтың үҙе тарафынан ышаныс белдереп алынғанмын. Ә был иптәш, күрәһегеҙ, минең штаб башлығым, военспец. Ун һигеҙенсе йылда үк үҙе теләп большевиктар яғына сыҡҡан, ерле контрреволюцияға ҡаршы һуғыштарҙа һыналған.

Ҡылысының ебәк эфесы менән уйнап вайымһыҙ ғынак күҙәтмеш иптәш Барановский ҙа, теләр-теләмәҫ кенә, комиссарҙың ҡулын ҡыҫты:

-- Ғәфү итегеҙ, белеп еткермәгәнбеҙ...

Мырҙағолатов үҙгәреште иғтибарһыҙ ҡалдырып:

-- Тәүбашта мине мөхит менән таныштырығыҙ, -- тип ҡоро киҫәтте. Шуны ғына көткәндәй, ашығышып, топографик картаға әүештеләр, Поленов үҙе аңлатты:

-- Обстановка хөрт, әйтерлек түгел. Бер юлы өс кантон дөрләй ут эсендә. Совет яҡлыларҙы аталар, киҫәләр, урыҫ ауылдарын үртәйҙәр. Кулак агитаторҙары айҡала. Бер киҙәнеүҙә аждаһаның башын сабып өҙмәһәк, күтәрелеш бөтә Уралды ялмаясаҡ.

-- Көстәр нисбәте ҡайһылай?

-- Ауылдарҙа, юлдарҙа, урман һаҡлауыстарында фетнәселәр өҫтөнлөк итә. Тауҙарҙа банда ҡоторона. Беҙҙең коммунистик батальон, өс әтрәткә бүленеп, ут ҡулсаһы эсендә, тип әйтерлек, ҡыйыу хәрәкәт итә... Хәйер, быныһын төгәлерәк итеп начштаба үҙе картанан күрһәтер. Рәхим итегеҙ, иптәш Барановский.

Тегеһенең ҡәләм осо карталағы билдәләр өҫтөнән һикерҙе:

-- Бына был ҡыҙыл тәре һуғылған ауылдар – ысын янғын усағы. Ә бына бында, һуңғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, етәкселек үҙәге булырға тейеш. Шуныһы ғәжәп: ҡасаба тәңгәлендә Урал һыртын көнсығыш яҡлап уҙған тимер юлды шартлатмағандар – һаман поездәр үткеләй. Ә магистралдең буйынан-буйына, пушка уты барып етер арауыҡта – башҡорт-бандит ауылдары...

Поленов әлеп алды:

-- Бына шул уңай стратегик положениены файҙаланып ҡалыу кәрәк. Контрреволюция гидраһын иҙеп ташларға...

-- Фекерегеҙ аңлашылмай, -- тине комиссар.

-- Оператив план шундай: тимер юл буйлап ҡорос йоҙроҡ – бронепоездан һуҡтыртырға.

-- Бронепоезд?

-- Эйе, -- Поленов йоҙроғон карта өҫтөнә һалды. – Златоустан Көнбайыш фронтҡа баштан-аяҡ ҡоралланған бронепоезд уҙасаҡ. Өфөнән дә Ҡарталы аша Лев Маневич командалығындағы бронепоезд килеп етергә тейеш. Дошман башына артиллерия уты яуҙырыу ифрат ҡулай.

-- Дошман тигәнегеҙ ябай ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға булып ҡуймаҫмы? Үҙегеҙ үк әйттегеҙ: ир-ат тауҙарға киткән.

-- Был халыҡтың көллөһө -- бандит, осраған берен ерҙән ҡырсып ташлау фарыз. Коммунислыҡ бурысыбыҙҙы еренәсә еткереп...

Сәлимйәнде тәрән борсолоу ялманы: ошо мәлдә үҙе лә ялҡын эсендә ултырмаймы?.. Барановскийҙың итәғәтле аңлатыуы иблес шаукымылай тойолдо:

-- Һеҙ үҙегеҙ ҙә хәрби кеше күренәһегеҙ, иптәш комиссар. Совет иле өсөн ошо моменттың ни ҡәҙәре ҡатмарлылығын беҙҙән дә яҡшыраҡ беләһегеҙҙер. Әле яңы ғына Колчак бандаларынан арынып, Көнсығыш фронтты ябып, булған көс-ҡеүәтте Көнбайышҡа – поляк пандарына ҡаршы йүнәлткәнбеҙ. Шул уҡ ваҡытта оҫоҙ-ҡырыйһыҙ Себер урмандарында – ала-ҡола банда ҡалдыҡтары; Алтайҙа – баш күтәреү, ә Ҡытай сигендә недобитый атаман Дутов, Семенов, Пепеляев башкиҫәрҙәре; уларҙы Советтарға ҡаршы һөстөрөүсе Антанта – күҙ йоммайынса үҙ өңөнән һағалай, ҡабат боғаҙҙан алыу сәғәтен көтә. Башҡортостан тауҙарында,

Тамбов урмандарында баш күтәреүселәр мыжғый. Бына шул ут усаҡтары дөрләп бергә тоташты тип күҙ алдығыҙға килтереп ҡарағыҙ әле...

-- Һеҙ үҙегеҙ быны бик яҡшы күҙаллайһығыҙ, буғай, иптәш начштаба...

-- Уныһы хаҡ.

-- Шуның өсөн дә дөрләү усаҡҡа кәрәсин һибергәме? Атып-киҫеп, язалап...

Поленов әсе йылмайҙы:

-- Ғәфү итегеҙ, башҡорт-коммунист иптәш: беҙ милли хистәрҙән юғары! Башҡорт-бандитты башы оҙонлоҡ ҡыҫҡартыу – беҙҙең изге бурысыбыҙ. Революция дошмандарына аяуһыҙлыҡ – ул үҙе юғары революцион гөманлылыҡ, тигәйне иптәш Ленин. Яҡшы беләһегеҙ: советтарға ҡаршы баш ҡалҡытҡан кулактарҙы рәхимһеҙ ҡырырға саҡыра ул. Ә беҙҙең ҡаршыла – тап шундай кулак фетнәһе. Намыҫлы һәр коммунистан, ҡыҙыл әрмистән бында дошманға ҡарата көйҙөргөс әсе нәфрәт, үс, ҡаты ҡул талап ителә. Әгәр ҙә ысын коммунист икәнһегеҙ – эшегеҙ менән аҡлағыҙ, ти замана.

Мырҙағолатов артабан һүҙ көрәштереүҙең файҙаһыҙлығын аңланы. Маңлайын һырландырып, уйланды.

Болалы кантондарҙы тикшерергә ошо хәтәр сәфәренә китер алдынан партия өлкә комитетында өлкән иптәш тарафынан бирелгән кәңәште хәтерләне. Паровоздар депоһының элекке слесаре, хәҙер, тимер туты ла бөтмәгән ҡулдары менән юғары партия эшенә тотонған ҡарсыға ҡарашлы, яҫы маңлайлы зирәк урыҫ кешеһе уға кантондарҙағы болғаныштарҙың асылын ҡыҫҡаса аңлатып, урындарҙағы ҡайһы бер идара органдарында, хатта ҡораллы коммунистик әтрәттәрҙә лә Совет хакимиәтенә аҫтыртын аяҡ салыусы йәки бөйөк державасылыҡ шовинизмы менән ауырыусы шикле бәндәләр булыу ихтималлығын, шуға күрә халыҡ араһында ифрат та һаҡ эш итеү, дошмандарҙың мәкеренә бирешмәү кәрәклеген әйтеп киҫәткәйне.

-- Был ҡуҙғалыш, минең уйымса, ябай фетнә йәки бандитлыҡ түгел, ә бик етди милли-азатлыҡ хәрәкәтенә оҡшай. Башҡорт халҡына ҡарата дөрөҫ милли сәйәсәт алып бармауыбыҙ бәләһелер. Һуҡты-бәрҙе итеп кенә бөтөрөрлөк түгел уны – тамырҙары тәрәндә. Бик сос булырға, ерле халыҡтың тын алышын тоя белергә, ғәҙәттән тыш һаҡ эш итергә кәрәк. Һин – һыналған коммунист, башҡорт коммунисы. Аҡты ҡаранан айыраһың, милләтеңдең аһ-зарҙарын, хыялдарын аҡылың менән дә, йөрәгең менән дә тояһың. Бына ниңә беҙ ифрат яуаплы был эште тәғәйен һиңә ышанып тапшырабыҙ. Шикләнмәйем: уны һин һөттән аҡ, һыуҙан пак булып башҡарып сығырһың.

Дөрөҫ, Мырҙағолатов ошо яуаплы вазифаһы менән йәш республиканың сәйәси яҡтан хәүефле көньяҡ кантонында йөрөгәнендә ваҡиғалар яңы үҙгәреш алып, элекке хөкүмәт урынына яңылар – Сәлимйәнгә эшмәкәрлегенең Ырымбур осоронан уҡ яҡшы таныш сәйәсмән, Башҡортостан автономияһының хас дошманы Ғәли Шәмиғолов төркөмөнөң килеүе һәм башҡорт халҡы был өйөрҙө оло нәфрәтләнеп ҡаршылауы, кантондарҙа, бигерәк тә Урал тауҙары араһында, шуға бәйле ҡанлы болғаныштар көсәйеүе мәғлүм булды. Әммә бөгөнгө донъябыҙҙың төп ҡануны үҙгәрмәй: хөкүмәт һәм партияның өлкә комитеты алмашынһа ла, коммунистар партияһы үҙ урынында ҡала – ялпыларҙы яҡты

көнгә сығарыу, барса милләттәргә лә тиң хоҡуҡтар биреү сәйәсәте бер көйөнсә дауамлана, шуны бойомға ашырыу мөҡәддәс бурысым! тип уйланы алмашынмаған коммунист Мырҙағолатов һәм үҙ бурысын үтәүҙе дауамланы...

Бында килерҙән элек, Үҫәргән кантон үҙәге ителгән урыҫ ауылы Сабатарҙа урындағы әүҙемәндәр кәңәшмәһе булғайны. Кантон хәрби революцион комитеты рәйесе Чистяков иптәш теҙгенде ҡыҫҡа тотто:

-- Поленов – ысын коммунист, интернационалист. Уның тураһында төрлө насар хәбәрҙәр йөрөй, ләкин беҙ быны нәфрәтләнеп кире ҡағабыҙ. Башҡорт контрреволюционерҙары тарафынан таратылған бысраҡ яла тип иҫәпләйбеҙ. Владислав Евгеньевич Поленов иптәш – бөтә Уралға билдәле ҡарт большевик Точисскийҙың шәкерте, 1918 шанлы йылда Зәкир хандың аҡ бандаларына ҡаршы һуғыштарҙа һыналған ҡыҙыл яугир. Ҡыҫҡаһы, сыныҡҡан гвардия. Ә инде беҙҙең райондағы башҡорт-бандиттарҙың да башына етә икән – был факт үҙе уның файҙаһына һөйләй. Пролетар революцияның тутыҡмаҫ үткер ҡылысы ул!

Ләкин, кантон идаралығындағы төрлө ялыу ҡағыҙҙары, ҡулға алынған кешеләрҙең күрһәтмәләре менән танышҡас, күңеленә әсе юшҡын ултырҙы. Поленов хәрәкәт иткән ҡанлы төбәктәрҙе тикшереп бөтмәй тороп, Эстәрлетамаҡҡа ҡайтмаҫҡа ҡарар ҡылғайны, инде килеп шул ҡарарының дөрөҫлөгөнә инанды. Ул үҙенең ябай “башҡортлоғо” менән дә үтәнән-үтә күреп, ике-ара киҫкенлекте ҙур ҡан ҡойошмай бөтөрөү яйы барлығын, һуң түгеллеген һиҙенә. Әгәр ҙә шул форсатты ҡулдан ысҡындырмайынса хәҙерҙән үк ҡыйыу аҙымдар яһап ҡалмаһа, үҙен ҡулға алдыртырға йәки физик яҡтан юҡ иттертергә мөмкинлек бирһә, ҡасанмы үҙәктән яңы кеше йәки көс килеп еткеләгәнсе эш уҙып, кереше ныҡ тартылған уҡ атылып, даръя-даръя ҡандар ағасаҡ... Юҡ, коммунислыҡ әхләге юл ҡуймай быға!

Бүлмәлә тәрән тынлыҡ. Ихтыярһыҙҙан өсөһө тиң ауыр һулыш алып, уйландылар.

-- Дары мискәһе өҫтөндә ултырабыҙ, -- тине Барановский. – Дошман лагерында поголовный мобилизация, ҡоралланыу бара. Биленә ҡылыс тағырҙайҙың барыһы аяҡҡа баҫҡан, атҡа менгән. “Реввоенсовет” исеме аҫтында үҙҙәренең контрреволюцион органын һайлағандар – башында Аҡмулла тигән яһил милләтсе, контрреволюционер тора...

-- Аҡмулла түгел – Аҡмал, -- тип төҙәтте тегеһе.

-- Барыбер. Бына шул Аҡмал, ҡанәскес главарь, яҡындағы разъездан бер вагон тимер талап алып, тау араһында ҡорал сүкергә керешкән. Тирә-яҡта димселәре диңгеҙ кисә, беҙҙең агенттарҙы ла үҙенә ҡарата...

-- Кисә генә өсәүен эләктерҙек, -- тине Поленов. – Изге ата-бабаларына китергә сират көтәләр.

-- Йәғни?

-- Расходҡа сығарабыҙ. Һуғыш ваҡыты.

Сәлимйәндең мейеһендә йәшендәй уй һыҙылды:

-- Килтерегеҙ әле миңә шуларҙы, ҡылдарын тартып ҡарайым.

-- Уларҙан бит, тәнен уйып алһаң да, һүҙ сығырлыҡ түгел. Юҡ менән булмағыҙ, иптәш комиссар.

-- Килтерегеҙ, уныһын үҙем белермен.

Барановский теләр-теләмәҫ ҡуҙғалды, ишек ҡыҫығынан тышҡа ҡысҡырҙы:

-- Михайло, елтерәтһендәр әлеге бандиттарҙы!

2

Штабҡа өс тотҡондо индерҙеләр. Береһе ҡолғалай оҙон, шыҡһыҙ арыҡ кәүҙәле, нәҙек кенә ерән кәзә һаҡаллы, бесәйҙекеләй йәшкелт күҙле. Башына ҡайышланып ҡатҡан йәшел хәтфә түбәтәй, иңенә ала-ҡола буйлы оҙон кәзәкей өҫтөнән ҡаплатып иҫке елән, аяғына ирнәүҙәре кителеп, морондары ашалып бөткән ҡаты күн ҡата кейгән. Вәлиулла икән уның исеме. Икенсеһе, уртаса буйлыһы, ялтас яланбашлы, маңлай аҫтынан уттай яндырып һөҙөп ҡараусан күмер-ҡара күҙлеһе, аяҡтарына береһенең табанбашы айырылып бармаҡтары күренеп торған аҡ сарыҡ, өҫтөнә һоро дөйә йөнөнән туҡылған ҡытыршы ерән сәкмән кейеп, билен сүс бау менән быуған; исеме Ғайса имеш. Өсөнсөһө, тулышмыҡты кәүҙәле Йософ тигәне, яңыраҡ ҡына һалдат хеҙмәтенән ҡайтҡан ҡыҙыл әрмис булырға тейеш: күпте күреп таушалған хәрби кейемле. Буйға тәбәнәгерәк булһа ла, яурыны ҡалын, күкрәге киң, маңлайы яҫы, күҙ ҡарашы үткер, аҡыллы кеше һымаҡ. Донъя ҡуласаһын үҙ ҡулында әйләндереп күнгән һалдаттарға хас ҡыйыу ҡиәфәтенән, нәҙек кенә ҡара мыйыҡлы йөҙөнән тотанаҡлыҡ, ихтыяр көсө тиртә. Әммә өсөһө тиң интегеп йонсоған. Өҫтәл тирәһендәгеләргә асыҡтан-асыҡ нәфрәт, үс менән ҡаранылар.

-- Йә, бандиттар, атайығыҙҙың йомшаҡ түшәгендә яҡшы йоҡланығыҙмы, ҡабырғаларығыҙ һынманымы? – тине ла Поленов, ике сикәһе ҡыҙышып ҡысҡырҙы: -- Ниңә һерәйҙегеҙ, сүгәләгеҙ анауында!

Берыңғай ҡуҙғалып, мейес буйындағы оҙон эскәмйәгә ултырҙылар. Яңылыҡ булаһын шәйләп, буғай, был урында сәйер күренгән башҡорт ҡиәфәтле кешегә -- комиссарға ҡаранылар. Сәлимйән, иғтибар итмәгәндәй, өҫтәлгә теклəгән килеш ултыра бирҙе.

Эскәмйә борсолоп шығырланы, ҡәнәғәтһеҙ тамаҡ ҡырыу, йүткереү... Сәлимйән, башын ҡалҡытып, вайымһыҙ ғына һораны:

-- Йә, егеттәр, һөйләп ебәрегеҙ әле. Кем булаһығыҙ?

-- Беҙҙең кем икәнде анауҙан белеш! – Ерән сәкмәнле Ғайса, ҡуҙлы-ҡара күҙҙәрен ялтыратып, Барановскийҙы көйҙөрҙө, айырыҡ башлы сарығы менән иҙәндә ятҡан тәмәке төпсөгөн типте.

-- Кем тип ни, бандиттар беҙ, -- тине ҡолға буйлы ерән һаҡаллы Вәлиуллаһы. Барановский “бандит”ҡа бармаҡ тоҫҡап, күҙҙәрен секерәйтте:

-- Ҡара-ҡара, ҡайһылай кәперәйә! Бесәй белә кем майын ашағанын! – Сәлимйәнгә аңлатты: -- Ғайса Талипов тигән башкиҫәр була был, иптәш комиссар. Исеме Ғайса пәйғәмбәрҙеке булһа ла, торғаны менән бандит – ҡиәфәтенә бағығыҙ. Көпә-көндөҙ үҙ әсәһен тотоп һуймаҫ был, тимә... Ә быныһы, -- тәмәке ыҫы һарғайтҡан бармаҡ ҡолға буйлыға тоҫҡалды, -- был тоҡ кейҙертелгән ишан таяғы – Вәлиулла Әғләмов тигән изге Мөхәммәт пәйғәмбәр вариҫтарылыр. Елəне менән таҡыяһы ғына ла үҙе ни тора: любой европа музейына илтеп һалырлыҡ! Ғүмере

буйына мәсет һаҡлап, ҡатахана таҙартып мөкиббән киткән ҡарасҡы. Шул көйөнсә революция тәғәрмәсе арасаһына хәлифә таяғын тығып, әҙәм рәтенән контрреволюция ойоштороп йөрөгән була, гнида! – Сәлимйәндең күҙҙәренә һирпелеп көлдө: -- Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған, тиҙәрме әле һеҙҙең башҡортта, ха-ха-ха! – Үҙе тапҡан сағыштырыуға кинәнеп, йәштәре бытлыҡҡансы хахылданы.

-- Степаныч, етәр, өсөнсөһөн тасуирла! – тип бүлдерҙе кәйефләнеп тамаша ҡылыусы Поленов.

-- Ә өсөнсөһө, пардон! – "Таш мәсеткә -- ағас мулла" тигән әйтем дә бармы әле һеҙҙә? Тап шул ағас мулла була инде был -- өсөнсө көнгө мөғәллим, кисәге ҡыҙыл әрмис-дезертир, бөгөнгө йөҙ процентлы бандит Шаһимырҙанов Йәмил әфәнде хәҙрәттәре...

-- Ҡыҫҡаһы, өсөһө тиң отъявленный бандит – верховный бандит Аҡмалдың вәзирҙәре! – Поленов йомғаҡланы. – Степаныч, дауам ит.

Барановский, салбар кеҫәһенән ҡарҙай аҡ ҡулъяулыҡ алып, мәрәкәләүҙән мөлдөрәгән татлы күҙ йәштәрен һөрткәс, ипкә килеп, Вәлиуллаға төбәлде:

-- Йә, мәсет ҡарасҡыһы, һөйләп ебәр әле комиссарға тылсымлы ҡантурат хаҡындағы мәрәкә-әкиәтеңде! – Яурындарын һелкетеп, йәнә кинәнеп көлдө. Донъянан ваз кискәндәй вайымһыҙланып иҙәнгә текләгән "мәсет ҡарасҡыһы" шул ыңғайҙа кинәт һушына килеп ырғып торҙо, үтә ҡурҡып ҡалтырауҙан танау япраҡтары өрөлөп, күҙе маңлайына күсте. Диуаналарса тилмереүле ялуарҙы:

-- Зинһар, әйтә күрмәгеҙ, әйтә күрмәгеҙ!..

-- Сергей ҡантуратымы әле ул? Ха-ха-ха!

"Ҡантурат" һүҙен ишетеүҙән Сәлимйән дә тертләне – Һайылмыш йылғаһы буйында аҡтарҙың йәҙрә ярсығынан киҫелеп йән биргән Ҡантураты һынланды йәнә күҙ алдында...

-- Әйтә күрмәгеҙ, әйтә күрмәгеҙ!.. – Тотҡон, ҡолаҡтарын устары менән томалап, ауыҙынан аҡ күбек аҡтарылып, эскәмйәгә әүшәрелде.

-- Етәр, сирле кешене ниңә язалайһығыҙ? – тине мөғәллим Йәмил.

-- Молчать! Һиңә лә сират етер! – Тотҡондоң сәйер ҡылығын аптырабыраҡ күҙәткән комиссарға төшөндөрҙө: -- Пардон! Һеҙгә, Европа яғы башҡортона, бындағы йәғни Урал артындағы хөрәфәт билдәһеҙҙер. Азия! Йыйын ҡараңғы халыҡ – тау ҙа таш, урман да сытырман, тигәндәй... Менеп йөрөгән аты менән ҡымыҙ көрәгәһенән башҡаны күрмәй, әле булһа ярым мәжүсилек ҡосағында төрлө һыу эйәләренә, ен-бәрейҙәргә табынып йәшәй башҡорт. Ҡаршығыҙҙағы ла тап шундай типтарҙың береһе. "Сергей ҡантураты" тип ысҡындырҙыңмы, ҡомдай ҡойола ла төшә. Имеш, уларҙы ошонда ниндәйҙер мифик "Сергей ҡантураты" эҙәрләп килгән дә, беҙҙең постарҙы үтеп бөттөк тигәндә генә һауа ярып кешнәп, өсөһөн дә тотторған... Әйтергә кәрәк, ул мифик ҡантурат тураһында регионда имеш-мимештәр йөрөй. Шулаймы, мөғәллим әфәнде? – Йәмил быны иғтибарһыҙ ҡалдырҙы. – Бандит, телеңде тешләнеңме?! Комиссар алдында яуап биргең килмәйме, сукин сын! – Йомарлаған тос йоҙроғон тейешле еренә төшөрмәй саҡ тыйылып ҡалып, Сәлимйәнгә бороло. – Күрегеҙ, иптәш комиссар: башкиҫәрҙәр

“Реввоенсовет”ының ағзаһы, Аҡмулланың, -- әй, тфү! – Аҡмалдың урынбаҫары Шаһимырҙанов үҙе була инде был. Шулай бит, Йәмил әфәнде?

-- Ҙурлауығыҙ өсөн рәхмәт, господин бывший казачий офицер!

-- Ах сволочь! – Барановский тондорғайны, тегенең ауыҙынан боролдап ҡан китте, тамаша ҡылған Поленов зауығы өҙөлөп сыйылданы:

-- Степаныч! Күпме әйтергә була, ниңә бында?

-- Ғәйеплемен, иптәш командующий, еңелсә генә ҡағылдым... – Ауыҙын ыржайтып йылмайҙы. – Бандиттарҙы һәр ерҙә өйрәтеү фарыз.

-- Рәхмәт, яҡшы һабаҡ бирәһегеҙ. – Йәмил иҙәнгә ҡыҙыл күбек төкөрҙө. – Николай батша заманында беҙҙең тештәрҙе господа офицерҙар һуғып һындыра ине, хәҙер иптәш командирҙар рәхәтләнеп башҡара... Шулаймы, комиссар?

-- Шулаймы, түгелме – ләкин эш унда түгел, Шаһимырҙанов уҙаман. Эш бөтөнләй башҡала – йәшәргәме, йәшәмәҫкәме беҙгә? – Сәлимйән мөғәллимгә текләп ҡараны.

-- Кем ул “беҙ”? Икебеҙ ике ярҙа тора түгелме? Эштәр былай барһа, кемгә йәшәргә икәнен Хоҙай үҙе генә белә.

-- Күреп торам: аҡты ҡаранан айыраһың, күҙең үткер. Мин дә һине үтәнән-үтә күрәм. Шулайғас, ваҡытты әрәм итмәйек, һәр сәғәтебеҙ, минутыбыҙ ҡыйбат. Ике ярҙа тороуыбыҙҙан фәтүә юҡ. Уртаҡ тел табып ҡул бирешәбеҙме бөгөн, юҡмы – шуға ҡарап халҡыбыҙҙың яҙмышы, ғүмере хәл ителә... Тураһын ғына әйткәндә, был яҡҡа ни йомош менән юлыҡтың?

-- Иптәш командирҙарға әйткәйнем шикелле инде! – Йөҙөнә ерәнес ишараты сығарып, Поленов менән Барановскийҙар яғына эйәк ҡаҡты.

-- Уныһы миңә ҡараңғы. Ошо минутта һин минең менән йәғни РКП(б) өлкә комитетының һәм Башҡортостан хөкүмәтенең ғәҙәттән тыш ревизор-комиссары, һеҙгә төбәп ебәрелгән илсеһе Сәлимйән Мырҙағолатов менән һөйләшәһең.

Өсөһө тиң баштарын салт ҡалҡытты, өмөтләнеп төбәлде. Тик шул мәлдә үк һүрелеп, йәнә түбән эйелделәр.

-- Беләбеҙ һеҙҙе. Мынауы командирҙар ҙа РКП(б) исеменән һөйләшәләр, -- тине Йәмил. -- Теге донъяға китәсәгебеҙҙе лә уның исеменән вәғәҙә иттеләр.

-- Тота килеп партияны ғәйепләргә ярамай.

-- Яраймы, ярамаймы – инде беҙгә барыбер. Ҡәбер төбө кем өсөн дә ҡараңғы.

-- Ә һин унда ашыҡма. Үҙеңде, халҡыңды уйла.

-- Етер, күп уйланыҡ! Ысын илсе икәнеңде иҫбат ит! – Ғайса тигәне елләнеп ырғып торғайны, салғыйынан тартып сүктерҙеләр.

-- Яҡшы. Бөгөн төндә атылырға тейешлегегеҙҙе беләһегеҙме?

Өндәшмәнеләр.

-- Беренсенән, мин һеҙҙе үлем язаһынан ҡотҡарам. Икенсенән, өсөгөҙҙө лә иҫән-имен өйөгөҙгә ҡайтарам. Шул еткәнме?

Был юлы ла өн сығарманылар.

-- Иптәш командующий, ғәҙәттән тыш вәкәләтлегемә таянып, революция исеменән бойорам: тотҡондарҙы хәҙер үк һаҡ аҫтынан азат итегеҙ! – тине Сәлимйән.

-- Иптәш комиссар! – Поленов ҡобараһы осоп сыйылданы.

-- Үтәгеҙ. Революция бойороғо!

Поленов, эске тулауын баҫырып, ишек төбөндә шыҡайған һаҡсыларға сығып китергә бойороп баш ҡаҡты. Яҙмыштарының боролошона ышана алмаған өсәүгә:

-- Дүрт тарафығыҙ ҡибла – башығыҙ тартҡан яҡҡа тайығыҙ. Тағы ла эләкһәгеҙ, үҙегеҙгә ҡарап үпкәләрһегеҙ!

-- Туп-тура эшафотҡа! – Барановский ҡул төйҙәһе менән боғаҙын салып күрһәтте.

Мейес буйында үҙ-ара быш-быш серләшкәс, Йәмил алғараҡ сыҡты:

-- Беҙ, комиссар иптәш, ҡасыш-боҫош уйынын яратмайбыҙ. Сыҫкан һымаҡ, алдаштырып, ҡапҡанға төшөрөргә итһәгеҙ, бик нығ яңылышаһығыҙ.

-- Бер кем дә ҡапҡан ҡормай. Поленов иптәш әйтмешләй, дүрт тарафығыҙ ҡибла.

-- Юҡ инде, былай ғына китмәйбеҙ! Бәлки, коммунистар ғәҙәтенсә, арҡабыҙға атырһығыҙ, әммә дөрөҫөн баҡтыртып һөйләп китәсәкбеҙ.

-- Улайһа, эскәмйәгеҙҙе бирерәк шыуҙырығыҙ.

Ултырыштылар, Сәлимйән дә ултырғысын яҡыныраҡ килтерҙе. Икмәк-тоҙлоҡ башҡортса белгән командующий менән штаб башлығы иһә бер ситтәрәк һағайып тыңланы.

-- Әйтегеҙ әле, ни өсөн һуғышаһығыҙ?

-- Совет власы өсөн.

-- Совет власы өсөн – Совет власына ҡаршымы?

-- Коммунистарға ҡаршы.

-- Коммунистар – шул уҡ Совет власы бит? Бына мин, мәҫәлән.

-- Анауы коммунистар – шул уҡ Совет власымы? – Ғайса тигәндәре Поленов менән Барановский яғына ишараланы. – Юҡ, ундай Совет власы кәрәкмәй беҙгә!

-- Беҙ – ысын эшсе-ерекмән власы өсөн! – тине Йосоп.

Сәлимйән көләмһөрәне:

-- Уҙамандар, шул власты төҙөргә лә нығытырға кем ҡамасаулай һеҙгә?

-- Беҙҙең тире эсендә йәшәп ҡараһағыҙ, улай тимәҫ инегеҙ.

Уткүҙ Ғайса, теш араһынан һыҙыра төкөрөп, асыҡтан-асыҡ нәфрәтләнде:

-- Барығыҙ ҙа бер ҡалып: ил янғанда күмер сүплəп көн күреүселəр. Башҡортмоң, тигəс тə, аҡыл һатып тел сарлауҙан ни файҙа? Утлы табала бейетеп ҡанманығыҙмы? Юҡ, ғəҙеллек юҡ был донъяла!

-- Ғəҙеллек бар ул, уҙаман. Тик уны күктəн көтөп ятырға ярамай. Ул һəр ярлы-ялпының үҙ ҡулында.

-- Үҙ ҡулыбыҙҙа булһа, үҙ өйөбөҙҙə малдай һуймаҫтар ине. Эстəрлетамаҡта ултырып, шуны ла күрмəйһегеҙ. Күрергə лə теләмəйһегеҙ!

-- Дөрөҫөн əйткəндə, юғарылағы түрəлəр бит улар башҡорт халҡын берəй һуғыш йəки бола ҡупҡанда ғына иҫкə төшөрə! – тине Йəмил. Сəлимйəндең тамағына төйөр тығылды:

-- Һин улай, уҙаман, бөтəбеҙҙе дегеткə буяма əле, -- ҡоро, ҡырыҫ сыҡты тауышы. – Аҡ эттең бəлəһен ҡара эткə япһарма.

-- Беҙҙең хәлдәр эт илағыс шул, иптәш... Бында ултырып фараз ҡылыуы еңел...

-- Аҡмуллағыҙ кем һуң ул?

-- Аҡмалды әйтәһеңме? Кем тип ни, һаҡалы биленә төшкән сап-сал ҡарт инде... аҡһаҡал... Йәшлегендә Иҙелбаш завдында тимер сүкегән. Япон һуғышында ҡатнашҡан. Артабан ҡан ҡойошмай ғына килешеү өсөн илсе итеп ебәргәйне лә беҙҙе... илсегә үлем юҡ, тигән булып... Эстәрлетамаҡҡа шул йомоштан китеп барышлай ине...

-- Әллә унда башҡа төрлө коммунистар ултыра тиһегеҙме?

-- Тимәйбеҙ, унда Мәскәү коммунистары ла эш иткәнен беләбеҙ. Шулар аша тура Ленинға тоташырға ине ниәт.

Сәлимйән Мәскәүҙең Башҡортостандағы ике вәкилен күҙ алдына килтерҙе: Самойлов – наҙан, Сергеев-Артем – мәғрифәтле шовинист, икеһе лә автономияға ҡаршылар; шулар арҡаһында Башҡорт хөкүмәте вазифаһынан ваз кисте, улар урынына яһил шәмиғоловсылар ултырҙы; бындағы ҡан ҡойошҡа ла аслан шулар ғәйепле... Ләкин әле әйтелгән изге ниәттәрен аҡлар өсөн, ҡан ҡойошто туҡтатыр өсөн мөмкин булғандың бөтәһен эшләр мәл етте, яҙмыш шуны ошонда уға йөкмәтте...

-- Тоташырһығыҙ. Тоташырбыҙ. Мин үҙем һеҙҙең менән сәфәргә сығам, -- тине. Поленов менән Барановский быны тыныс кисерҙе, сөнки улар өсөн артыҡ бүрәнә башының күҙҙән олағыуы мөһим: башына бандиттар етһә -- бик һәйбәт, ә инде улар яғында тороп ҡалһа, мандатҡа ҡул ҡуйған Каширин үҙе яуап бирәсәк.

3

Тәпәш, йөнтәҫ, теремек башҡорт аттарында дүрт һыбайлы ҡасаба осонаса командующий менән штаб башлығы һәм эйәрсендәре оҙатыуында килеп, алғы һыҙыҡ һағауылынан уҙҙылар. Тар, ҡараңғы урман юлы кескәй төркөмдө үҙенә тартып алып, ҡыҙыл әрмистәр күҙенән ышыҡланы. Комиссар ҡушарлығында булһалар ҙа, арҡалары пүлә көтөп сымырлап барған өс һыбайлы ауыр киренкелектән бераҙ арынып, тартышып ҡатҡан тәндәрен яҙлыҡтырҙылар, ярһыу дәрт менән аттарының бөйөрөн типсенеләр. Тупыр-тупыр тояҡ таҡмаҡтары сал ҡарағай баштарына һарылып, тәбиғәтте һиҫкәндереп ебәрҙе.

Тәрән уйға сумып ойоған комиссар, тирә-яғындағы йәшел хозурлыҡты, аңҡау ярып кергән әскелт-хуш сайыр аңҡыуын да абайламай, уҡтай һуҙылып елгән юрғаһының ялбыр ялына текләгән килеш, сихри хистәр ҡосағында йомолоп йөҙә бирҙе. Алдағы өс юлдаштың тиргә батып тоҙға ҡатҡан яҫы арҡаһы әленән-әле иғтибарҙы бүлә лә аттарҙың һаҡ бышҡырыуы ҡырыҫ ысынбарлығына ҡайтара. Күкрәп бесән еткән саҡ, салғы сүкер, кирелеп яҫма һалыр саҡ; әммә ошо гүзәл ерҙең хужалары, үҙенең төп вазифаһын онотоп, ҡылыс тапау, һөңгө һаплау һәм тау-таш араларына, урман шырлыҡтарына боҫоп, януарға түгел, ә үҙе һымаҡтарға әжәл яуҙырыу менән мәшғүлдәр; болоттай ҡуйырған йәшел болонлоҡтарҙы ла, туҡ башаҡлы баҫыуҙарҙы ла ҡара-ҡаршы үрәпсеп ҡарғыған дағалы аттар изә; шомло ауылдар тәңгәленән күккә әсе үрт ыҫы, ҡан шәүләләре

күтәрелә; көмөш һыулы саф йылғалар өҫтөнән ҡанлы кәүҙәләр күпсеп-һалланып аға – шуны уйлап эстән һыҙып көрһөнә, әрнеп бара ине ер балалары, хәрби аттарға атланған дүрт уҙаман... Үркәс-үркәс тау теҙмәләре ләә, бер менеп тә бер төшөп, артта ҡалды; зәңгәр күктә нурға мансылып йөҙгән бөҙрә болоттар ҙа, ҡул һуҙымы етерҙәй яҡынайып, остары менән, әйтерһең, шуларға ҡаҙалған ҡолас етмәҫ ҡарағайҙар, сағылдай көр ҡарағастар донъяһы күҙалланды. Бер сал ҡая ышығына тиңәлгәс, һыбайлылар туҡтаны; аттарынан төшөп, теҙгендәрен ботаҡҡа элеп, таштарҙы шауҙырлатып ишелдерә-ишелдерә, текәгә үрмәләнеләр. Йөрәктәре дөп-дөп типте, маңлайҙарынан тир аҡты. Балта киртеп тамға һалынған дәү ҡарағай тәңгәлендә туҡталып, баштарын салҡайттылар. Үрҙә, йыуан олондоң балауыҙ-һары күкрәгендә, билендәге яҫы ҡайыш кирәменә беркелеп, аҡ тула эшләпәле, аҡ күлдәк өҫтөнән ҡара кәзәкейле, һорғолт киндер ыштанлы, күн итекле берәү тирә-яғын сыбарлаған мыжғыу бал ҡорттары араһында солоҡ ҡарап булаша.

-- Әссәләмәғәләйкүм, Мостафа ағай! – Башындағы төшөп барған йәмерек фуражкаһын услап тотоп Йәмил һөрәнләне. Солоҡсо етеҙ хәрәкәттәрен туҡтатып, аҫҡа салт боролоп ҡараны. Ҙур йоморо танаулы, эре сырай һыҙаттары беленеп торған оҙонса йөҙлө, ап-аҡ ялбыр ҡашлы, ап-аҡ көрәк һаҡаллы ҡарт икән дә.

-- Вәғәләйкүмәссәләм, һинме был, Йәмил мырҙам?

-- Эйе, мин инем, Мостафа ағай.

-- Ҡайҙан моронланың?

-- Үҙең белгән тарафтан.

-- Эргәңдәге ҡунаҡ кем?

-- Баш йорт ебәргән илсе.

Ҡарт ашығып солоғон бикләне:

-- Ярай, түбәндәрәк көтөп торорғоҙ.

Юлаусылар аттары янына төштө. Теҙгендәрен ҡулдарына алып, һуҡмаҡ буйлап килгән ҡартты көттөләр. Ул, бер кемгә лә күтәрелеп ҡарамай, өндәшмәй, берләм юллы ағас араһына тартылғас, юлаусылар ҙа, менгеләрен етәкләп, артынан ыңғайланы.

Селтерәп кенә шишмә урғылған тау егенә еттеләр. Һыу ситендә саталы ҡаҙыҡ аша ергә сәнселгән сей ағас-һалмауырға ҡоромло таған аҫылған, яҡындағы йыуан ерек төбөндә ҡабыҡ ҡыуыш ишеге өңөшәйеп тора. Ҡартлас йәһәт усағын хәстәрләне, киҫәү аҫтынан бормасланып әскелтем-сөскөлтөм төтөн ҡойроғо һуҙылғас, ҡаҙанға шишмәнен һыу һоҫоп, йолҡоп-таҙартып әҙерләнгән ҙур һуйырҙы сумырҙы. Мәшәкәтен теүәлләп, ҡыуыш артында Йәмил менән оҙаҡ сөңкөлдәштеләр; ҡарт ҡайҙалыр ағас араһына китеп олаҡты.

Һертелдәп килеүҙән көллө тәне емерелгән Сәлимйән, шөңгөр шишмә ҡырыйына сүкәйеп, һалҡын һыуға кинәнеп бит-ҡулын йыуҙы. Ҡыҫтау хромдарынан арынып, янып барған аяҡтарын рәхәтләнеп батырҙы. Тәненә йүгергән ял-сихәттән иҙерәп, имеп туйып бишеккә ятҡан сабыйҙай, боғаҙынан ихлас ләззәтләнеү ауазы сығарҙы, йәшел үләнгә салҡан төшөп кирелде; хозурлыҡтың татлы дауамы булып, тыйылғыһыҙ, табандары һыуҙың көмөш көҙгөһөн сәпелдәтте. Көллө донъяһын оноторҙай ошо ләззәтле мәлендә ҡапыл

тертләп һиҫкәнде: яҡындағы ҡускыл ылыҫ аралығынан көйҙөргөс үсле күҙ баға – Вәлиулла юлдашының ылыҫтай йәшел күҙҙәре!.. Комиссар ҙа үҙен абайлағанды һиҙеп, буғай, ялт итеп юҡҡа сыҡты, *ләкин* үсле ҡарашы һаман ылыҫ аҫтынан төбәлгән һымаҡ ине...

Сәлимйән, тора һалып, ҡыҫтау итектәрен тартып кейҙе. Йәшерен ҡурҡыныс һағалауын тәрән эске тойғо менән һиҙенеп, тирә-яғын барланы. Ғайса Талипов тигәндәре, бөксәйеп ултырып, йыбанып ҡына усаҡ болғата; Йәмил иһә боҡорлап ҡайнаған ҡаҙанға ағас шеш тығып, сәнескеләп, иттең бешеп өлгөрөүен самалай. Эргәлә генә сыбар арҡалы гонаһһыҙ бер ҡошсоҡ үлән орлоҡтары сүпләп маташа... Комиссар, тынысланып, кире ҡабат салҡан һуҙылды, йәшел ҡарағайҙар осондағы зәп-зәңгәр түңәрәклектә ҡара шамаланып йөҙгән бөркөт шәүләһен байҡаны. Күңелендә, дәртләндереп, мәшһүр Туҡайҙың:

Төптәрендә ятҡаным бар хәл йыйып, күккә ҡарап, --

тигән шиғри юлдары шөңгөрләнде. *Ул* көрһөнөп ҡуйҙы. Далаға Урал армыттары тоташҡан хозур тәңгәлдәге тыуған ауылында бының ише ҡарағай урмандарҙы китаптан уҡып ҡына беләләр, мәҙрәсә алдына ултыртып үҫтергән берҙән-бер төп ҡарағай иһә шуның күргәҙмә һабағы кеүек ине; *дала* менән тауҙы айырып йәйрәп аҡҡан йомарт Һаҡмар-һыу буйҙарын башҡа моң – һыу ситтәренә тараҡ тештәреләй теҙелеп үҫкән һуйҙан аҡтирәктәр шауы ҡойола ине һалмалы япраҡтарҙан. Йөрәкһетеп, туған ҡырҙар, туған күҙҙәр төҫөн йәнгә үткәҙеп, хәтерендә йәнә *лә* бер онотолмаҫ изге моң – йәшлек йыры уралды:

Һаҡмар буйҡайҙары киртләс-киртләс,
Киртләстәре китәр боҙ киткәс.
Гөрләп торған Һаҡмар буйҙарының
Йәме китәр инде беҙ киткәс...

Киткәнгә *лә* нисәмә йылдар уҙҙы, күпме елдәр иҫте, һыуҙар аҡты... Юлдар уны ҡайҙа ғына илтеп ташламаны *ла* нимәгә һуҡлыҡтырманы. Никрут булып, ҡайғылы моңға урам буйҙарын шаңғыртып йырлай-йырлай илдән сығып киткәндән һуң өс йыл буйы герман фронтының ҡанлы окоптарында ауналды, шунда беренсе тапҡыр *Ленин* һүҙҙәренә иреште. Ун етенсе йылдың октябрендә яҙмыш еле уны шанлы Петроградҡа килтереп, *Ленин* штабы урынлашҡан Смольныйҙың ҡыҫынҡы-тар коридорҙарында йөрөттө; коммунистар партияһының иң ҙур етәкселәре менән танышырға, алдағы эштәренә фатиха алырға насип итте...

Сәлимйән күҙҙәрен йома. Ҡолаҡ төбөндә генә иҫертеп селтер-селтер шишмә йырлауын, ҡырылмаһа-ҡырҡ төрлө ҡоштарҙың ботаҡтарҙа арыу-талыу белмәй сут-сут көмөш тәңкә тиреүҙәрен иҫәнгерәп кисерә. Теләр-теләмәҫ кенә күҙҙәрен асып, ҡарағайҙар осондағы түп-түңәрәк зәңгәрлеккә текләп ята. Әйтерһең, уның ҡоңғорт күҙҙәренә бейеклектән онотолмаҫ керһеҙ-алсаҡ зәңгәр күҙҙәр – Гөлсәсәгенең күҙкәйҙәре моңайып-төбәлеп баға...

Шыбырлап ҡына ел иҫә, маңлайына һалҡынса-дымғылт үлән остарын эйә. Наҙлы бер зәңгәр сәскә, бөгөлөп-һығылып, Сәлимйәндең шырау битен ҡытыҡлай...

Хәтерҙә, бик хәтерҙә -- 1918 йыл, ауыл, мөғәллимә Гөлсәсәк менән мөғәллим Сәлимйән кескәй һәм ярлы мәктәптә балалар уҡытып йөрөгән саҡ. Муйылдар күпереп сәскә атҡан бер ял көндә Әселе буйының әрәмәлегенә сығып, бына ошолай күккә ҡарап яталар, зәңгәр хыял диңгеҙҙәрендә йөҙәләр. Гөлсәсәк башын ҡалҡытып, күҙҙәренең зәңгәрлеген күңел төбөнә үткәҙеп, көтөлмәгән һорау менән алйытты:

-- Сәлимйән, коммунист бит әле һин?

-- Эйе, коммунист, -- тине, алйыуынан ҡапыл арынып.

-- Коммунистарҙың да төрлөһө -- ысыны һәм ялғаны була, тиҙәр...

-- Эйе, *ләкин* мин ысын коммунист! – Берҙәм тороп ултырҙылар.

-- Сәлимйән, әйт әле... ысын коммунист ниндәй ул?

-- Ниндәй тип ни... бына тап һинең менән минең кеүек, ит менән һөйәктән инде! – тип шаяртырға теләгәйне *лә*, булманы:

-- Юҡ, ысын коммунистар – айырым, ғәҙәттән тыш була, тиҙәр бит *ул*... ысынмы?

Сәлимйән ни әйтергә *лә* белмәй уйланып алды:

-- Ысын коммунислыҡ – ғәҙәттән тыш булыуҙа түгел, ә ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә *лә* ғәҙәти булып, кеше булып ҡала алыуҙалыр *ул*, моғайын...

-- Сәлимйән, бәғерем... Әгәр көндәрҙән бер көндә мин һиңә ошолай тиһәм... йә -- мин, йә -- партияң, тиһәм... Ҡайһыһын һайлар инең?

-- Һылыуым, тилекәйем минең! – Ҡыҙҙы нәҙекәй биленән һығып ҡосаҡланы. – Улай әйтерҙәй булһаң, үҙеңде ярата алыр инемме икән?!.

-- Тимәк, яратмайһың...

-- Тәүбә, тиең! Икегеҙ ҙә бер миңә -- икегеҙҙе *лә* өҙөлөп-өҙөлөп яратам! – *Ләкин* ошо раҫлауы Гөлсәсәккә *лә*, үҙенә *лә* һуңғы хаҡлыҡ һымаҡ тойолмай ине – тороп атлап киттеләр. Юл буйынса өндәшмәй уйланып ҡайттылар. Әле һаман ошо һорау Сәлимйәндең күңелендә урала: ысын коммунист булыуҙың асылы нимәлә?..

Шөңгөр шишмә селтерәп йәнде арбай, күҙҙәрҙе йоҡо томалай. Һағыныслы төш күрә: Гөлсәсәге һыбайланып менеп алған, уға ҡарап йылмайып килгән Ҡантураты... Туҡтале, йәҙрәләр шартлап ярылған, пүләләр жыйлаған Һайылмыш буйында ҡанһырап ятып ҡалғайны түгелме *ул*?..

Кем тауышы, кем тауышы -- әллә атайҙыҡымы:

-- Ааай, Сәргәй ҡантураты! Сәргәй ҡантураты!..

Тертләп уянған Сәлимйән кинәт тороп ултырҙы; шул ыңғайҙа, һауала шыжлап килеп, әле генә уның муйыны ятҡан тәңгәлдә ергә, ҡара һағағы батып, солоҡ балғаһы ҡаҙалды... Ике күҙе атылып сығырҙай аҡайған, ауыҙынан аҡ күбеге аҡтарылған Вәлиулла ергә батҡан балғағамы, әллә комиссарғамы оҙон ҡулын һуҙып сарбайланы:

-- Ааай!.. Сәргәй ҡантураты!.. Ааай!.. – Ергәу *л*тыра төшөп, һулығып-һулығып иланы. Йәмил менән Ғайса йүгереп килеп етте, диуананы торғоҙоп,

ҡултыҡлап алып китте. Башын шишмәгә тыға-тыға камил иҫенә ҡайтарғас, ҡыуыш артында “аҡылға ултырттылар” ҙа атына мендереп оҙаттылар – байтаҡҡаса күренмәне артабан...

Сәйер бәндәне тетрәткән “ҡантурат” һүҙе Сәлимйәндең күңеленә балғалай батып кереп, һис тынғылыҡ бирмәне. Һуйыр һыйлы табынды уратып ултырышҡас та тыныслanмай, һорай ҡуйҙы:

-- Ниңә теге әшнәгеҙҙе ашатмай ебәрҙегеҙ?

Бер-береһенә ҡарашып, уңайһыҙлыҡ кисерҙеләр.

-- Асыулана күрмә инде, комиссар, -- тине Йәмил. – Ул, меҫкен, ҡайғыһынан аҡыл юйыр сиккә еткән.

-- Ваҡыт-ваҡыт алмашына, ни эшләгәнен белмәй. – Ғайса ауыр көрһөндө. – Аҡылына ҡайтарғас, әлеге яман ҡылығы өсөн үкенеп бөтә алманы – эсемә шайтан инә лә ултыра, ти...

-- Шайтаны ла әҙәм ҡиәфәтле, буғай... – Асыҡлыҡ керетте Йәмил. – Тегендә, һинең менән бергә юлланыуҙы ишеткәс, Әһлиуллин әтрәтенән бер татар: “Иҫәүән башҡорттар, күҙегеҙҙе асыбыраҡ йөрөгөҙ: был комиссар арағыҙға һарыҡ тирһе ябынған бүре рәүешле керә!” – тип ойҡотоп ебәргән...

Комиссарҙы һағайтты: батальондың Әһлиуллин әтрәтендә татарҙар ҙа, башҡорттар ҙа хеҙмәт иткәнлеге, яуызлыҡта урыҫтарҙан һис тә ҡалышмауы мәғлүм – провакация өсөн иркен файҙаланыла шулар. Күтәрелеш етәкселәрен нисек тә тиҙерәк осратып, ике-ара аңлашыуға ирешеп, йәһәт әйләнеп ҡайтырға, ашығыс саралар күрергә!

-- Ниндәй “Сергей ҡантураты”н тәкрарлай? Вәлиуллағыҙҙы әйтәм...

Берауыҡ һыу уртлағандай ултырғас, Йәмил сер тоғон систе:

-- Үҙенә күрә шундай бер ат инде ул... ҡантурат... Бер уйлаһаң, һөйләүе лә имәнес... Имеш, уны ҡороҡ та тотмай, пүлә лә алмай – хужаһы Сергейҙың ҡан дошманы Вәлиулланы һағалай... Торғаны менән әкиәт инде шунда...

-- Ай, улай тип әйтмә, ҡусты... Уның менән шаярырға ярамай. Тегендә лә шуның арҡаһында ҡапҡанға ҡаптыҡ, саҡ-саҡ үлемдән ҡалдыҡ...

-- Вәлиуллаң кинәт алмашынмаһа, шуны һөрәнләмәһә, һағауылдарынан үтеп тә китә инек.

-- Шул хәлен белә тороп, ниңә уны сәфәрегеҙгә алдығыҙ? – тине комиссар.

-- Йәшел бесәй күҙе ут кеүек уның: ҡаяташ артынан да күрә, йәшерен юлдарҙы белә. Ашҡыныуы ла һуңға табан һирәкләнә төшкәйне. Был юлы һаташмаҫ, тигәйнек.

-- Барыбер кешнәр ине... Вәлиуллаға ҡаныҡҡан ул ҡантурат...

-- Ысынлап та бармы шул йылҡы малы?.. – Сәлимйәндең йөрәге семерләне.

-- Ҡалай тиһәң дә ярай инде... Ғайса ағайҙың раҫлауын да кире ҡаға алмайым. Мәҫәлән, эйәрле-йүгәнле килеш, юғалтҡан хужаһын эҙләп ҡыҙыра, тиҙәр.

-- Дөрөҫ аңлаһам, Сергей буламы уныһы?

-- Дөп-дөрөҫ. Кантондағы болғаныштар шул Сергейҙән башланған...

-- Ҡайһы яғы әкиәт тә ҡайһы яғы хәҡиҡәт икән бының?

Йәмил, ҡаштарын төйөлдөрөп, фекерҙәрен тупланы.

-- Әйтһәм әйтәйем инде, комиссар, йомаҡ булып ҡалмаһын. Хабаровка тигән урыҫ ауылы бар ине беҙҙә, баяғы Вәлиулла тигән ағайыбыҙҙың Әғләм ауылы күршеһендә (икеһе ләкин көл-күмер инде хәҙер, барғас күрерһең)... Ут күрше булып, араларына ел-ямғыр үтмәҫ ызнакум булып Вәлиулла менән Сергей йәшәне. Вәлиулланың сыҫкан һыртлы ел еткертмәҫ юрғаһы, Сергейҙың Шүлгәнкүл буйы башҡорттарынан һатып алған ҡантураты бар ине, икеһе ләкин бәйгеләрҙә беренселекте алмашлап алырҙар ине. Бына бер заман аҡ батша ҡолатылып, Керенский хөкүмәте ләкин түңкәрелеп, ҡыҙылдарҙың хөрриәте башланды ла үҙҙәрен большевик тип атаған килмешәк урыҫтар ҡоралланып, коммунистик әтрәттәргә уҡмашып, башҡорт аҫаба ерҙәрен көслөк менән баҫып алырға кереште; башҡорттар ҙа, ҡоралланып, уларға ҡаршы сыҡты. Әғләм ауылының ата-баба сабынлығында ике тараф төкәлеште: элекке ике дуҫ-ызнаком, Вәлиулла һәм Сергей, ат өҫтөндә ҡылыс айҡашып ҡапма-ҡаршы килде ләкин бер-береһенә йәнтәслим киҙәнде – Сергей ҡылысы Вәлиулланың ат башын ярып үтһә, Вәлиулланыҡынан Сергей башы тумарлап ергә төштө, өҙәңгәлә һөйрәлеп бармыш кәүҙәһе ләкин ыҫкынып ятып ҡалды; хужаһының мәйете янында туҡталып ҡатҡан ҡантурат, ҡапыл артҡы аяҡтарына ҡарғып, ызнакумының ҡанлы кәүҙәһе эргәһендә күҙҙәре аҡайып шашынған Вәлиулланы бәреп-ауҙарып ҡаса – ҡыҙыл ялҡындай дөрләп, ҡуйы сауҡалыҡҡа инеп юғала... Ошонан һуң Вәлиулла ағайыбыҙ телдән ҡалып, оҙаҡ һаташып ятты, ә телгә килгәс тәүге өнө шул аяныс “Сәргәй ҡантураты!..” тигән ялбарыу булды...

-- Юлға, егеттәр, юлға! – тине Ғайса, ашыҡтырып.

4

Менгеләренең ваҡыт-ваҡыт һиҫкәнеп бышҡырыуын һәм тояҡ аҫтында сыртлап сыбыҡ һыныуын иҫкә алмағанда, донъя һил, уйсан көйө. Ҡарурмандың тынлыҡ моңон тыңлап бер талай барғас, алда, алыҫта, һыҙылып ҡына сурылдаған ҡош ауазы салынды. Ат баштарын шаҡарып, һағайып ҡолаҡ һалдылар. Ауаз инде асығыраҡ ҡабатланды һәм, комиссар көтмәгәндә, ҡолаҡ төбөндә икенсе бер сәйер ҡош уға ҡушылды: быныһын, ғәжәпкә ҡаршы, юлдашы Ғайса көйләп һыҙғыра ине. Сәйер шөғөлөн ҡырт-өҙөп:

-- Булды! – тине ул. Теҙгендәрҙе бушатып елдерҙеләр. Алда бейек, ҡалын үләнле бәләкәй аҡлан уйылып, түңәрәк ҡарт имән төбөндә өймәкләшкән унлап һыбайлы шәйләнде – көллөһө карабинлы, ҡылыслы. Береһе ҡаршы килде, алға сыҡҡан Йәмил менән мөңгөр-мөңгөр гәпләште. Һыбайлыларҙың бер өйкөмө был өсәүҙең артынан, ҡалғандары алдан төшөп, бер күлем юрттырҙылар. Ян-яҡтағы ағастар һаман алыҫлашып, юл түтәһе киңәйгәндән-киңәйә, йәйпек үҙән түбәненә иңкәйә; яҡында ғына ниндәйҙер йылҡы өйөрөнөң өркөп бышҡырышыуы, өйөр айғыры муйынындағы баҡыр бутыл доңғолдауы ишетелә. Тал-тол сытлап ураҡҡан кәбәнгә еткәс, аттан төшөп, теҙгендәрен кәртәгә элеп, ағас араһына йәйәүләнеләр.

Кәрлә ҡайын ботаҡтарына тотона-тона түбәнләнде. Эйәрҙән төшөп ергә баҫыу кинәнесле булһа ла, Сәлимйән тар итек яфаһын татый башланы – аяҡтары уҫка бешкәндәй янды. Сатанлауын һиҙҙертмәҫкә тырышып тештәрен ҡыҫты.

Текәне төшөп, таш араларынан шарлап аҡҡан йүгерем һыуға тиңәлгәс, саҡ ҡына туҡтап хәл алдылар ҙа оҙон ерек баҫманан аҙымланылар. Арғы ярҙа биленә балта ҡыҫтырған көрәк һаҡаллы ҡаршыланы, Сәлимйән уны кемгәлер оҡшатһа ла, тәүҙә иҫенә төшөрә алмай аҙапланды. Ниһайәт, кисәге солоҡсо Мостафа ҡарт икәнен шәйләп, һүҙ ҡатып өлгөргәнсе, уныһы төркөм башлығы менән ағас артына ышыҡланып, мөңгөр-мөңгөр аңлашты ла ҡабаланып юҡҡа сыҡты.

-- Комиссар, киттек баяғы Әғләм һәм Хабаровка ауылдарын күрергә, -- тине Йәмил. Ҡалдырған аттарҙы килтереп еткерҙеләр. Яр буйынса саңлы юлдан юрттырып бара торғас, ыҫ әсеһе танауҙарға ҡапланды, ике яҡлап бер-бер артлы көл-күмер өйөмдәре, шулар уртаһында ҡәбер таштарылай һерәйгән мейестәр, һөрөмләнгән емерек таш келәттәр, ҡоймалар теҙелеште.

– Урам буйлап барабыҙ, шундай оҙон урамлы ауыл ине был...

Ауылды артта ҡалдырып, йылға түбәненә тағы өс-дүрт саҡрымдай киткәс, -- шундай уҡ ыҫ, көл-күмер, ҡәбер ташылай ҡатып ҡалған мейестәр, һөрөмлө таш келәттәр һәм ҡоймалар... Алдан башлап барған Ғайса ҡайырылып ҡарап аңлатты:

-- Бынығы, комиссар ағаҡайым, Сәргәй йәшәгән ҡасаба Хабаровка була инде...

Кешеһеҙ ҡалған төйәктәргә кире боролмайынса, түбән яҡтан йылғаны кисеп сығып, үҙҙәренә генә билдәле юлдарҙан ҡайһылыр бер тәңгәлгә ирештеләр –урман ситендә йәшел бесән ябып ҡоролған ҡыуыш. Шуның алдында йор усаҡ ялҡынлана, ике әҙәмдең береһе борҡорап ҡайнаған баҡрасты өстағандан ысҡындырып маташа. Ҡараңғы төшкәйне инде, Сәлимйән усаҡ яҡтыһында был икәүҙең ҡиәфәтен байҡаны: билен йүкә бау менән һәлпәйтеп быуған сал бабай, туғыҙ-ун йәштәрҙәге теремек малай. Малай ҡыуышҡа йүгереп инеп китте, иҫке һарыҡ тиреһе апсығып, усаҡ янына түшәне – ҡунаҡҡа урын күрһәттеләр. Ҡалғандары сырт-сырт миндек һындырып, аҫтарына түшәп, кем етте ҡалай сүгәләне.

Табын алдына бабай таҙа киндер йәйҙе, икмәк һындырып һалды. Бәләкәс ағас ҡоторсоҡта ҡомоҡҡан бал ҡуйҙы. Аҫһыҙ сынаяҡҡа сәйгүндән сәй ағыҙҙы. Бүтәндәр ҙә тейешле икмәк һыныҡтарын алдылар, ҡайһыныһы – ағас сүгәтәнән, ҡайһыныһы сүместән, тигәндәй, һемереп, йәндәрен йылыттылар.

Икмәктең арышмы, әллә арпамы икәнен дә белеү ҡыйын – хәтһеҙ кесерткән ҡушып бешерелгәйне. Бушаған һәр соҡортайҙы олатаһы яғына елдереп йөрөүсе малайҙың күҙҙәрендә киҙеүле ялтырау күреп, Сәлимйән үҙ һынығын урталай һындырҙы, бал яғып, уның ҡулына тоторҙо. Тәүҙә алырғамы, алмаҫҡамы тип икеләнеберәк торған йән, ҡыйыуланып, комиссарҙың ҡултыҡ аҫтына уҡ һырныҡты.

-- Кинйәғәле, ҡайт урыныңа! – тине бабай, асыуланып. Малай ҡуяндай тертләне.

-- Ултырһын, бында урын киң, -- тине Сәлимйән, баланың ҡалаҡ һөйәктәре бүлтәйгән арҡаһынан һөйөп.

-- Кинйәғәле, ишетһен ҡолағың! – Малай теләр-теләмәҫ кенә шылды. Янып баҡҡан ҡара күҙҙәре әленән-әле ҡунаҡ ағайҙың мөләйем күҙ ҡарашы менән осрашты.

Билбау аçтарында сәйҙән рәхәт йылылыҡ кисереп, яндайыша бирҙеләр, ҡарҡ-кикерешкән булдылар. Сәлимйән дә сыныуҙың ҡапланы:

-- Рәхмәт, ағай, кеше иттең. Бура төбөң мул, аяҡ-ҡулдарың һыҙлауһыҙ булһын.

Ҡарт аçтан һөҙөп ҡараны:

-- Амин, бирһен Хоҙай.

Сәлимйән утҡа борола биреберәк ултырҙы. Итектәрен һалып, бер ярыйҙараҡ ҡуйҙы, быуындарын ләззәтле яҙлыҡтырҙы. Тартылып, тубыҡтарын ҡосаҡлап, ғәмһеҙлектә иҙерәне.

Бөйөрөнә йомшаҡ ҡына ҡағылыуҙан һиҫкәнде. Усаҡ ҡуҙлы торомбаштарға ҡалған, шыйыҡ ҡына төтөн бормаландыра. Кешеләр, эйәктәрен ҡаҡ тубыҡтарына ҡатып, йоҡомһорап ултыра, бабай ҡайҙалыр олаҡҡан; Йәмил генә серем итмәй, комиссарҙың артындараҡ ауыҙ эсенән көй һуҙа.

-- Ағай, һин һуғышта кем булдың? – Теремек малай комиссарҙың бөйөрөнә төртөлөп бышылданы.

-- Кем тип ни, һалдат булдым.

-- Ә был батша итеген ҡайҙан алдың, батша үҙе бирҙеме? – Һуңлап ҡабынған ялҡынға ялтыраған ҡуныс йөҙөн еңе менән һыйпаны. Йоҡомһорап ултырыусылар, ҡымшанып, иғтибар йүнәлттеләр.

-- Батша нисек бирһең, ти, уны үҙебеҙ тәхеттән ҡолаттыҡ бит! – Малайҙы башынан һыйпаны. – Бына һинең кеүектәрҙең тамағы туҡ, өçтө бөтөн булһын, тип.

-- Үҙең тегеп кейҙеңме?

-- Уны батша һарайының иң шәп итексеһе теккән. Шуны миңә бүләк итеп кейҙерҙеләр.

-- Ни өсөн?

-- Яуыз батшаны ҡолатышҡаным өсөн. Бөтә ярлы-ябағаға бәхетле тормош яулап көрәшкәнем өсөн.

-- Ҙурайғас, мин дә һинең кеүек булырмын! – тине малай.

-- Тырышып тиҙерәк ҙурай – ошо батша итектәрен үҙеңә һалып бирермен.

-- Үҙең нимә кейерһең?

-- Ул саҡта мин олатайың кеүек ҡыуыш ҡормон да тула сарыҡ ҡына кейеп түр башында ултырырмын.

-- Олатайым түр башында ғына ултыра алмай, донъялар тыныс түгел...

-- Ултырыр. Күмәкләшеп тырышһаҡ, донъялар тынысланыр.

-- Амин, Алаһыәкбәр! – тип доға ҡылды Йәмил...

Улай-былай иткәнсе, йәйге ҡыçҡа төн үтеп тә бара ине – көнсығыш яҡлап тау үркәстәрен беленер-беленмәç таң һарыһы ялмаған. Сәлимйән, сеременән кирелеп, Йәмилгә күҙ төбәне:

-- Йә, мырҙам, артабан ни ҡылабыҙ?

-- Саҡ ҡына көтәйек инде. Бына-бына Аҡмал олатай үҙе килеп етергә тейеш. Бәлки, Ил Инәһе лә юлығыр.

-- Ил Инәһе?! Кем ул?

-- Ҡоралланған сая ир-ҡыҙҙар әтрәтенең башлығы.

-- Ундайҙарығыҙ ҙа бармы ни?

-- Бар шул. Поленов әйтмәнеме ни? Амазонкалар тип атай, тиҙәр, уларҙы...

Сәлимйән аптыраны:

-- Шулар ҙа һуғышамы?

-- Ҡайһылайыраҡ һуғыша әле – ирҙәреңә биргеһеҙ! Үлһә -- үләләр, ләкин сигенмәйҙәр. Аҡмалдың ул ғәйәр гвардияһы!

-- Бынағайыш тамаша!.. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ҡоралға тотонғас...

-- Түҙерлегебеҙ ҡалманы, тимәк.

-- Йә Алла, Үҙең ярлыҡай күр беҙҙе, гонаһлы ҡолдарыңды! – Ғайса ҡулдарын юғары күтәреп ялбарҙы. Халыҡ берҙәм ҡуҙғалышып, болонлоҡтан төнгөлөккә тышаулы менгеләрен тота, эйәрләй ине инде. Шул арала биш-алты һыбайлы килеп етеп аттан төштө.

-- Әссәләмәғәләйкүм, Аҡмал ҡарт буламын, -- тип күреште Ирәмәл түбәһеләй салланғаны. – Кем икәнеңде беләм – яҡшы хәбәр килтерҙеләр. Ваҡыт тар, ҡыуышҡа инеп һөйләшәйек.

Иркен генә өшәләктә буйлы балаҫ өҫтөнә урынлашҡас, турһыҡлы ҡымыҙ килтереп, ағас туҫтаҡтарға ҡойҙолар, ҡулдарға тотторҙолар.

-- Бисмилла, әйҙәгеҙ, тамаҡтарҙы сылатайыҡ та үгеҙҙе мөгөҙөнән алайыҡ. Мәсьәләнең төп-асылын төшөнгәнһеңдер, комиссар?

-- Бөтәһе Сергей, Вәлиулла тигән бәндәләрҙән башланды, тиҙәр ине.

-- Их мырҙам, уларҙа ғынамы ни эш?! Бер урыҫты йәки башҡортто үлтереүҙән донъяның мөйөшө кителеп төшәме ни?! Сәбәбе тәрән ята...

-- Йәғни ҙә?

-- Һин, мырҙам, күреп торам, йәш булһаң да комиссар кеше, мәғрифәтле кеше. Донъяны миңә ҡарағанда ла нығыраҡ беләһеңдер. Һәм мин дә, ошо ҡара аңым менән булһа ла, уйлаштырам, ата-бабалар тарихын күп барлайым... Бик көлкө лә, илағыс та был тормош. Әҙәм балаһының ғүмере, ботона ыштан тегеп кейгәндән алып, ер өсөн даулашып-һуғышып үткән. Шулай түгелме? Ерһеҙҙәр – ер алам тип, ерҙеләр – еремде бирмәйем тип ҡырталашҡан. Бер һүҙ менән әйткәндә, әҙәм балаһын яралтҡан да – ер, туйҙырған да – ер, үлтергән дә ер булып сыға түгелме?

-- Шулай булып сыға.

-- Шулай булмаһын өсөн, нимә кәрәк тип уйлайһың, комиссар?

-- Аҡһаҡал, һин миңә үҙең әйтеп бир.

-- Закон кәрәк, бына нәмә! Ата-бабалар Рәсәйгә үҙҙәре теләп ҡушылғанда уҡ аҫабалыҡ хоҡуҡтарын, йәғни үҙ еренә үҙе хужа булыуҙы, закон менән нығыттыртҡан; аҡ батшалар шул законды быуындан-быуынға үтәгән. Яҡшымы, яманмы, хатта батша закондары ла бәғзеләрҙең нәфселәрен тыя килде... Хәҙергеһен иһә нимә күрәбеҙ? Батша ҡолатылды, хөрриәт килде, тигәс тә, башҡорт ерҙәрен таларға, башҡорттарҙы үлтерергә хөрриәтме? Хәлдәр үҙеңә мәғлүмдер, комиссар ҡустым: һәр төрлө килмешәктәр, шул бәлшәүиктәр хөрриәтенә таянып, ауылы-ауылы менән үҙҙәрен ҡыҙыл большевик тип иғлан ҡыла ла, РСФСР биләмәләрендә тороп ҡалған Ырымбурҙан, Өфөнән йәки башҡа тарафтарҙан килтерелмеш мылтыҡтар менән ҡоралланып, коммунистик

әтрәттәргә уҡмашып, аҫаба ерҙәребеҙҙе баҫып ала, халыҡтарыбыҙҙы ҡыра... Бына ниҙән килеп сыҡты башҡорттоң ҡуҙғалышы. Сөнки ер бирмәк – йән бирмәк, ерһеҙ башҡорт – юҡ башҡорт...

-- Аңлайым.

-- Аңлау ғына аҙ – йөмһүриәт етәкселегенә туҡып аңлатырға кәрәк! Эш үтмәҫе борон мәсьәләне ҡап-уртаға һалырға, уртаҡ тел табырға кәрәк!

-- Табыр өсөн килдем дә инде.

-- Инш-Алла, улайһа, килешербеҙ! – Күмәкләшеп доға ҡылдылар. – Беҙ һине беләбеҙ, беҙ һиңә ышанабыҙ.

-- Ышанабыҙ! – Бер тауыштан хупланы табындағылар.

-- Инде ҡуҙғалышайыҡ, алда ҙур эштәр көтә: Вәлиулла ярҙамсыма иртәгә үк йыйын йыйырға ҡушып киттем – илдең тын алышын ишетерһегеҙ. Поленов ҡырғынсылары бөлдөрмөш тирә-яҡ ауылдарҙан ҡасаҡтар килеп тулған – ваҡиғаларҙы үҙ ауыҙҙарынан һөйләтеп тыңларһығыҙ.

5

Ҡайһыһы – ҡабыҡ, ҡайһыһы – һалам, ҡайһыһы таҡта түбәле эреле-ваҡлы йорттарҙан хасил ауылға килеп керҙеләр. Һыу ағышынса бормаланып, тау араһында ике урам булып теҙелеп ултырған кирем генә башҡорт төйәге ине был. Юл йөрөп күнеккән аттар, алда оҙайлы тукталыш һәм һоло булаһын тойоп, бышҡырып тәбрикләнеләр, йылдамыраҡ юрттылар. Сәлимйән урам буйҙарын һағайып байҡаны – халыҡтың ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғаткандай ҡайнашыуы бошондорҙо. Ҡайҙа ҡарама – туғарылған ылау, тубырсынған бала-саға, тәнтерәкләгән ҡарт-ҡоро, сарбайлаған ҡатын-ҡыҙ: ғаилә-ғаилә ишек алдарына, ҡойма буйҙарына – ҡайҙа тура килә шунда ҡыуыш ҡороп ятҡандар; бәғзеләре тәртәләре ҡайырылған арба аҫтарына кейеҙ, септә, балаҫ түшәп төпләнгән; эргәләрендә төйөнсөктәр, һандыҡтар, еҙ самауырҙар аунай, тирәһендә аҙашҡан кәзәләр, һарыҡ бәрәстәре иңрәп-баҡырып йөрөй, һулығып эттәр олой; унда-һанда усаҡ бурап ут үрләтелгән ҡаҙан тирәләрендә олпат инәйҙәр булаша...

Арғы ос урам уртаһынан тупыр-тупыр елдереп килеүсе ун бишләп һыбай күренде – ҡылыс таҡҡан, карабин аҫҡан йәш кенә ҡатын-ҡыҙҙар... Көллө ҡәүем йәнләнеп үрә ҡатты:

-- Ил Инәһе!

-- Ил Инәһе килә!

Мөләйем муйыл күҙле, арҡаһына һуҙылып ятҡан беләк йыуанлыҡ ҡуш толомло Ил Инәһең, биленә ҡылыс тағып, яурынына карабин аҫҡан яугирәне, Аҡмал ҡарт һомғол беләгенән тотоп аттан төшөрҙө, комиссар ҡаршыһына етәкләп килтерҙе.

-- Аб-ба! Кемде күрәм, Сәлимйән ағай, һинме был?! – Сая ир-ҡыҙ һис кем көтмәгәндә комиссарҙы туғандарса яратып ҡосаҡланы. Сәлимйәндең ҡылт итеп иҫенә төштө: 1918 йыл, Ырымбур, татар китапханаһы...

-- Уф! Әҡлимә һылыуҡайым, һинме был?!

-- Мин, ағай, мин! Исемеңде ишетеп, ашығып ҡайтып еттем. Ныҡ үҙгәргәнһең, ағай...

-- Донъя баштан һыйпаманы... Ә һин гөлсәскәләй саф, матур көйөнсә һаман! Теге саҡта Ырымбурҙа үҙеңде урлар хәлгә еткәйнем, ике шағир араланы... – тип йылмайҙы, ҡыуаныслы күҙ йәштәрен йәшермәй һөртөп.

-- Эй ағай, шулай ғына итһәгеҙ ни булды инде! – Ҡораллы яугирлеген онотоп, буғай, ҡыҙҙарса иҫертеп көлдө.

-- Бешмәгәнерәк инем шул...

-- Ай-һай! – Бармаҡ янаған булды. -- Гөлсәсәгем бар ине бит, тип әйт тә ҡуй инде!

-- Һинең дә шағирың бар ине шул... – Икеһенең дә тамағына ҡаты төйөр тығылып, арауыҡ тыйылдылар. Ниһайәт, башына килгәнен әйтте: -- Һылыуым, әллә һаман тормошҡа сыҡмағанһың инде?..

-- Эй ағайым, күрәһең бит... – Бите буйлап эре йәш бөртөгө тәгәрләне. – Былтыр ғына ошо ерҙә Шаһизада менән тап килешкәйнек... Уны харап иткән ҡара көстәр инде Башҡортостаныбыҙҙың башына етергә йөрөй...

-- Ат өҫтөндә елдергән яугир ҡыҙҙарыңды күреп иҫем-аҡылым китте – ысынлап та Геродот яҙған амазонкалармы тип торам... Ҡайҙа бороldo был донъя?! Беҙгә, ир-атҡа инде ярай, ә бына һеҙгә, сәскәләй генә сағығыҙҙа...

-- Башҡа әмәл ҡалманы... Ҡылысҡа баш эймәҫкә -- һуғып һындырырға кәрәк ҡылысты!

-- Һынмаһа, нишләрһегеҙ?

-- Бабаларыбыҙҙай сая һуғышып, аҫаба еребеҙҙә башты һалырбыҙ.

Һүҙ артыҡ ҡуйырманы. Сәмләнеп тыңлаған кешеләр ауыр уфтанды. Аҡмал ҡарт, ике ҡулын икеһенең яурынбашына һалып, ҡәнәғәтлек белдерҙе:

-- Һеҙҙең кеүек аҫылһөйәк таныштарҙың тап килеүенә ҡыуанам. Былайғас, тоткан ниәттәребеҙ бойомға ашыр, ҡан ҡойошто туҡтатыуға ирешербеҙ, Аллаһ бирһә. Барығыҙ, ҡасаҡтарҙың хәлен белә торорғоҙ. Иртәгә йыйын икәнен онотмағыҙ – төп мәсьәлә ил алдына һалып хәл ителәсәк. Мин йыйынды ойошторорға китәм, иҫән булһаҡ, шунда осрашырбыҙ, Инш-Алла.

Ир-аттың күбеһе Ҡыҙыл Армия сафтарында Көнбайыш фронтта "аҡ пан"дарға ҡаршы һуғышып йөрөгәнлектән, ә ҡалғандары баш күтәреп тауҙарға киткәнлектән, коммунистик ҡырғын әтрәттәренән йәбер-яфа тәү сиратта ҡатын-ҡыҙ башына төштө... Инабатлы Ил Инәһе менән бергә һорашып һәм ҡағыҙға теркәп йөрөгән комиссарға улар асы күрмештәрен йәшермәйенсә һөйләне, был документ баш ҡалаға ирешергә, партия һәм хөкүмәт етәкселегенә хаҡикәтте асып һалырға тейеш ине:

Протокол. 1920 йылдың яңы стиль буйынса 30 июлендә коммунистик батальондың ҡыҙыл әрмистәре тарафынан ҡылынған үлтерештәр, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләүҙәр буйынса тикшереүҙәр ваҡытында С. ауылы кешеләре ошолай аңлаттылар.

1. Рәхимә Сыуаҡаева. Ҡыҙыл әрмистәр һөжүме ваҡытында ул һәм уның килене балалары менән бергә иҙән аҫтына йәшенде, шул саҡ ыҙмаға билдәһеҙ ғаскәри бүлектең

Курамшин *фамилиялы ҡыҙыл әрмис кавалерисы керҙе, Өммикамалды иҙән аҫтынан һөйрәп сығарҙы, башҡа ыҙмаға алып китте һәм уны көсләй башланы. Шунда уҡ ул үҙе (Рәхимә) иҙән аҫтынан сыҡты ла ихаталағы ире Ләҡман Сыуаҡаевҡа сарбайланы, ул иһә ҡустыһы Усман менән бергә ишеккә атлыҡты, сығып килеүсе ҡыҙыл әрмистең яғаһынан алдылар, артабан ни булғанын ул (Рәхимә) күрмәне, сөнки ихатанан сығып ҡасты, мылтыҡтан атыуҙарын ғына ишетте. Һуңынан мәғлүм булыуынса, уның ире Ләҡман һәм ҡустыһы үлтерелгән, шулай уҡ Сыуаҡаевтың 88 йәшлек әсәһе Мәхүбъямал да ошо ваҡыт улының өйөндә сағында үлтерелгән. Мәхүбъямалдың киленененең инәлегенә (оят еренә) һыныҡ ҡалаҡ тығып киткәндәр. Шунан һуң Ҡурамшин уны (Өммикамалды) үлтереү өсөн, ике тәүлек буйынса эҙләп йөрөй, ләкин таба алмай. Бөтә мөлкәт ҡыҙыл әрмистәр тарафынан таланған һәм алып кителгән. Уҡый-яҙа белмәй, уның өсөн Низамитдин Таулыбаев ҡул ҡуйҙы.*

2. Өммикамал Сыуаҡаева. Ыҙмаға кергән ҡыҙыл әрмис уны иҙән аҫтынан һөйрәп сығарҙы, айырым ыҙмаға һөйрәклән алып китте һәм уны көслəне, шуныһын тамамлағас, ыҙманан сығып китте, шунда уны ҡайныһы Ләҡман Сыуаҡаев үҙенең ҡустыһы Усман менән теткеләргә кереште. Ул (Өммикамал) иһә ыҙманан сығып ҡасты һәм күршеләрҙә йәшеренде, артабан ни булғанын күрмәне. Уның ҡайныһы Ләҡман һәм уның ҡустыһы Усман үлтерелгән булып сыҡты, шулай уҡ уларҙың ыҙмала булған әсәһе Мәхүбъямал да үлтерелгән.

Шул уҡ көндә, бер ни тиклем ваҡыттан һуң, 8 ҡыҙыл әрмис төркөмө уны Заһанбай Әмилев өйөндә эҙләп тапты, Ғәйни Таулыбаевтың өйөнә һөйрәклән алып киттеләр ҙә шунда бөтә 8 кеше уны көслəне. Артыҡ бер ни ҙә аңлата алмай, уҡый-яҙа белмәй, ә уның өсөн уның һорауы буйынса Низамитдин Таулыбаев ҡул ҡуйҙы.

3. Ғәйниямал Таулыбаева. Ҡыҙылдарҙың һөжүме ваҡытында уның ихатаһына һыбайлы 10 ҡыҙыл әрмис керҙе, ыҙмаға инделәр, уға һуҡтылар һәм ихатаға ҡыуып сығарҙылар. Мейес башында ятҡан 22 йәшлек ауырыу ҡыҙы Хәҙисәне ыҙманан һөйрәп сығарҙылар ҙа башҡа ыҙмаға алып киттеләр... килене Маһитапта ҡалдырҙылар. Шул уҡ көндө алты ҡыҙыл әрмис уның өйөнә Өммикамал Сыуаҡаеваны килтерҙе, шунан йәнә ике ҡыҙыл әрмис килеп ҡушылды. Өммикамалдың "ни өсөн килтерҙегеҙ?" тигән һорауына ҡыҙыл әрмистәр, уны тәфтишләйәсәктәрен һәм атып үлтерәсәктәрен әйттеләр, ә Ғәйниямалды ихатанан урамға ҡыуып сығарҙылар, ҡыҙыл әрмистәр ыҙмала нимә ҡылғандарын ул күрмәне. Уҡый-яҙа белмәй.

4. Мәрүәсафа Ҡускилдина. Ҡыҙыл әрмистәр унан май таптырҙылар, ул "май юҡ" тигәс, ҡыҙыл әрмис уны соланға алып сығып иҙәнгә йыҡты ла көсләргә маташты, ләкин бер ҡыҙыл әрмис, "иптәш, ташла, ҡарсыҡ бит ул" тип ҡысҡырғас, уны көсләмәнеләр. Өс көндән һуң ниндәйҙер ҡыҙыл әрмис уның аяҡ теген машинаһын һәм бер мендәрен, бер кейеҙен алып китте. Уҡый-яҙа белмәй.

5. Фәрхиямал Мөнбәйҡолова, 18 йәшлек. Өйгә 7 ҡыҙыл әрмис килеп керҙе, был ваҡыт ул тубыҡтарында ауырыу ҡарсыҡ Йәнбикәнең, йәғни кәйнәһенең, башын тотоп ултыра ине. Ҡыҙыл әрмистәр уны, Фәрхиямалды, башҡа бүлмәгә алып киттеләр ҙә бөтә ете кеше уны көсләнеләр, шул уҡ көндө уның ире Ғирфан Мөнбәйҡоловты үлтерҙеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

6. Ишбикә Мөнбәйҡолова. Ул, ауырыу килеш, килене Фәрхиямалдың тубыҡтарында ята ине. Өйгә ҡыҙыл әрмистәр килеп керҙеләр, Фәрхиямалды башҡа

бүлмәгә алып киттеләр, ә нимә ҡылғандарын күрмәне. Уның улы Ғирфан аҙаҡ ҡыҙыл әрмистәр тарафынан үлтерелгән булып сыҡты. Уның улы десятский ине, ылауҙар ебәрә ине. Уҡый-яҙа белмәй.

7. Хәширә Сәлишева. Уның өйөнә ике ҡыҙыл әрмис килеп керҙе, уны амбарға алып киттеләр ҙә көсләнеләр. Көсләгәндән һуң, ике мендәрҙе алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

8. Сәғиҙә Таулыбаева. Ихатаға бер нисә ҡыҙыл әрмис килеп керҙе, "хужалар өйҙәме?!" тип ажғырҙы. Ире Нәзмитдин улар янына сыҡҡас һәм улар менән аҙыраҡ һөйләшкәс, бер ҡыҙыл әрмис уға мылтыҡтан атты ла шунда уҡ үлтерҙе. Ире үлтерелгәндән һуң, ул балаларын күрше ауылға мәрхүмдең икенсе ҡатыны Хөббөлнисаны саҡырырға ебәрҙе, балалары әйләнеп ҡайтҡас, ҡапҡа төбөндә үк ҡыҙыл әрмистәр шул ҡырандас егеүле атты тартып алып киттеләр. Өс көндән һуң, һыбайлы алты ҡыҙыл әрмис килеп етте, балаларҙы өйҙән ҡыуып сығарҙылар, ә уны, Сәғиҙәне, күмәклән көсләнеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

9. Әсхәбъямал Дәүләтбирҙина. Уның улы өйҙә юҡ — ҡалала ине. Шул саҡ ҡыҙыл әрмистәр тейәлеп килделәр, уның биш баш һауын һыйырын, яңы тунын, быймаларын һәм 3 мендәрен талап алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

10. Шәригә Сәлишева. Ҡыҙыл әрмистәр уның көрән айғырын тартып алдылар, шунан һуң, Муса ауылынан булһа кәрәк, ниндәйҙер башҡорт ерән ҡашҡа алаша атын, самауырын һәм башҡа төрлө әйберҙәрен алып киттe. Уҡый-яҙа белмәй.

11. Миңлеямал Мөхәммәтәминева. Ҡыҙыл әрмистәр уның 2 кейеҙен һәм 2 мендәрен тартып алдылар. Шуның өсөнсө көнөндә ҡолонло ерән бейәһен алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

12. Хәкимә Сәлишева, тол ҡатын. Ҡыҙыл әрмистәр уның 3 йәшлек ҡола айғырын алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

13. Шәрип Сәлекәйев. Ҡыҙыл әрмистәр уның әсәһе Миңлекамалды, еңгәһе Сафияны, 15 йәшлек Хәбибъямалды көсләнеләр һәм атаһы Кәримдең ҡулын ҡылыс менән өҙә саптылар. Уҡый-яҙа белмәй.

14. Сәлимә Сәлекәйева. Ҡыҙыл әрмистәр уның 200 һумлыҡ төрлө әйберҙәрен алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

15. Усмана Сыуашбаева. Ҡыҙыл әрмис һарығын, кейеҙен, балаҫын тартып алған, һауыт-һабаларын ватҡан, бөтәһе 400 һумлыҡ ҡаза. Уҡый-яҙа белмәй.

16. Талха Дәүләтбирҙин. Ҡыҙыл әрмистәр уның 300 һумлыҡ ике һарығын тартып алған. Дәүләтбирҙин.

17. Ғилман Ғәбитов. Ҡыҙыл әрмистәр уның бөтәһе 1800 һумлыҡ быймаларын, тунын, 2 кейем тула ҡатаһын, 2 шәлен, ике ат арбаһын һәм эйәрен тартып алған.

18. Мөхәммәтрәхимә Ҡускилдина. Ҡыҙыл әрмистәр уның бөтәһе 600 һумлыҡ 6 бот орлоҡ һолоһон, бер сирек сәйен, бер шәлен, 2 ҡаҙаҡ һабынын талап алған. Уҡый-яҙа белмәй.

19. Ғөбәйҙулла Кинйәбаев. Балаҡлы ауылынан уҙып барыусы кавалерист ҡыҙыл әрмистәр уның 2000 һумлыҡ ерән ҡашҡа алаша атын тартып алып киткәндәр.

20. Искаҡ Йәлилев. Ҡыҙыл әрмистәр уның 1000 һумлыҡ тимерләткән ҡырандасын талап алып киткәндәр. Уҡый-яҙа белмәй.

21. Рәхимйән Мөхәммәтйәнов. Ҡыҙыл әрмистәр уның көтөүҙә йөрөгән 1500 һумлыҡ ала һыйырын талап алып киткәндәр. Уҡый-яҙа белмәй.

22. Ауыл советы рәйесе Сыуалбаев. Коммунистик батальон өгөтсөһө Аникин тарафынан ауыл халҡынан 9 баш ат, 3 ҡырҡмыш тай, 37 һауын һыйыры, 33 башмаҡ, 70 баш һарыҡ һәм бәрәстәр, 33 йөктән артыҡ ашлыҡ, 20 һыйыр тирейе, төрлө йорт-ҡура ҡаралтыһы һәм мөлкәте тартып алынған...

Һөйләүселәр һәр береһе Үҙәктән килгән ғәҙәттән тыш комиссар-ревизорға ышанып һәм ҙур өмөттәр бағлап ҡарай, ҡасан бола баҫылыр, ҡан ҡойоштар туҡталыр, тыныс тормош килер икән беҙҙәргә лә, тип үтенеп һорай ине. “Бөтәһе лә булыр, һеҙҙең ah-зарҙарығыҙҙы, изге теләктәрегеҙҙе, түкмәй-сәсмәй, юғарыға еткерермен”, тигәс, Ил Инәһе лә түҙмәне – ҡуйынынан дүрткә бөкләнгән дәфтәр алып, Сәлимйәнгә тапшырҙы:

-- Баймаҡ заводында яуыз Поленов аттырткан бөйөк уҙамандарыбыҙҙың береһе Әхмәҙи Ғүмәровтың тол ҡалмыш хәләл ефете Ситдиҡа ханымдың ҡанлы күҙ йәштәре һеңгән сәхифәләр – киләсәктә ғәҙел хөкөм һәм тарих өсөн, бәлки, файҙаһы тейер:

Иремдең туғандарының береһе: “Эстәрленән хәбәр килгән – уларҙы төрмәнән сығарырға[68]”, -- тип мине шатландырып китте. Мин, иптәшем ҡайтыуға тип, өйҙәрҙе йыйыштыра башланым. Кискә табан мин солан баҫҡысын йыуып бөтөрөп торғанда, ҡапҡа асылып китте, ҡапҡанан Нәфисә менән Булатовтың[69] һалдаттан алып ҡайтҡан ҡатыны килеп инделәр. Уларға күтәрелеп ҡараһам, төҫтәре ап-аҡ булған, бик ҡурҡышҡандар ине. “Беҙҙекеләрҙе харап иткәндәр бит, Ситдиҡа йәнем!” – тип илай башланы Нәфисә ханым. “Всех убили”, тип, ҡулы менән муйынын һыйпап күрһәтеп, Ғәләлкәрйә лә үкһене. Ә мин бит яңы ғына, иптәштәребеҙ нахаҡ бәләнән ҡотолоп ҡайтыр – тағы шатлыҡлы көндәр күрәһебеҙ бар икән, тип ҡыуанып йөрөгәндә, ҡапыл шундай фажиғәле хәбәр ишетеүемә, таш кеүек ҡатып ҡалдым, илай ҙа алманым, исмаһам...

Бераҙ ваҡыт үткәс, баламды күтәреп, Камил Мусиндарға киттек. Улар ҙа, был насар хәбәрҙе ишетеп: “Ситдиҡа ишетеү менән беҙгә килер инде, бахырҡай, уның беҙҙән башҡа бер кеме лә юҡ бит, тип, Зөләйха ханым мине көтөп кенә тора ине; ҡаршы сығып, моңло ғына итеп мине ҡаршы алды. Мин, өйгә ингәс, баланы иҙәнгә ултырттым да үҙем дә иҙәндәргә аунап, үкһеп-үкһеп, туйғансы иланым, Зөләйха ханым да ҡушылды.

Күп тә үтмәне, Ғәләлкәрйә мине эҙләп Зөләйхаларға килеп инде. (Уны Мөхәммәтйән Булатов армияла йөрөгәнендә алып ҡайтып, ауылға ҡайтҡас Ғәләлкәрйә тип исем ҡуйҙырған икән; ул үҙе мосолман диненә инергә риза булып, эйәреп ҡайтҡан урыҫ ҡыҙы ине). Беҙ уның менән хәҙер үк Баймаҡҡа китергә[70] булып, Нәфисәләргә барҙыҡ. Нәфисәнең атаһына үтенеп, беҙҙе атың менән Баймаҡҡа алып бар, күпме һораһаң да бирәбеҙ, тинек. Ул ризалашманы: “Унда барып, ҡанда йөҙәр хәлем юҡ, һеҙгә лә барырға кәңәш бирмәйем, Нәфисәгә лә барырға рөхсәт итмәйем”, -- тине. Беҙ уларҙан

---

[68] Киреһенсә, ҡанлы Шәмиғолов режимы уларҙы юҡ иттертергә юҫыҡланған.

[69] Таҫыллы дәүләт эшмәкәре Мөхәммәтйән Ғәлиулла улы Булатов.

[70] Ирҙәре эшләп йөрөп ҡулға алынған кантон үҙәге Темәстән.

сығып китеп, ат эҙләргә тотондоҡ. Күн заводына ла барҙыҡ. Ахырында Әбүбәкер мулла Хөсәйеновтан башҡа өйҙә торған Мәхфи еңгәйгә индек. Ул еңгәй үҙемде байтаҡ яҡын күргән булһа кәрәк – беҙгә ҡаршы булманы. Үҙе ҡарап үҫтергән, Юныс тигән 13-14 йәшлек кенә баланы беҙгә күсер итеп бирҙе лә юлға сығарып ебәрҙе.

Ул көндә беҙ Иҫән тигән ауылда туҡтап, уҡытыусыһы өйөндә ҡундыҡ. Иртәһен иртәрәк сығып китеп, төш ваҡыттарында Дәүли ағайҙарҙың ҡапҡаһына барып еттек. Күсер арбанан төшөп, ҡапҡа асып, беҙҙе ҡапҡанан индереүенә, ишек алдында ҡапҡаның уң яғына өйөп ҡуйылған күп кенә оҙон ағастар өҫтөнә йәйелеп ятҡан, ҡанға батҡан Әхмәҙиҙең һарғылт төҫтәге костюмы менән жилеткаһын күрҙем. Мин ҡоронһоҙ (тирәсһеҙ) хадуҡ арбала аяҡтарымды һалындырып ултыра инем. Костюмдарҙы күргәс, алдымда бала барын да онотоп, арбанан нисек төшкәнемде лә һиҙмәй, барып костюмды ҡосаҡлап алып, иҫем китеп йығылғанмын. Ғәләлкәрйә ерҙә аунап илап ятҡан баланы күтәреп алып, өйгә йүгергән. Шәмси апайҙар йүгереп сығып, мине үлгән тип ҡуҡҡып, битемә һыуҙар бөркөп, өйҙәренә алып инделәр. Байтаҡ ятып хәл алғас, мин Дәүли ағайҙарҙан фажиғәле эш тураһында һораша башланым. Улар ошолай итеп һөйләне:

“Беренсе август көндә кискә табан тотҡондар таш һарай янындағы ҡоҙоҡ янына сығып, ҡоҙоҡтан һыу алып, береһе икенсеһенә һыу ҡойоп тороп һабынлап йыуынып, аҡ һөлгөләргә һөртөнөп, һарайға инеп киттеләр. Бераҙҙан барыһы ла, аҡ күлдәктәр кейеп сығып, һарай янындағы бүрәнәгә теҙелешеп ултырҙылар. Һөйләшеп-көлөшөп бераҙ ултырғас, һаҡсылар уларҙы индереп һарайҙы биклән алды.

Төнгө сәғәт икеләрҙә урамда ҡаты атыш тауыштары ишетелгәс, беҙ уянып, парадный ишек ярығынан ҡараһаҡ, таш һарай янында күп кешеләр йөрөнә. Һарай алдында Ай яҡтыһында ап-аҡ нәмәләр күренә, аһ-ух килгән ыңғырашыуҙар ишетелә -- бисараҡай Әхмәҙиҙең тауышын беҙ танып торҙоҡ. Ул бик оҙаҡ ваҡыт, Алла, Алла, тип ҡыскырып ятты, һуңынан уның да тауышы баҫылды. Шул арала Ай яҡтыһына Көн яҡтыһы ҡушылып яҡтырып китте; оҙаҡламай ҡатындар көтөүгә һыйырҙарын ҡыуа башланы. Улар һарай янында ап-аҡ күлдәктәре ҡыҙыл ҡанға буялып үлеп ятҡан кешеләрҙе күреп, ҡыҙганышып илап торгандарын күргәс, һаҡсылар уларҙы ҡыуып ебәрҙеләр. Оҙаҡламай врач алып килеп, тотҡондарҙың үлеп етеүҙәрен әйтеп, Руденко менән Поленовты тыныслandырғас, шәһиттәрҙе шахта соҡорона алып барып ташларға ҡуштылар. Кешеләр күп йыйылып киткәс, мин сыҡтым да, рөхсәт һорап, 6 (алты) кешене үҙем күмдерәм, тип, атҡа киң таҡта арбаны егеп урамға сыҡтым, 3-4 бабай менән барып, зыяраттың бирге ягындағы киң генә, күмелған иҫке шахта соҡоро бар икән – шуны көрәктәр менән уңайлаштырып, ***Әхмәзи Ғүмәровты, Билал Ғабдрахмановты, Мөхәммәтйән Булатовты, Дулат-Али*** *тигән бер егетте шул киң соҡорға теҙеп һалып, өҫтәренә кейем-һалымдарын яптыҡ та күмеп ҡуйҙыҡ.* ***Тарташов*** *тигән урыҫ егете менән* ***Кузнецовты*** *икеһен бер соҡорға күмдек”, -- тине Дәүли ағай. Беҙ Дәүли ағайҙан шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, Дәүли ағайҙың ҡулдарын үбеп иланыҡ. Һәм унан иптәштәребеҙҙең ҡәберен күрһәтеүҙе үтенеп һораныҡ*

Ул ағай беҙҙең был теләгебеҙгә риза булманы: “Юҡ инде, мин унда бара алмайым, сөнки ул яҡта бик ҡуҡыныс, ул яҡҡа мал ҡарарға барыусыларҙы ла атып үлтерәләр”, -- тине. Беҙҙе хәҙер бер нимә лә ҡуҡытмай, атһалар атырҙар, тинек тә иптәштәребеҙҙең ҡәберҙәрен эҙләргә киттек. Ағай өйрәтеп ебәргәнгә күрә бахырҡайҙарҙың ҡәберҙәрен табып алдыҡ. Мин ҙур сабырлыҡ менән үҙемде ҡулға алып,

артыҡ тауыш менән илауҙан тыйылдым. Ә Ғәләлкәрйә, үҙҙәренең ғәҙәте буйынса, ҡәберҙең өҫтөнә ятып, ҡысҡырып-ҡысҡырып көйләп иларға тотондо...

Шул арала Ирәндек тауы яғынан һыбай кешенең Баймаҡ яғына килеүе күренеп ҡалды. Мин уны күреү менән ҡайтып китергә ашыҡтым. Тик Ғәләлкәрйәне ҡәбер өҫтөнән айырып ала алмай бик аптыраным. Һис тә булдыра алмағас, баламды күтәреп ҡайтыу яғына әйләндем. Мин бераҙ киткәс, ул да көйләп-көйләп илап артымдан килеп етте. Беҙ ҡайтҡанда тау өҫтөндәге ҡалҡып-ҡалҡып торған таштар артында мылтыҡлы кешеләрҙең боҫоп ултырғандарын күрһәк тә, улар беҙгә теймәне.

Шулай итеп, беҙ өйгә ҡайтҡан булдыҡ. Ләкин әле һаман беҙҙең күңелдәр баҫылманы.

Беҙ инде Руденко менән Поленовтың урынлашҡан кантураһына барып, иптәштәребеҙҙең кейемдәрен һорамаҡсы булдыҡ. Баймаҡта[71] сиркәү бар, уны, ҙур урын биләп, ҡойма менән әйләндереп алғандар. Шул ҡойманың эсендә Баймаҡ заводының элекке хужаһы Кабановтың һалдырған ҙур-ҙур йорттары бар. Сиркәү ҡапҡаһынан инеп, аҙ ғына барғайныҡ, беҙҙе тәҙрәнән күреп ҡалдылар, ахыры: 4-5 хәрби кеше бер өйҙөнөң болдор баҫҡысынан һикерешеп төшөп, яныбыҙға килеп, әйләндереп алдылар. "Һеҙ кем, ни өсөн бында килеп йөрөйһөгөҙ?" – тип һоранылар. Үҙебеҙҙең кем икәнебеҙҙе әйттек. Мин өйгә обыск яһағанда алған нәмәләрҙе һораным, баламды күрһәтеп, атаһының пальтоһын, хром итектәрен һораным. Балаға на память булыр ине, тинем. Улар был һүҙемдән көлдөләр генә. Беҙҙең кемгә фатирға төшөүҙе һоранылар. Беҙ, Яушев Дәүли тигән кешегә, тигәс, Поленов беҙгә: "Вы арестованы!" – тип, бер ҡыҙыл әрмиста әйәртеп, беҙҙе, бер ҡайҙа ла сығармай, ашаттыртмай, Дәүли ағайҙың өйөндә һаҡларға ҡушты.

Дәүли ағайҙар беҙҙе һаҡсылар менән күреп ҡуҡыштылар, мин бер ҙә үлемдән ҡурҡманым. Апайға әйттем: "Сәмси апай, моғайын, беҙҙе төндә алып сығып атырҙар инде, тик һеҙгә бер үтенесем шул: әгәр мине атып, Ризам тере ҡалһа, һеҙ уны Пластағы минең туғандарыма тапшырығыҙ; улар уны үҫтереп, үҡытып, кеше итһендәр. Ғалинасирға ебәрмәгеҙ, унда ебәрһәгеҙ, унда көтөүсе генә булып ҡалыр, -- тинем. -- Әгәр уны үҙемдең күкрәгемә ҡуйып бергә генә атһалар, донъяла бер үкенесем дә ҡалмаҫ ине", -- тинем.

Кис булды, беҙгә ашатманылар. Ишек төбөндә мылтыҡлы һаҡсы ултыра. Сәмси апай төпкө йоко бүлмәһенә беҙгә урын һалып бирҙе лә, балаға эсер, тип, бер стакан һөт биргән булды.

Аҙыраҡ йоҡлап киткәнбеҙ. Бер ваҡыт парадный ягындағы ишекте бик ныҡ ҡаҡҡан тауышҡа йөрәгебеҙ ярыла яҙып уяндыҡ. Дәүли ағай тороп, ишеккә сығып китте, беҙ тертләп тороп ултырҙыҡ.

Бераҙ һөйләшкәс, Дәүли ағай өйгә инде. Беҙгә ул, һорамаһаҡ та, үҙе килеп әйтте: "Темәстән кантонлыҡ күсеп ята икән, шунан килгән таныш иптәштәр фатир һорап килгәндәр икән. Мин уларға һеҙҙең беҙҙә икәнде әйткәс, улар: "И бисараҡайҙар, мында килеп еткәндәр икән, беҙ уларҙы борсомайыҡ инде, башҡа кешегә барайыҡ, тип киттеләр", -- тине. Мин шул ваҡыт йомшап китеп, беҙҙе лә ҡыҙғанған яҡшы кешеләр бар икән әле, тип, таң атҡансы иланым.

---

[71] Буласаҡ №1 мәктәп урынында.

Таң атты, Ҡояш бераҙ күтәрелгәс, өйгә тағы мылтыҡлы бер кеше килеп инде лә беҙҙе һаҡлаған һаҡсыға кеҫәһенән сығарып бер ҡағыҙ бирҙе. Уныһы, ҡағыҙҙы уҡығас, Дәүли ағайҙы саҡырып алып, беҙҙе уға тапшырып китәсәген әйтте. Әгәр быларҙы ҡасырһаң, башың менән яуап бирәсәкһең, тип, ағайҙан ҡул ҡуйҙырҙы ла үҙе теге егет менән сығып китте. Улар киткәс, Сәмси апай беҙҙе яҡшылап туйҙырып алды.

Ул көн дә үтте, беҙҙе оноттолар, ахыры. Хужалар ашаталар ҙа ул, ләкин беҙҙе алып килгән аттың хәле мөшкөлләнә башланы. Кәртә башынан ҡарайған бесән, һыныҡ-һаныҡ икмәк, аҙыраҡ он болғатып биргән һыу менән генә ат тотоп булмай бит, ә ҡырға сығарып ашатырға мөмкин түгел. Беҙҙе алып килгән бала көн буйы илауҙан бушанмай. Аптырағас, Дәүли ағайға әйттем: "Ағайым, һин Поленовҡа бар. Беҙҙең хәлде, аттың хәлен әйт, бүтән мин уларҙы туйҙырып тота алмайым; йә, пропуск биреп, Темәскә ҡайтарып ебәрегеҙ, йә үҙ ҡарамағығыҙға алығыҙ, тип әйт, тинем. Дәүли ағай хәлде барып һөйләгәс, улар беҙҙе, үҙҙәре килһен, тип ҡайтарғандар.

Беҙ, ағайҙар, апайҙар менән хушлашып-бәхилләшеп, кәфенде муйынға урағандай булып сығып киттек.

Беҙҙе ҡаршылап, кантураларына алып инделәр ҙә кем икәнебеҙҙе һораша башланылар: ниндәй милләт, кем булып эшләү йәки эшләмәү һ.б. Мин уҡытыусы булып эшләүем, татар икәнемде әйткәс, улар: "Ни өсөн башҡортҡа барҙың, татар тапманыңмы?" – тинеләр. Яуап бирмәнем.

Ғәләлкәрйәне һораша башланылар: ул үҙенең урыҫ милләте икәнен әйткәс, уны төкөрөнә-төкөрөнә әрләнеләр ҙә, миңә обыск ваҡытында алынған алты аршин туҡыма тауарымды ғына биреп: "Башҡаса ирҙәрегеҙҙе юллап килеп йөрөмәгеҙ, әгәр бик тә һағынһағыҙ, үҙегеҙҙе лә улар янына ебәрербеҙ!" – тинеләр ҙә Темәскә ҡайтыуға пропуск яҙып бирҙеләр. Беҙ ағайҙарға ҡайтып тамаҡ туйҙырҙыҡ та, асығып торған атты егеп, ағай менән апайға мең рәхмәттәр уҡып хушлашып, юлға сығып киттек. Баймаҡтан 2-3 саҡрым ер үткәс тә атыбыҙ арыны, уны ситкә алып сығып туғарып, туйҙырғансы утлаттыҡ...

Комиссар-ревизор фажиғәле был яҙманы үҙе шунда, ҡанлы Баймаҡ заводында, етенсе булып атылғандай башын баҫып, йөрәге ҡанһырап уҡыны...

Ил Инәһе алып ингән бер аласыҡта үҙәк ялғарға ғына ултырғайнылар, тышта шау-шоу, ҡысҡырыш-илаш ҡупты ла урамға атлыҡтылар. Өҫ-баштары өҙгөләнгән, биттәре сыйылып ҡанаған бер йәшүҫмер, күрше ауыл йорағы, хәле бөтөп ҡапҡа төбөнә ауҙы:

-- Бәлә, ағайҙар-апайҙар, бәлә... Ауылыбыҙҙы Руденко әтрәте баҫты: "Башкир! Автономию захотел?!" – тип аҡырышып, өйберенсә атып-киҫеп йөрөйҙәр; мөғәллимәне сәсенән һөйрәп сығарҙылар ҙа урам уртаһында күмәкләшеп мәсхәрәләргә керештеләр...

-- Ә?! Мөғәллимәне?! Уй Аллам, әхирәткәйемде!.. – Ил Инәһе атына ырғып менде, ҡулын болғап һөрәнләне: -- Ир-ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ минең арттан!

Ҡоралланған атлы төркөм тупыр-тупыр китеп күҙҙән юғалды, эҫе тымыҡ һауала саң болото борҡолоп ҡалды. Мырҙағолатов та йәһәт һыбайланып, башҡалар менән бергә, әйтелгән ауыл тарафына ашыҡты.

Улар барып еткәндә Әҡлимә әтрәте ҡырғынсыларҙы ауылдан ҡыуып сығарған да артабан эҙәрлекләп киткән; унарлап өй дөрләп яна, ләкин һүндереүсе юҡ; ҡапҡа төптәрендә ҡанға батырып тураҡланған кәүҙәләр аунай. Мәктәп алдында урамда бер тәңгәлде халыҡ уратып алған. Сәлимйәнгә ҡот осорғос яман күренеш асылды: күлдәген ҡап-урталай ярып яланғаслатылған ҡатын кәүҙәһе ҡанға батып ята; боттары һәм ҡулдары дүрт тарафҡа – ергә ҡатылған ҡаҙыҡтарға тарттырып бәйләнгән; мәрхүмәне ҡаҙыҡтарҙан ысҡындырып маташҡан ҡарт һуҡрана:

-- Бына һеҙгә Ленин бабай, бына һеҙгә яҡты Совет власы! Ире Ҡыҙыл Армияла Варшауҙы алырға йөрөй, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән. Ә бында... хәләл ефетен ҡыҙылдар нишләттеләр...

Инәлегенә имән ҡаҙыҡ ҡаҙалған, боғаҙы салынған бахырҙы бер күреүҙән үк таныны: Гөлсәсәк!..

.....

Ҡыҙылдарҙы ҡыуып киткән төркөм әйләнеп ҡайтты; Әҡлимә бер ҡыҙыл әрмисте муйынынан һарыҡ һымаҡ арҡанлап, ҡамсылап яра-яра килтерҙе:

-- Бишеһенең башын өҙҙөк, ә бныһы тереләтә эләкте. Руденко үҙе саҡ-саҡ ҡасып ҡотолдо.

Боғалағынан арындыртҡас, һуйылырға барған малдай башы-күҙе аларған әсир, кешеләрҙең нәфрәт ҡатыш ерәнесле баҡҡан күҙҙәренә ҡарап, комиссарҙың тәңгәлендә ергә лыпан тубыҡланып ялбарҙы:

-- Минең бер ғәйебем дә юҡ, зинһар, харап итә күрмәгеҙ, харап итә күрмәгеҙ!

Арҡаһына ҡамсы тартып торғоҙҙолар:

-- Йәлләт! Башҡорт башың менән башҡорт ҡанын эсеп йөрөйһөң!

-- Мобилизация менән алдылар, мәжбүр иттеләр... ләкин мин үлтермәнем! Юҡ, үлтермәнем!

-- Мөғәллимәне мәсхәрәләүҙә лә ҡатнашманыңмы? – Ил Инәһе ҡылысын ҡармаланы.

-- Юҡ-юҡ, ҡатнашманым! Күреп кенә торҙом! Бер үк...

-- Кемдәр һәм нисек ҡатнашты, һөйләп бир! – тине Сәлимйән, алҡымына тығылған үкһеүен саҡ йотоп.

-- Ҡурамшин тигән татар сәсенән һөйрәкләне... салҡан ятҡырып ҡаҙыҡтарға тарттырҙылар... күлдәген яра йырттылар... ун бишләбе сиратҡа торҙо... Зинһар, үлтерә күрмәгеҙ мине!

-- Һөйлә, шаҡшы! – Йәмил ҡамсыһын жыйлатты.

-- Башта Руденко үҙе килеп: “Сука! Вот тебе автономия!” – тип мәсхәрә ҡылды... Артынса Ҡурамшин да: “Сөйрәлтке! Автономия мона шулай була ул!” – тип оят эшен башҡарҙы...

-- Етте! – Тештәрен ҡыҫып тыңлаған Сәлимйән йылан һымаҡ борғаланған бәндәнең йөҙөнә төкөрҙө. – Енәйәтсел төркөмөгөҙ оҙаҡламай ғәҙел Совет суды ҡаршына баҫасаҡ – Ревтрибунал язалаясаҡ һеҙҙе! Шуны ҡайтып Руденкоға

доложи. -- Әҡлимә менән Йәмилгә бороlдо: -- Уҙамандар, ризаһығыҙмы шуға, ебәрәбеҙме?

-- Китһен! – Ҡул һелтәне Йәмил. Әҡлимә лә яугирҙәренә өндәште:

-- Иҫән-аман үҙ юлына төшөрөгөҙ мөртәтте!

Мосолманда үлектәрҙе иртәгәгә ҡалдырыу гонаһ һанала: барсаһын йыйып алып, ашыҡ-бошоҡ йыуып-кәфенләп, ауыл күрке Рәсүл ишандан йыназа уҡытып, зират уртаһына дөйөм ҡәбер ҡаҙып күмделәр. Иртәгә тағы ауыр һәм яуаплы көн – ил йыйыны көтә ине.

6

Йәйге ҡыҫҡа төн аяғөҫтө йөрөп үтте, тау түбәләрен һарылатып таң һыҙыла башланы. Аттарға атландылар. Ете саҡрым араны алдыртҡансы, Көн-апабыҙ зәңгәр күккә тышау буйлыҡ ҡалҡынды.

Йыйын булаһы ҡасаба атлыларҙы һағайыулы дөйөм тынлыҡ тойҙортоп ҡаршыланы, әммә дауыл алдындағы тынлыҡҡа оҡшай ине.

Үҙәк урамға төшкәс, ике яндан ҡоймаланып теҙелешкән өнһөҙ-тынһыҙ ҡараңғы көс – ҡораллылар һағайыулы төбәлешеп оҙатты. Баштар өҫтөнән тырпайышҡан штыҡ, һәнәк, һөңгө, мылтыҡ көбәктәре араһынан шымып аңдыған януарҙың бер генә хәтәр өнө -- ышылдап тын алыуы шомландыра; һирәк-һаяҡ йүткереү, ҡоросҡа ҡорос тейеү сыңы тултыра был мөхитте. Алғы буйҙа үҙенә күрә иҫ киткес гвардия – ағас ҡылыслы һәм һөңгөлө иң һуңғы яугир быуын – дүрт-биштән алып ун өс йәштәргәсә үтә етди малайҙар...

Киң майҙанда көмөш Айлы манараһын аяҙ күккә ғорур сөйгән ағас мәсет алдына туҡтанылар; артынса уҡ ҡораллы халыҡ майҙанды һәм урталағы етәкселекте – ғәҙәттән тыш комиссар-ревизор, кәбеҫтәләй аҡ салмалы, йәшел таяҡлы Рәсүл ишан хәҙрәт һәм уның мөриттәре менән ҡуша баҫып торған Реввоенсовет ағзаларын божоралап уратты. Тәүҙә Рәсүл хәҙрәт ҡыҫҡаса аят уҡып, майҙан бер юлы “Аллаһ Әкбәр!” иткәс, Реввоенсовет рәйесе Аҡмал йыйынды башлап асты:

-- Йәмәғәт, илебеҙҙең мөбәрәк азаматтары һәм уҙамандары! Беҙ ашығыс йыйылдыҡ; ил яҙмышын уртаға һалып хәл иткес ҡарар ҡабул ҡылырға; боғаҙ ярып сафсата һатырға ваҡыт юҡ; шуға күрә дилбегәне, дөрөҫөрәге теҙгенде, ҡыҫҡа тотайыҡ. Былтыр ғына тап ошо төбәктә Әхмәтзәки Вәлиди уҙаман етәкселегендәге башҡорт ғәскәрҙәренең делегаттары хәрби ҡоролтай уҙғарып, ҡан ҡойошто туҡтатырға -- Советтар яғына сығырға, автономиябыҙҙы Советтар нигеҙендә ҡорорға тарихи ҡарар ҡабул ҡылғайны. Артабанғы ваҡиғаларҙы үҙегеҙ беләһегеҙ. Инде килеп бөгөнгө көндә үҙегеҙ һайлаған Реввоенсовет һеҙҙең, йәғни ғәскәрҙәребеҙҙең делегаттары, ҡаршыһына шулай уҡ хәл иткес мәсьәлә ҡуя: ҡан ҡойошто туҡтатыу, автономияны тыныс юл менән һаҡлап ҡалыу һәм нығытыу өсөн Үҙәк хакимиәт менән һөйләшеүҙәр башларға...

-- Ваҡыт!

-- Күптән кәрәк ине! – Алғы буйҙа торған һалдат кеймле йәштәр хуплап шауланы.

-- Беләбеҙ. Быға тиклем дә вәкилдәр ебәреп ҡаранығ, ләкин ҡыҙыл ғәскәр уларҙы үткәрмәй тораҡланы... Бына хәҙер ваҡиғалар үҙгәрҙе – Үҙәк хөкүмәт исеменән беҙҙең менән уртаҡ тел табырға Ҡыҙыл Армия штабынан күптәребеҙгә яҡшы мәғлүм комиссар, күренекле башҡорт коммунисы Сәлимйән Мырҙағолатов үҙе килде...

Халыҡ сафтары елгә бәүелгән диңгеҙҙәй тулҡынланды. Салмалы баштар алдында тауҙай ҡалҡынған Рәсүл ишан йәшел таяғын ергә төртөп, һыңар ҡулы менән битен һыпырҙы:

-- Етте! Коммунистарға бәддоға! Йәмәғәт, ишетһен ҡолағығыҙ: башҡорт тип алданмағыҙ! Ғәли Шәмиғолов та үҙен башҡортмон, тип күҙ буяй... Коммунистарҙың барыһы ла бер буҡлы сыбығтан ҡыуылған мөртәт, иманһыҙҙар!

-- Ялған! – Йәмилдең көр тауышы. – Ишан хәҙрәт мине ғәфү итһен, комиссарҙың кемлеген яҡшы беләм – ысын намыҫлы инсан! Быны мин үҙегеҙ ышанып һайлаған Реввоенсовет ағзаһы булараҡ раҫлайым! Ил Инәһе дөрөҫләр!

Әҡлимәнең ни әйтерен көткән майҙан тын ҡалды. Йөҙәрләгән күҙҙәр уға төбәлде.

-- Йәмәғәт, ағайҙар һәм апайҙар, ҡустылар һәм һеңлеләр! Мин комиссар Мырҙағолатовты электән үк яҡшы беләм һәм үҙемә ышанғандай ышанам!

Майҙан ҡәнәғәт гөжләне, баштар өҫтөндә ҡоралдар сайҡалды.

-- Һөйләһен!

-- Һүҙ бирегеҙ үҙенә!

Кисәге фажиғәнән йәне киҫелеп мантый алмаған Сәлимйән ҡапыл тертләп уянғандай албырғаныбыраҡ торғас, рухын туплап, етәкселәр төркөмөнән халыҡҡа яҡынланы, баш эйеп иҫәнләште. Аҡ салма ҫатынан тызырайған ишан хәҙрәткә күҙ ҡырыйын һирпегәс, тәрән һулыш алып, бөтә майҙанға ишетелерлек оранланы:

-- Йәмәғәт, тыңлағыҙ! Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: бында беҙ бер-беребеҙҙе ҡыйырһытырға килмәнек – туғандарса кәңәшләшергә килдек. Рәсүл хәҙрәтте белмәгән кеше юҡтыр – милләтебеҙҙең аҫыл йөҙөк ҡаштарының береһе ул. Мин дә уны яҡшы беләм, ихлас ихтирам итәм. Ләкин хәҙрәт саҡ ҡына яңылыша, буғай: иманһыҙҙар түгел беҙ! Беҙ – иманлы коммунистар, беҙ милләтебеҙҙе һатмайбыҙ!

-- Ур-рааа! – Майҙандың алғы буйы, фронттан ҡайтҡан ҡыҙыл әрмис кейемле баш күтәреүселәр, винтовкаларын, карабиндарын юғары сөйөп алҡышланы, хатта бер-нисә көбәктән йәҙрә лә гөрһөлдәтте. Ҡулын күтәреп илде тыныҫландырғас, Мырҙағолатов иң кәрәкле һен әйтте:

-- Реввоенсоветығыҙ рәйесе Аҡмал уҙаман бик дөрөҫ киҫәткәнсә, теҙгенде ҡыҫҡа тотайыҡ. Былтырғылай замана түгел хәҙер: башты ташҡа бәреп ташты ярып булмай. Ҡыҙыл Армия Колчакты ла, Антантаны ла һәм башҡаларын да тар-мар ҡылды – һеҙгә ҡаршы баштан-аяҡ ныҡ ҡоралланған ҙур көстәр ташланасаҡ, утлы ҡулса эсендә ҡалдырасаҡ. Үҙегеҙ менән бергә ҡатындарығыҙ, балаларығыҙ, атай-әсәйҙәрегеҙ хаҡында уйлағыҙ! Милләтте утҡа тығырға, көрсөккә таяндыртырға ярамай, әле ваҡыт үтмәгән. Әгәр рөхсәт итһәгеҙ, һеҙҙән бер вәкил алып, тыныс һөйләшеүҙәр башлар өсөн Эстәрлетамаҡҡа юлланырбыҙ, хатта Мәскәүгә лә мәғлүм итербеҙ. Ризамы шуға?

-- Риза! Риза! Риза! – Майҙан берҙәм хупланы. *Ләкин* шул уҡ бер мәҙҙәттә мәсет янындағы һирәк сауҡалыҡтан зәһәр һөрән яңғыраны:

-- Отставить! Провакация! Ышанмағыҙ! – Ҡыҫҡа киҫелгән йыуан ағас тумарылай тәпәш буйлы, дүрткел-яҫы яурындары арҡыс-торҡос портупеялы, башы фуражка аҫтынан бысраҡ-ҡанлы марля менән тирәсләнмеш ғәйәр әҙәм атлығып килеп сыҡты *ла* халыҡ алдына ҡарғылды. Аҡмал ҡарт, Сәлимйәндең ҡолағына эйелеп: "Реввоенсоветҡа баш бирмәгән уҙаман – тауҙағы бер бәләкәй әтрәттең дыуамал атаманы Хәмзин", -- тип аңлатты. Ҡулын болғай-болғай *лауларға* керешкән ирҙе Йәмил ҡыҫҡырып бүлдерҙе:

-- Хәмзин, һиңә һүҙ бирелмәй, сөнки һин делегат түгел!

Тегенең йөҙө ут ҡапҡандай ҡыҙарҙы:

-- Нимә?! Сыҫканда – күт кәрәк, сысмағанда ник кәрәкме?! Яу ҡырында *ла* Хәмзин делегат түгел, *ләкин* ҡанын йәлләмәй ҡойоп һуғыша! – Башындағы ҡатҡан ҡанлы марляһына төртөп ярһыны.

-- Һөйләһен, батырлығын күрһәтһен! – тинеләр алғы буйҙағылар.

-- Ярай, телләш, тик иҙелдәй һуҙма, Хәмзин.

-- Йәмәғәт, түҙер әмәл ҡалманы!.. Беҙҙе, халҡым өсөн тип йәнен аямай ҡыйышҡан яугирҙәрҙе, бынауы Аҡмал кеүектәр, Йәмил кеүектәр анауы торған комиссарға – коммунистар шпионына һата! *Ләкин* шуны белегеҙ: бында беҙ – башҡорт милләтенең алтынға *ла*, көмөшкә *лә*, юха телгә *лә* һатылмай торған тоғро яҡлаусылары бар! Ышанмағыҙ уларға, ышанығыҙ беҙҙәргә! Бөгөндән үк Баймаҡҡа ябырылырға, Эстәрлетамаҡҡа сапҡын яһарға! Күп михнәттәр сиккән ошо тыуған тупраҡты үбеп ант итәм: ҡыныбыҙҙа ҡылысыбыҙ, тәнебеҙҙә йәнебеҙ барҙа милләтебеҙҙең бәхете өсөн һуңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғансы һуғышып үлергә ант итәм! – Хәмзин төбөн салғы сапҡандай йөҙтүбән ауҙы, ауыҙ-мороно саңға сумып, ике ирене араһына ҡара тупраҡ ҡыҫтырып килеп торҙо. Ытырғанып торған бер үҫмер малай, йыртыҡ кейемле көтөүсе, ер ашаған орансыға яҡынланы, "һинме был?" тип йөҙөнә тура баҡҡас, халыҡҡа боролоп иҫкәртте:

-- Ағайҙар, апайҙар, Хәмзинға ышанмағыҙ! Мин уны күптән түгел Баймаҡта – яуыз Әһлиуллин әтрәтендә шәйләнем, Әһлиуллин менән ҡосаҡлашып араҡы эсә ине!

-- Шаҡшы! Провакатор! – Хәмзин маузеры ут төкөрөп, көтөүсене юл саңына бираҡтырҙы. Төтөн бормаслатҡан көбәген уҫал болғап янаны: -- Хәмзинға тел тейҙергәндең һәр береһе ошолай телдән ҡаласаҡ! – Күкрәгенән ҡан борғоған кәүҙә тирәһендә халыҡ зыҡ-ҡубышҡан арала, ат етәкләп көткән йәнуҙаҡтары менән йылғыр һыбайланып, сауҡалыҡҡа ташланды, тау егенә һеңде. Әммә делегаттар уның оранына ҡушылманы, советтар менән һөйләшеүҙәр башларға ҡарар ҡабул ҡылып, күңелле гөрләшеп таралды. Аҡмал менән Әҡлимә *лә*, комиссарҙы ваҡытлыса Йәмил һәм башҡалар ҡарамағына тапшырып, ашығыс эштәренә йәнәлделәр.

-- Анауы ауылға барып, етәкселәрҙе көтәбеҙ, -- тине Йәмил, тау буйында өй ҡыйыҡтары һыҙатланған яҡҡа ымлап. – Тик аттар ҡырҙа бит әле...

Сәлимйәндең аттарҙы көткөһө килмәне -- йәне түҙмәй ниңәлер:

-- Яҡын бит, яйлап атлай торайыҡ.

-- Ярай. Арттан килтереп еткерерҙәр.

Күпмелер аҙымлағас, улар юҫыҡланған ауыл осонан ала-ҡола ҡаршы төркөм бүҫерелеп сыҡты ла юл буйынса туҙраны: төйөнсөктәрен йөкмәгән, һыйырҙарын һәм кәзәләрен етәкләгән ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро...

-- Был ни хәл?!

Төркөмдән бер һыбайлы айырылды, елдереп килеп етте – Реввоенсовет ағзаһы Ғайса ине:

-- Туғандар!.. Тау артында йылға бөгәлендә... бронепоезд! Туптарынан ауылға ут яуҙыра!..

-- Атала-аар! Уф Аллаҡайым, атала-аар!.. – Йән әселе ҡатын-ҡыҙ һыҡтауы телгеләне йөрәкте; аңшайышып, үркәстәрен зәңгәр офоҡ ҡаймалаған тау яғына баҡтылар. Дәһшәтле йән эйәһенең ер һелкетеп, ухылдап-ухылдап йүткереүе ишетелде; ауыл һыртындағы ғәмһеҙ йылҡы өйөрө утлап йөрөмөш хәтфә-йәшел ҡалҡыулыҡта аҡмамыҡтай ҡабарынҡы ике ялбыр болот хасил булды, артынса уҡ күк күкрәгәндәй гөрһөлдәне; илаш, ҡарғыш, ләғнәт тауыштары ялғанды уға. Шул арала ауыл осонда тағы ла бер-нисә аҡ болот ҡубарылып, бер өй түбәһе күҙ алдында күккә осто. Ҡасҡын халыҡ тулҡыны быларға килеп етеп төкәлде, барыһы бергә буталды...

-- Әһә, күрҙегеҙме инде кемдең – хаҡ, кемдең нахаҡ икәнен?! – Ҡайҙандыр пәйҙә булмыш Хәмзин яман шарҡылдап көлдө. Ҡырт-боролоп, йыуан бысраҡ бармағын Сәлимйән тарафына төртөп ажғырҙы: -- Бына тора аждаһаны килтертеп ауылға аттыртыусы, Шәмиғолов шпионы! Янында Йәмил-һатлыҡйән – ботарлағыҙ яһилдарҙы!

Ҡасҡынсыларҙың бер килкеһе туҡталып, ошо икәү тирәһендә өйөрөлдө:

-- Арт һабағын уҡытайыҡ мөртәттәрҙең!

-- Туҡма! -- Күҙ-башы аларған унлап ҡатын-ҡыҙ, төйөнсөктәрен ташлап, “шпион”дарҙы йолоҡҡоларға кереште:

-- Быныһы йылтыр итектәр кейеп алған! – Йығып һалып, аяҡтарынан һөйрәнеләр. Итектәрҙең ҡыҫтаулығы ҡотҡарҙы – һурылманы...

-- Апайҙар, тыйылығыҙ! – тип ҡараны шулай уҡ саңда һөйрәтелгән Йәмил, башын көскә ҡалҡытып. – Комиссар бит беҙгә илсе булып килгән – илсегә үлем юҡ!

-- Ләңкелдәмә, бәдбәхет, коммунист һөйрәлткеһе! Тау артынан әжәл яуҙырта илсең!

Тупыр-тупыр ат тояҡтары яҡынланы, мылтыҡ гөрһөлдәне, кешеләрҙең баш осонан бер-нисә пүлә жыйланы:

-- Йәмәғәт, Ил Инәһе!

-- Таралығыҙ! – Ҡурҡыштарынан асыуҙары баҫылып, ҡорбандарын ташлап ҡастылар, Хәмзиндән дә елдәр иҫте. Аттарынан ырғып төшкән Әҡлимә менән Аҡмал аунап ятҡандарҙы торғоҙошто.

-- Ғәфү итегеҙ беҙҙе, күҙе аларған халыҡты! – Яңынан атландылар.

-- Зыян юҡ, -- тине Сәлимйән, өҫтөнә һырыған саңды ҡағып. – Ат бирегеҙ, кисекмәҫтән бронепоезға хәбәр итергә кәрәк!

Аҡмал ҡатарында ҡушарланып тау яғына текләп торған Вәлиулла ҡапыл күҙҙәрен аҡайтып, ауыҙынан аҡ күбеге аҡтарылып аҡырҙы:

-- Аааай, Сәргәй ҡантураты! Ана килә Сәргәй ҡантураты! – Диуанайән ҡамсы һабын төртөп күрһәткән тарафтан һаya ярып ат кешнәне, эйәрле-йүгәнле менге атлығып килеп, Сәлимйәнгә тиңәлде; Сәлимйән уны теҙгененән әләктереп тә алды, атланып та өлгөрҙө, туптар гөрһөлдәгән тимер юл яҡҡа тура елдерҙе; комиссарҙы янлатып Әҡлимә, Йәмил, Ғайса һәм унлап яугир-йәнуҙаҡ ҡалышманы. Ябай халыҡ быға шаҡ-ҡатты:

-- Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ: Сәргәй ҡантуратын менеп алды!

-- Үҙе килеп һырнықты, малҡай!

-- Сәргәй ҡантураты эйәһен тапты!

-- Инш-Алла, былайғас, ҡанлы бола туҡталыр, илгә именлек ҡайтыр!

Ниһайәт иҫенә килгән Вәлиулла менән Аҡмал ҡарт доға ҡылды:

-- Амин, булһын шулай!

Тимер юлға яҡынлашыу һиҙелгәс, менгеләрҙе ҡалдырып, разъезд яғын байҡар өсөн дүртәүләшеп тауға үрмәләнеләр. Аҫта өҙөк-өҙөк паровоз ҡысҡыртты –тимер аждаһа оҙон ҡара кеҫәрткеләй бормасланып, уҫал көбәктәрен улар килгән яҡҡа тоҫҡалдырып тора – йәҙрә яуҙырырға йыйына... Сәлимйән бер күреүҙән үк таныны – уны был тарафҡа килтереп ҡалдырған бронепоезд!

Өҫтәлташҡа иңкәйеп, ҡуйын дәфтәренең аҡ битенә яҙҙы:

“Командарм Н.Д. Каширин иптәшкә, ашығыс!!!

Хөрмәтле Николай Дмитриевич, үҙең белгән С.Ш. Мырҙағолатовтан мөһим хәбәр.

Ҡораллы баш күтәреүҙе тыныс юл менән туҡтатырға яҡшы шарттар бар; етәкселәре лә, күпселек халыҡ та мәсьәләгә ыңғай ҡарай. Әле барған һуғыш хәрәкәттәрен, әгәр хөкүмәт яғы ла ризалашһа, ун көнгә туҡтатып торорға ла килешеү өсөн һөйләшеүҙәр башларға теләк белдерҙеләр; шул хаҡта Сталинға, Троцкийға, Дзержинскийға кисекмәҫтән еткереүегеҙҙе һорайым, ә мин үҙем Эстәрлетамаҡҡа ҡайтам.

Ҡултамғамдан танырһығыҙ: ***Сәлимйән Мырҙағолатов****”.*

Йыртып алып Ғайсаға тотторҙо:

-- Төпкәрәк һал һәм елдәй елеп барып ет, командармдың үҙ ҡулына тапшырырға тырыш. Күрһәт егетлегеңде!

-- Күрһәтер, тау һуҡмаҡтарынан күҙ йомоп та үтә ул, -- тине Йәмил. Ғайса тау-таш араһында йомолғас, Сәлимйәндән һораны: -- Артабан ни эшләргә?

-- Аҡмал олатаң әйткәнсә, һинең менән Баймаҡ аша тура Эстәрлетамаҡҡа!

-- Килегеҙ әле, тура юды күрһәтәйем. – Ил Инәһе офоҡ буйлап монарланған Күк Ирәндек яғына ҡулын һондо. – Күрәһегеҙме анауы үҙәндәге үлектәй тын ауылды? Ҡанэскес Руденко әтрәтенең алғы биләмәһе ул. Шуның аша түтә юл – Баймаҡҡа, Баймаҡтан – Эстәрлегә... Аҡ әләм күтәреп үтегеҙ.

Кире түбәнләп, аттарға атландылар; оло юлда был икәү айырылды – коммунистик әтрәт торған ауылға ыңғайланы...

7

Саҡрымдай ара ҡалғас, биш-алты ҡыҙыл әрмистән хасил атлы һағауыл осраны; аҡ флаг болғап барғанғалыр, атманылар, тик шунда уҡ эйәрҙән тартып төшөрҙөләр ҙә типкеләп туҡманылар, Сәлимйәндең итеген һалдырып алдылар (юлдашының ҡатаһы кәрәкмәне):

-- Башкир! Вот тебе автономия! – Арҡаларына ҡамсы ялата-ялата, ауыл осона еткерҙеләр. Унда атҡа атланған, сәфәр сығырға йыйынған әтрәт тора. Бер ситтәрәк ҡарт ҡарағай төбөндә томшайып күҙәткән Руденко һәм ярҙамсыһы ҡаршыланы.

-- Иптәш командир, бандиттарҙың лазутчиктарын тоттоҡ!

-- Сыуашбаев, ко мне! – Руденко эргәһенә елтерәп килеп еткән ҡыҙыл әрмисте Мырҙағолатов таныны – кисә генә Ил Инәһе һуғыш ҡырынан ҡороҡлаған, Мырҙағолатовтың итек баштарын яларҙай инәлгән әсир.

-- Шулмы?

-- Шул. Минән һорау алған ҙур бандит.

-- Әһә, попался, голубчик!

Тотоп килтереүселәрҙең башлығы ҡағыҙ болғаны:

-- Итегенең инесенән мандатын һурып алдыҡ. Элекке контрреволюцион обком секретаре Каспранский, хөкүмәт рәйесе Йомағолов, Башчека рәйесе Имаҡов бандиттар ҡул ҡуйған.

-- Бир бында! – Руденконың ярҙамсыһы ҡулын һуҙып яҡынлағайны, баянан биреле сырамыта алмай торған Сәлимйән уны таныны – Орскиҙа саҡта үҙе партия сафына алған, партия билеты тапшырған урыҫ:

-- Бәй, Ключников! Һин нишләп бында йөрөйһөң?

Ключников ҡаштары аҫтынан аҡайып ҡараны ла өндәшмәне, командирҙы ситкәрәк алып китте.

-- Бандит ҡайҙан белә һине? – Шикләнеп ҡараны Руденко.

-- Билдәле большевик Мырҙағолатов был. Дутов диктатураһы заманында беҙҙең өйәҙ комитетын ойоштороҙо, йәшерен эш алып барҙы...

-- Оһо! Аҫыл ҡош! Икеһен дә кисекмәҫтән канткомға оҙатырға, Поленов үҙе тикшерһен! – Кире әйләнеп килеп, күҙҙәре менән һәрмәне: -- Ниңә яланаяҡ?

-- Евсеевтың табаны тишек ине бит, иптәш командир...

-- Кире кейһен!

-- Уныҡын Филимонов алды, үҙенекен күлгә ташланы...

-- Ташлаған еренән тапһын! Ә быныҡын немедленно ҡайтарырға!

Тотҡондарҙы ике һаҡсы менән ҡушарлап арбаға ултырттылар, икенсеһенә кисә генә баштары сабылған биш мәйетте һалдылар – кантон үҙәгендә матәм митингыһы менән хөрмәтләп күмергә. Алдан, арттан бер-нисә һыбайлы оҙатышында ылау ҡара кискәсә һәм төнө буйына барҙы. Баҡыр ҡаҙған иҫке шахталар тәңгәленән уҙған һайын, тын алғыһыҙ һаҫы һауа ҡапланы һулыштарҙы – күмелмәй ятҡан күмәк мәйет тарҡала... Кантон ҡасабаһы осондағы шахта иһә бигерәк тә тонсоҡторҙо. Йәмил иҫе китмәй генә Сәлимйәнгә аңлатты:

-- Бындай шахталар күп беҙҙә. Поленовтың иң яратҡан һөнәре...

Мылтығын ҡосаҡлап йоҡомһораған һағауыл, дүрткел көрәк һаҡаллы Йылайыр урыҫы, кирелеп бер иҫәнләне ла күңел асырға итте:

-- Бандит, күҙең яҙыу таный, буғай?

-- Шулайыраҡ.

-- Урыҫсаны ла уҡыйһыңмы?

-- Уҡыштырам.

-- Александр Сергеевич Пушкин тигән шағирҙы беләһеңме?

-- Аҙ-маҙ белә инем.

-- Уның: "Тут русский дух, тут Русью пахнет!" – тигәне менән дә танышмы?

-- Эйе.

-- Бына шул Пушкин әле тере булһа, беҙ, ҡыҙыл партизандар, ошолай яҙҙыртыр инек: "Тут скверный башкирский дух, тут Башкирией смердит!", -- ха-ха-ха! – Һерт-һерт юрҡан һыбайлылар ҙа кинәнеп көлөштөләр:

-- Иртәгә үҙҙәре шунда бөкләнеп төшкәс, үҙҙәренең Пушкины булған белопогонник Бабичевҡа сәләмдәрен бирерҙәр, "башкирский дух"ты бергәләшеп таратырҙар!

Ҡасабаға килеп ингәндә Ҡояш күтәрелгәйне, тамаҡтарҙы киптертеп, ҡыҙҙыра башлағайны. Кантком бинаһы алдындағы майҙанға ҡыҙыл әрмистәр теҙелгән; таҡта ҡойма йәнәшәһендә бейеклеге бил тиңентен бер-нисә бағанаға йыуан-оҙон бүрәнәне һалып-беркетеп ҡоролған ат бәйләгескә алама кейемле өс башҡортто, аяҡ-ҡулдарын аҫҡа ҡайырып, башлы-күтле йөҙтүбән ятҡыртып муйындарынан, билдәренән бүрәнәгә беркеткәндәр; теҙемдәге иң арттағыһының оса ярығына карабин көбәген терәп бөгөлгән Поленов гөрһөлдәтеп атҡайны, ҡорбандарҙың өсөһөнөң дә оса араһынан ҡан китте, берҙәм аҡтарылған түбә ҡапҡастарынан аҡһыл-ҡыҙыл мейе бутҡалары сәсрәп, алдағыһынан сыҡҡан пүлә ҡоймаға сыртлап ҡаҙалды. Поленов, ҡәнәғәт турайып, эргәһендә көтөп торған ҡыҙыл әрмискә карабинды ҡайтарҙы:

-- Күрҙегеҙме шанлы "русская трехлинейка"ның ҡөҙрәтле көс-ҡеүәтен?! Бер юлы өс бандитты буйҙан-буй тиште, ҡоймала ла елле тишек ҡалдырҙы! Һис кем һис ҡасан ҡаршы тора алмаҫ беҙҙең ҡыҙыл пүләләргә, ура!

-- Ур-ра-ааа! – Ҡыҙыл ғәскәр ҡыуанып алҡышланы.

Сәлимйән менән Йәмилде дөбөрләтеп Поленов ҡаршыһына баҫтырғас, Барановский ҡыҫҡаса аңлатты:

-- Руденко участкаһында эләктергәндәр, Мырҙағолатовтың контрреволюцион режим агенты икәнлеге документально раҫланды.

-- Май сүлмәге тышынан уҡ билдәле, тигәндәй, баштан уҡ һиҙенгәйнем уның яуыз бандит икәнен!

-- Ниндәй яза бирәбеҙ?

Поленов ҡанлы ат бәйләгестең буш өлөшөн ҡарашы менән үлсәне:

-- Бик яҡшы, унда какрас ике бандитлыҡ урын бар – маузерҙарҙың көс-ҡеүәтен һынарбыҙ. Әҙерләгеҙ!

Дүрт ҡыҙыл әрмис ҡыҙып эшкә керешкәнсе, Йәмил киҫәтеп өлгөрҙө:

-- Командир, миндә ҙур хәрби секрет бар!

Барановский палачтарын туҡтатты.

-- Әйт, бандит!

-- Командующиҙың ғына ҡолағына әйтәм, бик мөһим!

Сәмләнә төшкән Поленов сытырайып яҡыныраҡ килгәйне, Йәмил йәшен тиҙлегендә уның ҡылысын ҡынынан һурып алып һелтәнде; башын ҡаплап янтайып өлгөргән Поленовтың һул ҡулы терһәк тәңгәленән сурт-өҙөлөп төштө[72], тәңгәлендә ҡылыс та ятып ҡалды: Йәмил мөғәллим, аймылышҡан хәрбиҙәрҙең араһынан уҡтай атылып сығып, ерҙән таш тырнап алып эҙәрләүселәренә бәрә-бәрә, тау араһына дөндө, ләкин артынан жыйлап ҡыуып еткән пүләләр уны ҡая аҫтына тәкмәстерҙе...

Поленовтың яраһын бәйләнеләр, үҙе ирәйеп ултырып йөрөргә яратҡан арҡалы ҡырандасына һалып, лазаретҡа илттеләр, операция өҫтәленә яткырҙылар. Барановский, “Правда” гәзитенә төрөп, батыр командующийҙың саңға буялып ҡарайған өҙөк ҡулын да килтергәйне -- эйәһенән һораны:

-- Быны... быны ни эшләтергә?

Йөҙө ҡағыҙҙай ағарып, тешен ҡыҫып түҙеп ятҡан Поленов ҡаты ыңғырашты, әммә тиҙ үк рухланып, ҡәтғи бойорҙо:

-- Штабҡа!.. Ҡарауыл ҡуйып... һаҡлағыҙ... үҙем сығҡансы!

Себендәрҙән ҡурсаларға ҡалын итеп тоҙ һибелгән Поленов ҡулы штаб бүлмәһенең мейес башында көтөп ятты, эргәһендә алмаш-тилмәш ҡыҙыл әрмис хөрмәтле ҡарауыл торҙо...

Сәлимйәнде төрмәгә бикләнеләр, Поленовтың үҙенән бойороҡ бирелеүен көттөрҙөләр... Аҙна дауамында Эстәрлетамаҡтан Шәмиғолов ҡул ҡуйған телеграмма килде: енәйәтсе Мырҙағолатовты, Ревтрибунал хөкөмөнә тарттырыу өсөн, беренсе мөмкинлек менән үк Эстәрлетамаҡҡа оҙатырға...

8

“Революция ҡорбандары”н матәмле-тантаналы күмәк ерләү көнө төрмәләге Мырҙағолатовҡа ла мәғлүм булды; уны, кейенергә бойороп, штабҡа оҙаттылар – командирҙар үҙҙәренсә сәхнәһеҙ спектакль ҡороп, сәйәси уйын яһайҙар ине,

---

[72] Был ваҡиғаны хәҙерге Әбйәлил районы Асҡар ҡасабаһынан билдәле Мөғәлләм сәсән Мирхәйҙәров авторға ошолай яҙҙы: “Беҙ кисә генә (29.01.1972) һикһән йәштәге Мораткин Абдулла ҡарт менән осраштыҡ, башҡа ҡарттар ҙа бар ине.

Ул Поленов хаҡында бик асыҡ белә.

Баймаҡ районы Ҡуштүбә ауылынан 7 башҡортто атырға алып сыға, улар менән әле генә плендан ҡайтып килгән уҡытыусы *Шаһимырҙанов* та була – бик мыҡты, көслө; герман һуғышында атлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткән. Ете кеше араһында: “Былар беҙҙе Темәскә кантон төбөнә еткермәй үҙ хөкөмдәрен ҡылмаҡсылар. Шулай була ҡалһа, тотайыҡ та аймылышайыҡ. Яулашып шәһит үләйек”, -- тиҙәр.

Атырға булғанда, был ҡаса. Ҡара арғымаҡ менгән Поленов ҡыуып етеп, ҡылысы менән һелтәнә, был ергә ята. Поленов үтеп, боролғас, был тағы аунай; өс-дүрт һелтәнгәс, ҡылысын тартып ала, палачтың уң ҡулын ҡушҡарынан өҙә саба. Икенсегә асыу-көс менән һелтәгәнендә, ҡаяға тейеп, ҡылысы сурт-урталай һына. Нагандан атып үлтерелә Шаһимырҙанов уҡытыусы һәм башҡалары ла. Һорашып яҙып алыусы: **М. Мирхәйҙәров”.** Автор менән осрашыуында ул тәүҙә себен эйәләтеп штаб бүлмәһенең мейес башында ятҡан, шунан һуң ҡыҙыл табутҡа һалынған Поленов ҡулының матәм митингыһы үткәреп, оркестр уйнатып күмелеүен һөйләне.

буғай. Аҡ марля сырмаулы һул ҡулы муйынына аҫылған Поленов, ерәнесен йәшермәй, ҡара ҡойолоп ажғырҙы:

-- Йәл, теге көндә ат бәйләгескә ятҡырып өлгөрмәнем... Инде килеп Шәмиғолов иптәш тә ара төштө. Тик шуны яҡшы белә һеңдер, ренегат: Эстәрлетамаҡҡа һинең турала "юлда ҡасырға маташҡанында атылды" тигән мәғлүмәт кенә етеүе бик ихтимал!..

-- Беләм мин һеҙ бандиттарҙы.

-- Бандит ул һин, ә беҙ ысын коммунист. Коммунизм хаҡына көрәшәбеҙ.

-- Шахталарға гонаһһыҙҙарҙың кәүҙәләрен тынҡыслапмы?

-- Бандиттарҙың, тип төҙәт.

-- Һеҙ үлтергән Дулат-Али – 1905 йылдан, Булатов – 1917 йылдан РКП(б) ағзалары, намыҫлы коммунистар ине. Икеһен дә бик яҡшы белә инем.

-- Беҙ ҙә бик яҡшы беләбеҙ. Бөтәһе лә башҡорт-бандит, төҙәлмәҫлек автономист-националист.

-- Ә Кузнецов менән Парташов? Улар ҙа башҡорт националистары инеме?

-- Башҡорт яҡлы урыҫ уғата хәтәрерәк; ундайҙарҙы, Феликс Эдмундович Дзержинский бик хаҡлы ҡушыуынса, ҡуша рәхимһеҙ һепереп түгәсәкбеҙ. – Һыңар ҡулы менән өҫтәлгә һуҡты. – Етте! Автономия уйны тамам!

-- Һәм башҡортҡа ла каюк! – Барановский һары атештәрен ыржайтып уҫал йылмайҙы. – Тамырын ҡоротасаҡбыҙ!

Үҙҙәре ҡыҙыл байраҡ сөйөп яулап алған ҡыҙыл Рәсәйҙә түгел, ә аҡтар лагерында ултырғандай тойолдо Сәлимйәнгә; нәфрәте тулышып, Поленовҡа бер ҡалҡынып ҡараны:

-- Бына һеҙ, Владислав Евгеньевич, коммунист һәм кантон партия комитеты-ның үҙегеҙ иғлан ҡылған етәксеһе булараҡ, бындай һәләкәтле сәйәси линияға нисек юл ҡуйҙығыҙ?

-- Сугубо партийный линия был – партиябыҙҙың стратегик линияһы. Әлбиттә, был һиңә, культураһыҙ ҡырағай башҡортҡа, бөтөнләй аңлайышһыҙ. Россия ла, партия ла милли каморкаларға бикләнә алмай. Юҡҡамы ни партиябыҙ Уставы ла милли принциптарҙан азат – монолитлыҡҡа нигеҙләнгән! – Барановскийға әйләнеп ҡарап өндәште: -- Фекереңде ослап ҡуй, Степаныч.

-- Осо шул: Волга – Урал арауығында Россиябыҙҙың йөрәгенә ҡаҙалған зәһәр төркилек шырауын һурып алып ташлау көнө етте: башҡорт бөтһөн, һирәк-мирәк ҡалғаны ла үҙен "башҡортмон" тип атауҙан дер-ҡалтырап ҡурҡһын! Тиҙләтелгән темп менән иң элек башҡорт – татарға, аҙаҡ татар – урыҫҡа әйләнергә тейеш!

-- Браво, Степаныч! – Поленов, сулаҡлығын онотоп, буғай, ҡул сабырға иткәнендә һыҙланып ыңғыраштты.

Тышҡы яҡтан ишек тибеп асылды, ҡыҫығынан үрә ҡараған Михайлычтың мыйығы күҙгә салынып, уның аҫтынан лап-лоп баҫҡан тәбәз әҙәм ашығып аҙымланы: йыуан дүңгәк кәүҙәле, арҡыс-торҡос портупеялы, һөйрәлмеш "селедка" ҡылыслы ла маузерлы; ике ҡулына, иҙәнгәсә һәлендереп, ҡарбуз һымаҡ тумалаҡ нәмәле киндер тоҡсайҙар тотҡан.

-- Абба, Хәмзин?! Яраң бөтәште ләме ни, башыңдың сырмауы ҡайҙа? – тине Сәлимйән.

Кәрлә өндәшмәне, Поленов менән Барановский күңелле хихылданы. Хәмзиндың бында күренеүе тегендә ул аткан көтөүсе үҫмерҙең фашлауын дөрөҫләне... Шомло бәндә, ерәнеп күҙәткән Сәлимйәнгә ҡалҡынып та ҡарамай, лап-лоп баҫып түргә уҙҙы, тоҡсайҙарындағын өҫтәлгә тумарлатты – Аҡмал менән Вәлиулланың башы...

-- Һоп! Ҡабул ҡылып алығыҙ, задание үтәлде! Ғайса тигән атаҡлы бандитты тимер юл буйында дөмөктөрҙөк, былары – алдығыҙҙа.

-- Браво, Хәмзин!

-- Тимәк, гидра башһыҙландырылды? "Реввоенсовет" тигәндәре һөйләргә генә ҡалды? – Кәйефләнгән Барановский устарын ҡәнәғәт ыуҙы. – Шулаймы, иптәш Хәмзин?

-- Юҡ шул... Ил Инәһе тигәндәре теҙгенде үҙ ҡулына йомарланы, тиҙ үк тәртип урынлаштырҙы.

-- Амазонкамы? Быныһы насар... – Поленов етди борсолов хәүефләнде.

-- Уныһының да башына етербеҙ, ҡуш толомонан усмаҡлап килтерербеҙ.

-- Молодец! Әһлиуллин әтрәтенең йөҙөк ҡашы, партиябыҙҙың лайыҡлы улы һеҙ, Хәмзин! Барығыҙ, изге эшегеҙҙе дауам итегеҙ!

-- Есть! – Билендәге "селедка"һын даңғыр-доңғор һөйрәлтеп йәһәтләне.

-- Күрҙегеҙме? Башҡорт коммунистары тап ошондай булырға тейеш! – Сәлимйәнгә һирпелеп ҡарап хупланы Барановский.

-- Шулай булыр. Булдырырбыҙ! – Поленовтың күҙҙәре уҫал ялтыраны.

-- Владислав Евгеньевич, был серек кәбеҫтә күсәндәрен ҡайҙа бираҡтырырға?

-- Урам сатына сығарып, ҡаҙыҡ баштарына ҡатһындар... күргәҙмәле һабаҡ ҡылып!

Ике ҡыҙыл әрмис дөбөрләп кереп, баштарҙы һәлпек һаҡалдарынан услап алып сығып киттеләр.

-- Бына шулай! Башҡорттоң башын беҙ уның үҙ ҡулынан ҡырҡтыртабыҙ, хе-хе-хе....

Сәлимйәндең ҡан баҫымы күтәрелеп, күҙ алдары ҡараңғыланды, ҡолаҡтары шауланы.

-- Яуызлыҡтың сигенән сыҡҡанһығыҙ, коммунист әхләге юҡ һеҙҙә!

-- Хе, әхләҡ тиһегеҙме? – Барановский өҫтәл тартмаһынан хәрби устав урынына ҡулланған "Правда"һын сығарҙы. – Ленин иптәш үҙе бына нимә ти: *"Морали в политике нет. Будьте образцово беспощадны!"* Һәм бына уның бөтә Совет Рәсәйенә таратылған, беҙҙәргә лә килеп ирешкән ҡиммәтле әмерҙәре: *"Надо поощрять энергию и массовость террора... Расстреливать, ничего не спрашивая и не допуская идиотской волокиты... Тайно подготовить террор: необходимо – **Срочно!..** Товарищи! Восстание должно повести к **Беспощадному** подавлению. Этого требует интерес **Всей** революции, ибо теперь взят "последний решительный бой" с кулачьем. Образец надо дать:*

*1) Повесить (непременно повесить, дабы **Народ** видел) каждый раз не меньше 100 заведомых кулаков, богатеев, кровопийц.*

2) Опубликовать имена.

*3) Отнять у них **Весь** хлеб.*

4) Назначить заложников.

*Сделать так, чтобы на сотни верст кругом народ видел, трепетал, знал, кричал: **Душат** и задушат!..*

*Телеграфируйте получение и **Исполнение...***

***P.S.** Найдите людей **Потверже. Ленин"**[73].* Так что, бывший чекист и коммунист, а теперешний вонючий ренегат, беҙ саф Ленин юлы менән барабыҙ!

-- Һәм беҙ ысын коммунист-ленинсылар! – Тештәрен ҡыҫып, ыңғырашмаҫҡа тырышҡан Поленов торҙо. -- Һәм беҙ һине ошонда ук юл саңына әйләндерергә әҙер. Эстәрлетамаҡҡа иҫән-имен барып етергә теләһәң, бында бер шартты үтәйһең.

-- Мәҫәлән?

-- Революция ҡорбандарын ерләгәндә аңһыҙ башҡорт халҡы алдына сығып, ошоға тиклем хаталы юл тотоуыңды, ә беҙҙең, ысын коммунистарҙың, хаҡ юлдан барыуын танырға һәм раҫларға, баш күтәреүселәрҙе юлбашсыларын үҙ ҡулдары менән һуйып юҡ итергә саҡырырға тейешһең. Шуны үтәмәһәң...

-- Ҡарап-ҡарармын.

-- Ҡарап-ҡара, сукин сын! – тине Барановский.

-- Митингыла беҙҙең арттан сығаһың трибунаға. Әйтербеҙ.

Майҙан тулы ала-ҡола ерле халыҡ, ҡораллылар теҙмәһе уларҙы тығыҙ ҡоршауға алған. "Революция ҡорбандары" һалынған алты табут-гроб: бишеһендә баяғы төнгө арбала ҡайтҡан мәйеттәр, ә уларға юлбашсылап ҡуйылғаны – аршин буйлыҡ ҡына гроб, сәскәләргә күмелгән Поленов ҡулы...

Ағас трибунаға баҫып командующий һөйләп төшкәс, "хатта дошмандар ҙа беҙҙең хаҡиҡәтте таный" тип, Мырҙағолатовты төрткөсләп мендерҙеләр. Ул үҙенә тоҫҡалған мылтыҡ көбәктәренә ҡарап, һуңғы форсатты һөҙөмтәле файҙаланырға булды, тәрән тын алды:

-- Ҡыҙыл әрмис иптәштәр, халыҡ ҡанын ҡойоуҙы туҡтатығыҙ, хата юлдан бараһығыҙ... Совет юлы – был түгел! Поленов – яуыз әүерелмән, коммунист битлеген кейгән уҫал енәйәтсе...

Ябай халыҡ ут ҡапҡандай шаулашты, ҡыҙыл әрмистәр сафы кинәт боҙолдо, командирҙар теҙемде тәртипкә килтерергә ташланды. Арҡалы ҡырандасына янтая биреп, тештәрен ҡыҫып күҙәткән Поленов әшәке һүгенде лә револьверҙан бер-нисә ут сорғолтто – Мырҙағолатов салҡан әйләнеп төштө. Ике ҡыҙыл әрмис йүгереп килеп, ҡанға батҡан кәүҙәне трибуна артына сығарҙылар ҙа итектәрен һалдырып алдылар; аяҡтарын боғалаҡлап, ат ҡойроғона тағып шахта соҡорона һөйрәттеләр.

Тынлы оркестр ер һелкетеп матәм маршы уйнаны, ҡыҙыл әрмистәр гробтарҙы яурын баштарына күтәреп илтте; иң бәләкәс гроб – Поленов ҡулы – иң алдан юл башланы; ҡулдың эйәһе арттараҡ арҡалы ҡырандасында ҡырын ятып

[73] Һуңынан был "Комсомольская правда" гәзитенең 1990й. 12 февраль һанында ла баҫылып тыҡты.

эйәрҙе, эргәһенән атлы эскадрон яланғас ҡылыстарын ялҡылдатып барҙы; ҡыҙыл йондоҙ таҡҡан йәшел фуражкалы командирҙар, ауыҙҙарын арандай киреп, революция ҡорбандарын ҡомарлап йырланылар:

Вы жертвою пали в борьбе роковой...

Ҡасаба осондағы ҡалҡыулыҡта алты башҡорт оло ҡәбер ҡаҙып әҙерләп торған; матәм моңо яңғырашында алты гробты төшөрөп, тиҙ генә күмеп ҡуйҙылар; уба өҫтөнә тере сәскәләр һалынды. Ҡәберселәрҙе, өйҙәренә ебәрмәй, шахта соҡоро ситенә ҡыуып килтереп теҙҙеләр: аҡ һаҡаллы ике ҡарт, урта йәштәрҙәге өс ир, талсыбыҡтай оҙон буйлы бер малай. Эскадрондың бер өлөшө ҡылыстарын айҡай-айҡай ҡыҙыу елдереп килде *лә* һәр береһе бер башҡорттоң муйынын өҙә сапты, кәүҙәләр шахта төбөнә тәкмәсләне. Аҡ һаҡаллы ҡарттарҙың береһе генә, *әллә* ҡото осопмо, соҡор ситенә сүгәләгәйне, Поленов үҙе йүгереп килеп бабайҙың башын өҙҙө *лә* кәүҙәне тибеп төшөрҙө.

Ҡырандасына ҡабат менеп ултырып, ҡулының һыҙлауын баҫыр өсөн шешә боғаҙынан хәмер һемергән Поленов ҡалҡына биреп оранланы:

-- Йәшәһен өсөнсө Коминтерн! Йәшәһен иптәш *Ленин* менән иптәш Троцкий! Яҡты коммунизм ҡояшына табан алға, ура!

-- Ур-ра-ааа! – Боғаҙҙарҙан көр һөрән яңғыраны. Тынлы оркестр өҙҙөрөп марш уйнаны, коммунизмға юл ярыусы коммунистик батальон, тығыҙ сафтарға теҙелеп, ҡасабаға йүнәлде. Шахта өҫтөндә күктә, яҡты коммунизм ҡояшы балҡыр тәңгәлдә, емтек ейергә эркелешкән ҡап-ҡара ҡоҙғон-таҙғаралар ҡанат киреп өйөрәлдө.

1969.
06.01.2008

ПОВЕСТӘР

ХЕҘМӘТ
I

— Ғәлим, әйҙә, беҙгә хисапсы булып кил. Юҡһа, бынауы ғиззәт йүнле-башлы ерҙәрҙе лә үлсәмәй, МТС-ҡа хисапты ла һуңлата — трактористар көн һайын жалыу менән килә. Ә МТС бухгалтеры минең ҡолаҡ итен ашай... Хисапсы булманы был — эт булды! — Шулай тине егеткә трактор бригадаһының бригадиры Дәүәй. Был бригада, билдәле булыуынса, колхоздың үҙенә түгел, ә дәүләтебеҙҙең машина-трактор станцияһына (МТС-ҡа) ҡарай, сөнки бөтә техника МТС-тыҡы (кешеләре генә колхоздыҡы), шуға күрә ундағы эш хаҡы ла дәүләт юғарылығында ҡуйылып, колхоздыҡынан ныҡ айырыла — көҙгөһөн игенен дә, аҡсаһын да, ауыл халҡы әйтмешләй, “көрәп алалар”... Ғәлим уйланып килә ине, ҡапыл бүленеп, туҡтап ҡалды. Бригадирҙың тәҡдимен аңына һеңдереп еткерә алмай, йөҙөнә текләне.

— Ул һиңә, моряк хеҙмәтенән ҡайтҡан егәрле егеткә, самый ҡулай эш. Тәбиле — тәбил, аҡсаһы — аҡса, ә көҙ көнө бура тултырып ашлыҡ алаһың. Былтыр, мәҫәлән, ғиззәт бер юлы егерме центнер бойҙай кәкте, ләкин шуның да ҡәҙерен белмәй, эт кеше, тамам эскегә һабышты. Бер айыҡ көнө юҡ шылманың! Ә һин — йәш егет, ете клас грамотаң бар — йөҙөп йөрөп эшләргә лә эшләргә! Әйҙә, ғариза яҙ, мин бөгөн үк уны идараға тапшырам, — тип осланы Дәүәй. Ул тимер-томор араһында бысраҡ тимер сыбыҡҡа тракторҙан төшкән иҫке подшипниктарҙы баулап маташа, эш менән мәшғүл булғанлыҡтан, тауышы баҫыңҡы, уйсан. Бригадирҙың тәүге генә тәҡдиме түгел ине был; былтыр уҡ, Ғәлим хеҙмәттән ҡайтҡас та, уға ошо уҡ һүҙҙәрҙе әйтеп өгөтләп йөрөгәйне. Ғәлим һаман кире ҡаға килде, сөнки күңеле күмәк халыҡ эщләй торған ябай хеҙмәт яғына тартыла; икенсенән, өс бала атаһы булған яҡын ғына ағайын эшенән сығартып, уның урынын алыу уңайлы булмаҫ, тигән ялған оят борсоно күңелен. Ә хәҙерен бригадирға ҡырҡа яуап бирергә ашыҡманы, уйға ҡалды. Әллә, ысынлап та, ҡабул ҡылырғамы тәҡдимде? Ул ҡайтҡандан бireле ауыр эштәрҙә эшләне. Флотта саҡта: “Өйгә ҡайтһам, өс көн, өс төн бер туҡтауһыҙ ятып йоҡлармын, унан, ике ай бер ҡайҙа ла сыҡмай ял итермен”, тип, дүрт йыл буйы тәмле хыял йөрөтһә лә, ҡайтып бер аҙнала торманы, ялансылыҡ бригадиры Фәйзерахман ағай килеп етте һәм уны “ваҡытлыса ғына йөрөп тороpға” трактор санаһына һалам тейәүсе итеп сығарҙылар. Баҫыуҙарҙың ҡарын йырып бурандарҙа һалам ташылып бөткәс, ағас ҡырҡыусылар кәрәк булды колхозға. Фермала мал торлаҡтары етешмәй, йәш быҙауҙар туңып үлә, ә урманда ағас ауҙарырға кешт еҡ, тип зарланды уға ферма мөдире. Ғәлим тағы ҡыйманы, балтаһын биленә ҡыҫтырҙы ла урманға китте. Бына хәҙер бер йыл тулып үтте инде шулай эшләй башлағанына. Бынауы сөйәлләнгән ҡулдар нимә генә башҡарманы! Был яҫы устарға балта һабы ла, һәнәк-көрәктеке лә үҙҙәренән ҡаты иҫтәлек ҡалдырырға тырышҡан. Ҡаланан ҡайтҡан ҡайһы бер студент ҡыҙҙар, хатта егеттәр менән

күрешкәндә улар, сырайҙарын сыйырып, һәләт кенә ысҡына ла устарына ҡарап ала. Ҡытыршы ҡулдар кәйефтәрен боҙа самаһы. Ләкин Ғәлимдең быға һис иҫе китмәй. Ундай сибек йәндәрҙе ул, имән тамырынан шытып та, “мин йүкә!” тип ҡыҫкырып ултырған йәш туйраларға тиңләй.

— Ысынлап та, был һиңә ҡулайлы эш. Яҡшылап уйлап ҡара әле, — тигән икенсе бер тауыш ишетелде Ғәлимгә. Һирәгәйгән тараҡ тештәренә оҡшап оҙон анкер болттары тырпайып торған яртылаш һүтек трактор маторы артында парторг Рәүеф Бикмырҙин менән тракторист Насрый улар һүҙенә ҡолаҡ һалып ултыралар икән.

— Әллә нисек бит әле. Ҡатын-ҡыҙҙар эше... — тип, уңайһыҙланып мығырҙаны Ғәлим, күҙ ҡарашын аҫҡа йәшерергә тырышып. Ҡолаҡтарының уткa бешкәндәй ҡапыл семләп ҡыҙыуын тойҙо.

— Күрсәле һин уны, Дәүәй ағай, күрсәле, ҡайһылай эре сирттерә! Моғайын, уға һинең менән минең эш тә ваҡ, “ҡатын-ҡыҙҙар эше” булып күренәлер әле. Яурынға һалып бүрәнә ташымағас, йәки кәйлә күтәреп таш ватмағас, беҙ бахырҙарҙың ҡыбырҙауы ҡайҙан килеп ирҙәр эше булһын инде ул! — Рәүеф Бикмырҙин, күҙлеген ҡулына алып, быялаларын ҡулъяулығы менән һөртә-һөртә, шундай кинәнеп көлдө, хатта күҙҙәренән суҡмарланып йәш бөртөктәре бытлыҡты. Быны күргәс, һалҡын ҡанлы Дәүәй ҙә түҙә алманы, аҡ тештәрен ялтыратып йылмайып ҡуйҙы. Ғәлимдең ҡолаҡтары уғата нығыраҡ ҡыҙарҙы.

— Мин улай тип әйтмәгәйнем дә... — тине ул, баҫҡан урынында тапанып.

— Шулай, ҡустым, хеҙмәткә һин улай , яңылыш ҡарама. Беҙҙең илдә ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бер үк почетлы бурысты атҡара — коммунизм төҙөй. һәм партия уларҙың һәр береһен, көсөнә, һәләтенә ҡарап, ҡулдарынан килерлек эшкә тәғәйенләй. Әгәр хәҙер һине физик эштән алып аң эшенә ҡуялар икән, быныңбер ҙә ғәрлегт еҡ, тимәк, һин шул эштә колхозға күберәк файҙа килтерәсәкһең. — Парторг быны көлөүенән уңалып, етди ҡиәфәттә әйтте.

“Әллә риза булайыммы икән? Ғиззәттең насар эшләүенә мин ғәйеплеме ни! Уны барыбер алмаштырасаҡтар — өс бала атаһы тип ҡарап тормаҫтар”. Ә шулай ҙа төп шиген әйтмәне бит әле. Парторг үҙе керешкән икән, етди һөйләшәләрҙер.

— һеҙ әйткән ул эшкә үҙен тәҡдим итеп йөрөүсе бар бит...

— Кем ул?

— Кәзәтәкәне әйтәм.

— Кем?! — Парторгтың Ғәлимгә төбәлгән аптыраулы күҙҙәре күҙлек быялаларынан ҙурайып, түңәрәкләнеп күренде — был ҡушаматты тәүгә ишетә, күрәһең. Сөнки Рәүеф Әхмәт улы Бикмырҙин был ауылға быйыл ғына ситтән ебәрелгән уҡытыусы булып, бер юлы колхоздың парторгы ла итеп һайлағайнылар үҙен.

— Рәүеф Әхметыч, Сәләмғолдо атай ул, — тип аңлатты Насрый.

— Ә?! Ә ниңә “Кәзәтәкә”?

Тыңлап ултырыусыларҙың парторгтан башҡалары бөтәһе хахылдап көлдө.

— Ҡушаматы ул уның. Йәғни исеменән алда йөрөгән ләҡәбе, — тине Дәүәй. Артына боролоп, Ғәлимгә текләп ҡарап, баш сайҡаны: — Атамаҫка кәрәк ине... яман исем тағаһың...

— Бәй, минме ни? Бөтә ауыл әйтә бит... — тине Ғәлим. Парторг һүҙҙе бүлдерҙе:

— Бынығы икенсе мәсьәлә. Ә һин, ҡустым, Дәүәй ағайыңдың тәкдимен уйла яҡшылап. Сәләмғол өсөн борсолма — советтар системаһындағы вазифа көтә уны.

Егетте был шаҡтай хәүефкә һалды. Сөнки ауыл Советы рәйесе Хөсәйен ағай бер мәл уны саҡыртып алып: "Секретарым эштән китте, урынына кеше кәрәк. Әгәр ҙә һинең кандидатураңа туҡталһаҡ... нисек уйлайһың?" — тигәйне һәм, ыңғай яуап алғас, яҙыу-һыҙыу маһирлығыңды күрһәт, тип, юғарынан төшкән оҙон ғына бер ҡараҙың тексын дәфтәргә күсереп килтерергә биргәйне. Ғәлим уны төн ултырып яҙҙы ла илтеп тә бирҙе, шунан биреле һағайып көтөп йөрөй...

Түрәләрҙең һүҙ ағышының ҡайһы яҡҡа боролорон самалап ултырған Насрый, бер Ғәлимгә, бер парторгка ҡарап алды ла, ҡиәфәттәре буйынса кәрәкле һығымтаны яһап, буғай, үҙенең шешәләше ғиззәтте насар һүҙҙәр менән һүгергә тотондо. Уның раҫлауынса, хәҙерге хисапсы ялҡау ҙа, миңрәү ҙә, енәйәтсе лә, тик фәҡәт , яңынан ҡуйыласаҡ Ғәлим генә көллө сифаттары менән вазифаға тап килә. Имеш, Насрыйҙар күптән үк инде ғиззәтте "буҡлы сыбыҡ менән ҡыуаларға", ә Ғәлимде уның урынына "ултыртырға" йыйынып бөткәндәр, тик бригадирҙан алға сығып һүҙ башларға ғына ҡыймағандар... Трактористың был ҡәҙәре тырышып ялағайланыуы Ғәлимгә оҡшаманы. Ул, күңеле болғанғандағылай сырай һытып, ситкә боролдо. Икеле мәғәнәлә белдерҙе түрәләргә:

— Уйлап ҡарайым әле, ағайҙар. Өҙөп кенә вәғәҙә итмәйем — ата-бабам эшләп кинәнгән эш түгел.

Насрый, "лып!" итеп, таҙартып ятҡан головкаһы өҫтөнә ултырҙы ла, ергә "лыст!" төкөрөп, алыҫта алпаң-тилпәң атлап яҡынлап килеүсе яңғыҙ әҙәм фигураһына төбәне күҙҙәрен. Уны сырамытып алғас, ут уртаһына ултыртылған саяндай, сыҙамһыҙланып тегеләй-былай борғоланды.

— Ғиззәтте мин яманламайым. Ғиззәт тә яҡшы кеше... — тип һөйләнде ул, күҙ ҡарашын бүтәндәрҙекенә киҫештермәҫ өсөн, аяғы аҫтына ҡарап.

Килеүсе әҙәм ғиззәт ине. Әммә бында һуғылмай, бригаданың яғыулыҡ һаҡлау цистерналары һерәйеп ултырған яҡҡа боролдо. Парторг менән Насрый ҙа үҙ йомоштарына олаҡҡас, Дәүәй, трактор майына ҡарайған тупыс бармағы менән ымлап, Ғәлимде яҡыныраҡ килтерҙе:

— Һин, ҡустым, "Кәзәтәкә"не хәйерһеҙ сәғәттә ыскындырҙың. Түрә кешене ярамай улай хурларға.

— Бәй, ул да булдымы түрә?

— Булды шул. Парторг юҡты тумбыта, тиһеңме әллә? Урындағы Совет власының алтын тотҡаһы — ауыл Советы секретары ул хәҙер.

Башына шаулатып һыуыҡ һыу ҡойҙолармы ни:

— Ҡайҙан алып әйтәһең?

— Хөсәйендең үзенән ишеттем. Ул, һынамаҡҡа, Сәләмғолдан да, башҡаларҙан да текстар яҙҙыртып алған. Почерктарҙың иң шәбе — Сәлемғолдоҡо икән. — Күҙҙәрен мут сөкөрәйтеп, һынағандай итте егетте. — Ә һинеке, ҡустым, тәпәндәге он өҫтөнән тараҡан юлаҡлағандай, кәкес-бөкөс имеш...

— Шулай шул... — тине егет. Ысын һүҙгә ни үпкә?..

— Танауыңды төшөрмә, ҡустым, беҙгә ярай ул һинең яҙыу. Иң мөһиме, эсеңдә йәнең булһын да иҫәпте теүәл апар.

II

Йылы апрель Ҡояшы, йомшаҡ, ялбыр йәпле телен ергә һуҙып, соҡорҙарға, ағас төптәренә боҫоп ҡалған һуңғы ҡар яҫтыҡтарын ялай. Тау үҙәктәренән аҙаҡҡы йырғанаҡтар аға, яҙ башындағы кеүек мул һыулы, көслө түгел улар хәҙер. Оҙаҡ илап арыған баланың күҙ йәштәренә оҡшап, көскә генә ҡар аҫтынан селтерәп сығалар ҙа, яҡындағы шишмә ярына ла барып етешә алмай, ҡуйы бүтәгә араһына һеңәләр. Йығылып кейеҙләнеп ятҡан ярым серек иҫкене тош-тош урындан йәшел энәләр көр тишеп, ҡыяҡтары менән Ҡояш йәптәренә аҫылынып үрләй. Тос нурҙарҙы йотлоғоп-йотлоғоп эсәләр, йәшәү рәхәтен мул татып кинәнәләр. Бер-нисә айҙан дала иңенә Каспий диңгеҙенең ҡыуан һулышы бөркөлөрөн, был нурҙарҙың ҡотолғоһоҙ көйҙөрткөс утҡа әүерелерен белмәйҙер әле улар...

Дала күкрәгенә тәрән бураҙналар ярып тракторҙар үкерә. Береһе сиҙәм күтәрә, икенселәре былтыр туңға һөргән ерҙәрҙе тырмата — һәр тәңгәлдә эш ҡайнай. Ғәлим, трактор бригадаһының хисапсыһы, һары таңдан алып ҡара кискәсә ер үлсәү менән мәшғүл, шунда ла эш артынан өлгөрөп етмәй. Өйгә бик һуңлап ҡайта. Батҡаҡлы итектәрен һыпырып ташлап, арылы-бireле генә ҡапҡылап ала ла, һикегә ауа тиҙерәк. Төнө буйы аяҡтары һыҙлай, сажин таяғының тотҡаһы уйған ус төптәре әсетә. Иртүк тороп тағы тракторҙар янына барырға, бактарындағы яғыулыҡты, эшкәртелгән ерҙәрҙе үлсәргә кәрәк. Ә төн шундай ҡыҫҡа, шундай ҡыҫҡа...

Колхоздың ер биләмәләре гелән таулыҡ булғанлыҡтан, иген баҫыуҙары шул тау араларындағы үҙәндәрҙә ҡыҫылышып яталар. Шуға күрә тракторҙар тырым-тыраҡай таралған. Бөтәһен йөрөп әйләнеп сығыу өсөн, иң кәмендә утыҙ саҡрым ара үтергә кәрәк. Ғәлим уны тура килгәндә — ылауға эләгеп, тура килмәгәндә йәйәүләп уҙа. Эшкәртелгән ыҙандарҙы ғына түгел, өҫтәүенә баҫыуҙарҙың һәр береһен тулыһынса үлсәп сығырға тура килә. Сөнки былтырҙан туңға һөрөп ҡалдырылған майҙандарҙың ҡайһыныһы нисә гектар тәшкил итеүе мәғлүм түгел — Ғиззәт ағаһы уға эшен туғарғанда бының хаҡында бер мәғлүмәт тә бирмәне. Бөтәһен үҙ аяҡтарың менән йөрөп, ҡулың менән сажин таяғын атлатып үлсәргә кәрәк.

Ғәлим, оҙон ыҙан буйын сажинлап сыҡты ла, маңлай тирен һөртөп, кәҫ өҫтөнә ултырҙы. Насар тойғо борсоно күңелен. Хафаланып, ҡуйын дәфтәре биттәрен аҡтарҙы. Туңға һөргән баҫыуҙарҙың аҙаҡҡыһы үлсәнде инде, әммә уларҙың дөйөм майҙаны идаранан алынған мәғлүмәттәргә тап килмәй. Былтырғы

хисап-сводкалар буйынса, ул өс мең дә ике йөҙ гектар тәшкил итергә тейеш икән, ә хәҙерен теүәл өс мең генә сығып тора. Етешмәгән ике йөҙ гектар ҡайҙа? Әллә онотолоп үлсәнмәй ҡалған майҙандар бармы?..

Ғәлим колхоздағы бөтә ҡыйыҡ-ҡыйпысаҡ баҫыуҙарҙың береһен-бер ҡалдырмай, күңел ебенән үткәреп сыҡты. Юҡ, үлсәнмәй ҡалған ерҙәр булырға тейеш түгел. Бәлки, иҫәпләүҙә , яңылышҡандыр? Шикләнеүҙәренә түҙә алмай, орсоҡтай ырғып торҙо. Тәүге тура килгән баҫыуҙы, ҡыҙыу-ҡыҙыу, , яңынан үлсәй башланы. Шундай ҙа тулҡынланды — маңлайынан, танауы һыртынан бөрсөк-бөрсөк бүртеп тир сыҡты. Үҙ-үҙен тикшереү ине был. Тик ҡуйын дәфтәрендәге кисә үлсәгәндән һуң яһаған ер һыҙмаһын , яңы ғына үлсәп алынған күрһәткестәр менән сағыштырғас ҡына, тынысланып хәл йыйыҙы. Бүтән майҙандарҙы тикшереп ҡарау ҙа уның тәүге үлсәүҙәрен дөрөҫләнеләр. Был хәл егетте шатландырҙы ла, хәүефләндерҙе лә.

...Ғиззәт ағаһының өйө ауыл осонда ине. Былтыр ғына күсереп һалыныуға ҡарамаҫтан, түбәһенең асамайҙары ҡыйшайып, ҡыйығы артҡа салҡайған, япҡан ҡамышы һүтелеп, ҙур-ҙур ҡара тишектәр өңөрәйгән. Соландағы беренсе аҙымында уҡ Ғәлим “тәкмәс атып” китә яҙҙы: иҙән, аҫтағы бер өрлөгө һыныу сәбәпле, воронкалай өңөлөп аҫҡа төшкәйне. Өй эсендә лә күренеш яҡшынан түгел: иҙән таҡталары, яҡындағы тимер юл станцияһының тәпәш барак йәки землянка ҡыйығын хәтерләтеп, урта өрлөк тәңгәле ҡалҡыуыраҡ, ә ике яҡҡа һөҙәгерәк түшәлгәйнеләр. Таҡта остары, әкиәттәге төндә яр ситенә баштарын сығарып йоҡлаған суртандар кеүек, урта өрлөк буйында кәшкәйешеп өҫкә ҡалҡып яталар; бармаҡ йыуанлыҡ ҡаҙау ҙа, болтлап тарттырған планка ла, бер нәмә лә батыра алмаған уларҙы. Өҫтәүенә, түшәм ярығынан Ғәлимдең башына шыбырҙап туҙан ҡойолдо... Абайламай аяғыңды ярыҡҡа ҡыҫтыртып һөрлөгөү йәки тәгәрәп танауыңды емереү кеүек ҡурҡыныҫты аҙым һайын көтөргә була бында. Сөнки иҙәнде ғиззәт, урыҫтар әйтмешләй, “косой” (йәғни араҡы эсеп күҙе ҡылыйланған) сағында түшәгән, шуға күрә үлсәүҙәре ошолай ҡыяраҡ, “косойыраҡ” килеп сыҡҡан, тип мәҙәкләйҙәр уҫал телдәр. Ғиззәттәр ғаиләһендәге үҙ-ара мөнәсәбәт тә ошо иҙән таҡталарына оҡшап ҡыйыш-мыйыш төҙөлгәйне; тормош күркен унда әленән-әле ләүкеп торған талаш-ҡысҡырыш, үҙ-ара мәсхәрәләшеү боҙа. Шуға күрә Ғәлим бында һирәк килә, килгәне һайын ағаһының балта оҫталыҡ сәнғәте тыуҙырған йорттоң әле бындай, әле тегендәй хилафлыҡтарға дусар булғанын күрә. Ә был юлы уны әллә ни ҙур үҙгәреш көтмәне: ни бары аш өйөнөң түшәм өрлөгө һығылған да мейес ҡаҙнаһының бер мөйөшө иҙән аҫтына умырылыу ҡурҡынысы аҫтында... Карауатта йыйыштырылмаған урын өҫтөндә баш тарап ултырған ташбыҡ күҙ Еңгәһе Хөмәйрә уны күреү менән сәсен туҙғытып торҙо ла:

— Ана, күр безталкауай ағаңдың эшен. Мине өс балам менән ҡуша бүрәнәнән баҫтыртып үлтерә инде ул, тфү! — тип түшәм өрлөгөнә төкөрҙө. Төпкө бүлмәнән Ғиззәттең ҡыҙып һүгенеүе ишетелде. Ғәлим, еңгәһенең сәрелдәүенә ҡолаҡ һалмаҫҡа тырышып, тиҙерәк төпкә үтте.

— Сәләм! Бүрәнәләр баҫылып етмәйме ни әле? — тине, тыуып килгән ғауғаны уйынға һабыштырып. Тарағын услап тотҡан хәлдә Хөмәйрә эйәреп инде.

— Һи нишана, ҡулыңдан буҡлы йүкә лә килмәй, үҙең һаман һүгенеп маташаһың! — тине иренә. — Кеше һымаҡ эшкә аштырып эш эшләгәнең бармы ни һинең? Яһаған бер әйберең өс көнгә лә сыҙамай ҡыйралып төшә. Шул өрлөктө йыуанираҡтан ҡуйырға була ине бит һиңә!

— Һи... — тип һүгенеп алып китте ғиззәт. — Фәләнсә һин! Өрлөк әллә ныҒылмай тора тип беләһеңме? һинең кеүек ҡатҡан бил түгел бит ул! Таяу ултыртҡанмын бит, әллә таяуҙан үтеп ары китер тип беләһеңме? һин, ташбыҡ, минең эшемде тикшергәнсе, үҙеңдең мейесеңде ҡара, сүлмәктәреңиҙән ҡыстына тумарлап китмәгәйе. Ашарһың шунан әпсәңдекен...

— Һи дөмпөш!

— Ә һин һеңераяҡ!

— Салыш ауыҙ!

— Баҡа күҙ!

— Ҡыҙыл танау!

Күҙ йәштәрен йылғалай ағыҙып, Хөмәйрә ҡабат аш өйөнә сығып китте. Өҫтөнлөк алған ир, еңеүсегә хас ҡиәфәт менән диванға кирелеп ятты ла, тубыҡ өҫтөнә тубыҡ ҡуйып, ауыҙына төтәткес мөштөгөн ҡапты.

Һүҙ башлауы ҡыйын ине Ғәлимгә. Ағаһының өндәшеүен көттө ул. Уның эштән сығарылыуына үҙен ғәйепле тойҙо. Ләкин Ғиззәт әйләнеп тә ҡараманы, өндәшмәне лә. Бер нөктәгә төбәлгән килеш, боролдатып тәмәкеһен тарта бирҙе. Былай ятыуының аҙағы булмаҫтай ине.

— Бөгөн мин туңға һөргәнде үлсәп бөтөрҙөм... — Ғәлим артыҡ дауам итә алманы, ҡарлыҡты. Ғиззәт, башын ҡалҡытып:

— Шулаймы? — тине лә, әйткәнен шунда уҡ онотоп, йәнә уйҙарына сумды. Ахыры булманы, Ғәлим китергә йыйынды:

— Ярай, ҡайтырға ла ваҡыт...

Ғиззәт башын ҡалҡытты:

— Нишләп ултырмайһың? Ултыр.

— Беҙҙең туңға һөргән ерҙәр етешмәй бит әле... һинең былтырғы сводкаң буйынса, өс мең дә ике йөҙ гектар икән, ә минеңсә өс мең генә килеп сыға. Массивтарҙың майҙанын күрһәткән берәй карта-маҙар юҡмы һиндә?

— Өсөнсө йыл, эшләй башлағас, төҙөгәйнем мин ул ғәмәл дәфтәрен. Әллә ҡайҙа булған, таба алмайым.

— Хәтерҙән белмәйһеңме? Самалап ҡына булһа ла? — Ғәлим унан ниндәй ҙә мәғлүмәт йолҡорға тырышты. Ағаһы һаман киреһен аңлатып баш ҡаҡты. Шулай уҡ Ғәлимдең:

— Былайғас, ни эшләйбеҙ инде? — тигән ҡыйыуһыҙ һорауына ла, иҫе китмәҫтән:

— Белмәйем, — тип кенә яуапланы.

III

Йәшлек — йәшен уты, тиҙәр. Тимәк, ул, ваҡытында күҙ сағылтҡыс көслө нурҙар менән йәшнәп-күкрәп китә ла кинәт юҡҡа сыға. Шунан һин уны бер нисек тә кире ҡайтара алмайһың. Ҡартайған һайын, һин уны йышыраҡ хәтерләйһең, нығыраҡ һағынаһың. Сәстәрең ағара барған һайын, йәшлегеңдең заяға үтеүен тойоу көсәйә. Эшләнмәгән эштәр, әйтелмәй ҡалған һүҙҙәр һаны өҙлөкһөҙ арта ғына, тора-бара ул ауыр йөккә әүерелә лә һыҙлатып өйкәй йәнеңде. Бына шул саҡта йомарт тәбиғәт бүләк иткән эске байлыҡтарыңдың күбеһен үҙ ваҡытында донъя ҡаршыһына сығарып һалмай һәләк итеүеңде тойоуҙан тыуған үкенес һинең ғүмер көҙөңдәге аҙаҡҡы шатлыҡтарыңды ла ағылай...

Ә Ғәлим нисек аңлай был мәсьәләне? Егерме дүрт йәш уға. Йәшлегенең сәскә атҡан матур дәүерен тыуған иленән алыҫта, диңгеҙ тулҡындары шаулаған оchoҙ-ҡырыйһыҙ киңлектә Ватан сиген һаҡлап үткәрҙе. Хәрби флот тормошо үҙенең ҡаты ҡанундары менән йәшлек хистәренең сәскәгә бөрөләнеүен һуңлатты. Дүрт йыл буйына ул үҙен ил һағына ебәрелгән һәм теләһә ҡайһы минутта ҡанлы көрәшкә әҙер тороpға тейешле яугир итеп кенә тойҙо. Ә әҙәм балаһына тәбиғи булған барлыҡ татлы хыялдарҙы, йөрәгенең дәртле тибешен ул хәрби хеҙмәт һуңынаса бикләп ҡалдырҙы. Инде, тыныс тормошҡа ҡайтҡас, шул электән йыйналып килгән бөтә йәшлек хыялдарын бер юлы ҡәнәғәтләндерергә теләй. Өҙөлөп-өҙөлөп һөйгөһө килә уның. Ә мөхәббәт серҙәре бик ҡатмарлы, уға асҡыс табыуы ҡыйын икән. Ауылдағы ҡыҙҙарҙың береһе ла йөрәгенә һуҡмаҡ һала алғаны юҡ әле. Сөнки Ғәлим идеаль мөхәббәт хаҡында хыяллана. Ни өсөн тормош — роман, йәки кинофильмдәрҙәге кеүек тоташы менән күтәреңке, күңелле йыр түгел икән?.. Ғәлим, мөхәббәт серҙәрен хикәйәләүсе әҙәбиәт йәки сәнғәт әҫәрҙәрен уҡып, йәки тамаша ҡылып бөткәс, оҙаҡ ҡына һушын йыя алмай тулҡынланып, йөрәге һыҡтап йөрөй. һәр ваҡыт ул әҫәрҙәге иҫ китәргес гүзәл героиняға үлерҙәй ғашиҡ була һәм: “Их, ул егет урынында мин булһамсы, аңлар инем мин ул һылыуҙың мөхәббәтен, сәбәпһеҙҙән рәнйетмәҫ инем уны!” — тип үкенә. Тормоштан ул шундай уҡ идеаль ҡыҙҙы эҙләй, ләкин ул табылмай. Ысын тормош кинолағы кеүек ялтыр түгел шул, уның ҡараңғы мөйөштәре лә, кәкере һуҡмаҡтары ла бар, етерлек. Сөнки ҡайҙа ҡояш — шунда күләгә, ә күләгә юҡ ерҙә йә ҡояш юҡ та, йә күләгәһен төшөрөрлөк тормош юҡ. Тормош ул һис бер ваҡытта ла күләгәһеҙ булмай.

Ғәлим, уйланып, мал тояҡтары тапап туҡмаҡлаған көтөү юлынан тау арҡылы төшөп бара. Үҙе әтмәләп алған һүтеп-йыймалы сажин таяғын, мылтыҡ һымаҡ итеп, яуырын башына һалған. Егетебеҙ бошоңҡо, ауыр тойғолар борсой күңелен. Туңға һөргәндең шаҡтай кәм сығыуы хафалар өҫтәне уға. Түрәләре шикләнеп ҡарай башланы. Комиссия сығарып, һынамаҡҡа баҫыуҙарҙың ҡайһыларын , яңынан үлсәттеләр. Комиссия Ғәлимдең хаҡлығын раҫланы. Шау-шоу ҡупты; һөрмәгән-сәсмәгән ер өсөн ялған юл менән эш хаҡы, “янда ҡалдырылған” (экономияланған) яғылыҡ өсөн бүләк аҡса алған кешеләр үҙҙәрен аҡларға, баштарынан себен осорорға керештеләр. Бигерәк тә бригадир Дәүәй туҙынды, ошо күңелһеҙлектәрҙең бөтәһе өсөн Ғәлимде ғәйепләне. Трактористар: “Хисапсы , яңылыш үлсәй, беҙҙең эш хаҡыбыҙҙы ҡырҡа”, — тип мыжый башланылар. Дәүәй улар күҙе алдында битәрләне Ғәлимде:

— Һиңә ни етмәгән инде? Үҙ ғүмереңдә тракторға ултырып бер бураҙна һөргәнең юҡ, ә таҙа һыуҙы болғатаһың! — тип ғәйепләне. Уныһы ғына етмәгән, осраҡаны һайын уны туҡтатып:

— Бөтәһе нисә гектар туңға һөрөлгән ер бар әле беҙҙә? — тип һораусан булып китте. Ғәлим тәүҙә, түҙемле рәүештә:

— Өс мең гектар, — тип яуаплар ине.

— Ә МТС-тағы өлкән аграном уны, өс мең дә ике йөҙ гектар, ти ине... — Шулай ти ҙә Дәүәй, шикләнеп, Ғәлимдең күҙҙәренә оҙаҡ теклəп тора. "Һин алдайһың, һин , яңылыш үлсәйһең. Ике йөҙ гектар ерҙең башына еткәнһең. һине беҙ яратмайбыҙ", — ти уның күҙ ҡарашы.

— Ҡайҙа кем ни тигәне миңә ҡараңғы. Әммә-ләкин былтыр туңға һөрөлгәне ғәмәлдә өс мең гектар, — ти Ғәлим, тамағына ҡаты төйөр тығылып.

— Ни өсөн улай? — Дәүәй юрый аңламағанға һалыша, йәнә шикләнеп мызылдата күҙҙәрен.

— Сөнки күп массивтарҙың ситтәре һөрөлмәй ҡалған — трактористар хәрәмселәгән. Унан башҡа ла рыялар бар етерлек... — тип аңлата Ғәлим, нисек тә тыныс ҡалырға тырышып. Бындай диалогтар көн һайын, тип әйтерлек, ҡабатлана, был, аҡрынлап, хисапсының теңкәһенә тейә. Ул Дәүәй менән осрашыуҙан ҡаса, әйләнеп үтергә тырыша. Ниһайәт, бер көндө түҙеме бөтә: бригадирҙың урынһыҙға төпсөнөүҙәренә ҡаршы асыулы ябырыла: "Мин быға тиклем намыҫымды юйғаным юҡ. Әгәр ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ сығып үлсәгеҙ йәки урыныма бүтән кеше табып ҡуйығыҙ, бындай шикләнеүҙәр аҫтында мин эшләй алмайым!"

Ошо ваҡиғанан һуң, Дәүәй тоҙһоҙ һорауҙарын туҡтатты, өндәшмәй, түҙемһеҙләнеп күҙҙәре ҡыҙарған бүгәйҙәй, аҫтан ҡарап йөрөнө.

Шул турала уйланып бара Ғәлим. "Кешенең намыҫы эстән ни ҡәҙәре таҙа булһа ла, әгәр ул, тирә-яғындағы ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы ғәйәр көрәшеп, үҙенең хаҡлығын иҫбатламаһа, ул әҙәм, намыҫын юймай тороп та, намыҫһыҙ булып күренеүе мөмкин икән..." тигән фекер ярала...

Ғәлим көтөү һыулауына һуғыла; унда ҡара халат кейгән һауынсылар һыйыр һауа. Тау итәгендә уйнаған таң нурҙарында алюмин феләктәр көмөш төҫлө ағарып күренә.

— Һаумыһығыҙ! һауынығыҙ күп булһын! — тип иҫәнләшә егет. Ҡыҙҙар тиҙ генә сәс-күҙҙәрен ипләштереп, матурайып алалар.

— Ә һинең ыҙандарың оҙон булһын. Үлсәй-үлсәй һин ары, ура-ура комбайнер арыһын! — тип көлөшәләр. һөт үлсәп торған хисапсы Нәфисә генә өндәшмәй, һылыу йөҙө мәк сәскәһеләй ҡыҙарып, оялсан рәүештә башын түбән эйә.

— Йә, иҫәнмеһең, нәфис һылыу Нәфисә! — Яҡын уҡ килеп, айырым сәләмләй уны Ғәлим.

— Арыу әле, — ти Нәфисә, аҡрын ғына. Ғәлим уның менән оҙаҡ итеп үҙенең хафалары тураһында һөйләшкеһе килә. Нәфисә аңлар, уртаҡлашыр һәм йөрәге ауыр йөктән арынып, бер аҙ бушап ҡалыр кеүек. Ни өсөндөр, егет күңеле бөтә ҡыҙҙар араһынан ошо тыйнаҡ, тотанаҡлы Нәфисәне генә айырып күрә,

башҡаларға ҡарағанда ла күберәк уға әһәмиәт итә ине. Бәлки, уның менән осрашҡанда ҡыҙарынып оялғаны, оҙон керпекле күҙҙәрен түбән һәлендергәне өсөн шулайҙыр? Ул бер ваҡытта ла, бүтән ҡыҙҙар кеүек ҡылансыҡланып, уға шаян һүҙҙәр ташлағаны йәки үҙе башлап һүҙ ҡушҡаны юҡ. Ләкин егет күңеле үҙенең йәшерен төпкөлөндә ҡыҙҙың серле күҙ ҡарашын, яғымлы йылмайыуҙарын һаҡлай. “Бәлки, шулдыр минең һағынып эҙләгәнем?” тип тә ҡуя ҡай саҡта. Ләкин кино экранындағы ҡыҙҙар: “Юҡ, ул түгел. Ул — беҙҙең кеүек булырға тейеш. Ул — беҙ, беҙ!” — тип ситкә тарталар егет күңелен.

— Бәй, нишләп икегеҙ тиң түфлиҙәрегеҙҙең моронона текләп тораһығыҙ? Әллә шунда телевизор ҡуйғандармы? — тип ҡысҡыра уларға бер апай. Кинәнеп көлөүенән икеһе тиң һиҫкәнә.

— Йоҡлап йөрөмә, егет. Ҡоштоң ҡанаты бәйһеҙ — осоп китеүе мөмкин! — тип бармаҡ янай тегеһе. Ғәлим иһә уңайһыҙланып йылмая. һауынсы шопторҙатып һөтөн үлсәгескә ауҙара ла, икеһенә хәйләле күҙ ҡыҫып, һыйырҙары араһына инеп Юғала.

— Нәфисә, минең һиңә әйтәһе бер һүҙем бар, — ти Ғәлим, йөрәгенең дөпөлдәп һуғыуын тойоп.

— Китсе, ниндәй һүҙ ул? — тип ҡыҙарына Нәфисә, үҙе яҡыныраҡ килә.

— Нәфисә, мин... мин...

— Әйт инде, әйт! — тип ҡыйыуландырта һөтөн бушатырға килгән икенсе апай. Ғәлим уның һиҙенеүенән ҡойолоп төшә:

— Нәфисә... һыйырҙарҙың һөтө артамы?

һауынсы шарҡылдап көлә. Нәфисә ситкә тартыла, күҙҙәрен йәш томалай. Ҡапыл һыуыҡҡа бәрелгәндәй бойоғоп, кенәгәһенең биттәрен аҡтарына.

— Арта... әгәр ашатһаң... — ти ҡыҙый, илай яҙып, һәм егеткә арҡаһы менән борола. Ғәлим, ни әйтергә лә белмәй, телен йотҡандай ҡала; сажин таяғын яурын башына һала ла, юлды-ниҙе абайламай, бүтәгә “һаҡал”дарына эләгә-һөрлөгә, тракторҙары ғөрләгән тарафҡа тура тарта.

Егет булһа, мут булһын,
Ике күҙе ут булһын.
Ике күҙе ут булмаһа,
Бар булғансы, юҡ булһын! —

тип шаян йыр оҙата арттан.

“Юҡ, былай булмай! Беребеҙ оялһа, икенсебеҙ ҡыйыу булырға тейеш!” — тип өмөтһөҙләнеп уйлай ул. Йөрәге, бензинға манып яндырылған факелдай, әсетеп-әсетеп әрней. Эйе, киноэкрандарҙағы ут сәсрәтеп һөйәкәй ҡыйыу ҡыҙҙар юҡ бында...

IV

Таныш булмаған был ауыл Ғәлимәне көр әтәс һөрәндәре менән ҡаршыланы. Иң остағы береһенең ауазы әсе-нескәлеге һәм һуҙыңҡылығы яғынан дөйөм хорҙан айырылып, көйгә сағыу Яңғыраш биреп тора. Был матур тауышлының йырын көтөп алғас ҡына, бүтән әтәстәр ҙә дәртләнеп ҡушылыуына иғтибар итте ҡыҙ. “Солист!” тип уйланы ул, йылмайып.

Әрәмәлекте уратып үткән типһәндә, юл ситендә генә, ултырғыс кеүек шыма итеп бысылған төп һерәйеп тора. Ғәлимә, сумаҙанын ергә ҡуйып, шул бүкәнгә йәпләнде. Моғайын, әллә нисә тиҫтә йылдар буйына үҙенең сәтләүеккә оҡшаш тос орлоҡтарын әрәмәлектең бөтә мөйөштәренә таратып ултырған, йәйге эҫеләрҙә юлаусыларҙы еләҫ күләгәһендә ҡунаҡ иткән, ә һыуыҡ ҡыштарҙа ауылды көслө бурандарҙан ышыҡлаған мыҡты, бейек, мөһәбәт имән булған был. Ғәлимә уның ғүмере буйыл ғына киҫелгәнен аңланы, сөнки бысындыҡ түтәһе тамырҙарҙан тирткән — ябалдаш өсөн тәғәйенләнгән татлы һутҡа сыланып илай ине. Юлсы түҙемһеҙ өмөт менән күҙ йөрөттө юҡҡа сыҡҡан имәндең тирәһенә. Тәбиғәт ҡанундары буйынса, мәрхүм ҡарт имән арымай-талмай үҙ тоҡомон таратҡанлығын — күҙ күреме ерҙә ҡуйы йәш имән туйралары үҫеп ултырыуын күрҙе ул. Әммә элекке баһадирҙың ошо сабый балалары ла күбеһе әжәл кисергән — балта туйынан тороп ҡалған, һерәйеүҙәре ҡәбер ҡаҙыҡтарын хәтерләткән үле төптәр бихисап. Кәйефе ҡырылып, сумаҙанына тотондо, әрәмәлек яғына әйләнеп ҡарамай, юлын дауамланы.

Әтәстәр инде йырҙарын туҡтаттылар, көнсығыштағы оҙон ҡырлалар ситендә аҡһылланып ойоған офоҡ һыҙығына шыйыҡ ҡына алһыу буяу таралды. Ул торғаны һайын ҡуйырҙы, алһыу төҫ ҡыҙылға әүерелә барҙы. Өйҙәрҙең һалам түбәләренән саҡ ҡына ослайып сыҡҡан мөрйәләр көллөһө бер юлы, тип әйтерлек, кинәт кенә оҙонайҙылар, үргә һуҙылдылар. Улар туҡтауһыҙ һаман-һаман күккә үрләнеләр ҙә, ниһайәт, ауыл өҫтөндә аҙашып йөрөгән бер аҡ болот киҫәгенә етеп тоташтылар. һәм ул болот, баяғы өй ҡыйыҡтарына шул төтөн арҡандары менән бәйләп ҡуйылған ҡалын яҫтыҡҡа оҡшап, бер урында хәрәкәтһеҙ ойоно.

Ғәлимә урамға ингәндә, ил аяғы һил — бер кемдең дә йөрөгәне күренмәй. Сәйерһенеберәк, ике янда ла әллә ниндәй яғымлы безелдәүме, әллә гөбөрҙәүме ишетте елсы. Иң ҡыҙығы — был хикмәтле ауаздың, ул күпме атлаһа ла, һаман ҡалмай эйәреп, хатта алғараҡ та уҙып, оҙатып барыуында ине. Ахырҙа ул, ҡала ҡыҙы, сәмен тыя алманы, урам уртаһында килеш, туҡталып ҡолаҡ һалды. “һәүкәш, һәүкәш!” — тип иркәләп ашыҡтырған ҡатын-ҡыҙ тауышы салынды һәм шул үҙен “һәүкәш”ләттерткән оҙон мөгөҙлө ҡашҡа апаҡай, маңлайын ялтыратып, ҡойма аша яҫы ҡарама япраҡтарына үрелеп маташҡан йөнтәҫ кәүҙәле бура һыйыр булып сыҡты. Көтөүсенең ауыл осонда сыбыртҡы шартлатыуынан тертләп, бер-нисә япраҡты ашығыс ялмап алды ла, кесе ҡапҡаға лырҡыш яндары менән ҡыҫылып, урамға йәһәтләне.

— Һәш, Ҡашҡаһыйыр, һәш! һөттө кү-үп алып ҡайт! — тип арбаулап, малҡайын йөнтәҫ арҡаһынан һөйҙө бисәкәй. Шунда ғына урамдың ике яғындағы серле гөбөрҙәүҙең нимә икәненә төшөндө ҡыҙ һәм шул ябай нәмәне лә башына килтерә алмауына аптырап, көлөп ебәрҙе. Был көлөү, таңғы саф һауа арҡылы, саф көмөш кеүек сыңлап таралды алыҫҡа. Бисә, ғәжәпләнеп, уға ҡарап тора башланы;

һыйыр, боролоп, беләктәй оҙон теле менән ҡабырғаһын яланы ла, ялҡау ғына аҙымлап, һырт яҡҡа ыңғайланы. Мал ҡыуып бүтән ҡапҡаларҙан да кешеләр сыҡҡаны күренде, улары ла, ҡыҙыҡһынып, Ғәлимәне күҙләнеләр. Ҡыҙ иһә уңайһыҙланып яулығын төҙәтте, илдең күҙ ҡараштары киҫешкән был хәтәр нөктәнән тиҙерәк тайырға ашыҡты.

Урам оҙон ине, уның Ғәлимә алдында һуҙылған өлөшө ҡыҫҡара барған һайын, тегендә-бында һертәңдәүселәр йышайҙы. Офоҡ өҫтөндәге ҡыҙыллыҡтың шәүләһе ағастар, өйҙәр, кешеләр өҫтөнә төшөп, бөтәһен утлы тимгелдәргә буяны. Өй алдарында ҡолас киргән ҡарт өйәңкеләр уянып, шат сыйырсыҡтар телендә йырлап ебәрҙеләр, ауыл һыртында, унарлаған бәләкәс алтын ҡыңғырауҙарҙы бер юлы ҡаҡҡан кеүек, өҙлөкһөҙ һәм оҙон һандуғас терелдәүе шаңғырҙы; әрәмәлек өҫтөнә, кинәт кенә меңәрләгән күмер киҫәктәрен сирғытып ебәргәндәй, сәүкә тубы күтәрелде лә донъялағы булған бөтә тауышты баҫырға тырышҡандай, ҡолаҡты ярып саңҡылдарға тотондо.

Ғәлимә, урамдың өстән бер өлөшөн үткәс кенә, үҙенә кәрәкле вывесканы тапты: “Дуҫлыҡ” колхозы идараһы”. Аҡ кирбес бина алдында энәнән-ептән сыҡҡан күкшелт брезент көймәле “газик” тора, суҡайыраҡ танаулы урыҫ егете — шофер, капотты ҡайырған да, һыҙғанған еңле беләктәрен төпкә тығып соҡсона. Ғәлимә уның менән иҫәнләште лә, тиҙерәген инерция буйынса: “Колхоз идараһы ошо буламы?” — тип белеште. Егеттең күкшелт күҙҙәре хәйләле йылтыранылар һәм ул, һис көтмәгәндә саф башҡортса өндәшеп, ишек башына ымлап күрһәтте:

— Нимә яҙылған һуң унда, матурҡай? Урыҫса яҙылғас ни, әллә үҙем тәржемәләп бирәйемме?

Ғәлимә яурын башын һикертте, егет киҫәтеүе әһәмиәткә эйә түгеллеген белдереп, ситкә боролдо. Урыҫ булһа ла, белеп тумбыта: Каруанһарайлы Ырымбур өлкәһенең башҡорт ауылдарында башҡортса вывеска ғына түгел, хатта гәзит-журналдар ҙа күрмәҫһең. һирәк-һаяҡ һаҡланып ҡалып, башҡортса уҡытҡан мәктәптәрҙә лә лозунгылар, стендтар, стена гәзиттәре урыҫ телендә яҙыла... Бейек күтәрмәле түфли үксәләре менән шаҡылдата баҫып, таш баҫҡыстан күтәрелде.

Тәүге бүлмә — оҙон ғына солан булып сыҡты; эскеләренең ишектәре һәм мейес ауыҙҙары ошо соланға сыға. Стеналарҙың һаңғырау өлөшөнә агитплакаттар, диограммалар һәм стена гәзите эленгән, һәр квадрат сантиметр майҙанды коммунистик сәйәсәт хаҡына файҙалы ҡулланырға тырышып эш итеү күренә. Быларҙың бөтәһен Ғәлимә кергән тышҡы ишектең ике яғынан уйылған ҙур тәҙрәләр яҡтырта, ә түшәмдән оҙон шнурҙа электр лампаһы төшкән һалынып. Ошо мәлдә соланды ишектәрҙең береһе артындағы асыулы ир-ат тауышы ярһыта: кемдер, ҡыҙып-ҡыҙып, кемделер ҡаты шелтәләй; әйтелгән һүҙҙәр йоҡа ишек үтә айырым-асыҡ ишетелә — стена гәзитенә бәйле “аполитичность”, “хвостицизм” тураһында һүҙ бара. “Кем икән был бөтә совет халҡы киң аҙымдар менән яҡты коммунизм иртәһенә дөргән осорҙа коммунистик политиканан ситкә янтайыусы, ябай халыҡтың алдынан башлап бармайынса, ҡойроғонда һөйрәлеүсе?” — тип, баяғы яңғырауыҡ терминдарҙы уйлап көлөмһөрәне ҡыҙ. Тамаҡ ҡырған тауыш бүлде уйҙарын. Мөнтәп ҡырҡылған сал

һаҡал-мыйыҡлы бер бабай мыштым кергән дә стена гәзитен ҡарай; ҡарттың һырған көпәйкә тышынан биле яҫы брезент бау (комбайн ҡайышы) менән быуылған, мехы ҡырылып йылтыраған кәпәсенең ҡолаҡтары үргә ҡайтарылып ҡуйылһа ла, бәйләнмәгәнлектән, кәзә ҡолаҡтарылай яртылаш һалынып төшкәндәр. Бабай, башын болғап-болғап, үҙ алдына “һем...һем...” тип өн сығарғылай, ҡайһы ваҡыт телен таңғайына һуғып цыҡылдатып ала, ә теге бүлмәләге әрләүсенең тауышы киҫкенерәк Яңғырай башлаһа, бәйҙә торған ярһыу аттай, сыҙаша алмай, бер урында тапанырға тотона. Дәғүә ҡаҙанына барып төшөүҙән тартынып, Ғәлимә туҡталып ҡалды. Тик былай тик тороу — ыҙғышты тыңлау һымаҡ ине; бабай эргәһенә яҡынлап, стена гәзитенә күҙ йүгертте. Ғәжәпләнеүенә ҡаршы, гәзиттең башын (исемен) таба алманы ул, баш урынына күҙҙең яуын алып ҡып-ҡыҙыл булып ялтырап торған борос һүрәте төшөрөлгәйне.

— Ишетәһеңме, ҡыҙым, “Борос” нисек әсеттерә түрәбеҙҙең сей урынын? — тип, йылмайып һүҙ ҡушты бабай һәм ғауғалы ишек яғына эйәге менән ымлап, күҙ ҡыҫты. Ғәлимә төшөнмәне. Ҡарт иһә: «ғүмерле ғүмәр бабай буламын!” — тип ҡуш ҡул биреп күреште лә:

— Бынауы “Борос” аҫтындағы рәсем хаҡында әйтәм, — тип, гәзиткә төртөп күрһәтте. — Ныу ибаҙҙарына бирә лә һуң был Ғәлим! Ҡара әле анауы кәпәйҡорһаҡ әзмәүерҙе. Үҙе иткән дә ҡуйған бит рәйесебеҙҙе! Нәҫәлниктәр, шуның гурыһына сыҙамай, ридакторҙы “мунса индереп” яталар ҙаһа, рәйестең бүлмәһендә...

Әһә, Ғәлим икән “аполитичность”, “хвостицизм” менән сирләүсенең исеме!

Ғәлимә гәзиттәге бабай әйткән “әзмәүер”гә күҙ һалды. Урмандай бейек әрем, киндер һәм башҡа сүп үләндәре араһында торбаһы ғына күренеп, ашлыҡ сәскестәре тағылған трактор эш ҡыра. Баҫыу ситендә китеп барған “газик”тан портфель тотҡан “кәпәйҡорһаҡ” ир һонола бирep: “Ниңә сәсеү агрегаты күренмәй?” — тип һорай шайтантаяҡ башындағы ҡарғанан. Түбәндә бәйет бирелгән:

Ҡарға әйтә: “Ҡар-ҡар,
Бында эштәр бар-бар.
Сөнки “Дуҫлыҡ” баҫыуында
Бер төптән тарта дуҫтар!”

Дуҫтар бойҙайҙы сәсәләр
Үлән араларына.
Культиватор ҙа кәрәкмәй
Әҙәм балаларына.

Баҫыуҙары арыҡтыр,
Ыҙан буйы ярыҡтыр.
Этесәгенә сырмалып,
Туҡтап тора трактор.

Етәкселәр, етәкселәр,
һеҙ — бөйөк агрономдар!
Исемдәрегеҙ сүп үлән
Үҫтереп данланырҙар!

Ғүмәр бабай һүрәттең был мөләйем ҡыҙға ла көслө тәьҫирен күреп ҡәнәғәтләнде.

— Оҡшанымы? Һе-һе-һе! Ғәлим — бик ҡыйыу егет ул. Матрос! Ҡурҡынытеп тормай, туп-тура яра ла һала. Тик саҡ ҡына ҡыҙыуыраҡ — шуныһы миктәтеп ҡуймағайы... — тине ғүмәр бабай. Ғәлимә, агрегатлы тракторҙы күмеп үҫкән сүп үләндәренән күҙҙәрен алмай, ғәмләнеп тора ине. Аграном булып килде лә ул, килеүен, әммә майлы бутҡа бешереп көтмәгәндәр икән шул. Үлән өҫтөнә сәстертеүселәрҙе еңергә кәрәк. Ә был эштә беренсе таянысым — ошо “аполитичный” матрос буласаҡ, әлбиттә, тип уйланы ла Ғәлимә, ғәжәп! — үҙен бер ҡасан да күрмәгән егеткә ғашиҡ та була яҙҙы...

— Кем ул Ғәлим?

— Яҡшы егет. Беҙҙең трактор бригадаһының хисапсыһы.

— Ә-ә-ә... — тине, аңлап, Ғәлимә һәм килеп етер-етмәҫе егет тураһында төпсөнөп тороуынан уңайһыҙланды. һүҙҙе бороу өсөн тағы һораны:

— Ғүмәр бабай, һеҙҙә ашлыҡты шулай үлән араһына сәсәләрме ни?

— Ерекмән һәр ерҙә лә бер инде ул, ҡыҙым. Күпереп бешкән икмәк ашағыһы килһә, күпереп ятҡан ҡараға сәсергә тырыша. һеҙ ни, ҡала кешеләре, моғайын, икмәк сүрәкләнеп магазиндың үҙендә өлгөрә, тип беләһегеҙҙер әле. Икмәк үҫтереү — уны ултырып ашау кеүек ябай эш түгел ул, ҡыҙым. һөнәрең буйынса кемһең үҙең?

— Иген үҫтерергә өйрәнеүсе, — тип йылмайҙы ҡыҙ.

— Бәрәкалла, бәрәкалла!

— Ә бынауы портфелле кешенең исеме кем?

— Кем, тип ни... әйтәм бит, үҙебеҙҙең самай ҙур түрә инде. Йәғни ҙә кем, колхозыбыҙҙың рәйесе Йәрмит уҙаман.

Ғәлимә, эсенән генә көлөмһөрәп, тәҙрә эргәһенә күсте, кеҫә көҙгөһөнә йәһәт ҡаранып, үҙен ипкә килтерҙе. Боролоп ауыҙ асырға ла өлгөрмәне, дәғүәле ишек шартлап асылды ла унан, ысынлап та, мунса эләүкәһенән төшкәндәй ҡыҙарып-бүртенгән урта буйлы, яҫы балаҡ матрос салбарлы бер егет атылып сыҡты. Тонған күҙҙәрен төбәп, тирә-яғына ҡаранды, эҙләгәнен таба алмай, ят ҡыҙ Ғәлимәгә төптө иғтибар ҙа итмәй, ахыры, дөбөр-шатор тышҡа олаҡты. Ғәлимәнең кәйефе ҡырылды: “Шул тиклем дә ямаҡмынмы — күҙенә лә салынманым...” Ихатала Ғүмәр бабайҙың мөңгөрҙәп егеттән һорашҡаны ишетелде.

— Ну шуны, сәнселеп китһен! Талпан кеүек ҡаҙалды ла ҡалды! — тип асыуланды тегеһе; Ғәлимә егеттең нисек ярһыулы ҡул һелтәүен, шәп атлап китеп барыуын күҙ алдына килтерҙе. Йөрәгенең ҡош кеүек осоноп-талпыныуын тыя алмайынса, ишекте шаҡылдатты. Рөхсәт тауышын ишеткәс тә, йәһәт үтеп инде. Бүлмә эсе балта аҫырлыҡ төтөн. Йомшаҡ ҡыҙыл буҫтау ябылған тос имән өҫтәл артында, берҙән-бер ҙур тәҙрәне арҡаһы менән ҡаплап, ишек яғына ҡарап

ултырған ыҡсым кәүҙәле, ҡалын эйәкле, 30-35 йәштәрҙәге ир кеше тороп ҡул бирҙе:

— Әһә, агроном! Шап-шаҡтай килеп еттегеҙме? Райондан хәбәр иттеләр, поезда йүнәлде, тип. Станцияға төшкәс, ниңә шылтыратманығыҙ, машина ебәрер инек. — Колхоз рәйесе Йәрмит ине был.

— Әлләсе... юлайҡан йөк машинаһы тура килгәс... Күпер төбөндә төшөрөп ҡалдырҙы.

— һем... Аяҡтарығыҙ ҙа беҙ үксәле генә икән — батып этләнмәнегеҙме? Кирза итектәр кейергә тура киләсәк...

— Уныһына башығыҙ ауыртмаһын.

Рәйестең һул яғында, өҫтәл башына терһәге менән таянып, тәбәнәк ҡаҡса кәүҙәле, күҙлекле берәү ултыра.

— Ултырығыҙ, ултырығыҙ. Сумаҙанығыҙҙы ҡуйығыҙ, ниңә баҫып тораһығыҙ? — тине ул.

— Рәхмәт, — тине Ғәлимә ҡоро итеп һәм, сумаҙанын ҡуйһа ла, аяғөҫтө ҡала бирҙе. Күҙлекле йәнә уға ҡараны:

— Бик шәп булды — беҙгә аграном һулар һауа, эсер һыу һымаҡ кәрәк! Парторг Рәүеф Бикмырҙин булам мин. — Күҙ ҡарашы аҡыллы, ышаныслы ине. Был иһә Ғәлимәнең күңелендә уға ҡарата яҡынлыҡ хисе уятты.

Йәшел китель кейгән лырҡыш кәүҙәле өсөнсө ир, күн көплө иҫке диванға ҡырын төшөбөрәк төпләнгән дә, ҡалын ирендәренә ҡыҫтырыулы йыуан тәмәкеһен торомбаш кеүек төтәтеп, түшәм аҫтындағы күк болотто ҡуйыртыу вазифаһын үтәй, буғай. Ғәлимә уның, машина майлы өҫ-башына ҡарап, трактор бригадаһы бригадиры икәнлеген шәйләне.

— Дәүәй ағай, күпме әйтергә була, бынауы һылыуыңдан оял, исмаһам! — тине уға парторг. — Боҙоҡ форсункалы тракторҙарың кеүек төтәтәһең!

— Виноват! — Йәшел кителле торомбашын һүндереп иҙәнгә ташланы ла, табаны менән иҙгәндән һуң, , яңыһын алып ҡапты. Күҙҙәрен ҡыҫып, Ғәлимәнең аяҡтарын һәрмәне:

— Һе! Беҙгә йылтыр түфлиҙәр бик кәрәкмәй. Портфель тотоп йөрөүселәр ҙә үҙебеҙҙә етерлек, — тине ул, һүҙҙәренең ҡиммәтен белгән ғырылдауыҡлы ҡәнәғәт тауыш менән. Ҡыҙҙың сикәләре алһыуланды, эстән дөргән ялҡынды көскә тыйып, тыныс булырға тырышып әйтте:

— Мин, ағай, йылтыр түфлиҙәр кейһәм дә, портфель мәсьәләһеңдә белгес түгелмен. Ләкин һеҙгә бер ниндәй ҙә портфелдең иш килмәҫе күренеп тора.

— Беҙ — ябай кешеләр, ярманы тура ярабыҙ...

Ғәлимә уға тағы ла әйтергә йыйынғайны ла, рәйес үҙе ара төштө:

— Һеҙ улай минең алтын ҡуллы бригадирыма үпкәләмәгеҙ. Шундай ҡыҙыҡ һүҙле кеше ул... — Ғәлимә биргән ҡағыҙға күҙ йүгертеп, һөйләнде. — Тимәк, ең һыҙғанып эшләргә, тип килдегеҙ? Ҡайҙа уҡынығыҙ?

— Ырымбур ауыл хужалығы институтында.

— һем. Ярай, ярай. Буйҙаҡһығыҙҙыр бит? — Ҡыҙ аптырабыраҡ ҡалғас, аңлатты. — Яңғыҙ башһығыҙмы, йәғни?

— Ә, эйе. Башым да күҙем, дипломым да үҙем, — тине йылмайып.

— Ярай. Сәлимә апай хәҙер үҙегеҙҙе фатирға урынлаштырыр. Бөгөнгә ял итегеҙ, тирә-яғығыҙҙы байҡаштырып, үҙләшегеҙ. Ә иртән иртүк — как штык баҫыуға! Сәсеү! Йоҡлап ятыр саҡ түгел! Сәлимә апай, быға һеҙгә бер иптәш, арыуыраҡ төйәк табышып бирегеҙ! — тип бойорҙо идара йыйыштырыусыһына. Ғәлимә шул апайға эйәреп сығып китте. Етәкселәр, аулаҡ ҡалғас, , яңы килгән белгес тураһындағы хистәрен уртаҡлаштылар.

— Йөҙө картиналай һылыу булһа ла, өлгөрөүе үтеп барған алма был. Кисә үк кейәүгә бирәһе булған үҙен... — тине Дәүәй. Әммә рәйес был йүнәлеште иғтибарға алманы:

— Бөгөн генә вуздан сыҡҡан тәжрибәһеҙ туташты ошондай ответственный колхозға ебәрәләр. Уның йөҙөнә ҡарап ултырырғамы ни беҙгә?

— Шыйыҡ күренә. һис науа сыҡмаҫ унан! — тип, башын сайҡап ҡушылды бригадир. Рәүеф Бикмырҙин, күҙлек быялаларын һөртөп, тиҙ-тиҙ генә уларҙың икеһенең дә күҙҙәренә ҡарап алды. Тыныс ҡына әйтте:

— Ниңә, берәү ҙә әсәнән үк бөтәһен белеп тыумай бит. Эшләй килә тәжрибәләнер, ҡуйырыр.

Тегеләр өндәшмәне.

V

Тракторист Насрый үҙенең шикле ҡылыҡтары менән тамам ҡаҡшатты Ғәлимдең сабырлығын. , яңы хисапсыға дуҫлыҡ һәм бирелгәнлек билдәләре күрһәтергә тырышып, шундай ҙа ялағайлана ки, хатта, ҡарттар әйтмешләй, Ғәлим кикергән генә һайын “ярхамикалла!” тип тороҙай. “Фәләп һине шулай тип әйтте, фәләп былай тип әйтте” тип, оялмай, үҙе менән бер үк ыҙанда һөргән иптәштәрен ошаҡлай, һүҙенең аҙағында:

— Һин, Ғәлим, мине үҙең ҡара инде, әй! — тип өҫтәкләй. Күбеһенсә, эсеп, ҡыҙмаса хәлдә йөрөй, бындай хәлендә күҙҙәре майланып йылтырай, үтенестәре талап һымаҡ яңғырай башлай. Ғәлим иһә өндәшмәй генә тыңлай, аҙағында, һүҙҙе оҙайтмаҫ өсөн:

— Шулайҙыр шул, шулайҙыр... — тип кенә өҙә ине. “Майға сумып сыҡҡан йылан” сағыштырыуы килде башына.

Бер көн шул Насрый арҡаһында тауыш ҡупты. Иртә менән, төнгө алмаштың эшен үлсәп йөрөгәндә, кисә Насрый һалған бураҙнаның бер метрға ла ырамағанын шәйләне Ғәлим. Нәфрәтләнеп килде ул ыҫтанға. Насрыйға алмашсы булып практикала йөрөгән йәш курсант Бакир тракторға май һала ине. Ғәлим Насрыйҙың ҡайҙалығын һораны.

— Белмәйем шул, ағай. Тракторҙы ҡарашырға ла килмәне.

Ауылға ҡайтҡас ҡына осратты уны. Сәстәрен туҙғытып, магазин тупһаһында тоҙло балыҡ ҡойроғо кимереп ултыра.

— О Ғәлим дуҫ, һинме был? Әйҙә, индек, Иван Иванычтан икешәр йөҙ грамды ҡойҙортоп, яға аҫтына сәлдереп сығайыҡ! — тип еңенән һөйрәне уны.

— Ниңә эшкә сыҡманың? — тине Ғәлим, асыуланып.

— Ҡуйсы әле, әй, бушҡа ваҡланма! Кисә эшләгәндең яртыһын бөгөнгә бүл дә яҙ. Етмәгәнен еткереп ҡуй. Иван Иванычҡа инәйек, тим бит!

— Юҡ инде, әшнә, мин һинең прогулыңды баҫырып ҡалмам. Ҡулың менән эшләгәнде иңең менән күтәрә бел! — Ҡырт боролоп, идараға йүнәлде. Насрый, өндәшмәй, тупһала ултырып ҡалды. Ғәлим тыҡрыҡҡа боролоп, магазин ишеге ситәнгә ҡапланғас та, артынан әшәке һүгенеү ишетелде.

Дәүәйҙе ул кис булғас ҡына осратты. Бригадирҙың ҡобараһы оҫкан, Ғәлимгә һөҙөп ҡарай, сәләмен дә теләкһеҙ, танау аҫтынан мыңғырҙап ҡабул итте. Өндәшмәй текләп тора-тора, Ғәлим китергә ҡуҙғалғас ҡына, ауыҙынан һүҙ сыҡты:

— Кисә Насрый күпме һөрҙө?

— Ете гектар.

— Ә норма буйынса күпме тейеш?

— Биш һикһән.

Дәүәй, өндәшмәй, хисапсыһының күҙҙәренә текләп тора башланы. Был хәл Ғәлимде сығырынан сығарҙы.

— Шулай булғас, ни өсөн һин бөгөн Насрыйға прогул яҙҙың? — тине Дәүәй.

— Прогул яһағаны өсөн.

— Ә ниңә шул кисәге ете гектарҙың яртыһын бөгөнгөгә бүлеп яҙманың?

— Сөнки улай итеп прогулсыларҙы баҫырып ҡалдырырға намыҫым ҡушмай.

— Ә бригаданы позорить итергә ҡушамы? — Дөрләп тоҡанды Дәүәй. — Ниңә өй эсенән сүп сығараһың? Иҫерек ғиззәт тә шәберәк булған икән һинән! Трактористар булһын, һабансылар булһын — өҫтөңдән жалыу бирәләр; сөнки ерҙәрҙе үлсәмәйһең, заправкаға йөрөмәйһең. Кешеләр менән ҡырыҫ һөйләшәһең. Бригадирҙы тыңламайһың. Ғиззәт заманында яғыулыҡҡа экономия булһа, бөгөн — сплошной перерасход. Былайһа, эшеңдән бушатырға тура килер һине!

— Ну что же, бушатығыҙ. Ялынып тормайым. Ләкин һеҙҙән үҙемә нахаҡ яла яҡтыртмам — төбө-тамырығыҙ менән фашлармын. Белеп ҡуйығыҙ шуны! Әгәр мин ерҙәрҙе үлсәмәһәм, ике йөҙ гектарығыҙ етмәй сыҡмаҫ ине.

— Һин уның менән козырать итмә. Билгеһеҙ әле кемдеке етмәгәне!

Шул ыҙғыштан һуң Дәүәй, уңайы тура килгән һайын, идараға барып, Ғәлимде ошаҡлап йөрөр булды. Уҫал ғәйбәт машинаһы хәрәкәткә килеп, аҫтыртын һәм ныҡышмалы рәүештә, Ғәлим өҫтөнә бысраҡ өйөпмө-өйә. Ошо уҡ машина уны, идараға саҡыртып, колхоз рәйесенән һүктертте, парторгты уға ҡырын күҙ менән ҡарарға мәжбүр итте. Ошаҡсылар ҡәнәғәтһеҙлектәрен хисапсының күҙе алдында әйтмәйҙәр, унан асыҡтан-асыҡ бер нәмә лә талап итмәйҙәр, фәҡәт Ғәйбәт ыраталар. Эш, әлбиттә, , яңылышһыҙ ҙа булмай. Өлгөрә алмау сәбәпле, Ғәлим ҡайһы саҡта кемдең дә булһа эш ыҙанын һуңлабыраҡ үлсәй һәм быны, йәшермәй, трактористың үҙенә үк белдерә; һуңлабыраҡ үлсәнһә лә, хеҙмәтенең юғалмағанлығын һәр кем белеп барһын, ти ул. Ләкин ошо бер ҡатлылығы үҙенә килтереп һуға, “ерҙәр үлсәнмәй” тигән ғәйбәтте көсәйтеберәк ебәрә...

Ғәлимде быйыл ғына партия ағзалығына кандидат итеп алғайнылар; шуға ла был ығы-зығыларҙы йөрәге менән кисерә. Тештәрен ҡыҫып, иртәнән алып кискәсә бушанмай эшенән. Йә йәйәүләп йүгерә, йә велосипедҡа атланып дөнә, йә һыбай юртаҡлай, ләкин эшләгәне күҙгә күренмәй. Йыш ҡына ул көрәк-һәнәк тотоп ябай эштә йөрөгән көндәрен һағына. Ул саҡта һиңә билдәле бер йөкләмә бирелә торғайны; тырышып шуны үтәйһең дә тыныс күңел менән рәхәтләнеп ял итәһең. Һинең эшеңде бүтәндәр эшенә бәйләп баһаламайҙар; маҡталыуыңды йәки хурланыуыңды, мускулдарыңдағы физик көс-ҡеүәтте егеп, үҙең хәл ҡылаһың. Һәм бер кем дә бәйләнә алмай һиңә, намыҫың теүәл булһа; етәкселәр һинең турала кемдеңдер тамаҡ ярыуы буйынса түгел, ә хеҙмәт тәбиләңә ҡарап һөҙөмтә сығаралар... Ҡайһы ваҡыт: “Мин әллә, ысынлап та, булдыҡһыҙмы икән?” тигән ауыр шөбһә ята егет күңеленә. Нисек тә был хәйерһеҙ эштән тиҙерәк ысҡынып, ошо уҡ вазифаны бүтән кеше нисек башҡарғанын, дорфа түрәләргә ҡайһылай яраған ситтән генә ҡарап йөрөү теләге уяна ине...

Бер көн трактористарҙың, өйкөмләнеп, ҡыр вагоны эргәһендә мыжғыуын күрҙе. Бөгөн иртән Ғәлим килтереп элгән “Боевой листок”ты (бәләкәй стена гәзитең) көлөшә-көлөшә уҡыйҙар. Эргәләренә килде.

— Ныу, Ғәлим дуҫ! Беҙҙең Насрый туғанды ҡайһылай итеп биҙәп ташлағанһың, әй! Ырымбурға күргәҙмәгә оҙатырлыҡ! Хәҙер бөтә ҡыҙҙар ғашиҡ булалар инде уға! — тип, егеттең бөйөрөнә төрттө ҡартайыуҙы белмәгән, шаянлығын ташламаған һыу ташыусы ғүмәр бабай.

— А как же. Насрый ағай — бригаданың йондоҙо! — тип ҡыҫтырҙы Насрыйҙың алмашсыһы тәбәнәк буйлы Бакир, егеттәрҙең ҡултыҡ аҫтынан оҙон муйынын һуҙып. Шул һүҙҙәре менән йәмәғәт алдында шөйлә уңыш ҡаҙанғанын тойоп, ҡыйыулана төштө. — Беләһегеҙ килһә, йондоҙҙоң нурлы “эш”тәрен бында яҙып бөтөрмәгәндәр әле. Киләһе һанға мин үҙем мәҡәлә бирәсәкмен! Мин...

— Шым, болван! — Вагон аҫтында хырылдап йоҡлап ятҡан еренән һуҡыр себендәй дөрөп сыҡҡан Насрый алмашсыһын, бесәй балаһылай елкәһенән бөрөп тотоп, үргә күтәрҙе. — Тәүҙә бынауы йоҙроҡто еҫкәп ҡара, көсөк, шунан мәҡәлә яҙырһың!

Бакир шулай ҙа әзмәүер ҡулынан ысҡынып, ситтәрәк оҙон һаплы сүмес менән ҡаҙан һапырып торған ашнаҡсы Зөбәйҙә апай ҡанаты аҫтына тайҙы, артынан, ажғырып, Насрый ташланды. Әммә Зөбәйҙә апай, йыуан беләктәрен ике яҡҡа йәйеп, баһадир кәүҙәһе артына Бакирҙы ышыҡланы:

— Кит, шеш танау, күҙемә күренмә! — тине күҙҙәре аларған Насрыйға. — Юҡһа бынауы сүместәге бутҡа менән һылармын танауыңды. Һи эскесе мәхлүҡ!

— Эсһә, һинекен эсмәгән — үҙемдекен! — тип ажарланып ҡараһа ла, Насрый артҡа сигенергә мәжбүр булғас, Бакир ҙа батырланды:

— Тағы боҙоҡбашланып килгәнһең! Бөгөндән башлап мин һиңә алмашсы булмайым! — Бакир вагонға инергә шәйләгәйне, Насрый, аяғы менән юлын быуып, тракторға ҡыуаланы үҫмерҙе:

— Ярай-ярай, күп һөйләнмә. Бар, һабандарыңды майла. ЮҒиһә, үтә күп белеп китәһең. Йоморткa тауыҡҡа өйрәтергә иртәрәк әле! — Шулай йәнен тындырғас, тамашасылар араһынан йырып инеп, стена гәзитен шатырҙатып

йыртты. — Художник!.. — Ирендәрен йәмшәйтеп һүгенә-һүгенә, гәзит йыртығын Ғәлимдең битенә бәрҙе лә Бакир артынан туйтаңданы.

— Һи свинйә, әгәр күҙеңде тондороп күбенеп алғанһың икән — свинйә көйөнсә хорхолдап ята бир инең. Ул ҡағыҙҙа ни үсең бар? — тип әрләп ҡалды Зөбәйҙә апай. Шул арала Насрый тоҡандырған пускачтың — трактор дизелен тоҡандыртыусы кесе моторҙың —зәһәр дырылдауы баҫты шау-шоуҙы.

— Бөгөн дә Насрыйҙың градусы юғары. Юғары рекорд бирергә китте, — тине аранан берәү, ҡара төтөн борҡотоп барған трактор артынан күҙәтеп.

— А как же. Күҙ буярға кәрәк тә инде. Ул, моғайын, бөгөн тағы ике норма бирер әле, шунан һуң ике көн эшкә сыҡмай типтерер.

— Гектар һаны бармы — бар, ә сифатында эшт еҡ.

— Беҙҙең түрәләргә бары гектар күберәк булһын...

— Барыбыҙға ла намыҫ кәрәк шул бында! — тине Ғәлим.

— Көллө көтөүҙе бер сыскаҡ һыйыр буяған, тигән һүҙ ошолор инде... — тип ҡушылды ғүмәр бабай. — Бындайҙарҙың биргән эреҡорто[74] кире ҡорт булып ҡайта колхозға. Ярып һөрәһегеҙ, балалар, ярып һөрәһегеҙ... Борон беҙ ат һабаны менән дә иген үҫтерә инек. Былайһа, икмәк ашатмайһығыҙ икән һеҙ, мырҙалар... Их, ошоғаса агроном булмауы ҡырын һуҡты, түрәләрҙең һуҡырлығы тейҙе теңкәгә!

Эйе, агроном булһа, эштәр бүтәнсәрәк барыр ине шул, тип уйлана Ғәлим. Ул, исмаһам, алмаш һайын, эшкәртелгән ерҙең сифатын тикшерер ине, трактористар, әлегеләй, һан артынан ҡыуып брак яһамаҫтар ине. Бер ниндәй сифат контролт еҡ. Рәйес менән парторг килеп ҡарап китәләр ҙә ул, ләкин бынан ни файҙа? һөнәрҙәре буйынса икеһе лә мәктәп уҡытыусылары — Ғүмәр бабай тиклем дә белмәйҙәр ерекмәнлекте. Белгестәр булмағас, бөтә етешһеҙлектәр ҙә сағылып бөтә аламы ни улар күҙенә! — Шулай көйөндө Ғәлим, , яңы ғына һөрөлгән ыҙанды буйлап. Эйелеп, дымлы тупраҡты йомарлап ҡараны усында. Ул хәҙер, сәсеүгә төшкән тәүге көндәрҙәге кеүек, бер бөтөнгә уҡмашмай ҡойолоп төшә — кибеп тотанаҡһыҙланған. Эйе, үтеп бара шул ваҡыт. Орлоҡто был ҡоро ергә күмеү менән дә ни ала алырбыҙ икән? — Уйлана ла уйлана Ғәлим, көйөнөп. Туңға һөрөү планы былтыр тултырып үтәлгән булһа, яҙғы сәсеү иртә тамамланыр, дым да һаҡланыр ине. Хәйер, быныһына Ғәлим үҙе «ғәйепле”: туңға һөргән ерҙәрҙе ул үҙе кәм сығарҙы бит! Әгәр шулай итмәһә, бөтәһе үҙ урынында ал да гөл көйөнсә ҡалыр, бригадаға баяғы етмәгән ике йөҙ гектарҙы тултырыу өсөн яҙғы ер һөрөү мәшәҡәте өҫтәлмәҫ ине. Дәүәй аҙым һайын уға шул турала туҡый бит. Бөтә бригада хисапсыға ҡырын ҡарай. Фәҡәт уның арҡаһында күпме кеше еңел “заработка”һын юғалтҡан. Инде элекке хисапсыны — Ғиззәт ағаһын маҡтап, ныҡ һағынып һөйләйҙәр... Әммә Ғәлимдең иҫе китмәй, теште ҡыҫып, кешеләргә яман булыуҙан да ҡурҡмай, дөрөҫөн эшләй бирә. “Халыҡҡа ярауы ҡыйын була икән ул...” тип уйлана.

Насрый өҫтөнән акт төҙөгәйне тағы. Тракторын тоҡандырып ҡырға сыҡҡан да, һабансыһын ҡайтарып ебәреп, үҙе тракторы менән күрше урыҫ ауылына бәрәңге баҡсалары һөрөргә — “һулаҡай кәсеп”кә киткән. Иртә менән Ғәлим

[74] Эре□орт — “рекорд” һү□ен шулай әйтә.

барып үлсәгәндә, багындағы яғылыҡ яртыға төшкән, ә һөргән ерт ек. Ләкин Дәүәй актҡа ҡул ҡуйманы.

— Ҡуйсәле, юҡҡа-барға ваҡланып йөрөмә улай. Ир булһаң, йорттан сүп сығарма, эсеңдә эйәрле-йүгәнле ат кешнәмәй ятып ҡалһын. Ә яндырылған яғылыҡ өсөн иҫең китмәһен. Өҫтәлмә рәүештә бер норма тырматыу йәки культивациялау күрһәтеп ҡыҫтыр ҙа ебәр хисапҡа. Ерҙең нисә ҡат эшкәртеп сәселгәнен, әҙәм балаһы түгел, этем килеп еҫкәнеп-соҡсоһна ла белә алмай уны! — тип өйрәтте ул. Дәүәй менән ирешеп йөрөү теңкәһенә тейеп бөткәйне инде, бәхәсләшеп торманы. Ләкин үҙенсә эшләне: туҡһан кило яғылыҡты хисап ҡағыҙында Насрый елкәһенә яҙып, һигеҙ сәғәтлек прогул күрһәтеп ҡуйҙы. Дәүәй быға иғтибар итмәне, ҡул ҡуйып ебәрҙе.

VI

Ғәлимәне Сәлимә апай үҙ өйөнә һыйындырҙы. Ире ташлап бәхет эҙләргә сығып киткән һәм ҡайҙалыр Ташкент яғында өйләнеп, , яңы ғаилә ҡороп ҡалған тол ҡатын ине ул.

— Кемгә алып барайым инде мин һине? Үҙемдә тор ҙа ҡал. Өйөм иркен, балаларым башлы-күҙле булып бөткән, тигәндәй, — бергә-бергә йәшәрбеҙ әле ошонда, — тине.

Сәлимә апай ҡасҡалаҡ иренән мираҫҡа ҡалған серек өйөн былтыр ғына колхоз ярҙамында һипләтеп кергән. ҡур-ҙур тәҙрәле алты босмаҡлы өй бик оҡшаны Ғәлимәгә. Эсе лә йыйнаҡ итеп йыһазландырылған. Яҫы ҡарағай таҡталарҙан теҙелгән шыма иҙәндең балауыҙ һарылығы сығарып йыуылып ҡуйылыуы йәш аграномдың күңелен күтәрҙе.

— Бына һиңә йоҡларға урын, — тине Сәлимә уға, төпкө өйҙөң урам яҡ стенаһы буйындағы карауатты күрһәтеп. — Бына өҫтәл. Шәм тураһында ҡайғыраһы юҡ — былтырҙан биреле электр яна беҙҙә.

Былары ла ҡыҙ күңеленә хуш килде. Икеһе лә , яңыраҡ ҡына шымартып яһалған булып, һөйән аҡлығы менән күҙҙең яуын алып торалар, күңелдә яҡты тойғолар уяталар. Ғәлимә, сумаҙанынан алып, өҫтәлгә тиҙ генә аҡ етен скатерть япты (быны ул район үҙәгендә, ошо колхозға юлландыртма бирелгәс, һатып алғайны), бер мөйөшөнә китаптарын өйҙө. Мыйыҡлы уйсан гусар поручигының артлы кескәй рамға ҡуйылған портретын ҡаршыһына ултыртты. Өйҙәшенең хәрәкәттәрен бәйнә-бәйнә күҙәтеп торған хужабикә тартынып ҡына һораны:

— Кемең ул һинең, әллә һөйгән егетеңме?

— Эйе, өҙөлөп һөйгән егетем, — тине Ғәлимә.

— Кейгән кейеме сәйерерәк булһа ла, бигерәк аҡыллы күренә.

— Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул бынан йөҙ егерме йыл элек үлгән шул.

Сәлимәнең һис ни аңлай алмайынса аптырап тороуын күреп, төшөндөрөргә ашыҡты:

— Шағир ул, апай, урыҫтың бөйөк шағиры Михаил Юрьевич Лермонтов. Мин уның шиғырҙарына ғашиҡмын.

— Ә-ә-ә, — тине Сәлимә. — Әйтәм, күҙҙәреңә тура ҡарап тора...

Иртәнге сәйгә бер ғаиләләй йыйылдылар. Ике ҡыҙы бар икән. Өлкәнен кейәүгә биреп оҙатҡан, ә Әминә исемле кесеһе үҙ бауыры аҫтында. Күгәрсендәрҙәй гөрләшеп эстеләр сәйҙе. Ун ете йәшлек Әминә, , яңы алланып бешеп килгән еләк кеүек, үҙенең саф йәшлеге, матурлығы менән һөйөндөрә күҙҙәрҙе; шат күңелле, алсаҡ ҡыҙ булып сыҡты ул. Бер туҡтауһыҙ тәтелдәп, Ғәлимәне һорауҙар менән күмде: Ғәлимә апай ҡайҙа уҡыған, Ырымбурҙамы? Институтта нисә йыл уҡыйҙар икән? Ырымбур ҡалаһының урамдарына шыма асфальт түшәлгәнме? Йырҙа йырланған Каруанһарай бинаһы хәҙер ҙә бармы Ырымбурҙа? Ә аҙағынан, кәйефһеҙләнеп: “Ошо йәшемә етеп тә, Ырымбурҙы күргәнем юҡ...” тип көйөнөп ҡуйҙы. Әсәһе йомош менән киткән арала, йөҙөнә фетнәсе ҡиәфәте сығарып, шыпырт ҡына һораны:

— Апай, һин егет һөйгәнең бармы?

Йылмаймайынса булдыра алманы Ғәлимә. Бына ниндәй бит ул йәшлек! Үҙенең ун ете йәшлек дәүере килде күҙ алдына. Уның да йөрәген ошондай уҡ һорауҙар ныҡ борсой торғайны...

— Бар, һеңлем, бар... — тип яуапланы.

— Әйтсе, апай, егеттәрҙең бөтәһе лә шулай оялсан булалармы икән?

Ғәлимә көлөүен һиҙҙертмәҫкә тырышты. Ҡыҙҙың диңгеҙ күпереге һымаҡ йомшаҡ сәстәренән һыйпап:

— Эйе, күптәре шулай була, — тине. Ниңә кәрәк таңғы ысыҡ тамсыһына кер ҡундыртырға?..

Көпәй ҡорһаҡлы һары еҙ самауыр, сынаяҡтарға мөлкәтен мул ағыҙа-ағыҙа, табын уртаһында сыжлап ултыра. Ауыл муллығын данлап йырлай һымаҡ ул. Ҡыҫып тотһаң мамыҡ һымаҡ йомолоп, ебәргәндә ҡабат ҡабарып китеүсән аҡ бойҙай икмәгенән ҡомалаҡ сүпрәһенең нәфис хуш еҫе аңҡый, тәрилкәләргә өйөп һалынған май һәм йомортҡаларҙан йәмле май айы сәскәләренең шифалы таты килә. Ятаҡтағы ҡыҫыңҡы студент тормошонан һуң, Ғәлимәгә былар барыһы ауыл муллығының балҡышы булып күренде.

Сәйҙән һуң Ғәлимә өҫтөндәге өй кейемдәрен эш кейеменә алмаштырҙы. Ябай тауарҙан тегелгән сыбар юбкаһын кейеп алды, аяғына тупаҫ кирза итектәр һәм өҫтөнә һырған көпәйкә кейҙе. Күҙҙәрен шарҙай асып аптырап ҡарап торған Әминә ҡысҡырып көлдө:

— Апай-апай, ҡара әле үҙеңә! Ҡырға эшкә китеп барған ябай ауыл ҡыҙына оҡшап ҡалдың... — Карауат аҫтына ҡыуылған бейек күтәрмәле ялтыр түфлиҙәргә үкенеп ҡараны.

— И һеңлем, — тине Ғәлимә ябай ғына. — Мин бит ысынлап та ауыл ҡыҙы булырға килгәнмен. — Итек ҡунысынан сығып торған сылғау осон тыҡҡылап, йомғаҡланы. — Ҡыр эштәрендә ул, һеңлем, ябай кейемдән дә уңайлыһы юҡ.

— Ҡырға сығаһың дамы ни? Персиҙәтел һиңә иртән керешергә ҡушты бит? — тине эшен бөтөрөп кергән Сәлимә.

— Сығам, апай. Иртәгәне көтөп ятыуҙан ни файҙа? Бөгөнмө, иртәнме — ҡасан да бер башларға кәрәк бит инде...

— Уныһы шулай инде ул, — тип ризалашты хужабикә.

Ғәлимә, ҡапҡаны ашҡас туҡталып, шаҡтай уйланып торҙо. Идараға барырғамы, юҡмы? Унда барһаң да бит әле тиҙ-тиләмә ат табып бирмәйәсәктәр. Колхоз етәкселәре уны ни өсөндөр ҡырын күҙ менән ҡабул иткәндәй. Әллә агрономһыҙ ғына йәшәргәме ниәттәре? Бигерәк тә анауы трактор бригадаһы бригадиры: “Беҙгә йылтыр түфлиҙәр кәрәкмәй!” — тигән була... Ҡыҙ йөрәгендә уға ҡарата асыу ҡуҙғалды. “Ҡытыршы сабата” тип үсекләне уны, эсенән. Идараға мәшәҡәт һалмай ғына, ат-арба мәсьәләһен туранан-тура ат ҡараусыға барып хәл итергә булды.

Матур икән был ауыл. Урамдарын ҡалын келәмләгән ҡуйы ҡаҙ үләнен Ғәлимә бүтән бер ерҙә лә осратҡаны юҡ. Урамдарҙы, майҙандарҙы, ишек алдарын тоташ йәшелгә күмеп түшәлеп ята ул үләнен (күп хәрәкәтле оло юлдар ғына келәм өҫтөнә ҡара туҙан таҫмаһы һуҙып уҙған). Атлағанда табандарың аҫты йомшаҡ, тукылдау юҡ, туҙан юҡ — әйтерһең, тәбиғәт-әсә үҙе ҡайғырта әҙәм балаларының һиллеген. Нәҡ анауы ҡараморон балаларҙай, һуҙылып ятып, ошо үләнен-келәмдә аунағыһы, тәкмәс атып уйнағыһы килде агроном ҡыҙҙың. Моғайын, ҡусҡыл япраҡ-ҡыяҡтарының араһында йәнгә рәхәт һалҡынса дым еҫе, йәшеллек аңҡы мул сырмалып торалыр!

Иртәнсәк уҙғанда кешеләрҙең иғтибарын Ғәлимәнең матур ҡала кейеме йәлеп иткәйне, буғай. Хәҙер инде йәһәт кенә алмашынған тышҡы киәфәтенә ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар. Ысынлап та, ниңә ҡырыҫ кирза итектәре һөйрәп сыҡты һуң әле был ыҫпай ҡыҙ?..

Ғәлимә тәҙрәләрҙән, ситән арттарынан үҙенә һаҡ төбәлгән ҡараштар һиҙҙе. Күбеһенсә ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ ғына ине, башҡалары ҡырға эшкә таралышып бөткән. Эскерһеҙ текләүселәренә иғтибар итмәҫкә тырышты. “Текләһендәр, әйҙә, текләһендәр, яйлап күнегерҙәр әле”, тип уйланы, йылмайып. Бына тап ҡаршыһына, өлкәндәрсә олпат һәм ҡыйыу атлап, бәләкәс малай сыҡты. Ололарса ҡулдарын артҡа ҡуйып, ят апайҙы баштан-аяҡ ентекләп тикшерҙе.

— Тешләйем бит хәҙер, ау-у-у! — тип өшкөттө уны Ғәлимә. Ә малай шөрләмәне.

— Мин һинең кем икәнеңде беләм. Һин агланум! — тине ул етди. Ғәлимә уның керпе арҡаһылай тырпай башынан һыйпаны:

— Абау, сәнсә икән!

— Эһе, алдатаһың! — тине малай, керле ҡулы менән түбәһен ҡапшап ҡарап. Ғәлимәнең артынан ҡысҡырҙы: — Апай, бойҙайҙы һин нисек итеп үҫтерәһең?

— Мин уны Ҡояшҡа бәйләйем. Ҡояш уны үҙе тарта ла үҫтерә.

Аптыраған малай бармағын ауыҙына ҡабып, яуаптың төбөнә төшөргә тырышып, уйланып тороп ҡалды.

Ауыл осона сыҡҡас, һырт яҡтағы һоро бүтәгәле тау итәгендә суҡайған ике цистерна, эргәләрендә суҡаңдаған ир-ат күреп, тура ыңғайлағайны, көтмәгәндә артынан, дөбөр-шатор, мотоцикл ҡыуып етте лә уҙа бireп шып-туҡтаны. Матайға атланған мыҡты кәүҙәле, ҡаҙаҡҡа ныҡ тартым ҡара-һимеҙ түңәрәк йөҙлө (“көлсә бит!” тип билдәләне Ғәлимә) ҡупыҡ егет, оҙон боттарын ике яҡҡа тарбайта баҫҡан

килеш, ынйылай аҡ тештәрен йылтыратып, беҙҙәй осло күмер күҙҙәрен тура төртөп көтөп алды:

— Һаумы, сибәрем Ғәлимәкәй!

— Һауғайным да, түгелде шул.

— Оһо! Оторобикә икәнһең.

— Беренсенән, “һең” түгел, ә “һеҙ”! Икенсенән, “сибәр” тип матур егеттәргә генә әйтелә беҙҙең яҡта. Ә ҡыҙҙарҙы “һылыу” тиҙәр.

— Ярар, һүҙемде кире алам, ул тиклем гордый түгелбеҙ. Татар менән, урыҫ менән буталып бөткән шул телебеҙ. Бынан һуң “һылыуым” тип кенә һоҡланырмын. Ул әйтеүем китапсараҡ килеп сыҡты, шикелле.

— Татар китаптарын ғына уҡығанығыҙ күренә.

— Башҡортсаһын ҡайҙан алаһың уның? Килеп етмәй бит.

— Үҙегеҙгә барып етергә кәрәк.

— Абау, телемде тешләнем, улайһа. Һылыулығығыҙ алдында баш эйеп, дуҫлығымды тәҡдим итәм. Әгәр рөхсәт итһәгеҙ, урыҫтар әйтмешләй, яҡындан танышайыҡ. — Егет ихлас ҡул бирҙе. — Сәләмғол, ауыл Советы секретары.

— Дуҫлыҡты һис кире ҡаҡмайбыҙ. Бигерәк тә Совет власын. Әйтмәһәм дә, беләһегеҙ, буғай: агроном Ғәлимә булам.

— Бик шатмын. Ҡайҙа йүнәлдегеҙ?

— Башым анауы тарафҡа ҡарағайны.

— Менгәшегеҙ, алайһа, арғымаҡҡа. Минең дә тап аяҡ тартҡан яҡ ине.

Матай тигәнең, күҙ асып йомғансы, цистерналар төйәгенә алып барып та төшөрҙө. Яғыулыҡ ташыусы Яхъя, ғүмәр бабай ярҙамында, оҙон арбаһынан мискәләрен тәгәрләтеп маташа. Тракторист Насрый, һары гәзит ҡағыҙына уралған йыуан тәмәкеһен ҡабып, ситтәнерәк күҙәтеп тора.

— Булдымы? — тине Сәләмғол Яхъяға.

— Булыуын булды ла ул, анауында осло күҙ бар бит әле...

Сәләмғол тирә-яғына ҡаранды:

— Ҡайҙа?

— Кем?

— Кем түгел, ә үҙең белгән нәмә!

— һаҡ ҡыланмайһың, ҡустым.

— Күрмәй ул, минең трактор багында соҡсона, — тип тынысландырҙы Насрый.

— Насрый үҙебеҙҙеке, егет ул. — тине Сәләмғол, матайын ҡалдырып. — Ҡайҙа, ваҡытым тар!

— Ана, цистерна аҫтында. Йәһәт кенә ал да тай, ҡустым, күреп-фәләп ҡалмаһын.

Сәләмғол цистерна аҫтынан канистр һөйрәп сығарғайны, көтмәгәндә килеп юлыҡҡан Ғәлим канистрға аяғы менән баҫты:

— Туҡта әле, нимә уның эсендә?

— Нимә булһын, бензин! — тине ғүмәр бабай. — Сәүит власының матайына кәрәк бит, ябай һыуҙы һемермәй икән ул сәсрәп киткере тимер арғымаҡ...

Ғәлимдең ҡаштары йыйырылды:

— Тәк, егерме литр. Рөхсәт ҡағыҙың бармы?

— Һуңынан килтереп бирермен.

— Килтереп биргәс алырһың. Яхъя ағай, мә, цистернаға кире бушатып бир. Канистры беҙгә кәрәкмәй.

Төҫө ҡасып ҡулдары ҡалтыраған яғылыҡ ташыусы, башын эйеп, бойороҡто үтәне.

— Һин нәмә, үҙ урыныңды белмәйһең? — тип ғыжылданы ҡаҡ ергә доңҡолдап төшкән буш канистр эйәһе.

— Беләмен, үҙ урыным — иҫәп-хисап. Үҙең дә беләһеңдер: Совет власы теүәл иҫәп-хисап ярата — шунһыҙ коммунизм төҙөп булмаясаҡ, тигән Ленин бабабыҙ. Һин быны яҡшы белергә тейеш!

— Белгертермен әле мин... Запомни! — Сәләмғол буш канистрын алып матайына атланды, моторын шарылдатты. Иҫ китерлек һис нимә булмағандай, Ғәлимәгә тештәрен йылтыратты: — Әйҙә, һылыуым, менгәш, фатирыңа елдертеп ҡуяйым.

— Юҡ, мин ошонда ҡалам, — тине ҡыҙ, шул ыңғайҙа туҙан туҙҙырып дөнгән матай артынан баш сайҡап.

— Бына бит ул, эштәр ҡайһылай... — Көйөндө ғүмәр бабай. Ғәлим иһә бының өсөн төп ғәйеплегә ябырылды:

— Яхъя ағай, күпме әйтергә була, ниңә яҡын юлаттың?

— Йәнемде алып бара бит... Силсәүиткә саҡыртып алып екерҙе... Былтырғы алдаҡ туңға һөргән яғылыҡты ғиззәт менән минең өҫкә һалдыртып, төрмәгә ултыртырға янай...

— Килгән берәүгә ошолай ҡойоп бирһәң, тиҙерәк ултырырһың! — тине Ғәлим. — Белеп тор: үҙем ултыртышырмын! — тип тә өҫтәне. Ҡыҙыҡһынып ҡолаҡ һалған Ғәлимә янына килеп, ҡул бирҙе. — Таныш булайыҡ: трактор бригадаһы хисапсыһы Ғәлим.

— Ә мин агроном Ғәлимә! — тип йылмайҙы ҡыҙ, егеттең ҡытыршы усынан ҡулын алырға ашыҡмай. — Һе!.. Ғәлим менән Ғәлимә... иллә тура килгәнбеҙ ҙә икән, әй!

— Шулай шул... — Егет, сағыу нурға тура ҡарағандай, сытырҙатып күҙҙәрен йомдо — тылсымлы кинофильмдән тылсым көсө менән сыҡҡан һылыуҙарҙың һылыуы үҙе баҫып тора лаһа алдында!..

— Баҫыуҙар иңен бергәләшеп ҡыҙырабыҙ икән, әй.

— Сеү! Ҡайҙалыр күргәйнем шикелле һеҙҙе? — тине, ҡыҙҙың ҡулын, ниһайәт, ысҡындырып.

— “Һеҙ”ләмәһәгеҙ ҙә ярай, бер үк эш кешеләре бит. “Һин” тип кенә һөйләшәйек.

— Иншалла, мин дә шул теләктәмен. Ә шулай ҙа... ҡайҙа, ҡасан күрҙем әле был һылыу йөҙҙө? — Егет ҡыҙҙың сер һәм хис тулы күҙҙәренең төбөнә үтеп керергә теләгәндәй ҡараны. Ҡыҙ көлдө:

— Ҡайҙа булһын, үҙебеҙҙең колхоз идараһында. Ғүмәр олатай менән мин коридорҙа ҡыҙыл боросло гәзит уҡый инек. Шартлап торған ташлы ҡыҙыу мунса

эләүкәһендә селек һепертке менән сабындырылғандай, борос һымаҡ ҡыҙара-бүртеп килеп сыҡтың да, күҙең тоноп тышҡа атлыҡтың...

Рәхәтләнеп көлдөләр.

VII

— Алло, ҡайҙа йүнәлдең? Туҡта әле!

Аяғөҫтө уйланып йөрөүсән Ғәлим һиҫкәнеп башын күтәрҙе. Ҡара атҡа егелгән ҡара ҡырандаста, тимер-томорҙары араһынан һерәйеп, Дәүәй үҙе килә икән. Ғәлим яҡынланы.

— Ни эш ҡырып йөрөйһөң әле?

— Ер үлсәйем.

— Ер үлсәйем, тиһең инде. һе. Ярар, һуңынан үлсәрһең. Әйҙә, ултыр, киттек.

— Ҡайҙа?

— Уныһын юлда һөйләшербеҙ.

Ғәлим бригадир ҡушағаһына менде. Арҡаһына сыбыртҡы элəккән ҡарат һалпаң-һолпаң юртып китте. Бераҙ һөйләшмәй барҙылар. Егет һүҙ ҡатырға теләмәне, ҡарашын юл ситендәге аллы-гөллө сәскәләргә төбәгән хәлдә, башлығының өндәшеүен көттө.

— Йә, эштәр нисек? Өлгөрөп буламы? — тип белеште Дәүәй. Элек быны һорамай торғайны, хисапсы өлгөрәме, өлгөрмәйме — был мәсьәлә аҙ борсоно уны. Хәҙер иһә хисапсыһының хәле менән ҡыҙыҡһынғандай итә, етмәһә, тауышында ла ниндәйҙер яғымлылыҡ билдәләре бар. Ғәлимде был һағайтты, ҡоро ғына яуапланы:

— Бара шунда, аҡрынлап.

— Нисек уйлайһың һин, быйыл сәсеү бөтәме шул, юҡмы?

— Сәсеп бөтөрһәк, бөтөр.

Бригадир быны хуп күрмәне.

— Гәзит уҡыйһыңмы һин? Беҙҙең колхоздың сәсеү буйынса нисәнсе урында торғанын беләһеңме?

— Нишләп белмәй, ти? Беләм.

— Арттан икенсе урында тора беҙҙең колхоз. Нехорошо.

— Эйе, нехорошо.

Дәүәй, һарыуы ҡайнап, ҡыҙып һөйләне:

— Бригада яҙмышы аҙ ғына булһа ла ҡағыламы һиңә, юҡмы? Әллә ул һиңә бөтөнләй ҡағылмаймы? Ҡылыҡтарыңа ҡарағанда, бригадала эшләмәйһең, ә Мәскәүҙән туризмға килгәнһең, тип уйларға мөмкин. Бына нисәмә йылдар инде техника тирәһендә әйләнәм, ләкин һинең кеүек хисапсыны осратҡаным юҡ ине. Аҡламаның һәм аҡламайһың беҙҙең ышанысты! Бына нимә әйтәм мин һиңә, брат: эшләйһең икән — эшлә как следует, эшләмәйһең икән — эшләмәйем, тип өҙөп әйт. Колхозға посторонний наблюдатель кәрәкмәй.

— Нимәне эшләмәйем мин, нимәне?! Ерҙәрҙә үлсәмәйемме, әллә берәүҙең тәбилен юғалттыммы? — тип тоҡанды Ғәлим. Хәҙер ул Дәүәй менән бер ҙә тыныс һөйләшә алмай ине.

— Беҙ өндәшмәгәс тә, әллә эштәрең ал да ғөл тип беләһеңме? Юҡ, брат, һинең менән бәйләнергә генә ниахута. Әммә-ләкин күңел биреп эшләргә кәрәк. Күрше колхоздар ни өсөн алда? Түлке блгаҙарә яҡшы хисапсы арҡаһында. Уларҙың беҙҙән артыҡ бер ние лә юҡ.

— Моғайын, уларҙа трактористарҙың ыҙанда эшләп еткермәгәнен хисапсы эшләй торғандыр... — тине Ғәлим, әсе көлөп.

— Тап өҫтөнә баҫтың!

— Үҙемә бер трактор беркетегеҙ, алайһа, һөрөрмөн. Ә һеҙ үлсәрһегеҙ.

— Һиңә берәү ҙә тракторист өсөн ер һөрөргә ҡушмай. Шулай ҙа бригада, колхоз тураһында ҡайғыртырға кәрәк бәләкәй. Бөгөн үк сәсеүҙе бөтөрөп сводка бир.

Эш бына нәмәлә икән! Башына таяҡ менән һуҡҡандай булды.

— Быны көтмәгеҙ минән! Йөҙ илле гектар һөрөп, сәсәһе бар бит әле беҙҙең. Килеп тикшерһәләр, баштан һыйпамаҫтар, башыңды ҡырҡып алырҙар.

— Ерунда! Берәү ҙә тикшермәйәсәк тә, белмәйәсәк тә уны. һәм белергә лә теләмәйәсәк. Йөҙ иллеһен һуңынан яйлап ҡына тултырасаҡбыҙ. һәр ҡайҙа ла шулай эшләйҙәр быны. Элек-электән килә инде ул. Ниндәйҙер йөҙ илле гектар өсөн ҡойроҡта һөйрәлергә, Ҡыҙыл байраҡһыҙ ҡалырға ярамай ҙа инде беҙгә. Яҡшылап көсәнһәк, артабанғы аҙнала түңәрәкләп ҡуябыҙ беҙ уны.

— Былтыр туңға һөргән һымаҡмы? Ҡайҙа ул ике йөҙ гектарығыҙ, ниңә уны ла, үҙегеҙ әйткәнсә, һуңынан "көсәнеп" үтәмәнегеҙ?! — Ҡаны ҡыҙҙы егеттең.

— Һин, ҡустым, маңлайың менән ҡая ярып маташма — башың ярылыр. Беҙ ҡушҡанды үтә лә ҡуй, ҡалғанын үҙебеҙ белербеҙ.

— Кем ул үҙегеҙ?

— Бөтә етәкселек. һинең ошолай сығынсылауың арҡаһында яҙғы сәсеү буйынса, колхоз ғына түгел, бөтә район артта һөйрәлә — беҙҙең колхоз тоткарлап һөйрәлтә уны. Әйтәм бит, бөтәһе шиты-крыты буласаҡ!

— Ә партия райкомы?

— Беҙ, коммунистар, һәр аҙымыбыҙҙы партия райкомы етәкселегендә баҫабыҙ. һин үҙең дә йәш коммунист бит әле!

— Юҡ, булдыра алмайым мин быны, булдыра алмайым! Нимә уйлаһағыҙ ҙа уйлағыҙ, ләкин намыҫыма ҡаршы бара алмайым! — Егет үҙен йәтмәгә эләккәндәй тойҙо; был йәтмәнән ысҡынһаң, бригадир һәм бөтә етәкселек, хатта райком ҡаршыһында уғата яманға әүереләсәгең хаҡ; ысҡынмаһаң, үҙеңде-үҙең намыҫ язаһына хөкөм итәһең. Ахыры, түҙмәне, ҡырандастан ырғып төшөп ҡалды. Дәүәй атын туҡтатып, артынан уҫал төбәлеп, ғәйепләүсән, түбәнһетеүсән баш сайҡаны. Был ишараның мәғәнәһен Ғәлим тәрәнтен ҡабул итте; үҙен тағы кешегә ылыҡмаусан яман, ҡырыҫ әҙәм итеп тойҙо һәм, кәйефһеҙләнеп, муйынын эскә тартты. Көндән-көн үрсей барған дошмандары уға һәр ваҡыт ошо түбәнһенеү тойғоһон һеңдерергә тырышалар...

Кәзә һаҡалына оҡшап елгә елпелдәгән һипмә ҡыяҡлы йәш бүтәгә сиҙәменән атлап, тау аша төштө Ғәлим. Унда, Насрый һалған ыҙан башындағы селеклектә, велосипеды йәшерелгән. Атланып, ҡыҙыу ишә-ишә, баҫыу ситендәге яғылыҡлы мискәләр эргәһендә ике автомобиль күреп туҡталды — уҙғынсыларға оҡшай. Эргәлә, торбаһынан һағыҙ һымаҡ ҡара һөрөм аттыртып, Насрый тракторы тора тырҡылдап. Насрый үҙе, мискә ауыҙын усы менән бер ҡаплап, бер асып, тегеләрҙең канистрына бензин ағыҙа. Ғәлим ҡырыҫ өндәште:

— Ҡайҙа, килтерегеҙ ҡағыҙығыҙҙы!

— һин кем, ниндәй ҡағыҙ? Әллә үҙебеҙҙекеләрҙе танымайһыңмы?

— Колхоз идараһының йәки МТС-тың бензин ебәрергә биргән бойороғон.

Насрый хисапсының еңенән тартты:

— Ярар инде, дуҫ, ҡуй, бушҡа ваҡланма. Үҙебеҙҙең МТС кешеләре бит...

— Эйе, МТС-тыҡылар беҙ.

— Ә яғылыҡ — трактористар елкәһе! — тине Ғәлим.

— Ә мин кем? — Насрый кәперәйҙе.

— Тракторист һин.

— Шулайғас? Барыбер минең елкә бит. Үҙ елкәмә күтәрәм!

— Күтәрер инең дә, елкә соҡороң һай шул! Ә һеҙ, хөрмәтле МТС-сылар, канистрығыҙҙы кире бушатығыҙ!

— Тот бына бынауҙы! — тинеләр автомобилселәр, осло ҡуҡышҡа йәпләнгән ҡара йоҙроҡтарын күрһәтеп; ишектәрен шартлатып яптылар ҙа дөнөп китеп тә барҙылар. Арттарында, төлкө ҡойроғолай ҡабарып, йыуан туҙан болото ғына ҡабарҙы. Шул арала Насрый тракторы ла бураҙнаға төшөп һөрөп китте, Ғәлим бер үҙе ҡалды. “Их, yртылаш бүҫкәрткәндәр!” — тип мискәне торғоҙоп ултыртты. Нәфрәтләнеп, Насрыйҙың шунда онотолоп ҡалған фуражкаһын тибеп осорҙо. Ниһайәт, үҙ күҙе менән күреп аңланы ул бригадала дизелде тоҡандыртыу моторсығы бензиненең ни өсөн саманан тыш яғылыуын. Ҡайҙа ғына ҡарама, алдау ҙа урлау — ни булған был халыҡҡа?.. Тракторҙың әйләнеп килеүен көтөп тормай, велосипедына атланып, ары йүнәлде. Үтә торған, үлсәй торған ерҙәре күп ине әле. Ишә-ишә, тәрән уйланып бара.

Былтыр ғына колхоздарҙы берләштереп ташлағайнылар. Ғәлим эшләгән колхоз шөйлә ҙурайҙы: үҙ эсенә элекке бәләкәй хужалыҡтарҙың икәүһен алған. Әгәр картаға баҡһаң, дөйөм хужалыҡтың ер биләмәләре һуҙып һалынған оҙон таҫтымалға оҡшаш. Буйлап сығыу өсөн әллә нисә ауылды, әллә нисә тау һәм йылғаларҙы үтергә кәрәк. Элекке “сит” колхоздың ерҙәре әллә ни таныш та булмағас, тырым-тыраҡай һибелгән техника артынан сабыу, барыһын үсәп һәм күҙәтеп өлгөрөү ауыр ине. Колхоз етәкселеге, йылдың-йылына, техниканы бер урынғараҡ туплап файҙаланыу, эштәрҙе тоташ фронт менән, биләмәләрҙең бер осонан икенсе осонаса бер юлы алып барыу һәм шул ысулдың хужалыҡҡа күпме экономия, ваҡыт отошо бирәсәге тураһында аҡыллы докладтар һөйләй; ләкин, яҙ башланыу менән үк, матур аҡыл кинәт онотола, эштәр үҙ ағышына ҡуйыла. Етәкселек инде план-маҙар тураһында уйлап та ҡарамай, ул, ҡағыҙға яҙылған килеш, туҙанлы шкафтарҙа ятып сереүен көтә. “Даешь! Даешь!” тип һөрәнләп дошман өҫтөнә ташланған эскадрон атлылары кеүек, үҙ-үҙҙәрен белештермәй

ярһып, эшкә тотона кешеләр; шау-шоу ҡуба, буталыш китә, ләкин эш алға бармай, сөнки был ваҡыт кешеләр, дөйөм шау-шоуға әүрәп, төп йүнәлеш тойғоһон юғалталар, кәрәкмәгән яҡҡа саба башлайҙар, улар менән айыҡ аҡыл түгел, стихия етәкселек иткәндәй... һөҙөмтәлә халыҡ арый, тәүге эш сәме һүрелә, хәрәкәттәр һүлпәнәйә һәм хеҙмәт аҡһай башлай. Йыл һайын, яҙғы сәсеү йәки ураҡ кампанияларының ағышын күҙәтеп, Ғәлим ошондай фекергә килә торғайны.

Быйыл да шул килеш ҡалды...

Ауыл янындағы ике йөҙ гектарлы массив башына еткәс, Ғәлим, туҡтап, велосипедын әрем араһында ҡалдырҙы. Колхоздағы иң ҙур, иң тигеҙ баҫыу был — тракторҙар йырлап йөрөп эшләрлек. Бөгөн уны культивацияларға тейеш инеләр. Культиваторҙың етемһерәп ер башында тороуын күргәс, Ғәлим албырғанып ҡалды. Көҙҙән насар һөрөлгән ергә әләгә-һөрләгә, баҫыу эсенә инде. Эйе, һиҙенеүҙәре дөрөҫ: культивацияһыҙ сәсә башлағандар. Культиватор менән ер ситенән сыйҙыртып ике генә ураған да ҙа ташлағандар... Тупраҡ таба төбөләй ҡаты, бөрсөкләнеп ятҡан балсыҡ киҫәктәре араһынан күгелйем-ҡыҙыл сүп үләндәре үркегән — кейеҙләнеп тығыҙ шытҡандар. Бер ус тупраҡ тырнап алып тикшерҙе: ундағы сүп үләндәре бармаҡ битендәй майҙанда ла бихисап...

— Бына һиңә кәрәк булһа... Бына һиңә кәрәк булһа... — тип, үҙе лә һиҙмәҫтән, әллә кемгә мөрәжәғәт итеп һөйләнде хисапсы. Баш һөйәге эсендә утлы осҡондар сәсрәғәндәй, хафа тойғоһонан башҡа бер нәмә лә ҡалманы... Ҡабаланып, теге баштан сәсеп килгән агрегатҡа ҡаршы йүгерҙе; ҡул болғап ҡыҫҡыра-ҡыҫҡыра, төмөзгә әләгеп “тәкмәс атты”... Аҙыраҡ һыуына төшөп, ҡаршы йүгереүҙең кәрәкһеҙлеген аңланы, ыҙанда көтөргә булды. Агрегат килеп еткәс, ҡул болғап уны туҡтатты. Кабина ишегенән трактористың туҙанлы башы күренде.

— Ни булған? — Кәйефһеҙләнеп һораны ул.

— Ниңә культивацияланмаған ергә сәсәһең?

— Уныһын үҙенән һора! — тине артҡа ымлап һәм, ишеген ҡалдор-ҡолдор ябып, ҡара төтөн урғылдыртып газ бирҙе. Ҡорос ҡарышлауыҡтары шылтырҙап үрмәләне, Ғәлим ситкә тайпылды. Туҙан көлтәһе араһынан йүгереп барып, сәскес баҫмаһына менде, унда Дәүәй тора имеш.

— Нишләп эште булдерәһең? — тип ҡыҫҡырҙы бригадир, шау-шоуҙы еңергә көсәнеп.

— Ер культивацияланмаған!

Дәүәй ҡулын һелтәне, тупаҫ брезент плащлы яҫы арҡаһын күрһәтеп бороллдо. Орлоҡ үткәргестәрҙе көйләп маташҡан өлкән сәсеүсе (төп һөнәре — комбайнер) Ғирфан иһә Ғәлим ҡолағына ҡыҫҡырҙы:

— Былай булмай, мырҙам, дискылар батмай бит! Ер ҡаты!

Ғәлим бригадирҙың бөйөрөнә төрттө:

— Орлоҡ ер өҫтөндә ҡала. Үлән дә мыжғып сыҡҡан. Туҡтатырға кәрәк!

— Нишләргә икәнен өйрәтмә беҙгә! Үҙ эшеңде бел! — Дәүәй сәскестән төштө. Эйәргән хисапсыһына, ҡолаҡ һалыу түгел, боролоп та ҡараманы...

VIII

Аттар һарайында Ғәлимәгә биш-алты ир осраны. Утлыҡсаға теҙелешеп ултырып, мөкиббән китеп, тәмәке көйрәтәләр.

— Әйтегеҙ әле, идара аттарын ҡараусы бындамы икән? — тине ҡыҙ, дөйөмләтә иҫәнләшкәс. Бесән араһына айырата ныҡ сумылып төтәп ултырған һимеҙ йөҙлө, шаҙраҡ бер абзый теләмәйенсә генә ҡалҡынып ҡараны:

— Бында булһа, һеҙ уны ни эшләтер инегеҙ?

— Муйынына боғалаҡ һалып, йылғаға сумырыр инем.

Һимеҙ йөҙлөнөң бөйөрөнә төрткөләп хихылданылар. Ә уныһы, иҫе китмәй генә, ҡуйы төтөн йомарлаҡтарын осора-осора һораны:

— Ни өсөн ул бындай ихтирамһыҙлыҡ?

— Бесән өҫтөндә ултырып көйрәткән кеше шуға лайыҡлы ла инде!

— Сафа ағайҙы критиковать итмәгеҙ — кире тәкәһе төкөр. Сөнки ул үҙе нәсәлник пожарной охраны! — тине күк галифе салбарлы, тупаҡ танаулы ҡупшы егет һәм диҡҡәтләнеп ҡыҙҙың күҙҙәренә ҡараны.

— Күренеп тора: ошонда ут сығарып, үҙенә эш яһарға тырышҡаны. Кем булаһығыҙ, Сәләмғолдоң ағаһымы әллә? — тине Ғәлимә.

— Шулайыраҡ...

— Әйтәм, бер ҡалыптан сыҡҡандай оҡшашһығыҙ. — Ҡупшы егеттең маңлайы, танау өҫтө пасталап шымартҡандай ялтырай, уның шулай ҡупшы егет булып йөрөүе лә үтә оҙаҡҡа һуҙылғанлығы күренеп тора.

— Егетлегеңде күрһәтергә өлгөрмәнең бит, әй, — ҡустың һемәйткән үҙеңде! — тип көлөштөләр. Галифеләр эйәһе ҡаштарын йыйырҙы:

— Ни йомош, ат кәрәктер, моғайын? — тине. — Улайһа, ана Сафа ағайҙың үҙенә обращаться итегеҙ инде, ошонда ултырып үҙен дә, правленский аттарҙы ла һимертә ул.

— Һин әйтмәһәң, белмәҫтәр ине, ни... Бында инструктор кәрәкмәй, иптәш Муллаҡаев! — тине Сафа, урынынан күтәрелеп һәм, Ғәлимәгә көрәктәй ҡулын һуҙҙы:

— Ҡайҙа, килтерегеҙ.

— Нимәне? — тип аптыраны Ғәлимә.

— Распоряжениены. Неграмотный булһаҡ та, яҙыу таныйбыҙ, һеңлем. Бында ат бойороҡһоҙ бирелмәй. Һылыуҙарҙың һылыуы килгәндә лә. Атаң ҡураһы түгел.

— Бәй, Йәрмит Вилданович һеҙгә әйтермен, тигәйне бит.

— Я ничего не знаю. Дауай ҡағыҙ!

— Мин агроном бит. Миңә тиҙ үк баҫыуға сығырға кәрәк, — тип ныҡышты Ғәлимә.

— Миңә тимәгәйе, әллә кем бул. Төп Ҡанунығыҙ СССР Конституцияһында “агроном законға буйһонмай” тиелмәгән. Әгәр ҙә , яңылышһам, тейешле пунктын килтереп күрһәтегеҙ, ҡарарымды отменять итермен, — тине Сафа, эре сирттереп. Ғәлимә буш ҡул китергә мәжбүр булды.

— Ҡара уны, абзый, аттарыңдан баҫыу йүнәлешен онотторт. Ҡалансаңда йоҡлап ятып ҡарамай, игенде тапатһаң, аттарыңа ҡушарлап тышаулармын үҙеңде! — Конституция белгесенә мәғәнәле бармаҡ янаны.

— Тәүҙә үҫтер әле игенеңде, шунан һөйләшербеҙ! — Асыу-фәләнһеҙ мығырҙап ҡалды Сафа. Ғәлимәнең йөрәгендә тәүҙә нәфрәт тоҡанһа ла, бара-тора һүрелде. “Ысынлап та, ҡағыҙһыҙ бирә алмай шул. һәр ҡайҙа ла тәртип кәрәк. Быуынһыҙ урынға бысаҡ салғанмын икән дә”, тип уйланы. Әле йәйәүләп сығырға, аяҡ еткән ерҙе әйләнеп ҡайтырға. Бәлки, берәй ылау ҙа тура килер.

Ауылды артта ҡалдырғас, велосипедҡа атланған Муллаҡаев ҡыуып етте.

— Әйҙәгеҙ, үҙем алып йөрөйөм, — тип тәҡдим итте, тимер атының алғы һыртын күрһәтеп. Ғәлимә тағы ҡыҙыҡһынып уның маңлайын, танауын ҡарап алды. “ФамилияҢ муллалы ла ул муллалығын, әммә үҙең шымарған өйрәккә оҡшайһың”, тип һөҙөмтә яһаны тиҙ генә һәм, яғымлы өндәшеп, тәҡдимдән баш тартты.

— Әйҙәгеҙ инде, любой теләгән ерегеҙгә алып барып еткерәм! — тип ныҡып ҡараны егет.

— Велосипедта пассажир булып йөрөүҙе яратмайым! — Ҡырт киҫте ҡыҙ.

— Пардон. Как хотите! — Муллаҡаев та ҡырт боролоп, педалдәрен йән-фарманға иште. Осло галифеләре байтаҡ ара ялпылдап күренеп барҙы.

Күп тә үтмәй, ҡырандаслы ат ҡыуып етте, Ғәлимә тәңгәленә килеп туҡтаны. Ҡуҡырайып Сафа ултыра ине.

— Агроном туташ, дилижанска рәхим итегеҙ! — Ҡырандас ҡырынан һалындырған аяҡтарын бейетеп, хәйләле йылмайҙы.

— Рәхмәт, атсы уҙаман, йәйәү ҙә йөрөй алам мин, — тине Ғәлимә, Сафаның үҙ ауазы менән.

— “Атсы” түгел, ә өлкән конюх һәм өлкән пожарник иптәш Сафа Тоҡомбаев! — тине тегеһе, ифрат мәғәнәле кәперәйеп. Шаярыпмы, ысынтылапмы әйткәнен төшөнә алманы ҡыҙ. Сафа ҡырандастан төштө һәм дилбегә башын тантаналы рәүештә ҡыҙҙың ҡулына тапшырҙы:

— Ҡабул ҡылып алығыҙ, иптәш агроном.

— Ҡағыҙ кәрәкмәйме ни?

— Бер юлға был хатағыҙҙы иҫәпкә алмаҫҡа булдыҡ.

— Рәхмәт, Сафа уҙаман! — тине Ғәлимә, аҡ кейеҙ түшәлгән ҡырандаҫҡа менеп ултырып. — Ут һүндереүсе булһағыҙ ҙа, йөрәк утығыҙ һүнмәгән икән әле. — һәм дилбегә ҡағып атты ҡуҙғалтты.

— Рәхмәт иҫертәме икән һуң? — тине Сафа. Ғәлимә атты юрттыртып китеп барғас, ашығып ҡысҡырҙы: — Иртән ҡағыҙ килтерергә онотмағыҙ, ҡағыҙ!

Юл ҙур массивлы баҫыу ситенән үтә. Сәскес сыйып киткән дискы эҙҙәрен, тере үлән араһында һары гәрәбә юлағылай һуҙылған — күмелмәгән бойҙай бөртөктәрен күргәс, агроном барыһын аңланы. Атын ҡалдырып, баҫыу эсенә йүгереп инде. Итек ҡунысынан йылтыр ҡорос линейка сығарып тыҡты ергә. Уныһы өс-дүрт сантиметрҙан да ары үтмәне: “табан” тип аталмыш ҡаты ҡатлам ята. “Агротехникаға төкөрөп ҡарайҙар икән бында!..” — тине; үҙе лә белештермәй, гәрәбә бойҙай бөртөктәре өҫтөнә тырнап тупраҡ ышырҙы. Бер

көтөү ҡарға, ерҙе ябырып, бөртөктәрҙе сүпләп кинәнә. “Их, өлгөрмәнем, — тип әсенде Ғәлимә, йәне көйөп. — Ваҡытында килеп етмәнем!” һәм үҙенең, урынға тәғәйенләүҙәрен көтөп, район ҡунаҡханаһында аҙнанан артыҡ ҡаҡланыуына үкенде. Ниңә уны шунда уҡ ебәрмәгәндәр?..

Баҫыуҙың арғы башынан, ҡара матрос салбарының яҫы балаҡтарын ялпылдатып, хисапсы Ғәлимдең йүгергәне күренде.

— Бауыр аҫтынан ел үткәрергә сыҡтыңмы, һылыу? — тине ул, ых-бых килеп, йыш һулыш алып.

— Баҫыуыбыҙ һылыу түгел бит әле, — тине Ғәлимә. — Ниңә былай сәстегеҙ?

— Әлә генә шуның өсөн Дәүәй менән ирештем.

— Эш ниҙә һуң?

— Түрәләрҙе еңеү ҡыйын. Улар өсөн төп маҡсат — эш пландары ваҡытынан элек үтәлде, тип районға сводка биреү. Күҙ буяуҙың сигт еҡ.

— Таптыртырбыҙ ул сикте! — Ҡул болғап йүгереп барып, сәсеп килеүсе агрегатты туҡтатты. Кабина ишегенән башын һонған трактористы яғаһынан һөйрәп төшөрҙө. — Кем һин? Ниңә брак яһайһың, әҙерләнмәгән ергә сәсәһең?

— Уй-уй апай! Дәүәй ағай үҙе ҡушты бит!

— Ә мин һиңә хәҙер үк эште туҡтатырға, агрегатты баҫыуҙан сығарырға бойорам!

Сәскестән ырғып төшөп, өлкән сәсеүсе ғирфан йүгереп килде:

— Һаумыһығыҙ, кем һеҙ? Ни хаҡығыҙ бар?

— Уның хаҡы ҙур, — тине Ғәлим. — агроном Ғәлимә һылыуың был. Уның һүҙе — закон. Кисекмәҫтән бойороғон үтәгеҙ!

— Ауыҙың ни һөйләгәнен ҡолағың ишетәме һинең, Ғәлим?

— Ә һин, ғирфан ағай, үҙеңдең, сәсеүсе генә түгел, ә урыусы ла икәнеңде онотма. Көҙгөһөн комбайныңдың бункерына нимә һуҡтыртырһың икән? Анауы үҫеп ултырған билсән тупалсыҡтарынмы?

— Уныһы шулай ҙа ул... — тине ғирфан. — Ә бына бригадир, рәйес иптәштәр алдында кем яуап бирер икән?

— Үҙем бирермен яуапты! — Ғәлимә ҡул һелтәне. — Сығарығыҙ агрегатты баҫыуҙан!

— Ә һин, ҡустым, — тине Ғәлим трактористҡа, — тиҙ генә анауы культиваторыңды таҡ та йомшартырға кереш. Бер аяғың — бында, икенсеһе тегендә булһын!

Агрегат ер башына туғарылып, культиватор баҫыуға төшкәс кенә, аҙыраҡ тынысланып, ҡырандас эргәһенә килделәр.

— Ҡарале, әй, ваҡытың бармы? — тине Ғәлимә.

— һинең өсөн, һылыуым, ваҡытымдың сигт еҡ.

— Алайһа, ултыр әле яныма, баҫыуҙарыбыҙ менән таныштыр.

Бөйөргә бөйөр терәшкәс, яҡынлыҡтарынан икеһе тиң тулҡынланып, өндәшмәйерәк барҙылар.

— Айһай, һылыуым, төтөнһөҙ дөрләп янмаһаҡ ярар ине...

— Фани донъяла янһаҡ, баҡыйында янмабыҙ, ти торғайны олатайым.

— Эйе... “Башҡортостан әгәр йәшәр, тиһәң,/Бер үҙемә миллион үлем бир!” — Шәйхзада Бабич.

— “Беҙ үҙебеҙ өсөн йәшәмәнек — /Башҡортостан өсөн йәшәнек!”

— Бынығы кемдән әле?

— Унығы мөһим түгел.

Тауҙан — тауғаса йәйрәп ятҡан йыған киңлегенә етеп, шул киңлектең ситендә туҡталдылар. Өҫтәл кеүек иҫ китмәле тигеҙлек битләүендә, күкәй һарығылай тос сағыуланып, һары сәскә баҫыуы айбарлана; бал ҡорттары быжылдашҡан шул һары сәскәләр араһында, ара-тирә, ҡуҫҡыл арыш ужымдары уйпатланып тимгелләнә. Ғәлимә төшөп йүгерҙе:

— Әһәлүк! Бына ҡайҙа икән ул татлы ҡаҡылыҡ! — һары сәскәлектең иң ҡуйы урынына етеп, ҡосаҡ тулы көпшә һындырып алып килде. Ғәлимгә ҡайнар тәнен терәп ултырып, атты ҡыуаланы ла, һынығынан һуты бытлығып торған көпшәнең ҡабығын ынйы тештәре менән һыҙырып, күҙҙәрен ләззәтле йомоп, бер осон кертелдәтеп ҡапты, икенсе башын Ғәлимгә ҡаптырҙы. — Ҡаҡынан да татлы сихәт юҡ донъяла!

Ҡаҡы көпшәһен ике осонан кертелдәтеп ашай-ашай ирендәр яҡынлашты ла бер-береһенә тоташты... Ғәлим ҡыҙҙың таңһыҡ һынын ҡыҫып ҡосаҡланы, баяғы романдарҙа тилереп уҡыған, кинофильмдәрҙә күргән һәм үҙенә матурлыҡтың, гүзәллектең эталонын тыуҙырған һын, хыялдарҙа иҫертеп һынланған һын, тап ошо ҡыҙ икәнлеген аңланы...

— Етте, кәрәкмәй! — тине ҡапыл Ғәлимә, ирендәрен ирендәрҙән айырып, ике араға һалҡын бушлыҡ ҡалдыра биреп ситләште. Егет тә айный биреп, әле генә бар есемен өтөп алған кисерештән йыраҡлашырға тырышты.

— Ҡайҙа килеп эләктем, әллә бында Совет власы юҡмы? — тине Ғәлимә, һүҙҙе ҡапыл ғәмәли тормошҡа ҡайтарып.

— Бар, нишләп булмаһын. Секретарь Сәлемғолдо күрҙең бит.

— Фи, Сәлемғол... Танауын сыйырҙы ҡыҙ. — Әгәр ҙә ки Совет власы унан торһа, йәшәргә теләмәҫ инем.

— Ә шулай ҙа матайына атланырға әҙерһең.

— Минең нимәгә әҙерлекте кем белә? Хатта үҙең дә шәйләмәйһең, тельняшкалы матрос була тороп та...

— Ҡыҙ-кырҡындың эсендә лә ҡырҡ арба сер ята, тиҙәр...

— Ярар, һиндә лә сер аҙ түгел... Ә хәҙер бер ябай серҙе асыҡлайыҡ: ниңә һуң был гүзәл яҫылыҡта, өҫтәл өҫтө кеүек тигеҙ баҫыуҙа, мин яратҡан ҡаҡы гөрләп сәскә ата? Ҡаҡы сәсеп үҫтерҙегеҙме әллә?

— Яңылышаһың, һылыуым. Колхозыбыҙҙың эш йәһәтлеге буйынса данланған, әммә уңышы буйынса һанға һуғылмаған арыш баҫыуы ҡаршыһында торабыҙ!

— Ә?! Ни ишетәм?!

— Дөп-дөрөҫ ишетәһең. Быйыл да уңышын урып аласаҡ арыш баҫыуыбыҙ был.

— Булмаҫ!

— Беҙҙең заманда, беҙҙең колхозда бөтәһе лә була ул.

— Беҙ һыйланған ҡаҡы ла әллә арыш бөртөктәре бирәме?

— Шау һары сәскә араһында уйпат-уйпат йәшеллек күрәһеңме? һирәк-һаяҡ ысын арыш шытҡан унда. Дөрөҫөрәге, тыу арыш.

— "Тыу арыш" тигән сорт бармы һеҙҙә?

Ғәлим көлдө:

— Бына һиңә агроном... тыу арышты ла белмәгәс...

Йөҙө бурҙатланып оялған Ғәлимә, ниһайәт, төшөнгәнлегенә ҡыуанды:

— Ә, беләм! Үҙе үҫкән арыш!

— Тап үҙе! һөрмәйһең дә, сәсмәйһең дә, — бер нисә йыл дауамында үҙе шытып, үҙе үҫеп, үҙе башаҡ ҡыҫып-бешеп тик ултыра. Тик һуңлатып ҡына урырға кәрәк — бөртөктәренең ярты һы ергә ҡойолоп, ужымға шытһын өсөн...

— Ә бынан ни мәғәнә?

— Бик ҙур мәғәнә! Йыл һайын колхозыбыҙ, өс йөҙ гектар арыш ере һөрөлдө, сәселде, урып алынды, тип хисап бирә юғарыға, планды үтәүҙең тиҙлеге буйынса районда алдынғы урын тота, гәзиттәрҙә маҡтала, хөрмәтләү грамоталары, хатта күсмә Ҡыҙыл байраҡтар ала... Трактористарға ла йәтеш: эшләмәгән өсөн — эш хаҡы, ә яғылыҡҡа экономия... Бына шул атаҡлы арыш баҫыуында баҫып торабыҙ.

— Күҙ буяу бит был, юҡ, улай ғына түгел, — енәйәт!

— Уның ҡарауы, ваҡытынан элек үтәп сығтыҡ, тип сводка бирелгән.

— Тимәк, былтыр туңға һөргән ике йөҙ гектарҙың юҡмышлығы ла ысын булып сыға?

— Кем әйтте уны һиңә, ысын түгел, тип?

— Бөтәһе лә... Мәҫәлән, үҙең белгән "совет власы" Сәлемғол...

Ғәлим йөҙөн һытып ситкә төкөрҙө:

— Ишеткем килмәй исемен!

— Башҡа һыймай: ҡайҙа булған ул ике йөҙ гектар?

— Киттек, алайһа, бармағым менән төртөп күрһәтәйем!

Атты яй ғына атлатып, "арыш баҫыуы"ның буйлыҡ ситенә сыҡҡас, Ғәлим дилбегәне тартып туҡтатты:

— Иғтибар: күрәһеңме ер ситендәге йылдан-йыл һөрөп еткерелмәй ҡалдырылған ике-өс сажин киңлегендәге ҡарағураны (йәғни, һеҙҙең китапса әйтһәк, залежды)? Йыл да шулай ҡалдырылып, массив тарайғандан-тарая, әммә бөтә ҡағыҙҙарҙа тәүге киңлегендә иҫәпләнә. һәр массивта ошондай уҡ хәл. Шуларҙы үлсәп сыҡҡас, фашланды етешмәгән утыҙ гектар.

— Да-а-а... инаныслы. Ә ҡайҙа һуң ҡалған йөҙ етмеш гектарың?

— Уныһы ана анауы тау артында көтөп ята.

Ҡалҡыулыҡты артылғас, ике оҙон ҡырла араһында күҙ күреме һуҙылып киткән тигеҙлек хасил булды.

— Ошо инде былтыр "туңға һөргән" нәҡ йөҙ етмеш гектар ер.

— һин, әй, йәш агроном тигәс тә, һөрөлгән ерҙе сиҙәмдән айыра алмаған шыр тилегә һанайһыңмы мине? — Ысынтылап үпкәләне Ғәлимә. Көлөүен саҡ тыйған егет, ырғып төшөп, ҡыҙҙы ҡырандастан күтәреп алды ла битен супылдата үбеп баҫтыртты:

— Әйҙә, баҡтыртып күрһәтәйем! — Ҡыҙара-бүртенгән агроном өндәшмәҫтән эйәрҙе.

— Бына ул баҫыуҙың сиге! — Күп йыллыҡ ҡуйы бүтәгә ҡаплаһа ла, буй һырланып беленеп ятҡан элекке ситке бураҙна соҡорон күрһәтте. — Үҙәндең арғы ситендә лә ярылып ята ошондай уҡ иҫке сик бураҙнаһы. Сиҙәмгә әүерелһә лә, был үҙәндең исеме лә иҫкесә, баҫыуҙыҡынса — "Йөҙ етмеш гектар" тип йөрөтәбеҙ...

— Уф, йығылып үлерлек!..

— Ә бөгөн генә минән, сәселмәгән ерҙе сәселде, тип сводка биреүҙе талап иттеләр... Әгәр шуны яҙып бирһәм, майлаған һымаҡ китәсәк, бөтәһе "шиты-крыты" буласаҡ...

— Ә намыҫ тигәнең ҡайҙа?

— Где была совесть — там фәлән нәмә вырос, тиҙәр бит урыҫтар...

— Юҡ! Юл ҡуймабыҙ! Яҙма ул сводканы! — тине Ғәлимә.

Шатор-шотор матай тауышы һиҫкәндертте, ҡылғанлыҡ араһынан, тимер атына атланып, Сәләмғол пәйҙә булды, былар эргәһенә етеп туҡтаны. Төшөп, Ғәлимгә һис иғтибар итмәгәндәй, ҡыҙҙы ғына ҡыҫҡырып сәләмләне:

— Привет, моя красавица! Ниңә был яҫы балаҡлыны тыңлайһың?

— "Һың" түгел, ә "һығыҙ"! — тип киҫәтте агроном.

— Ярай, "һығыҙ" так "һығыҙ"... Тыңламағыҙ уны! Уның һөйләгәне — көллө ялған! Эшкинмәгән негодяй ул — яҙғы сәсеү бөтөү менән үк эшенән ҡыуыласаҡ!

Өндәшмәй тыңлап торған Ғәлим тештәрен шығырҙатты:

— һин, мәхлүҡ!— Саҡырылмаған ҡунаҡты ул һә тигәнсе яғаһынан бөрөп алып ергә йыҡты, өҫтөнә атланып ултырҙы. Ике ҡулын ергә ҡыҫып, битенә төкөрҙө. — Ниңә араға керәһең, һуҡыр себен!

Бәләкәй саҡтарында ла ул бер мәртәбә үҙенән бер йәшкә өлкән ошо Сәләмғол-малайҙы, тап ошолай, ҡаҡ ергә ләпәштереп тотоп ятҡайны. Сөнки, йылғаға һыу инергә төшөү һуҡмағы улар янындағы тар тығрыҡтан үткәнлектән, Сәләмғол, ситәндәре артында боҫоп тороп, малайҙарҙың башына таш бәрә ине. Ҡаны ҡыҙған Ғәлим-малай, ситән аша ырғып төшөп, уны салҡан әйләндерә һалғайны; мәсхәрәгә батырып, икенсе улай итмәмен, тип ант иткәненәсә, ысҡындырмай тотҡайны... Инде шул хәл баҫыуҙа ҡабатлана...

— һин үҙең ул, гад, беҙҙең араға керәһең! — тине лә Сәләмғол, һыңар ҡулы бушаныуҙан файҙаланып, Ғәлимдең күҙенә бер ус тупраҡ тырнап алып һипте, көтөлмәгән хәлдән Ғәлим ике күҙен ыуалап артҡа янтайҙы. Тегеһе ырғып торҙо ла уны ҡанығып типкеләргә тотондо, Ғәлимә икеһен айырып сарылданы. Шул арала Ғәлим ырғып тороп, Сәләмғолдо йәнә йыға һуҡты һәм шунда уҡ пинжәк иҙеүенән тартып торғоҙоп, матайы яғына елтерәтеп алып барҙы ла ҡаты итеп осаһына тибеп ҡалды:

— Бар, кәзәң янына олаҡ, Кәзәтәкә!

— Я запомню! Ответишь за все это! — тип йоҙроҡ болғаны ла Сәләмғол матайынан күк төтөндәр борхота-борхота тайҙы.

— Я тоже не забуду! — тип ҡалды быныһы. Башын сайҡап аптырап торған ҡыҙ уға яҡыныраҡ килде:

— Ғәлим... мә ҡулъяулыҡ. Ниңә уны Кәзәтәкә тип атаның?

Егет өндәшмәне, сөнки әйтеүе оят. Бынығы ла тиктән түгел — Сәләмғолдоң “айғыры”на баш була алмай алйып йөрөгән үсмер сағының мәсхәрәһе... Уны күрше кәзәһенең осаһына ялғанғаны хәлендә тоттолар ҙа ыштанын һалдыртып туҡманылар, өстәүенә, ҡушамат йәбештерҙеләр...

— Ни тигән һүҙ ул, ни өсөн? — тип ныҡыны Ғәлимә.

— Уныһын үҙенән һора. Ғәфү ит... — Ғәлим, ҡыҙҙың йөҙөнә ҡалҡынып ҡарарға ҡыймай, ер башында ташлап киткән велосипеды тарафына йәйәүләне. Ғәлимә лә, башын сайҡап бер талай аптырап торғас, ҡырандасына ултырҙы, дилбегәһен тартты.

IX

Көн һайын иртәнге сәғәт һигеҙгә ҡырҙағы эштәрҙең барышы тураһында хисапсы колхоз идараһына сводка бирергә тейеш. Мәғлүмәттәрҙе шунда уҡ телефон арҡылы райкомға тапшыралар: унда айырым бер кеше даими ошо мәсьәләләр менән генә шөғөлләнеп ултыра. Шуға күрә эш бик ҡәтғи ҡуйылған: “Сәсрәп кит, ә сводканы үҙ ваҡытында килтереп еткер!” — тиҙәр ине Ғәлимгә. Хисапсы хеҙмәтендә иң мөһим нәмә икән ул сводка биреү. Уны төҙөү өсөн, тәүҙә, тәүлек эсендә эшләнгән эштәрҙең бөтәһен үлсәп, хисаплап сығырға кәрәк. Сводка — көндәлек хеҙмәттең йомғағы, уға ҡарап хисапсының кемлеген белеп була.

Бөгөн Ғәлим эшен иртәрәк бөтөрҙө. Ул идараға ингәндә, сәғәт етене лә һуҡмағайны әле. Иркенләп ултырып яҙҙы. Был сводка элеккеләре кеүек ашыҡ-бошоҡ ҡына эшләнмәне, Ғәлим уны шыма аҡ ҡағыҙға бөхтә графалар һыҙып, эре матур хәрефтар менән ләззәтләнеп атҡарҙы. Аҙаҡҡы цифрҙы сәпәп, ҡул ҡуйғас, ручкаһын һалды ла арҡаһын ултырғыс артына терәп кирелде. “Бына тәүлек тә үтеп китте һәм мин үҙ вазифамды шул тәүлектең ҡойроғонда һөйрәлтмәй үтәп бөтөрҙөм”, тип уйланы ул, ҡәнәғәтләнеп. Сводка яҙып биргәне һайын, ошо тойғо шатландыра уны.

Бухгалтер Ибәт, бөтә эшен туҡтатып, сводканы өйрәнергә кереште. Ул быға тиклем уны, уҡып-нитеп тормаҫтан, делоға теркәр ҙә ҡуйыр ине. Талған күҙҙәрен Ғәлимгә төбәне:

— Егет, бөгөнгө көндә нисә гектар бойҙай сәселде?

Ғәлим әйтеп бирҙе.

— Яҙғы сәсеүҙе бөтөрмәнегеҙме ни әле?

— Юҡ.

Мейес ауыҙы алдында тәмәке көйрәтеп ултырған ағайҙар хихылдашты.

— Бына, ишеттегеҙме уның нимә әйткәнен? — тип, тотанаҡ-ярҙам көткәндәй, уларға төбәп өндәште Ибәт. — Бая ғына Дәүәй үҙе килеп яҙғы сәсеүҙе бөтөрөп киткәйне, хисапсыһы тағы киреһен һөйләп тора. Што неҙ, егеттәр, улай ярамай ҙа инде! Хәҙер һиңә немедленно сводканды төҙәтергә кәрәк. Сөнки Дәүәй биргән мәғлүмәт районға китте инде.

— Юҡ, мин төҙәтә алмайым. Ул мәғлүмәт өсөн уны биргән кеше үҙе яуаплы. Бойҙай сәселеп бөткәнт еҡ әле! — Ғәлим китергә ашыҡты. Был хәл Ибәткә аҫтына ут ҡапҡандай тәьҫир итте:

— Туҡта әле, егет, туҡта! Былай булһа, мин председателгә еткерәм, үҙе менән һөйләш! — Атылып рәйес бүлмәһенә инеп китте. Ағайҙар йәнә хихылдашып алдылар ҙа, тәмәке төпсөктәрен йәһәт мейес эсенә ырғытып, ҡыҙыҡһынған хәлдә ваҡиғаның үҫешен күҙәттеләр.

Ғәлим рәйес кабинетына саҡыртылды. Ашыҡмай ғына, ҡағыҙҙарын йыйып кеҫәһенә һалды. Теләр-теләмәҫ атлап сыҡты — рәйес менән ниндәй һүҙ булырын яҡшы белә.

— Ну, әләгә-тек әләгә хәҙер мырҙаңа! Ҡыҙған табаға баҫтыртып бейетәсәктәр! — тип устарын ыуаланы тамашасылар.

Йәрмит өҫтәле артынан һөҙөп ҡарап ҡаршыланы. Ибәт, аяғөҫтө хәлдә өҫтәлгә эйелеп, тиҙтеккестән рәйескә бөгөнгө сводканы күрһәтә.

— Ана, егет үҙе килде, — тине ул, Ғәлим ингәс, һәм, иркенләп, күн көплө диванға ларҡайҙы. Ғәлим рәйескә сәләм бирҙе.

Йәрмит, өҫтәленә эйелеп китеп, нимәлер яҙа ине. Ғәлим кабинет эсенә күҙ йөрөтөп алды. Ҡыҙыл буҫтау ябылған тос имән өҫтәлдең урта тошонда яҙыныу быялаһы һәм ҡалын һары мәрмәрҙән ҡара приборы; шунда уҡ никелләнгән ялтыр сыңғырҙауыҡ; уң яҡта матур ҡара телефон, ә һулда бейек гәзит өйөмө. Бүлмә мөйөшөндә, рәйестең уң ҡулы һуҙылырлыҡ алыҫлыҡта күккә буялған өр-, яңы китап шүрлеге, унда колхозға килмәле гәзиттәр, журналдар, китаптар өйөлөп ята. Бүлмәнең хәтһеҙ ҙур итеп уйылған бер генә тәҙрәһе бар; Йәрмит уның тап урта тошонда симметриялы рәүештә яҡтыға арҡа биреп ултыра, тыштан төшкән нурҙар уның кәүҙә килбәтен яҡшы яҡтырта, шуға күрә ирҙең замана партәлита модаһынса хәрбиләштереп тектерткән , яңы, ҡиммәтле күкшелт кителе буйһынын оҫта скульптор ҡасауы ҡасағандай кәмселекһеҙ балҡыта. Түрә эйәге аҫтына китекләнеп үҫкән май ғына был тәьҫирҙе кәметә төшә.

Йәрмит рәйеслек вазифаһын икенсе генә йыл башҡара ине әле, гөрләтеп эшләй башлаған “утыҙ меңсе” рәйес ҡапыл ғына үлеп киткәс, шуның урынына һайлатҡайнылар, ә быға тиклем ул ете йыллыҡ мәктәп директоры ине.

— Иҫәнме, Ғәлим. Ниңә һин беҙҙең бухгалтерҙың бойороҡтарына буйһонмайһың әле? — Быны Йәрмит, түшәктә хәл өҫтөндә ятҡан ауырыу төҫлө, бик яй, бик ҡыйынһынып әйтте; был иһә ошо минутта уның бүтән бик мөһим мәсьәләләр менән мәшғүл икәнен белдерергә тейеш ине. “Бухгалтер бойороҡтары”ның нимәлеген белһә лә, хисапсы тура яуапларға ашыҡманы.

— Үҙ эшемде төгәл алып барам. Минең ерҙәремде бухгалтер сығып үлсәгәнт еҡ, — тине.

— “Әйтһәң — һүҙ, төртһәң — күҙ”, тигәндәй, һинең нисек эшләүең беҙгә мәғлүм. Көн һайын өҫтөңдән жалыуға киләләр. Непосредственный начальнигың бригадирҙың да ҡушҡанын үтәмәгәс, һинән ни эш көтәһе ҡала? Ни өсөн сводканы Ибәт ағайың күрһәткәнсә яҙмайһың?

— Яҙғы сәсеүҙе тамамлапмы? Көтмәгеҙ минән ундайҙы. һәм: “фәләп жалыу итә ләв төгән жалыу итә” тип тә ҡыйырһытмағыҙ! Күҙемде баҡтыртып үҙемә әйтһен ул бәндә, әгәр ғәйебем булһа. Ә һеҙ ғәйбәт өйәһегеҙ!

— Социалистик критиканы һин , яңылыш аңлайһың икән, Ғәлим. Беҙ һине ҡыйырһытырға түгел, ә төҙәтергә, ярҙам итергә теләйбеҙ. Насар уйлаһаҡ, беҙ һине күптән сығарып ташлар инек. Ышанмаһаң, бына Ибәт ағайыңдан һора: нисә тапҡыр Дәүәй беҙҙең ҡаршыла һине эштән бушатыу мәсьәләһен күтәрҙе! Трактористар аҙмы тупһа шымарталар! Дошманлыҡ уйлаһам, мин һинең менән һөйләшеп тә тормаҫ инем. Ә һин шуның ҡәҙерен белмәйһең, ашаған табағыңа сысаһың. Колхозсылар араһында етәкселеккә ҡаршы яла таратаһың. һәр ваҡыт ниндәйҙер наҙан люмпендарҙың һүҙен һөйләйһең. Стена гәзитен булһын — минең менән личный счеттарыңды сводить итеү өсөн ҡулланаһың. Ә бит һин партия членлығына кандидат — матбуғаттың шәхси интерестар өсөн файҙаланырға тейеш түгеллеген белергә тейешһең. Кем ҡуйғандыр һине редактор итеп, белмәйем!

Йәрмиттең был сүкеүе, юғары көсөргәнешле электрҙың металл тишкес осҡондары кеүек, Ғәлимдең мейе төпкөлөнә үттеләр. Танауы һыртына бөрсөкләнеп тир сыҡты, ҡолаҡтары ҡар менән ыуалағандағылай янып ҡыҙарҙы. Йәрмит әйткән тыныс йөмләләр артында оҫта йәшәрәлгән мәкер барлығын һиҙҙе егет һәм ул мәкерҙе тышҡы кейеменән нисек арындыртырға, энәләрен тырпайтып яланғасландыртырға икән, тип уйланды. Әгәр шулай эшләһә, бөтәһе асыҡланыр, кемдең ҡайҙа тартҡаны күренер ине.

...Стена гәзитенә редактор итеп һайланғас, Ғәлим бик дәртләнеп тотондо эшкә. Бала саҡтан уҡ әҙәбиәтте һөйә, хатта шиғыр ҙа яҙып маташа ине. Шуға күрә партйыйылыштың был йөкләмәһен ихлас күтәрҙе. Аҙ булһа ла, әҙәбиәткә яҡынайғандай тойҙо үҙен. Элек парторг төрткөсө арҡаһында ғына һирәк-мирәк сыға торған гәзит тиҙ үк тәртипкә килтерелде, һәр һаны үҙ ваҡытында, йөкмәткеһе байыраҡ булып донъя күрҙе. , яңы редколлегия шуның менән генә ҡәнәғәтләнмәне, “Борос” исемле сатирик ҡушымта ла барлыҡҡа килтерҙе. “Борос” ялҡауҙарҙы, булдыҡһыҙ етәкселәрҙе, оғроларҙы әсеттереп көйҙөрә торған яугир ҡоралға, колхоздың кескәй генә үҙ “Крокодил”ына әүерелде. Колхозсылар һәр һанын көтөп алалар, “Борос”тоң үткер куплеттары шунда уҡ телдән-телгә күсеп тарала башлай, берәүҙәрҙе кинәндертеп көлдөртә, икенселәрҙе сырай һытып ҡаты һүгенергә мәжбүр итә. Ләкин гәзиттең абруйы күтәрелгән һайын, Ғәлимдең тирәһендә кенә тотоп йөрөүселәр күбәйҙе. “Борос” әсеһен татыған һәр бәндә быны Ғәлимдән күрә, уға ҡырын ҡарап, хас һалып йөрөй. Ғәлим уларҙың аңһыҙлығы, тәнҡит тигән нәмәне дөрөҫ ҡабул ҡылмауҙары тураһында уйлап көйөнә. Бүре булып ҡараусылар араһында колхоз рәйесе Йәрмит тә бар шул...

Бер саҡ, ҡарынына тимер сыбыҡ ҡаҙалыу сәбәпле, колхоз һыйырын һуйып алғайнылар. Ҡыш көнө ине, ит айҙар буйы келәттә аҫылы торҙо. Уны турғайҙар суҡыны, ҡомаҡтар кимерҙе. Ниһайәт, баҙарға илтеп һатырға ла “аяҡ урынына тояҡ” алып ебәрергә ҡарар итәләр. Келәтте асып ҡарағас, ревкомиссия ағзалары ҡаушауҙарынан ултыра төшә яҙғандар: түшкә ҡомаҡ тарафынан мөнтәлеп, сөйҙә ҡаҡ һөлдәләр шауҙырҙап тора... Шул көн урамда утиль йыйыусы йөрөгән икән;

һөйәктәрҙе шуға һатып, колхоз быҙауҙары өсөн резинкә имеҙлектәр алып ҡалғандар...

Был әкәмәтте “Борос” үҙенең нәүбәттәге һанында бик әсеттертеп тамғаланы. Үткер бәйет бер көн эсендә бригадаларға, фермаларға таралып өлгөрҙө. Кискенән уны йәштәр, гармунға ҡушылып, урамда йырлап үттеләр. Хатта быға тиклем гәзиткә иғтибар итмәгән ҡарт-ҡоро ла, сәмләнеп, рәйестең яуабын көттө. Тик Йәрмит сер бирмәне: хатта гәзиттең барлығын да белмәгән кеүек, баҫалҡалы, тыныс холоҡ күрһәтеп, эре, ныҡ аҙымдар менән ғорур атлап йөрөнө. Ғәлим, тик һуңлап ҡына, был тыныс-баҙыҡ ҡиәфәттең тышҡы ҡабыҡ ҡына икәнен аңланы. Сөнки Йәрмит шул көндә үк рәсем төшөрөүсене кабинетына саҡырып алып бик ныҡ “бешерҙе”. Редакторға нисектер теше батманы — парторг ҡамасаулаған, тиҙәр. Гәзит, бер тәүлек эленеп торғас, ҡапыл ғына стенанан алынды: етәкселек боростоң әсенән яратманы, ахыры.

Шул ваҡиғанан һуң Йәрмит, уңайы тура килгән һайын, редколлегияны ҡыҫҡыҫҡа алыусан булып китте. Күберәген Ғәлимгә, әле генә әйткәненсә, “печатте шәхси интерестарың өсөн файҙаланаһың” кеүек һүҙҙәр менән бәйләнергә ярата ине. Был яла Ғәлимде бүтәндәрҙең нахаҡ һүҙҙәрен ишеткәндәгеләй һыҙлатмай, фәҡәт нәфрәтләндертә генә. “Уҡымышлы кеше лә ошондай дорфа булыр икән!” тип уйлана ул, көйөнөп...

Йәрмит, ауыҙынан сыҡҡанының бөтәһе лә кире ҡаҡҡыһыҙ саф алтын йомарлаҡтары икәненә тамам инанған ҡиәфәттә, тыныс ҡына яҙыныуын дауам итә. Битендә тулҡынланыуын һиҙҙертерлек бер ҡан әҫәре лә юҡ, ирендәре, боҙҙан уйып эшләнгәндәй, хәрәкәтһеҙ йомолғандар, керпектәре лә, аҫҡа һалынған килеш, һелкенмәйенсә тик тора. Күк күкрәүеләй ҡаты гөрөлтө сығарып ҡыскырғыһы, бәндәнең тәрән һәйкәл тыныслығын селпәрәмә иткәһе килде егеттең. Ләкин тауышы яй, ни өсөндөр, ғәйепленеке һымаҡ көсһөҙ сыҡты:

— Нисек телегеҙ барып әйтәһегеҙ, ағай, бындай һүҙҙәрҙе! Әгәр мин шәхси мәнфәғәтемде йәмғиәттекенән айыра алмайым икән — бындай наҙан, өлгөрөп етмәгән кешене һайламаҫҡа кәрәк ине редактор итеп. Һеҙ үҙегеҙ партбюро ағзаһы бит! Ә “наҙан люмпендар”Ға килгәндә, мин һеҙгә улар тураһында һағыраҡ фекер йөрөтөргә кәңәш итер инем. Улар һеҙҙең менән минән биш тапҡырға аҡыллыраҡ!

— Ошибаешься! Беләһеңме, ни тип атала һинең был демагогиЯң? Хвостицизм ул! Йәғни ҡойроҡта һөйрәлеүсе. АҢһыҙ массаларҙы үҙ артыңдан эйәртеү урынына, һин, киреһенсә, улар һүҙен һөйләйһең, уларға эйәрәһең. Коммунислыҡҡа кандидат кешегә килешмәй улай. Етәкселек артынан барырға кәрәк.

— Яңылыш барған етәксегә эйәреп, ярҙан осҡом килмәй минең! Хәҙерге мәлдә мин һеҙҙең етәкселегегеҙҙә авангардлыҡ билдәләре күрмәйем! — тип, тураһын ярҙы Ғәлим.

— Яланғас политикан! Аҡыллы баш булып һүҙ һөйләргә шәпһең! Ә Ғәмәлдә ниндәйҙер ничтожный хисапсы вазифаһын да йүнләп үтәй алмай илайһың — минең эшемде эшләһәң, ярылып үлер инең!

— Нишләгәндә лә, һеҙҙең һымаҡ, культивацияланмаған ергә бойҙай сәстертмәҫ инем! — Ғәлим рәйестең күҙҙәренә мылтыҡ көбәгеләй тоҫкап ҡараны.

Йәрмиттең йоҡомһорап тонған күҙҙәре шар-асылды һәм ул, боғаҙына үрләп килгән асыуын тыя алмай, ярһып башын ҡалҡытты. “Оҫкон барып тейҙе, хәҙер дары шартлай” тип көттө Ғәлим. Йәрмиттең сикәләре буйлап ҡыҙыл тулҡындар үтте, ул, оҙаҡ яфаланып, төкөрөгөн йотто — әйтерһең, боғаҙына икмәк ҡатыһы ултырған. һәм кинәт ағарынды, буҙарынды, алдында ятҡан таҙа ҡағыҙҙы йомарлап ырғытты. Ажғырып, аяғүрә баҫты:

— Һин, молокосос! Не твое собачье дело минең нимә эшләгәнемде тикшереү! — һәр һүҙен өҙөп-өҙөп, ҡаты баҫымлап сүкене. Бер аҙ тын алғас: — Ҡасан минең йәшәме етеп, минең белгәнде белһәң, шунда минең менән һөйләшерһең! — тип өҫтәне. Үҙенсә, Ғәлимде үлтереү ине был. “Эйе, эйе, мин — наҙан. Ҡасанмы юғары белемгә өлгәшмәй тороп, юғары белемлеләр менән бойондороҡһоҙ һөйләшергә хаҡым юҡтыр, күрәһең...” — Әсе фекер яндырып үтте есемен. Ләкин бер тойғо, йөрәк тапҡырында ләүкеп торған бер тойғо, уны ваҡытһыҙ сигенештән тота ине.

— Эйе, йәшем һеҙҙекенән кесе, ләкин мин йәшәрмен, һеҙҙе ҡыуып үтеп тә китермен әле, ағай. Минең белемем һеҙҙекенән түбән, ләкин мин арттырырмын уны. Кеше — һыйыр түгел, ул үҙ ғүмерен ашап-эсеп кенә үткәрмәй... Ә хәҙерге ваҡытта һеҙҙең менән типә-тиң һөйләшергә миңә партиялы намыҫым, ниһайәт, кешелек вырҙаным хоҡуҡ бирә!

— һин башҡаларҙы тәнҡитләү өсөн генә партияны иҫеңә төшөрәһең, ә үҙеңде тәнҡитләгәндәрендә онотаһың! — Йәрмит ярһып ҡысҡырҙы: — һинең тәнкитең — серек тәнҡит! һин кеше өҫтөнә сүп өйөп кенә йөрөйһөң. Ә һин беләһеңме “Ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтының Тәҡдиме” тураһында? Белмәйһең! Унда какраз сүпһеҙ ерҙәрҙе культивацияламай сәсергә рөхсәт итәләр. Сөнки иртә сәселгән иген сүп үләндәренә күтәрелергә ход бирмәй. һин, тимәк, һәр аңлы колхозсының ҡуйын китабына әүерелгән рекомендацияны ла уҡымағанһың, ә ауыҙ тултырып һүҙ һөйләйһең!

— Уҡыным мин ул брошюраны, ярһымағыҙ!

— Уҡығас, ниңә сығынсылайһың?

— Һин... һеҙ барып ҡарағыҙ ул ерҙең нисек “сүпһеҙ” икәнен! Кәҫ өҫтөндә — кәҫ, сүп өҫтөндә — сүп, сәскес дискылары бата алмай. Бер нәмә лә белмәйһегеҙ, ә һөйләйһегеҙ. Кабинет бүкәне һеҙ! Күҙле бүкән! — тине Ғәлим, ғәрләнеп.

— Ладно, ладно, не болтай. Делом надо заниматься, ә һин буҡ тибеп ғүмер уҙҙыраһың. Йәки йоҡлайһың. Эйе, йоҡлайһың — бер ваҡытта ла иртә тороп ҡырға сыҡҡаның юҡ. Бөтәһен түшәмдән алып яҙаһың.

Белә ине шул Йәрмит егеттең йөрәгенә нисек сәнсергә! Иртә тороп йөрөүен дә күрмәмешкә һалыша. Бәхәс ыҙғышҡа әүерелә башланы. Коридорҙағы ағай-эне, ишекте һаҡ асып, берәм-берәм кабинетҡа эркелде, кәпәсте аҫкараҡ баҫып ҡына, “хужа” менән хисапсы араһында барған дауҙы ләззәтләнеп тыңланылар. Йәрмит, тамашасыларынан теләктәшлек ҡаҙанырға тырышҡан артист һымаҡ, һәр һүҙен үҙенә файҙа килтерерлек итеп, һайлап ҡына ысҡындыра, ә сәме тоҡанып ҡыҙып киткән Ғәлим дә унан өҫтөн сығырға тырыша ине. Тойғоларҙың тап шул сатнау мәлендә генә парторг Рәүеф Бикмырҙин килеп инде лә, күҙлек быялаларын ипләп

кенә яулыҡ осо менән һөрткән хәлдә, оҙаҡ ҡына, һүҙһеҙ, тыңлап ултырҙы ғауғаны. һәм хисапсы үҙенең ҡолағы төбөндә уның уның тыныс нәфрәтен ишетте:

— Бес-совестный икән һин! Һинең ҡаршыңда ниндәй ҙә булһа урам малайы түгел бит — руководитель! Ә һин уның менән нисек һөйләшәһең. Бессовестный һин!

Ғәлимдең башына һуҡтылармы ни! Ҡаушаны, ни өсөн быңдай нәфрәткә юлығыуын аңларға тырышып, үпкә ҡатыш әсенеү менән парторгтың йөҙөнә баҡты. Ләкин унда нәфрәттән башҡа бер ни ҙә шәйләмәне.

—Һеҙ бит ишетмәнегеҙ уның мине нисек мыҫкыллауын! — тине йотлоғоп, күҙҙәренә йәш бөртөктәре яҡынлап килеүен тойҙо.

— Беҙ әле быға тиклем һинең грубый выходкаларыңа түҙеп килдек. Инде бюро ҡаршыһында яуап бирерһең! — тине Рәүеф Бикмырҙин.

— Беҙ һине бер тапҡыр баҫтыртып тикшерербеҙ һәм ҡыуып та сығарырбыҙ эшеңдән, хатта ауылдан! — тип өҫтәне Йәрмит. Ғәлим күкрәгендә был һүҙ ут йомарлағындай яндырып, эйәге май үҫентеле хәйләкәр әҙәмгә ҡарата ысын дошманлыҡ хисе уятты. Тауышының, ағыуланғандай, әсе үскә мансылып сығыуынан ләззәтләнеп әйтте:

— Бөгөндән сығарығыҙ. Рәхмәт әйтермен. Ләкин ауыл һинеке түгел — ата-бабам нигеҙләгән уны! Аңлашыламы?

Йәрмит яҡшы аңланы. һәм аңлатырлыҡ яуапланы:

— Ләкин һин былай ғына ысҡынырмын тип уйлама. Сезон бөткәнсе эшләтеп, позор менән ҡыуабыҙ беҙ һине. Позор менән!

Рәйес менән парторг, бер төптән ҡуҙғалып, тышҡа сығып киттеләр, бухгалтер ҙа ҡуҙғалды.

Әгәр Йәрмит урынында ябай бер колхозсы булһа, Ғәлим, уның өлкәнлеген хөрмәтләү йөҙөнән, ауыҙы тулы ҡанды йотор, ыҙғышын туҡтатыр ине. Әммә аргументтарыңдың дөрөҫлөгөнә иманың камил була тороп та, ғәҙелһеҙлек ҡаршыһында сигенеү — ялағайлыҡҡа тиң хурлыҡ, тип һананы. Тыңлап ултырған колхозсылар һуңынан: “Әһә, батырланып йөрөнөң дә, түрә ҡаршыһында ҡойроҡто ҡыҫтыңмы? Арт яғың таҙа түгелдер, таҙа булһа, сикмәҫ инең!” — тип әйтерҙәр кеүек ине. Үҙ сиратында тотанаҡ эҙләп, шулар яғына күҙ һалды. Бында пожарник, төнгө ҡарауылсы, өлгөрмөш ғүмәр бабай һәм шуның кеүек башҡалар бар ине. Ҡараштарын йәһәт ситкә ҡасырҙылар, ә ҡайһылары асыҡтан-асыҡ хөкөм итеп ҡараны. Ғәлимгә был ярһып ҡыҙған башын бер күнәк боҙло һыуға сумырғандай киҫкен тәьҫир яһаны. Бөтә асыуы, дөрләү сәме — бышылдап һүнгән торомбашҡа оҡшап ҡалды.

— И улым, улым... Мин һине бер аҡыллы егет тип йөрөһәм, сәпсим пустой икәнһең. Йәшем алтмышты ашҡан — шулай ҙа мин колхозыбыҙҙың хужаһы булған кеше менән улай һөйләшергә баҙнат итмәйем. “Яманлыҡ яуға килешһең”, тигәндәр боронғолар. Яҡшы итеп һөйләшергә кәрәк, улым.

Ғәлим шымды, күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, оҙаҡ моңайып ултырҙы.

— Быйыл да икмәк ашай алмайбыҙ икән, тип һыҡтап йөрөүсе үҙең түгел инеңме, олатай? Әллә һин дә тере үлән араһына сәсеүҙе хуплайһыңмы?

— Сүп араһына сәсһәң, сүп ураһың инде ул... Мин дә тап шул турала һөйләшергә килгәйнем дә идараға... “Арыу итеп һөйләш”, тигәнгә генә үпкәләргә ярамай, улым...

— һөйләшеп ҡара. Бәлки, тәмле ауыҙҙан сыҡҡан татлы һүҙ йомшартыр “хужа”Ждың сайыр ҡатҡан ҡолағын! — Ғәлим әсе йылмайҙы ла ишекте ҡаты ябып сығып китте. Ҡолаҡтары сыңлап шаулаған хәлдә, бухгалтерия бүлмәһенә үтте лә өҫтәл эргәһенә ултырҙы. Ҡуйын дәфтәрен сығарып, дерелдәүек бармаҡтары менән аҡтарҙы. Ҡағыҙға яҙылғандар аңына үтеп инә алманылар.

— Йә, аҡылға ултырҙыңмы инде, егет, сводка бирәһеңме? — Өҫтәле артында бөксәйеп ултырған Ибәт һиҫкәндертеп өндәште.

— Ә? — Ғәлим мейеһенә бухгалтер һүҙҙәренең ҡабығы ғына керҙе, үҙәген һеңдермәне.

— Сәсеүҙе бөтөрөп сводка бирәһеңме? — тим.

— Әәә. Юҡ, бирмәйем.

— Бушҡа играть итәһең, егет. Һинең бирер-бирмәүеңдән бер нәмә лә үҙгәрмәй. Уны һинән түгел, ә беҙҙән һораясаҡтар. Беҙ яуап бирәбеҙ отчетность өсөн. — Ибәт, зәһәр һалҡын йылмайып, уның күҙҙәренә текләне.

— Райкомды ҡыуыҡ мәғлүмәт менән алдаған өсөн һеҙгә ысынлап та яуап бирергә тура килер! — тине Ғәлим, Ибәттең үҙе кеүек үк һалҡын йылмайырға тырышып.

— Тимәк, юғарыға жалыу яҙмаҡ булаһың, егет? Яҙ, яҙ, һинең писанинаң барып еткәнсе, бойҙай ҙа сәселеп бөтәсәк. Тикшерергә килһәләр, үҙең тишек кәмәгә ултырырһың. “Клевета” тигән нәмәне ишеткәнең барҙыр бит һинең?

— Юҡ. Мин “мошенник” тигән һүҙҙе генә ишеткәнем бар.

— Ярлы икән телең.

— Подлецтар менән аралашмағанға күрә ул.

Ибәт телен тешләне, яңаҡтарын өрөлдөрөп, ҡағыҙҙары өҫтөнә эйелде. Йәнә башын ҡалҡытты ла тамағынан боҙ һалҡынлығы сығарып ғыжылданы:

— Һин улай, баҡра кеүек, сәнскеләреңде тырпайтма — үҙеңә хуже будет. — Тауышы йомшай төштө. — Яҙ көнө, Һаҡмарҙан балыҡ үрләгәндә, һыуға мурҙа һалып ҡарағаның барҙыр бит? Шамбылар башы һыйған тишектән сығып тая, сөнки тирене шыма, лайлалы. Ә баҡра, лайлаға бай булһа ла, тотҡондан ысҡына алмай — сәнскеләре тотоп ҡала. Үҙ сәнскене арҡаһында һәләк була ул. Бына һин дә хәҙер шул баҡраға оҡшайһың. Һинеңсә, тормошта һәр кешегә шыма асфальт юл түшәлгән. һәр кем, абынмай-һөрләкмәй, шул төҙ юлдан барырға тейеш. Әгәр кем дә кем асфальттең ҡубырсыған ҡытыршыһына эләгеп, шул төҙ юлынан саҡ ҡына ситкә тайпылһа, уны янындағы иптәшенең “критика” тип аталған баҡра сәнскене сәнсергә тейеш, шулаймы?

Ғәлим дә һыуына төштө:

— Яңылыш аңлайһығыҙ. Баҡраға бит сәнскестәр үҙенең ҡан дошмандарынан һаҡланыу өсөн бирелгән. Ә мин дошмандар араһында түгелмен. Әгәр мин, күмәкләшеп һалып ятҡан дәү йортобоҙҙоң баҙыҡлығын ҡайғыртып, эргәмдәге ташсы-иптәшемдең ярыҡ кирбес тотҡан ҡулын ситкә этәрһәм, ул

рыялы кирбесте ситкә ташларға мәжбүр итһәм, был һис тә һеҙ әйткән баҫра сәнскеһе менән сәнсеү булып сыҡмай.

— Ләкин быны һинең иптәшең аңламаясаҡ. Ул, кеше араһында мәсхәрә иткәнең өсөн, ҡуйынында таш йөрөтәсәк.

— Ул да яңғыҙ йәшәмәй. Дөйөм йортобоҙҙоң именлеген ҡайғыртҡан һәр кем уға минең хаҡлығымды аңлатасаҡ һәм аҡрынлап ул быны төшөнәсәк.

Ибәт, сырайын һытып, кенәгәһен япты:

— Ярар, күп һүҙ — буҡ һүҙ, тигәндәр. Һинең урыныңда булһам, начальствоның һүҙен тыңлар инем, бригадаңда көндән-көн арта барған перерасходты ҡаплатыу сараһын яйлар инем. Сөнки норманан тыш яндырылған яғыулыҡ, трактористың ғына түгел, бригадир менән хисапсының да кеҫәһенә һуға. Ә шуны булдыртмау юлдары бар. Нисек итеп эшләргә икәнен мин һиңә өйрәтеп тормайым, сәйнәп ҡаптырғанды йоторға һәр кемең дә мастак ул.

— Аңланым. Эшләнмәгәнде эшләнде, тип, ялған нарядтар тултырырға тейешмен...

— Сәнскеңде тырпайтма, бригадирыңды тыңла. Дәүәй был юлда эт башын ашаған кеше ул. Элекке хисапсылар уның һүҙен тыңлай торғайнылар, шуға күрә һарыҡ та бөтөн, бүре лә туҡ ине. Начальство менән ыҙғышмай ине улар...

Ғәлим бухгалтерҙың тел төбөн яҡшы төшөндө. Түрәләр ҡушҡанса Юғарыға ҡыуыҡ сводкалар осорорға, перерасходты ялған эштәр күрһәтеп ҡаплатырға. Колхоз елкәһе ҡалын, көллөһөн дә күтәрә...

Сығып китейем генә тигәнендә, Ғәлимә килеп кереп һаулыҡ һорашты:

— Ниңә төҫөгөҙ ҡасҡан, ағай, әллә хисапсыбыҙ баш бирмәй ыҙалатамы? — тине Ибәткә.

— Тап өҫтөнә баҫтың, һеңлем. Сводка биреүҙән баш тарта.

— Бойҙай сәселеп бөттө, типме?

— Тап үҙе. Агрономдан йәшерен-батырын түгел, һеңлем: беҙҙең сводкала колхоздың сәсеү кампанияһы тамам. Ә был егет һаман шуны аңламай, бына бында тегеп ҡуйырға үҙенең сводкаһын бирмәй.

— Дөрөҫ эшләй. Тәүҙә йөҙ илле гектар бойҙайҙы сәсеп бөтәйек, шунан һуң сводка бирелер.

Ибәт ҡыҙға ғәйепләүсән текләне:

— Был ни һүҙ?! Етәкселәрсә алдан ҡарап фекер йөрөтмәйһең, һеңлем, ҡойроҡта һөйрәләһең. Районға беҙ бөтөрөп сводка бирҙек...

Ғәлимәнең күҙҙәре ялтыраны:

— Әле генә мин дә бирҙем... телефон аша. Йөҙ илле гектар сәсәһебеҙ бар, тиеп.

Бухгалтер, осаһына энә ҡаҙалғандай ырғып тороп, башын тотоп рәйес бүлмәһенә йүгерҙе. Колхозсылар хахылдап көлөп ҡалды.

X

Йәрмит бала сағын хәтерләргә яратмай. Уның атаһын Кәкүк Вилдан тип йөрөтәләр ине, сөнки ул, ер талымлап, ғүмере буйына бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөнө... Вилдандың атаһы (ә Йәрмиттең ҡартатаһы) революцияға тиклем үк урта хәлле ныҡ ҡына ерекмән ине. Вилдан улын ул, арымай-талмай, хужалыҡ серҙәренә өйрәтте: үҙе фани донъяны ҡалдырып киткәнгә ҡәҙәр алтын ҡаҙығын ауылды дер-һелкетерлек көслө хужа итеп өлгөртөргә тырышты. Ә Вилданы атаһының изге ниәттәрен аҡламаны: ул ялҡау ине. Улының эйелеп сыбыҡ һындырырға ла яратмауын, көллө ғүмерен йылға буйында балыҡ ҡармаҡлап йәки бай малайҙары менән сәкән һуғып үткәреүен күргән ҡарт, өмөтһөҙләнеп, түшәккә ауҙы ла, бер йыл самаһы ниндәйҙер йәшерен сир менән эстән һыҙып ятҡас, мәшәкәтле фани донъяны улының ҡарамағына ҡалдырҙы. Атаһының үлемен Вилдан ысын һөйөүсән бала хәсрәте менән күтәрҙе. "Бынан һуң игенде кем сәсер, бесәнде кем сабыр?" тип ҡайғырҙы ул, ҡарттың иртә китеүенән әсенеп. Шулай хәсрәтләнеп ҡыш үтте, яҙ етте. Йылы Ҡояш, һары һыйыр телен һуҙып, ерҙең йөнтәҫ арҡаһын ялай башланы. Тау биттәре көндән-көн Вилдандың бауырын һыҙлатып ҡарайҙы.Апрель аҙаҡтарында Ҡояш үҙ эшен тамамланы. Инде һабансылар ер арҡаһын ағас һабандар менән сыйып, ҡар аҫтынан ялығып сыҡҡан ер-әсәгә, аҫырап үҫтерергә, гәрәбә орлоҡтар игергә тейештәр ине. Вилдандың күрше-күләне һабандарына тмер төрән ҡаҙаҡланы, тырмаларына осло тештәр ҡуйҙы. Вилдан, ҡото осоп, тиҙҙән үҙенә лә шуны эшләргә кәрәклеген шәйләне. Ҡарттан ҡалған бура төптәре таҡырланғайны инде, малай ялларлыҡ хәл юҡ ине. Күп уйланып йөрөгәс, ҡартайыуҙан алйый башлаған әсәһенә үҙенең өйләнергә йыйыныуын белдерҙе. Быжырлығы арҡаһында онотолоп ҡартайып барған Мәхүбә исемле бер етем ҡыҙ бар ине ауылда. Уның ун дүрт йәшлек энеһе бар ине һәм улар икеһе тиң эшкә бик салт булып, үҙ донъяһын үҙҙәре көтөп тора инеләр. Вилдан хәләл ефетлеккә бына шул ҡыҙҙы һайланы һәм, беренсе бураҙнағаса туй яһап, өйләнеп тә алды. Мәхүбә был йортҡа мәһәр итеп үҙенең һәм энеһенең эшсән ҡулдарын килтерҙе. Ошо ваҡиғанан һуң Вилдан атай үлеме килтергән хәсрәтте өс йыл буйына онотоп йәшәне. Сәүит тип аталған , яңы хакимиәт тә уға ҡырын ҡарамай, ваҡытында ситсаһын, һабын-шырпыһын килтереп тора, юҡсылыҡ йылда орлоҡ менән дә тәьмин итә, ә "ысхут" тип аталған йыйындарҙа уға иң алдағы, элек имам хәҙрәт менән тирмәнсе бай ғына ҡуҡырайып ултырмалы хөрмәтле урынды бирә торғайнылар. Сөнки ул хәҙер "битнәк" (ярлының-ярлыһы) тип атала ине. Шул йылдарҙа аңланы ул "битнәк" исеме күтәреүҙең тәнгә сихәтле икәнен.

Көндәрҙән бер көн Вилдандың ҡәйнеше "хамсамул»ға яҙылды һәм, тимер төрәнле һабанды Вилдандың үҙ ҡарамағына ҡалдырып, әллә ниндәй "магнит тау»ға әллә ниндәй "завот" төҙөргә тип ситкә сығып китте. Был ваҡытта уларҙың Йәрмит исемле йүгереп йөрөгән улы бар ине инде, ә Мәхүбә, ире урынына китеп тирмән тартҡанында ҡапсыҡ күтәрәм тигәнсе билен биртендертеп, ауыр эшкә яраҡһыҙ булып ҡалғайны. Был хәл Вилдандың биленә һуҡты, донъяһын бөлгөнлөккә төшөрҙө, ул уғата "битнәгерәк" булып ҡалды. Хәҙер ирең "ысхут"тарҙа, түбәндәге халыҡ араһында түгел, ә юғары сәхнәлә, ауыл Советы рәйесе менән бер ҡатарҙан буй эскәмйәлә ҡуҡырайып ултыра, ә һөрәнләп

ҡыҫкырышҡан саҡтарҙа уның әсе тауышы дөйөм шау-шоу араһынан, ауылдағы иң шөңгөр әтәстекеләй, башҡаларҙыҡынан элеккегә ҡарағанда ла айырылыбыраҡ ишетелә ине. Эштәр һаман ошолай барһа, ул, бәлки, “сәүит” урынбаҫары дәрәжәһенәсә күтәрелер ине лә... Көтмәгәндә мал-тыуарҙы бер дөйөм һарайға ябып, “халхуз” тигән нәмә ойоштороҙолар, ошонан һуң, хәҙер инде “йыйылыш” тип аталған “ысхут”тарҙа уның ултыра торған урыны һәр көҙ һайын артҡараҡ күсә барҙы. Көҙгө уңыш бүлгән һайын, элекке “битнәк”тәрҙең тырыш-тарамыштарының тормошо күҙгә күренеп көрәйҙе; улар инде шөйлә иркенерәк һулап, күкрәктәрен киреберәк йөрөйҙәр, шанлы “битнәк”лектәрен дә онотоп, элекке мөслө байҙарҙыҡынан да мөслөрәк донъя көтәләр, шатлыҡлыраҡ ҡыҫкырып көләләр, тик, ниңәлер, Вилдан ғына һаман “битнәктең-битнәге” көйөнсә ҡалып, күшеккән тауыҡтай сөршәйеп йөрөй бирә. Күкрәп йылдар уҙа торғас, “битнәк” исеменең элекке абруйы тамам Юғалды, әүәлге “битнәк”тәр хәҙер инде мул тормошло “ударник”тарға әүерелеп, Вилдандың һаман “битнәк” булып йөрөүенән эстәрен тырнап көлә башланылар. Ауылдағы “колхоз идараһы” тигән бер ҙур өйҙә аҡбур һыҙып яҙмалы ике ҙур таҡта барлыҡҡа килде, уларҙың береһе — ҡыҙыл, икенсеһе ҡара төҫкә буялғайны. Ҡыҙл таҡтаға матурлап “ударник”тарҙың исем-фамилияһын яҙалар, уларҙы ҡыҙыл трибунанан, хатта радио аша маҡтап һөйләйҙәр, байрамдарҙа хөрмәтләп бүләкләйҙәр; ә ҡара таҡтаға , яңы заман “битнәг”е Вилдандың исеме теркәлә лә бөтөн ғәләмгә фаш итеп уны әрләйҙәр, “луҙыр” тип көләләр ине. Оҙаҡламай уны шулай “луҙыр” тип кенә атай башланылар. Заманында “битнәк”лектең татлы емешен ейеп күнеккән Вилдан күңеле күтәрә алманы быны, ул уйға ҡалды. Ҡырҙа ыңғырашып һабан һөрөп йөрөгәнендә уға: “Ыстансыла бесән төктәрен өйгән ергә бесән ҡарауылсыһы кәрәк икән” тип ишеттерҙеләр. Ә ошоғаса янғын һүндереүсе булып ҡалансала төйәкләнергә хыялланып йөрөп тә, моратына ирешә алмаған Вилдан, аяҡтарына теклəп, дала эҫеһенә сөрөшөүҙән ҡарт әбейҙең тештәре кеүек һирәгәйеп ҡалған сабатаһының табанын бейәһе артынан шабырҙаған шыйыҡлыҡҡа сылата-сылата хыялланып торҙо ла хас та “ударник”тарса сыртлатып төкөрҙө ергә. Ваҡытынан элек эшен туҡтатып, сыбыртҡыһын һабан тотҡаһына элеп, бураҙна буйынса яй ғына тәпәйләне.

— Ҡайҙа тайҙың, ағай? Ярыш байрағына етмәнек бит әле! — тип ҡыҫкырып ҡалды уның артынан ат ҡыуыусы малай һәм ике ыҙан араһында үҙҙәрен ялҡынлы хеҙмәткә саҡырып ялпылдап торған ҡыҙыл әләмгә төртөп күрһәтте. Был әләмде яулау өсөн, беренсе булып шунда ҡаҙәр һөрөп барып етергә кәрәк һәм ул йола “социалистик ярыш” атала ине. Һалмаҡ елдә ҡыҙыл ҡарға ҡанатылай көйәҫ-көйәҫ ялпылдаған ул тынғыһыҙ сепрәкте күреү Вилдандың аҙымдарын уғата ҡыҙыулатты. Сөнки байраҡ, ялпылдағаны ғына һайын, “битнәк-битнәк” тип унан көлгәндәй...

Вилдан өнһөҙ бойоғоусы серек өйөнөң ҡарындыҡлы тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡаҙаҡланы ла бисәһе менән малайын һәм барлы-юҡлы ҡаралтыһын яңғыҙаҡ Хәсән бирeп торған арыҡ арбаға тейәп, ҡараңғы бер төндә ауылдан олаҡты. Шул китеүҙән оҙаҡ йылдар кире әйләнеп ҡайтманы. Бесән өҫтөндә серем итеп ятып ҡына тамаҡ туйҙырыуын донъялағы иң ҙур бәхет һананы. Тик был

бәхете лә оҙаҡҡа барманы: тәмәкеһенән ут ҡабып, төкләргә тип килтереп бушатҡан бер йөк бесән янып китә яҙҙы — саҡ һүндереп алдылар. Шунан һуң ул бынан да сығып китте...

Бер урындан икенсеһенә күсенеп, һаман бәхет эҙләне, шул арҡала “Кәкүк” тигән , яңы ҡушамат та алды, әммә ҡайҙа ла был ер өҫтөн бер үк Ҡояш яҡтырта икән... Аҙаҡ килеп: “Мин — бәхетһеҙ. Мин — даланһыҙ”, — тигән нәтижәгә килде ул...

Вилдан улы Йәрмит үҙенең бала сағының беленер-беленмәҫ тәүге хәтирә һыҙаттарын яҡынса шул осорҙан башлап хәтерләй. Ә был хәтирәләрҙе иҫкә төшөрөү — серек помидор ҡабыу һымаҡ яғымһыҙ ине уға. Атаһын шул йәнгә тейгән “Кәкүк”тән башҡа исемләмәй торғайнылар. Ғәрле ләҡәп аҡрынлап үҙенең йәбешкәк ҡулдарын Вилдан улы Йәрмит итәгенә лә һуҙҙы. Йәрмитте лә “Кәкүк малайы” тип, һуңынан ябай ғына “Кәкүк” тип йөрөтә башланылар. Иҫке ҡуласа әйләнеп килеп баҫты...

Был ваҡытта Йәрмитебеҙ урта мәктәптең һигеҙенсе синыфында уҡып йөрөй ине инде. Егет булып етеп килгән кешегә бындай ҡушамат күтәреп йөрөүе бик ғәрле ине. Ә шулай ҙа уны төйгөсләгән яҙмыш уҫмаҡтары араһында быныһынан да яманырағы бар — атаһынан мираҫ булып ҡалырға торған әсе “нужда һурпаһы”... Кәкүк Вилдан, шулай итеп, тәки мандый алманы шул; донъялар шөйлә уңалып, тормош һаман еңеләйеп барыуға ла ҡарамаҫтан, ғаиләһен өҙөлмәҫ ҡара юҡсылыҡ эсендә интектерҙе. Йәрмит иһә әшнәләре өҫтөндәге кейемдең, һүреүе сыға башлағас та, йәһәт , яңыға алмаштырылыуын, улар ашаған икмәктең мамыҡтай йомшаҡ һәм аҡ булыуын күреп ҡыҙыҡты күҙе. Мәктәптә ул үҙ икмәген, ҙур тәнәфестә, оғро кеүек ситкә китеп, йәшереп ашай ине. Өҫ-башы үҙенекенән арыуыраҡ булған иптәштәренә ҡарата эсендә йәшерен үс һаҡлап йөрөүсән булды. Уларҙы, гәрсә ябай колхозсы йәки эшсе ғаиләләренән икәнлектәрен белһә лә, үҙенсә кәмһетеп, “серек интеллигент балалары” тип баһаланы, үҙен-үҙе шуға ышандырырға тырышты. Шул үк ваҡытта үҙе, барлыҡ көсөн һалып, шулар ҡатламына күтәрелергә — интеллигент булырға хыялланды. Уның фекеренсә, ғаиләләге муллыҡ — интеллигент йәки начальство категорияһында йәшәүселәрҙең өлөшө ине. Уҡытыусыларының бүтәнсә өйрәтеүен Йәрмит емештең эсендәге һуты өсөн ҡуша ҡабырға тура килгән татһыҙ ярыһы итеп кенә ҡабул итте. Ҡайһы бер Еңел уйлаусан әшнәләренән айырмалы булараҡ, мәктәпте ул белем алыу төйәге итеп кенә ҡараманы. Мәктәп уның өсөн киләсәктә еңел шәхси тормош яулау ҡоралын сүкеү тимерлеге һаналды. һәм ул теше-тырнағы менән йәбешеп ятып сүкене шул ҡоралды. һабаҡташтарының күбеһе, етенсене тамамлағас уҡ, еңел тойғо менән ҡанатланып тракторға ултырҙылар йәки һәнәк-көрәк тотоп мал тирәһенә киттеләр. Йәрмит, һыңар күҙе менән генә йылмайып, уларҙың алйотлоғо тураһында уйланы. Ленин бабай һүҙҙәрен иҫтә тотоп, уҡытыусы булып сыҡҡанға тиклем уҡырға, уҡырға, уҡырға ҡарар итте ул. Уҡытыусы — Йәрмит уйынса иң еңел хеҙмәтле, шул үк ваҡытта ҙур килемле интеллигент ине.

Педучилищене тамамлап сыҡҡас, Йәрмит, тыуған ауылынан ете генә саҡрым алыҫлыҡта, ауыл башланғыс мәктәбенә уҡытыусы булып килде. Мәктәп

директоры йомшаҡ ҡына холоҡло ҡатын кеше ине. Йәрмит уның мәктәпте һылатыу, утын әҙерләү мәсьәләләренә һалҡын ҡарауы тураһында роноға оҙон-оҙон шикәйәттәр яҙып ебәрә башланы. Килгән инспекторҙарға *ла* “эске етешһеҙлектәр”, “ҡулланылмай ятҡан резервтар” тураһында сағып, аҡыллы фекерҙәр ҡуҙғата торған булды. Һөҙөмтәлә роно эшмәкәрҙәре мәктәпкә энергиялы, булдыҡлы, аҡыллы педагог килгәнен аңланылар. Әжере оҙаҡ көттөртмәне: йомшаҡ холоҡло ҡатын урынына мөдир итеп Вилдан улы Йәрмит тәғәйенләнде. Ә алдағы уҡыу йылында мәктәпте ете йыллыҡҡа әүерелдерҙеләр һәм Йәрмит директор креслоһына менеп ултырҙы. Бер шатлыҡҡа икенсеһе ялғанды: партияға кандидатлыҡ танытмаһын тулы хоҡуҡлы ағзалыҡ билетына алмаштырҙы *ул*. Хәҙер Йәрмиттең үҫеше өсөн аҡ *юл* асылғайны инде. Тамам ысын интеллигент булыу өсөн, юғары белем алаһы ғына ҡалды. Директор окладын һәм дәрәжәһен ҡалдырып киренән уҡыу йортона кереү Йәрмитте һис рухландырмай ине, әлбиттә. Бүре *лә* туҡ, һарыҡ та бөтөн ҡалһын өсөн, ситтән тороп уҡырға булды. “Ни тиһәң дә, ундайҙарға талаптар ҙа кәмерәк”, тип фекер йөрөттө. Яҡшы “үҫеш” өсөн юғары белемгә генә эйә булыуҙың етмәүен, партлиния буйынса *ла* өлгәшергә кәрәклеген һиҙенеп, “йәмғиәт эштәре” тип аталған тармаҡта *ла* үҙен танытырға тырышты. Колхоздағы етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләп, район гәзитенә мәҡәләләр яҙып торҙо, партияның райком вәкилдәре ҡатнашлыҡ иткән йыйылыштарҙа колхозсыларҙы “планды арттырып үтәргә”, “хеҙмәт уңыштарына ирешергә” саҡырып ялҡынлы телмәрҙәр һөйләне. Үҙенең “эш итогоһы”н бүтән агитаторҙарҙыҡына ҡарағанда һәр ваҡыт артығыраҡ итергә тырышты, уңайы тура килгән һайын, тыңлаусыларын энциклопедия томдарынан һоҫоп алған төрлө мәғлүмәттәре менән шаҡ-ҡатырҙы. Ошо *юл* менән *ул* колхоз партойошмаһының секретаре (парторг) дәрәжәһенәсә иреште. Инде колхоз күләмендә *лә* тәьҫире ныҡ киңәйҙе. Колхоз тормошоноң бөтә мәсьәләләре буйынса *ла* кешеләр уның абруйлы фекеренә мохтаж була торған булдылар. Шул парторг итеп һайланған йылдың көҙөндә *ул* Уральск пединститутының тарих факультетын тамамлауы тураһында диплом алып ҡайтты. Уҫал телдәр уның кеҫәһендә ятҡан алтын буталлы был “ҡатырға”ның бик үк таҙа булмаған юлдар менән алынғанлығын бәйән иттеләр, *ләкин* был һүҙҙәр — ябай һүҙҙәр генә ине, ә диплом — тормоштоң бик күп мөмкинлектәрен һәм хоҡуҡтарын ҙурайтҡыс *линзалағы* ҡояш нурҙары кеүек итеп бер нөктәгә туплаған матди ҡиммәт булып, һәр аҙымда хужаһына тоғро хеҙмәт итергә әҙер тора. Йәрмит ошо йылдарҙа: “Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын”, — тигән иҫке мәҡәлдең йөкмәткеһен бик яҡшы үҙләштерҙе. Район үҙәгендә хәҙер уның “дуҫы” йәки “танышы” ултырмаған учреждение һирәк ине. “Илдән берәр һүренте”, тигәндәй, *ул* үҙенең ошо таныш-белештәренән *мул* ғына уңыш йыйнаны. Ҡылыҡ-киҙәнештәре ҡыйыуланды, һүҙҙәре үҙ-үҙенә тәрән инаныслы яңғыраны. Ир үҙендә ҙур көс уяныуын һиҙҙе һәм юҫығын һәр урында ҡыйыу рәүештә үткәрҙе. Уҡытыусылар коллективын, аҡрынлап, үҙе менән килешә алмаған, йәки үҙенән артыҡ белгән бәндәләрҙән арындырҙы. Шулай уҡ колхозда *ла* етәкселек рычагы тирәһенә үҙенә яраҡлы элементтарҙы тупланы. Уның өҫтөнән бирелгән жалыуҙар, броняға бәрелеүсе пуля кеүек, һис бер зыян килтермәй кәйлектеләр.

Йәрмит “үçеш”е шулай күкрәп сәскә атҡас ҡына, “утыҙ меңсе” рәйес килде колхозға. Элекке МГБ капитаны булып сыҡты ул. Быны белгәс, Йәрмит ҡойроҡто ҡыҫа төштө, , яңы “хужа”ның йөрәгенә юл эҙләне. Ләкин , яңы рәйескә тышҡы ялтырауҙы тойоу һәләте етмәне. Ул, парторгының сағыштырғыһыҙ сағыу сифаттарына иғтибар итмәҫтән, Йәрмит тырышып төҙөгән сәйәси бинаның стеналарын аҙаҡҡы кирбесенә тиклем һүтеп ташланы. Ярыҡ кирбестәр йәтешләнгән урындарынан ҡуптарылып, ситкә бираҡтырылды. Йәрмит тә ярыҡ кирбестәр иҫәбенә инде: уның урынына парторг итеп Рәүеф Бикмырҙинды һайланылар — МГБ-нан сыҡҡан был , яңы һепертке, һис шикһеҙ, сүпте һепереү яғын яйланы. Ләкин был рәхимһеҙ сантаҙартыу аҙағынаса еткерелмәне: эшләй башлауына бер йыл да үтмәҫтән, кинәт кенә, рәйес үлеп китте. Райкомсылар уның урынына, әлбиттә, юғары белемле, энергиялы, ошо уҡ колхозда парторг булып эшләү тәжрибәһенә эйә булған, тимәк, ауыл хужалығын һәм колхоздың бөтә йомшаҡ яҡтарын ҡулындағы биш бармағылай белгән Йәрмиттән дә арыуыраҡ кандидатура таба алманылар. Йәрмит, директорлығын , яңы парторг Рәүеф Бикмырҙинға тапшырып, тағы ла ҙурыраҡ окладлы һәм дөйөм хужалыҡ байлыҡтарына ла “хужа” — “утыҙ меңсе” рәйескә әүерелде. Шулай асылды ҡаршыһында , яңы “үçеү” офоғо...

Йәрмит электән командалыҡ ҡылырға, “үҙ рухына массаларҙы буйһондорорға” ярата ине. , яңы вазифаһы элекке мәктәп директоры эшмәкәрлегенә ҡарағанда ла киңерәк офоҡтар асты. Инде уның ҡулы аҫтында ете-һигеҙ уҡытыусынан торған бәләкәс колектив түгел, ә бөтә төбәк халҡы тупланды. Йөҙәр мең һумлыҡ байлыҡтар уның ҡулы аша үтә торған булды. Йөҙәр төрлө үҙ өмөтөн һәм кисерештәрен һаҡлаған йөҙәрләгән ғаилә яҙмыштары уның ҡарамағына тапшырылды. Ул хәҙер уларҙың бәләкәс хоҙайы, һәр төрлө белемдәргә зирәк аҡылы менән киләсәктә тура юлдар һыҙып бирә торған юлбашсыһы булып әүерелде. һәм ул ошо бөйөк миссияһын үтәүҙә йәнен-тәнен аяманы. Уның барлыҡ хыялы, бөтә энергияһы, тап һөйөклө партиябыҙ бойорғанса, колхозсыларҙың киләсәк — эйе, *киләсәк!* — быуындарына яҡты тормош төҙөүгә йүнәлдерелгәйне. Матур йорттар, ыҫпай кейемдәр — килер быуындар өсөн! Туҡлыҡлы аҙыҡ һәм ғаилә бәхеттәре — килер быуындар өсөн! Гүзәл сәнғәт мөғжизәләрен ҡарап ләззәтләнгән күңелле ял минуттары — килер быуындар өсөн! Хәҙерге быуын, билбауҙы ҡыҫыбыраҡ быуып, өҙлөкһөҙ эшләргә лә эшләргә тейеш. Зауыҡлы ял кәрәк, тиһегеҙме? Ике эш көнө араһында бер мәртәбә бисә ҡуйынында баш аҫтына йоҙроҡ ҡуйып хырылдап үткәргән ябай ял да еткән һеҙгә. Зауыҡлыһын килер быуындарға ҡалдырығыҙ. Яҡшы кейем, тиһегеҙме? Эштә һырған көпәйкә менән ситса салбар ҙа ярай. Хатта уңайлыраҡ та улар. Ә пальто менән йөн костюм — килер быуындар кейеме! Аҙыҡ тураһында һорайһығыҙмы? Хәҙерге быуын ҡара икмәк менән грузин сәйе эсеп тә йәшәй ала. Врачтар, грузин сәйе йоҡо килтермәй, тиҙәр. Тимәк, килер быуындар өсөн янып хеҙмәт итергә сәм бирә! Ит, май, йомортҡа кеүек юғары калориялы аҙыҡтар — килер быуындар файҙаһына ҡалдырылһын. Сөнки улар Марҫҡа осаҫҡтар. Бөтәһе килер быуындар өсөн! Йәшәһен килер быуындар! Ә хәҙерге быуындың билбау аҫты бушағыраҡ булғаны яҡшы: туҡ кеше эшләмәүсән була ул!

Шулай уйланы Вилдан улы Йәрмит хәҙерге быуындың тормош шарттары хаҡында. Ул үҙенең ошо теорияһын партияның генераль линияһына һәр яҡтан тура килтереп, йәпләштереп ҡуя белә. Килешмәүселәрҙе “аполитичность”, “хвостицизм” мөһөрҙәре менән тамғалай. Һәм был дөйөм теорияла ябай халыҡ тигән киң даирә өсөн асылмаҫ сер булған бәләкәй генә лирик сигенеш бар ине. Был сигенеш — Йәрмиттең үҙе кеүек үк интеллигент әхлаҡлы лирик геройҙар хаҡында. Интеллигент — ул юғары белем эйәһе. Ул үҙенең аң-белеме буйынса хәҙерге быуындан айырылып алға сыҡҡан, йәғни ул хәҙер үк килер быуындар заманаһында — коммунизмда йәшәй. Шулай булғас, уның тормош шарттары ла килер быуындарҙыҡы — яҡты коммунизм осорондағы һымаҡ булырға тейеш. Ул килер быуындар кейәсәкте кейергә, килер быуындар ашаясаҡты ашарға — бер һүҙ менән әйткәндә, мораль яҡтан ғына түгел, материаль яҡтан да килер быуындар паегы менән тәьмин ителергә тейеш. Шул шарттарҙа ғына ул хәҙерге быуынды етәкләй ала, килер быуындар күҙе менән зирәк ҡарап, коммунизмға тура юл күрһәтә ала!

Был һоҡланғыс лирик тайпылышты Йәрмит, үҙенең лирик шәхесе өсөн, эҙлекле рәүештә тормошҡа ашырҙы. Яҡшы бала тәүҙә үҙенең тыуҙырыусыларын ҡайғырта, тиҙәр. Колхоз машинаһына тейәп оҙатылған колхоз ағасы тиҙҙән кәкүктәр ауылына ҡайтып, Кәкүк Вилданды ҡартайтҡан бөкөрө өйҙөң серек ҡабырғаларын һипләтте. Туҡһан йәшлек ҡарт өй ғорурланып билен турайтты, тәҙрәләр, арҡыс-торҡос таҡталарынан арынып, быяла күҙҙәрен ялтыратып көлөп ебәрҙе. Ҡарт Кәкүк, ниһайәт, станциялағы ҡабат барып оялаған бесән ҡарауылсылығын ташлап, тыуған ояһына ҡайтты. Ләкин был юлы уны, ҡасандыр илдән сығып киткәнендәге кеүек, яңғыҙаҡ Хәсәндең күсәрҙәре майһыҙлыҡтан сыйылдап торған арыҡ арбаһы түгел, ә буяуҙары күҙҙең яуын алырлыҡ, ултырғанда арт яғың мамыҡ өйөмөнә ырғытылған суйын герҙәй батып китеүсән йомшаҡ урындыҡлы “газик” килтереп төшөрҙө. Һәм күп йылдар татлы ризыҡ тәтемәгән етем өйҙә шат усаҡтар ҡабынып, Вилдан ҡарттың танауына улының колхоз келәтенән килеп еткән һимеҙ һарыҡ түшкәһенең тәмле араматы ҡағылды.

“Яҡыныңа ярҙам ит, ләкин үҙеңде лә онотма”, ти бит мәҡәл. Күпме мөмкин, үҙ нигеҙеңде һалмай, бураңды күтәрмәй, колхоз өйөндә фатирсы булып тороpға?! Йәрмит, хөрмәтле атаһының йәнен тындырғандан һуң, үҙ эштәрен уғата сәмлерәк юлға һалырға кереште. Был саҡта инде уның йәш кенә хәләл яртыһы — һылыу бисәһе бар ине, эш бына шул һандуғас затын һайрамаҡҡа арбау өсөн алтын ситлек ҡороуҙа ғына ҡалғайны. Ул йөрөгән ерҙәрендә осраҡкан һәр бер зиннәтле йорттоң уға күркәмлек биреп тороусы иң үҙәк элементын, Йәрмит һүҙе менән әйткәндә, сәскәһен өҙөп, хәтер моҡсайына туплай барҙы һәм мөкәддәс хыял дәфтәренә буласаҡ һарайҙың шул сәскәләрҙән генә төҙөлгән гөлләмәһен — гүзәл контурын һыҙҙы. Әммә кәкүклек тәбиғәте үҙен барыбер танытты: был алтын нигеҙ, төбәктә төпләнеп ҡалыу өсөн түгел, ә күсенгәндә һатып аҡса итеп алып китеү өсөн һалынған капитал ине...

XI

“Дуҫлыҡ” колхозында яҙғы сәсеү етәкселәр юғарыға биргән сводкалағынан бер аҙнаға һуңлап тамамланды һәм райондың күсмә Ҡыҙыл байрағы тәтемәне. Колхоздың исеме йылдағыса район гәзитенең “Хөрмәт таҡтаһы”на ла теркәлмәне. Бының өсөн, баҫыуҙарҙағы эштәрҙең барышы түгел, ә иҫәп-хисаптың торошо — “эштәр эшләнеп тә, үҙ ваҡытында сводка бирмәү” ғәйепле, тип һөйләнеләр һәм был “енәйәтсел әрпешлек” өсөн беренсе сиратта “үҙ вазифаһын дөрөҫ башҡармаған” хисапсыны һәм уны “дөрөҫ ҡалыпҡа ултырта алмаған” бухгалтер менән агрономды ғәйепләнеләр. Күренеүенсә, таяҡтың башы иң әүәле Ғәлим башына төштө. Колхоз идараһы тирәһендәге түрә-ҡара һәм уларҙың ҡойроҡтары сәйнәгән ғәйбәт ине был, әлбиттә. Ә ябай халыҡ, ғәҙәттәгесә, күп көс һәм көсөргәнеш талап иткән, ерекмән өсөн иң яуаплы булған яҙғы сәсеүҙең, ниһайәт, осланыуынан ҡыуанды һәм үҙенең иң ҙур байрамдарының береһен — һабан туйын дәртләнеп көттө.

Бына был шатлыҡлы көн дә гөрләп килеп етте. Күк йөҙө зәңгәр-аяҙ, шунда күлкеп йөҙгән ҙур йомарлаҡ майҙай көләс Ҡояш ерҙе йылы нурҙарына күлкетә. “Ыш!” иткән дә ел юҡ, донъя һил. Аллы-гөллө сәскәләргә күмелгән туғайлыҡта һыу буйында кистән ҡаҙып әҙерләп ҡуйған оҙонса ер-усаҡтарға ауылдағы ҡаҙандарҙың иң ололарын килтереп ултырттылар. Колхоздың наҡыҫ һауынлы бер һыйырын етәкләп килтереп, саҡ ҡына ситтәрәк ҡыуаҡ артында һуйып ботарланылар ҙа, ҡаҙандарға тултыра аш һалып, усаҡтарҙы дөрләттеләр — ауылдың аш-һыуға иң оҫта ҡатын-ҡыҙҙары яуаплы һәм һауаплы эшкә тотондо. Олон әйләнәһе өс-дүрт ҡолас йыуанлыҡ, ялбыр ябалдашы күккә олғашҡан иң дәү тирәк төбөнә ҡыҙыл буҫтау япмалы оҙон өҫтәл ултыртып, радиоалғыс ҡуйҙылар, яғаһы аҫтына “төшөргөләп” саҡ ҡына ҡыҙмасаланып өлгөргән тракторист Насрый баҡыр антенна сымының бер осон ауыҙына ҡабып, дәү тирәк башына бесәйҙәй үрмәләне лә ботаҡтарҙың өҫтәл тәңгәлендәге береһенә беркетте. Парторг Рәүеф Бикмырҙин радиоалғыстың ҡолағын борғослағайны, ҡапыл көллө әрәмәлекте Өфөләге сыңрау моңло Камил Вәлиевтың Шәйхзада Бабич һүҙҙәре менән Хөсәйен Әхмәтов көйөнә һалынған саф ауазы шаңғыртты:

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү әй, Ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.

— Һис зарар юҡ, ал, — тине Ай, —
Ал да сәс нур халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым Ҡояштың нурҙарын.

Бабич рухы кешеләрҙең йөрәгенә үтеп инде, был донъя һәм ундағы үҙенең урыны тураһында тәрәнерәк уйланырға этәрҙе. Шул хистәрҙән тулҡынланған Ғәлим мыжғыу халыҡ араһынан һағыныслы һылыу йөҙҙө — Ғәлимәне эҙләне, тик

осрата алманы. Хуш еҫтәрен аңҡытҡан ҡыуаҡлыҡтар араһындағы аҡландарҙа ихлас серләшеп ҡыҙырыусы байрамсылар араһынан йырып үтеп, магазин палаткаһы алдына килде, унда күк халатлы Иван Иванович тәм-том һәм хәмер менән сауҙа итә, теләгәндәргә шешәнән ҡойоп та бирә. Ситтәрәк бер төркөм тракторист егеттәр, күңелле гөжләшеп, бер шешәне сиратлашып "гурлы"һынан бушата.

— Әй, сажин түрәһе, һыйлайһыңмы әллә беҙҙе? — тип һөрән һалды Насрый.

— Ҡуй, борсома. Солярка, бензин, автол ғына ҡойоп бирә бит ул.

— Закускаһына солидол һылап ебәрә! — Хахылдашып көлдөләр. Насрый тағы телләште:

— Әсәһенең улы бит ул — дүрт йыл буйы флотта ла диңгеҙ һыуы ғына һемереп йөрөгәндер!

Ғәлим Иван Иванычҡа өс һумлығын һондо ла, бер ҡулына — "ярты", икенсеһенә стакан тотоп, егеттәргә яҡынланы, соҡортайҙы яртылаш тултырҙы:

— Йә, кемебеҙҙән башлайбыҙ?

— Минән, әлбиттә! — тине Насрый, ҡулын ҡабалан һуҙып.

— Ярай, алайһа, — тине лә Ғәлим, "утлы һыу"ҙы үҙенең тамағына атҡарҙы. — Диңгеҙҙекенән ҡайтышыраҡ икән шулай ҙа, — тигән булды.

— һай, маладис икәнһең дә, белмәйерәк йөрөгәнбеҙ!

— Белерһегеҙ! —Ҡомһоҙланып яланып торған Насрыйға шешә менән стаканды тотторҙо. — Ҡалғанын үҙегеҙ самалағыҙ, бөркөттәр.

Иртәнсәк йүнләп ашамай киткәнгәме, эскә яндырып төштө лә башты еңелсә әйләндерҙе. «ғиззәт ағайым кеүек, геләп уларға ҡушылып эсеп йөрөһәм, яҡшы хисапсы булаһым икән дә ул... — тип йылмайҙы. — Юҡ, уныһы булмай минән!"

Түңәрәк аҡландарҙа дәртле гармун, ҡурай моңдары тирбәлде, парлашып бейеүҙәр ҡыҙҙы. Бер киң майҙанда баһадирҙар суйын гер күтәреп көс һынашты; аяҡтарға тоҡ кейеп йүгерешеү, күҙ бәйләп сүлмәк ярыу, баҡанға үрмәләү уйындары гөрләне. Ара-тирә ваҡытынан элек иҫереп туйтаңдаған, хатта ҡыуаҡ төбөндә төңкәйгән ир-ат та салынды күҙгә. Атҡа менеп бәйге сабыу ғына юҡ — һуғыш йылдарында аттарҙы Ҡыҙыл Армияға алып киткәс, ҡабат ялғана алмай әле был йола...

— Яҙғы сәсеү алдынғыларына бүләк бирәләр, ти! — Сәмле хәбәр таралды ла халыҡ ҡыҙыл буҫтаулы өҫтәл ҡаршыһына ағылды. Унда, өҫтәл ҡырына ҡарғаларҙай теҙелеп, колхоз рәйесе Йәрмит, парторг Рәүеф, бухгалтер Ибәт һәм колхоз идараһының бер-ике ағзаһы ултыра. Баҡтиһәң, ҡәҙимге ялҡытҡыс оҙон доклад һөйләнеп бөткән дә бүләкләнеүселәрҙең исемлеген тотҡан рәйес бәхетлеләрҙе өҫтәл ҡырына саҡырып килтерә башлаған. Берәүҙәренә күлдәклек ситса, икенселәренә яулыҡ, ҡайһыларына кирза итек йәки түфли, салбар-фәләп эләгә, бухгалтер Ибәт уларҙы алыусыларҙың ҡулын ҡыҫып, әйберҙәрен бирә тора. Алдынғыларҙың бер төркөмөн бишәр тәңкә (бер шешә һәм ҡабымлыҡ!) аҡса менән бүләкләү башланғас, сикәләре ҡыҙышып өлгөргән ир-ат халҡы гөжләшеп ҡул сапты. Шунан ҡала тағы ла бер төркөмгә колхоз идараһы һәм

партбюроһының рәхмәт хаты тантаналы ҡыҫҡырып уҡылып, парторг шул рәхмәткә ирешеүселәрҙе исемлектән берәмләп атай башлағас, баяғы биш тәңкә алыусылар дәррәү ҡубынып, Иван Иванычтың палаткаһы тарафына олаҡты. Рәхмәтле исемлектән нәүбәттәге итеп тракторист Насрый аталғас, баҡыр антенна сымы аҫылған дәү тирәк ботағы һелкенеп тә тирбәлеп, ҡыҙыл япмалы өҫтәл менән “халыҡ массалары” аралығындағы үләне тапалған түтәгә үрҙән буш шешә даңғырҙап төштө *лә* күптәрҙең һушын һүрҙе. Артынса уҡ тирәк башынан Насрый үҙе аҡырҙы:

— Протестую! Рәхмәтегеҙҙе кеҫәгеҙгә һалығыҙ! *Даешь* миңә биш тәңкә!

— Ур-ра! Тарзан килгән, Тарзан! — тип сәрелдәне бала-саға, өҫтәл тәңгәлендәге ботаҡта бәүелеүсе Насрыйға бармаҡ төртөп күрһәтеп (ҡыш көнө ауылға Американың “Тарзан” фильмен килтереп күрһәткәйнеләр).

— Биш тәңкә кәрәккәс, ниңә сәсеүҙе тотҡарланың, алдан сәсеп бөтмәнең? — тине бухгалтер Бикмәт, үргә салҡайып ҡарап.

— Мин бөттөм, хисапсығыҙ алдаған! *Долой*, ундай хисапсы беҙгә кәрәкмәй!

— Ә һин үҙең кәрәкме икән колхозға? — Йәшел сиҙәмдә өйкөлөп ултырыусы баштар араһынан ҡалҡынып, Ғәлимә алғараҡ сыҡты. — Ғәфү итегеҙ, Рәйеф Әхметыч, шул рәхмәтлегә бер ауыҙ һүҙ әйтәйемсе. — Үргә ҡарап киҫәтте. — Һин, Насритдин, аҙ ғына , яңылышаһың: һин үҙең *ул алдаҡсы*, һөргәндә *лә*, сәскәндә *лә* хәрәмселәп, баҫыуҙарҙы боҙоусы. — Хатта бармаҡ янаны. — Шытып ҡына сыҡһын әле бойҙайҙарың: күҙеңә баҡтыртып, ҡуш табаныңды ҡыҙыу табаға баҫтыртырбыҙ.

— Тарзан! Тарзан! — һөрәнләүен белде малай-шалай. Өҫтәл тәңгәлендә ботаҡта мөсһөҙ баҫып бәүелгән Насрый, көтмәгәндә, Тарзандың әсе тауышы менән һөрәнләп, шул ыңғайҙа уҡ тигеҙлеген юғалтып, ботаҡ осонан ҡаҡ өҫтәлгә “*лап*!” итеп ҡолап төштө, түрә-ҡара ҡурҡып ситкә сирғыны. Уларҙан да нығыраҡ шөрләгән Насрый йәшендә тиҙлектә өҫтәлдән быраҡты, башын баҫып йүгереп барғаны ыңғайы, елләтергә тоҙ һибеп йәйеп һалынған һыйыр тирһенә табандары тайып, эргәләге эркетле ҙур ашлауға таяна төштө *лә* күкрәгенәсә эркеткә сумды, көллө кәүҙәһенә аҡ юлаҡтар ағыҙып, сәсәй-сәсәй тороп йүгерҙе. Бушлай кәмит күргән халыҡ алҡышлап оҙатты ирҙе...

Аҡландарҙа эркелеп табын ҡора, ҡор-ҡор булып өймәкләшеп ултыра башланылар, һабан туйының ослана барыуы ине был. Бер ҡыуаҡ төбөндә Сәләмғолдоң Ғәлимәне ҡултыҡлап алырға ҡырҡышыуын күреп, хисапсыбыҙ эргәләренә барҙы, һөмһөҙйәнде этеп ебәрҙе. Ҡаны ҡыҙыштан Сәләмғол *да* йоҙроҡтарын эшкә егергә киҙәнгәс, Ғәлим *дә* ажырайғас, Ғәлимә араға төштө:

— Етер һеҙгә! Тағы сәкәләшһәгеҙ, берегеҙ менән *дә* һөйләшмәйәсәкмен, белегеҙ шуны! — тип икеһен *дә* һыуындырҙы. Сәләмғолдо яурынынан этәрҙе. — Ә һеҙҙе, хөрмәтле хакимиәт, түрәләр табынында көтәләр, рәхим итегеҙ!

— Һеҙҙең *дә* урын шунда, мин һеҙҙе алырға килдем. Йәрмит Вилданыч менән Рәүеф Әхметыч ебәрҙе!

— Барығыҙ, барығыҙ, урын ала тороғоҙ! — тине Ғәлимә, ныҡыш егеттән көскә арынып. — Ә мин саҡ ҡына торараҡ барып етермен. — Тегеһе күҙҙән

юйылғас, Ғәлимде ҡултыҡлап алды ла икенсе яҡҡа ыңғайланы. Табын ҡоролған аҡландарҙың барыһын уҙып китеп, туҡталдылар:

— Ҡайҙа барабыҙ?

— Башыбыҙ ҡараған яҡҡа. Бына был хазина һандығында, — тине, беләгендәге йәтеш сумкаһын һелкетеп, — "зәм-зәм һыуы" менән ҡабымлыҡтар бар — икебеҙҙең өлөштө һалдыртып алдым. Берәй матур урын табып, һөйләшеп ултырайыҡ. Һинең менән шундайын һөйләшкем килә...

— Ә минеңсе!..

— Киттек, алайһа!

Йылға аша күперҙе үтеп, Олобай тигән осһоҙ-ҡырыйһыҙ һыубаҫар болон ауыҙында юлдың һул яғына боролғас, мал аяғынан да, бәндәнекенән дә һиҙ ҡуйы йәш имәнле бөгәл бар — йырып шунда керҙеләр ҙә ҡарт имәндең төбөндә төйәкләнделәр. Ғәлимә сумкаһын асып, ергә ашъяулыҡ йәйҙе, аҡ алюмин һауыттағы туралған ҡалъяларҙы, шешә менән ике рюмканы сығарып ҡуйҙы.

— Быларын да ашнаҡсы еңгәйҙәр бирҙе, — тине, соҡортайҙарҙы аҡ сепрәк менән һөрткөләп. Ҡыйыу тура ҡарап йылмайҙы: — Йә, уҙаман, башлайбыҙмы?

— Хәйерле сәғәттә, изге минутта! — Ғәлим шешәне асып, соҡортайҙарҙы тултырҙы, күҙ йомоп күтәрҙеләр. — Һинең менән ошолай ултырыр көнөм дә бар икән, Хоҙайға шөкөр! — тине.

— Ҡапҡыларға ла онотмайыҡ. Ара-тирә эс серҙәребеҙҙе бушатыша торайыҡ.

— Минең серем бер генә — ул һин! — тине егет.

— Минеке лә шулай уҡ...

— Беренсе күреүҙән үк...

— Ә минсе?..

Шешә шөйлә бүҫкәреп бара ине. Ғәлим ҡыҙҙың янына күсеп ултырҙы, биленән ҡосаҡланы. Ғәлимә ҡаршылыҡ билдәһе тойҙортманы.

— Эргәңдә баяғы "майлы көлсә"не күрһәм, өҙгөләп ташларҙай булам!

—Сәләмғолдомо? — Ҡыҙ көлдө. — Әллә ул һине өнәй тип беләһеңме?.. Бер көн шулай уға: "Ниңә һине Кәзәтәкә тип ҙурлайҙар? Ғәлим шуны үҙеңдән һорарға ҡушты", — тигәйнем, тештәрен шыҡырҙатып ярһыны...

— Ниңә шуны яныңа килтерәһең?

— Бәй, кейәүгә бирмәле ҡыҙ икәнемде күрмәйһеңме әллә? Артымдан ҡалмай йөрөй, ниәтем бик етди, ти...

— Ә һин?

— Үҙең нисек уйлайһың? Майлы көлсә тип, йөҙ сыйырып йөрөргә, ун һигеҙ йәшлек кенә ваҡытым түгел. Алдағыны ҡайғыртмаҡ кәрәк...

Ғәлим рюмканы тултыра ҡойоп эсте, ҡайнар тулҡыны башынаса йүгерҙе. Ҡыҙ иһә тоткан соҡортайын кире ултыртты:

— Уф, башым әйләнә, Ғәлим... — Күҙҙәрен йомоп, салҡан төшөп һуҙылып ятты. — Кил минең яныма! — тине. Ғәлим уның эргәһенә ҡырынлап, ҡалҡыу күкрәге аҫтынаныраҡ ҡыҫып ҡосаҡланы, сикә тамырҙарына ҡан бәрҙе:

— Һылыуым, Ғәлимәм, һинһеҙ тора алмайым!

— Эш ниҙә һуң? — тине ҡыҙ, күҙҙәре йомоҡ килеш. Өҫкә менеүен егет үҙе лә һиҙмәй ҡалды; көллө тәне дерелдәп, ҡыҙышып, таныҡ һындың ныҡ тоташҡан тығыҙ боттарын айырырға көсәнһә лә, хәленән һис килмәне. Үҙен шулай интектереп ыҙалаусыһының күҙҙәре йомоҡ көйөнсә лә көлөп ятыуын күреп, ялынды:

— һылыуым, түҙемлегем ҡалманы... Бушатсы ҡапҡаныңды?..

— Бушатһам, кемгә кәрәгем ҡалыр?

— һин бит минең һылыуым, йәнейем... Миңә бик-бик кәрәкһең...

— Кәрәгеңде бирермен...загсҡа барып яҙылышҡандан һуң. — Ғәлимә, егетте этеп ебәреп, тороп ултырҙы. — Ошоғаса бер кемде лә белмәнем... Иртәгә үк никахлашайыҡ, бергә йәшәй башлайыҡ!

Ғәлим тағы ҡойоп эсте, ике ҡулы менән башын тотоп уйланды.

— Юҡ, иң элек миңә вузды бөтөргә кәрәк. Шунан һуң...

— Бергә торһаҡ, үҙем ярҙам итермен, уҡытып сығарырмын. Әсәйеңде лә, үҙеңде лә ҡарарға хәлемдән килә, күрерһең...

— Юҡ, хәҙер үк! Ә ҡалғаны — шунан һуң!

Ғәлимә ырғып торҙо:

— Хыялый һин, хыялый... Беләһеңме нисә йәштә мин? Егет түгел икәнһең!

һәр икеһе үҙ уйҙарына сумып, өндәшмәй атланылар.

XII

Яҙғы сәсеү менән бесәнгә төшөү араһындағы иркенләп тын алыу сулаһында ауыл халҡы йортон һипләү, кәртә-ҡураһын ипләү менән шөғөлләнеүсән. Былтыр ҡора башлаған нигеҙҙе бөтөрөп кереү йәки , яңыһын төҙә башлау өсөн дә уңайлы ваҡыт был. Колхоздың да элекке рәйес осоронда таштан һалына башлаған һәм бөтмәй ҡалған оҙон иген келәтен көҙгәсә тамамлап ҡуяһы, мал-тыуар өсөн таш нигеҙгә ағастан бурап , яңы ҡура күтәрәһе бар ине. Бер килке ир-атҡа ауылдан күренеп торған оҙон ҡырланан таш сығарырға ҡушылды, икенселәре күрше Башҡортостандың Йылайыр районы урманында алынған диләнкәлә ағас ҡырҡырға ебәрелде.

Колхоз рәйесе Йәрмит Вилдан улына ла ошо , яңы вазифаһына керешкәндән һуң үҙ алдына ҡуйған иң мөһим бурыстарының береһен — матур итеп үҙ йортон һалып кереү өсөн изге сәғәт һуҡты. Юғары белемле элекке математика уҡытыусыһы булараҡ, башы теүәл иҫәп менән фекерләп яҡшы эшләй, шуны ижади ҡуллана белеү ҡеүәһенә лә эйә. Ошоға тиклем бер етәксенең дә башынан килмәгәнсә, ябай ғына колхоз эштәрен дә бер юлы үҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт иттертә белде.

Иң элек буласаҡ йортоноң ихатаһын, ҡасандырғы башҡорт байының малдарынан тороп ҡалып борхоп ятҡан аршин ҡалынлыҡ үле тиреҫтән ҡырсыттыртып, йөк машиналарына тейәттертеп, “колхоз баҫыуҙарына “ҡиммәтле органик ашлама — тиреҫ сығартыу кампанияһын” гөрләтеп ойоштороҙо — колхоз файҙаһына булғас, бөтә сығымдар ҙа колхоз иҫәбенән, әлбиттә. Ә малсылыҡ

фермаһы артында оҙон ҡырлалай өйөлгән, баҫыуҙарға оҙатылыуҙы көтөп ятҡан ысынлап та ҡиммәтле ашлама “тере тиреҫ” бер көйө ҡала бирҙе.

Колхоздың ер биләмәләре һаҡмар уң яғындағы таулы дала булғанлыҡтан, баҫыуҙарҙа ҡамасаулап аунап ятҡан таштар күп һәм шуларҙан арыныу хаҡында район гәзитендә туҡып ҡына торалар. Дөйөм хужалыҡ өсөн бик файҙалы ошо бурысты башҡартып, бер төркөм йәштәрҙән баяғы тиреҫте илтеп бушатҡан машиналарға таштарҙы тейәтеп ҡайтартты (һалынасаҡ үҙенең нигеҙе буйына, әлбиттә). Ләкин быныһы күҙ буяу өсөн генә ине. Самосвалдар оҙон ҡырлала етештерелгән таштарҙы колхоздың баяғы төҙөлөп ятҡан иген келәте янына ташый башлағас, таш тейәлгән машиналарҙың кәрәкле өлөшө рәйестең шәхси төҙөлөшөнә бушатылды, ә ҡағыҙҙа, әлбиттә, колхоз келәтенә, тип иҫәпләнде.

Аҙаҡ килеп Йылайырҙан йөк-йөк бүрәнә ҡайтарылды: бер өлөшө — колхоздың бураласаҡ мал аҙбарына, бер өлөшө — иген келәтен ҡыйыҡлауға, ә тос ҡына бер килкеһе Йәрмит Вилдан улының шәхси төҙөлөшөнә. Таҡта ярғыстан сыҡҡан таҡталар менән дә ҡабатланды шул тылсым. Ситтән килеп, колхоз мал аҙбарын бурарға ялланған әрмән-шабашниктар бер ыңғайҙан рәйес йортон да энәнән-ептән эшләп бөтөрөп бирҙе — колхоздың баяғы мал аҙбары ҡороу иҫәбенән, әлбиттә...

“Дуҫлыҡ” исемле был колхозда үҙенә күрә дуҫлыҡ ҡануны булып, колхозсыларҙың күпселеге “колхоз” тигән дуҫты үҙҙәренең йән дуҫы итеп түгел, ә Сталин бабай тылсымлап тыуҙырған һәм ҡурсалап һимерткән дөйөм суска итеп ҡарай, һәр колхозсыға унан кәмендә бер ҡыл тейеш, тип һанай, шул ҡылды кеше күрмәгәндә суска ҡойроғонан йолҡоп алырға самалай. Быныңөсөн ябай халыҡ ихтыяжы баштан ашҡан — һәр береһенә һәр мөҙҙәттә колхоздан нимәлер кәрәк. Теүәл һиме аҡыл эйәһе Йәрмит Вилдан улы, шуны иҫәпкә алып, һәр мохтажлының ауыҙына баяғы суска ҡойроғонан бер ҡыл йолҡоп алып ҡаптырта белә, ә ҡыл ҡапҡан ауыҙҙан уны ҡаптыртыусының мутлыҡтары хаҡында ҡыл нескәлек тә өн сыҡмай — ҡапҡан ҡыл ҡамасаулай. Йәрмит Вилдан улы шуны алдан уҡ иҫәпкә алып, күпселек ауыҙҙарҙы ҡыл менән бөтәштерҙе, инде бер-нисәһен генә бөрәһе ҡалды.

Уның өсөн иң хәтәре — үҙенең урынына парторг итеп һайланған һәм, ике күҙе ҡылый булһа ла, күҙлеге үтә күпте күрергә, күргән береһен тилбер теле аша үткәрергә һәләтле Рәүеф Әхмәт улы ине, әммә уның ғаиләһе менән тар ғына колхоз фатирында тороп интегеүе мәғлүм. Шуны салт тойоп, Йәрмит Вилдан улы уның ике күҙен дә, ауыҙын да бер юлы йомдортто — урындағы урман хужалығынан колхозға тирәк ҡырҡырға рөхсәт алыуын, шул ағастан парторгка ла өйләк бүрәнә килтертәсәген белдереп өмөтләндерҙе.

Ауыл Советы рәйесе Хөсәйен иһә күрше “кәкүк ауылы”нан йөрөп эшләгәнлектән һәм ундай-бындай мәсьәләләрен үҙҙәрендә үк хәл иткәнлектән, уның секретары Сәләмғолдоң күңелен табаһы ҡалды. Сәләмғол иһә Йәрмиткә үҙе килеп, икәүҙән-икәү бер “ярты”ны бушатҡан аулаҡ табында быйыл башлы-күҙле буласағын, әммә киләсәк килендең ҡайны һәм ҡәйнә ҡоло булып бер нигеҙҙә торорға теләмәүен һөйләп, үҙенә башҡа нигеҙ ҡороп керергә колхоздан ярҙам өмөт итеүен тумбытты. Рәйес уға ла баяғы тирәктәрҙән өлөш сығарырға һүҙ

бирҙе. Дөрөҫ, йәнә ләҙ бер осло күҙ — хаҡлыҡ юллап илгә хафа һалып йөрөүсе Ғәлим бар, ләкин яңғыҙ ҡарға саҡырып яҙ килтерәүе билдәле...

Бана шул ваҡиғалар ҡосағында колхоз бесәнгә ләҙ төштө, Ғәлим, яланданяланға сабып йөрөп, эшләнгән эштәрҙе һәм тотонолған яғыулыҡтарҙы үлсәне, бөтәһенә бер юлы өлгөрә алмай йөҙәне. Ғәлимә менән һабан туйындағы һалҡынайышыуҙарынан һуң яҡынлаша алғандары юҡ, дөрөҫөрәге, бер-береһен ситләтеп үтәләр ине. Егет йөрәге әрней, ҙур юғалтыу кисергәнен һиҙенә, әммә алдына ҡуйған изге хыялынан — Ғаилә тоҙағына эләкмәҫе борон юғары белем алып сығыу ниәтенән төңөлөргә теләмәй. Ғәлимәне ләҙ яҡшы аңлай — йәштәштәренән һуңлабыраҡ вуз бөтөп сыҡҡан һылыуға, ҡарт ҡыҙ булып Яңғыҙаҡ ҡалмаҫы өсөн, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк. Икеһенең мәнфәғәте ике яҡҡа ҡайырылғас, ҡарышыуҙан ни мәғәнә?..

Шулай йөрөп алтын сентябрь етте, арыш урыу тамамланды. һуңғараҡ өлгөрмәле иген баҫыуҙары ла көндән-көн һарыраҡ төҫ алды — бына-бына уттай ҡыҙыу ураҡ ваҡыты етәсәк. Ошо ғәмдәр утында янып йөрөгәндә, көтөлмәгән хәбәр егетте тетрәндерҙе — ауыл Советы секретары Сәләмғол, имеш, агроном ҡыҙ Ғәлимәгә өйләнә... Бөтәһенә ләҙ әҙер, ләкин Сәләмғол ғына булмаһын ине!..

Йөрәге уттай янып, кисләтеп ауылға ҡайтты, өйгә ләҙ инеп тормай, тура Сәлимә апайҙарға йүгерҙе: алынмаған юғары белемдәре алынмайынса үк сәсрәһен — һылыуымды ҡулымдан ысҡындырмам!

Ишектәрен ашҡынып шаҡылдатты, Ғәлимәнең яғымлы күкрәк тауышы рөхсәт бирҙе. Ләкин егеттең килеп инеүе көтөлмәгән хәл булды, буғай, уға — дүрт күҙ менән төбәлеп, ни әйтергә белмәй тик тора... Сәлимә апай ҙа аптырабыраҡ ҡалды. Егет сәләмен алһалар ҙа, күңелдәре иремәне.

— Ғәфү итегеҙ... Ғәлимә, һинең менән күҙмә-күҙ генә һөйләшәһе бар ине.

—һөйләш, Сәлимә апайҙан серем юҡ, — тине Ғәлимә, ҡәнәғәтһеҙлеген йәшермәй.

— Ғәлимә... мин ишеткән хәбәр... дөрөҫмө?..

— Дөрөҫ.

— Йәғни... йәғни ҙә...

— Эйе, Сәләмғолға кейәүгә сығам.

— Ниңә?! Минең менән һөйләшмәй...

— Һөйләшкәйнек бит инде.

— Мин ул саҡ , яңылышҡанмын... эйе, , яңылышҡанмын! Баҫма ул хата юлға! һинән башҡа йәшәй алмайым... Иртәгә үк барып яҙылышайыҡ!

— Ниңә иртәрәк уйламаның, нимә көтөп йөрөнөң?

— Әле ләҙ һуң түгел...

— Һуң шул инде, Ғәлим... Бынан өс ай элгәре яҙылыштыҡ... һинең менән һуңғы һөйләшеүҙән һуң...

Егеттең күҙ алдары ҡараңғыланды, ләкин һуңғы өмөт бар ине әле:

— Булһын! Юҡҡа сығарайыҡ уны, икәү яҙылышайыҡ!

Ғәлимә артына әйләнде. һулҡылданы ла, ике ҡулы менән башын тотоп, төпкө бүлмәгә олаҡты, үкһеүе ишетелде. һөйөклөһө артынан атлығырға талпынған егетте Сәлимә, юлына аҫҡыры тороп, ҡырҡа туҡтатты:

— Аҡылыңдан яҙҙыңмы әллә, ҡустым? Кеше ҡатынына... буйында өс айлыҡ бәпесе бар инде уның... Бар-бар, яҡшы сағында ысҡын! — Этәреп сығарып ебәрҙе...

Ошонан һуң Ғәлим, башын ҡайҙа илтеп бәрергә белмәй, илке-һалҡы йөрөнө, ҡулына эш барманы, күҙенә йоҡо ҡунманы. Туңға һөрөү тамамланып, хисап табелен илтеп тапшырғас та, ғариза яҙып эштән сығыу, ҡайҙалыр китеү тураһында уйланы.

Сәләмғол колхоз ташынан нигеҙ ҡорҙортҡан, инде буралыҡ ағасын да тракторҙан һөйрәттертеп килтерәсәк, Насрый менән килешкән, тип һөйләнеләр. Шуны дөрөҫләгәндәй, Һаҡмар буйындағы колхоз диләнкеһендә шатор-шотор тирәктәр ауҙарыла...

Алйырҙай булып башы тоноп йөрөгән Ғәлим, аҙналыҡ хисап бирер өсөн, яғыулыҡ ташыусы Яхъя ағай арбаһына эләгеп, МТС-ҡа юлланды. Ҡыҙыу ураҡ өҫтө килеп еткән, баҫыуҙарҙа, ырҙындарҙа тиҫтәләрсә мотор көнө-төнө гөрөлдәй — бөтәһе лә цистерналарҙағы яғыулыҡ иҫәбенә. Әрәм-шәрәм итмәйенсә, һәр тамсыһының ҡәҙерен белеп кенә тотонор ваҡыт, сөнки йыл буйына көтөп алынған уңыштың яҙмышы яғыулыҡҡа бәйләнгән. Электән үк шуны яҡшы белеп эш иткән Ғәлим был осорҙа уяулығын айырыуса көсәйтте. Цистерналарҙың һемәгенә , яңы йоҙаҡтар алып ҡуйҙы, ике асҡыстың береһе — уның үҙендә, икенсеһе яғыулыҡ ташыусыла ине. Бына бөгөн дә Яхъя ағаһына мискәләрҙе тейәште лә: “Үҙем юҡта асҡысты берәүгә лә бирмә!” — тип ҡаты киҫәтеп, ҡайтарып ебәрҙе, ә үҙе хисабын тапшырырға МТС бухгалтерияһына инде. Башҡа колхоздарҙан да килгәйнеләр. Хисап тапшырыу шөйлә оҙаҡҡа һуҙылып, ауылға төн уртаһында ҡайтып инде.

— Кистән Сәләмғол һине таптыртып килде, — тигәйне әсәһе, ҡолағы “ҡарп!” итеп ҡалды:

— Ни өсөн?

— Насрый тракторынан бүрәнә һөйрәтмәкселәр. Яғыулыҡ кәрәк, ти. Ғәлим ҡайтып етмәне, барығыҙ Яхъяға, тип ебәрҙем.

— Ишкәнһең икән ишәк сумарын! — тине лә Ғәлим күҙе йомолоп ауҙы. Әммә ниндәйҙер яманлыҡ һиҙенеп, йөрәге тынғы бирмәй, таң алдынан уҡ уянды.

Иртүк тороп барғанында дизель яғыулығы цистернаһы янында бер төркөм механизатор сыуала, ҡобараһы осҡан яхъя цистерна башында маташа.

— Бөткән... һуңғы тамсыһынаса ағып бөткән... — тине ул, ергә төшөп. Цистерна һемәгенең аҫты — майлы һаҙ — төндә аҡҡан яғыулыҡ ергә һеңгән, бер өлөшө, түбәнгәрәк һарҡып, бураҙна соҡорон буйлаған. Кисә Ғәлим үҙ ҡулы менән бикләп киткән һемәк йоҙағы, сылбыры менән ҡуша, ерҙә ята.

— Был ни хәл?!

— Белмәйем, мин бер ни ҙә белмәйем! — тип ялбарҙы Яхъя, яғаһынан алған Ғәлим ҡыҫымынан ысҡынырға тырышып.

— Асҡыс һиндә ине бит!

— Уны кистән, Насрый менән бергә тракторҙа килеп, Сәләмғол алып киткәйне...

— Ниңә бирҙең?

— Сәләмғол түрә йәнде алып бара... Ялҡау Ғәлимдең ҡыҙырып йөрөүе арҡаһында техника туҡтап тора. һәр сәғәте-минуты өсөн яуап бирәсәкһегеҙ! — тип янаны...

— Ниңә үҙең барманың?

— Мунса инеп ята инем... Яланғас көйөмә сығып йүгерәйемме?

АҢлашылды. һемәген япмай киткәндәр ҙә яғылыҡ ергә һеңгән. Ураҡ эштәренә тип күҙ терәп торған байлыҡ...

Ҡаза шунда уҡ районға ла фашланып, прокурор үҙе милиционер эйәртеп килеп төштө. Ғәлимде һәм башҡаларҙы ауыл Советына саҡыртып тәфтишләнеләр. Хәлде һөйләп бирһә ла, дөрөҫләүсе булманы: иртәнсәк цистерна янындағы аңлашыуҙы бере һе ла ишетмәгән... Яхъя ла Сәләмғолға асҡыс биреүен таныманы — соланда сисенеп мунсаға инеп киткәнемдә асҡыс салбар кеҫәмдә ятып ҡалғайны, сыҡҡас та шунда ине, тип аҡланды. Насрый иһә төндә иҫерек Ғәлимдең үҙ ҡулынан тракторының багына яғылыҡ ҡойҙортоп алыуын, иҫерек килеш уның шунда һемәк янында тороп ҡалыуын һөйләне. Тәфтишләнеүселәрҙең һәр бере һен Ғәлим менән күҙләштертеп тә һоранылар. Аҙаҡ Сәләмғол да Ғәлимдең күҙҙәренә тура ҡарап үҙенең был енәйәткә бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡлығын белдереп сығып киткәс, прокурор иптәш милиционерға Ғәлимде һаҡ аҫтына алырға бойорҙо, ҡоротҡослоҡта ғәйепләүсе енәйәт эше асыласағын белдерҙе. Ләкин һуңғы минутта хәлдәр ҡырҡа үҙгәреп китә яҙҙы: колхоз агрономы, Сәләмғолдоң никахлы ҡатыны Ғәлимә килеп инеп, бөтәһен аптыратты:

— Яғылыҡты кем ағыҙғанын беләм, әммә ул хисапсы Ғәлим түгел! — тине.

— Кем һуң?

— Улмы, ул... минең ирем Сәләмғол.

— Ә?! Ниндәй дәлилдәрегеҙ бар? — Прокуроҙың күҙҙәре маңлайына күсте.

— Иремде саҡыртығыҙ — күҙенә ҡарап әйтермен.

Ғәлимдең башына сүкеш менән һуҡҡандай тәьҫир итте, аҡылына һыйҙыра алманы быны. Шул уҡ ваҡытта теге көндә Сәлимә апайҙарҙа булған һөйләшеү киҫте йөрәген: өс айлыҡ... буйында өс айлыҡ... Юҡ! Ҡарынында саҡта уҡ бәхетһеҙ итергә теләмәйем!

Йән әсе һе менән ыңғырашҡан Ғәлим, ырғып тороп, прокуроҙың күҙҙәренә тура ҡараны:

— Ышанмағыҙ, ул алдай. Ире менән юҡҡа ғына ыҙғышҡандар ҙа, шуның асыуынан... Ә цистерна һемәген мин, ысынлап та, иҫерек көйөмсә асып, ябырға онотҡанмын...

— Аңлашылды. Алып китегеҙ, тегендә асыҡларбыҙ! — тип ҡул һелтәне прокурор. Милиционер Ғәлимде оҙата сығып, ихатала көтөп торған машинаға ыңғайлатты.

1959.
Һунарсы ауылы.

ТЕГӘНӘК

Сағылдан ул көтмәгәндә гөмбөрләне.

Алйотлоҡ килеп сыҡты, әйтәһе түгел. Геологик партияла ер ҡаҙыусы ҡара эшсе булып дүрт ай эшләп, бындай хәлгә тарыҡаны юҡ ине. Бөтәһе шул “оҙон аҡса” көҫәүе арҡаһында...

Ошо айҙың аҙағында уҡ расчет алып, ауылға ҡайтырға йыйынғанлыҡтан, Зәйни һуңғы аҙналарҙа айырыуса ныҡ көсәнде – тин өҫтөнә тин өҫтәйһе килгәйне шул. Донъя бит, барыһы ла кәрәк. Ә ауылға ҡайтыр алдынан – бигерәк тә. Егетте унда һаласаҡ йорто, аласаҡ кәләше көтөп тора. Алда сығымдары ҙур. Ҡулға төшкән һәр тин-баҡырҙы осло моронло кирка менән таш ҡырҡып алырға тура килә. Бында арыу-марыуыңды күп уйлап тораһы юҡ. Янсыҡ бөтәйткең килһә, беләгеңде лә, көнөңдө лә йәлләмә.

Зәйни бөгөн дә иптәштәренән шаҡтай һуң ҡалып эшләне. Тәңгәленә эре ҡырсын ҡатыш яман ҡомташ ҡатламы тура килеүгә ҡарамаҫтан, саба-саба шурфты тағы ла метр ярымға тәрәнәйтте. Ҡара тиргә батып, ах-ух килеп, ул тар ҡоҙоҡтан үрмәләп сыҡҡанда, күктә иң эре йондоҙҙар балҡып күренә башлағайны инде. Һыулы шешәһе таш төшөп селпәрәмә килгән. Егет, алҡымын уйнатып, ватыҡ шешә боғаҙын асыу менән тибеп ебәрҙе. Уныһы, зарланғандай салтыр-солтор килеп, аҡсәс-бүтәгә араһындағы “водка” тип яҙылы үҙ тиҫтерҙәре араһына барып ятты. Сисеп һалған кәзәкейен тирле яурын башына арҡыры йөкмәп, егет, тар шурфта бәлтерәгән быуындарын ҡатыра алмай, алпан-тилпән килеп атланы. Һаҡмар яры башындағы партия көн иткән палаткаларға тиклем сағыллы текәне күтәреләһе лә, оҙон ҡырла бөткән киртләс ҡабырыйҙағы бормас тар һуҡмаҡтан ике саҡрымдай йәйәүләгәс, һулға ҡырт-боролоп, кәкере-бөкөрө сибек уҫаҡтар һырыған һөҙәгерәк битләүҙән түбәнләйһе бар ине. Тау башына Зәйни ҡабаланып саҡ менеп етте. Яҫы өҫтәлташҡа йәйелеп ултырыу, хәл алыу теләге ни тиклем көслө булмаһын, туҡталманы. Ашнаҡсының йоҡлап ҡалыуы, йәки ашты йылыға ҡуймауы ихтимал...

Тимер юл таҫмаһы кеүек оҙон һәм яҫы арҡа буйына тиңәлгәс, һулышы еңеләйҙе. Елкәлеген сиңәртәй бармағына элеп йөкмәп килгән кәзәкейен ябынды, Етегән ҡойроғондағы аҡ йондоҙға күҙ ташланы. Ҡойроҡ осо ергә ҡарай байтаҡ боролған – сәғәт ун икеләр китте самаһы. Бөгөн көндәгегә ҡарағанда ла күберәк эшләп ташлаған, ҡул мускулдары һуйылғандай ҡалтырай. Эш хаҡын ҡаты тоҡом иҫәбенән сығарһалар, расчетҡа байтаҡ ҡына аҡса тейәсәк. Зәйни бөгөн эш сәғәтенән тыш ҡаҙған метр ярымға күпме өҫтәлмә һум төшәсәген иҫәпләп бара башланы. Тап шул ваҡыт, һуҡмаҡ ҡырыйына яҙа баҫып, иҫләмәҫтән ҡая аҫтына мәтәлде...

Зәйни иҫенә килеп күҙен асҡанда, үҙен бик дәү аждаһа ауыҙында ярым сәйнәлгән килеш ятҡандай тойҙо; ян-яғында зәңгәр күк фонында баяғының осло аҙауештәренә оҡшап бейек-бейек сағылдар тора сурайып. Ҡояш әле ҡалҡмаған, ҡалҡһа ла, уны тау ышыҡлай һымаҡ. Егет ятҡан тар үҙәндә дымлы һалҡынлыҡ тиртә. Таштар йөҙөн таңғы томан ялап үткән – биттәре илап торған һымаҡ ысыҡлы. Зәйни йөҙөнә лә бик мул яғылған ул. Егет, уң яҡ ҡабырғаһында ятҡан

килеш, ҡуҙғалмайынса таң аттыртҡан булһа кәрәк. Сәғәтенә күҙ һалырға итһә лә, барып сыҡманы: һул беләге, эргәләге йоморо таш һыртында бөкләнеп, бүтән кешенеке кеүек йәнһеҙ ята, көллө тәне үлтереп һыҙлай... Зәйни сәғәт быялаһының селпәрәмә килеүен, минут уғы, ҡармаҡҡа оҡшап, кәкерәйеп сығыуын абайланы. Һәр хәлдә, иртәлер әле, сәғәт етеләр ҙә юҡтыр – бал ҡорттары ла осмай бит.

Торорға итеп, тубыҡтарын бөкләне. Шул саҡ ҡаты ыңғырашыу һурылды күкрәгенән – һул аяғын, әйтерһең, тракторға эләктереп тарттылар. Күҙҙәрен йомдо, башы ҡабат лып итеп тәгәрәне...

Күпме ваҡыт үткәндер – билдәһеҙ. Ҡабат күҙен асҡанда керһеҙ күк йөҙөндә күкәй һарыһылай йомшаҡ август ҡояшы һәленеп тора ине. Әйтерһең, шул бер урынында төртөлөп ҡалған, йылмайып, Зәйни йөҙөнә баҡҡан. Аҙаутеш сағылдар уның һары нур ептәренән тарталар. Зәйниҙең баш өҫтөнән генә, арт яҡтараҡ, ус яҫылыҡ бер күкшелт тимгел күҙгә салынды; күпме генә тырышһа ла, ятҡан килеш ентекләү мөмкин түгел. Уҡмашҡан ағас япраҡтарына ла, ниндәйҙер таныш сәскәгә лә оҡшай ул. Тик был тимгел, торғаны һайын йөрәк һыҙҙыртып, күңелгә үтә яҡын башҡа ни нәмәнелер хәтерләтә. Ҡайсаҡ унда турғай килеп ҡуна, сурт-сурт һайрап, ары пырылдап оса. Ҡунып киткәне, йәнләнгәндәй, оҙаҡ бәүелеп тора...

Инде Зәйни ҡымшанырға ла ҡурҡа. Бөтә һул яҡ һыны, йәнде алырҙай интектереп, үлтереп һулҡый. Имгәнгән ҡулмы был, аяҡмы, әллә ҡабырғамы икәнен дә белер әмәл юҡ – бөтә өҫкә самаһыҙ ҙур ҡыҙыу үтек баҫтырғандар, тиерһең. Хәҙер егет баш ҡалҡытыр ҙа хәл ҡалмауын тоя. Һулышы ла хырылдап, тамаҡ яндырып сыға. Их, бер генә йотом һыу булһасы, һыу...

Сеү, ни тауыш? Юғарыла, тау һыртында, Зәйниҙең эштәштәре күмәкләшеп һөрән һалалар. Улар төн буйынса берсә ҡыскырып, берсә мылтыҡтан атып, уны эҙләп сыҡтылар. Инде бөтә партия менән таралышып, тау-таш араларын, урман шырлыҡтарын һөҙәләр. Был саҡырыу ауаздарын Зәйни ишетмәй. Көллө аңы, иләҫ-миләҫ килеп, барлыҡ менән юҡлыҡ араһында ҡалғый. Үлем тигән ҡурҡыныс йәр ҡосағына инеп барғанлығын иғтибарламай ҙа ул. Бөтөү – булыу һымаҡ уҡ типә-тиң, тәбиғи торош һымаҡ...

Зәйни инде үҙен тәрән тыныслыҡ, мәлйеү эсендә хис итә. Ҡуҙғалырға ла, һыу эсергә лә, яраһын бәйләргә лә теләк кисермәй. Ошолай ҡатып ятҡан килеш, һары ҡояштың һаман-һаман тоноҡланып һүрелә, ҡарая барыуын күреү ҡәнәғәтләндерә уны. Көндөң бөтөнләй ҡарайып, күмергә әүерелеүен тик бер генә нәмә тотоп тора, ул да булһа әлеге баш осондағы турғай тирбәлдертеп киткән күк тимгел. Ниндәйҙер сихырлы көс ағыла шул тимгелдән, һүнеп барған аң шәменә әленән-әле ялҡын ләүкетеп уята. Зәйниҙә шул борсоғос көстө аңлап-белеү сәме көсәйә. Ағас ботағымы, сәскәме, берәй үләнме – нимә һуң әле был йәнгә шундай яҡын тимгел?..

Шуның тәңгәлендә генә күк яҡтыһын кинәт ҡара ҡапланы, "Ҡар-р-р!" тигән ҡараңғы-йәмһеҙ тауыш ярҙы һауаны. Ҡанат еле биткә килеп бәрелде... "Үлеп ятаммы әллә?" тигән сәйер уй ойҡотто. Һөмһөҙ ҡарға ҡунған тимгел, сатаһынан һабағы айырылып, Зәйниҙең нәҡ битенә бөгөлөп төштө. Әҙәм башының ҡыймылдағанын күреп тертләгән ҡарға, бер ҡарап алды ла, ҡанаттарын ялп-йолп

болғап, кинәт үргә сорғоно, сағыл осона ҡунды. Асылы-һаҡ ҡарашын аҫка – кәүҙә өҫтөнә йүнәлтте.

Зәйни иһә алдындағы әлеге күк тимгелле һабаҡҡа текләй. Көллө мейеһе, йоҡоһонан уянғандай, йәһәт-йәһәт был донъяға алҡына, ашҡынып, үҙ вазифаһын башҡарырға тырыша. Тәрән итеп һуланы әҙәм балаһы. Бығаса йән тойҙортмай ҡатҡан күҙҙәре терелеп шар-асылдылар. Серле тимгел тәүҙә турғай башы ҙурлыҡ айырым-айырым тупалсыҡтарға, унан һуң, бара-тора, аҫ яғы йомшаҡ аҡ төк менән һибәләнгән, өҫкөһө сағыу балҡыған зәңгәрһыу-ҡыҙыл түшле нәфис сәскәләргә әүерелде.

Туҡта-туҡта, тегәнәк түгелме был? Тегәнәк дуҫкайым бит!

Йығылғандан биреле һыҙлау тәү ҡат егеттең тәнен түгел, ә йөрәген татлы әрнетеп үтте. Ҡыҙғылт-күкшелт тегәнәк артында муйылдай сөм-ҡара күҙҙәр йылтырап алйытты, артынса уҡ иҙәнгә ҡойолған бер ус көмөш тәңкә селтерәүеләй саф ауазлы көлөү салынды ҡолаҡҡа. Туҡта, һылыуҙарҙан-һылыу ҡараҡай, Нәғимә-Нәғимәкәй бит был!..

...Хеҙмәт күлеме тулмаһа ла, былтыр көҙ генә льгота менән армиянан ҡайтарылғайны Зәйни. Ауылда әсәһе ҡапыл үлеп, береһенән-береһе ваҡ алты балалы ғаиләһен саҡ аҫырап торған инвалид атаһы ул ҡайтыуға үгәй инә алһа ла, йорт-ҡураға бер ҡаҙыҡ та ҡаҡмаған. Элеккеләре лә ҡайһыһы ҡыйшайышып, ҡайһыһы ауып, тигәндәй, донъялары бөлөүгә тартҡан. Шуларҙы әҙәм ыңғайына килтерә-килтерә көн артынан көн үтте. Бер яҡҡа ла сығып йөрөмәне. Хатта ауыл ҡыҙҙарына күҙ һалырға ла өлгөргәне юҡ ине әле. Атаһы Мотиғулла, себен кеүек быжылдап, уны эшкә төрткөсләп кенә торҙо, үгәй әсәй иһә ауыҙын турһайтып йөрөй геләп... Ә ауыл осонда Һаҡмар буйы Бәйге тауында һәр кис һайын йәштәр уйыны ҡыҙа, гармун моңо, егеттәрҙең һәм ҡыҙҙарҙың шат тауышы йөрәкте семерҙәтә... Түҙмәне, бер кис Бәйге тауына менеп баҫты. Бейеүселәр түңәрәгенең ситендә генә тороп, күңеле иләҫ-миләҫ килеп күҙәтте. Бына унан бер-нисә йәшкә өлкәнерәк буйҙаҡ егет, малсылыҡ фермаһы йәғни МТФ мөдире Ғәйнулла, бер ҡыҙҙы сарылдатып тотоп алды ла түңәрәк уртаһына һөйрәне:

-- Әйҙәсе әле, өҙҙөрә баҫайыҡсы әле, Нәғимәкәй!

-- Көн һайын фермала күреп еләп бөткәнмен, һинең менән бейергә теләмәйем! – тип өҙҙө ҡыҙ.

-- Ә мин теләйем! Мифтахитдин, ниңә аңшайып ҡаттың – тарт күрегеңде!

Мифтахитдин, ауыл лафкыһының (“лавка” һүҙенең башҡортсалаштырылыуы, магазинды шулай атайҙар) мут һатыусыһы, гармунын бөтә көсөнә шарылдатҡайны, МТФ мөдиренең йылтыр хром итектәре, Ай яҡтыһында ялт-йолт килеп, ҡыҙҙың ыҡсым түфлиҙәрен шат эйәртмәк итһә лә, Нәғимә ҡапыл тартылды ла һыпырылып китеп Зәйни тәңгәленә атлыҡты, уны ҡулынан әләктереп һөйрәне:

-- Кемде күҙләйһең, һалдат, минеме? -- Муйыл кеүек сөм-ҡара күҙҙәре менән егетте тамам иҫәнгерәтте: “Бәй, мин хәрби хеҙмәткә киткән саҡта итәгенә баҫып тәгәрәп ҡалған оҙонороҡ ҡыҙыҡай Нәғимә бит был! Ҡайһылай ҙа матурайып буйға еткән, ҡуңыр сейәләй өлгөргән! Өҫтәүенә, колхоздың уңған һауынсыһы ла тиҙәр үҙен!” Шулай уйлап та өлгөрмәне егетебеҙ, ҡыйыу

һылыуҡай тултырып уның күҙҙәренә ҡараны: -- Бына ул мин – төш бейергә! – Һәм егетте баш тартмаҫлыҡ ҡороҡланы – шунда уҡ бейеп тә киттеләр, Ғәйнулла мөдир ике күҙе аҡшайып тороп ҡалды...

Ә шулай ҙа һемәйгән егет уйын таралышҡан саҡта Нәғимәне ҡабат ҡамтарырға булды – бер ситтәрәк күҙәтеп торған Зәйнигә яғымһыҙ ҡарап:

-- Киттек, һылыуым, өйөгөҙгә тиклем көндәгесә үҙем оҙатып ҡуяйым! – тине.

-- Юҡ, бөгөн оҙатыу кәрәкмәй. Зәйни ағай менән миңә юл ыңғайы. – Ҡыҙ, ҡырҡышйәндән ҡырҡа айырылып, йүгереп килеп, Зәйниҙе етәкләп алды. – Китттек-киттек, Ай ҙа байып бара ана!

-- Ҡыҙыҡай, ысматри, комсомолка башың менән иртән эшеңә һуңлама! Һыйырҙарыңды һалдат килеп һауышмаҫ! – тип ҡысҡырып ҡалды мөдир. – Был кварталда һауын буйынса алдынғылыҡты һин яуларға, маяҡ булырға тейешлегеңде онотма! – тип өҫтәне.

-- Аныһын һинһеҙ ҙә беләм!

-- Ысматри!

Һалдаттың башы әйләнде. Әллә ниңә бер күреүҙән, бер ҡағылыуҙан уҡ йөрәгенә кереп ултырҙы ла ҡуйҙы был һылыу... Икеһе тиң бер үк хис кисерешепме, бер килке өнһөҙ барҙылар.

-- Был МТФ Ғәйнуллағыҙ бөтә һауынсыларын да ошолай ҡурсалаймы? – тине егет.

-- Кемдән?

-- Мәҫәлән, миңә күҙҙәрен яман аҡшайтып ҡараны.

-- Аҡшайғанды уғата аҡшайтайыҡ! – Бер ус көмөш тәңкә сылтырап һибелгәндәй йәнгә үткәҙеп көлдө.

-- Ниндәй алдынғылыҡты лыҡылдай ул? Ниндәй маяҡ?

-- Бәй, әллә ҡайҙа автомат йөкмәп йөрөп, сәйәсәттән артта ҡалғанһың икән. Һауынсылар араһында МТФ, колхоз, район, өлкә буйынса кварталда иң күп һөт һауып алып, алдынғылыҡҡа сығыу өсөн социалистик ярыш бара бит хәҙер. Шундай алдынғылар илдә яҡты маяҡ буласаҡ.

-- Ә һыйыр апайҙар үҙҙәре нимә ти һуң?

-- Һыйырҙың һөтө теләндә, тип, ифрат ҡарыша улар.

-- Һе! Ул ҡарышыуҙы нимә менән еңәһегеҙ?

-- Ҡағыҙ менән, ҡағыҙ! Күп һөт һауып алырға, тип райондан да, өлкәнән дә көн дә ҡағыҙҙар яуа, ә беҙ, һауынсы комсомолдар, шуның менән һыйлайбыҙ һәүкәшкәйҙәрҙе...

-- Аңлайҙармы һуң?

-- Юҡ шул, аңларға теләмәйҙәр. Аң кимәлдәре түбән...

-- Алайһа, комсомолға алырға кәрәк уларҙы. Ә иң оло еленлеләрен хатта партияға ла!

Әйтеп бөтөрөр-бөтөрмәҫтән артта киҫәтеү ишетелде:

-- Һине, һалдат, ауыл советына саҡыртып, ҡыҙыу табаға баҫтыртырға тура килер, антисоветчина һөйләйһең!

Әйләнеп ҡаранылар: Ғәйнулла үҙе һөйрәлеп килгән дәһә!

-- Бәй, һәүкәшкәйҙәрҙе һыйламайынса уларҙан күп һөт талап итеү советчина буламы?

-- Ул турала тейешле ваҡытта тейешле урынға саҡыртып һөйләшербеҙ! Ә һин, һылыуҡай, быңдайҙарҙың кәмәһенә ултырып, комсомол билетыңдан яҙып ҡуйма! – Ҡырт боролоп, ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап олаҡты.

-- Вәт, ә-ә-әй! – Һыҙғырып ҡалды Зәйни. – Һөрһөп бөткән бюрократ икән дә был МТФ мөдире тигәнегеҙ – ниңә һинең тирәлә ныҡ урала?

-- Үҙенән барып һора.

-- Ә шулай ҙа...

-- Ә шулай ҙа... мине кәләш итергә йыйына ул. – Ҡыҙ, кинәт боролоп, үҙҙәренең ҡапҡаһы яғына йүгерҙе.

-- Туҡта... Нәғимәкәй! – тип кенә әйтә алды шаңҡыған егет. Кәйефе ныҡ ҡырылып, ҡом йотоп ҡаҡалған ата ҡаҙҙай интегеп ҡайтты өйгә...

Атай иһә ағас игәүен игәй ҙә игәй һаман:

-- Беҙгә лә инде әҙәмсә йәшәргә ваҡыт, -- тип туҡый, күп эсеүҙән ҡарлығып, ғыжылдаған тамаҡ төбө менән. -- Әнә, күрәһеңме береһенән-береһе бәләкәс ҡусты-һеңелдәреңде? Көнөнә бер мейес икмәк етмәй. Һис туҡталыу белмәйҙәр, байҙан ашаған ялсы кеүек ҡайыралар. Һәр ҡайһына ыштан да, итек тә, бишмәт тә кәрәк. Тапҡан-таянғаның шуларҙың төпһөҙ ҡойоһона китеп тора. Берҙе бишәүләтеп йәшәмәй булмай хәҙер!

Зәйнигә был мыжыу урынлы һымаҡ күренде. Ысынлап та, өйрә шыйыҡ ине шул тыуған өйҙә. Армияға киткәндәгенән бер иле лә артмаған.

-- Халыҡ шөйлә кеҫә ҡалынайтты хәҙер, -- тип ағас аяғын түҙемһеҙ туҡылдатты атай. – Үрмәләгән, күттән шыуғаны шаңғырҙап торған бүрәнәнән бура бөтөрөп керә. Тәк ышту, беҙҙең өлөшкә лә аҡмаһа ла тама. Әле ырамын, әле ишек-тәҙрә яңағын яһатырға килтерәләр. Ә үҙ ағасыңдан әтмәләһәң, уғата файҙалыраҡ. Ҡуллы кешегә көрәп алырға була, ашата беҙҙең кәсеп!

-- Мин колхозда эшләрмен, атай.

Мотиғулла иҙәнгә сарт-төкөрҙө:

-- Һи алйот, колхозға эшләп кем байыҡҡан? Ярай ҙа, бер-берәй түрә остоғо булһаң, мәҫәлән, келәт аҫкыстарын услаған Ғәйзулла, йәки МТФ мөдире Ғәйнулла һымаҡ. Ә инде осло ҡәләм тотоп өҫтәл артында ултырһаң, бигерәк тә шәп! Ләкин ундай төшөмлө урындар беҙгә тәтемәҫ – көллөһө үҙ-ара бүлешеп алынып бөткән...

-- Аяҡ-ҡулым һау – һәнәк-көрәк тотоп та төшөрәсәкмен ул төшөмдө!

-- Һәнәгең менән тырнап, көрәгең менән көрәпме?

-- Колхоз үҙебеҙҙеке, намыҫлы хеҙмәт үҙ баһаһын аласаҡ.

-- Ноль бөтөн дә нолдән ноль иҫәбенәнме? Тот ҡапсығыңды киңерәк! – Мотиғулла, үҙе яһап кейгән ағас аяғы менән туйтаҡлап, сайыр еҫе аңҡыҡҡан аласығына атланы. Ярһып таҡта йышҡаны ишетелде:

-- Колхозға бил бөгөп кем бөтәйгән, кем туйған? Әҙәм эрәтле тимер аяҡлыҡ та эшләп ала алманым!..

Саң һырған бысраҡ тәҙрә үтә атаһының маңлайына аҡ ҡылған сәсе ялбырап төшкән тирле йөҙөн шәйләп һыҙланып ҡуйҙы Зәйни. Белә-белгәндән үк шулай

ағас йышып тамаҡ туйҙыра. Ике усы ҡалын үгеҙ тиреһенән иләнгән күндәй ҡатҡан, бер-береһенә ышҡылғанда ут сәсрәй. Һаман берҙе бишәү итеү, бөтәйеү хаҡында хыяллана. Ләкин тапҡанының яртыһын эсеп торғанлыҡтанмы, әле булһа йортҡа ҡот ҡунғаны юҡ...

Зәйни, атаһы артынан инеп, һары таҫмаларҙың йышҡы аша шажлап атлығыуын ҡыҙығып күҙәтте. Көрәк ҡулдар талыу белмәй етеҙ хәрәкәтләнә, Мотиғулла уның баҫып тороуына иғтибар итмәгәндәй. Тоҙло тиргә ҡатҡан керле күлдәген өлпәйткән көмөрө арҡаһын төҫмөрләгәс, Зәйни күңелен тәрән ҡыҙғаныу хисе күмде. Өндәшмәй, икенсе верстакта өйөлөп ятҡан ҡорамалдар эргәһенә килде. Тупаҡланған нәҙек ҡул бысҡыһын алып, тештәрен игәүләне. Улар шулай бер-береһенә һүҙ ҡатмай байтаҡ эшләнеләр. Бысҡы үткерләнеп бөткәс, Мотиғулла улына яҡынланы. Осло ҡорос тештәргә баш бармағын сыйҙыртып ҡараны. Етеҙ хәрәкәтләнеп, бер шаҡмаҡты бысып төшөрҙө.

-- Маладис, улым. Ҡулдарың икмәккә йәлсерлек. Һөнәремде бireп ҡалдырыр кешем бар икән әле.

Ҡушарлашып йыша башланылар.

-- Атай, кемгә эшләйһең был ырамдарҙы?

-- Ғәйнулла түрәгә ине лә. Яңы төкөтмәһенә веранда үҫтергән бит. Кәләш алырға итә, ти

-- Кәләш?! – Егеттең ҡолағы ҡарп итте. – Ниндәй кәләш, кемде ала?

-- Кемде тип ни, түпрә йорағы түрәнән яусылай инде ул. Йыуанҡорһаҡ келәтсебеҙ Ғәйзулланыҡын, тиҙәрме шунда.

-- Нәғимәнеме?

-- Нәғимә, тиҙәр, буғай.

Атаһы үлсәп-бысып һалған киҫәктәргә шикле ҡараш ташланы Зәйни:

-- Ғәйнулла түрәгә, тиһең инде... Әйтәм, колхоз таҡтаһына оҡшап тора.

-- Унда һинең эшең булмаһын, улым, -- тип өтөрәйҙе Мотиғулла.

-- Ферма алдына бит өсөнсө көн генә килтереп бушатҡайныҡ.

-- Шыма таҡта аҙмы ни был донъяла? Юкты-барҙы күрмә алай, йүнһеҙ бисәләр кеүек.

-- Был бит күрәләтә урлау!

-- Шыш! Телеңде тешлә, улым. Атайыңдың кәсебенә тығылма. – Тәҙрәгә ҡараны ла, ҡабаланып, таҡта өйөмөнә алама брезент ярпыһы япты. – Темеҫкенеп инеп тә килә инде анауы ярғанат. Көн дә эттәй бер еҫкәнеп сығмаһа, тамағы туймай торғандыр! – Күрше Мохтар бабайҙың бирегә ыңғайлауы күренде. Ул ингәндә Мотиғулла, йышҡыһын йәһәт йәшереп, верстагы өҫтөндә тәмәке урап ултыра ине.

-- Әссәләмәғәләйкүм, шабра[75]! – Ҡарт, ҡолғалай нәҙек-оҙон һынын саҡ бөгөп, тәбәш ишектән ҡыйынлыҡ менән керҙе.

-- Вәссәләм, шаҙра. – Бабайҙың йөҙө ысынлап та эре шаҙра – быжыр ине. – Ниңә йыландай ҡырҡа бөгөлөп этләнеп йөрөйһөң? Йомошоң булһа, тәҙрә сиртһаң, үҙем үк сығыр инем.

[75] Шабра (уры□са) – күрше.

-- Этләнергә вакыт юк әле, мырҙам. Үҙең беләһең, ферма һөтөн сепаратка ташыйым. Эште яйға һалғым килә.

-- Йә, хуш?

-- Әрйә әтмәләйһе ине арбама.

-- Әтмәлә.

-- МТФ Ғәйнулла үҙе ебәрҙе һиңә. Ана, такта тейәп килтерҙем.

-- Вакыт юк! – тип ҡырт-киҫте Мотиғулла.

-- Атай, мин үҙем...

-- Сеү! Колхоз өсөн ҡулың ҡысытып торамы әллә? Бар, күрше, бүтән оҫта эҙлә. Бында аңғыралар юк.

Мохтар ҡарт, иҫе китмәй, әлеге брезент ярпыһы япҡан таҡталар өҫтөнә сүгәләне. Япма аҫтын тарамыш ҡулы менән һәрмәп ҡараны. Күҙен алмай шәйләгән Мотиғулла ярһыны:

-- Ниңә һыйырҙай ларҡайҙың? Күт тырнар ҙа вакытым юк, әйтәм бит! Әйҙәгеҙ, сыҡтыҡ! – Аласығын йоҙаҡлай торған баулы асҡыстарын шалтыратты.

-- Атай, туҡта әле. Йүнәтеп бирәйек олатайҙың арбаһын.

Мохтар бабай йәнә лә брезент аҫтын ҡамшаны:

-- Тап ошоноң ише матур итеп юнылған, бынамын тигән шыма таҡталар килтерҙем, мырҙа, фермаға ҡайтарылғандан... – Күҙҙәрен сөкөрәйтеп, Мотиғуллаға хәйләле тексәйҙе. – Колхоздыҡын – колхоз мәнфәғәте өсөн, әлбиттә. Ә һиңә ҡасан шылдырып өлгөрҙөләр?

-- Һәй һәптән, буғыңа тайып йығылғыры! Күпте күрһәң, күҙең сығыр йәки тиҙ ҡартайырһың.

-- Һәптәндәр ылау йөрөмәй, йәки таҡта ла йышмай, ә осло ҡәләм услап өҫтәл артында ултыра, мырҙам.

Мотиғулла ҡаж-ҡож йүткеренде.

-- Бушатайыҡ, олатай, таҡтаңды – үҙем эшләп бирәйем, -- тине Зәйни, атаһының ҡырыҫлығын йомшартырға тырышып. Мотиғулла өндәшмәне.

-- Әле генә әрменән ҡайтҡан баланды ла үҙ көйөңә йырлатырға самалайһың бит, мырҙам. Аҡылың булһа, һин уның колхозға ылығыуына аяҡ салма. Донъя уларҙыҡы хәҙер.

-- Уларҙыҡы булһа, ете ҡат тирәһе туҙғансы тырышһын, әйҙә. Ҡарап ҡарарбыҙ: күпме тамыҙырҙар икән!

-- Аҙмы, күпме – бөтәбеҙ тиң шул хаҡҡа йөрөйбөҙ ҙәһә! Ил күргәнде күрәбеҙ. Зарланмайбыҙ.

-- Зарланмайһығыҙ шул – иҫәүәнгә тары көбө лә ярма! – Мотиғулла, дөбөр-шатор килтереп, верстактағы шаҡмаҡтарҙы изәнгә бираҡтырҙы. Күбәләй һары йомоҫканы яҫы еңе менән ышырып төшөрҙө.

-- Әйҙә, киттек олатай. Тауарыңды күрһәт, -- тине Зәйни. Ҡапҡа алдында ҡарттың егеүле алашаһы ҡамтарылған икән дә. Таҡталарҙы ихатаға индереп ауҙарҙылар.

-- Ай-һай, күберәк сумырғанһың! – тине Зәйни.

-- Мин түгел бит, Ғиндулла түрә үҙе күп итеп тейәтте. Артһа, күҙ күрер, тине.

-- Арбаңа сирек өлөшө ләә етәсәк. Тағы ла нимә яһарға кәрәк, олатай?

-- Әлләсе. Түрә уныһын әйтмәне. Биргән тиклемен ауыҙ асмай тейәнем дә киттем. Аръяғын үҙенән белешерһең. Бәлки, икенсе берәй нәмәгәлер, колхоздың тишеге күп бит..

Зәйни ылауҙы, борошоп, ҡапҡанан сығарып ебәргәс, бабай уның яурынына ҡулын һалды:

-- Дөрөҫ бараһың, улым. Атаң һүҙен ал, ләкин үҙеңсә эшлә. Ололар ҙа ҡайсаҡ яңылышалар. – Арбаһына ултыра-ултыра өҫтәне: -- Хәҙер колхоз һин хеҙмәткә киткәндәге кеүек үк фәҡир түгел инде. Шөйлә йән керҙе. Беҙ ҙә аҙлап ҡабырғаларға май һырыта башланыҡ. Әүәлге таяҡ урынына тос ҡына һум бирәләр. Йән башына ашлығы ла әләгә. Тик шуныһы хилаф, улым: хеҙмәтеңде баһалау әүәлгесәрәк һаман. Эшләгәндең ҡатарынан эшләмәгән дә тешләй, йыйын мутйән етәкселеккә үрләй. Ә эш хаҡыбыҙ анауы күрше генә совхоздыҡынан күпкә ҡайтыш, шуға күрә халыҡ китә, коллектив хужалыҡтың ҡомо ҡойола. Юҡҡамы ни атайың, ототоһо тотоп, тәртә тибеп һындырырға сығынлай. Әммә һин, йәш быуын, тоғро юлды табырыңа иманым камил.

Зәйни, арба әрйәһенә етерлек таҡталарҙы үлсәп бысып, һурҡытырға аласыҡтың һыулыҡ буйына һөйәне. Ҡалғандарын лапаҫ аҫтына тәңкләп өйҙө. Атай кеше, аласыҡ мейесендәге сүп-сарға ут төртөп, киҫкә бүкән өҫтөндә уйланып ултыра ине. Бармаҡ араһына тәмәкеһе ҡыҫылған. Ялҡын теле бәйҙән ысҡынырға сапсып торған дағалы аттай дөһөрҙәп бейей. Шунан күҙен алмайынса, утыҙынсы йылдар башында тәүге колхоз ойошторооуҙарын хәтерләйме был, әллә фин һуғышында ҡатнашыуынмы? Йәиһә Бөйөк Ватан һуғышында Мәскәү эргәһендә аяғын юғалтыуынмы? Хоҙай белһен.

Ҡыҙыл ут шәүләһе, күбәләктәй елпенеп, ҡырынмаған ҡырыҫ бите өҫтөндә уйнай. Күк һипкелгә оҡшаған дары төртөктәре уғата йәмһеҙләтә. Кем белә, бәлки, ошо мәлендә ул ни бары бер “ярты” тураһында хыяллана торғандыр. Эштән бушанғас, кис эсеп ятырға. Унан һуң иртүк тороп баш төҙәтергә. Яһаған тәҙрә ырамдарын ҡиммәтерәк хаҡҡа “осорорға”. Бергә эсешкән ревкомиссия ағзаһы арҡылы тағы ла бер тоҡ аҡ он әләктереп, Зәйниҙең әсәһе үлгәндән һуң алған йәш бисәһенең шыңшыуҙарына сик ҡуйырға.

Тәртә араһында ҡартайған йөк атын хәтерләтә был атай. Иҫ белгәндән әле -- он тип, әле -- утын тип, әле -- бесән тип, ағас аяғын туҡылдата-туҡылдата бөрсә кеүек һикереп йөрөүе генә ярылып ҡалған. Һәм пенсия алғаны һайын ҡаты тамаҡ ҡырып араҡы эсеүе, колхоз бригадиры, МТФ мөдире менән, бисәһе менән әрләшеүе. Шунан һуң көнө-төнө сыҡмай аласығында юнышыуы. Рәхәтләнеп аяҡ бөкләп ултырғанын хәтерләмәй Зәйни...

Инеүенә иғтибар итмәһә ләә:

-- Колхоз аҡса биргәс, беҙҙең тиҫтер йәштәр аулағаш ҡорорға йыйына... – тип тынлыҡты боҙорға баҙнат итте.

-- Ҡатыш. Ата-бабанан ҡалған йола.

-- Үҙең беләһең, ҡайтҡандан бирелә колхозда урыҡ-һурыҡ эшләйем. Уның хаҡы ла бик аҙ – айлығымды тулыһынса электр, радио өсөн тотоп ҡаласаҡтар... – тип ситтәнерәк уратты һалдат.

-- Шунан?

-- МТФ мөдире Ғәйнулла менән уртаҡ тел табырға булдым. Колхоз эштәренән һуң кистәрен олатайҙың арба әрйәһен үҙем ипләп бирермен...

-- Иплә һуң.

-- Эш хаҡы һинең исемгә яҙыласаҡ, һинән, инвалидтан, тотмаясаҡтар, -- тип ҡоро белдерҙе Зәйни.

-- Әһә, колхоздың ҡыҫыр һыйыр икәнен төшөндөңмө инде хәҙер?!

-- Шуның эсенән аулағашҡа етерлеген үҙемә бирерһең...

Мотиғулла бот сабып, хахылдап, уның күҙҙәренә ҡарап көлдө:

-- Ул таҡта ҡаҙ ояһы өсөн күпме юҡмыш һум да юҡмыш тинде көрәп алырға самалайһың, балаҡай?

-- Мин бит өр-яңынан яһап, тимерләп, ыҫтанына үҙем ултыртып бирәм. Иң кәмендә ун тәңкә.

Мотиғулла шыйылдатып һыҙғырҙы.

-- Ҡуй, улым, елдән быуаҙып, ҡойондан ҡолонлап йөрөмә улай. Мә, бынауы әҙер ике ырамды ҡултыҡла ла арғы ос Фатиманың биш тәңкәһен усыңа йомоп ҡайт. Ҡурҡма, үтескә генә бирәм – байығас ҡайтарырһың.

-- Левак аҡсаң кәрәкмәй миңә, атай. – Зәйни, кәйефе ҡырылып, үҙе эйәрләгән верстакты артыҡ-бортоҡ нәмәләрҙән арындырҙы. Атаһының көйһоҙ мисәү атылай һаман ҡырын тартыуы көйҙөрҙө йәнен. Ҡаш емереп ул тәмәкеһен бер талай төтәткәс, егет түҙмәне, ҡырҡа ғына һорай ҡуйҙы:

-- Атай, ниңә колхозды яратмайһың? Элек былай уҡ түгел инең. Үҙең ойоштороштҡан коллектив хужалыҡ бит.

Сыжылдатып йышҡыларға керешкән Мотиғулла, ҡулына балта сабылғандай ҡырт-туҡтап, улының күҙҙәренә текләп ҡараны. Йышҡыһын быраҡтырып, верстак өҫтөнә менеп ултырҙы, яйлап икенсе тәмәке төрөргә тотондо. Уның ауыҙынан төтөн, ҡара мунса тындығынан бәргәндәй, ҡуйы боролдап, һөрөмләнеп сыҡҡандай ине. Быуыла-быуыла йүтәлләгәнендә Зәйни яғына пушка көбәгеләй тоҫкалған ағас аяҡҡа ҡаҡырығын яңылыш төшөргәйне, янынан йәһәт йомоҫка услап алып, ышырып ырғытты уны. Таҙарыуына мөрәхәтһенмәй, кәштәләге ҡасауына ҡул һуҙҙы, тапланған аяҡты оҙаҡ мауығып ҡырсыны... Зәйни быны ярым сирҡанып, ярым ҡыҙығып күҙәтте.

-- Ҡайҙан алып әйтәһең ул һүҙҙе, маңҡа малай? Беләһең килһә, колхозды мин үҙем бына ошо ҡулдарым менән күтәрҙем! – тип екерҙе, ниһәйәт.

-- Колхоздан һырт ҡайыраһың бит үҙең.

Мотиғулла ярһыны:

-- Мин – инвалид! Бөйөк Ватан һуғышыныҡы! Ни теләһәм, шуны ҡылам. Теләмәһәм, ботомдо күтәреп түшәмгә төкөрөп ятам. Бына ҡандай кеше мин!

-- Элек андай түгел инең дәһә, атай... – тине Зәйни йомшаҡ тауыш менән, үпкәләберәк. Мотиғулла маңлай тирен еңе менән һелтәп төшөрҙө.

-- Элек йәшерәк инем, түҙемлерәк инем. Теште ҡыҫып тәбил таяғына ла, нолгә лә эшләнем дә эшләнем. "Яҡты киләсәк өсөн" кәрәк ине... Ләкин туҡтауһыҙ киләсәк көтөп буламы? Ҡараңғыраҡ бөгөнгөлә лә әҙәмсәрәк йәшәргә кәрәктер бит? Тамағын ҡайғыртмай көнө-төнө ҡыуылған йөк атылай, тамам ыйыҡланып

бөттөк бит инде! – Тәмәкеһенең төтөнө менән ҡуша ауыр һуланы. – Ғүмер тигәнең уҙа, улым, аҡҡан һыу менән барәбәр. Һеҙҙе асҡа үлтерməç өсөн нимәләр генә эшләмәнем! Ҡартлыҡ көнөмдә мин дә бит, түккән хәләл көсөмә тейешлеһен алып, кәмһенмәй һәм кәмһетелмәй йәшәргә теләр инем. Түләһендәр, хәтәбе, анауы совхоздағыса, дәүләттәгесә -- йығылып ятып тартырмын төп тәртәнән! Ә был хәлдә миңә ҡырыйҙан ҡайырыуым файҙалы. Балыҡ та бит, урыҫтар әйтмешләй, тәрәнерәк һыуҙы һайлай.

-- Үҙең беләһең, атай: беҙҙә совхоз түгел, ә колхоз.

-- Совхоз ерекмәне менән минең арала ни айырма? Ул – эшсе, ә мин колхозсы тип исемләнгән өсөн генәме? Икебеҙ ҙә ҡара ер бағып, ҡара тир түгеп көн күрә. Илгә бер үк икмәк үҫтереп бирәбеҙ. МТФ-ла һауып оҙатҡан һөттәребеҙ ҙә бер төҫлө. Ләкин түккән көстәребеҙ ике төрлө баһалана...

Зәйни был дәғүәгә яуап таба алманы.

-- Кем ерендә тороуыңды онотма, атай! – тип кенә ҡуйҙы. – Колхоз ере!

-- Уны мин онотмайым. Онотор инем дә, Ғәйнулла түрә оноттортмай. Әле бәрәңге ерен тартып ала, әле утынға ат бирмәй, әле бесән саптыртмай. Шул ҡытлыҡтарға тарымаҫҡа, илке-һалҡы булһа ла, уның йомоштарын да башҡараһың...

-- Шәхси йомоштарынмы? – тине Зәйни, атаһы тап шул Ғәйнуллаға тип яһап ҡуйған тәҙрә яңаҡтарына, ырамдарына төртөп күрһәтеп.

-- Түрә намыҫлы булһа ғына түрә ул. Шуныһын юйҙымы – настаяшший пан, йәғни ни ҡылһа ла ирке бар, йәне тартҡан тарафҡа бора ала. Сөнки егем атынан алып ашар ашлығыңа тиклем ауылдағы бөтә тормош сығанағы уның үҙенә ҡарай кәкере ҡулында. Теләй икән – тамыҙа, теләмәһә тарта ла ала. Барып ошаҡлап ҡара, башың ике булһа...

-- Бына ни өсөн һин шул панға тырышып эшләйһең, урланған колхоз таҡталарынан тәҙрә ырамдары ҡоршайһың! – тип көйөндө Зәйни.

-- Унда ҡыҫылышың булмаһын, башың йәш әле, балам! Тора-бара Ғәйнулланың һәм башҡаларының да асылы кем икәнен, бәлки, үҙең дә белерһең. Теленде арҡылы тешләп, арбаңды ғына эшләп бөтә күр!

Колхоздың төрлө тармаҡтарына йүгереп йөрөгән Зәйни иртә-кисен, шул эштәрҙән бушанған арала, атаһы янына аласыҡҡа инеп китә лә Мохтар олатаһының баяғы заказын тырышып үтәй. Аҙна араһында таҡталарын бынамын тигән итеп тоташтырып, кәрәкле урындарын тимерләп тә ҡуйҙы. Мохтар бабай килтереп туғарған арба ыҫтанына күмәкләшеп күтәреп ултырттылар. Һөт феләктәрен ике буй теҙеп тейәрлек тәпәш кенә, уңайлы ғына фургон ишараты килеп сыҡты. Ҡартлас иһә ҡыуана-ҡыуана атын егеп, яңы эште Ғәйнулла түрәгә күрһәтергә лә Мотиғулла оҫта исеменә “нәрәт яптыртырға” дөбөр-шатор елдерҙе. Уны оҙатып ебәреп, ҡапҡаны япҡас, Мотиғулла нигеҙ буйында ятҡан, арба әрйәһенән артып ҡалған биш буй таҡта эргәһенә килде.

-- Метр ҙа етмеш биштән үлсәп бысҡыла, улым, өсәүһен, -- тип бойорҙо ул, шөйлә уйланып торғас.

-- Нимәгә ул, атай?

-- Ишек эшләйбеҙ, ишек. Ғәйнулла үҙе ҡушты.

-- Ғәйнулла? Нимәгә ул ишек, кемгә? – Зәйни төпсөнә бирҙе.

-- Уныһында беҙҙең ҡыҫылыш юҡ. Ҡушҡас, үтәргә кәрәк.

Улының һаман тешегеп тороуын күргәс, Мотиғулла, йомшарып, ярамһаҡлы тауыш менән дауамланы:

-- Кемгә булһын, ҡарауыл йортоналыр. Иҫең киткән икән иҫке сәкмәнгә! Үҙең әйткән дөйөм хужалыҡтың тишек-тошоғо аҙмы ни?

Ых-бых килеп ишекте эшләп бөткәс, тышҡа сығарып һөйәнеләр ҙә артып ҡалған ике буй таҡта өҫтөнә бөксәйешеп ултырҙылар, бышлыҡҡан Зәйни кәзәкейен һалып ташланы.

-- Нимә, бешерәме? Яланда саф һауала ғына колхоз эшендә әштер-өштөр ҡыбырҙап йөрөү түгел шул, -- тине Мотиғулла.

-- Кем нисек бит. Мин анда ла ихласланып тир түгәм.

Атаһының талсыҡҡан күҙҙәре ҡойма өҫтөнән йүгереп, баҫыу ҡапҡаһы артындағы һарыланып бешеп килгән арыш ҡырҙарын иңләне:

-- Их, бар ине беҙҙең дә һабан һөрөп, ыҙан башына орлоҡ күкәйҙәре күмеп йөрөгән саҡтар! – Үкенепме, дәртләнепме, таҡта ҡырыйына ағас аяғын тыҡылдатты.

-- Ат һабаны артынан йөрөү ҡыйын булғандыр, атай?

Мотиғулла тәмәкеһен урта биленә еткергәнсе баҙлата һыуырып яуапланы:

-- Ҡыйын булһа ла, күңел көр ине, балам. Хистәр саф-таҙа ине. Ас-яланғас булыуыбыҙға ҡарамай, ысын күңелдән егелеп тарта инек. Яҡты киләсәк тураһындағы шиғар ҙа ҡанатландырғандыр. Һеҙҙең ише аяғөҫтө йоҡлап йөрөмәй инек.

Зәйни, алдарында ятҡан һыйыр буғына сытырҙата төкөрөп, әсе йымайҙы:

-- Үлгән һыйыр һөтлө була шул, атай. Ҡарттар гел боронғоно маҡтай, хәҙергене яманлай. Уға ҡалһа, хәҙергеләр ҙә насар эшләмәй!

-- Бәғзеләре, бәлки, күберәк тә, шәберәк тә эшләйҙәрҙер – һүҙем юҡ. Әммә илһам даръялары ҡороған – аҡса ғына көҫәйҙәр...

-- Һин үҙең дә шул яҡты ғына ҡайыраһың түгелме һуң? Бушлай эшлә, булмаһа. Яҡты киләсәк өсөн.

Тегенең кәйефе ҡырылды:

-- Мине үҙең менән тиңләмә алай. Етерлеген егелеп тарттым инде. Хәҙер бушлай ел ҡыуыр сағым уҙған.

-- Бәлки, бер һинең генә түгел, ә ғөмүмән халыҡтың андай сағы уҙғандыр, атай? Лозунгылар гөрләтеп кенә алдырып булмай хәҙер, билбау аҫтың ныҡ булыуы ла кәрәк.

-- Ә мин нимә тим һуң һиңә? Хатта бала ла бит, сабыйлыҡ осоронан сыҡһа, тәтәй-мәтәйгә, алдаштырыуға ышанмай башлай...

-- Алайһа был мәсьәләлә икебеҙ тиң бер һап та бер ҡалып икәнбеҙ шул, атай. Ләкин, ләкин...

-- Ләкин ана шул әтнәкәһе бар шул уның! – Мотиғулла, тамаҡ ҡырып, мыйығын бороп ҡуйҙы.

Өр-яңы әрйәле арбаһын шығырлатып еккән Мохтар бабай килеп туҡтаны ҡапҡа алдына. Ат башын ҡамтарып, оло резинка итектәре менән лап-лоп баҫып, хужалар эргәһенә үтте:

-- Әссәләмәғәләйкүм, ишек-мишек әҙерме?

-- Ишеге әҙер, мишеге булмаһа ла. Күтәрҙек, улым!

Зәйни яңғыҙ үҙе йөкмәп апарып һалды арбаға.

-- Ҡайҙа илтәһең, олатай?

-- Аныһын түрә үҙе белә.

-- Ғәйнулланың яңы һипләткән өйөнә түгелдер бит?

-- Әлләсе, әлләсе, балам. – Олатай тиҙерәк олағырға тайшанды. Арбаһына менеп ултырғас, башын бороп ҡысҡырҙы: -- Шабра, кәнсәләрҙә аҡса бирәләр. Кеше күбәймәҫе элек ишек-мишектәрең өсөн тейешлеһен барып ал!

-- Бер тин ҡуян, ун тин зыян өсөн туйтаңдап йөрөмәм инде. Улым, үҙең барып кил, ҡағыҙҙарына мин булып имза һуғырһың, -- тине Мотиғулла. Улының йәһәтләүен күреп өҫтәне: -- Аулағашлығыңдан артһа, Мифтахитдин дөкәненә һуғыл -- кеҫәңә бер сусҡа балаһын[76] ҡыҫтырып ҡайт!

Ағай-эне ҡайнашҡан кәнсәләр алдында Зәйниҙең тиңдәштәре өйкөмләнешеп, буласаҡ аулағашҡа бишәр һумдан “колхоз ойошторалар” имеш. Ситтәрәк ҡыҙҙар ҙа тора. Нәғимә тигәне, муйыл-ҡара күҙҙәре менән көйҙөрөп, Зәйнигә төрттөрҙө:

-- Һалдат, ҡасан уйынға сығаһың? Бер күрендең дә боҫтоң -- әллә үгәй әсәйең йәбәрмәйме? – Эргәһендәгеләре хихылдашып тотанаҡланы. Ҡолаҡтарынаса ҡыҙарынған егет ни тиергә лә белмәне. Ахырҙа баш-күҙ алып:

-- Мин сыҡһам, һинең ише муйыл күҙҙәрҙе тиген ҡалдырмам! – тигән булды.

-- Уй, эсем ауырыуы, нимә тигән була бит әле! Шул телең булмаһа, ҡарға күтәреп алып китер ине үҙеңде!

-- Белмәйем әле, кемде кем күтәрер ине икән?

-- Ҡарға тиклем ҡарғаны күтәрә алырһың инде һин, шикләнмәйем!

-- Абайла аны, үҙеңде күтәреп алып китмәйем тағы! Хатта атайыңдан рөхсәт тә һорамайынса!

Ҡуңғыр йөҙө сейә кеүек ҡыҙарынған Нәғимә телен тешләне. Матур-нәфис йөҙөн ситкә йәшереп:

-- Ҡалай тигән буласы мынауы, оялмай ҙа... – тигән булды. Ҡыҙҙың оҙон керпектәре аҫҡа һәленеүен күреп, Зәйни йөрәген ҡайнар тулҡын бәүелтеп үтте. Кәнсәләрҙең бейек болдоронан бөркөт кеүек ҡанатланып менде ул. Был муйыл күҙҙәрҙе онотоуы мөмкинме!..

Инеүен бик дәртле инһә лә, ҡанаты һынған тауыҡтай көштәйеп сығып китте егетебеҙ. Бәхеткә ҡаршы, ҡыҙҙар таралып бөткәйне.

-- Аулағашҡа байыңды, байыңды! – тип ҡысҡырҙы иптәштәре. Зәйни туҡтаны, кеҫәһен ҡамшап, икеләнеп торҙо. Ахыры ҡул һелтәне:

-- Хәҙергә булмай, егеттәр. Ауырыҡһынып торам әле. Ҡатнашыр булһам, кискәсә килтереп еткерермен.

---

[76] Сус□а балаһын – сирек литр ара□ылы шешәне, тигән һү□.

Лафкыла шығырым-тулы ир-ат, ҡатын-ҡыҙ; шунда уҡ асып һемереүселәр ҡушаһында “яғаһы аҫтына төшөрөп” ҡыҙарынып алған Мифтахитдин елкенеп һатыу итә. Ҡулға аҡса ҡунғанда, тип, көллөһө йүгерешкән. Кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә һыпырып алалар, сөнки тауарҙың булғанынан булмаған сағы күп. Ир-ат фәҡәт үҙ мәнфәғәтен ҡайғырта: аҡһурғыс башлы “сусҡа балалары” кеҫәләргә шыпылдап кереп кенә тора. Бәғзеләре стаканға Мифтахитдиндең үҙ ҡулынан ҡойҙортоп та эсә, ҡойоп биреүсе лә, әлбиттә, улар өлөшөнә керә. Талымһыҙыраҡтары тышта, кибеттең нигеҙ буйында уҡ, табын ҡороп ебәргәндәр. Ахылдай-ухылдай йоталар ҙа тоҙло балыҡ арҡаһын кимерәләр йәки еңдәре менән ауыҙ һөртөп кенә мөрәхәтһенәләр. Бер ағай ҡап-ҡара батҡаҡ эсендә хырылдап ята йоҡлап.

Зәйни әйтелгән шешәһен аласыҡта түҙемһеҙләнеп көткән атаһы алдына шыпылдатып ултыртты.

-- Һәй сәбәке малай, уңған булып сыҡтың бит, әй! Нисә тәңкә сумырҙылар? – тип ҡыуанды Мотиғулла. Зәйни өндәшмәне.

-- Аулағашыңа һалдыңмы һуң?

-- Ҡулға ни бары өс һум эләкте, атай.

-- Арба өсөн дә, ишек өсөн дәме?

-- Эйе.

Мотиғулла елкәһен ҡашыны:

-- Әйттем бит, елгә еленләп, боҙға быҙаулап йөрөмә, тип.

-- Был тьиклем үк оторҙар тимәгәйнем.

-- Отолмаҫка беҙҙә иң кәмендә хисапсы булырға -- ҡағыҙ-ҡәләм тотоп ултырырға кәрәк. Беҙҙең һымаҡ хөрәсәндәргә баһа эт илағыс бында.

-- Күрәләтә көс елгә осто! – тип килеште йәш быуын да.

-- Бармаҡ башындай ғына булһа ла шешкә ул, Ғәйнулла: үҙ хөкөмкәйҙәре үҙ ҡулында, ни ҡылһа ла уның хаҡы бар.

-- Шуға ла эш бармай беҙҙә.

-- Беҙҙә генә түгел – бөтә ерҙә. Йәғни бөтә совет илендә...

-- Атай, теленде ҡыҫҡараҡ тот! – Зәйни тирә-яғына ҡаранды.

-- Совет иле тигәнем – үҙебеҙ булабыҙ инде... Эш хаҡын күтәреү өсөн, йәнәһе, тәүҙә колхозды байытыу кәрәк, тибеҙ. Ә бушлай кем эшләһен? Эшләмәгәс, нисек байыһын? Алйотлоҡ! Ошоноң менән биҙҙертәләр халыҡты...

Ҡапҡанан Мохтар бабайҙың онға батҡан тараҡандай ала-ҡола кәзә һаҡалы күренде. Мотиғулла, ҡабаланып, араҡыны йомоҫка аҫтына тыҡты:

-- Элмәңнәр ҙә йөрөр инде ошо ярғанат! Темеҫкенеп инеп килә.

Мохтар бабай аҙыраҡ ҡыҙмаса ине.

-- Әссәләмәғәләйкүм, шабра!

-- Вәғәләйкүм, шаҙра.

-- Бына аҡса алдым әле мин дә бөгөн. Эстә айғыр кешнәгәс, иллалла менән әбей ҡулынан өс тәңкәлекте ҡайырып, улымдың ҡул әжерен ҡайтарайым тип килдем әле. Рәхмәт, һүҙемде йыҡманы – бынамын тигән итеп әтмәләп бирҙе, таҡта фургонда рәхәтләнеп ҡуҡырайып йөрөйөм. Мин дә кеше бит! – Ҡартлас

верстакка “суҫка балаһы”н ултыртты. Мотиғулла ла, йөҙө яҡтырып китеп, сүп аҫтына боҫторған шешәһен һөйрәп сығарҙы.

-- Ултыр-ултыр, күрше. Улым, бар әле, әсәйеңдән икмәк менән бер-ике баш һуған һорап килтер.

Зәйни кире ингәндә шешәләрҙәге өс соҡортайға тигеҙ бушатылғайны.

-- Йә улым, яҡынла. Ир ҡорона керҙең инде хәҙер, гәрсә өйләнмәһәң дә. Атайың алдында аҙ-маҙ еппәреү әллә ни яҙыҡ булмаҫ, шулай бит, күрше?

-- Балиғ булған инде улың, үҙ тамағын үҙе туйҙырырлыҡ. Тик самаһын ғына белһен, шайтан ҡотҡоһоноң, тим... Әйткәндәй, күҙләп йөрөгән ҡыҙ-ҡырҡының бармы һуң?

-- Булмай буламы инде – баяғы шул келәтсе Ғәйзулланың Нәғимәһе, тиҙәр бит. – Мотиғулла, хәйләкәр йылмайып, мыйығын һыпырҙы.

-- Шулай икән... хәйерле булһын. Тик Ғәйнулла түрә күҙ һалып йөрөй бит әле уға. Йортон да яңыртты – көҙгә туйлап алмаҡсы. Баяғы Нәғимәне, тим...

-- Һе! Ҡыҙ үҙе нимә тип әйтер әле? – Атай кеше улына күҙ йүгертте.

-- Атаһы ла шул Ғәйнулланы, бына-бына буласаҡ кейәүем, тип әйтә, ти...

Хәмерҙән ҡыҙа төшөп, эсе бошоп тыңлаған Зәйни кинәт кенә:

-- Ишекте ҡайҙа илттең, олатай? – тип ҡырт-киҫте.

-- Ҡайҙа булһын, туп-тура шул Ғәйнулла ихатаһына. Үлсәп эшләнгән, тирһең – яңы верандаһына шап итеп ҡалды!

Зәйни ырғып торҙо:

-- Колхозға эшләйбеҙ, тигәйнең түгелме ни, атай?

-- Әйтһәм, ни йомош? Уймаҡтай ғына булһа ла, түрә -- фармандарын үҙе бирә. Ҡайҙа ҡуйһа ла, ҡуя – үҙ ирке.

-- Бирермен мин уға иректе! Колхоз таҡтаһынан өйөнә ырамдар яһатыуы етмәгән, инде ишекте үҙләштерә! Атыңды егеп кил, олатай: ҡалған анауы ике таҡтаны кире фермаға алып кит!

Инде Мотиғулла түҙмәй һикереп торҙо:

-- Бирермен мин һеҙгә, бирмәй ҙә ни! Ҡағылаһы булмағыҙ. Улар минең таҡта!

-- Ҡайҙан килеп ул һинеке булһын, ти?

Мотиғулла улының ҡолағына эйелеп шыбырланы:

-- Иҫәрләнмә. Ул таҡталарҙы миңә Ғәйнулла ишек эшләткәне хаҡына һибәләне.

-- Әһә, шулаймы ни әле? Урлап үҙенә эшләтеүе етмәгән, өҫтәүенә, урланған таҡтаны эш хаҡы итеп тә бирә икән. Аҡылға ултыртырмын мин уны!

-- Аҡылың булһа, ярыҡ барабанланып шаулап йөрөмә, күтеңде биш ерҙән ҡыҫ! Мә алты һум. Бөкләп кеҫәңә тыҡ та аулағашыңа һыпырт. Бая Фатиманан болдорон йүнәтеп биргәнем өсөн алғайным, -- тип, улының йөрәгеңдә ҡуҙлаған утты баҫырырға тырышты Мотиғулла.

-- Ярамай, мырҙам, ярамай, -- тип Мохтар ҡарт та өгөтләне. Ләкин ҡаны ҡыҙып өлгөргән Зәйни, атаһының аҡса һонған ҡулын кире ҡағып, сығыуға йәһәтләне. Кирза итектәре менән урам буйы лап-лоп атлап, МТФ мөдире Ғәйнулланың быйыл ғына һаламын ҡуптарып ташлап, ап-аҡ шифер менән

ябылған алты мөйөшлө йортона яҡынланы ла асыҡ ҡапҡанан ихатаһына күҙ һалды. Балауыҙҙай һары таҡталарынан сайыр еҫе аңҡытып торған верандаға, ысынлап та, бая ғына арбаға үҙе һалышып ебәргән ишек ҡаптырылғайны. Күп уйлап тормаҫтан, ишекте шытырлатып күгәндән һурып алды. Соландан, сыр-сыу ҡубып, түрәнең оҙон тороҡло әсәһе йүгереп сыҡты, аҙбар яғынан хужа үҙе лә күренде.

-- Разбу-у-уй, өйҙө емерәләр! – тип һөрән һалды Ғәйнтямал, ҡарсығалай осоп килеп, егетте яғаһынан алды. Кинәт йолҡа тартыуҙан Зәйни сайҡалып китте, ике ҡуллап тотҡпан ишеген ергә ауҙарҙы. Шул арала ҡулына көрәк тотоп, ҡашы-күҙе емерелгән Ғәйнулла үҙе килеп етте.

-- Эсеп-иҫереп ҡоторған был хулиган! Ауыҙынан араҡы аңҡып тора! – тип сарбайланы Ғәйниямал; бот-сатын килбәтһеҙ тарбайтып, егеттең йән еренә тибергә самаланы. Әммә Зәйни уны үҙ иңенән ҡуптарып, маҙаһына тейгән күгәүендәй һелкеп ырғытты. Шул арала башы өҫтөнә Ғәйнулланың дуға һыҙып төшөп килгән көрәгенән саҡ тайпылып өлгөрҙө.

-- Ни эшең был, Ғәйнулла?! Үлтерәһең бит егетте! – тигән тауыштар ишетелде. Ни арала тәңгәлгә халыҡ эркелгән дә бушлай ҡуйылған кәмитте тамаша ҡылып торалар. Шуға күрә түрәнең ҡулы ҡалтыраны, көрәген йәһәт кенә ситән буйына ырғытып, көсөргәнештән шабыр тиргә батҡан йөҙөн ең осо менән һөрттө.

-- Башыңды төрмәлә серетермен, хулиган! – тип, теш араһынан ҡыҫылдырып сығарып ышылданы. Оҙон күлдәк итәген ыштан бөрмәһенә ҡыҫтырып, улының дошманына ташланырға әтәсләнгән әсәһе яғына асыулы ҡул һелтәгәйне, уныһы елтерәп өйөнә инеп китте. Төркөм араһынан был икәүҙең кеменәлер яуҙырылған әсе һүҙҙәр ишетелде.

-- Күрҙегеҙме, армиянан ҡайһындай шәп һөнәргә өйрәнеп ҡайтҡан! – тип ярһыны Ғәйнулла. – Көпә-көндөҙ эсеп-иҫереп, кеше йортон килеп баҫа, ишектәрен ҡайырып ала!

-- Ҡайырып түгел, ә һурып, -- тине Зәйни, шаңҡыуынан ҡабат иҫенә килеп. – Сөнки ишек һис тә һинеке түгел, ә дөйөм хужалыҡтыҡы!

-- Ни лыҡылдайһың, кем ул дөйөм хужалыҡ?

-- Колхоз ул, һин колхоздыҡын урланың!

-- Дакажи, шул клеветаң өсөн яуап бирерһең!

-- Докажу! Мин был ишекте колхоз таҡтаһынан колхоз өсөн тип үҙ ҡулдарым менән эшләп, бөгөн иртәнсаҡ ҡына Мохтар олатайҙың арбаһына һалышып ебәргәйнем, шуның өсөн хисапсығыҙ наряд та тултырғайны. Ә һин шуны, намыҫһыҙ түрә-мүрә, үҙ йортоңа ҡаратып сәлдергәнһең! – Зәйни ишекте күтәреп алырға иткәйне, болдорҙан Ғәйниямал ҡабат дау һалды:

-- Разбу-у-уй, талайҙар! Йәмәғәт, ярҙамға килегеҙ! Был ни хәл, ниңә ауыҙ асып тик тораһығыҙ?

-- Дружинниктар ҡайҙа? Ҡулдарын ҡайырығыҙ дыуамалдың! – Ғәйнулла, ишек өҫтөнә боттарын тарбайта баҫып, ҡыҙыл еңлеләрҙең исемен атап саҡырҙы. Төркөм эсенән хисапсы, клуб мөдире, пожарник айырылып сыҡтылар; күҙҙәрен аҫҡа төбәп, ҡыйыуһыҙ ғына, түрә бойороғон үтәргә итеп ҡаранылар, әммә

“дыуамал” уларға баш бирмәне. Тамаша ҡылыусылар төркөмө кейәһенә таяҡ тығып болғатылған умарта күселәй гөжләне:

-- Ниңә тик-томалдан уға дружинниктарҙы һөстөрәһең? Егет дөрөҫ һөйләй!

-- Башҡаларға тәтемәгән шиферҙы ҡайҙан сумырҙың?

-- Верандаң да баштан-аяҡ урлап ҡоршалған!

-- Дакажи һин аны, дакажи! – төркөм яғына бер аҙым атлап күҙҙәрен аҡайтты мөдир.

-- Нимәһен уның даказайт итергә инде? Ферманан ҡайтҡаның һайын арбаң төбөнә таҡта һалып ҡайтҡаныңды күреп йөрөнөк.

-- Килтерегеҙ бау, ҡараҡтың үҙенең ҡулдарын шаҡарайыҡ!

Дружинниктар, бер-береһенә ҡарашып, албырғанып ҡалдылар. Шул арала Мохтар ҡарт килеп сығып, Зәйниҙе ҡултыҡлап алды:

-- Ҡуй, мырҙам, эт менән эт булма алай! Хаҡлығыңды бүтән ваҡытта иҫбатларһың. Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән, тигәнде онотма.

-- Күрәләтә нисек түҙеп ҡалмаҡ кәрәк, олатай?

-- Боронғолар, буҡҡа ҡағылма, һаҫыһы таралыр, тигәндәр...

Арттан Ғәйнулланың ярһып ҡысҡырыныуы ҡыуалатты:

-- Кемдең кем икәнен белмәй йөрөһәң, бер юлы белдертермен – ике аяғыңды бер ҡуныҫҡа тығырмын мин һинең, эшкашмаған! Ғәҙел законға тарттырып, бер таҡтаға баҫтыртып бейетермен! Осаңды тырнай-тырнай ыуаланырһың!

-- Күрербеҙ кем ыуаланғанын! – тине Зәйни, атлап барышлайы башын ҡайырып. Мохтар бабай кире боролорға ирек ҡуйманы.

Сисенгән һыуҙан таймай, тип, Зәйни эште аҙағынаса еткерергә самаланы. Иртән тороп, почта бүлексәһендәге телефондан колхоз идараһына шылтыратты. Рәйес үҙе өйҙә юҡ, тинеләр; трубканы колхоздың партком секретаре алды. Мәсьәләнең үтә дефицит тауар – төҙөлөш материалына бәйле икәнен белгәс, дилбегәне колхоздың рәйес урынбаҫарына тапшырҙы. Айыу үкереүеләй ҡалын тауышлы уҙаман, иренеп кенә тыңланы ла, хәлде урында энәһенән ебенәсә тикшереү өсөн кисекмәҫтән халыҡ контроле ағзаһын йүнәлтергә вәғәҙә итте. Һөйләшеү шуның менән осланды.

Төш ваҡытында лафкысы Мифтахитдиндең, уның ҡатарында ҡултығы аҫтына ҡыҙыл папка ҡыҫтырған хисапсының, ғауғалы ихатала ала-ҡола бер төркөм ир-ат йыйып, ҡулдарын болғай-болғай, дәғүәле ишек эргәһендә донъя бутап тороуҙары күренде. Ҡыҙыл папкалағы зәңгәр тышлы дәфтәргә нимәлер яҙып алып, эшем эйәләре кәнсәләргә ыңғайланы. Арауыҡ ваҡыт үткәс, аталы-уллы оҫтаҡулдарҙың аласыҡ ишеген кәнсәләр йыйыштырыусы ҡатынҡай килеп шаҡыны. Егеткә ишеттермәҫкә тырышып, үҙ-ара ғына ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа шыбырҙашып аңлашҡастары, ул Мотиғулланы эйәртеп алып китте. Әлеге шау-шоуҙан һуң даими емерек ҡиәфәтле атаһынан һорарға ҡыйманы Зәйни. Билдәһеҙлек ҡосағында байтаҡ интектергәс кенә, ауыҙы ҡолаҡтарына еткән Мотиғулла, ту-туҡ атлап, бик елле ҡайтып керҙе. Улына ауыҙ һүҙ ҡушмай, арба йүнәтеүҙән артҡан ике буй таҡтаны саж-сож бысып тураҡларға кереште.

-- Бына шулай! – тип ҡәнәғәт һөйләнде, киҫәктәрҙе теҙеп ҡуйғас, мыйығын ялт-йолт бороп. – Бынан ары алай, яман тай һымаҡ, атаңдан алға сыҡма сапсып!

-- Ниңә киҫкеләнең быларҙы, атай?

-- Аныһын мин үҙем беләм. Субственный минеке был материал. Аҡылың булһа, Ғәйнулланан хәҙер үк барып ғәфү үтен. Әле һуң түгел.

-- Ярар, елкә соҡорон күрмәгәндән үлмәгән! – Ҡул һелтәне Зәйни.

Ҡояш байығас, Зәйниҙе лә саҡырттылар тегендә. Өҫтәл артында Ғәйнулла-мөдир үҙе, парторг Муллаян, ә өҫтәлдең ике башында хисапсы менән Мифтахитдин күҙле бүкәндәй тексәйеп ултыра ине. Биргән сәләмен иғтибарһыҙ ҡалдырҙылар. Ҡыҫыҡ ишектән соландағыларҙың һәм ишек төбөндә тәмәке быҫкытыусыларҙың ҡыҙыҡһынып һағалаған күҙҙәре ялтыраны. Һәммәһенең ул ингәс тә шым ҡалыуы шомландырҙы. Шулай ҙа ул, сер бирмәҫкә тырышып, стена буйындағы буш эскәмйәгә йәпләнде.

-- Йә, һалдат, бутҡаны шәп ҡайнатаһыңмы? -- Күҙлек быялаларын ялтыратып һүҙ ҡатты, ниһәйәт, Муллайән.

-- Боҫландырып.

-- Ҡаҙанының төбө көйөп ҡуймағайы.

-- Көйһә, болғатырҙар. Болғатыусылары әҙер бит. -- Өҫтәл эргәһендәгеләргә ымланы егет. Ғәйнулла талағы ташыуын баҫа алманы:

-- Ниңә шул хулиган менән мәмәйләшеп маташырға? Тотҡан тәңгәлдән шартлатып һындырыу кәрәк!

Муллаян, уңайһыҙланып, ҡалын ирендәрен ялап алды. Ул математика укытыусыһы булып эшләй, ҡасандыр Зәйниҙе лә укыткайны. Бригадаға парторг итеп быйыл ғына һайланғас, ығы-зығы араһына башкөлләй сумып өлгөрмәгән, ғауғалы был ваҡиғаға тығылыуы уның өсөн утҡа кереү менән бер ине, буғай.

-- Шартлатып һындырырға, ағас түгел бит был – кеше, әҙәм балаһы! – Мөдиргә боролоп ҡарап, ҡоро киҫәтте Муллаян. Зәйнигә төбәлеп дауамланы: -- Ниңә былай бик оторо ҡыланаһың, ҡустыҡай? Ни ҡыйраттың, баһадирлыҡтарыңды теҙеп бир.

-- Теҙәһе юҡ бында. Кәрәкһә, Ғәйнулла-түрә теҙһен. Ундай һөнәргә шәп бит ул.

-- Мин, унан түгел, ә һинән һорайым! – Парторг дилбегәне ҡыҫкартты. – Ниңә үҙеңдән өлкәндәрҙе ихтирам итмәйһең, һорауға яуап бирмәйһең?

-- Завферма үҙенең нисек итеп колхоз милкен сәлдергәнен хикәйәтләһен, тим. Ҡыҙығыраҡ булыр.

Ғәйнулла, өҫтәлгә усы менән шартлата һуғып, осаһын ҡорт саҡҡандай ырғып торҙо:

-- Дакажи һин, дакажи! Пулный законлы дөкәмиттәргә таянып дакажи. Ҡайҙа ҡағыҙҙарың?

-- Мин һинең арттан көндәлек яҙып йөрөмәгән. Колхоз таҡтаһынан үҙеңә ишек яһатыуыңды иһә ошо күҙҙәрем менән күрҙем!

-- Күҙ – яҙыулы ҡағыҙ түгел. Нимәгә таянып әйтәһең?

-- Мин ул ишекте, колхоз фермаһына икән, тип, бына ошо үҙ ҡулдарым менән яһаным!

-- Ә бына был документты күрҙеңме? – Хисапсы ҡыҙыл папкаһынан ус яҫылыҡ ҡағыҙ киҫәге сығарып болғаны. – Иптәштәр, таныш булығыҙ: Ғәйнулла Ғимадиевичтың колхоз идараһынан шәхсәнә үҙ кәрәк-яраҡтары өсөн бысҡы материалы яҙҙыртып алған ҡағыҙы. Колхоз председателенең урынбаҫары Вәлитов иптәш үҙе ҡул ҡуйған!

Өҫтәл янындағылар шөйлә йәнләнеп, ҡағыҙҙы үрелеп ҡаранылар, баш сайҡап, тел сытылдаттылар.

-- Ғәйнулла бөгөн сығып яҙҙыртып ҡайтҡанмы ул ҡағыҙҙы? Быға саҡлым ҡағыҙһыҙ шылдыра торғайны! – тип, соланда тыңлап тороусыларҙың береһе сәнстерҙе.

-- Кем ул унда тел болғай? Яҡтыға сығып күрен, тараҡан, исем-фамилияңды әйт! – тип екерҙе Ғәйнулла-мөдир. Ғауғалы ауыҙ йомолдо. – Числоһын ҡарағыҙ, иптәштәр: ҡағыҙ бер ай элгәре яҙып бирелгән!

Зәйни үҙенең бик шыма итеп кәкере ҡайынға терәтелеүен төшөндө.

-- Так што, етәксегә нахаҡ яла яҡҡаны өсөн ғәйепле кеше үҙ кәрәген алыр! – тип ҡағыҙын болғаны хисапсы. Кибетендә яғаһы аҫтына йөҙ грамды төшөрөп килеп, йоҡомһорап ултырған Мифтахитдин дә, башын ҡалҡытып:

-- Бына мин дә, халыҡ контроле ағзаһы булараҡ, Ғәйнулла Ғимадиевичтың таҡтаны ҡануни юл менән алғанын тулыһынса иҫбат итәм! – тип дөрөҫләне.

-- Ниңә һатыусы йорағы колхоздың халыҡ контроленә һайланған? – тип ҡыҫтырҙы соландан баяғы тауыш.

-- Уның магазинға эшкә кереүенә өс көн тулып бер аҙна ла түгел бит әле. Электән һайланған килеш йөрөй, -- тип аңлатты парторг.

-- Эште тикшерергә уны билдәләмәҫкә кәрәк ине.

-- Һин, кем, әллә ышанмайһыңмы? Бөтәбеҙҙән аҡыллыраҡ булып киттеңме? – тип күҙҙәрен аҡайтты мөдир. Муллаян, ҡорғаҡһыған графинға ҡәләме менән сирткеләп, тыныслыҡ урынлаштырҙы:

-- Шауламағыҙ, иптәштәр, тәртип менән һөйләгеҙ! Һуған баҙары түгел бында. Бәлки, теге иптәштең әйткәне дөрөҫтөр ҙә. Төбөнә туҙ ҡуйып, энәһенән-ебенәсә тикшерербеҙ. Кәрәкһә, Мифтахитдин иптәш урынына бүтәнде һайларбыҙ. Ләкин сөй бында түгел. Эш шунда тора: Ғәйнулла Ғимадиевичтың төҙөлөш материалын законлы юл менән алыуы асыҡланды. Ҡануни документы бар. Тимәк, Зәйни иптәштең әйткәндәре дөрөҫләнмәне... -- Өҫтәл янындағылар, тупһа төбөндәгеләр, күҙҙәрен сөкөрәйтешеп, хихылданылар. Зәйни, ниндәйҙер билдәһеҙ көстәр арҡаһында үҙенең шыр-тилегә ҡалып барыуын тойоп, сыҙай алмай, ырғып торҙо. Үҙен-үҙе тота алмай ярһып ҡысҡырҙы:

-- Ялған! Ниңә ҡағыҙға ышанаһығыҙ ҙа миңә ышанмайһығыҙ? Тере кеше мөһимме һеҙгә, ҡағыҙмы? Әгәр ҙә бик шикләнһәгеҙ, атайымдан барып һорағыҙ. Ғәйнулланың, ишекте яһатып алғас, эш хаҡына биреп ҡалдырған таҡталары әле лә аласыҡта ята!

-- Туҡта! Йыйыштырыусыға әйтегеҙ, килтереп еткерһен Мотиғулла ағайҙы! – тип бойорҙо ике бите ҡалтыранған Ғәйнулла. -- Ә һин, теләгән берәүгә яла яғырға өйрәнеп ҡайтҡан мөртәт, китмәй тор!

Ағас аяғын шығырлатып та туҡылдатып, ахылдап-ухылдап, атаһы килеп етте – кисәге хәмер һөрөмө китмәгәйне. Парторг шунда уҡ теҙгенде ҡулына алды:

-- Мотиғулла ағай, әйтегеҙ әле: ошо көндәрҙә һеҙ таҡта ишек яһанығыҙмы?

-- Яһаныҡ, улым менән икәүләп.

-- Кемгә?

-- Ғәйнулла түрәбеҙгә.

-- Кем таҡтаһынан?

-- Уның үҙенекенән.

-- Бына улың, оятһыҙ, күҙен дә йоммай мине оклеветайт итеп, колхоздыҡынан, ти бит һуң? – тине Ғәйнулла.

-- Ул ни белә? Бер нимә лә белмәй бит ул колхоз мөхитенән, ауыҙынан әле һалдат һурпаһының тәме лә китеп бөтмәгән. Уйлмай һөйләгән – ауырымай үлгән, тигәндәй, теле нимә тылҡыһанын ҡолағы ишетмәй уның, башы йәш бит әле, кисерегеҙ һеҙ уны.

-- Атай! – тип талпынғайны ла Зәйни, парторг артыҡ фәлсәфәгә сик ҡуйҙы:

-- Аңлашылды. Ултырыш тамам, эштәрегеҙгә таралышығыҙ, иптәштәр! – Һәм барса һеперелешеп сығып та киттеләр. Зәйни иһә туйтаңлаусы атаһына йәнәш атланы.

-- Ниңә дөрөҫөн әйтмәнең, Ғәйнулла ысын ҡараҡ бит! – Үпкәләп өндәште ул.

-- Эй улым-улым, ҡараҡтар араһында көн күрәбеҙ бит... Ух, баш сатнап бара, балам... – Ҡайырылып, быяла ҡойонан ҡойоп биреүсе Мифтахитдин төйәгенә ыңғайланы...

Улар ауылында иртүк ирҙәр, еткән егеттәр көтөүгә мал ҡыуа сығалар. Ҡыуғас, һәммәһе ауыл осондараҡ урынлашҡан Мифтахитдин кибете эргәһенә өйөрөлә һәм, махраларҙы бороп, төтөнөн борхолдатып, иртәнге сәйгә тиклем әңгәмә ҡороп ебәрәләр. Яңы ғына тыуған тоҙло-боросло көләмәстәр ошонда һөйләнә, телдәр ошонда сарлана. Тәбәз буйлы, ҡарпыш ҡолаҡлы ҡарт егет – һатыусы Мифтахитдин дә, лафкыһы эсендә ҡалып түҙмәй, сығып, телмәрселәрҙең теленә үҙ боросон һибеп тора. Колхоз һауынсылары ферманан көн дә ошо лафкы алдынан ҡайта. Улар күренеүе менән үк йәмәғәт, иркен тын алып, төртмә телдең бөтә үткерлеген ҡыҙ-ҡырҡынға йүнәлтә. Тегеләр ҙә ҡалышмай, һағыҙаҡтыҡылай әнә ҡаяулы һүҙҙәрен осоропмо осора. Әйтешә-әйтешә тегеләр үтеп киткәс, йыйын тарала; фәҡәт баштары “махмур”лылар ғына тура Мифтахитдин лафкаһына йомола.

Шундай иртәләрҙең береһендә баштан-аяҡ йәшел һалдат кейемле Зәйни ҙә, һауынсылар төркөмө яҡынлауын күҙәтеп тора ине лафка алдында. Был юлы ҡыҙҙар ғәҙәттәренсә алыҫтан уҡ һүҙгә ҡушылып сыуылдашманылар: “Иҫебеҙ китмәй әле һеҙҙең кеүектәргә!” – тигәндәй, күнәктәрен беләктәренә ғорур элеп, шым ғына яҡынланылар. Әммә күҙҙәрендә оҫкон уйнай, матур ирендәрен ҡымтып, көлмәйенсә саҡ түҙеп киләләр һымаҡ.

-- Былар берәй этлек уйлағандар бит, әй, -- тине Мифтахитдин, -- һаҡланығыҙ, егеттәр! – Бармағы менән төртөп күрһәтеп өҫтәне: -- Әгәр миңә алай-

былай була ҡалһа, мине бынауы иң алдан килгәненең ҡуйынында шәһит киткән тип һанағыҙ!

-- Һин, иҫерек баш! Бәлки, хәҙер үк минең ҡосаҡта тонсоғорһоң?! – МТФ Ғәйнулла ҡарт егетте, яғаһынан бөрөп алып, ике иле ерҙән күтәреп дер-һелкетте.

-- Разбу-у-уй, баш ауырта, лафкасыбыҙҙың башына етә күрмә! – тип яр һалды "махмур"лылар.

-- Башы ҡаҙерле булһа, телен тешләһен, юҡһа кемдең кеме икәнен абайламай ысҡындыра! – тине, ҡыҙышып, Ғәйнулла, ә шулай ҙа ысҡындырҙы лафкысыны.

-- Һинең кәләшең икәнен ул ҡайҙан белһен, маңлайына яҙылмаған бит! – тип этләште бере һе.

-- Мулла никах уҡымаған, Бюрозагста яҙылышмағанһығыҙ – тауыш күтәрмәй тороң! -- тип әзерәйҙе яғаһының һүтеген һәрмәштергәләгән Мифтахитдин.

-- Яҙылырбыҙ, күп ҡалмаған! Ошонан һуң кем дә кем шуны иҫәпкә алмай – ауыҙына бына ошо! – Йоҙроғон тегенең танауына терәп алды ла Ғәйнулла бригада кәнсәләренә ыңғайланы – түрә кешенең эштәре күп ине шул. Зәйни иһә быға иғтибар итмәй, күкрәк киреп алдан килеүсе ҡыҙҙы, тәүгә күргәндәй, күҙҙәрен ҙур асып, тулҡынланып ҡараны. Мәрйәләрсә ҡара юбка, ап-аҡ сарафан кейеп, ҡамыш бәйләмеләй йыуан толомдарының бере һен – алға, икенсе һен артҡа ташлап, аҡ өҫтөндә һумалалай ҡарайтып, баҙыҡ атлаған тумалаҡ таҙа кәүҙәле, тулы битле ҡараҡай ҡыҙ үҙенең күҙ ҡарашы менән генә лә егет күңеленең иң ныҡ йәшерелгән нескә ҡылын сиртеп зыңлатты – баяғы Нәғимә ине. Зәйни, күҙҙәрен ала алмай, үҙе лә аңғармаҫтан, уны тәүкүргәндәй шаҡ-ҡатып текләне. Ҡыҙ ҙа быны ныҡ тойҙо – ирендәре ҡалтыранды һәм ул күҙ ҡараларын, шаян осҡондар сәсрәтеп, һиҙелер-һиҙелмәҫлек кенә уйнатты. Быныһын, моғайын, ҡыҙ үҙе лә Зәйни генә белгәндер...

-- Нәғимә, ниңә ауыҙыңа йөҙөк йәшерҙең? Иң яратҡан һәүкәшкәйең мөгөҙ бәлеше менән һыйланымы әллә? – тине түрәнең янауына иҫе китмәгән Мифтахитдин.

-- Һәүкәшкәйҙәрем ул бәлеште һинең туйыңа һаҡлай!

-- Бәй, икебеҙҙең туйғамы?

-- Утыҙ йәшеңәсә әллә нисәмә туй яһаған һыңдыр инде һин.

-- Ышан: бер тапҡыр ҙа кәләш алмаған әле мин.

-- Ал һуң.

-- Алыр инем дә -- бармайҙар бит.

-- Тырышып ҡара, бәлки, барырҙар.

-- Үҙеңде генә алайым да ҡуяйымсы, ҡараҡай! – Ҡыҙҙы беләгенән әләктерергә маташты. -- Тамам өлгөрөп еткәнһең: олатайың әйтмешләй, көләпәрә менән һуҡһам, йығылмаҫһың, шәт?

-- Кит, ҡотһоҙ! – Нәкиә әрһеҙҙең ҡулын этеп ебәрҙе. – Башыңа тай типтеме әллә?

-- Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ, туптар атып аҡылға ултыртайыҡ әле ошо лафкы һаҡсыларын! – тип алға сыҡты Миңниса. -- Ә һин, Нәғимә әүкәйем, анауы һүҙ әйтергә лә йыбанып торған йәшел кейемленең кәрәгенә бир!

-- Ур-ра-а-а! – һауынсылар, сыр-сыу ҡубынып, күнәктәренә тығылдылар ҙа егет-елгәҙәк халҡын юл буйында ҡотороноп үҫкән, яңы ғына бешеп еткән тегәнәк йомарлаҡтары менән тупларға тотондолар. Нәғимәнең ҡушйоҙроҡтай тегәнәге Зәйни яурын башына килеп ҡунды. Егет уны гимнастеркаһынан шытырлатып айырып алды ла, көлә-көлә, ҡыҙҙар төркөмөндә йүгереп китеп барған Нәғимә арҡаһына ултыртҡайны, уныһы ҡапыл туҡтаны.

-- Әһә, эшең шулаймы? – тине, әйләнеп ҡарап. – Туҡта, һалдат, мин һинең үҙеңдең эшеңде килтерәйем әле! – Буш ҡулын улай ҙа, былай ҙа һуҙып, ҡалаҡ һөйәктәре араһындағы йомарлаҡты ала алмай йөҙәне.

-- Әләктеңме?! – тине Зәйни, һылыуҙы беләгенән услап, күҙ төпкөлөнә текләп.

-- Уй, ныҡ йәбештергәнһең, һалдат.

-- Һалдат кеше үҙе лә ныҡ йәбешәсәк – ҡуптарып ташлай алмаҫһың!

-- Ә мин ташламаҫмын да!

-- Килештек! -- Тегәнәкте алып, уның ҡулына тотторҙо. – Ҡара аны, ҡараҡай, әйткәнеңде онотма!

-- Ә онотһам нишләтерһең?

-- Бына ошолай итермен! – Зәйни эйелеп ҡыҙҙың битен үбергә итте, ләкин уныһы танау булып, уңайһыҙ килеп сыҡты. Был мәлдә улар лафкы артындағы буш әрйәләр өйөлгән мөйөштә ышыҡланып торалар ине.

-- Ә шулай ҙа мәргән түгелһең икән, һалдат, яҙа атаһың! Бына ошолай аталар аны! – Тегәнәк йомарлағын егеткә йәбештерҙе. Йүгергәне ыңғайға күнәк ҡылысының сиҡылуын ишетеп торған хәлдә, йәбешкәк йомарлаҡты күкрәгенә ҡыҫып тотоп, зиһене һүрелеп торҙо. Шул арала лафкы алдын көр тауыш яңғыратты:

-- Нәғимәкәй, матурҡай, бер минутҡа ғына туҡта әле! – Мифтахитдин дөбөрләп төштө болдорҙан.

-- Йә, ни йомош?

-- Йомош, тип ни... әйтәһе бер һүҙем бар.

-- Ни һүҙ тағы?

-- МТФ Ғәйнуллаға барма һин, миңә бар. Ул минән, күп булһа, дүрт-биш йәшкә генә кесерәк...

Ҡыҙ, туҡталып, ҡарт егеттең күҙҙәренә ҡараны:

-- Шунан башҡа бер-берегеҙҙән ни яғығыҙ менән айырылаһығыҙ?

-- Аңа барһаң, МТФ тиреҫенә биленән батасаҡһың. Ә миңә барһаң лакированный түфли, сәмсәле ситектәр генә кейеп йөрөрһөң.

Ҡыҙ ҡыскырып көлдө:

-- Шул ғынамы айырма? Икегеҙ тиң бер һап та бер ҡалып икән шул.

-- Йырлап ҡына йоҡлатырмын, гармун уйнап ҡына уятырмын. Минең һымаҡ өҙөлөп ҡыҙ һөйә белгәндәр тиреҫ араһында аунап ятмай ул.

-- Прилавка өҫтөндә шешәнән ҡойоп бирер ултырамы?

-- Мин... мин... – Мифтахитдин, артында аяҡ тауыштары ишетеп, яҡынлап килгән Зәйнигә боролоп ҡараны.

-- Нимә һин? – Зәйни асыулы өтөрәйҙе.

Нәғимә лә Зәйнигә әйләнеп ҡараны ла кеткелдәп көлә башланы:

-- Ҡара әле, әй, Мифтахитдин ағайым да мине һөйәм ти бит әле, нишләргә икән?

Ике егет ике ата бесәй һымаҡ ҡапма-ҡаршы килеп бер-береһенә текләшкән арала ҡыҙ йәһәт кенә иңкәйҙе лә, буй-буй кәртә аралығынан һыпырылып, бер туған апаһының ихатаһына инеп юғалды, көлөүе байтаҡҡаса быларҙың ҡолаҡ төптәрендә сыңлап торҙо.

-- Һин, ниңә минең арттан йөрөйһөң?! – тине Мифтахитдин, кинәт иҫенә килеп, ҡаштары аҫтынан һөҙә ҡарап.

-- Артыңдан йөрөргә, ҡыҙмы ни һин?

-- Ҡара аны, икенселәй ҡабатлаһаң, ботоңдо һуғып һындырырмын!

-- Белмәйем, кем-кемдекен һындырыр икән?

-- Телеңде лә тый, малай, һалдаттан ҡайтҡан икән, тип тормам... – Мифтахитдин, бармаҡ янап, лафкыһына ашыҡты – болдоронда “махмур”лылар зарығып көтә ине. Ирәйеп башын юғары ҡалҡытып бара, аяҡ баҫҡаны һайын ике сикәһенең ҡабарынҡы ите терт-терт һелкенә һәм ул таҡта һымаҡ яҫы, ләкин ҡыҫҡа кәүҙәһе менән күршенең әтәсен ҡыуып ебәргәндән һуң ҡиҡырайған ҡарт әтәсте бик хәтерләтә ине. Уның бая Нәғимә ҡолағына үрелеү өсөн аяғосо баҫып кирелеүен дә ҡабат күҙ алдына килтергәс, Зәйни ирекһеҙҙән ҡысҡырып көлдө.

-- Нимә шарҡылдайһың? – тине Мифтахитдин, асыулы әйләнеп ҡарап.

-- Буйың етмәҫтәйгә үреләһең, тим.

-- Кемдеке етмәҫ бит әле. Алма минең ауыҙыма үҙе өҙөлөп төшәсәк.

-- Бына һиңә алма! – Саңда аунап ятҡан тегәнәк йомарлағын тырнап алып, лафкыһының шаран-асыҡ ишегенә ырғытты.

Ошонан һуң әллә ниңә ҡупсыны ла ҡуйҙы Зәйниҙең йөрәге. Ҡайҙа ғына бармаһын да йөрөмәһен, ҡолағынан Нәғимәнең көмөш кеүек сыңғырлатып көлөү ауазы китмәне. Күмер-ҡара күҙҙәренең көйҙөрткөс оҫконо күҙ алдынан китмәйенсә уйнаны. Аҡ сарафаны өҫтөнән ҡара ҡамыш бәйләмдәреләй һуҙылған, билдән түбәнерәк төшкән ҡалын толомдары ҡытыҡланы йәнен. Шул саҡ әйткән һәр-бер һүҙе, күҙ ҡарашы юйылмаҫҡа һүрәтләнеп, инде күңел даръяһында өп-өр яңы тулҡындарҙы тулата...

Ошо хистәр менән Зәйниҙең ҡышы үтте, өнһөҙ ағас бөрөләренең шартлап ярылыу осорон да еткерҙе. Тиртеп сыҡҡан ыуыҙҙай йәш япраҡтар киреллеләр, көндән-көн баҙыҡландылар; шаян елгә лепер-лепер бәрелешеп, иҫерткес сер һөйләнеләр донъяға. Улар леперләүенең бер сихыры Зәйни тамырҙарын бүрттереп типте. Яңы һауған һөттәй пак һәм ҡуйы һауа алйытҡыс сайыр еҫе менән аңҡыны.

Колхоз һыйырҙары йәйләүгә сығарылды, һауыу урыны итеп, йылдағыса, шишмәгә мул Садиҡ һаҙы билдәләнде. Был иркен һыулау тау битендәге иген баҫыуҙарына тартылған оло юл яҡаһында булып, йөк машинаһында орлоҡло тоҡтар өҫтөнә тейәлеп үткән-һүткән сәсеүселәр (араларында Зәйни ҙә бар) киске һауын ваҡытында көн дә бында туҡтала, йөрөтөүсе дырылдағына һыу “эсергән” арала төшөп, һалҡын шишмәгә бит-ҡулын сайыштырғалай, ә егеттәр сая телле ҡыҙ-ҡырҡын менән йор һүҙ әйтешеп, бер-береһенә үткер уҡ атышып алырға ла

өлгөрә. Зәйни быңдай минуттарҙа, ниңәлер, ҡараҡайға яҡын килергә, һүҙ ҡушырға тартына – бөтәһе лә, ни булырын һағалап, уларҙы аңдығандай. Егетебеҙ, әйтешһә лә, башҡалар менән әйтешә, шаярһа ла, бүтәндәр менән шаяра. Ләкин бөтә уйы-хисе Нәғимәлә. Кемгәлер өндәшһә лә, ирекһеҙҙән, бүтән яҡтараҡ һис ни абайламағандай вайымһыҙ ҡиәфәт күрһәтеп һыйыр имсәген тартҡыслаған Нәғимәгә ишеттерерлек итеп әйтә, нимәгәлер көлһә лә, шул теләк менән ҡыскырыбыраҡ көлә. Сөнки уның ҡыҙға еткерер тойғолары шул юл менән генә атҡарыла ала... Был йәшертен һөйләшеү телен Нәғимә лә аңлай кеүек, шуға күрә лә ул Зәйни яғына боролоп ҡарамай, туранан-тура уға төбәп һүҙ ҡатмай...

Егеттәр шулай илке-һалҡы ғына шаярышып алалар ҙа машина ғыжлай башлауы менән урындарына ырғышып менеп ултыралар. Ҡуҙғалып киткән саҡта ғына Нәғимә башын ҡалҡыта, баштар араһынан Зәйниҙе эҙләп таба – күҙгә-күҙ осрашалар. Ҡыҙҙың һылыу йөҙөндә еңелсә йылмайыш төҫмөрләнә. Машинаның туҙан болото яҙлыҡтыра күҙҙәрен...

Бер мәртәбә Зәйнигә, сәскесе ватылып оҙайлыға туҡтағас, ауылға көндөҙ йәйәүләп ҡайтырға тура килде. Төшкөлөккә һыйыр һауа төшкән ҡыҙҙарҙы күреп, һылауға боролдо. Ғәжәпләнеүенә ҡаршы, шишмә ситендәге ерек күләгәһенә еңел өҫтәл ҡуйылған, өҫтөндә папирос һәм шырпылар, кәнфит, ирҙәр тарағы кеүек нәмәләр теҙеп һалынған.

-- Был ни ғәләмәт тағы? – Аптырабыраҡ һораны Зәйни шишмәгә быхылдап һөтлө феләк төшөрөп маташыусы Мохтар бабайҙан.

-- Күрмәйһеңме ни – Мифтахитдин купистың ҡырҡтартмаһы. Ҡыҙҙар артынан тәмәке лә ирҙәр тарағы тейәп килгән, мәнеһеҙ... Ултырып ҡайтам, тиһәң, ана тора аты-арбаһы. Миңә эләгәм тип өмөт итмә, йөгөм ауыр! – Алдан алдыртып һөйләнде бабай аҡтығы. Зәйни ҡул һелтәне:

-- Ҡуйсы әле, олатай, ташла шул ғәҙәтеңде! Ауыҙ асыр әмәл юҡ – алашаңды ҡурсаларға тотонаһың.

-- Ҡурсаламай ни, атайыңдың ағасы түгел бит ул. Һеҙгә нимә -- ларҡайышып тейәләһегеҙ ҙә китәһегеҙ, ә ат өсөн мин яуаплы.

-- Юҡҡа баш ҡатырғансы, был һатыусы йоратын баҫыуға ебәрер инең, исмаһам. Анда егеттәр бер урап тартырлыҡ тәмәке өсөн ҡыҙыша -- әҙәм башын ашарҙай булып йөрөйҙәр. Ҡайҙа олаҡты үҙе?

-- Ҡайҙа булһын, әлеге лә баяғы шул яулыҡлылар эргәһендә урала. Ыжлап бирә, ти, ул һинең әйткәнеңә! Икмәк күргән көсөк кеүек күҙе тоноп, келәтсе Ғәйзулланың ырғаңдағын һағалай һаман. Бына күрәһең бит, хатта ҡаҙна тауарҙарын да күҙ-ҡолаҡ ҡалдырмайынса ташлап китте. Ә бахыр аты, туғарылмаған килеш, ҡаҡ ҡояшта тора шаҡырайып. Уға нимә, мөртәткә, үгеҙ үлһә -- ит, арба ватылһа утын...

Зәйни, йөрәгенә утлы тимер һуҡҡандай, ҡырт-боролоп, һыйыр һауған ергә атлыҡты. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, бүтәгә-үлән төбөндәге һуҡырсыҫкан убаларына һөрлөктө. Ырҙын табағылай таҡырға сығып, бер һәүкәштең тимерсыбыҡ шикелле ҡаты ҡыл ҡойроғо битенә сыртлата һуҡҡас ҡына, айнып киткәндәй итте, тертләп, артҡа салҡайҙы. Миңниса тигәндәре, һауыуын туҡтатып, уға ҡарап көлөп ултыра ине.

-- Ни булды һиңә, һалдат, әллә ҡорт саҡтымы? Күҙең аларып, һыйыр өҫтөнә менеп киләһең бит, әй!

-- Ярар, ләпелдәмә. Менеү мәсьәләһен һинән һорамам.

-- Ah-ah, әллә эсеп килгән инде бынауы ағайым?

-- Шулайҙыр шул! – Зәйни ары атланы.

-- Ҡарағыҙсы бынауҙы – осаһына ут ҡаптҡандай йүгерә!

Нәғимә һыулауҙың арғы башында һауып ултыра ине. Буралай ала һыйыры, ташыу елене бушаныуға мәлйерәп, күҙҙәрен йомған килеш, тыныс ҡына көйшәнеп тора, уның даға кеүек текә мөгөҙҙәренән Мифтахитдин батыр ҡуш ҡуллап тотҡан... Гөбөр-гөбөр һөт тауышы уны ла иҙерәткән, буғай: әллә шунан, әллә оҙаҡ хәрәкәтһеҙ тороп ялығыуҙан йоҡомһораған кеүек күренә.

-- Аҡҡа бәрәкәт! Һаумы, буласаҡ маяҡ! – Арттан килеп ҡыҙға өндәште Зәйни, мөгөҙ тотоусыға бөтөнләй иғтибар итмәҫтән. Нәғимә һиҫкәнде, гөбөр-гөбөр һөт ағылыу кинәт кенә туҡтаны. Алаһыйыр, быға ризаһыҙланып, ҡойроғон һелтәп ҡуйҙы. Һауынсыһы йәһәт әйләнеп ҡарағайны, ултырғыс итеп ҡулланылған буш күнәге дөңгөрләп ауҙы.

-- Йәнеңә һаулыҡ! Ҡотто осора яҙҙың бит, һалдат!

-- Осһа ни, ҡот ҡойоусың яныңда тора бит һерәйеп. Һыйыр мөгөҙөнә ике ҡуллап йәбешкән. – Зәйни үҙе үк тауышының асылы сығыуын һиҙенде.

-- Һин, һалдат, Мифтахитдин ағайҙы алай бик рәнйетеп барма әле, -- тине Нәғимә. – Ул миңә һыйыр һауыша.

-- Эшем эйәһенән башҡаһы юҡмы ни?

-- Ҡайҙан булһын? Ана, һыйыр ҡойроғон тотоп тороусы ла кәрәк.

-- Икенсе ҡулы менән лафкасың тотһон.

--Тотор ҙа. Ярҙам итә ул миңә.

-- Ҡулындағы себен уйынын ҡарапмы?

Мифтахитдин күҙҙәрен аҡайтып екерҙе:

-- Эй, кирза! Икмәк шүрлегеңде томала, юғиһә менеп төшөрмөн!

-- Һинме?! – Зәйни йоҙроҡтарын йомарланы -- “кирза”лауы был урында түҙеп торғоһоҙ ине. – Кил әле, ҡабырғаларыңды һанап ҡайтарайым!

-- Үҙең кил, эсеңде ҡойолдорайым! – Һыйыр башын ебәреп, кеҫәһенән йылтыр бәке сығарҙы.

-- Шулаймы ни әле, эшең! – Бәкесенең үксәһенә кинәт тибеп ебәргәйне, уныһы, сәсе көлтәләй туҙғып, салҡан әйләнеп төштө. Сирғып киткән бәкене Зәйни шишмә төбөнә быраҡтырҙы. – Бына шулай, ағай кеше. Көсөңдән килмәгәнгә икенсе тотонма! – тине.

Мифтахитдин торҙо, ҡалтыранған ҡулдары менән өҫ-башын ҡаҡҡыланы. Бер яҡҡа ҡыйшайған галстугын төҙәтте. Был әкәмәт шундай күҙ асып йомғансы уйналды – хатта егеттәр үҙҙәре лә, эштең нимәлә икәнен тойомламай, шаңҡыбыраҡ ҡалды, буғай. Аптырап ҡарап торған Нәғимә иҫен йыйып өлгөрҙө:

-- Ағайҙар, ни эшегеҙ был? Ыстырам, оятһыҙҙар. Әллә бер-береһенең күҙен соҡошорға итәләр инде!

-- Туҡта, балам, был эшең өсөн яуап бирерһең! – тип әзерәйҙе Мифтахитдин.

-- Ҡарап ҡарарбыҙ.

-- Ҡуйсы-ҡуйсы инде, ағайҙар, юҡҡа әтәсләнмәгеҙ, әҙәмдән оят! – Нәғимә тулы күнәген тотторҙо Мифтахитдингә. – Ағайым, аҡыллым, ифрат аҡыллы бит һин. Барсы, тиҙ генә ошо һөттө феләккә бушатып килсе. Туҡта, үҙеңде бер генә үпәс итәйем! – Ярһыуҙан ҡалтыранып торған ҡарт егетте ысынлап та маңлайынан бер супылдатып алды. Мифтахитдин, ашыҡмай ғына, феләктәре менән мәш килеүсе Мохтар бабай яғына атланы.

-- Ярамай инде алай көпә-көндөҙ кешегә ҡул күтәреү! – тине Нәғимә, Зәйнигә ғәйепләүсән текләп.

-- Үҙе бит. Ниңә бәке менән киҙәнә?

-- Киҙәнмәҫе бопрон уҡ төртөп йыҡтың.

-- Эсемә бысаҡ тыҡҡанын көтөп тораһым ҡалған икән!

-- Ярай-ярай, тилермә, -- Һөтлө усы менән егеттең маңлайынан һыпырҙы. – Абау-абау, ҡайһылай ҙа етдиләнеп һырланған! Теләйһеңме, үҙеңде хәҙер бер тәмлекәс менән һыйлайым?

-- Ҡарап ҡарайыҡ.

-- Уй, ниндәй ҙә етди ағай! – Халат кеҫәһенән кәнфит алып, айбарлы ҡағыҙын аҡтарып ташлап, егеттең йәберһенеп ҡалтырап торған ирендәренә терәне. Зәйни башын артҡа тартты, кәнфит бүтәгә араһына төштө.

-- Ниңә алайтаһың? – Үпкәләне.

-- Моғайын, шул ҡарпыш ҡолаҡтың нәмәһелер әле.

-- Булһа ни... унан беҙгә ни зыян? Ҡарпышлығы йоҡмаҫ әле.

-- Шунан бүләк алып тормаһаң инде...

-- Алһа ни... Биргәндең битенә ҡарама, тиҙәр түгелме? Күстәнәс – мең төрлө сиргә дауа, ти, бит ул.

Зәйни кәнфитте иҙә баҫты.

-- Бәй-бәй-бәй! Ағайым ғына килеп етһен әле, кәрәгеңде бирер! – тип көлдө Нәғимә, бармаҡ янап. – "Баҡса емеше түгел – аҡса емеше, белеп ҡап!" – тип биргән күстәнәсе ине...

-- Буржуй ҡыҙҙарына оҡшап, купис бүләктәре алаһың икән. Ә үҙең комсомолка...

-- Булһа ни... комсомолканың ауыҙы юҡмы әллә?

-- Ә шулай ҙа талымһыҙ булмаҫҡа кәрәк. Кемдән – алырға ярай, ә кемдән – юҡ...

Нәғимә ауыҙын ҡыйшайтты:

-- Бигерәк талымлы икәнһең! Бар, кеҫәңде тултырып кил – һинән ҡабул ҡылырмын! – Ҡырт-боролоп, һыйырҙары араһында юғалды. Күнәк бушатып килеп еткән Мифтахитдин алыҫтан уҡ Зәйнигә сәнстерҙе:

-- Һәй, бешмәгән баш! Ҡыҙ һөйөргә иртәрәк әле һиңә. Тәүҙә һөйләшергә өйрән!

-- Ә һин кәнфиткә атланып тауға үрләмәксеһеңме?

-- Йәйәүләп тә менермен!

-- Ҡайһы яғынан баҫҡыс һөйәмәксеһең?

Эштәрен тамамлап тыңлап торған һауынсылар, шау-гөр килеп, шарҡылдап көлдөләр. Мифтахитдин өндәшмәне, яғаһы аҫтына башын тартып, ат-арбаһы яғына ыңғайланы.

Зәйни, көтмәгәндә килеп сыҡҡан ҡылыҡтарынан эсе бошоп, туҙанлы юлдан ҡайтыу яғына атланы. “Ниңә былай тик-томалдан эләгештем һуң әле, Нәғимәне *лә* ҡыйырһыттым?..” *бу*лды уның уйҙары. Әйтерһең, йөрәкте ҡаты ҡ*ул* менән ҡыҫып тоттолар. Бынан һуң ҡыҙ сәләм дә бирмәҫ, ҡалҡынып та ҡарамаҫ төҫлө... Ярты*лы*ҡ юлда Мохтар бабай ҡыуып етте.

-- У*л*тыр, балам. Ниңә бик мөшкөлләндең?

-- Кәйеф юҡ.

У*л* у*л*тырғас, ат тартыуын һүлпәнәйтте.

-- Бына күрҙеңме? – тине Мохтар бабай. – Кәйефең атҡа *ла* ауыр. Әллә таш ту*л*тырҙы*л*армы?

Егет өндәшмәне.

-- Бы*л* замандың йәштәре үтә сәйер: ялҡынланыуҙары *ла*, туңыуҙары *ла* тиҙ ара.

-- Һеҙҙең заманда нисек бу*л*а торғайны һуң, олатай?

-- Беҙ һеҙҙәрҙәй китап аша танымай инек донъяны. Барыһы *ла* бик ябай ине.

-- Хатта ҡыҙ һөйөү ҙәме?

-- Аныһы *ла*.

-- Нисек итеп һөйә инегеҙ?

-- Сыраҡ яғып кис у*л*тырһа*л*ар, тәҙрәләрҙән күҙләргә йөрөй инек, ҡарындыҡты тишеп йыр әйтешә инек. Күстәнәскә ярты ҡаҙаҡ *л*ампасый, йәки сәтләүек, араһына һа*л*ып ҡош телендәй хат килтерә инек. Шунан һуң атайға әйтеп, яусы ебәрә инек. Ә йыш ҡына быларҙың бере*h*е *лә* булмай: кәләште атай үҙе күҙләп таба *ла*, һине тейәп а*л*ып барып, ҡауыштыра *ла* ҡуя торғайны...

-- Бүләк иткән сәтләүек һәм кәнфиттәрегеҙҙе ҡыҙҙар ҡабу*л* итеп а*л*а торғайнымы һуң?

-- Һәй, у*л*ым, тәм*ле* те*л* һәм татлы тәғәмдән ҡыҙ-ҡырҡын ҡасан баш тартҡаны бар?!

Зәйни, аяҡтарын һәлендереп у*л*тырған килеш башын эйеп, оҙон сыбыҡ осо менән ю*л* туҙанын һыҙырҙы. Тәгәрмәстәр, бер-бере*h*ен ҡыуышып, тығыр-тығыр тәгәрләне.

-- Әлбиттә, бүләк менән бүләктең дә заманаһына күрә айырмаһы бар, -- тип һүҙен дауамланы олатай. -- Әгәр, мәҫәлән, минең уйлауымса, хәҙерге заман ҡыҙҙары һинең сәтләүегеңдә алмай ҡуйыуы *ла* ихтимал, сөнки ҡыҙҙар мәсьәләһендә “дөйә *лә* -- бүләк, төймә *лә* -- бүләк” тигән һис тура килмәй.. Шуға күрә бүләктең дә яраҙайын ғына һайларға кәрәк, улым. Әгәр ҙә ки, мәҫәлән, Мифтахитдин *ла*фкысы кеүек, ҡыҙ артынан кәнфит тотоп әрһеҙләнеп йөрөһәң, көлкөгә *лә* ҡалыуың бик ихтимал. Татлы тәмдән башҡа ни бирһен у*л* әҙәм йәненә? Ә инде әгәр, мәҫәлән, егетмен тигән егет шу*л* уҡ ҡараҡай-һауынсыға көн дә кәнфит услап килеү урынына у*л* ултырып һыйыр һауһын өсөн ябай ғына таҡтанан бу*л*һа *ла* дүрт тояҡлы бүкәнкәй эшләп килтерһә, белә*h*еңме, у*л* нимә

булыр ине? Күңелендә йылы усаҡ дөрләтер ине һылыуҙың! Бына шулай ул, улым, бүләк мәсьәләһе.

-- Алай тиһең дә бит, олатай... – тине шөйлә уйға тарыған Зәйни. – Ләкин хәҙерге заман ҡыҙҙарының да ҡайһы берҙәре һаман кәнфит һурырға, сәтләүек ҡайыҙларға ярата шул...

-- Яратһын. Шуның өсөн дә бит, ҡыҙҙар, тип атала улар. Үҙең егет була бел, улым, үҙең егет булып ҡал!

Ат арҡаһын дилбегәһе менән һыйпаны ла Мохтар бабай, күҙҙәрен уйсан йомоп, тормош кеүек оҙон эстәлекле көй һыҙҙырып ебәрҙе.

Зәйни элек эштән ҡайтҡас йыуына ла, ашап, мәктәптең спорт майҙанына волейбол уйнарға китә торғайны. Эштән алмашынған көллө ир-ат шунда йыйыла, бөтә донъяһын онотоп, тамам күҙ бәйләнгәнгә тиклем, уйын зауҡы менән мәшғүл. Гөп тә гөп туп һуҡҡан, ваҡыт-ваҡыт берҙәм ғоһолдашып көлөшкән тауыштар ауылды бер осонан бер осонаса иңләй. Зәйниҙең атаһы ауылдағы ир-аттың был мауығыуын насар ғәҙәт тип һанай, алтындай ҡиммәтле ваҡыттың, эш эшләмәй, туп ҡыуып үткәрелеүенә сикһеҙ йәне көйөп, ҡыр эшендә ике усы ҡара туҙанға буялып тирләп-бешеп ҡайтҡан улын үпкәле баш сайҡап ҡаршылай ине.

Һуңғы көндәрҙә Зәйни кинәт кенә туп уйынын онотоп, буш ваҡыттарын аласыҡтағы верстак янында соҡсоноп үткәрә башлағас, Мотиғулла ағай шатланып бөтә алманы. Ағас аяғын туҡылдатып, улы тирәһендә ураллы, уға ниндәй бысҡыны, ниндәй йышҡыны, ниндәй ҡасауҙы ҡулланырға кәрәклеген өйрәтеп торҙо.

-- Бына был – һөнәр, исмаһам, ата-бабайыңдың икмәк ашатҡысы! – тип кинәнеп һөйләнде ул, Зәйни ҡулы аҫтынан сыжлап осҡан урайлы йомоскаларҙы тотҡолап. Яңы таҡта тәненән мул ҡалҡҡан әсе ҡарағай сайыры еҫен тәрән һулап, үҙенең яратҡан урынына – ағас киҫкәһенә ултырҙы, ҡараһыуланған ҡыҙыл сатин янсығын һул усы аҫтында һәлендерә ҡыҫып тотоп, иренмәй генә тәмәке ураны. Винтовка патроны гильзаһынан эшләнгән утсаҡҡысын (зажигалкаһын) ләүкетеп тоҡандырҙы. Ялҡынлы гильзаһын күтәреп тотҡан килеш, уйланып, тәмәкеһен өҙөк-өҙөк һыуырҙы. Тәрән һулыш алды ла күкрәк төбөнән урғылған ҡуйы төтөн ағымы менән өрөп һүндерҙе.

-- Нимә әтмәләйһең, улым?

Уныһы ыҡ-мыҡ итте:

-- Эй... бер нәмә инде шунда.

Мотиғулла ағай бүтән ныҡыманы. Янсығы менән утсаҡҡысын бөхтә төрөп, кеҫәһенә батырҙы.

-- Эскәмйәме, тиһәм, үҙе бик бәләкәс, боттары ла ҡыҫҡа ғына... Балалар ултырғысымы әллә? – тине. Зәйниҙең ҡолаҡ остары семләне:

-- Шулайыраҡ бер нәмә инде шунда...

-- Алайғас, боттарын бераҙыраҡ йоҡарт. Бала-сағаға күп кәрәкмәй – ана теге нәҙек брустар ҙа ярап ятыр ине. Ағасты баштан уҡ бәрәкәтле тотона белергә өйрәнергә кәрәк, улым. Һин яһаған боттар – былар бит ҡәҙимге ултырғыс өсөн яраҡлы.

Егет ҡулындағы йышҡы ашығып йүгерә башланы, йышҡысының маңлайынан таҡтаға тир тамып төштө.

-- Ярар инде, атай, нығыраҡ булыр! – тип ҡәнәғәтһеҙләнеберәк һөйләнде ул. Ҡартлас, уның кәйефен тойоп, башҡаса маҙаһыҙланы, ҡоролманы үҙ ҡулы менән шыплашты. Киҫәктәр беркетелгәс, ҡәҙимгесә, матур ғына бер әйбер килеп сыҡты.

-- Бына бит ул – оҫта ҡул ағасты нишләтә! – тип маҡтап ҡуйҙы атай кеше. Ең осо менән ышҡып, таҡтаның шымалығын һынап ҡарағас, өҫтәне: -- Ҡулың эш һөйә, улым, ҡалас ашатырлыҡ. Тик ҡәҙерен генә бел!

Елеме ҡатһын өсөн ултырғысты ҡыҫтырмала ҡалдырып, икеһе ла бик ҡәнәғәт килеш йоҡларға яттылар.

Иртүк тороп ҡыр эшенә йүгергән Зәйни көнө буйына сәскесе өҫтөндә хыялланып, ултырғыҫҡа һырлап төшөрәсәк гөлсәскәле биҙәктәр уйлап йөрөнө. Нәғимәнең шул семәрле ултырғыҫҡа ултырып һыйыр һауыуын күҙе алдына килтергән һайын, татлы тойғолар тулҡынландырҙы йөрәген. Төрлө үлән һәм ағастарҙы, уларҙың япраҡтарын, сәскәләрен бер-бер артлы күҙҙән кисергәндән һуң, үҙ уйынса һөйгәненә тиң булырҙай ике һүрәткә туҡталды.

Был эште ул атаһынан йәшереп, аҙбар башында аулаҡта ултырып башҡарҙы. Бәхетенә күрә, сәсеүҙә уларҙың киҙеүе алмашынып, төнгөлөккә йөрөй ине. Иртәнсәк эштән арып ҡайтҡас, яҡты көндөң тәүге яртыһын ятып йоҡлаһа, икенсеһен баяғы матур һөнәренә бағышланы. Үткер ҡасау, бәке осо ярҙамында хыялдағы биҙәк һырҙары ағас йөҙөнә күсте. Аҙаҡ йәшел, һары, көрән төҫлө буяуҙар эшкә егелде. Мауығыуы тотоп ҡарарлыҡ булғас, аҙбар башынан төшөрөп, ултырғысты атаһы алдына ҡуйҙы.

-- Бәй-бәй-бәй-бәй, нимә күрәм?! Алтын бит һинең ҡулың, алтын! Ҡайҙан өйрәндең, улым, бындай аҫыл һөнәргә? – тип ҡыскырып ебәрҙе Мотиғулла.

-- Армияла, атай. Мин унда һүрәт төшөрөүселәр түңәрәгенә йөрөгәйнем.

-- Ә-тә-тә-тә, бынағайыш тамаша! Былайғас, атайыңдан уҙҙырҙың һин, шылма малай, уҙҙырҙың!

Ултырғыстың дүрт ботонда һүрәтләнмеш нәҙек кенә һоро сыбыҡтан тере йәшел төҫлө ҡайын япраҡтары ярылып асылған, ә түңәрәк ултырыу таҡтаһы Ҡояш кеүек көләс ҙур көнбағыш сәскәһенә әүерелгән...

Зәйни инде уңайһыҙ хәл кисерҙе: матур бүләген эйәһенә ни рәүешле тапшырырға ҡыймайынса йөрөнө. Бер ыңғайҙан теге ваҡыт Мифтахитдин менән ыҙғыш арҡаһында боҙола биргән аралары ла уңалыр, әүәлгеләй еңеллек менән һөйләшеп китеп булыр, тип өмөтләнде ул.

Семәрле ултырғыс тоҡ эсендә бер-нисә көн хужаһы менән бергә эшкә барып ҡайтты, әммә һыйыр һыулауына бер ҙә юл төшмәй ине. Механизатор иптәштәре Зәйниҙе тәүҙә: “Был хан тәхетен ҡайҙан алдың? Ниңә аны үҙең менән йөрөтәһең? – тип йөҙәттеләр. “Күрмәнегеҙме ни, беҙҙә электән бар бит ул!” – тип яуапланы уңайһыҙланған егет. Ә икенсе һорауға: “Машинала эскәмйә етешмәй бит, үҙемә ултырыр урын итеп йөрөтәм”, -- тип аңлатты. Хәйер, быныһы менән бер ни тиклем хаҡлы ла ине.

Садиқ һаҙына, ниһайәт, туҡталһалар ҙа, иптәштәренән тартынып, бүләген тапшырманы – сөкөрәйеп көлгән күҙҙәрҙән биҙәрләне. “Был һармаҡтарға ниңә күрһәттем икән?” – тип үкенде. Ахыры, уңайы табылмағас, эштән бер ҡайтып барыуҙарында, күҙ йомоп, ултырғысын күрһәтеп тоҡкан килеш, иртәнге һауын мәлендә бер үҙе һыулауға төшөп ҡалды.

-- Ҡайтмайһыңмы ни? – Аптыраштылар үрҙән. – Көтөргәме һине?

-- Юҡ, ҡуҙғалығыҙ.

-- Ағас аты ҡулында бит – шуға атланып ҡайталыр, -- тип көлөштөләр. Машина алыҫлашҡас, семәрле “ат”ын артына йәшереберәк, сағылыҡтан күҙҙәрен ала алмай, ҡәҙимгесә тутыҡ күнәге өҫтөндә һауып ултырған Нәғимә эргәһенә килде – ҡараҡайҙың башында аллы-гөллө өр-яңы яулыҡ ине. Ҡыҙ ҙа уны алыҫтан уҡ абайланы, яулығының ситенән генә ҡайырылып, йөҙөнә теклəп ҡараны.

-- Беләһеңме, Нәғимә, минең артымда нимә? – тип һалдырҙы был, үҙен ҡыйыуландырырға тырышып.

-- Нимә булһын, күләгәңдер, -- тине ҡараҡайы, иҫе китмәҫтән. Эргәһендәге Миңниса ла ялғанды:

-- Юҡ, яҡын әшнәһе Мифтахитдин ҡушарлап киләлер артында.

-- Белмәнегеҙ! – тигән булды үҙенең дә иҫе китеп бармауын белдергән Зәйни.

-- Нәғимә, әүкәйем, ғишыҡ хаты тотоп киләлер ул, моғайн. Дуҫы Мифтахитдиндән дә уҙырып ижад иткәндер!

-- Ярай, һеҙҙеңсә булһын, -- тине Зәйни. – Эйе, ижад иттем – бына ул! – Йәшергәнен ҡапыл ғына алға һоноп, Нәғимәне тартып торғоҙҙо, тутыҡ күнәк-бүкәнде доңғорлатып ситкә типкәс, урынына семәрле бүләген ҡуйҙы. – Ултыр, һау! – тине. Ләкин һауынсы, ултырырға уйламай, Ҡояш кеүек сағыу көнбағыш сәскәле семәрле ултырғыстан күҙен алмай ҡатып тора ине. Уның урынына Миңниса сыуланы:

-- Ай-буй, ысынлап та әллә Ҡояшмы, әллә көнбағыш сәскәһеме, тип торам! Хатта күҙҙәрем алаң-йолаң итеп китте. Әүкәйгенәм, ҡотло булһын бүләгең, ҡанә, үҙем ултырып ҡарайым әле!

-- Юҡ инде, апайым, -- тине кинәт иҫен йыйған Нәғимә, тәүҙә -- үҙем, юғиһә ҡото китә! Бисмилла! Йәһәт кенә “Ҡояш” өҫтөнә йәпләнеп, һыйыр имсәктәрен гөбөр-гөбөр тарта башланы, ә йөҙө көндәй балҡыны.

-- Абау, был егеттәргә ни булған?! Бер-бер артлы Нәғимәгә бүләк ташый ҙа ташыйларсы! – тип аптыраны Миңниса. – Кисә генә Мифтахитдине, ә бөгөн бынығы...

-- Ә?! Нимә килтерҙе?! – тип тертләне егетебеҙ.

-- Ah-ah, күрмәйһеңме ни башындағы кешмир яулығын?

-- Мифтахитдинме?

-- Шул булмай ни! Өсөнсө көн лафкыһында шул яулыҡты эләктерергә иткәйнем – бирмәне. “Аның эйәһе бар!” – тине...

Зәйниҙең күҙе тондо, аҡ-ҡара күренмәне. Бер ни белештермәй, юлһыҙ-ниһеҙ шырлыҡ ярып ҡыуаҡлыҡтар араһынан ауылға ҡарай дондо.

-- Зәйни ағай... Зәйни, тукта! – Ялыныслы тауышы эйәрҙе Нәғимәнең. Уға Миңнисаныҡы ялғанды:

-- Миңә лә айбарлы ултырғыс яһап килтер – аҡсаһын түләп алырмын!

-- Беҙгә лә, беҙгә лә! -- тип ҡалды башҡалары ла...

Егет инде ҡараҡайҙы бөтөнләй оноторға тип ҡарар ҡылды. Ниңә ундай ике яҡҡа ҡойроҡ болғаған төлкөгә ымһынырға? Донъяла ҡыҙҙар бөткәнме ни? Бынамын, тигәндәре бар – Нәғимәнән мең-мең тапҡыр матураҡтары. Комсомолец башың менән шуның ҡармағына ҡабып, үҙеңдән өлкән кеше менән бысаҡҡа-бысаҡ килешеп йөрө әле! Уныһы ғына ла етмәгән, лафкысынан уҙырмаҡ булып, шул ҡыҙыйҙың буржуазлыҡ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерергә бүләк һайлап маташты. Оят, оят!

Инде Нәғимә йөрөгән яҡҡа күҙ һалмаҫҡа, тауышын ишетмәҫкә, исемен иҫкә төшөрмәҫкә тырышты. Атаһының алмаш верстагын тамам үҙләштереп, бөтә буш ваҡытын юнышып үткәрҙе. Аҙна араһында ҡарттың ырам эшләргә тәғәйенләгән барлыҡ таҡта-тоҡталарын береһен-бер ҡалдырмай эшкәртеп бирҙе. Улының был сәйерлегенән аптырап, баш ҡына сайҡап ултырҙы ҡарт. Әммә Зәйни был эшенән дә ҡәнәғәтлек кисермәй: уға нимәлер етмәй, күңелен нимәлер, ҡайҙалыр елкендертеп һөйрәкләй.

Уттай ҡайнар яҙғы сәсеү тамамланған, бесәнгә төшкәнсе яйлап ял итә халыҡ. Был миҙгелдә һәр кем үҙ йорт тирәһен ҡарай: ауған ситәндәрҙе торғоҙа, тирмәнгә йә баҙарға бара, өй һыларға балсыҡ килтерә (дала яғында бураны эслетышлы һылайҙар). Кистәрен дыу килешеп бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөй.

Колхоз да был буш арала тырышып мал торлаҡтарын, иген келәттәрен йүнәттерә, тиреҫ өйҙөрә, балсыҡ һылата. Һабан туйына тиклем ҡойма-ҡураларын ялт иттереп ағартырып ҡуя. Был осорҙа һауынсылар һыулауҙан ҡайталар ҙа көндөң-көнө буйына ферма тирәһендә эшләйҙәр, ҡышҡылыҡҡа әҙерләйҙәр. Ошо мәшәҡәттәр осланып, бераҙ йән тынғас ҡына, шаулатып-гөрләтеп һабан туйы үткәрергә ҡарар ҡабул итә колхоз идараһы. Был эш бесәнгә төшөр алдынан – июнь аҙаҡтарында була.

Зәйниҙәр ҙә арып-талып тимерлек алдына ҡайтҡан сәскестәренең дискыларын ҡатҡан тупраҡтан таҙартып, майлап, таҡтаға баҫтыртып ҡуйғас, ҡыштан артып ҡалған һәм түбәләре йәмерәйгән һалам эҫкерттәрен төҙәтеп өйөргә сыҡтылар ҡырға (алты йылдан арыш һаламы ла алтынға әйләнә, тиҙәр бит). Яҙғы сәсеү эше бөткәс ни, ошоғаса быуындарҙы баҙыҡ тотҡан яуаплылыҡ тойғоһо ла кәмегән – егеттәр бик иренеп, һүлпән генә ҡуҙғалалар, әйләнгән һайын ултырып тәмәке тарталар, кәрт һуғалар, ҡыҙҙар тураһында ләстит һаталар. Бик йыш ҡына был ыңғайҙан Нәғимә һәм Ғәйнулла менән Мифтахитдин исеме ҡабатлана.

-- Кеме отор икән, әй? Ул ҡараҡай икеһенә лә ҡойроҡ болғай, өҫтәүенә, башын бороп өсөнсөһөнә лә күҙ ҡыҫа... -- Һәм Зәйнигә берҙәм ҡараш аталар.

-- Мифтахитдин аҫыл ҡошто тәпәйенән быйыл уҡ эләктерәм, ти бит.

-- Барырмы икән шул ҡарпышҡа?

-- Бәй, ниңә бармаһын, ти? Лафкысы бит!

-- Уның лафкысылығын да ташҡа үлсәйем инде...

-- Һәр хәлдә, һинең менән мин түгел – иртәнән ҡара кискә тиклем һәнәк-көрәк тотоп, телен арҡылы тешләп йөрөмәй ҡырҙа. Галстук таҡҡан килеш кенә шешә-мешәләрен шылтыратып, эш сәғәтен тултырып ҡайта ла "беломор"ҙы ҡырын тешләп кенә ята.

-- Аныһын да әйтер инем инде...

-- Эш хаҡын да числоһын үткәрмәй көрәп ала. Һинең менән минең кеүек, колхоз кассаһына килем кергәнен көтөп, папирос урынына махра тартып йөрөмәй. Шулай бит, Зәйни дуҫ, ниңә өндәшмәйһең?

-- Уның галстугы ни ҙә "беломор"ы ни – үҙе сәбәкә булғас, -- тине Зәйни. – Майлап ташлаһаң да эт яламаҫ...

-- Дөрөҫ. Барыһынан да элек, түрә йорафы МТФ Ғәйнулла эләктерер ул аҫыл ҡошто. Минеңсә, хатта атаһының да башын әйләндергән инде.

-- Хаҡ һүҙ был. Келәтсе менән бергәләшеп шешәне бушатканда: "Кейәү булырҙай кеше – башҡа бер кем дә түгел, ә түрәбеҙ Ғәйнулла!" – тигәнен үҙ ауыҙынан үҙ ҡолағым менән ишеттем!

Шым ҡалдылар, һүҙ ҡуйышҡандай, Зәйни яғына берҙәм күҙ һирпенеләр. Береһе әйтә һалды:

-- Ә Зәйни? Беҙҙең Зәйни дуҫ нимә уйлай икән һуң? Юл ҡуйырмы таҙғараларға?

-- Үҙе әйтһен!

-- Был йәһәттән был уланға күшеккән тауыҡтай шомторайыу йоҡ түгел – бөркөт булырға тейеш ул! – тине кәбәнселәргә айран килтергән, аты менән булашып, бер ситтәрәк ҡолаҡ һалып торған Мохтар бабай. Зәйни үҙен ысынлап та күшеккән тауыҡ һымаҡ итеп күҙе алдына баҫтырҙы ла, тештәрен шыҡырлатып, ырғып торҙо, ос һәнәгенә йәбеште; йән көсөнә ҡаҙап күтәргән һалам өйөмдәре бөркөт һымаҡ сорғолоп күккә осто...

Зәйни инде оялыуҙы, тартыныуҙы ситкә ташларға, бер туҡтауһыҙ һөжүм итеп алға барыу юлы менән Нәғимә күңелен үҙ яғына ауҙарырға тәүәккәлләнде. Эштән ҡайтҡандарында теште ныҡ ҡыҫып, бының өсөн нимәләр эшләргә кәрәклеген уйланы. Урам башына кергәс, улар ферма эргәһенән үттеләр. Унда эш ҡайнай ине: ырҙын табағылай түңәрәкләтеп сей балсыҡ йәйелгән, МТФ Ғәйнулла етәкселегендәге һауынсылар шуға һәнәкләп һалам һала ла күнәкләп һыу һибә, ә түңәрәк өҫтөндә һыбайлы Мифтахитдин, балаҡтары тубыҡтарынаса төрөлгән яланаяҡтары менән ат бөйөрөн типкесләп, баҫым тапатып йөрөй. Егеттәрҙең килеүен абайлағас ул, күрмәмешкә һалышып, "һөш-һөш-һөш!" тип атын уғата ныҡ ҡабаландырҙы.

-- Һәй эшем эйәләре, ниңә шулай бик һуңлап ҡайтып бараһығыҙ, Ҡояш күптән байыған бит! – тигән шаян ауаз салынды ҡолаҡҡа. Быны бейек баҫҡыс башында һыулыҡ буйын һылап торған Нәғимә ҡыҫҡыра ине. Егеттәр, туҡталып, үҙенең яланғас аяҡтарына аңшайғас, арҡалыҡ буйы бейеклектә көлөп торған сағыу Ҡояшҡа төртөп күрһәтте, әммә тегеләрҙең иҫе китмәне:

-- Колхоз эше бүре түгел – урманға ҡасмаҫ. Ташлағыҙ, ҡыҙҙар, иртәгә һабан туйы бит -- әҙерләнергә кәрәк!

-- Нисек инде алай “ташлағыҙ”?! Баҫылған балсыҡтымы? – Төтәп килеп сыҡты ферма мөдире. – Ҡайтаһығыҙ икән – барығыҙ, олағығыҙ, аҡсағыҙ баҡыр, юлығыҙ таҡыр. Бында килеп, эшләгән халыҡты дезорганизовайт итеп йөрөмәгеҙ!

-- Балсыҡты ни аны, өйөп һалам ҡаплайһың да ҡуяһың... – тигәйне лә Мохтар бабай, ауыҙынан өҙөп алды тегеһе:

-- Как это так – ҡаплайһың да ҡуяһың? Байрам үткәнсе көтөп ятырмы һине? Һаҡалың билеңә еткән, шул көйөнсә уңды-һулды белмәйһең!

-- Ниңә юҡҡа сапсынаһың, осаңды ҡорт саҡтымы? Беҙгә тимәгәйе, төндөң-төнө буйына ек өнһөҙ мәхлүктәреңде. Әйҙәгеҙ, егеттәр, ысҡындыҡ! – тине беренә.

-- Туҡтағыҙ, ҡайҙа ҡасаһығыҙ? Һылаусыларға балсыҡ ташышып бирергә китегеҙ, исмаһам. Бына Мифтахитдин ағайҙан ғына үрнәк алығыҙ, күҙе тонған игелекһеҙҙәр! Һуғымлыҡҡа хәләл аҡсаһын бирергә һатып алған супственный алашаһына менеп, колхоз эшенә өлөш керетеп йөрөй! – тип сәрелдәне күлдәк итәктәрен ыштан бөрмәһенә ҡыҫтырып, тубыҡтарынаса лайға батҡан Миңниса.

-- Көт аларҙан игелек! Юҡты бушҡа бушатып, ҡайырып икмәк ашарға ғына беләләр! – Әләктереп һелкене МТФ Ғәйнулла. Ә Нәғимә, баҫҡысынан Зәйнигә ҡайырылып ҡараған килеш, өнһөҙ-тынһыҙ тик ҡатып тора ине.

-- Әйҙәгеҙсәле, егеттәр, аҙыраҡ ҡул ялғайыҡ! – тине Зәйни.

-- Һәнәк услап ҡысыуың ҡанмаһа, бар – ялға, ҡәҙереңде белерме икән? Был түрәнән ҡыш көнө яғыр утыныңа ла ат һорап ала алмаҫһың!

Иптәштәрҙән яңғыҙы айырылып ҡалыу бик үк уңайлы түгел ине. Шулай ҙа Зәйни, бая үҙенә биргән һүҙен хәтерләп, һәнәген ситәнгә һөйәне, еңдәрен һыҙғанды. Нәғимә шат йылмайҙы; һиҙмәһендәр, тигәндәй, тиҙерәк арҡаһын бирергә, һыулы балсығын бураға шапылдатып һуға-һуға, шәп-шәп ныларға тотондо.

-- Зәйни туғаным, һин миңә балсыҡ әпиреп тор! – тигәйне Миңниса, ҡараҡайы юғарынан ялт итеп әйләнеп ҡараны:

-- Һиңә Мифтахитдин үҙе булашыр, әүкәйем – ана, атынан төштө бит. Ә был һалдат миңә тырышып хеҙмәт итһен, буйы оҙон – бында бейеккә алып-бирергә торорға бик йәтеш бит.

-- Ah-ah, Мифтахитдиндең һиңә генә буйы етмәҫ, тиһеңме әллә?

Сикәһе ҡысылып тыңлап торған Мифтахитдин балсыҡ алырға йүгерҙе. Ләкин Зәйни алдараҡ ҡуҙғалып, Нәғимә күнәгенә килтереп һалғайны инде – маңлайға-маңлай төкәштеләр. Һемәйгән Мифтахитдин, ҡырт-боролоп, усындағы балсыҡ йомарлағын Миңнисаға илтергә мәжбүр булды. Нәғимә менән Зәйни, оттоҡ бит быны, тигәндәй, икеһе бер юлы күҙ ҡарашып алдылар. Ошо ҡыҫҡа мәлдең уты бөтә тәнен көйҙөрөп үткән Зәйни, йыш-йыш һулап, яңы балсыҡ йомарлағы килтерергә атлыҡты.

Ҡояш тышау буйы түбәнләгәйне, ә Нәғимә баҫҡысында һануз мәш килә ине. Икеһенең дә күңел күтәренке, был күтәренкелек уларҙың хәрәкәтендә, тын алышында һиҙелә. Нәғимә Зәйни менән дә, иптәш ҡыҙҙары менән дә әленән-әле ҡыҙыҡ һүҙ әйтешеп ҡысҡырып көлә, ярышып балсыҡ ташыған ике һантыйҙы үртәй, күкрәк төбөнән генә көйләп тә ебәрә. Зәйнигә уның балсыҡ һылаған йүгерек ҡулдарын, бөгөлөп-һығылмалы билен, балсыҡ сәсрәп матур миңдәй

биҙәлгән ҡуңыр йөҙөн күреү шундайын да рәхәт, шундай яғымлы ине. Күңел төпкөлөндә ошо гүзәл затҡа ҡарата йылы туғанлыҡ хистәре уяна, уны ғүмерлеккә-ғүмерлеккә үҙ эргәңдә генә күрәһе килә. Мифтахитдин дә уяу: әйләнгән һайын юл яҙлыҡтырып Нәғимә эргәһендә урала, әле баҫҡысын шыуҙырып, әле күнәген алып биреп уңғанлығын күрһәтергә тырыша. Тик Зәйни ҙә сос икән: алдан уҡ тегенең ынтылышын тойомлап, алданыраҡ өлгөрә, уны яурын башы менән тыныс ҡына этәрергә *лә* тартынмай. Мифтахитдин ҡаштарын емерә, тешен ҡыҫа, *ләкин* сер бирмәй. Көндәшенең бер осҡондан ҡоро һаламдай дөрләп-ҡабынырға әҙерлеген күрә *лә*, әлбиттә, ауылдағы көн дә галстук тағып йөрөгән берҙән-бер "культурнай" зат булараҡ, *ил* алдында ыҙғышырға баҙымай. Баҫҡыс төбөнә баҫа *ла*, күҙ ҡарашын бер – Нәғимәгә, бер – Зәйнигә күсереп, тилегән күргән ата ҡаҙҙай тынысһыҙланып, торған ерендә тапанырға тотона, папирос артынан папирос ҡабыҙа. Күренеүенсә, Нәғимәнең ҡолағына ғына бер мөһим һүҙ әйтергә самалай, *ләкин* йәшел кейемле шаһит быға мөмкинлек бирмәй. Тапанып тора-тора *ла*, папиросын атып-бәреп, китергә мәжбүр була.

-- Һәй маладис Мифтахитдин ағайыбыҙ: үҙенең *ял* көнөн беҙгә ҡорбан итте! – тип йүпәләйҙәр ҡыҙҙар.

-- Әммә тыңлаусан да инде: ат эсерә төшкән еренән генә барҙыҡ та алдыҡ бит! – тиҙәр.

-- Аны бында магниттай кем тартты икән: бөтәбеҙ ҙәме, *әллә* аранан берәүебеҙ генәме?

-- Бөтәгеҙ ҙә, ҡыҙҙар, бөтәгеҙ ҙә! – тигән була баҙаған Мифтахитдин, үҙе йәһәт Нәғимәгә күҙ һала.

-- Ай-һай, бөтәбеҙ ҙә түгелдер...

Бер Нәғимә генә өндәшмәй бында...

Баҫҡан балсыҡты һылап бөтөрә яҙҙылар, ҡалғанын суҡайтып өйҙөләр ҙә, һалам менән көпләп, өҫтөнә һыу һиптеләр – бер-нисә тәүлек буйына ҡатмаясаҡ.

-- Етте, ҡайтайыҡ, ҡыҙҙар! – тине Миңниса. – Түрәбеҙ ҙә боҫланып осто, инде беҙгә сират!

Тимер киҫмәктәге һыуҙан шаптор-шоптор йыуынырға, күнәктәрен сайҡарға керештеләр. Нәғимә *лә*, һыламын бөтөрөп, күнәкте ергә төшөрҙө. Үрҙә оҙаҡ баҫып тороуҙан талған аяҡтарына *ял* алдырырға ниәтләнеп, баҫҡыҫҡа ултырҙы. Тубыҡтарын төҙәйтеп кирелгәйне, матур йөҙөн һыҙланыулы йыйырсыҡтар үҙгәртте:

-- Уй-уй, Зәйникәйем, харап булдым, аяғымды көҙән йыйыра! – Күҙҙәрен ғазаплы йомоп, ике ҡуллап аратаға йәбеште, төшөргә итеп маташты. Зәйни, уҡталып, аны ҡулынан тотто:

-- Йығылып ҡуйма, Нәғимә, ипләп!

-- Уй-уй, йығылам инде, Зәйникәйем,йығылам!

Егет ҡыҙҙы беләктәренә һалып күтәреп алды, ә тегеһе уның муйынынан һығып ҡосаҡланы. Көтөлмәгән хәлдән Зәйни ҡаушаны, ни итергә *лә* белмәне. Йөрәге дөп-дөп ҡағып, ҡәҙерле йөгө менән ҡуша һалам өйөмөнә йығылды.

-- Ни эшләйһең, тиле! – тине Нәғимә. Өндәшмәй, ҡыҙҙың балсыҡ ҡатҡан аяҡ бармаҡтарын, тығыҙ балтырҙарын ыуаланы

-- Уй-уй!

-- Түҙ, хәҙер бөтә, хәҙер бөтә.

Нәғимә еүеш-һалҡын ҡулы менән уны битенән һыйпаны:

-- Тиле, тубығыма тиклем балсыҡ һыланың... – Һис ни булмағандай ырғып торҙо ла эргәһендә калуштары көтөп ятҡан, әхирәттәре сыр-сыу ҡубынып йыуынған һыулы киҫмәк яғына йүгерҙе.

Зәйни, Нәғимә әйткән ябай һүҙҙәрҙең серле моңонан иҫереп, урынынан ҡуҙғалмайынса ултырҙы. Ҡулдары һаман тығыҙ балтырҙарҙы тоя, ә битендә һөйөп һыйпау йылыһы яғылып тора. Эргәһенән Мифтахитдин, дөпөлдәтеп, ат саптырып уҙғас ҡына аңына килде, тороп, ҡыҙар яғына атланы. Анда инде ҡайтырға ҡуҙғалалар.

-- Иллә шәп эшләнек бөгөн!

-- Балсыҡ әпкилеп биреүсе ике ағай күтәрҙе бит.

-- Әүкәйгенәм, әйт әле, бая Мифтахитдин ағай ҡолағыңа нимә тип шыбырланы? – Быны Нәғимәнән Миңниса һораны. Зәйни, һағайып, аҙымдарын аҡрынайтты. Нәғимәһе бераҙ өндәшмәй торҙо. Төрлөһө төрлө яҡтан сыулашып ҡыҫтаҡлағас, тишергә мәжбүр булды:

-- Мәскәү ГУМ-ынан лафкыға посылка килгән. Эсе тулы ебәк тә атлас, тағы әллә нимәләр, ти. Мифтахитдин шуны илгә күрһәтмәй, иң шәп һауынсыларға, тип тотоп тора икән.

-- Әйгенәм, кемдәргә тәтер икән?

-- Иң шәп, тигәне билдәле – Нәғимә була инде ул!

-- Юкты һөйләмәгеҙ, ҡыҙҙар! Шәп булмаған әҙәм юҡ арабыҙҙа! – тине Нәғимә.

-- Әммә-ләкин беҙҙе түгел – һине маяҡ итеп күтәрәләр бит!

-- Һи һантый, ниңә сәбәләнәһең? – тине уға Миңниса. – Бер кемдән дә кәм түгелһең, йөҙ тиһәң – йөҙ, күҙ тиһәң – күҙ бар үҙеңдә. МТФ Ғәйнуллаға тик бер генә йылмайып күҙ ҡыҫһаң, маяҡ булғаныңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың.

-- Нәғимә түгел шул мин.

-- Нимә Нәғимә, нимә Нәғимә?! – тип ябырылды бынығы. – Минең кеүек гөбөрләтеп һәр һыйырҙан фәләнсә литр һауып бирегеҙ әле!

-- Бирәһең шул, төркөмөңә ун ете һыйыр беркетеп, һауылған һөтөн ун ике баш һыйырҙан тип яҙып күҙ буяғас...

-- Был колхоздың таяғы ла, маяғы ла ялған шул...

-- Һабан туйына бынамын тигән итеп кейенеп сығырһың әле! Лафкысы үҙеңдеке бит!

-- Оятһыҙҙар! – тине Нәғимә. – Маяҡсыһын да, лафкысыһын да үҙегеҙгә алығыҙ! Нисә һыйырҙан һауһам да, һауыным ялған түгел! Һеҙҙең кеүек шишмә һыуы ҡушмайым!

Зәйни өсөн көтөлмәгән мәғлүмәттәр ине был – һыйыр башынан һөт һауынын арттырыу ҙа, юғарынан бик тырышып йәйелдерелгән “маяҡ” хәрәкәте лә ҡомдан ишелгән арҡан икәнлеген аңланы.

Хәтәр сәкәшә башлаусыларҙы Миңниса араланы:

-- Ай-буй, ни булды һеҙгә, ҡыҙҙар?! Кемебеҙҙе генә маяҡ ҡылһалар ҙа, яҡтыһы уртаҡ бит аның – бөтәбеҙҙе, бөтә ферманы яҡтырта. Бөгөн маяҡ һин, иртәгә мин! Ә Мифтахитдиндең яғаһынан алырға хәлебеҙҙән килә. Электр яҡтыһы менән лафкы асам, тине. Аймылыш булып ҡалмайыҡ, әхирәттәр!

Ауылға электр яҡтыһы колхоздың дизель моторлы электр станцияһынан иртәнге сәғәт биштән – етегәсә, ә кисен алтынан ун икегәсә бирелә, шуға күрә әйтелгән ваҡыт һәр кемгә билдәле ине.

Ҡыҙҙар төркөмө таралғас, Миңниса менән ыңғайлаған Нәғимәне туҡтатты Зәйни:

-- Һылыуҡай, һиндә йомош бар ине!

-- Йә, йомошла.

-- Аҙыраҡ ҡалып тор әле.

-- Булмай, яңғыҙын ҡалдырмайым! – тине Миңниса.

-- Саҡ ҡына...

Нәғимә икеләнде:

-- Бараһы ер бар ине бит әле... ашығыс... Ярай, бер минутка ғына.

-- Ни һүҙең был, Нәғимә? Һуңлайбыҙ бит! – Миңниса, ашыҡтырып, әүкәйен ҡулынан һөйрәне. – Хуш булып тор, Зәйни ағай, йомошоңдо иртәгә йомошларһың!

-- Эйе, иртәгә... – Нәғимә, егеткә ғәфү үтенеүсән ҡарап, иптәшенә эйәрҙе...

Шашып һикергән йөрәге сәмле үкенестән әрнеп, Зәйни киске йылға буйына төштө. Тубыҡҡаса кисеп барып, ҡатҡан батҡаҡтарын йыуып ағыҙғас, ярға сығып, ҡабаланмай ғына сисенде лә һыуға ырғыны. Тын ярҙарҙың буйында һыу шапылдатып оҙаҡ сумды һәм йөҙҙө. Ҡыҙышҡан тәнгә һалҡын сафлыҡ йүгереп, тынысланғандай булды. Әммә күктә ҡырын ятып йөҙгән кәкере Ай Мифтахитдинде хәтерләтә -- уға төртөп күрһәтеп көлә төҫлө ине...

Һабан туйы иртән Ҡояш менән ҡуша тороп килде. Таңғы урамдарҙы тәүҙә бригадир юрғаһының тояҡтары дөп-дөп һиҫкәндертеп үтте. Ул да булмай, ҡаҙан, көрәк, һауыт-һаба тейәгән арбалар ауыл осондағы әрәмәлеккә ҡарай шығырлап уҙҙы. Унда МТФ Ғәйнулла бер төркөм ағай-эне менән бысаҡ ҡайрай, ит сабырға балта, түңгәк яйлаштыра. Ергә соҡоп ултыртылған унлап ҡаҙан тәңгәленән бер юлы төтөн баҫаналары күтәрелде. Ең һыҙғанып керешкән бешкәксе инәйҙәр һәм еңгәйҙәр йүгереп йөрөп аш-һыу яраштырҙылар. Күпереп үҫкән йәшел үләнгә ҙур торпошалар түшәп, киндер ашъяулыҡтар йәйеп, балауыҙҙай һары, яҫы ҡунатаҡталарҙа ап-аҡ ондан баҫылған ҡамырҙы уҡлау менән тызҡылдатып, ҡағыҙҙай йоҡа итеп йәйҙеләр; күңелдә ниндәйҙер рәхәт тойғолар уятып, етеҙ хәрәкәттәр менән, мырт-мырт иттереп, туҡмас киҫтеләр. Ҡайһылыр ҡаҙандарға һалырға ҡайын япрағылай еңел һалма ҡырҡылды. Яҙ башынан уҡ махсус ашатып һимертелгән тыу һыйырҙы ике-өс ир-ат етәкләп килтереп, ҡаҙандарҙан ун аҙым түбәндәрәк йылға буйында арҡанлап бөкләнеләр. Күп тә үтмәй, йәш килендәр ағын йылға һыуында, сыр-сыу ҡубып, эс-ҡарын йыуырға ла кереште. Бригадир һәм МТФ мөдире итте келәтсе Ғәйзулла (Нәғимәнең атаһы) арҡылы үлсәтеп алып, һәр береһе үҙ ҡаҙандарына бүлеп бирҙеләр.

Шул арала әрәмәлек ҡосағына байрамса фырт кейенгән йәш-елкенсәк халҡы ағыла башланы. Гармун моңдары күңелдәрҙе ҡытыҡлап һауала тирбәлде, ҡыуаныслы ҡысҡырып көлөү, шаян таҡмаҡ әйтеүҙәр елкендерҙе йәштәрҙе. Һуҙып-һуҙып оҙон көйгә һыҙҙырыуҙар ҙа йышайҙы. Тантаналы йыйылыш булаһы урында ҡыҙыл япмалы өҫтәл өҫтөндәге патефон донъя шаңғыртып моңланды. Теремек йәндәр төркөм-төркөм ошо тәңгәлгә тартылдылар, ҡыҙыл япмалы алдындағы йәшел үләнгә уҡмашып ултырҙылар. Патефондың йылтыр боғаҙы артына ҡайырылып, еңелсә тынлыҡ урынлашты, йыйылыш башланды. Парторг Муллаян ил һәм донъя хәлдәре тураһында сәйәси доклад һөйләгәс, шаулатып ҡул сабыуҙарҙан һуң, бригадирға һүҙ бирелеп, ошо ифрат яуаплы сәйәси мәлдәге колхоз хәлдәре, һуғыш уты ҡабыҙыусы донъя капиталының ҡарыуына коммунистик яуап итеп яҙғы сәсеүҙең уңышлы осланыуы, унда кемдәрҙең социалистик ярышта еңеп сығыуы, кемдәрҙең улар ҡатарында шулай уҡ һынатмауы тәфсилләп иғлан ҡылынды, әйтелгән алдынғыларға оҙон исемлек буйынса бүләктәр тапшырылды. Зәйни ҙә был бүләкләнеүселәр араһында үҙенең дә исемен ишетәсәгенә иманы камил ине, сөнки берәүҙән дә ҡалышмай тырышып эшләгәйне. Өҫтәүенә, аллы-гөллө сәскәгә күмелгән ялбыр өсҡат төбөндә һауынсылар төркөмөндә ҡараҡайҙың да тыңлап тороуын күрә, бригадир ауыҙы исемлектән нәүбәттәге фамилияны атарға асылғаны һайын, йөрәге тулҡынып-тулҡынып тибә ине. Исемлек уҡылып бөтөп, йомғаҡлау һүҙҙәре әйтелгәс, өмөтөнөң аҡланмауынан тәрән үкенеү рәнйетте. Нәғимә лә башын күңелһеҙ һәлендергәндәй күренде, быныһы бигерәк тә аяныс ине...

Парторг Муллаян МТФ мөдире Ғәйнуллаға һүҙ биреп, ул фермала социалистик ярыш арҡаһында һыйыр башына һауындың ҡырҡа артыуы, һауынсылар араһынан бөтә районға күренерлек яҡты маяҡ төҫмөрләнеүе тураһында кинәнеп тирә башлағас, талағы ташып барған Зәйни түҙмәне:

-- Ялған! Һөткә шишмә һыуы ҡушып арттыраһығыҙ, ун ете һауын һыйырын ҡағыҙға ун ике һыйыр тип яҙып, маяҡ яһайһығыҙ! – тип енләнеп ҡысҡырҙы.

-- Дөрөҫ, ниңә дәүләтте, партияны алдарға?! – тигән яңғыҙ ғына ауаз салынды ла юғалды. Уның ҡарауы парторг мәктәп ҡыңғырауын шалтыратып тынлыҡ урынлаштырҙы. Зәйнигә уҫал төбәлеп:

-- Кем ул ялған маяҡ, исем-фамилияһын әйт! – тине.

-- Аны үҙегеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ, сөнки серек маяҡтарҙы үҙегеҙ яһайһығыҙ!

-- Ауыҙын ябығыҙ контрҙың, үҙ башына шашына! – Ғәйнулла өҫтәлгә йоҙроғо менән һуҡты. – Бөйөк Совет илен яҡты коммунизм таңына күкрәтеп алып барыусы бөйөк партиябыҙға һәм социалистик ауыл хужалығының намыҫлы хеҙмәткәрҙәренә ҡара яла яға!

Оторо һөйләп яман ымһынғаны өсөн үҙенән-үҙе оялып, алдын-артын абайламай, ситкә ташланды Зәйни. Телен ниңә тыйманы, Нәғимә күҙенә нисек күренер хәҙер?! Туғай араһында бер арауыҡ яңғыҙ үҙе ҡыҙырынып ғәрен аҙыраҡ баҫҡас, кире әйләнеп ҡайтты. Аҡланда бәйге башланған, бер урында көрәшселәр алыша. Күрше ауылдың дәү генә бер ағай ҡыҙыл башлы һөлгөнө бөкләп тотҡан да, башы осонда болғай-болғай, көс һынашырға саҡыра. Ауылдың бер-нисә егетен тәкмәстереп өлгөргән, шул сәбәпле башҡалары баҙнат итмәй торалар. Ағайҙың

майҙан бирмәйем тип күкрәк киреп шапырынып йөрөүе Зәйниҙең ҡыҙған ҡанын уғата ҡайнатыбыраҡ ебәрҙе. Фуражкаһын атып-бәреп, түңәрәк уртаһына сыҡты, шунда уҡ алыш һөлгөһө тотторҙолар. Ағай кеше мыҡты кәүҙәле булһа ла, Зәйни ҙә ҡаты тарамыш – һалдат хеҙмәтендә физик сыныҡыуҙар үткәйне. Батыр менән батыр, бүгәйҙәрҙәй һөҙә ҡарашып, бер-береһенә ҡаршы килделәр, елп иттереп билдән дә алыштылар. Һырт бирмәҫкә тырышып, икеһе тиң алға бөгөлдө, күпер барлыҡҡа килде. Шул рәүешле улар, ыхылдашып, бер-береһен йыға алмай бер сула аҙапланды. Ниһайәт, Зәйни, уңайын тура килтереп, башв аша ағайҙы гөрһөлдәтте – арҡаһына ятҡырҙы. “Ах әттәгенәһе, хәйләңде һиҙмәй ҡалдым бит!” – тигән булды теге, ләкин үҙе, еңелгәнен танып, еңеүсегә ҡул бирҙе. Өҙлөкһөҙ һөрәнләп-гөжләп торған тамашасылар араһынан Нәғимәнең күҙҙәрен эҙләп тапты Зәйни. Ҡыҙ, бүтәндәрҙән айырмалы рәүештә, тыныс ҡына баҫып тора, әммә көллө ҡиәфәте тәрән тулҡынланыу, ғорурланыу менән тулышҡан...

Алыш батыры һөлгөһөнә маңлай тирен һөртөп, түңәрәкте бер-ике әйләнгәс, көтмәгәндә, майҙанға Мифтахитдин сыҡты. Зәйни аптырап уҡ ҡалды: ҡарыш буйлы лафкысыны иҫенә лә килтермәгәйне. Теге көндә һыйыр һыулауында уны нисек итеп самбо алымы менән тәкмәстереүен хәтерләп, ҡыҙғанып та ҡуйҙы бахырҙы. Һөлгөләр йәнә лә һелтәнделәр, һырт бирмәҫ арҡаларҙан түбәнерәк һығып алдылар. Зәйни тәбәзде бер һелтәүҙә күтәреп бәрергә көсәнде һәм... шаҡмаҡ кеүек дүрткел һынды бер иле лә айыра алманы ерҙән. Асышынан шөйлә хәүефләнеп, һөлгөнө уғата ҡыҫҡартты, шул арала Мифтахитдин уны күтәреп бәрә яҙҙы, ярай, Зәйни боттарын тарбайтып өлгөрҙө. Эйе, башҡорт көрәше самбо түгел икән шул – уның үҙ алымдары, ҡанундары... Икеһе лә бер-береһенең көс-һәләтен самалағас, ысынтылап керештеләр; дуғалай бөгөлгән арҡаларҙа ҡалын һөлгөләр шытырлап, яйлана алмай йөҙәне. Беләк, балтыр һум иттәре баҡыр туптай ҡабарҙы, биттәрҙән шыбыр тир аҡты. Зәйни ике тапҡыр оһолланып тегене ҡалҡытһа ла, уңышҡа ирешмәне: тамрлы бүкәндәй ултыраҡлы кәүҙә ишараты тарбаҡ аяҡтары менән ергә йәпләште ҡабат. Түңәрәкте әллә нисә тапҡыр әйләнеп сыҡтылар, йәшел үләндәрҙе изеп бөттөләр. Мифтахитдингә тағылып килмеш дүрт-биш иҫерек бәндә, майҙан ситендә боғаҙ йыртып, Зәйнигә аяҡ салырға маташтылар. Дөйөм һөрән ике яҡты ла сәмләндереп гөжләне. Көрәшселәр икеһе тиң ышылдап, саҡ тын ала башланылар. Зәйни билен һыҡҡан һөлгө ҡыҫымы шаҡтай кәмене, һөлгө эйәһе бер-нисә тапҡыр ҡыңғырайып сайҡалды. Был саҡта күпселек Зәйни алымын хуплаһа, иҫерек ҡор лафкысыны тотанаҡлап дәғүәләне. Зәйни көндәшен арытыу өсөн өҙлөкһөҙ һөжүмгә күсте, бер туҡтауһыҙ эҙәрлекләне. Ул үҙенең бына-бына еңәсәгенә ышанды. Ләкин хәл иткес минутта иҫеректәр майҙанға бәреп керҙе, көрәшселәрҙе бер-береһенән айырып, бәйге ҡартына бәйләнделәр:

-- Эшкә ашмаған судья, ниңә һатыусыны эшенә ебәрмәйенсә тотаһың?

-- Ике яҡ та бер тигеҙ икәне асыҡ!

-- Лафкыһын асһын, тамаҡтар сатнаны бит! Халыҡты тилмертәләр, байрам көндә лә тамаҡ сылатырға бирмәйҙәр!

-- Эйе, ике яҡ та тиң – ебәрегеҙ һатыусыны! – Йоҙроҡ болғап һүгенделәр. Бәгзе берәүҙәр быға ҡаршы нәфрәтләнеп ҡараһа ла, сығырынан сыҡҡандарҙы тыйыусы табылманы. Тәҡәте ҡороған бәйге ҡарты ҡул һелтәргә мәжбүр булды:

-- Ярар инде, уҙамандар, алыш тамам. Икегеҙ ҙә еңеүсе, икегеҙ ҙә арҙаҡлы. Бына һеҙҙең икегеҙгә лә берҙәй бәйге бүләге. Һатыусыны тиҙерәк ебәрәйек, лафкыһы көтә, тиҙәр бит... – Мифтахитдин, әшнәләренә ышыҡланып, ҡәнәғәтһеҙ геүләүселәр күҙенән ысҡынды йәһәт. Зәйни иһә йәне көйөп, һил урында йыуынырға йылға буйына төштө. Осраған бере туҡтатып уны ҡотлай, маҡтай, ҡулын ҡыҫа. Әммә йылы һүҙҙәр дәртләндермәне – ҡулына ингән еңеүен ысҡындырҙы бит! Башҡаһы булһа – бер хәл, әммә Мифтахитдин менән бер тиң һаналыу уға сикһеҙ йән асыуы килтерҙе. Нәғимә алдында оят!

Шау-шоу тамамланды, күңел асып арыған халыҡ аш ашарға ултырҙы. Һәр бригада йәки ферма кешеләре айырым-айырым табын булып эркелештеләр. Ситтән килгән ҡунаҡтар өсөн махсус табын ҡоролдо. Шул тирәлә өҫтәл ҡуйып "лафкы" асҡан Мифтахитдин, тирләп-бешеп, һатып алыусыларының күнәктәренә биш йөҙ литрлы күпкәк ағас мискәнән ҡандай көрәнһыу-ҡыҙыл арзанлы шарап ағыҙҙы. Резин шылангынан һауыттарға һурып төшөрә-төшөрә, уның үҙенең дә күҙе тонған, итләс йөҙө шул эсемлек төҫөнә кереп елһенгәйне. Зәйни ҙә, аш алдынан күңел күтәреү өсөн, иптәштәре менән бергә шарап ҡойҙорторға килде. Сиратта ул бригадиры менән һүҙгә кереште:

-- Ниңә беҙҙең сменаға бүләк тәтемәне ағай?

-- Тимәк, не заслужили, ҡустым.

-- Нисек инде? Беҙ бит көндәлек нормаларҙы арттырып үтәнек.

Эргәһендәге сменалаш иптәштәре лә: "Дөрөҫ әйтә, ниңә беҙгә премия шомотор? Беҙ башҡаларҙан кәмме ни?" – тип шаулаштылар.

-- Ә Тирәкле һыртында бер төн күкәй баҫып ултырыуығыҙҙы оноттоғоҙмо?

-- Анда бит беҙ орлоҡһоҙ ултырҙыҡ, орлоҡ ташыған машинаны башҡа яҡҡа ебәргәнһең. Бында һин ғәйепле!

Бригадирҙың күҙҙәре аҡайҙы:

-- Минме? Ауырыуҙы райбольницаға илттергәнем өсөнмө? Уважительный присина!

-- Ә беҙ ниңә ғәйепле булып ҡалдыҡ?

-- Аныһын инде, ҡустылар, юғарынан белешегеҙ. Алар беҙҙән һорап тормай, кемдең кемлеген өҫтән үҙҙәре билдәләй.

-- Ә һин нимәңде ҡараның? – тип ҡыҙҙы Зәйни. – Ысын хәлде идараға бригадир аңлатып бирергә тейеш түгелме ни? Колхозсыларың өсөн янып-көймәйһең һин – шул ғына!

Баяғы иҫерек әргендектәрҙең береһе, теле шөйлә көрмәлеп, Зәйни ҡаршыһына баҫты, "ниңә бригадир ағайға тел тейҙерәһең?!" тип, сәпәп ташларға маташты. Танауына төшөп килгән йоҙроҡто кире ҡағып ебәргәйне Зәйни, йоҙроҡ эйәһе артына салҡайып китте лә, һөрлөгөп, буш шешәләр тултырылған ҙур әрйәне ауҙарҙы. Шулар шалтор-шолтор иткән арала, ҡыҙарып бүртенгән Мифтахитдин Зәйниҙең яғаһынан алды:

-- Һин, әҙәм аҡтығы! Ниңә ҡулдарыңа ирек ҡуяһың?!

Әзерәйеп һаман өҫкә менеп килеүенә Зәйни түҙмәне, ҡаны ҡайнап, кирза итегенең көсөн һөжүмсенең үксәһенә төшөрҙө. Яңағы шалҡ итеп, ауған әрйәһе өҫтөнә тәкмәсте лафкысы. Шуның аҡырып һүгенеүенән биҙгән Зәйни сиратын ташлап китте...

Һабан туйы гөрләгән ошо әрәмәлек, йәшел өсмөйөшләнеп, текә ярлы Бәйге тауы йылға менән киҫешкән ерҙә ослайып ята. Тау үҙе бейек түгел, ләкин алыҫҡа һуҙылған, ә түбәһе өҫтәл кеүек тигеҙлек. Яҫы арҡала борон-боронда ат бәйгеләре уҙғарылған, тирә-яҡтың иң шәп юрғаларына данлы бирнәләр бирелгән. Алтмышынсы йылдар еткәс кенә, ҡылғанлы һырт йылғыр тояҡтарҙың саҡма сағыуҙарын онотҡан. Сөнки колхоздың өйөр-өйөр йылҡылары, “ит, һөт, йөн бирмәүҙә” юғарынан ғәйепләнеп, баш һандары йылдан-йыл кәметелгәс, ауыл халҡына утын-бесән ташырға ла етмәҫлек булып ҡалған. Һуғыш йылдарында шул ат көсө менән генә мең гектарҙар һөрөп-сәселгән ауылдарҙа хәҙер әҙәм ауырыһа больницаға оҙатырлыҡ ылау таба алмаҫһың. Ат булмағас, бер кешене илтергә лә утыҙ дүрт ат көслө трактор ҡыуыла...

Йәй көндәре Бәйге тауында йәш-елкенсәк уйын ҡора. Уларҙың шат тауыштары таң атҡансы шау-гөр килеп көр ағыла ауылға. Әсәйҙәр һәм атайҙар шул ауаздарҙы ишетеп, йоҡоларынан уяналар ҙа, үҙҙәренең йәшлектәрен хәтерләп, оҙон-оҙаҡ күҙ йома алмай яталар. Йоҡоһоҙ инәй һәм олатайҙар Бәйге тауының ат бышҡырған, ҡолонсаҡтар һауа ярып кешнәгән тауыштарҙан шаңғырап торған саҡтарын, үҙҙәренең шундағы бәйгеләрҙә алған затлы бүләктәрен һағынып иҫкә төшөрә. Ә тауҙағы гармун тартып туҙан туҙҙырған йәштәргә быларҙың береһе лә булмаған кеүек...

Бына бөгөн дә кис булып, ҡараңғылыҡ ауыл өҫтөнә йәйелгәс, һабан туйы бөткән шаулы әрәмәлек кешеләрҙән бушанды аҡрынлап. Өйҙәрҙә гөлтләп электр уты ҡабынды. Ауыл урамдарында бер сулаға аяҡ тауыштары баҫылды. Был мәлдә һәр кем байрамдан арып ҡайтып, ғаилә түңәрәгендә күңелле хистәре менән уртаҡлаша; берәүҙәр кискелеккә ашай, берәүҙәр йоҡларға әҙерләнә...

Әммә тағы урамдар хәрәкәткә килде, тош-тош кешеләр күренде. Кемдәрҙер, гармунда һыҙҙырып уйнай-уйнай, Бәйге тауына тартылды.

Зәйни, тауға менеп барған йәштәр төркөмөндә Нәғимәне күрмәгәс, ҡапыл бойоғоп, ауылға кире төштө. Һәр саҡ бындай уйындарҙың үҙәгендә йөрөгән ҡыҙҙың юҡлығы хәүефләндерҙе: бер-берәй хәл булмағанмы?.. Кискә табан ул Нәғимәне күрмәне, иптәштәре менән йылғала балыҡ һөҙөп йөрөнө. Ә шулай ҙа уйында осратырға өмөтләнеп, дәртле уйҙар кисерҙе. Гармун тауыштары ишетелеү менән, үгәй әсәһенең һуҡраныуына ла иғтибар итмәҫтән, табын ташлап йүгергәйне. Ниңә сыҡмай ҡалды икән Нәғимә?

Ошо минуттарҙа егет ҡараҡайҙың үҙе өсөн сикһеҙ ҡиммәт икәнлеген төшөндө. Уны бөгөн күрмәй ҡалыу – ярты ғүмереңде юғалтыу кеүек. Йөрәк төбөндә ҡуҙғалған татлы ҡайғыһынан ут йотоп, ике яғын бейек тегәнәк үләне баҫҡан ауыл урамдары буйлап Нәғимәләр өйөнә ыңғайланы. Был юҫығы кешеләр алдында оят һымаҡ тойолһа ла, аяҡтары тукталмайынса һөйрәне. Нәғимәләр өйө тәңгәленән, боролмайынса, тегеләй ҙә, былай ҙа уҙғыланы. Селтәр пәрҙә ҡоролған

тәҙрәләр телен йотҡандай өнһөҙ ине. Ахыры булманы, боролоп, бесәй аҙымдары менән яҡынланы. Йөрәге дөп-дөп тибеп, тәҙрә яңағына ике ҡуллап йәбеште. Селтәр араһынан электр нурына ҡойонған мейес алды, ҙур ялғашта ҡамыр баҫып торған Гөлзифа апай (Нәғимәнең әсәһе) күренде. Ғәйзулла ағай үҙе күҙгә салынмай – ҡараңғы бүлмәлә йоҡлай, йәки ҡайҙалыр киткәндер. Нәғимә, ике ҡулы менән яңаҡтарына таянып, өҫтәл ҡырыйында ҡатып ултыра. Алдында – асып һалған китап, әммә күҙҙәре ҡайҙалыр алыҫтағы билдәһеҙ нөктәгә төбәлгән. Йөҙө уйсан, хәрәкәтһеҙ...

Нәғимәне ошо хәлендә күргәс, өйгә бәреп инерҙәй йөрәкһене Зәйни. Ҡыҙҙы ҡуш ҡуллап тәҙрәнән тартып алғыһы, ҡосағында бәүелтеп иркәләгеһе килде. Күңел тигәнең шулай боларып торғанда, өйҙөң икенсе яғындағы тәҙрәнең ҡапҡасы ҡаты дыңғырланы – Зәйни һымаҡ уҡ уға йәбешкән кемдеңдер ҡулы ысҡынып, йығылып төштө, буғай...

-- Ә? Кем ул? – тине Гөлзифа апай. Нәғимә, тертләп, ҡалҡынып ҡараны ла, йәһәт тороп, дыңғырлаған тәҙрә янына килде, үрелеп тышҡа баҡты. Тап шул мәлдә тышта һиллек боҙолған тәңгәлдә иҫерек Ғәйзулла ағайҙың ярһып һүгенеүе ишетелде, нигеҙ буйынан кемдер, дөпөлдәп, урам яҡҡа ҡасты. Шундай көтөлмәгәндә килеп сыҡты ки, хатта Зәйни ҙә, үҙ-үҙен белештермәй, йүгерек эҙенән ташланды, ә Ғәйзулла ағай, һуйыл болғап, арттарынан ҡыуа төштө; Зәйни иһә алдан доноп барған тәбәз кәүҙәле бәндәнең Мифтахитдин икәнлеген таныны: ул да, баҡһаң, тәҙрәнән ҡыҙ күҙләргә барған, икән... Зәйни ҡолаҡтарында ҡан шауланы, быға өҫтәлеп, Нәғимәнең мыҫҡыллы көлөүе яңғыраны. Зәйни шаңҡып ҡырт-боролдо, Ғәйзулла ағай менән йөҙгә-йөҙ бәрелеште...

-- Һәй, әпсәгеҙҙе эт ялағырҙары, нигеҙ ташын ишелдереп бөткәндәре етмәгән, инде килеп тәҙрә ҡапҡастарын ҡайырырға керештегеҙме?! – тип һелтәнгәйне һуғырға, Зәйни һуйылын тотоп аҫҡа баҫыуҙан ҡаушап ҡалды. – Ат ҡойроғона сат-йәбешкән тегәнәктәй әрһеҙ булып сыҡтығыҙ...Оят түгелме һиңә, һалдат киҫәге, төнө менән тәҙрә шымартып йөрөү?

-- Шымартыусың ана бара тегәнәк араһында!

-- Ә һин ниңә эттәй аҙып йөрөйһөң?

-- Нәғимәне уйынға алырға килдем.

-- Әһә, шулаймы ни әле? Кемең ул һинең?

-- Комсомолка иптәшем, ярҙаҡаным.

-- Үҙе яратамы һуң?

-- Ярата.

-- “Серек маяҡ” тип атап, йыйылышта йөҙөн йырҙкан эттеме? Этте нисек яратһын?

-- Ярата.

-- Ә мин бына яратмайым! Мин яратмағас, ҡыҙым да яратмаясаҡ. Ҡыҙ һөйөргә иртәрәк әле һиңә. Хеҙмәт итеп ҡайтһаң да, танауыңдың аҫты кибеп етмәгән. Тәүҙә өҫ-башыңды көплә, былай шапшаҡ йөрөмә. Ғәйнулла һымаҡ матур итеп йорт торғоҙ, алкаш атайың менән үгәй әсәйеңдән айырыл – бына шунан һуң килерһең ҡыҙ күҙләргә, ләкин беҙгә түгел! Пош-шол, вон! – Һуйылы

менән һелтәнеп, Зәйниҙе уҫал ҡарашы менән ҡыуҙы. Нәғимә баҡҡан тәҙрә сылтылдап ябылды...

Төнө буйына урам ҡыҙырып ауыр уйҙарға талып алйыған Зәйни, үгәй әсәһенең һуҡраныуын ишетмәҫ өсөн, аҙбар башына менеп, бесәнгә күмелеп ятты. Таң һарыһынан тороп, һалҡын ҡоҙоҡ һыуы менән ҡойондо. Сәйгә ултырғас, өндәште:

-- Атай, бында ҡала алмайым.

-- Нимә, табан аҫтың янамы? – Башын сайҡап көрһөндө.

-- Беләһеңдер, күрше районда геология разведкаһы эшләй, шунда эшселәр кәрәк тигән иғлан уҡыным гәзиттән. Барып, эшләп ҡарайым әле, бәлки, өйҙө һипләтерлек аҡса табып ҡайтырмын. Былай йәшәргә ярамай.

-- Нимә, түрәләргә ҡарап, кәрәгеңә алдыңмы? – тине үгәй әсәһе.

-- Алдым шул.

-- Әйттем бит, бөтәһе менән килешеп йәшәргә кәрәк, тип!

-- Ярар, әсәһе, юҡты тизыма! – Мотиғулла сынаяғын ҡапланы. Ашарыңды ашамаҫлыҡ ҡылаһың, һинән дә биҙгәндер ул.

-- Юҡ, әсәйҙән мин биҙмәнем, -- тине Зәйни. – Ауыл һауаһы килешмәй башланы миңә.

-- Ҡасан юлланаһың һуң?

-- Бөгөндән. Киске поезға эләгеп китергә кәрәк.

-- Алайһа, хәйерле юл, балаҡай. Мә, ваҡ-төйәк кәрәк-яраҡҡа. – Кеҫәһенән аҡса сығарып һондо. – Шулай ҙа беҙҙе онотма.

-- Онотмам.

Көнөндә үк урынына барып етеп, иртәгәһенә үк эшкә лә тотонғайны, йәй буйына, ең һыҙғанып, егәрле эшләп йөрөгәйне... ҡая башынан осоп аяғын һындырҙы...

Ҡала больницаһында ике ай буйы гипста ятып, ваҡытлыса кәкре таяҡҡа таянып сыҡты Зәйни. Тырышлығын, уңғанлығын күреп өлгөргәйнеләр – ҡалала Геологразведка идаралығының хужалыҡ бүлегенә мөдир итеп эшкә ҡалдырҙылар, йыйнаҡ ҡына айырым бүлмә лә бирҙеләр. Әгәр өйләнә ҡалһаң, айырым фатир ҙа алырһың, тип өмөтләндерҙеләр. Ундағы тормошо шөйлә яйға һалынғас, етәкселәрҙән һорап, ауылға ҡайтып килергә уҡталды егет.

Үҙҙәренә яҡын тимер юл станцияһынан уҙғынсы йөк машинаһына әәгеп китеп, ауыл осондағы күпер ауыҙында төшөп ҡалғайны, һыуалғыста, көтмәгәндә, Миңнисаны осратты.

-- Һә, туйға тып итеп ҡалдыңмы, зимагор? – тине шаталаҡ йән.

-- Ниндәй туй?

-- Бәй-бәй, шуны ла белмәйһеңме? Ҡараҡайың Ғәйнуллаға сыға бит.

Егет ҡойолоп төштө:

-- Ҡасан?!

-- Маладис, бөгөн какрас никах мәжлесенең уртаһына баҫтың! Әле генә ҡыҙлы йортҡа мулла-суллалары йыйылып ята. Бер аҙнанан туйҙары гөрләйәсәк.

-- Никах... никах... – Ҡапыл башы зыр-әйләнде Зәйниҙең. – Нишләргә?!.

-- Нишләргә, тип ни... күрһәт егетлегеңде! Әллә егет түгелһеңме, әйгенәм?

-- Ярар, күп ләпелдәмә! – тине егет, йәне көйөп.

-- Ah-ah, егет кеше һөйгән ҡыҙын һис нимә әйтмәй ташлап китәме ни? Атаһы көсләп бирә Нәғимә әүкәйемде... һине генә һөйһә лә... Ике аҙналыҡ ял бирҙеләр, һыйырҙарын һауырға бүлешеп алдыҡ. Үҙең ташлап киткәс ни... өмөтө өҙөлдө шул.

-- Мин ташлап китмәнем! – Үҙен белештермәй ҡысҡырҙы Зәйни. – Бына, алдыңда баҫып торамын!

-- Ah, шулаймы ни? Күрмәй ҙә торам икән! Алайһа, һуң түгел әле, бар, ҡуйынына ҡара йылан инмәҫе борон тартып ал Нәғимәңде!

Келәтсе Ғәйзулла өйөнә ҡарт-ҡоро йыйылып бөткәне инде, буй һикелә аяҡ бөкләп тәсбих тартмыш “таш мәсеткә ағас мулла” ишараты, изге йоланы үтәүгә тамам әҙерләнеп, бына-бына кейәү-баланың килеп етеүен көтәләр; түр башындағы айбарлы шаршау артында Нәғимә һулҡылдай... Ыҫпай кейәү Ғәйнулла урынына көтмәгәндә кәкре башлы таяҡ таянған, аяҡтарын юл саңы баҫҡан Зәйниҙең пәйҙә булыуы барыһын шаңҡытты.

-- Аб-ба, кемде күрәм?! – Аптыраны хужабикә Гөлзифа. – Атаһы, “аны инвалид арбаһына ултыртҡандар” тигәйнең дәһә?

-- Ул хәбәрҙе ҡаланан Ғәйнулла кейәүең алып ҡайтты.

-- Йәрхәмикалла, кейәү-бала ошо үҙе буламы? – тине мулла. – Бисмилла әйтеп башлайыҡ, йәмәғәт. Ғәйзулла, ырғып тороп, мосафирға ташланды:

-- Выжт! Бында кем саҡырҙы һине?

-- Выжтылдамай тор, ағай. Саҡырылмайынса килдем, Нәғимәне алырға!

-- Мына мынауыны алырға теләмәйһеңме? -- Өй хужаһы бала башындай йоҙроғон терәне егеттең моронона.

-- Өҙөлөп һөйгәнемде, үҙем менән бер ойошмала торған комсомолканы шаршау артында томалап, һөймәгәненә бирергә, көсләп никах уҡытырға юл ҡуймам!

-- Һөймәгәне – һин үҙең, яҡшы сағыңда сығып кит! Һөймәне лә һәм һөймәй ҙә ул һине!

-- Үҙе әйтһен!

-- Эйе шул, атаһы. Беткә үсегеп туныңды утҡа яҡма, ауыҙына һуҡма яңғыҙ ҡыҙыбыҙҙың!

-- Эше бөткән инде хәҙер, килешелгән!

-- Атай! – Нәғимә шаршау артынан атлығып сыҡты ла, барыһының һушын һүреп, Зәйниҙең муйынына аҫылынды. – Бер нәмә лә бөтмәгән, бөтмәгән!

-- Йәнкәйем, йән киҫәгем, һағынып-һағынып алырға ҡайттым һине, бараһыңмы? – тип һулышын саҡ алып әйтте егет, һалҡын маңлайынан үбеп.

-- Барам, барам, тегәнәктәй йәбешәм! – Күҙ йәштәрен ҡойоп илап ебәрҙе, ыңғайына әсәһе һулҡылданы. Ҡаушауынан ирендәре ҡалтыраған атай кеше ултырғыҫҡа әүшәрелде. Шул саҡ тышта эт өрөп, ихатала ыҫпай егет Ғәйнулланың килгәне күренгәйне, йәһәт тороп ишек келәһен элде, шым ҡалдылар.

-- Асығыҙ, был – мин, кейәү-бала! – тине тыштағы, түҙемһеҙ шыҡылдатып.

-- һе-һе, һинме ни? Кейәү-бала былай һуңлап йөрөмәй – ул инде күптән бында! – тине хужа. -- Ә икенсе кейәү-бала кәрәкмәй, икенсе ҡыҙыбыҙ юҡ беҙҙең.

-- Юҡ шул, юҡ! Йә Алла, кисер беҙҙе! Артыңа ҡарама көлө! – Хужаһының әйткәнен дөрөҫләп сәрелдәне хужабикә. Тороп-тороп уҫал һүгенгән Ғәйнулла, табандары менән ерҙе дөпөлдәтеп, ихатанан олаҡты.

-- Йә, алайһа никах уҡыйыҡ та... – тине тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға ашҡынған мулла.

-- Юҡ! Беҙ туп-тура ауыл советына – ЗАГС бюроһына барабыҙ!

-- Эйе, ЗАГС бюроһына! – Элеп алды Нәғимә. Ҡосаҡлашып ҡушарлашҡан килеш сығып та киттеләр...

Зәйниҙең машина йөрөтүсе яҡын дуҫы шул көндә үк икеһен тимер юл станцияһына сығарып ҡуйҙы, киске поезға ултыртып ебәрҙе. Юлдарын киҫеүсе булманы.

Йәштәребеҙ ошолай олаға ауылдан...

Һунарсы ауылы, 1964.

КИПАРИСТАР СӘСКӘ АТҠАН САҠТА

1

Фәхерниса йөрәге һыҙлап уянды.

Үрелеп ҡул сәғәтен алды: теүәл алты ине.

Бына аҙна-ун көн инде, ул тап ошо ваҡытта һыҙланып уяна.

Тәҙрәнән һары ҡала таңы – электр яҡтыһы һарҡылған таң түгелә. Ҡала халҡы теле менән әйткәндә, “лимонный” итеп буялған бүлмә эсе лә был нурҙарҙан һап-һары – лимон төҫлө. Ауылдан күсенеп килгәндәренә теүәл биш йыл тула инде, Фәхернисаның иртәнге күкшелт-алһыу шаңдаҡлы күкте күрә алғаны юҡ. Бында таңдар электр уттары һүнеп бөткәс кенә ағарып ата.

Тышта тағы ла ҡар яуған булһа кәрәк: дыңғыр-даңғыр көрәк тауыштары килә. Бында ҡарҙы, ергә лә тейҙертмәй, тиерлек, төшкән берен көрәп алып торалар. Көрәктәре ана нисек тыҡырлай! Ҡар көрәүселәрҙең береһе Фәхернисаларҙың тәҙрә төбөндә генә: хатта ышылдап тын алышы ла ишетелә кеүек. Был бәндә, моғайын, бер туҡтауһыҙ хәрәкәттән кинәнеп, сөгөлдөр төҫлө ҡыҙара-бүртеп эшләй. Маңлайына бөрсөкләнеп кенә тир ҙә сыҡҡандыр. Елбер-елбер ҡар тәңкәләре дебет шәле йөнтәктәренә эләгеп уралғандыр. Фәхерниса ҡар көрәүсенең һулыш алышынан, көрәк тауышынан һәр хәрәкәтен күҙ алдына килтерә. Ул әле ниңәлер туҡтаны.

-- Ҡулы ҡороғоро! – тип ишетелде уның, ҡатын кешенең, рәнйеүле мыңғырлауы. Артабанырағ дыңғырлаған көрәк тә тынды.

-- Әү, нимә тиһең? – тине икенсе ҡатын.

-- Бынауы ҡулы ҡороғороноң, тим, эсендә йәне бармы икән? Икмәк һыныҡын аяҡ аҫтына һалып тапаған! – Ҡаһ-ҡоһ йүткеренеп тамаҡ ҡырҙы.

-- Тир сығарып эшләгән бәндә түгелдер. Икмәк ҡәҙерен белер ине, юғиһә.

Ҡатындар шул хаҡта тағы ла бер-ике фекер тирҙеләр ҙә тындылар: йәнә ыш-ыш һулыш алыу, туң асфальтте тыҡыр-тыҡыр ҡырсыуҙары ишетелде. Бер быуа тынмай эшләгәс, түҙмәне, биргеһе йәнә өндәште:

-- Көрәгеңдең алымы бик шәп күренә, әллә яңымы?

-- Әү?

-- Көрәгең яңымы әллә, тим?

-- Эйе, тегеһе һынды бит, -- тине серҙәше.

-- Алмаштырып бирҙеләрме?

-- Эйе.

-- Ә минекен күрмәйҙәр, ҡороғорҙары. Ҡырҡ еренән ярсылып, ямалып бөттө инде. Күтәреп барһам, үҙең ҡағып-һуҡҡылап ал, ти ҙә ебәрә.

Тегеһе өндәшмәне.

-- Беҙҙең нәсәлникте әйтәм, кеше айыра ул... күҙеңдең төҫөнә ҡарап.

-- Был ни тигән һүҙең тағы, апай? – тине тегеһе, ҡылтайып. – Мин дә былтырҙан бирелә тәүгә яңыртып торам.

-- Ә минең икенсе йыл китте инде, -- тине бирегеһе. – Бына күрәһең бит: ус аяһындай ҡалды. Күҙен дә йоммай, ҡороғоро: “Көрәктең яҫыһында, тарында ни

йомош, ҡар өсөн ул барыбер. Яҫы булһа, ауыр алаһың да һирәк ырғытаһың, тар булһа, еңел һоҫаһың да йыш ташлайһың – икеһендә лә бер үк сама көс сыға, ти. Физика законы, ти. Ал, аңлатып ҡара уға...

-- Хужа кеше бит, беләлер.

-- Бер генә көн ошонда үҙенең бисәһен сығарып ҡарарға ине, белер ине шунан!

Бындай саҡта тел осонан сәсрәмәле шул бер йомғаҡлау һүҙенән һуң, күңеле ҡанып, эшенә тотондо тағы. Фәхерниса уның рәйеп түбән эйелгән йөҙөн, ергә төбәлгән уйсан ҡарашын күргәндәй булды. Ҡыҙҙың ниңәлер кинәт кенә күңеле тулып, ошо минутта үҙенең һис ни шәйләмәй ап-аҡ япмалы түшәктә ятыуы өсөн нисектер уңайһыҙ, ауыр булып китте. Ҡала халҡы йоҡонан тормаҫы борон – таң тишегенән эшләүсе был апайҙарҙың бөтәһе лә күбеһенсә ҡырҡ-илле йәштәр тирәһендәге тол ҡатындар – элекке һалдат һөйөклөләре ине...

Тәҙрә төбөндә көрәк тыҡырлауы менән аралаш яңы моң: яй ғына, күкрәк төбөнән генә сыңрап ҡойолған һағышлы йыр һүреп инде, күңелде ул шуныңса уҡ илке-һалҡы килтереп, алыҫтарға, ғүмер төпкөлдәренә уралтып алып китте. Әллә ҡайҙан – уйламаған ерҙән – моңһоу көйҙөң һүҙҙәренә әүерелеп, ҡыҙға бөтөнләй башҡа яҡтан, башҡа кеше ауыҙынан ишетелгән ниндәйҙер бер сәйер шиғыр юлы килеп ылыҡты; шул, ләззәт ҡатыш әсенесле тылсымы менән арбап, күңелдән һис һүрелмәй, йөрәк тибешеләй һулҡылдап тик тора:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...

Психология ғилми-тикшеренеү институтына башлап эшкә килгәнендә Кипарис ҡушаматлы дворник ҡарттың ауыҙынан ишетте ҡыҙ ошо йөрәк һыҙлатҡыс ауазлы шиғри һулҡылдауҙы...

Беҙҙең һалҡын яҡтарҙа, Уралда, үҫмәй торған, һәм ғөмүмән сәскә атыуы ла шикле булған көньяҡ диңгеҙ буйҙарының наҙлы ағасы кипарис һәм үтә сәйер исемле ҡартлас Кипарис...

Фәхерниса, йөрәген тотоп, урынынан ҡуҙғалды. Ошо йәшенә тиклем ул үҙ йөрәгенең барлығын да тойоп белгәне юҡ ине, һуңғы көндәрҙә белдерҙе... Үҙ уйынан һиҫкәнеп, ҡыҙ йәһәт ҡулын алды, ут тоҡандырып тормай, ишекте һаҡ ҡына асып залға сыҡты.

-- Торҙоң дамы ни инде, бәпесем? Иртә бит әле, йоҡлаһаң ни була инде? – тип өндәште диванда ятҡан әсәһе. Былтыр көтмәгәндә генә атайҙы илтеп ерләгәс, әсә кеше, бына-бына ҡайҙалыр китергә йыйынған, бында ваҡытлыса ғына торған әҙәмдәй, ошонда ишек төбөндәге диванда ғына урын һала, ә мөйөштәге көмөш буталлы ҙур карауат, урын-ере ҡабартыулы килеш, кемделер көтә, көтә...

-- Иртә түгел инде, әсәй, -- тине Фәхерниса, залдан нисек тә тиҙерәк һыпырылырға итеп. Әсәһенең маҙаһыҙланып ҡалҡына башлауын күреп, туҡталды:

-- Һин ят, ят, әсәй, сәйҙе үҙем ҡуйырмын.

-- Ишетеп ятам: көн дә теп-теүәл сәғәт алтыла уянаһың, -- тине әсәһе. – Ни булды һиңә, бәпесем?

Фәхерниса, тыныслandырырға иткәндәй, ғәмһеҙ тауыш менән көлөмһөрәне:

-- Аптырайым мин һиңә, әсәй. Әллә, тимен, баш осоңа сәғәт аҫып ҡуйғандар: көн дә теп-теүәл алтыла икәнен ҡайҙан беләһең?

-- Анау өйҙөң тәҙрәләре сәғәтеңдән дә былайыраҡ ул, бәпесем. Күрәһеңме бынау тос ҡыҙғылт нурҙы? – Стенаны сыбарлаған тимгелдәргә төртөп күрһәтте. – Абажурҙары ҡыҙылдыр... Ул кеше, теүәл бер йыл инде, алтыла тороп китә. Ә бына был һарғылт нур – сәғәт дүрттә тора торғандыҡы. Төнгө икенән үк уянаҡайы ла бар әле уларҙың, тик киткәндә утын һүндереп китә, хәҙер күренмәй...

Фәхерниса, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, әсәһен ҡыҙғанып, ирекһеҙҙән, ул күрһәткән тарафҡа боролоп ҡараны. Шул саҡ йөрәге һурылып төшкәндәй булды: ҡабырый яҡ тәҙрә төбөндәге гөл сүлмәгендә кисә генә балҡып асылған сәскә, ул үҙе эштән ҡайтҡас, бөтә доньяһын онотоп, әсәһе менән ҡушарлашып ҡыуанышып ҡарап торған берҙән-бер аҡ сәскә -- Фәхерниса йәндәй күреп һөйгән аҡ сәскә -- күмерләнгән ҡағыҙ төҫлө һөрөмө ҡойолоп ултыра, яман янғын ҡосағында көйөп сыҡҡандай, ҡап-ҡара төҫтә ине. Фәхерниса аңғармаҫтан йәнә йөрәген тотоп ыңҡтап ҡуйҙы, утҡа осҡан күбәләктәй һонолоп, тәҙрә шаршауын асты. Һәм шул саҡ ул, албырғанып, сәскәне ҡабат ап-аҡ хәлендә күрҙе, хатта бүртек таж һыртында төнәп сыҡмыш көмөш һыу тамсыһында үҙенең муйылдай ҡара-йылтыр ике төртөк күҙ ҡараһын да осратты, буғай... Ҡыҙ, болоҡһоп, тәҙрә яныndағы аяҡлы көҙгө алдына ултырҙы. Баҡтиһән, тәҙрә шаршауы ҡаплаған да шуның артынан гөлдөң шәүләһе ҡарайып төшкән икән...

Әсә ләр тороп ултырғайны инде, ҡыҙы яғына төбәлеп, уның сәйер ҡылыҡтарын аңларға тырышып баш вата ине. Фәхерниса, йөрәкһеп барып, тоҡандырғыҫҡа баҫты, бүлмә эсен гөлт итеп нур бөркәне. Әсә менән ҡыҙ, өндәшмәй, аллы-артлы кухняға йүнәлделәр.

Фәхерниса сәй эсеп өйҙән сыҡҡанда, ҡар көрәүсе ҡатындар юҡ ине инде. Ситкә ырғытылған ҡар өйөмөндә көрәктәре генә терпе һыртылай тырпайып тора. Моғайын, бөйөрҙәрен сәйҙә йөҙҙөрөргә кереп киткәндәр.

Быndай ваҡытта атаһы бахыр ултырып тынмаҫ ине... Фәхерниса уның ерҙе һиңкетеп баҫҡан аяҡ тауыштарын ишеткәндәй булды, артына әйләнеп ҡарағыһы килде. Ул барҙа был көрәктәр ҡарға сумып тормаҫ ине. Ҡуараһы саҡ ҡына бушанымы, дворник ҡатындарҙың ҡулынан алыр, ҡар бураны туҙҙырып, ишек алдарын таҡырлап ташлар ине. Ошо мәлдә йорт буйынса форточкалар шартлап асыла, күрше-күләндең ҡәнәғәтһеҙләнеп һытылған йөҙө күренә:

-- Ул һинең эшме ни? Әргендектәрҙе яман өйрәтеп йөрөйһөң?

Атаһының иҫе китмәй:

-- Эш кешеһе кемдер эшләгәндән яман өйрәнмәй ул, ә кеше эшләгәнде тәҙрәнән ҡарап ултырған бәндә генә яман өйрәнә! – тип ауыҙҙарын яптырта ла ҡуя торғайны. Ошо иҫенә төшөп, Фәхерниса йылмайҙы, ҡары көрәлгән тротуар буйлап атланы.

Аяҡ аҫты тап-таҡыр, буйҙан-буйға ыуылдырыҡ кеүек эре ҡыҙғылт ҡом да һибелгән. Кешеләрҙең йоҡонан тороп тышҡа сығыуына бында көн дә шул бер

күнегелгән күренеш: бөтәһе ялт итеп ята, әйтерһең, бәкәлдәргә етерлек ҡарҙар ҙа яумай, ә йәйгеһен күҙҙе әсеттереп ҡом бурандары ла иҫмәй, кешеләре лә аяҡ асҡына тәмәке төпсөгө ташлап китмәй. Хатта кисә кис эштән ҡайтҡанда йөрөр юлдарын сүпләп үткән иң әрпешйәндәр ҙә бөгөн таҡыр, таҙа асфальттан һис иҫтәре китмәй генә юғары ҡарап уҙалар...

Шаҡтай иртә ине әле, эш башланырға сәғәт ярым самаһы ҡалғайны. Таң тишегенән институтҡа барып инеп суҡайып ултырыу килешмәҫ тә төҫлө ине. Фәхерниса әсәһенең һүҙен тыңламай иртә ҡуҙғалғанына үкенеп тә ҡуйҙы. Трамвай көткән булып, туҡталышта байтаҡ ҡайҡайып торҙо: бөгөн ниңәлер саҡ ҡына ла яңғыҙ ҡалғыһы килмәй, күмәкселек янына тартыла күңел. Дөбөр-шатор трамвай килде, бер килкеләр тейлеп китте, урынына башҡалары эркелде, улары ла һәп булды. Туҡталышты чехолдарға төрөп музыка ҡоралдары тотҡан бер төркөм һырып алды. Ниндәйҙер завод клубының үҙэшмәкәр һәүәҫкәрҙәре икән, тимер юл вокзалына төшөргә көтәләр, буғай. Янып торған эшсе егеттәр. Һөйләшеүҙәренә ҡарағанда, улар шефлыҡ иткән ҡайһылыр колхозда дәүләткә йыллыҡ ит һатыу планын арттырып үтәгәндәр, шул айҡанлы бөгөн кис тантаналы йыйылыш була – концерт бирергә тейештәр. Вокзалға йөрөмәле трамвай әллә йоҡлап ҡалған инде, әллә бөгөн шулай һирәк үтә -- егеттәргә шаҡтай көтөргә тура килде. Тик һәммәһенең күңеле көр, әллә ни иҫтәре китмәгәндәй. Музыка ҡоралдарын күбәләй өйөп һалғандар ҙа, бер тәңгәлгә өйөрөлөшөп, ваҡыт уҙҙырыу өсөндөр, тел сарлап маташалар, әленән-әле Фәхерниса яғына күҙ аталар. Мәҙәк һайын гөр килеп көлөшәләр – тынлы оркестрҙан бер ҙә кәм түгел. Ике бөртөк үтә етди, үтә мөкиббән егет бар. Ҡара-ҡаршы сумаҙандарына ултырышып алғандар ҙа, алдарына нота ҡуйып, һоҡландыртҡыс ныҡышмалылыҡ менән торбаларынан йәшелле-күкле ауаз сығаралар – билдәле дәү көйҙө эйәрләп маташалар:

Широка страна моя родная...

Тик ул арғымаҡ харап баш бирмәҫ сапсан йәнле күренә: инде ҡороҡланым, йүгәнләнем, тигәндә генә, дүрт тояғын ҡарышлата ҡапыл артҡа сигенеп, сапсып, ҡороғон һөйрәлтеп төтәп сыға ла китә. Ҡороҡсоларҙың әмәлһеҙлеген күрһәтеп кешнәп көлгәндәй, берҙән-бер ялған-фальш ауаз ғына тирбәлеп ҡала һауала...

Бына тынғыһыҙ торба уҙамандары ла тындылар, бары менән байрам, тигәндәй, музыка ҡоралдарын ҡуйып, ҡыҙға борола биреберәк ултырҙылар, аҫтыртын ғына күҙләп, ентекләй башланылар. Уларҙан тыш та байтаҡ халыҡ төбәлгәйне был яҡҡа. Фәхерниса һөмһөҙ күҙ ҡараштарының, һәр саҡтағыса, туп-тура үҙенә йәбештерелгәнлектәрен: уның ҡырағай тарпан ялылай туҙғып-боларып, иңдәренән ағылып төшкән сөм-ҡара сәс шарлауығын, пальто аҫтынан йомороланған килбәттәрен ҡармалауҙарын тойҙо. Йәшерәһе юҡ: һәүетемсә генә урамдан уҙғанында ла, эш урынында яҙыу машинкаһы эргәһендә ултырғанында ла ир-ат затының ентекле ҡараштарын һиҙә, берсә әллә нисек ҡыйын булһа ла, был уға йәшерен кинәнес, рәхәтлек бирә ине. Тик был юлы әллә ниндәй ытырғаныу солғаны, эйәк остарынаса уттай янып, шәп-шәп атлап китте. Аяҡтары

ла сәңгей башлағайны инде, юл ыңғайындағы баҡса эсенән йөрөштөрөргә булды. Ҡандай сөм-ҡыҙыл емештәре тәлгәш-тәлгәш һәленешкән әүеш миләш төбөндәге эскәмйәлә ир менән ҡатын сөңкөлдәшеп әрепләшә:

-- Баш сатнай, Фая, баш! Ҡанә, бер ярты табып килтер, инде һинең сират! – тине, асыуланып, ҡалын ғырылдауыҡ тауышлы ир кеше.

-- Юҡ, был юлы һин тейеш! – тине ҡатын, һыуыҡ тейеп тоноҡланған тамаҡ төбө менән ыхылдап. Ҡапыл тындылар, ике яҡҡа ҡайырылышып ултырҙылар. Арзан буҫтау "бутый"лы аяҡтары эргәһендә -- эсеп бушатылған һары алма һүрәтле шешә, төкөрөп ташланған миләш орлоҡтары... Фәхернисаның уҙып китеүен өнһөҙ көтөп алып, йәнә бер-береһенә әйләнешеп ултырҙылар, ыҙғышты яңырттылар:

-- Фая, бөгөн һинең сират!

-- Юҡ, һинеке!

-- Бар, күп лыҡылдама!

-- Үҙең бар!

"Эй Аллам, ниндәй генә бәндәләр, яҙмыштар юҡ донъяла!.."

Башҡа саҡта әллә ни иҫ тә китмәҫ ине, әммә бөгөн Фәхернисаға хатта төймәләй сүп тә дөйәләй күренде. Өҫтәүенә, ошолар кеүек үк, ҡарлы тышта баяғы бер шиғыр юлын мөңгөрләй-мөңгөрләй шешә боғаҙынан ғорҡолдатып эскән Кипарис ҡартты күҙ алдынан кисерҙе...

Абайламаҫтан, оторо саған ботағына түбәһе төртөлдө лә, бер алап ҡар ишелеп төшөп, ҡысҡырып ебәрә яҙҙы; елкәһенә туллған ҡарҙы һоҫоп ыҙаланғанында саған артында хихылдашып көлдөләр. Бәй, кире әйләнеп килеп, әлеге ике иҫерекле эскәмйәгә юлыҡҡан... Әммә байғоштарҙың уға ҡарап ҡыҙыҡһыныуы һүрелде, арҡаларын көмөрәйттеләр.

-- Өшөйһөң бит... – тине ир, тегеһенең тубыҡтарын салғыйы менән ябырға итеп.

-- Мин өшөгәндән донъя бөлмәҫ, -- тине ҡатын.

-- Юҡ, өшөйһөң һин, Фая, -- тип ныҡыны ир. -- Әйҙә, киттек, һыуыҡ тейҙерәһең бит!

Тороп, өҫ-баштарын ҡағыштылар. Ҡатын ерҙәге буш шешәне алып сөмкәһенә сумырҙы. Тап йәштәрсә билдәренән ҡосошоп, ян-яҡтағы ботаҡтарҙы ҡулдары менән этәрә-этәрә, китеп барҙылар. "Былар ҙа бер-береһен аңлай, бер-береһенең ҡәҙерен белә бит!" тип, ни өсөндөр әсенеберәк уйланы Фәхерниса. Ошо минутта ниндәйҙер ҡола диңгеҙ уртаһында ҡыҙғаныс хәлдә сайҡалған ишкәкһеҙ һәм ишеүсеһеҙ ҡайыҡтай тойҙо үҙен.

2

Институттың ишек алды төн сыҡҡансы ғәҙәттәгесә таҡыр итеп көрәлгән, һеперелгән, табан тайғыс тәңгәлдәре ҡом менән нағышланған. Бурысын теүәлләп йәне тынған Кипарис ҡарт, ирнәүҙәре ҡырылып ҡайышланған ҡара ҡуян бүрек аҫтынан ялбыр-ҡуйы ҡаштарын, оҙон-һәленке мыйыҡтарын ҡатыҡ һөрткәндәй ағартып, ялтыратып ҡырған эйәген яҫы фанир көрәгенең ҡуш ҡуллап услаған һабы осона терәп, үҙенә генә билдәле хәтер һандығын, буғай, аҡтара. Өҫтөндә

ҡатҡан ҡыптыр тун, аяҡтарында автомашина баллонынан йәбештереп яһалған резин калуштар кейҙертеүле дәү “ҡаҙна быйма”. Тупаҫ брезент бейәләйҙәре тундың ике кеҫәһенән тырпайған. Ҡартлас бына ҡымшанды – ҡуйынынан йәлпәк килбәтле аҡ ҡорос шешә алды, бормаслы ҡапҡасын асып, бер-нисә уртлам ғорҡолдатып һемерҙе. Хәмер утының тәненә таралыуын ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып кисерҙе. Шул саҡ шәп-шәп атлап эшкә килеүсе ир-аттың бер килкеһе, тура юлынан яҙлығып, Кипарисҡа һуғылды, бормаслы шешә ауыҙынан йәһәт кенә бер йотом һемереп китте – кисә кистән ҡунаҡ булып баштары шаңҡығандыр...

Быҙауҙай дәү һары күн портфель тотоп яңғыҙы ғына йүгерә-атлай килгән, энәнән-ептән кейенгән ыҫпай егет күренде.

-- Ренард улым, туҡта әле! – тине ҡарт, һыңар ҡулын күтәргән килеш көтөп. Тегеһе әйләнеп ҡараны:

-- Я не твой “улым”, старый черт, знай себя! – тине лә, бер юлы бер-нисә баҫҡысты аша ырғып, ялтыр ишек артына инеп юғалды. Башын сайҡап тәрән тын алды ла ҡарт, шешә бормасын тағатып ғорҡолдатты. Ҡул һелтәп, бераҙ уйланып торғас, шиғри юлдарға һалынған шул бер таныш моңон үҙәге буйынан иңрәтте:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта... –

Күҙҙәренән бөрсөк-бөрсөк борсаҡтай йәш ҡойолдо, әллә ҡайҙа, йәненең төпкөлөндә, тауышһыҙ тартышып үкһеүҙән яурын баштары терт-терт һелкенде.

-- Кипарис ҡарт тамам алйыған! -- Өмөтһөҙ баш сайҡап уҙҙы береһе.

-- Эйе, шулай, буғай. Алкашланған ҡарт алаша һаташа. Үҙенең сәскә атыусы ниндәйҙер кипаристарын, ниндәйҙер юҡ “улын” иҫенә төшөрә... бахыр...

-- Әллә ысынлап та аспиранттың атаһымы икән ул?

-- Ҡайһы аспиранттың?

-- Бәй, әле генә ошонан тәпәйләгән Ренардтың һуң?

-- Кит бынан, ошо ҡыптыр тун алкашмы?!. Булмаҫ!

-- Бер өйҙә торалар, ти бит һуң?

-- Торһа ни, фатирсыһы ғына, ти, ул Кипарис ҡарт. Ренардҡа аҡса кәрәк бит: күрмәйһеңме ни, ҡама кеүек ялтырап, энәнән-ептән генә кейенеп йөрөй!

Был ваҡытта Фәхерниса, башын һәләндергән килеш, уйҙар моңонан һығылып, бина алдындағы кескәй баҡса аллеяһынан килә, күңеле төбөндә талғын ғына ағыла ятҡан сихри донъя ҡосағында тирбәлә: йомшаҡ йәш ҡарҙан ап-аҡ нәҙек шәл бөркәнеп һалҡынлыҡта талығыусы ағастар ҙа, баш осонда көбөлә бешелгән айрандағы йомарлаҡ күбекмайҙай ағарып йөҙгән тумалаҡ Ай ҙа, күҙ күреме аҡ юрған ябынып йоҡлап ятҡан мәңге серле, сихриәтле уйсан ер ҙә -- бөтәһе лә был мәлдә ҡабаланмаҫҡа, моңға сумырға өндәй һымаҡ. Эре күҙле ҡыҙыл ҡом һибелгән таҡыр юл Фәхернисаға бынан бер йыл элек кенә атлап ингән институт тупһаһының ҡыҙғылт гранит таштарын хәтерләтте. Эйе, бер йыл үтеп тә китте...

Атаһы ҡапыл донъя ҡуйғас, ауырыу әсәһен ҡыҙғанып, Фәхерниса, университеттың психология факультетында һәүетемсә генә уҡып йөрөгән еренән,

үҙе ғариза бирең, ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсте ләм ошо ғилем төйәгендә лаборантка булып урынлашты. Эше ләм әллә ни ҡаты түгел: ғалим-ғөләмәләрҙең һәм аспиранттарҙың ғилми хеҙмәттәрен машинкала баҫыу ҙа килгән-киткән хаттарҙың иҫәбен алып кенәгәгә теркәп барыу ине. Кешеләре ләм йәш студентҡа өйрәтергә-кәңәшләшергә бик һәүәҫ, атлығып ҡына торалар, алсаҡ йөҙ күрһәтәләр, сөнки бындағы хеҙмәткәрҙәр геләп генә ир-ат халҡы ла йәше ҡырҡтан уҙған етди ҡатын-ҡыҙ затынан булып, алсаҡ күңелле Фәхерниса араларында бер генә, шуға күрә бөтә ҡояш та уға ғына төшә ине. Ҡыҙҙың бүлмә ишеге оҙон коридорҙың иң башында – вахтер апай өҫтәленә яҡын уйылғанлыҡтан, эшкә килеүселәрҙең ҡоллөһө асыҡ ишектән үрелеп сәләм бирең үтәләр; ә йәшерәктәре, ниндәй ҙә булһа ҡыҙыҡ һүҙ табып, ҡыҙҙы шаяртып, уның ҡаршыһында нисек тә балҡып алырға, оҙағыраҡ тел сарларға тырыша; был йәһәттән бигерәк тә буйҙаҡ аспиранттар өлгөрлөк күрһәтә ине. Ҡайнап торған ошо ала-ҡола ғаләм араһынан уйсан бер егет үҙенең ғәжәп баҫалҡы тәбиғәте, Фәхернисаға сабыйҙарса һоҡланып алсаҡ ҡарашы менән айырыла ине. Йәмил тигән был эшсе егет, моғайын, Фәхернисанан саҡ ҡына кесерәк булып, ниндәйҙер заводтан электрик булып килгән, шунда уҡ үҙен институттың комсомол башлығы иткәндәр. Төпһөҙ йыһан кеүек ҡара күҙҙәрендә бөткөһөҙ тәрән мәғәнә, сер мөлдөрәп ятҡандай... Әммә барыһы араһынан тәү күргәндә үк Ренард Асылғужин тигән береһе, олпатланып ир ҡорона кереп барған аспирант, ҡыҙ күңеленә айырыуса мас килде. Оҙон һомғол буйлы, башҡорттарға хас булмаған һуҙынҡы аҡ йөҙлө, матур ҡырлас танаулы, һәр саҡ ҡара йөн костюм, ҡарҙай аҡ нейлон күлдәк кейеп, алтын ҡыҫтырмаслы ала-ҡола галстук тағып йөрөй торған күркәм егет ине был. Барлыюҡлы заманаға яраҡлашҡан тиңдәштәре араһында шул өҫ-башы менән үк ныҡ айырылғанлыҡтан, берәй түрә, йәки һатыусы балаһылыр был, шул тиклем дә затлы кейенмәҫ ине, тип тел сағалар ине артында; әммә яҡындары уның бер ҙә улай түгеллеген, әсәһенән ҡалған йорт-йыһазлы иркен өйөнә ошонда эшләгән дворник Кипарис ҡартты фатирға керетеп, өҫтәлмә табыш алыуын, оҫта ҡәләм тибрәтеүсе булараҡ, гәзиттәргә йыш яҙған мәҡәләләре ләм тос төшөм килтереүен хәбәр итәләр ине. Ҡулында даими күпкәк һары портфель булыр, аяғына кейгән һары туфлиҙары ла баҫҡаны һайын шығырлап сәләм бирең барыр. Түрә-ҡараға ярамһаҡлы татлы телле лә булғанлыҡтан, институтта уға дөйөм ихтирам, иркәләүгә яҡын йомшаҡ мөғәмәлә хөкөм һөрә. Ҡорҙаштары араһында ла күптәр ихтирам итеп, ул -- беренсе дәүмәлле сағыу йондоҙ, бына-бына фән офоғона ҡояш булып ҡалҡынырға өлгөрөп еткән ғалим, даһи, тиҙәр ине. Һәләтле һәр студенттан да йондоҙ һөйрәп сығарырға әҙер торған аҡ һаҡалы профессорҙар ғына түгел, хатта егеттең көндәштәре – аспиранттар ҙа бындай хәлгә күнеккәндәр, елкәләрендә үрләп барыусы даһи культен, өҫтөнлөгөн һүҙһеҙ танығандар ине. Ренард иһә ошоно яҡшы белеп, һыуҙағы балыҡтай йөҙә, һәр ҡайҙа ла бәйгеһе алдан йөрөй. Өйкөмләшеп ябай ғына һөйләшеп тороу булһынмы, әллә ғилми ултырышта фекер алышһындармы – йәштәр араһынан тос һүҙ уныҡы. Шуныһы ҡыҙыҡ һәм фәһемле: фекерҙәр ярышында үҙе хаҡ булмаған сүрәттә лә ул, ниндәйҙер хис-тойғоһо менән хатаһын йәһәт аңлап, теүәл йөҙ һикһән градуска ҡырт-боролоп, кемдер әйткән хаҡ һүҙҙе үҙ һүҙе яһап, ҡаш менән күҙ араһында

хаҡ һүҙленең елкәһенә хужаларса атланып өлгөрә ала һәм теге меҫкен, үҙе лә һиҙмәй, йылғыр һыбайҙы шөһрәт түбәһенә йөкмәп-елдереп мендерә...

Фәхернисаның иғтибарынан шул да яҙлығып ҡалманы: эргәһендә ир-ат затынан берәйһе һырныға башлаһа, ҡыҙ өс ауыҙ һүҙ ҡатырға ла өлгөрмәй, йылп итеп Ренард пәйҙә була ла уны "һалдыртып ала". Теге асығауыҙ артҡы планда, нурын юйған йондоҙҙай тоноҡланып, тамам күшегеп ҡала, йор һүҙленең тел төбө бүҫкәреүен көтөп, башы ҡатып тапанып тора-тора ла мәсхәрәле хәлдә табан тайҙыра – Ренард бында ла беренселекте өлөшөнә төшкән көмөшө һанай...

Ҡулъяҙмаһын оҙон ҡулында ялпылдатып машинкаға килтергәнендә лә бүтәндәрҙәй ялынып-ялбарып һорамай, күҙгә ҡарап инәлмәй, ә Фәхернисаны үҙ кешеләй иңендәге ҡабарынҡы сәс көлтәһе менән ҡуша ҡыҫып ҡосаҡлап ала ла, баҫылып ятҡан ҡағыҙҙарҙы валиктан һурып алып ташлап, үҙенекен тыға; "һылыуҡайым, тиҙерәк!" тип кенә бер өндәшә. Башҡаларҙың ҡулын иңенә ҡағылдыртыу түгел, ул хаҡта уй йөрөтөргә лә сәбәп ҡалдырмаған Фәхерниса был егеттең бәйһеҙ ҡылығын тәбиғи хәл һымаҡ итеп кисерә. Яҙылмаған ҡанун буйынса институтта ҡулъяҙмаларҙың баҫылыу тәртибе, сираты дәрәжәгә-һанға ҡарап йөрөмәһә лә, ең һыҙғанып тәүҙә Ренардтыҡына тотона ине. Ниңә йәшерергә: был егеттең егетлеге бик тә оҡшай ине уға.

Донъя тигәнең ҡыҙыҡ: кемдең дә булһа күҙе артында уның ваҡ-төйәк ғәйбәтен һатып, еңелсә генә тел сарлап ала торған эскерһеҙ ғәҙәт була бит. Фәхернисаға шундай бер мәлдә Ренард хаҡында иптәштәренең тел ҡаҡҡанын ишетергә тура килде. Өлгәр аспиранттың, кеше булараҡ, уны башҡаларҙан айырып торған төп сифаты хаҡында бара ине һүҙ. Бында ла үҙәгәйлек – үҙәгәйлек булып ҡалалыр инде: уның хаҡындағы фекерҙәр, һис тә йәпкә йөп килмәй, ҡапма-ҡаршыға бүленеп сәкәләшә.

-- Йырткыс ул, акула ул! – ти бер яҡ, шаярыпмы-ысынмы, аспиранттың йылғырлығы хаҡында. – Бөтәһен дә көтөргә була унан. Әгәр берәй мәлдә "яңылыш" ҡына муйының бөкләнеп, саҡ ҡына ҡан еҫең һиҙелһә, сабып килеп ҡабырғаңды умырып алмаҫ тимә!

-- Йырткыслыҡ түгел, ә күптәребеҙгә етешмәгән ***сослоҡ*** тип атала был! – Ренардты хөкөм ҡулына бирергә теләмәй икенселәр.

-- Ундай сослоҡ беҙгә хас түгел!

-- Ләкин беҙ быға мохтаж. Беҙҙең халыҡ ул үтә баҫалҡы, ябай: ауыҙындағы ҡалъяһын тартып алып китһәләр ҙә "эһ!" итмәҫ. Әшептән тыш улай булырға ярамай: ҡалъяны көтөп ятып түгел, ә йолҡоп алып ҡабыу заманы хәҙер!

-- Тимәк, йырткыстарса эш ҡылырға кәрәк, тиһегеҙ инде?

-- Юҡ, джентельмендәрсә.

-- Америка гангстерҙары кеүекме?

-- Америка түгел беҙ!

-- Һеҙҙең сослоҡ тап шуға тартмаймы һуң?

-- Юҡ, беҙҙең сослоҡ башҡаса.

-- Шулай ҙа ул сифат беҙгә битәбиғи.

-- Ә беҙ тәбиғи итербеҙ!

-- Кем теләр икән быны?

-- Майлы ҡалъянан телем – теләгәнгә ҡарап ҡына йөрөмәй.

-- Тимәк, шул сослоҡто беҙҙәргә көсләп таҡмаҡсыһығыҙ?

-- Ниңә көсләп? Юл ғына ҡуйығыҙ – үҙе ялғанып үрәсәк. Ҡырағай алмағаҫҡа ашлап-ялғаған груша ботағы кеүек.

-- Ялғауығыҙ ятбауыр – шайтан таяғы булып сыҡһа?

-- Ниңә башҡа халыҡтарҙа һис тә ятбауыр түгел?

Ҡарыулашыусылар, бармаҡтарын бөкләй-бөкләй, әлеге сослоҡ сифатын иш иткән донъяға билдәле халыҡтарҙың исемдәрен атап-һанап китәләр. Аҙаҡтан ошо һәләкәтле һорау килтереп сәпәлә:

-- Әллә улар ҡырағай -- беҙҙән түбәнерәк баҫҡыста тора тип беләһегеҙме? Мәҙәниәтһеҙ тимәксеһегеҙме?

-- Юҡ, тимәйбеҙ.

-- Бәй, шулайғас? Беҙҙең халыҡ уларҙан ни яғы менән ҡайтыш? Ниңә башҡорт тап шуларҙай сос булырға, өҙөп-йолҡоп алырға тейеш түгел? Башҡалар өсөн тәбиғи сифат ниңә беҙгә битәбиғи? Донъяла улар – күпселек, шуға күрә беҙҙәргә ла донъя кимәлендә фекер йөрөтөргә кәрәк!

Ошо урында ике яҡтың да фронт һыҙыҡтары юйылып, һөжүмселәр бер-береһенең сафтарына үтеп инеп, дөйөм буталыш китә. Берҙән-бер баҫалҡы тауыш ҡына, ҡая кеүек ҡалҡынып, ҙур ышаныс менән һығымта яһай:

-- Юҡ, егеттәр, ул донъяның кимәле бында урынһыҙ. Масштабҡа һыймаған дәүмәл бит ул халыҡ. Халыҡҡа битәбиғи сифат – кешелеккә ла һис тәбиғи түгел ул!

-- Дөрөҫ, халыҡ ул үҙе сифат! Сифаттарҙың сифаты! – тип ҡушыла янындағыһы. Фәхерниса был икәүҙең береһе – Рәхимйән, икенсеһе Йәмил икәнен белә, сәмләнеп, фекерҙең үҫешен көтә. Әммә бәхәссе ике яҡ был табышты, төптө иғтибар итмәй, аяҡ аҫтарына һалып тыныс ҡына тапап үтә; төп яуаптың, сәтләүек эсендәгеләй, шул йөмләгә йомолғанын баштарына килтереп ҡарамайҙар. Фәхернисаға үкенес тә, ауыр ҙа был: ниңә һаман бер балыҡ башын сәйнәргә? Донъя гармонияһына үгәй килмәҫтәй йәтеш итеп халҡыбыҙ үҙ еренә, үҙ күгенә, үҙ күңеленә хас иң ҡәҙерле сифаттарҙы һайлап-һаҡлап ҡалдырғанын, артабан үҫтергәнен, теге йә был сифат уға етешмәй тип, йәки артыҡ тип ғәйепләү – быуынһыҙға бысаҡ салыу икәнлеген, әйтерһең дә, белмәйҙәр...

Шулай ҙа был ваҡиға ла Фәхерниса ҡарашында Ренардтың күркәм абруйын ҡаҡшата алманы, киреһенсә, юғарыраҡ күтәрҙе генә. Телдәрҙе тибрәтерлек көскә эйә икән, тимәк, унда нимәлер бар, тимәк, ул – күҙ күнеккән ваҡ-сыбарлыҡтан өҫтөнөрәк, мөһәбәтерәк, тип уйланы ҡыҙ. Ысындан да: Ҡояш тиклем Ҡояштың нурҙары ла, тура баҡһаң, осло уҡтай ҡаҙалмаймы ни күҙҙәргә? Үҙенең ошо уйҙарында нығынып, Ренард һынын бөтәһенән өҫтөн ҡуйып, баяғы ҡарыулашҡан Рәхимйәндең һөйләмендә лә бәндә күҙенең Ҡояшҡа ҡарата ҡарыуы һымаҡ ваҡ бер ғиллә боҫоп ятмаймы икән, тип тә уйлай ине Фәхерниса...

3

Күрше Химия институтынан килеп йөрөгән өндәшмәҫ һәм оялсан егет Рәхимйән менән танышып китеүе сәйер ҙә, мәрәкә лә башланды. Үткән йәйҙең йәмле көндәре ине, көндәгесә бүлмәһендә машинкаһын йырлатып ултыра ине ул, яңыраҡ ҡына урынлашҡан сағы ине. Эшкә ағылыусы ағай-эне бирәһе сәләмдәрен биреп, комплименттарын тиреп, таралышып бөткйнеләр. Тәрән эшсән тынлыҡ баҫҡайны бинаны. Ошо һил мәлдә коридорҙа яңы бәндә пәйҙә булды. Килеүсе, бүлмә ишегенең ярым ҡыҫыҡ тороуынан шәйләп, буғай, яҡын юламайынса ғына, әкрен генә һуҙып өндәште:

-- Мөхлисә-ә-әү! Ренард бармы-ы-ы?

-- Мин Мөхлисә түгелә-ә-әү, -- тине Фәхерниса, тегенең үҙе шикелле һуҙып. – Ренард барә-ә-әү, үҙ бүлмәһендәлерә-ә-әү!

Ренардтыҡы һымаҡ уҡ һимеҙ күн портфель тоткан урта буйлы, яҫы яурынлы, һоро костюмлы мыҡты егет килеп керҙе бүлмәгә. Түңәрәк һары йөҙлө, яланбаш, һарғылт-ҡоңғор “терпе” сәстәре тырпайған, сынаяҡ ауыҙындай ҙур ҡара тирәсле күҙлеге һүрәттәге гөбөргәйел күҙҙәрен хәтерләтә. Үрә баҫып, Фәхернисаға төбәлеп ҡатып ҡалды.

-- Аб-ба-а-а! – тине тағы. Күҙлеген һалып, эре шаҡмаҡлы ҡулъяулығы менән ҡабаланып һөрттө, тағы ҡабаланып кейҙе. – Сәсме был, әллә өйәңке башына һарылған ҡуйы-ҡабарыңҡы үркән -- хуш еҫле ҡомалаҡмы?!

Фәхерниса сәйерйәнде ҡарап ултырҙы-ултырҙы ла, түҙмәй, сылтыратып көлөп ебәрҙе. Тегенең күҙлеге төшөп китте, ергә еткертмәй тота һалып, өндәшмәй сығып тайҙы.

Күп тә үтмәй, Ренард менән ҡушарлап килеп инделәр. Күҙлекленең ҡыланыштары хәтһеҙ олпат, ҡиәфәте һиммәтле, тик ул һаман бер ситтәрәк, тын да алмай, Фәхернисаны күҙәтә. Ҙур түңәрәк тулы йөҙө, күҙлеге, тырпай сәсе менән май сүлмәге янында ултырған бик тәүфиҡлы бесәйҙе хәтерләтеп, ҡыҙҙың көлкөһөн килтерҙе, әммә тыйылып ҡалды.

-- Һылыуҡай, матурҡай, тағы ла бер ҡат һаумы? – тине Ренард, өҫтәлгә терәлә яҙып, уҙамандарса баш эйеп. Ситтән килгән әшнәһенә был бүлмәлә ни тиклем үҙ кеше булыуын, хатта ҡыланып алыу ҙа уның өсөн сүп тә түгеллеген күрһәтергә теләгәндәй, күнегелгән хәрәкәт менән ҡыҙҙы яурын башынан ҡыҫмаҡланы. Күҙлекле һулышын туҡтатты, күҙҙәрен серт-серт йомоп күҙәтте быны, хатта, сыҙай палмай, тыпырсынып уҡ ҡуйҙы. Ят кешенең ныҡ төбәлеп текләүенән Фәхернисаға уңайһыҙ, оят булып китте, ул быға үҙе лә белмәгән ҡырыҫлыҡ менән алабарман аспиранттың ҡосағынан һыпырылды.

-- Фәхернисаҡай, матурҡай, таныш булығыҙ: был минең дуҫым Рәхимйән, -- тине Ренард, ҡыҙҙың сикәләре уттай яныуына һис кенә лә иҫе китмәй. -- Беҙ уның менән бер микрорайонда үҫтек, бер класта уҡыныҡ, ҡулға аттестат алғас ҡына юлдарыбыҙ айырылды: ҡарттар әйтмешләй, мин ошонда әҙәм тигән йән эйәһенең эске донъяһын өйрәнеүҙе мәғкүл күрҙем, ә ул химия диңгеҙендә ҡолас ташлап йөҙөп китте. Шулай ҙа эт йән ул Рөхимйән: илдән алда кандидатлыҡты яҡлап, ҡатырға тышлы дипломды кеҫәһенә бөкләп һалып та ҡуйҙы, -- метан, пропан, фенол, радикалдар – психология түгел шул ул, әпсәһен эт тешләгере, ҡулға еңелерәк бирелә, -- тип өҫтәне Ренард һәм ул ошоно әйткәнендә Фәхерниса уның

күҙҙәре әллә ниндәй ҡомһоҙ ут менән тоҡанып, ирен мөйөшөндә дуҫына ҡарата үртле көнләшеү билдәләре сағылғандай тойҙо. Әммә Рәхимйәндең быға һис кенә лә иғтибар итмәй ғәмһеҙ йылмайып тороуынан эсе бошоп, әйтә ҡуйҙы:

-- Эйе, шулайҙыр шул. Метан, пропан тигәндәрең үҙең бында сарылдатып тереләтә тунаған сыҫкан, тәлмәрйендәр түгелдер шул...

-- Абау, ниңә уҫал тешләшәһең, һылыуым? Фән хаҡына, кешелекте ҡотҡарыу хаҡына эшләнә бит ул эштәр!

-- Ярай инде, алайһа. Танышайыҡ дуҫың менән! – Рәхимйәнгә һонған ҡулын уның усында юрый оҙаҡ ҡалдырып, артыҡ иғтибар бирмәй күреште, ҡунаҡ егет ысҡындырған бер-ике шаярыу ишаратына кинәнгәндәй, бүлмәне сыңратып көлдө.

-- Таныштыр ҙа таныштыр, тип йәнемә тейҙе бит, әй, -- тине Ренард, һис бер нәмә булмағандай, алсаҡ йылмайырға тырышып. – Дуҫ хаҡына ни генә эшләмәйһең, хатта бер таба һыуҙы ла кисеп сығаһың... Тик ҡара уны, ҡыҙыҡ, кирегә бөткән был уҫал бәндә ҡороҡлай күрмәһен үҙеңде! Сөнки ул...

-- Ҡуйсәле! – тине Рәхимйән, йөҙө сөгөлдөрҙәй ҡыҙарҙы. – Һин бит ***быны*** әйтмәҫкә һүҙ биргәйнең!

-- Нимәне? Ғашиҡ булғаныңдымы? – Шаҡылдап көлдө Ренард. -- Әллә, таныштыр, тигәнеңдеме?

Ҡыҙарынған Рәхимйән артына әйләнде, бер урында тапанды.

-- Бөттө-бөттө, Ҡояш күрҙе – Ай алды! – тине Ренард. – Һин нимә, әллә: “Бөгөн эш бөткәс тә өсәүләп киноға барайыҡ, мин үҙем әйтергә ҡыймайым, түбәһенә ҡомалаҡ һарылған шул ҡыҙығыҙҙы ла саҡыр әле?” – тип теңкәмә тейеүеңде лә әйттертмәҫкә итәһеңме?

-- Шулаймы ни әле? Ә ниңә егет үҙе өндәшмәй? – тине Фәхерниса, кинәт йөрәге тулҡынып. Рәхимйән, уғата ныҡ буҙарынып, маңлайына бәреп сыҡҡан тирҙәрен ҡулындағы йомарлап тотҡан ҡулъяулығына һөрттө.

-- Ысынлап та, ә ниңә ул үҙе әйтмәй әле? – Ренардтың ирен мөйөшөндә баяғы үртле көнләшеү ғәләмәте ҡатыш йәшерен тантана сағылһы һыҙатланды. Рәхимйәндең ҡойолоп төшөүен күргән Фәхерниса уның аҡланыр өсөн асҡан ауыҙынан өн сығыуын да көтмәй, ашығыс-алсаҡ өндәште:

-- Ундай саҡырыу булғас, ниңә бармаҫҡа, ти әле? Иртәгә ял бит. Етмәһә, үҙемде генә түгел, ә бергә эшләгән аспирант ағайым менән ҡушарлап саҡыра кеше! – тине. Был юлы Ренард ҡуҙға баҫҡандай булды...

Юл буйындағы кафеға һуғылып тамаҡ ялғағас (Рәхимйән ныҡ йомартланды), күңелдәре күтәрелеп, билеттары алдан уҡ алып ҡуйылған киноға киттеләр. Фәхернисаның урыны ике егет араһына тура килеп, ут ҡапҡандай иләҫ-миләҫ килде эске донъяһы, ә шулай ҙа фильмде түҙемлек менән ҡарап бөтөрҙө.

Кинотеатрҙан улар әсеүташ ҡапҡандай йөҙҙәре һытылып сыҡты. Ҡарағандары – йәнгә аҙыҡ бирмәгән, яңғырауыҡ фразаларға ҡоролған – яҙыусы менән режиссерҙың “ҡарынында” уҡ үле тыумыш бер нәмә ине. Сәғәт ярым буйына экранда буш ҡыуыҡ һыҙғырып торғандай ҡалды тәьҫир. Бөркөү залдан арынғас, дөйөм ағынға ылығып, яҡындағы баҡсаға ыңғайланылар; күкрәк кирә һулыш алып, сәскә еҫтәре мул бөркөлгән ағас аралдарынан әйләнделәр. Әммә өсәүҙең һүҙе һис тә берекмәй – ипһеҙ тоташҡан өстаған бына-бына тарҡалам тип

кенә тора... Шулай итеп былар был йәмле кисәлә, өҙөлөргә әҙер нәҙек эскрипкә ҡылдарылай, бер моң да сыңрата алмай, өнһөҙ-тынһыҙ, бер-береһен йүнкетеп ҡыҙырҙылар. Фәхернисаның һул яғынан Рәхимйән, уңынан Ренард ҡултыҡлағайны, икеһе лә ниңәлер бик тә күшеккән, төҫһөҙләнгәндәй күренде, мәғәнәһеҙгә тағылған гер таштарылай тойолдо...

Шау-электр нурына ҡойонған майҙансыҡҡа сыҡтылар: көллө тирә-йүн сағыу сәскә, ә аллы-гөллө урталыҡта, дүрт яғынан прожектор менән тос яҡтыртылып, түңкәрелгән мискә һымаҡ түңәрәк-тәпәш постаментта, ҡулын күккә һоноп күрһәтеп, түңгәк умарталай йыуан һәм килбәтһеҙ бетон һын – “даһиҙарҙың даһийы” һерәйеп тора. Балта менән сабып яһалғандай тупаҫ скульптуранан алынған тәьҫорат, баяғы мөсһөҙ кинофильмдекенә ҡушылып, Фәхернисаның күңелен болғатты: “Ниңә бер төрлө һөйләйбеҙ ҙә икенсе төрлө эшләйбеҙ? Көллө тормошобоҙ шулай бара бит!” – тигән йәмһеҙ уйҙар килде башына. Шуны ғына көткәндәй, Ренард һәйкәлгә бармаҡ төртөп өндәште:

-- Күрәһегеҙме сәкмән кейгән бынауы олпат алпауытты? Ҡалай тора әле! Әйтерһең дә, имениеһының бейек болдорона сығып баҫҡан да батрактарына күктәге ожмахты күрһәтә...

-- Ренард, нисек телең бара? – тине Фәхерниса, саҡ тыйылып.

-- Нимә, әллә телде тешләргәме? Уға ҡалһа һин үҙең дә, бына Рәхимйән дә, анауы йәшел эскәмйәләрҙә ултырған ағай-эне лә -- бөтәбеҙ ҙә шулай уйлайбыҙ бит, тик йәшерәбеҙ генә. Ә мин ярып әйтәм!

-- Ҡасан ғына яра башланың әле? Өйөңдөң бер мөйөшөндә Сталин тәреһе торғанын, шуға табынып йәшәгәнеңде оноттоңмо? – Ауыҙ йырып тыныс ҡына иҫкәртте дуҫына Рәхимйән. Етдиләнеп: – Егерменсе съезд тигәс тә... егетлек түгел был! – тип өҫтәне.

-- Ә һеҙҙеңсә тел тешләп йөрөү егетлеккә керәме?

-- Ҡысҡырып әйтмәй торған нәмәләр ҙә бар бит...

-- Хатта егерменсе съезд да изге нәмәләрҙе изге тип билдәләй... – тине Фәхерниса.

-- Догматиктар һеҙ!

-- Һин үҙеңде революционер тип һанайһыңмы?

-- Һанамайым. Ләкин көндәлек тормошобоҙҙа хирург бысағы кәрәклеген дә беләм.

-- Ярай ҙа ул бысаҡ таҙа ҡуллылар ҡулында булһа... Һинең...

-- Нимә “һинең”?! -- Ренард дуҫына фекерен ослап ҡуйырға ирек бирмәне, ауыҙынан өҙөп алды. – Бының менән нимә әйтергә теләйһең?!

-- Теләмәйем!

Туҡтанылар, Фәхернисаның беләктәренән ҡулдарын ысҡындырҙылар. Йөҙгә-йөҙ ҡаршы тороп, бер-береһенә әтәстәрҙәй осоп-ҡунырға уҡталдылар шикелле.

-- Етте! – тине Фәхерниса, икеһен ике яҡҡа этәреп. – Ҡайтырға ваҡыт, егеттәр. Игелегегеҙ өсөн рәхмәт, хушығыҙ!

-- Бәй, оҙатып ҡуяйыҡ!

-- Кәрәкмәй. Һеҙгә бынан тура, ә миңә теге яҡҡа. Атайым бахыр әйтмешләй, аҙғын мал түгел: үҙ аяғым менән дә ҡайтам өйгә. Бик тә булмаһа бер-берегеҙҙе оҙатышып ҡуйығыҙ, дуҫлығығыҙ селпәрәмә килмәҫе борон!

Егеттәр томһайып тороп ҡалды.

4

Ренард Пушкин урамы осондағы Мосолман зиратына яҡын урынлашҡан ағас өйҙәренә әйләнеп ҡайтҡанда, ятбауыр атаһы Кипарис ҡарт йоҡламаған – алғы бүлмәлә шау электр яҡтыһында яланғас өҫтәлгә бормас ҡапҡаслы йәлпәк шешәһен ҡуйып, уйға сумып, көтөп ултыра ине. Һәленке сал мыйыҡтарын күреү менән үк, теңкәһенә тейеп екерҙе:

-- Ниңә тексәйҙең?! – Зал аша үҙ бүлмәһенә үтеп китергә ашыҡты.

-- Улым, туҡтасы!

-- Алкаш! Какой я тебе “улың”?

-- Улым, егерменсе съезд үҙҙы бит... бынауы тутыҡҡан тәрене инде алып ташларға, утҡа яғырға ине... – Стеналағы ҡыҙыл рамға төртөп күрһәтте.

-- Дурак, күҙең аҡшайҙымы әллә? Тәре түгел, ә бөйөк атайыбыҙ Иосиф Виссарионович Сталин һүрәте ул.

-- Үҙем алып ырғытамын, алайһа!

-- Кипарис! Тик ҡағылып ҡына ҡара – ҡулыңды һуғып һындырырмын, үҙеңде сүплеккә сығарып ырғытырмын! – Ишектәрҙе шарт-шорт асып-ябып, төптәге үҙ бүлмәһенә бикләнде, ерҙе-күкте һелкеткес сит ил музыкаһы дөһөрләне. Үҙенең Сәйфелмөлөк тигән исемен дә онотҡан, Кипарисҡа әүерелгән атай кеше мышҡылдап иланы ла, күҙҙәрен йырсайтып көлөп торған Сталинға ҡул һелтәп, бормас ҡапҡаслы шешәһен алып ишек төбөндәге иҫке, мамыҡ араһынан тутыҡ пружиналары төртөп сыҡҡан диванға ҡыптыр тунын бөркәнеп һуҙылды, ятҡан еренән һәрмәнеп утты һүндерҙе. Ҡараңғынан Сталин уға бармаҡ янай һымаҡ ине. Кремлендә көнө етеп дөмөккәненән һуң нисәмә йылдар үтһә лә, партияның атаҡлы йыйынынан һуң портреттары алып ташланып, шаҡшы исеме мең ләғнәттәргә күмелһә лә, Ренард улы уны ҡурсалап тота – Кипаристың йәненә тейһен, төштәренә кереп язалаһын өсөн ҡағылдыртмай торғоҙа...

Был портреттың тарихы аяныслы.

Башҡортостан хөкүмәтенең ябай ғына, әммә намыҫлы һәм егәрле хеҙмәткәре булып етешкән Сәйфелмөлөк уҙаманды 1937 йылда шул ҡәһәр һуҡҡыры Иосифтың фарманы буйынса төндә килеп ҡулға алғастары, хәләл ефетенә лә сират еткәндер – ҡанундар ҡаты ине. Әммә Рәшиҙәһе аҡыллы булып сыҡты – ҡыҙыл тирәс фуражкалыларҙың Сәйфелмөлөк өҫтөнә өйгән бөтә гонаһтарын дөрөҫләп ҡул ҡуйҙы (хәйер, тештәре һуғып һындырылған, һыңар ҡолағы өҙөлгән Сәйфелмөлөк үҙе лә ҡул ҡуйып раҫланы уларҙы). Өҫтәүенә, тәфтишсе кабинетындағы Сталин тәрәһе төбөнә тубыҡланып, халыҡ дошманы булған иренән ваз кисте, гәзиттәргә ләғнәтле мәҡәлә бирҙе. Өйөнә Сталин тәрәһен алып ҡайтып элде. Шул арҡалалыр, моғайын, уны ла, Сәйфелмөлөк алынғас

тыуған улын да “халыҡ дошманы” итеп алып китмәнеләр, иҫән-имен ҡалдырҙылар. Үҙ ихаталы иркен генә өйҙө лә тартып алманылар. Әсә кешегә теләгән урында эшләргә, атаһын белмәҫкә тыуған малай Ренардҡа һәүетемсә үҫергә, уҡырға рөхсәт ителде. Ҡатыныңың ошо зирәклеге өсөн аҙаҡ ҡыуанып бөтә алманы Сәйфелмөлөк.

Ниңәлер уны атманылар – мәңгелеккә ҡатырға, тип, һалҡын тарафтарға олаҡтырҙылар. Ыристан вагонында үлер сиккә етеп интегеп барғанында ул Рәшиҙәһенә ҡош телендәй генә шифри хат яҙып, тәҙрәнән ташлап ҡалдырҙы; рәхмәт төшкөрө бер тимер юлсы мәрйә шуны табып алған да, конверт эсенә һалып, күрһәтелгән адресын күсереп яҙып, үтеп барыусы почта вагонының йәшнигенә төшөргән. “Кипаристар сәскә атҡан саҡта...” – тип башлана ине шифри хат...

Иосифтан һуң килгән юғары түрәләр сәйәси тотҡондарҙы иреккә сығарғас, астан киҫелеп Өфөһөнә саҡ ҡайтып еткән Сәйфелмөлөк, икеләнеп тормаҫтан, зират яныңдағы йәнгә яҡын ағас өйҙөң ишеген тартып асты, тетрәнеүҙән шашынып ҡалған, таушалып бөксәйгән ҡатыны һәм ҡолғалай буй еткергән улы артындағы Сталин тәреһен селпәрәмә килтерергә киҙәнгәйне, ҡулын кире төшөрҙө: быяла аҫтындағы Иосиф менән бер ҡатарҙан уның әллә ҡасан яҙып ташлап ҡалдырған, “Кипаристар” һүҙе менән башланған шифырлы хат киҫәге тора ине...

Йөрәген әсенеү ҡатыш шатлыҡ бөрөп алды: көткән, нисәмә-нисә йылдар буйы һағынып-һарғайып көткән! Ҡосаҡлашып илаштылар ҙа ҡабатлап донъя көтөргә керештеләр.

Ундайҙарҙы бер кем дә өнәмәй ине, үҙе лә әүәлге тос хеҙмәткәр түгел шул. Кәнсәләрҙән кәнсәләргә ҡаңғырып, тибелеп йөрөй торғас, зиратта ҡәбер ҡаҙыусы булып урынлашты, ҡатынын илтеп күмгәнсе шунда эшләне. Себерҙән үк асы хәмергә бешегеп ҡайтҡан уҙамандың бында ла ауыҙ һалыулы: ҡәбер ҡаҙып эсәләр ҙә мәйет күмеп баш төҙәтәләр... Лаяҡын иҫереп ҡайта ла бахыр Рәшиҙәһен битәрләргә, сәсенән һөйрәкләргә тотона: ниңә миңә нахаҡ бәләләр яҡтың, ниңә кире ҡаҡманың?! Ниңә улыңды миңә ҡаршы аяҡландырҙың?!.

Ул саҡ инде институтта уҡып йөрөгән Ренарды, ысынлап та, уның ҡәбер ҡаҙыусы абруйынан, алкашлығынан ерәнеп биҙәрләне, атайым тип таныманы, иптәштәре алдында ҡырҡа баш тартты. Әсәһен сәсенән һөйрәкләгән сағында ҡул күтәреп, уны һуғып осорҙо ла Сталин һүрәте ҡушаһындағы шифри хатты алып йыртып ырғытты...

Рәшиҙәһе үлгәндән һуң инде нисәмә йылдар үтте, ә улы һаман шул көйө...

“Их Рәшиҙәм, Рәшиҙәм, үҙем өйҙә булманым шул, Рәшиҙәм!.. Берҙән-бер малайыбыҙҙы, ҡарт көнөбөҙҙә таяныр, арҡа терәр буласаҡ алтын ҡаҙығыбыҙҙы үҙәге серек өйәңке итеп үҫтергәнһең икән шул, Рәшиҙәкәйем!..”

Зират эшендә һуңғы ҡәберен ҡаҙып, ҡатынын ерләп ҡайтҡанынан һуң, Сәйфелмөлөк ике аҙна буйы баш ҡалҡытмай эсте, кире әйләнеп барманы. Урам һенереү эштәренә йәтешләнеп көйләнде. Дворниктар ҙа ҡәберселәрҙән кәм түгел – шешә менән дуҫлыҡтары көр ине. Йорттар идаралығының береһенән һөрһәләр,

икенсеһендә ҡушҡуллап алалар, сөнки эсмәгән дворник юҡлығы яҡшы мәғлүм; бындай кадрҙарға ҡытлыҡ йылдан-йыл арта ғына...

Сәйфелмөлөк шулай байтаҡ йылдарын сарыфлағас, улы аспирант булып теркәлгән ғилем йортоноң ихатаһын бағырға ялланды ла тамам төпләнеп ҡалды, сөнки, күрәләтә эсһә лә, вазифаһына тап төшөрмәй. Ренарды менән дә төплө һүҙ ҡуйышҡандар: һин – мине, мин һине белмәйем, вәссәләм! Шул шарт әгәр боҙолһа, өйҙән ҡыуып сығарырға янап ажғыра малайы...

Йәйен-ҡышын эше теүәл барғанлыҡтан, бындағылар барыһы ла тиң күреп яраталар, ҡуйынында бормас ҡапҡаслы шешә йөрөтөүен дә һис күрмәйҙәр, хатта башы сатнаған ҡайһы бер шуғыраҡтары йәнәшәһендә баҫып тороп һемерешеп тә китәләр... Көндөҙҙәрен һауа һуларға сыҡҡандарында бер килке гүзәл ханым һәм туташтар ҙа, сирень ҡыуағы артында ышыҡланып, уның ҡасандырғы зәңгәр диңгеҙ буйында сәскә атҡан мәңге йәшел кипарис төбөндәге йәшел эскәмйәлә дөрләп ҡабынған йәшлек мөхәббәте тураһында шиғырын йотлоғоп тыңлайҙар. Шундайҙарҙың Ҡырымға ялға киткән береһе бер ваҡыт терһәк буйлыҡ ҡына кипарис үҫентеһе алып ҡайтып биргәйне, Сәйфелмөлөк Рәшиҙәһен күҙ алдына килтереп илап ебәрҙе. Кипаристы өйөнөң ихатаһындағы иң ҡәҙерле урынға – Рәшиҙәһе менән икеһенең элекке йоҡо бүлмәһенең (хәҙер ул Ренард кабинеты) тәҙрә ҡаршыһындағы йомарт тупраҡҡа ултыртты. Йәйҙәрен төбөн ҡоротмай, ҡыштарын өҫтөнә толь һәм ҡарҙан йылы ҡыуыш өшәләкләп, тәрбиәләп үҫтерҙе, тәҙрәне аша ҡарарлыҡ буй еткертте. Дөрөҫ, һуңғы осорҙа кипаристың ғүмере ҡул осонда тора, сөнки Ренарды, тәҙрәне ҡаплай, тип битәрләүе етмәгән, шуға өҫтәп: “Әсәйемдең Сталинына ҡул күтәрһәң, ағаһыңды ҡырҡып ташлайым!” тип йәнде ала...

Хәҙер инде Сәйфелмөлөктөң ысын исемен хатта яҡын күрше-күлән дә белмәй, моғайын, үҙе лә хәтерләмәй – геләп генә Кипарис тип йөрөтөүҙәренә күнеккән. Кипарислығы йәненә үк һеңешкән ҡарт өнөндә лә, төшөндә лә баяғы зәңгәр диңгеҙ, сәскә атҡан йәшел кипарис төбөндәге йәшел эскәмйә менән илереп йәшәй. Өйө алдындағы ошо үҙе ултыртып үҫтергән йәшел кипарис төбөнә йәшел эскәмйә ҡуйып, иртә-кисен шунда сығып ултыра, эргәһендә зәңгәр күҙле, һары толомло Рәшиҙәһен тойоп тәрән хисләнә, Рәшиҙәһе менән йөрәкһеп һөйләшә...

Бер генәһенең, ир ҡорона кереп еткән малайының, шундайын да кешелекһеҙ булыуына төшөнөп бөтә алмай ҡарт: ни сәбәп? Кем ғәйепле?

Рәшиҙәһенең үлеренә бер йыл ҡалғас әйткәндәре төшә иҫенә: “Үҙең ҡаты бәғерле бит – шунан килә ул. Сәсемдән һөйрәп аҙмы туҡманың мине?!”

Малайның әүәлге сәйер ҡылыҡтарын күрше-күлән һөйләне: ҡорттай ғына сағында уҡ себен аулап, тараҡан тотоп, ҡанаттарын, боттарын ботарлап ләззәтләнде; ҡалҡына биргәс, ямғырҙан һуң асфальтҡә сыҡҡан селәүсендәрҙе тапап иҙҙе, тәлмәрйендәрҙе тереләтә ботарланы; ҙурайғасыраҡ ташландыҡ бесәй балаларын язаларға кереште...

Шуныһы ҙур фажиғә: ғалимлығын да психтарҙы кире дүндерә торған, шуның өсөн ғонаһһыҙ тәлмәрйендәрҙе, йорт ҡуяндарын тереләтә киҫкеләп тәжрибә туплаусы ғилем төйәгенән башлаған...

Яңыраҡ ҡына Мәскәүҙең абруйлы бер гәзитендә “В защиту подопытного кролика” тигән ҙур мәҡәлә донъяға фаш ҡылынып, ғалим-ғөләмә шау итте, һөйләгәндәре шул булды. Унда килтерелгән миҫалдарҙың: “Вот читал я недавно труды одной конференции. Кровь стынет! В одном докладе пишется, как кроликов бросают в кипяток, в другом – как обливают спиртом и поджигают”[77], тигән береһен уҡып: “Беҙ бит был... Ренард!” – тигәндәре Кипарис ҡарт ҡолағына ауырттырып салынды...

Кипарис ҡарт һулҡылдап күҙҙәрен йома ла үткәндәрҙең тулҡынына күмелә. Әммә ауыр лагерь йылдары түгел, ә бәхетле йәшлеге, сәскә атҡан мәңге йәшел кипарислы зәңгәр диңгеҙ буйы керә төшөнә. Теге бәхетле заманда хөкүмәт биргән юлланма менән барғайны ул Ҡырымға ял итергә. Яр ситендә сәскә атҡан йәшел кипарис төбөндәге йәшел эскәмйәлә моңайып ултырған оҙон һары томомло, зәңгәр күҙле Рәшиҙә исемле һылыу менән танышты, үлерҙәй ғашиҡ булышып, Өфөгә алып ҡайтты уны...

Ҡарттың ҡолағы төбөндә шаулап тынғыһыҙ диңгеҙ сайпыла, гәлсәр тулҡын сылтырауҙары онотолмаҫ шиғыр булып ҡойола:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...

Их, кире ҡайтарып алаһы ине үткән ғүмеркәйҙәрҙе!..

5

Фәхерниса был төндә йоҡлай алманы.

Кисәнең шулай боҙолоуы өсөн ул бер юлы баяғы мәғәнәһеҙ фильмгә лә, егеттәргә лә асыулы ине. Шуларҙың бөтәһе, татлы күҙйәш булып, мендәр тышына һеңде. Ни өсөндөр күҙ алдынан Рәхимйәндең һуңғы минуттағы уға ҡарап аптырап-алйып ҡалған уйпат күҙҙәре, түңәрәк йөҙө китмәне. Ниндәйҙер тәрән һағыш, ялбарыу бар һымаҡ ине ул күҙҙәрҙә, оҙатыуын кире ҡағып дорфа айырылышҡанда. Китә биргәс, Фәхернисаның йөрәк башын йәшен уты ҡыйып алғандай булды, тик ул быны һиҙҙертмәне – елеп килгән таксиға ултырып һыҙҙы, ләкин юл буйынса тилереп ҡайтты. Һис ҡасан кисерелмәгән, үҙе татлы ла, әсенесле лә тойғо ине был... Ишекте астыртып ингәс, әсәһенең ныҡыуҙарын ишетмәҫ өсөн, баш ауыртыуына һылтанып, йәһәт кенә үҙ бүлмәһенә йомолдо. Ләкин шөкәтһеҙ кисереш китмәй ҙә китмәй. Ахырҙа ул Рәхимйәнде, рәүешен кәмһетер өсөн, онотор өсөн, мөмкин булған бөтә насар сифаттарға бәйләп күҙ алдына килтерергә тырышты. Ләкин уйлап сығарған һыҙаттар егеткә йәбешмәй ҙә ҡуя. Ахыры булманы, Ренард тураһында уйлай башланы, баяғы Рәхимйәнгә тағырға иткән кире сифаттарҙы берәм-берәм уға йәбештереп сыҡты. Ғәжәп! – быныһы уға шөйлә еңел бирелде. Шулай ҙа тәтәй егет күҙ алдында һаман тәтәй килеш ҡалды, әйтерһең, Рәхимйәнгә тип уйлап тапҡан йәмһеҙ һыҙаттар Ренарды,

[77] “Литературная газета” №37, 8 сентябрь 1971 йыл.

йәбешһә ла, һис кәмһетмәй – иш кенә килеп тора, бағыр балыҡ арҡаһында тырпайған ҡупшы энәләр кеүек, уны уғата ҡупшылатып ҡына ебәрә ине. Ошо ҡапма-ҡаршылыҡлы хистәрендә буталып, Фәхерниса теге ваҡыт институт коридорындағы күмәк һөйләшеүҙе иҫенә төшөрҙө. Хәҙер генә шундағы бәхәстең мәғәнәһен аңланы. "Сослоҡ" тип аталған оятһыҙлыҡ, һөмһөҙлөк тураһында бара ине, буғай, һүҙ. Берәүҙәр, юғары матдә фәлсәфәһенә таянып, шул сифатты Ренардта хуп күреп маҡтай, икенселәре кире ҡаға. Көллө халыҡты "сословдырыу" хаҡында һүҙ ҡуйыра. Тыңлап торған Фәхерниса, ытырғаныбыраҡ, һөмһөҙ хуплауҙарҙы күңеленән кире һөргәйне. Ә хәҙер инде үҙе лә Ренард хаҡында: "Уға барыһы ла ярай, барыһы ла килешә!" – тип уйлап тора түгелме? Ҡайҙан килә бындай ҡапма-ҡаршылыҡ?!.

Фәхерниса бер-нисә көн ошо тойғонан арына алмай йөҙәне. Күпме генә ҡул һелтәргә, оноторға тырышмаһын, үс иткәндәй, ҡапма-ҡаршы тәбиғәтле егеттәрҙең икеһе лә һүрелмәй күңел күгенән. Береһе төнгө баҙлауыҡтай үҙенең ялтыр ҡабығы менән ҡарашыңды арбаһа, икенсеһе үҙебеҙ бар тип тә белмәгән ерһыуға, һауаға хас ябайлығы менән йөрәккә яҡын... Ахыры, нишләргә белмәй, икеһенә лә бер тигеҙ асыу тоторға, һалҡынлығы менән һынарға булды. Бизмәндең бер башы ла баҫып төшмәҫкә тейеш...

Шул уй менән эшкә барҙы, эштән ҡайтты. Ренард һаман әүәлгесә күңелдәрҙе иретеп йөрөһә лә, уға һалҡын боҙ ҡатламы аша бағырға тырышты. Теге кистең иртәгәһенә Рәхимйән дә шылтыратып маташһа ла, Фәхерниса, ярты һүҙҙән өҙөп, телефон трубкаһын һалды. Артабан да уның тауышын ишетеү менән үк өндәшмәҫ булды. Кистәрен уны осратмаҫҡа эштән иртәрәк сығып тайҙы. Бара-бара был хәл ғәҙәткә керҙе.

Ситтән тороп уҡыу йылы осланып, ауыр имтихандар осоро килеп етте, баяғы ваҡ ығы-зығылар онотолдо. Инде ҡыҙҙың бар ваҡытын, зиһенен һынауҙарға әҙерлек ғәме йотто. Ул бөтә йәшлек дәрте менән уҡыуына ылығып, ҡасан был курсты тамамлайым, икенсеһенә күсәм, тип елкенеп, шуны Ҡояш ҡалҡырын көткәндәй көтөп, күңеле илке-һалҡы килеп йөрөнө. Эшкә лә тик аҙнаһына бер-ике тапҡыр ғына барып әйләнә, ҡанунға ярашлы өҫтәлмә ял бирелгән. Шулай болоҡһоп йөрөгәнендә, бер көн эштә күңелле бүләк ҡаршыланы.

Иртәгә ял тигән көн, күҙ сағылтҡыс сыуаҡ ине. Ял көндәрендә Фәхернисаны, бер түгел, ике ауыр имтихан көтә ине. Ғәмләнеп эш бүлмәһенә килеп ингәнендә, хуш еҫле гөлбаҡсаға сумдымы ни! – яҙыу машинкаһына һалынған сағыу сәскә бәйләме һүрҙе зиһенен. Атлығып килеп гөлдәрҙе күкрәгенә ҡыҫты, улары шундуҡ йәнләнеп, тырпырауҙары йөрәге менән ҡуша тибә башланы – сабырһыҙ өмөттәре һымаҡ үтә ярһыу, алһыу розалар ине! Күкрәгенә ҡосаҡлап тотҡан килеш, бүлмәне бейеп әйләнде; вазаға ултыртып маташҡанында, тертләтеп, Ренард тауыш бирҙе:

-- Ҡайнарҙарҙан ҡайнар сәләм һылыуҙарҙың һылыуына! – Ҡәзимге алсаҡлығы менән шарылдап, һә тигәнсе, яурын башынан ҡыҫмаҡлап та алды, ниндәйҙер шиғри юлдар менән осланы:

Сәләм әйтә һиңә гүзәл гөлдәрем!

Сыуаҡ булһын, тиҙәр, сафлыҡ көндәрең!

-- Ә?! – Диуана хистән күңеле томаланып, башы әйләнде: “Төлдәрем, ти – уның роза гөлдәре!” Шул уйынан тамам алйып: -- Их, шундайын да гүзәлдәр! Рәхмәт, Ренард ағай! – тип ысҡындырҙы ысын күңелдән.

-- Ә? Ни өсөн рәхмәт? – тине кинәт төҫө үҙгәргән егет. Йәһәт иҫенә килеп, аҡылын йыйып алып, күҙен ситкә йәшерҙе. Быны ҡыҙ абайламаны, ифрат тулҡынланғайны.

-- Сәскә өсөн рәхмәт, --тине, күҙҙәрен тултырып ҡарап. Ҡапыл ғына күңеленә шик ҡунып: “Әллә яңылышаммы?” – тип тел осона килгәйне, Ренард уны, ауыҙ асырға ла бирмәй, ике ҡулынан эләктереп, иҙән әйләнәһенән өйөрөлтөп алып китте:

-- Сәскәләрҙән һинең үҙеңә рәхмәт, сөнки һин үҙең – сәскәләрҙең сәскәһе! – Күбәләктәй осортоп килтереп машинкаһы эргәһенә төпләндерҙе, өҫтәл ситенә ҡуйған быуаҙ портфеленән ҡалын ҡулъяҙмаһын алып, машинка өҫтөнә һалды ла йәһәт күҙҙән дә юғалды. Фәхерниса оҙаҡ ҡына, йөрәге ҡағып, иҫенә килә алмай ултырҙы...

Шул йөрәкһеүендә талпынып эштән ҡайтты, төн ултырып конспекттарын уҡыны һәм, иртәгәһен иң ҡурҡыныс кафедраға елеп барып, кәзә һаҡаллы ҡарт профессорға бер юлы ике имтиханды ла бынамын тигән итеп тапшырҙы. Бер-нисә көндән һуң иң аҙаҡҡы һынауҙан да ҡотолоп, уҡыу йылын осланы, уны, әйтерһең, әлеге алһыу розаларҙың тылсым көсө осортоп йөрөтә ине. Студенттар йылғаһында аудиториянан ағылып сығып, ҡайтырға ыңғайланы: өйҙә ут йотоп әҙәһе көтөп ултыра бит. Тик ни тиклем ашҡынһа ла, эшләгән еренә яҡынлашҡас, боролмай түҙә алманы. Аяҡтары, үҙенән-үҙе, таныш гранит баҫҡыстан юрғалатты. Эш сәғәттәре булһа ла, бина эсе тын: ишек төбөндә вахтер апай ғына йоҡомһорап ойоҡ бәйләп ултыра.

-- Бер кем дә юҡ, бөтәһе Политмәғариф йортона шылды. Ғилми конференция! – тине ул, йылтыр-оҙон энәләрен сығылдатып. Шулай ҙа ҡыҙҙың йөрәге тулап һаман эскә -- үҙенең эш бүлмәһенә һөйрәй ине, унда үҙен бик ҡәҙерле нимәлер көтөп торғандай ине. Яңылышманы: бүлмәнән йөҙө алланып, йәне ҡояштай балҡып, бер ҡосаҡ дөрләү ялҡын-ут – ҡан-ҡыҙыл ҡәнәфер сәскәләре күтәреп сыҡты.

-- Әй-й-й, әйтергә лә онотҡанмын икән дә. Тегең! Баяғынаҡ килтереп киткәйне, исемен әйтмәҫкә ҡушҡайны, -- тине апай. Ләкин Фәхернисаға быны әйтеү кәрәк тә түгел – былай ҙа белә уны! Ҡолағына ла элмәй йүгереп үткәнен күреп, апаһы баш сайҡаны: -- Ҡара-ҡара, бигерәк буйлата ла инде егетең. Осоноп китә күрмә тағы!

...Фәхерниса әсәһенең ҡосағына ҡуҙҙай ҡыҙыл ҡәнәферҙәр менән ҡуша ҡапланды.

6

Күк йөҙөкәй тигән диңгеҙҙә, алсаҡ-көләс йылмайып, алтын-уҡа елкәндәрен елгә ҡабарткан ҡайыҡ – һары Ҡояш күлкеп йөҙә, гәлсәр тулҡындарға алтын ишкәк-нурҙарын ҡаға.

“Сылтыр-р-рт! Сылтыр-р-рт!” – Сағыу алтын ишкәктәрҙән ҡупҡан гәлсәр тамсылар, селтерләшеп көлөшә-көлөшә, туҙғып үргә сирғылды. “Сөмбөр-р-рт! Сөмбөр-р-рт!” – Фәхерниса, гәлсәр диңгеҙ ҡосағына иҙерәп сумып барған килеш, уянып күҙен асты. Сентябрҙең уйсан-моңһоу ҡояшы, өй алдында һуҙылып үҫкән һомғол йүкә тармаҡтары аралығынан тәңкә-тәңкә сәрпәкләнеп, ҡыҙ баш баҫып ятҡан аҡ мендәр өҫтөнә, унан, түгелеп-сәсрәп, шыма иҙән буйына тимгелләнгән. Йыбанып ҡына күҙ йомдо: Ҡояш йөҙгөн гәлсәр диңгеҙгә ҡабат сумғыһы килде.

“Сылтыр-р-рт! Сөмбөр-р-рт! Сылтыр-р-рт! Сөмбөр-р-рт!” – Көмөш тәңкәләр көллөһө бергә тирелеп төшкәндәй булды, ҡыҙ йөрәге һурылып сығырҙай типте. Һары тәңкәләр сылтыраған ҡалҡыу күкрәгенән одеялын этәреп, тәҙрәгә боролоп баҡты. Көҙҙөң тәүге бәрәкәтле һулышына иҫереп алтын төҫөн алған һалма-һалма япраҡтар уйсан ғына талыға сыбыҡтарҙа. Быйыл йәй генә буй еткереп тәҙрә-быялаға морон төрткән бөрөсыбыҡ осонда алтындай сөм-һары ҡошсоҡ, бер ни белмәй ҡанат ҡағып, түгелеп һайрап ултыра. Онотолоп китеп талпынғаны һайын, сыбыҡ һығылып әүешә, шунан тағы, ҡошсоҡ сыңрау тәңкәләрен түгеп бөткәс, өҫкә ҡалҡына. Шул саҡта ҡошсоҡ ҡанаттары, бәйле килеш осоп китергә талпынған күбәләктәй, тәҙрәне тыпырлата. Әйтерһең, ҡыҙҙың йөрәге эсендә тыпырсынып тибә ул: “Йәшәү шундай хөр, йәшлек килә бер -- әйҙә, киттек, остоҡ зәңгәр киңлеккә, бикләмәйек теләктәрҙе ситлеккә!..”

Фәхерниса ошо минутта үҙен бер сихырлы көс, быҫаса тойоп күрелмәгән мәкерле көс, аңын томалап, көрмәп алғандай тойҙо, көтмәгәндә күҙ алдында Рәхимйәндең Ҡояш кеүек түңәрәк йөҙө төҫмөрләнеп, көллө тәне буйлап эҫелеһыуыҡлы тулҡындар йүгерҙе. Шул түңәрәк йөҙҙө яҡынайтаһы, ҡосаҡлап алып, сыңғыр-сыңғыр алтын тәңкәләр сыңламыш күкрәгенә ҡыҫҡыһы килеүҙән сыҙай алмайынса илап ебәрҙе. Сыбыҡтағы һандуғас ҡапыл тынды, ҡанат ҡағыуҙан туҡтаны. Башын сәйер ҡыйшайтып, төртөк миңдәй тере күҙен ҡыҙҙың күҙҙәренә туп-тура төбәне. “Ила, ила, шунан башҡаһы килмәй шул һинең ҡулдан!” тиә һымаҡ ине ул. Ҡараны ла “пыр-р-р!” итеп осто ла китте, тере бөрөсыбыҡ осо оҙаҡ тирбәлеп торҙо. Фәхерниса, одеалын баш осонаса тартып, әсе ләззәтләнеү аралаш туйғансы үкереп иланы, аҡ мендәрҙе күҙйәшенә сылатҡас ҡына урынынан торҙо. Тик йөрәге, буйһонорға уйлап та ҡарамайынса, баяғы бөрө осондағы һандуғастай осоп китергә әҙер. Үҙен көсләп, тигәндәй, сәй эсергә ултырҙы, сынаяғын саҡ бөтөрөп ҡапланы. Әсәһе, үс иткәндәй, табындан тиҙ-тиләмә генә ҡубынырға йыйынмай: көҙ етеүе, ҡышҡылыҡҡа кәбеҫтә, ҡыяр, помидор тоҙлап ҡалдырырға кәрәклеге, шуның өсөн бөгөн ял көндә баҙарға сығып, өс литр һыйҙырышлы быяла банкалар, уларға ҡапҡас йәһәтләүҙең ни тиклем мөһим икәнлеге тураһында ҡаңғырта башты. Атаһы балыҡҡа киткән еренән боҙға уйылып үлгәндән һуң, ундай тоҙло нәмәләрҙе кинәнеп ашаусы булмаһа ла, әсәһе һаман элекке ғәҙәтен ҡалдырмай, Фәхерниса ла әүәлгесә тырышып уға булыша; тик ҡыш еткәс кенә был эштәрҙең аяныслы мәғәнәһеҙлеге асыҡланып, банка байлыҡтарын әсәһе күрше-күләндең әселәп йөрөгән ир-атына таратып бирә ине. Бөгөн дә сәй

янындағы һүҙҙәрҙән шул күңелһеҙлекте күҙ алдына килтереп, Фәхерниса тиҙерәк тороп китергә ыңғайланы. Әсәһенең йомошон үтәп баҙар йөрөп ҡайтыу һылтауы менән ул өйҙән сығып китте.

Көн салт-аяҙ, тымыҡ. Тротуарҙы ҡаймалаған газон биттәре ҡурпылап, ҡускыл-йәшел ҡыяҡтары йотлоғоп ҡояш имә. Йыбанып ҡына, уйланып ҡына, йәшел үлән өҫтәренә һары япраҡтар яуа. Асфальтте лә сағыу-һары тәңкәләр – йүкә япраҡтары биҙәкләп ята. Был ғүмерҙең ҡыҫҡалығы, йәшлек ярының артталығы хаҡында моңһоу хистәр уята. Фәхерниса, үҙе бараһы баҙар ҡапҡаһын әллә ҡайҙан уҡ ситләтеп үтеп, шаҡмаҡ-шаҡмаҡ балкон-тәҙрәле яңы йорттар сурайышҡан киң урамға боролдо, бәләкәс саҡта ололарҙан ҡасҡандағыса елбер-елбер йүгереп китеүен үҙе лә һиҙмәй ҡалды: уға тәҙрәнән башын сайҡап әсәһе ҡарап ултыра төҫлө ине. Бара торғас, яңы йорттар сылбыры ҡырт ҡына өҙөлөп, ҡарт йүкәләр ҡанаты аҫтына ҡаҙ бәпкәһеләй сүгеп һыйынған ике ҡатлы өйҙәр теҙмәһе сиратланды. Һуғыштан һуң һалынған иҫке йорттар ине, һуңғы заман шыма панель ҡоролмаларҙан айырмалы булараҡ, ҡытыршы кирбес стеналары ҡәлғәнекеләй ҡалын, балкондары киң, тәҙрәләре бейек ине. Ишек алдында алма баҡсалары, таҡта келәттәр, ҡалын ҡалайҙан автомобиль гараждары бар. Шундай бер йортҡа етәрәк ҡыҙ туҡтаны, албырғанып, ян-яғына ҡаранды. Боролоп йүгерергә итте. Шул саҡ, биғәйни, баяғы һары һандуғастың миңдәй төртөк тере күҙе күренде, биғәйни, йәнен көйҙөрөп көлдө: "Әйттем бит, әйттем бит, ул һинең хәлдән килмәй, тип!" Фәхерниса, башын баҫып, барышын ҡыҙыулатты: "Ҡала буйлап мин йөрөмәҫкә тейешме ни, был урамға мин аяҡ баҫмаҫҡа тейешме ни?!" – тип үҙен ғәйрәтләндерҙе. Барғаны һайын йөрәге йышыраҡ тибә, һулышы ҡыҫыла, ике ҡолағы шаулап, биттәре уттай яна. Бына ҡапҡа тәңгәлендә ***уның*** тауышы ишетелде, Фәхерниса салҡайып китә яҙҙы. Инде һис ни белештермәй, һәләкәтенә табан йомолоп һикергән тәлмәрйен кеүек, таныш тауышҡа ынтылды, баҫҡаны һайын, табандарын ут көйҙөрә һымаҡ ине. Өҫтөнә таушалған һәлмәк костюмын кейеп, ҡолға буйлы бер ҡыҙыҡай менән сөкөрләшеп сығып килеүсе Рәхимйән, үҙ сиратында Фәхернисаны абайлап, ярты һүҙҙән туҡталды, күҙҙәрен ҙур асты.

-- Фәхерниса... һин?! Ҡайҙа киттең? – тине ул, ҡыҙҙың, иғтибарламағандай, һәүетемсә генә үтеп барыуынан албырғанып. Фәхерниса, ҡырт-туҡталып, боролоп ҡараны:

-- Ә... Рәхимйән? Был һинме ни?

-- Ял көнө бит, бына Лира менән сыҡҡайныҡ... – Егет, ары ни әйтергә белмәй, ҙур аҡ ҡулъяулығы менән күҙлеген һөртөргә кереште. Лира тигәне, ҡыҙыҡһынып, төймәләй түңәрәк күҙҙәре менән Фәхернисаның буй-һынын үлсәп тора ине. Фәхерниса ҡарашы менән тәүҙә уны көйҙөрөп, Рәхимйәнгә боролдо:

-- Ярай, бик матур ял итегеҙ. Һау булығыҙ.

-- Фәхерниса, туҡта, һин ҡайҙа? – тип өтәләнде Рәхимйән.

-- Ошо яҡҡа. Йомошом бар.

Лира кеткелдәп көлдө.

-- Ял көнө... – тине Рәхимйән. Яулығы менән бергә күҙлеген алға һоноп тоткан килеш, балаҡтарын ялпылдатып, Фәхерниса янына йүгереп килде. – Был

яҡта ниндәй йомош ул? – тине күҙлеген кейеп, ике күҙен мызылдатып. Лира ҡалын алһыу имнекле ирендәрен бүлтәйтте, Фәхернисаға зәһәр төбәлеп ҡараны. Фәхернисала ла был һөмһөҙ ҡолға буйлыны семтеп алыу теләге уянды. Егеттең иңенә һарыла биреберәк:

-- Бына һине эҙләп килгәйнем, ләкин буш түгел икәнһең! – тине. Рәхимйән, ниһайәт, иҫен йыйып, күҙҙәрен сырт-сырт йомдо, ахыр тултырып ҡараны:

-- Мин ни... мин хәҙер!

-- Рәхим аға-а-ай, әйҙә, тиҙерәк! – тип һуҙып өндәште һаман бер ситтәрәк торған Лира.

-- Бар, Лираңды зарыҡтырма, -- тине Фәхерниса. Рәхимйән, төҫө ҡасып, уның беләгенә сат-йәбеште:

-- Фәхерниса...

-- Нимә?

-- Әйҙә, киттек баҡсаға. Ҡара, көнө ниндәй бит! – Һылыуҡайы кире ҡағып ҡуймағайы, тигәндәй, тегеһенә ҡырт боролоп белдерҙе: -- Лира һеңлем, ғәфү ит инде мине. Диссертацияңды дүшәмбе көндә кафедраға килтер, бер арала ҡарап сығырмын, йәме?

-- Беҙ бит бөгөн тип һөйләшкәйнек.

-- Бөгөн булмай шул.

-- Ярай, һау булығыҙ, Рәхимйән Ғәлимйәнович! – Лира, ауыҙын турһайтып, ҡылт ҡына боролдо ла шаҡ-шоҡ баҫып китеп барҙы.

-- Быуынға ҡорт булып төштө бит, әй. Эштә маҙаһыҙлауы етмәгән, бөгөн өйгә килеп еткән... – Баш сайҡап ҡәнәғәтһеҙләнде Рәхимйән. Үҙҙәренә саҡырып йөҙәтә...

-- Буш иттең, барырға кәрәк ине.

-- Һәй! – Ҡул һелтәне. – Нисек ҡотолорға белмәй сыҡҡайным әле!

Ҡыҙ көлөп ҡуйҙы, өндәшмәне. Күңелдәре менән бер-береһенә һырнығышып, Лира киткән йүкәле аллеянан ҡапма-ҡаршы тарафҡа – ҡаланың бейек тау башындағы иң күркәм баҡсаһына ыңғайланылар. Киртләс ярҙан һыу өҫтөнә оҙаҡ теклəп торҙолар.

Ҡышты көтөп тымығып ятҡан Ағиҙел-һылыу көмөш көҙгөләй ялтырап йылмая, уйсан моңһоулығын сиртеп-сәсрәтеп моторлы кәмәләр ҡоштай оса, арттарында ҡалған сыйырым өҫтөндә көмөш балыҡтар осоноп һикерешә; балауыҙҙай һары ишкәкле зәңгәр кәмәләрҙә ҡандай ҡыҙыл гармун күректәрен бер һуҙа тартып, бер буҫлыҡтырып, ял итеүселәр тулҡындарҙа тирбәлә; яңыраҡ төҙөлгән суйын селтәрле күперҙән Ырымбур юлы буйлап йылғыр машиналар йүгерә, ә йылға яры ҡырыйындағы аллы-гөллө кейенгән халыҡ ҡырмыҫҡа иләүеләй ҡайнаша – һәр йән эйәһе уҙып барған көҙ айының һуңғы сыуағын туйғансы эсеп ҡалырға самалай, буғай...

Рәхимйән менән Фәхерниса тымыҡ аллеялар буйлап ҡыҙырҙы. Донъя-ғаләм һыу ситенә ағылып төшкәнлектән, бында аулаҡ, һиҙ; ара-тирә эскәмйәлә гәзит уҡып ултырған ҡарт-ҡоро, ойоҡ бәйләп ойомош әбей-һәбей генә күҙгә салына, көҙгө моңға был күренеш уйсан бер биҙәк өҫтәп, дөйөм һиллек тойғоһон арттыра ғына.

Моңайып ойоған ҡарт йүкә төбөндә туҡтанылар, ҡара-ҡаршы баҫып, тәбиғәт ғүмере көҙөнөң серле ауазын – һары япраҡтар шыбырлауын тыңланылар. Сыбыҡ остарынан алтын тәңкәләр пыртлап өҙөләләр, ҡаймаҡ һымаҡ ҡуйы һауала бөтөрөлөп төшәләр, төшәләр...

Әҫәрләнеп күҙен йомған Рәхимйән тертләп уянды: юлдашы юҡҡа сыҡҡан бит!..

Туҙйыландай бормасланып нәҙек һуҡмаҡ һуҙылған һәм барып бөткән түбәндәрәк, ҡуйы һары селектәр, өсҡат ҡыуаҡтары ураҡкан уйым ғына йәшел аҡланда ике тубығын ҡосаҡлап ултыра ине ҡасҡалағы. Юлдашының килеүен әллә абайламаны, әллә юрый күрмәмешкә һалышты. Өсҡат бөҙрәләре өҫтөнән ҡарайып тимгелләнгән, суйындан ҡойолған быҙаулы болан һынына төбәлгәйне уйсан күҙҙәре. Улары теп-тере кеүек: наҙлы быҙау бына-бына инәһенең тулып-ташҡан елененә морон төртөп шапылдатып имә башлар, ә тегеһе, ләззәтенән иҙрәп-мөңрәп, балаҡайының осаһын ялар...

Рәхимйән дә ошо илаһи күренештән тулҡынланып, иләҫ-миләҫ килгән ҡыҙҙың ҡабарынҡы сәс ташҡынын һыйпаны. Фәхерниса уянды, күҙҙәрен тултырып ҡараны: Рәхимйәнгә был күҙҙәрҙең ҡаралығында ике болан һүрәтләнә төҫлө ине...

-- Профессор! Ренард әшнәңә оҡшап бараһыңмы әллә? – тине Фәхерниса, егеттең сабырһыҙ ҡулын алып ташлап.

-- Ғәфү ит... Фәхерниса, беләһеңме, мин һине тәү күргәндән кемгә оҡшаттым?

Ҡыҙ көлдө:

-- Кемгә?

-- Бер ауыҙ һүҙ менән генә аңлатып булмай быны... Бер саҡ ауылға ҡымыҙ эсә кайтҡайным. Иркен тибенле, йылҡылы ауыл. Йоҡларға ятһаң, таң атҡансы баҡыр бутыл дыңғылдауы, йылҡы кешнәүҙәре шаңғырып тора. Иртән уяныуыңа һаумал-ҡымыҙҙы башың осонда гөбөрләтеп бешәләр... Бына шул ауылда һаҡмар аша тартылған борам кәмәһе янында ҙур ғиллә ҡупты бер көн. Ни күҙебеҙ менән күрәйек, ит комбинатына тере йылҡы тейәп илтеүсе йөк машинаһы тора борамда; әҙмәүерҙәй ир-ат, күҫәк болғап, тирләп-бешеп, яр ситендә борамға керергә үрәпсегән бер аҫауҙы яралар. Илағандай әсе кешнәп, күҫәктәр өҫтөнә ырғый малҡай; башына һуғып ебәрәләр – ялын ергә һөйрәлтеп, йөгөнөкләп барып ята; тағы һикереп тора, ял-ҡойроғон ялбырлатып, үрәпсеп-кешнәп, борам өҫтөндәге машинала сарылдашып тауыш биреүсе бейәләр янына ярып үтергә тырыша... Шул арала борам ярҙан ҡубынып, ситлектәге бейәләрен сарылдата-сарылдата аръяҡҡа шылды, бейәләрҙең күҙҙәре йәшкәҙеп йылтыраны. Аҫау иһә кәренә сыҙаша алмай, болот кеүек ялдарын ялбырлатып, яр буйҙарын ярып кешнәй-кешнәй сабып йөрөнө лә буръяҡланып ҡайнаған һыуға текә ярҙан ташланды... – Рәхимйән, күҙҙәре йәшкәҙеп, күҙлеген ҡулына алды.

-- Йөҙөп сыҡтымы һуң? – тине Фәхерниса, тыны ҡыҫылып.

-- Һыуға ал ҡан күлкене: яр аҫтында боронғо күперҙән осло имән бағана ҡалған...

-- Уф, ниңә шундай аяныс хәлде һөйләйһең?.. – тине Фәхерниса, йөрәк төбөнән һыҙланып. Ике ҡулын башы аҫтына ҡаушарып, йәшел сирәмгә салҡан һуҙылды. Ялтыр ҡара күҙҙәре, уйсанланып, сөм-зәңгәр күккә баҡты.

-- Профессор, күрәһеңме анауҙы?

-- Нимәне?

-- Аяҡ осомда ғына – тап шул тәңгәлдә -- күктә бер йондоҙ балҡый.

-- Йондоҙ?!.

-- Эйе. Ҡар бөртөгө һымаҡ ап-аҡ, алты мөйөшлө йондоҙ.

-- Ошо көпә-көндөҙмө?

-- Ышанмаһаң, ана тора.

-- Ҡайҙа-ҡайҙа?

-- Ана анауында! – Фәхерниса, башы аҫтынан ҡулын алырға йыбанып, ослобаш-ҡайыҡ түфлиле аяғы менән төртөп күрһәтте. Шул осраҡта күк төҫөндәге ебәк күлдәк итәге аҫҡа шыуышып, шалҡандай йоморо тубыҡтары балҡыны...

-- Көпә-көндөҙ күренәкәй йондоҙҙар унда түгел, ә бында! – тине егете, уның ҡара-йылтыр күҙҙәренә кереп китерҙәй өңөлөп; ике ярҙың ҡайнар һулыштары төкәлеште.

-- Уф, Рәхим йән! – Ҡыҙҙың һалҡынса яланғас беләктәре ныҡ итеп уның муйынына уралды, ҡыуаҡ артында быҙаулы болан да ҡымшанып ҡуйғандай итте, ә ҡыҙыйҙың тығыҙ күкрәк тамырҙарын семерләтеп быҫаса татып күрелмәгән алйытҡыс хис сәнсеп-ҡытыҡлап үтте...

7

Институтта йәйге-көҙгө ял айҙары күҙгә күренмәй үтте. Хеҙмәткәрҙәрҙең төрлөһө төрлө яҡ “ҡояшлы илдәргә” таралып, һыу-һауаға ерегеп, тәндәре майлаған ҡаҙандай ҡарайып ҡайтты. Ҡай берәүҙәр йәй буйына ауылдарҙа ғилми экспедицияларҙа йөрөп үткәрҙе. Шуға күрә айҙар буйынса ла бер-береңде осратмау һис ғәжәп түгел ине.

Фәхерниса йәмле көндәрҙе имтихандар тапшырыуға арнап уҙғарғанлыҡтан, сираттағы ялы һуңғараҡ ҡалдырылып, ҡара көҙгәсә машинкаһын шыҡылдатып ултырып, ергә аҡ ҡар ятҡас ҡына бушанды. Был юлы ул бөтә ваҡытын, һәр төрлө тоҙло ҡыяр, вареньелар араһында булышып, әсәһенә ярҙамлыҡлап үткәрҙе. Әллә ҡыш үҙенең һалҡын һулышын өргәнгәме инде, күңеле быҫҡып һүнгән усаҡтай һүрән, бер ҡайҙа ла тартмай, -- хатта киноға ла барғыһы килмәй. Уты сәсрәп торған ҡыҙының ҡапыл шымып бойоғоуына әсә кеше лә иғтибар итмәй ҡалманы. Бер көндә ул универмагтан ырҙын иләгеләй оло ҡап күтәреп ҡайтты:

-- Бәпесем, кейеп ҡарасы шуны. Сират тороп саҡ эләктерҙем, Париждың үҙенән килгән!

Әсәле-ҡыҙлы зыҡ-ҡубып, матур ҡапты астылар: бынамын тигән эшләпә ята имеш, күҙҙәрҙең яуын алып. Фәхерниса, эшләпәне түбәһенә элеп, бүлмәне зыр-өйөрөлдө:

-- Әсәй, йәнем, нисек таптың был мөғжизәне?

-- Бөгөн үк кейеп сыҡ, бәпесем, -- тине әсә, ҡыуанып. – Юғиһә, ялың осланып бара, һаман өйҙә ултыраһың. Һиндәй саҡта мин күбәләктәй осоп-ҡунып йөрөй торғайным әле.

-- Эй әсәй, быны кейеп Парижға барайыммы һуң?

-- Бына һиңә кәрәкһә! Киноға бар, театрға бар. Тиңдәштәреңде осрат. Барыр ер бөткәнме ни бынауы заманда?

Фәхерниса, әсәһенең күңелен ҡайтармаҫ өсөн генә, яһанып урамға сыҡты. Эшләпәгә ысынлап та бөтә ғаләм таң ҡала кеүек ине. Яңы асылған культура һарайында йәштәрҙең классиак бейеү кисәләре барғанын афишаларҙан белеп, шунда аҙыраҡ тулғанып алырға булды.

Зал түрендә тынлы оркестр шаңғыртып вальс һыҙҙыра, көҙгөләй ялтыр иҙән буйлап аллы-гөллө кейенгән йәш-елкән бәүелә. Фәхерниса таныш ҡыҙҙарын осратырға итеп туҡталып торған арала, ике яңағынан оҙон бакенбардалар һәлендергән ерән сәсле бер фырт егет дуғалай бөгөлөп уға тәҡдим яһаны ла әләктереп тә алды, елпелдәүек йәнле өйөрмә ҡосағына кереп тә юйылдылар. Фәхерниса, бер-нисә минутҡа бар донъяһын онотоп, Штраустың сихри сыңына сумды, ысынбарлығын томалаған болот ҡосағында йөҙҙө. Һуңға табан ғына ҡыҙҙы партнерының һағыҙҙай һыланыуы, теремек ҡулының саманан тыш биленән түбән шыуышыуы маҙаһыҙлай башланы. Эйелеп һүҙ ҡушҡан булып, күкрәгенә “иҫләмәҫтән” түше менән ҡағылыуы иһә сығырҙан сығарҙы, партияның тамамланыуын саҡ көтөп алды. Фырт егеттең йәнә дуғалай бөгөлөп рәхмәт әйтеүен иғтибарламай, арыныу яйын ҡараны. Шул саҡ уны таныш тауыш һиҫкәндерҙе:

-- Аб-ба-а, кемде күрәм! Һылыуҙарҙың һылыуҡайы, һинме был?!

Көньяҡ ҡояшына янып ҡарайған, шөйлә ҡалынайып, яурындары яҫылана төшкән Ренард ике күҙен мыҙылдатып йылмайып тора. Бер тешенә саф алтындан көп ҡаптыртып йылтыратҡан, көлгәнендә матур балҡып, йөҙөнә күркәмлек һибә.

-- Фәхернисаҡай-һылыуҡай! Ни ндәйен дә гүзәл һин! Принцесса!

Гәрсә егеттең яңғырауыҡ һүҙҙәр менән шаҡ-ҡатырырға һәүәҫлеген белһә лә, рәхәт булып китте, хатта башы ла әйләнә бирep ҡуйҙы.

-- Һин үҙең дә испан грандына оҡшап ҡайтҡанһың түгелме? – тине.

-- О! Ҡырым яры! Мәңге йәшел кипаристар! Фирүзәләй күм-күк диңгеҙ!

-- Фирүзә күм-күк булмай, -- тине Фирҙәүес, көлөп. – Ул йә ҡаҙ үте һымаҡ сөм-йәшел, йә зәңгәр-йәшел төҫтә була. Бына минең түшемдәге ҡаптырма ташына ҡара.

-- О! Мин шул ҡаптырма ташы ғына булһамсы!

-- Ҡабыр ҙа тешләр инеңме?

-- Уҫалһың! Мин юҡта өлгөргәнһең -- кемдән өйрәндең?

-- Һинән башҡа өйрәтеүсем бармы һуң?

-- Шаярма! Рәхимйән дуҫтан һорарға тура килмәһен!

Бынығына ҡыҙҙың иҫе китмәне, ҡаршы уғын осорҙо:

-- Кипаристар, тигәндән, үҙеңдең Кипарис ҡартыңды ла алып барҙыңмы әллә? Зәңгәр диңгеҙ буйына, тим.

Егет өтөрәйҙе:

-- Ниңә “үҙеңдең”? Ҡайҙан килеп үҙемдеке булһын ул?

-- Бәй, бергә-бергә көн күрәһегеҙ, тиҙәр түгелме? Хатта атайың да тиҙәрме...

-- Һа, шул алкашмы? – Ренард өтөрәйҙе. – Ғәйбәт! Эйе, бер өйҙә торабыҙ, тышта туңып ҡалмаһын тип, ҡыҙғанып ҡына фатирға индерҙем мин уны, ҡыптыр тун берәҙәкте. – Ул баш сайҡап хитланды. -- Һе, “атайың” имеш!.. Һине лә шул ғәйбәт уратып үтмәгән икән, ҡыҙый! – Хатта илар сиккә етеп үпкәләгәндәй ине.

-- Ярар, юҡҡа-барға ҡубынып барма улай. – Фәхерниса үкенә бирелеп ҡуйҙы. – Ишеткәнемде генә әйтәм.

-- Ә һин ундайҙы ишетмә!

-- Бөттө-бөттө!

Уғансы булмай оркестр гөрөлдәне, үпкәләүен онотҡан Ренард ҡыҙҙы мамыҡ киҫәгеләй бөрөп алып, диңгеҙ кеүек айҡалғандар-сайҡалғандар араһынан осортоп алып китте.

Был юлы үҙен болот өҫтөндә йөҙгәндәй хис итте Фәхерниса. Биле тәңгәлендә Ренардтың тарамыштай ҡаты ҡулын, терәлә яҙып йәнәшә генә йөрөгән мыҡты төҙ һынын, әленән-әле алтын тешен балҡытып алсаҡ йылмайыуын, бөтә ғаләм һоҡланып уларға иғтибар итеүен тойоуҙары ниңәлер бик тә, бик тә рәхәт, күңелгә яғымлы ине...

8

Ял көндәре һә тигәнсе ағылып-үтеп тә китте. Ул эшкә сығыр иртәлә тышта сатлама һыуыҡ, тәҙрәне асы ел сиртә. Тоташлай ҡаранан кейенеп алған әсәһе, өнһөҙ-тынһыҙ, сәй яһап эсерҙе, үҙе ултырманы. Ҡыҙының күңелһеҙ генә һемергәнен ҡарап, оҙон ҡара шәүләләй, урамына ҡара бәрхәт бөркәтелгән фото-һүрәт янында баҫып торҙо. Фәхерниса әсәһен шым ғына ҡосаҡлап үбеп, өйҙән сыҡты, керпектәренә йәш төйнәлде. Бөгөн атаһы һыуға батып үлгән көн...

Эш урынына ул, ҡәҙимгесә, барыһынан элек килде. Әллә инде болоҡһоулығын белгәндәй, вахтер апай ишекте үҙе асып индерҙе, бүлмәгәсә эйәреп килде. Шыҡая баҫҡан килеш, ҡыҙҙың һәр бер хәрәкәтен күҙәтте. Ни бары сисенеп өҫтәле янына боролғас ҡына, Фәхерниса уның был сәйер ҡыланышын аңланы: гөл вазаһында, яңы ғына янып һүнгән ҡағыҙ күмере кеүек, ҡара бәрхәт кеүек сөм-ҡара сәскә, тере ҡайғылы бер генә бөртөк сәскә күҙгә бағып тилмереп ултыра имеш. Ни йәһәттәндер вазаны услап алды, күҙ күрмәгән ҡара мөғжизәгә төбәлеп ҡатып ҡалды. Ҡара гөл дә уға, әйтерһең, уны яңы ғына күреп таныған-дай, тажында бер бөртөк кенә көмөш ысыҡ мөлдөрәтеп, иламһырап текләне...

-- Хайран ҡалырһың был донъяға. Ғүмерҙә күҙ күрмәгән ҡара сәскә! Ышанмай, яһалмамы икән әллә, тип, тотоп-тотоп ҡараным... – Баш сайҡап һөйләнде апай. – Нимә, һеңлем, берәй матәмле көнмө әллә?

-- Шулай шул... атайым... – Ултырып һулҡылданы.

-- Ҡасан?

-- Бөгөн теүәл бер йыл тулды... үҙемдең дә тыуған көн... – Үкереп илап ебәрҙе. Апай уның башынан һыйпап, әсәләрсә йыуатты:

-- Тиле, тыуған көндә илайҙармы ни? Ауыр булһа ла, ҡыуан. Йөрәгеңдең һыҙлауын тойған шундай һиҙгер егетең барлығына ҡыуан. Күрәһең бит: таң-иртәнән килеп ҡалдырып китте.

“Ренард, Ренард!” -- Теленә килмәһә лә, ҡыҙ күңелендә шул исем ҡабатланды. Эйе, ул ғына таба ала быны, күҙ күрмәгән сәскәне!

-- Әгәр әйтһәң, ул егетең, моғайын, һинең өсөн ете диңгеҙ аръяғынан күгәрсен һөтө лә табып килтерер! Бына бит ул донъялар ҡайҙа бара!..

Һалҡын һыу йотоп саҡ ҡына тынысланғас, донъяһын онотоу өсөн, Фәхерниса ашҡынып эшкә тотондо. Ләкин бармаҡтарын һыҙлатҡансы төймәләргә баҫыу ҙа, машинканың ҡолаҡ ярып шыҡылдауы ла уны барыбер ғәмле уйҙарынан арсалай алманы. Үс иткәндәй, Ҡояш кеүек балҡып инеп тел сарлап торор кешеһе лә юҡ эргәһендә: өҫкө ҡатта партия йыйылышы бара, Ренард та, Йәмил дә, башҡалар ҙа, моғайын, шунан сыҡмай ултыра. Вазалағы ҡара сәскә уға, әйтерһең, атаһының ҙур ҡара күҙҙәре менән мөлдөрәп баға... Болоҡһоу хистәре заңында Фәхерниса төшкө тәнәфескә сыҡты, биттәрен ялмап алған һалҡынса тышта үҙе йөрөп күнеккән баҡсаға керҙе. Таныш аллеялар буйлап уйға сумып ҡыҙырҙы. Донъя тигәнең ҡышҡылыҡтан һөттәй аҡ, ләкин аҡ ҡар өҫтөн ҡара сәскәләр баҫҡандай ине...

Ахыр сиктә урам аша ашханаға инергә ваҡыт ҡалмағанлығын абайлап, эшенә кире йүгерҙе. Хәрефтәре юйылып бөткән төймәләргә тешегеп баҫа-баҫа, кис еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Иҫкәрткес электр сыңғырлағы тауыш биргәс кенә, һиҫкәнеп, башын ҡалҡытты. Ырғып тороп кейенде лә, вазанан ҡара сәскәне һурып алып, коридорға йәһәтләне. Дөбөр-шатор килеп халыҡ ағыла башлағайны. Фәхерниса тышҡы ишек яғындағы күмәк баштар араһынан Рәхимйәндең таныш күк төлкө бүркен күреп ҡалғандай булды, тик шунда уҡ онотто, сөнки тиле йөрәге уны Ренардтың алсаҡ ауазы килгән яҡҡа тартты, әммә ҡапыл Ренард та күҙҙән юғалды. Вахтер апай тауыш бирep туҡтатты:

-- Ҡайҙа ырғаңдайһың, ут бөрсәһе? Иллә осондоралар ҙа һуң, ҡыҙый, үҙеңде! Бына ҡара: быныһын тыуған көнөң менән ҡотларға тип ҡалдырҙы, кемдән икәнен әйтмә, сюрприз булһын! – тине. – Яҡшы хәбәр еткереүенә ҡыуанып, ҡыҙҙың ҡосағына яңы ғына өҙөлгәндәй ҡупшы-балҡыу гөлләмә һалды. Йәш ҡарҙай ап-аҡ, саф роза сәскәләре ине былар: “Шул, Ренард, Ренард!..” -- Күкрәгенә ҡыҫып тотҡан берҙән-бер ҡараҡайы шул саф аҡлыҡ аҫтында күмелеп ҡалды, танау ярып аңҡыған хуш еҫтәренән ҡыҙҙың башы әйләнде: әлегәсә ошондай ҙа нескәлекле-нәзәкәтле иғтибарға алынғаны юҡ ине!..

Дала еле һымаҡ көйҙөргөс ҡырыҫ тәбиғәтле ине уның атаһы, һәр төрлө шау-шоуҙы, тантаналарҙы бик үк хуплап бармаҫ ине. Тыуған көндө байрам итеүҙе бигерәк тә өнәмәне. “Яҡты донъяға килеүең, әсәйең өсөн ҡаһарманлыҡ булһа ла, һиңә һуҡыр тин дә түгел әле ул. Энә осондай бөжәк тә тыуа донъяға! Бөрө лә ваҡыты еткәс шартлап ярыла! Дөмбөр ҡағырға һиңә иртәрәк әле. Кешемен, тиһәң, ең һыҙғанып тәүҙә илеңә эш күрһәт: үҙең түгел, илең ҡыуанып туйлаһын тыуған көнөңдө!” – ти торғайны. Эй ҡәҙерле атаҡайым! Нимә генә тиһәң дә, күмерҙәй ҡара сәскәле ҡайғым булһаң да, бөгөн ҡыҙыңдың тыуған көнө лә бит әле! Был аҡтан-аҡ сәскәләр – уның тыуған көн билдәһе!..

Тышҡа сыҡҡас Фәхерниса йәнә ләбер секундҡа ғына Рәхимйәндең күмәк баштар араһында ағылып барған күк төлкө бүркен абайланы ла онотто, йүгереп барып, бер ситтәрәк ҡыуаҡ төбөндә һимеҙ һары портфелен тотоп көтөп торған Ренардтың киң күкрәгенә ҡапланды...

9

Һалма кеүек ялбырлаған, ябалаҡлап аҡ ҡар яуған ҡышҡы кистә Кипарис ҡартлы ағас өйгә Ренардтың ҡәҙерле тыуған көнө байрамына барырға йыйындылар. Урам буйындағы тарбаҡай саған ағастары, ҡойма баштары, афиша йәбештермәле күпкәк бағаналар төн сыҡҡансы ҡалын аҡ бүрек кейгән, асфальтҡә йомшаҡ мамыҡ келәм түшәлгән. Фәхернисаның был тантанаға әллә ни аяғы тартмаһа ла, йөрәгендә билдәһеҙ бер хәүеф уҡмашып торһа ла, иптәштәре ҡубынып елкенгәнгә ҡыймай ылыҡты. Йүгереп йөрөп байрам эйәһенә затлы бүләк эҙләште. Көнәлгәре аҡса һалышҡайнылар: һыу аҫтында киноға төшөрә торған ҡиммәтле камера һайланылар. Сағыу ҡумтаны ҡултыҡлап, шау-гөр килеп, бер юлы бер-нисә таксиға тейәлешеп киттеләр. Егеттәрҙең сосораҡтары ни аралалыр “яға аҫтына һалып” та алған: юл буйы шарылдашып, эс бошороп барҙылар. Салон былай ҙа бензин еҫенән бөркөү; Фәхерниса, эргәһендәге мыҡтының ауыҙынан борҡораған хәмер еҫенә тонсоғоп, сөсө шаяртыуҙарынан биҙәрләп, уң яғына әүешә бирҙе – унда даими тыйнаҡ, ипле, аҙ һүҙле комсомол башлығы Йәмил ултыра. Был болоҡһоу ығы-зығыла бер нимә ләбер уйламай, шундай ышаныслы егеттең яурынына баш һалып ҡына бараһы килә ине. Машина һелкеткәне һайын, үҙе ләбелмәй яҡыныраҡ һырышып, башындағы уйҙары менән әүәрә булды. Дөрөҫөн әйткәндә, тәү ҡат барып аяҡ баҫаһы таныш түгел йорт уны алыҫтан уҡ һағалап торғандай ине...

Ихатаға ингәс, яҡшы итеп көрәлгән юлдан кинәнеҫп атланылар. Тәҙрә ҡаршыһындағы күптәргә билдәле кипарис ағасын өшәләкләп, тышын ҡар менән көпләгән суҡай ҡыуыш тәңгәленән үтеп, һары күн тышлыҡлы ишекте тартып асҡас, ҡапыл гөрләп ҡолаҡты ярған шашҡын хисле марш тауышынан шаңҡыбыраҡ ҡалдылар. Стена буйына ике яҡлап хәрбиҙәрсә тигеҙ теҙелгән егет-елкенсәк үкертеп борғо тарта, ярһытып дөмбөр ҡаға, ә Ренардтың һөйөклө әсәһенән ҡалған Мопсик тигән сәүек эт үрһәләнеп ләңкелдәп өрә. Ренард үҙе теҙем башында тороп, сыңғырлауыҡ ҡыңғыраулы “саратский гармунды тартып сыйылдата, гармундың ике ҡолағына һыйыр телеләй һәлендереп тағылған ал яулыҡтарҙың ялпылдауынан үрһәләнеп, сәүек эт Мопсик әсе сәүкелдәй. Ҡунаҡтарҙы ишек төбөндә өнһеҙ баҫтырып ҡуйып, дәртле маршты аҙағына еткереп гөрләттеләр. Алдан килгән – аш өсөн, тигәндәй, төпкө яҡта залда өҫтәл һырып өлгөрөүселәр ҙә торошоп, һерәйеп тыңланылар. Шунан һуң дөйөм ҡуҙғынып сәләмләшеү, шау-шоу китте, бөтәһе ләбе ултырыша башланылар. Ниһайәт, табын түңәрәкләнде.

Мәжлескә күрше-күлән, Ренардтың ишле таныш-белештәре, институтта бергә эшләгән кешеләр саҡырылғайны. Фәхерниса таныҫтарҙан Рәхимйән дә

күренә, танымағандары ла байтаҡ ҡына. Ҡан-ҡыҙыл ауыҙлы осоҡ ҡыҙҙар, оҙон сәсле фырт егеттәр ҙә бар имеш. Кухня яғында аш яраштырыусы алъяпҡыслылар мәш килә. Күбекләнеп ажғырған шампанскийҙы, ялҡынлы телмәр теҙеп, үрә тороп күтәрҙеләр. Береһенән-береһе татлы, илһамиятлы тост әйтешеү ярышы ҡыҙҙы. Был һөнәрҙә бигерәк тә осоҡ ҡыҙҙар, фырт егеттәр ал бирмәне:

-- Ур-ра! Рәсәйҙең тимер юлдарылай оҙоҙ-оҙон ғүмер, хур ҡыҙылай ҡосоп туймаҫлыҡ матур кәләш, Ильичтыҡынан да иплерәк өскөл профессор һаҡалтайы һиңә, Ренард!

-- Кәрәсин туңғансы йәшә!

Телдәр сиселеп, табын түңәрәге умарта күселәй талғын гөжләй башлағас, егеттәрҙең береһе өҫтәл аҫтынан гитара һөйрәп сығарҙы...

Гитара мәҙехтәренән һуң магнитофон таҫмаһы телгә килеп, шашҡын таҡмаҡ тирбәлдерткәс, фырт егеттәр, осоҡ ҡыҙҙар һеперелеп сыҡтылар ҙа ағас өйҙә дер-һелкетеп баҫырға, йыландай борғоланырға керештеләр. Туташтарҙың тумалаҡ тубыҡтары итәк аҫтарын ташлап сығып китерҙәй шат уйнаны. Фәхерниса, ошоға тиклем ауыҙына алғаны булмаһа ла, табынсыларҙың өҙмәй-ҡуймай ҡыҫтауҙарынан йөҙәп, бер-ике йотом шампанский эскәйне, ике бите алланып, ҡолаҡтары шаулап, алйыбыраҡ ултыра. Ҡотороҡ шау-шоуҙан башы уғата әйләнеп, залдан сыҡты, һалҡын һыуға ылығырға теләне. Ләкин туалет бүлмәһен тәмәкесе ир-ат һырып алған – иҫерек ауаздары, шарҡылдап көлөүҙәре, нимәгәлер бәхәсләшеүҙәре яңғырай: әлеге лә баяғы шул “сослоҡ” тураһында бара һүҙ. Сәкештереп эскән тауыштар ҙа ишетелә. Яҙа-йоҙа ҡолағына салынды:

-- Үҙебеҙҙең Ренард өсөн, егеттәр! Ренард – киләсәк кешеһе! Халҡыбыҙҙың киләсәк сағылышы, образы!

-- Ур-ра! Егерме беренсе быуаттың башҡорто тап Ренард һымаҡ буласаҡ!

Ҡыҙарып-бүртенгән ҡунаҡтар берәм-һәрәм алғы бүлмәгә сығып, кейенә башланылар, дөйөм ығы-зығы ҡупты. Бераҙыраҡ ил аяғы һил булыуын көтөңкөрәп торған Фәхернисаны, көтмәгәндә, Ренард кухняға этәреп керетте, унда кеше юҡ ине.

-- Һылыуым! – Шешә һәм бокал тотҡан ҡулдары менән көрмәп ҡосаҡланы. -- Әйҙә, икәүҙән-икәү сәкәштереп йотайыҡ!

-- Ҡуй, ебәр, ярамай. Былай ҙа башым әйләнә, -- тине Фәхерниса.

-- Тукта, улайһа мин һиңә кофе бешереп бирәйем. – Бокалын һәм шешәһен өҫтәлгә ҡуйҙы, ҡыҙҙы ултырғыҫҡа ултыртты. – Айн момент, күҙ асып-йомғансы!

Фәхерниса, өҫтәлгә таянып, башын беләктәренә һалып, күҙҙәрен йомдо. Шул арала атаһы мәрхүм күҙ алдына килеп баҫты, таныш тауышы, һүҙҙәре ишетелде:

-- Ҡаҡҡылап-һуҡҡыламаһаң, кешелек тоҡомо аҙа...

Ниңә әле ошо мәлдә тәғәйен шул һүҙҙәре хәтерләнде?..

-- Оп-лә! Бынамын тигән ҡара кофе! Бразилдарың да бының ишене эсмәйҙер!

Фәхерниса башын ҡалҡытты. Ҡыҙҙарҙың һушын китәрерлек һомғол буйлы Ренард, маңлайы Айҙай балҡып, бер ҡулына – хуш еҫен аңҡытып боҫланған кофеле сынаяҡ, икенсеһенә шарап тулы бокал тотоп тора ине.

-- Кофе генә булһа ла, минең менән сәкәштереп эс инде.

-- Уф, ҡалай әсе! – Кофе тигәне телен өтөп алды.

-- Ысын ҡара кофе шулай була ул, Ҡырым кофейняларында өйрәндем. Эс, бөтөргәнсе эс, башың шунда уҡ төҙәлер, еңеләйеп китер.

Тик баш тигәнең, үс иткәндәй, кофенән һуң уғата ныҡ әйләнде. Ренард, көлөп, уны ҡосаҡлап алды, кушеткаға ауҙарҙы...

-- Ренард, ебәр! Ҡотҡарығыҙ! – Ысҡынырға итеп тулап ҡысҡырҙы ҡыҙ. Ишек шаран асылды, кемдер инде -- күҙҙәре шарҙай кирелгән Рәхимйән ине. Өҫтәлдәге шешәне һелтәп осорҙо, Фәхерниса алдындағы сынаяҡты еҫкәп ҡараны:

-- Оятһыҙ! Кофегә коньяк болғатып эсерҙеңме? – Ренардты һуғып йыҡты. Ҡыҙҙар сырылдашҡан ыңғайға гитарасы менән борғосо пәйҙә булды, баҙап ҡалған Рәхимйәнде, ике беләгенән маҡып, тышҡа һөйрәнеләр. Рәхимйән, артына боролоп ҡарап, күҙлекһеҙ күҙҙәре менән ҡыҙҙы эҙләне:

-- Фәхерниса... ғәфү ит мине... шулай килеп сыҡты...

-- Кит-кит, күҙемә күренмә! – тине Фәхерниса, танауынан ҡан борҡорап тороп килгән Ренардҡа ярҙамға ташланып...

Табын түңәрәге таралғайны инде, бер килке “оҙон ғүмерле”ләр генә өҫтәл башына өйөмәкләшкән дә юлаяғына һемерә. Йыуынып-таҙарынып сыҡҡан табын хужаһы уларҙы тиҙләтеп оҙатырға маташа. Тап шул мәлдә, көтмәгәндә, зал яғынан арҡылы диван менән кәртәләп ҡуйылған төпкө бүлмәнең ишеге шартлап асылды ла, ых-бых килеп, диванды аша төшөп, бөтәһенә таныш Кипарис ҡарт, онға батҡан тараҡандай, сал мыйыҡтарын һәлендереп килеп сыҡты:

-- Улым, ул ғынам, ҡотло булһын тыуған көнөң!

-- Урра, аттракцион! – Ҡыуанышып ҡул сапты, урындарына кире-ҡабат төпләнеп, юлаяғы һөйөүселәр. Әммә Ренардты был “номер” оло хәүефкә һалды. Йөҙөнә ҡалҡҡан буҙыр-буҙыр тимгелдәрен баҫырға көсө етмәй, тештәрен шыҡырлатты; ҡаш менән күҙ араһында өҫтәл башына йәпләшеп алып юлаяҡсылар ҡулынан “штрафной”ҙы күндәм һемергән аҡ мыйыҡлы һөмһөҙйәндең нәүбәттәге бокалын һуғып осорҙо:

-- Кипарис! Кем рөхсәт итте һиңә был яҡҡа сығырға?!

-- Үҙем, улым, үҙем... тыуған көнөңдө байрам итергә, улым...

-- Алҡаш! Ҡайҙан килеп мин һинең улың булайым? Әсәйемдең улы мин! – Һөмһөҙйәнде яғаһынан бөрөп алып табындан быраҡтырҙы. Ә уныһы иҙәндә аунап ятҡаны килеш илай-илай ялбарҙы:

-- Улым шул, улым! Кешеләр, ишетегеҙ: һин – минең улым! Рәшиҙәкәйем, әсәйең, минең никахлы хәләл ефетем ине бит!

-- Ана Мопсик һинең улың! Ҡарт алаша! – Яғаһынан йолҡа тартып ҡалҡытты ла, елтерәтеп килтереп, диван аша асыҡ ишектән кире теге бүлмә төпкөлөнә быраҡтырҙы, ишекте шартлатып япты. – Йәмәғәт, берәҙәктең һүҙен ысынға алмағыҙ! Туңып ҡалмаһын тип ҡыҙғанып кереткән фатирсым ғына ул минең!

Әммә ағай-эне уның һүҙҙәрен һанламаны.

-- “Улым” ти бит һуң?!. – тине лә бер тамам булып алғаны, алдындағы винегретлы тәрилкәгә морон төртөп, үкереп иланы. Ренард залды яңғыратып ҡысҡырҙы:

-- Һантый, башҡорт телен белергә кәрәк: “улым” тип бит башҡа кешенең улына ла әйтәләр. Ә Кипарис миңә ят өйҙәш кенә, уның кемлеге үҙегеҙгә лә мәғлүм!

Мәжлес тамам боҙолдо, иң әрһеҙйәндәр ҙә ҡубынды. Һуңғыларын ашыҡ-бошоҡ оҙатып, өйҙә бер кем дә ҡалмауына инанғас, Ренард, диванды ситкә шылдырып, төпкө бүлмәгә керҙе, ҡартты яғаһынан бөрөп, елтерәтеп, зал һәм алғы өй аша тышҡы ишеккә үк еткерҙе лә, этеп сығарып, ихаталағы көрпәк ҡарға тәкмәстерҙе. Эстән келәне элеп, өҫтәлдәге оҙон шешә боғаҙынан бер тына ғорҡолдатҡас, утты һүндереп диванға әүшәрелде, башы зыңҡып әйләнде.

-- Уй-уй улым, туңам бит, ас! – Кипарис ҡарт тыштан ишек дөбөрләтте, ялыныслы тауышы Мопсик ләңкелдәүенә аралашты.

-- Туңмаҫһың, алкашка бер ни ҙә булмай. Ана, Мопсиктан һора!

-- Уй-уй улым, тамам ҡатам бит инде... Тунымды бир, исмаһам!

-- Бер алкаш та ҡатмаған әле, һиңә лә буҡ та булмаҫ!

Дөбөрләтеү һүрелгәндән-һүрелде, ахырҙа ул Ренардтың хәмерле йоҡо томаны эсендә ҡалып тынды.

Иртүк башы сатнап уянған Ренардтың иҫенә кисәгеһе төшөп, ҡурҡышынан ҡысҡырып үк ебәрҙе, яланаяҡ килеш тышҡа атлыҡты, ләкин ихатала төн сыҡҡансы ҡалын булып ҡар яуған, ап-аҡ ҡарҙа ҡартлас та, эҙҙәре лә юҡ ине. Күршеләрҙең берәйһенә кереп һыйынғандыр ҡарт алаша, тип уйлап, бераҙ тынысланып, кире инде, сәңгегән аяҡтарына йылы ойоҡбашын кейеп, оҙон муйынлы шешәнән йәнә һемереп, урынына ауҙы.

10

Йәмил менән Фәхерниса ҡунаҡтарҙың береһенең машинаһына әләгеп китте. Улар ҙа, машина йөрөтөүсенең ҡатыны ла шаҡтай ҡыҙышҡан, тик хужа үҙе генә ап-айныҡ ине. Машина ҡуҙғалыу менән, әйтерһең, бая ғына ҡунаҡ өйөндә бер нимә лә булмағандай, ҡысҡырып йырлап ебәрҙеләр. Йөрөтөүсе, ҡунаҡтарҙың фиғеленә буйһоноп, теләгәндәренең барыһын үтәне: йә шәберәк, йә яйыраҡ йөрөттө, йә туҡтатып торҙо. Был төн уның үҙенә лә, эсмәһә лә, моғайын, иҫерек тойолғандыр.

Йыр һүрелеп туҡтауға, Йәмил, Фәхернисаның яурынына ҡулын һалып, алъюҫыҡтан Рәхимйәнде маҡтай башланы, саҡ ҡына ҡыҙғанып та алды. Уны йәберләүселәргә әсе нәфрәтен белдерҙе. Уға машина хужаһының ҡатыны ла ҡушылды.

-- Ҡуй-ҡуй, ишеттермәгеҙ шуның исемен! Ишеткем килмәй! – тине Фәхерниса, Рәхимйәндең күҙлекһеҙ килеш һөйрәлеп сығып барыуын, Ренардың ҡаны борҡораған ауыҙ-моронон күҙ алдынан кисереп. Йәмил турһайҙы,

өндәшмәй бара башланы. Бераҙыраҡ юл үткәс, башын Фәхернисаның башына терәп, инәлде:

-- Фәхерниса, һин мине яратмайһың. Фәхерниса, ниңә һин мине яратмайһың? – Егет күңеле тулышып, хатта мырш-мырш һулҡылдап та алды.

-- Яратамсы, ниңә яратмаһын, ти? – тигән булды бынығы, көлөп. Теге шөкәтһеҙ хәлдәрҙе һаман онота алмай, йөрәге өтөлөп, өҙгөләнеп килә ине, был һүҙҙәрҙән һуң саҡ ҡына еңеллек тойҙо.

-- Беләм, һин минең кеүектәрҙе яратмайһың... һин теге кеүектәрҙе генә яратаһың... Теләйһеңме, үҙеңә ете диңгеҙ аръяғынан вахтер апай әйткән күгәрсен һөтөн апҡайтам? Теләйһеңме... әй, шофер, туҡтат!... теләйһеңме, анауы ҡарға ояһын төртөп ауҙарам?

-- Эйе, теләйһеңме? Әй, шофер, туҡтат! -- тип ҡушылды машина хужаһының күңелсәкләнгән ҡатыны. Йәмил менән ул уртаҡ көй, тел табып, үҙ кешеләр булышып килә ине. Машина, кире артҡа сигенеп, баяғы тәңгәлгә етәрәк туҡтаны.

-- Фәхерниса, теләйһеңме?

-- Эйе, теләйһеңме? – тине машина хужаһының ҡатыны.

-- Ҡуй, Йәмил, -- тине Фәхерниса.

-- Ҡуймайым, төртөп ауҙарам! – Йәмил машинанан сыҡты. – Ату һин мине яратмайһың!..

-- Эйе, ату һин уны яратмайһың! – тине машина хужаһының ҡатыны.

-- Ҡуйығыҙ, юҡ менән булмағыҙ! – тине, көлөп, ире.

-- Ҡуймайбыҙ!

-- Эйе, ҡуймайбыҙ!

Йәмил, көрпәк ҡарға тубыҡтан бата-сума, юл сатындағы ханзамандан ҡалған пост будкаһын уратып үтеп, ни эшләргә белмәй, ҡулдарын артҡа ҡуйып туҡтаны, иҫке ҡоролманы яурыны менән ҡуҙғатып ҡараны. Тишек ҡыйығы аҫтынан бер көтөү күгәрсен пырылдап осто. Тик будка, әллә ҡасан үҙ бурысын үтәп бөтөп, күгәрсендәр хөкөмөнә тапшырылған булһа ла, ауырға теләмәне. Йәмил, башын эйеп, байтаҡ уйланып торғас, кире ҡайтты.

-- Шофер, әйҙә, трогай!

-- Шофер, әйҙә, трогай! – тине машина хужаһының ҡатыны. Тынып ҡалған урам буйлап, аҡ ҡар диңгеҙе эсенән, яңғыҙ мотор тауышы гөрөлдәне. Ҡайһылыр урамдарҙы уҙып, бер сатҡа боролғас, машина ҡапыл туҡтаны. Пассажирҙар, арыуҙары үтеп, йоҡомһорап киләләр ине, һиҫкәнеп күҙҙәрен астылар.

-- Ни булды тағы?

-- Эйе, ни булды тағы?

-- Ауҙы! – тине машина йөрөтөүсе, моторҙы һүндереп.

-- Нимә ауҙы? Будка ауҙымы?

-- Атағыҙҙың башы! Олон ауҙы!

-- Олон? Ҡайҙа?

-- Күҙ алдында.

-- Һин! Эсмәһәң дә, әллә һаташа башланыңмы? – тине, иҫнәп, ҡатыны.

-- Һаташмайым. Күҙ алдында Ренард Сәйфелмөлөкович Асылғужин тигән аҫыл олон ауҙы.

-- Философ! Бәхетемә ҡаршы, ярай әле эсмәйһең. Юҡһа фантазияң менән башымды ҡатырып бөтөр инең!

Ләкин ире һүрелергә теләмәне:

-- Тамырүҙәге серек булған икән ҡәһәрҙең. Тыштан мөһәбәт күренһә лә. Һай Ренард Сәйфелмөлөкович, Ренард Сәйфелмөлөкович...

-- Ҡуйсәле, ниңә шуны күп тизыйһың? Ауған икән – ауған, яңыһын торғоҙорҙар! – тине ҡатыны.

-- Йәтеш булған! – тине ойой башлаған Йәмил, кинәт башын ҡалҡытып.

-- Эйе, йәтеш булған!

-- Йәтеш булмаған шул! – Ғыжылдатып моторҙы тоҡандырҙы. – Тышҡы килбәтенә һоҡланып, мыҡты имән, тип йөрөгәнбеҙ, ә ул... ана ниндәй аттракцион күрһәтте...

Үҙәк урам көрәлеп өлгөргәйне – тәгәрмәстәр йәһәтерәк йүгерҙе. Йәмил, өндәшмәй, ҡалғып барҙы-барҙы ла, Фәхернисаның иңенә башын терәп, мышнап йоҡоға талды...

11

Шул аяныслы кисәнән һуң нисәмә көндәр үтеп тә китте инде. Яңы йыл яҡынлашты. Институттыҡылар, байрам алды ығы-зығыһына күмелеп, йүгереп йөрөп табын күрке хәстәрләй башланылар. Алмаш-тилмәш магазиндарға саптылар. Йәмғеһенең һөйләгәне шул бер йәшел шыршы ла шампанский ғына булды. Юҡтан ғына ла ҡысҡырып көлдөләр, һүҙ осо сыҡһа-сыҡмаһа ла, тырышып-тырмашып, бер-береһен төрттөрөп мәҙәкләштеләр. Ләкин теге шөкәтһеҙ кисә хаҡында – ләм-мим. Бөтәһе лә күрмәмешкә-белмәмешкә һалыша, әйтерһең, үҙ-ара һүҙ ҡуйышып, йәнде иҙеп ятҡан ташты хәтерҙән алып ташларға, яҡынлап килгән байрам шау-шоуы аҫтында ҡалдырырға теләйҙәр. Икеле был тормош ҡыҙға йәнһеҙ маскарад төҫөн алды, тонсоҡторғос шул битлекте йыртып ҡысҡырып ебәреү, ялған йолаларҙы өҙә һуғыу теләге көсәйә ине.

Бына бөгөн дә таң-иртәнән шул хис тертләтеп уятты, аҡ мендәргә ҡапланып ятып йәне талғансы иларға мәжбүр итте. Шул хис менән ул, сәй янында әсәһен хафаға һалып, бер нимә лә әйтмәйенсә тороп йүгерҙе, көндәлек юлының бер өлөшөн үтеп, ҡышҡы тын баҡсаның һалҡын эскәмйәһендә иҫерек ир ҙә ҡатын ғына ғәмһеҙ турғайҙарҙай сөркөлдәшеп ултырған ҡарлы аллеяларына килеп инде. Ике янға ҡайшарылған ҡар тауҙары, әйтерһең, үткәндәрҙе күҙ алдында ҡабат-ҡабат тергеҙеп, таныш-белештәре йөҙөн, көслө микроскоп аҫтына ҡуйғандай, ҙур миҡдарҙа төҫмөрләтеп, яңы күҙ менән ҡарарға, барларға ярҙам итте...

“Их тормош-тормош!” тип белмәй әйтмәгәндәр икән”, тип уйланы Фәхерниса. Әле ҡасан ғына яңы эш урыны, институт, зәңгәр томандар артында көтөп торған серле киләсәк – барыһы ла, барыһы ла сағыу йәйғор күпер аша һыҙатланмыш гүзәл билдәһеҙлек булып күренә ине, хәҙер инде ул да үтелгән

тормошҡа, йөрәк башын семерләткән иҫтәлеккә әйләнде. Бөгөнгө Фәхерниса – кисәге Фәхерниса түгел, әйтерһең, Ер ҙә инде кисәге түгел ине.

Ҡала кешеһенең ҡанына һеңгән ваҡыт тойомлауынан һиҫкәнеп, хәтирәләр ҡосағынан арынды, сәғәтенә күҙ һирпене. Уның ошо эске тойомлауын дөрөҫләгәндәй, иртәнге сасҡау һауа ҡапыл тирбәлеп шыңғырланы: Промышленность йорто манараһына һуңғы йылдарҙа ҡуйылған курантлы сәғәт туғыҙ булырға ун биш минут ҡалғанын иҫкәртеп һуҡты. Баҡса ситен ҡайыған тротуарҙа, таҡыр урамда юл хәрәкәте күҙгә күренеп ыраны: әҙәм балалары эшкә ашыға.

Фәхерниса, теге ике иҫерек бәндә йоҡа ғына эҙ сыбарлап киткән ҡарлы һуҡмаҡтан боролоп, ҙур юлға төштө, яурындары тирбәлгән халыҡ ағымында институтҡа ыңғайланы. Хәҙер ул үҙе лә ҙур ташҡынға эләккән япраҡ киҫәгеләй бөтөрөлөп, йомарланып, үҙен белештермәй ярһып-сәсәп, тигәндәй, саба: тиҙерәк, тиҙерәк барып етергә, йәһәтләп эшкә бирелергә лә эске донъяны оноторға! Бина алдындағы майҙансыҡҡа еткәс кенә, ҡапыл һиҫкәнеп туҡтаны, тирә-яғын барланы. Әүәлгенән йөрәк осон семетеп алғыс иҫтәлек кенә ҡалған: ҡар тигәнең ҡәҙимгесә ялт иттереп көрәп ҡуйылмаған, табан аҫтарына шыҡырлатып ыуылдырыҡтай эре ҡыҙыл ҡом һибелмәгән... Шул эштәрҙе таң тишегенән башҡарыусан һәленке сал мыйыҡлы ҡарт Кипарис, көндәгесә көрәгенә таянып, Фәхерниса ултырған бүлмә тәҙрәһе төбөндәге оҙон шыршы төбөндә һерәйеп тормай, бормас ҡапҡаслы ялпаҡ шешәһенән, тамағын ғорҡолдатып, күҙҙәрен йомоп һемермәй, шунан һуң был бар донъяһын онотоп, алыҫ-алыҫ тарафтарҙағы зәңгәр диңгеҙ, сәскә атҡан мәңге йәшел кипаристар тураһындағы моңло шиғырын һамаҡламай. Ул юҡ, ул юҡ – бөтә нәмә тик шуны хәтерләтә...

Тормоштоң бер сәйер йомғағы булып күренә ине был Кипарис ҡарт тигәндәре Фәхернисаға. Гелән тышта, нисәмә генә ҡарама, ҡыштыр-ҡыштыр эш өҫтөндә. Шымарып ялтыраған көрәк һабы, һепертке һабы төшмәй ике ҡулынан. Ҡултыҡ аҫтына ҡара икмәк, тоҙло балыҡ ҡыҫтырып ҡайтып килгән саҡтарында ғына уларҙан буш күрәһең.

Ҡулы еткән тирә-яҡты ырҙын табағылай ҡырсып, һепереп бөткәс, урам аша сығып, мөйөштәге үҙенең һөйөклө аҙыҡ кибетенә керә. Шунда, арыш икмәге аңҡып торған прилавка аҫтында, граждандар һуғышынан ҡалған көмөш стаканы бар. Теүәл ике йөҙ илле грамм – ярты литрлы араҡының ярты һын һыйҙырышлы. Ғүмер-баҡый ҡартты танып белгән һатыусы ҡортҡа, кергәне генә һайын, көмөш стаканды мөлдөрәмә тултырып бирә, ҡарт уны ҡатып ҡалсайған тарбаҡ бармаҡтары араһында ҡыҫып тота. Мөйөшкә борола ла, стаканды бер һелтәнеүҙә тамағына түңкәреп, күндәй йылтыраған ҡыптыр тун еңенә ауыҙын һөртә. Ҡуйынынан һурып алып, бормас ҡапҡаслы йәлпәгенә тултырта. Өндәшмәй, стаканды ҡалдырып, сығып китә.

Көрәгенә, йә һепертке һеһенә таянып, йәне һөйгән шул урынға – мәңге йәшел кипаристы хәтерләтмеш шыршы аҫтына баҫа. Монументтай шыҡырайып, күҙҙәрен йомоп, уйға тала. Уҙғынсыларҙың туң асфальтҡә шаҡ-шоҡ баҫып үтеүҙәрен дә, ҡысҡырып көлөүҙәрен дә ишетмәй ул. Шул көйөнсә, әйтерһең, ғүмере буйына шыҡайып-ҡатып торған. Фәҡәт һирәк-һаяҡ ҡына, сәғәтенә бер

тигәндә генә, ҡапыл башын ҡалҡыта ла, һис кем көтмәгән моң менән баяғы сәйер шиғыр юлын ҡушарлатып ҡабатлай:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...

Тауышы ҡырт-өҙөлә, күҙҙәренән ике тамсы эре йәш бөртөгө бытлығып сыға; асы көмөш бөртөктәр һорғолтланып юлаҡланған бит сырыштарынан йүгереп үтеп, ҡарҙай аҡ сал мыйығтары осона тәгәрләп төшә. Шул шиғыр юлын ғына буҫлығып әйтә лә ҡарт, әүәлге хәленә ҡайта – тәрән уйына сума. Әллә ҡасан йәшнәп-шаулап үтеп киткән, сәскәһе һулыған йәшлек яҙына өндәүеме был шиғыр, йәиһә башҡа изге бер нәмәгәме, һәм алыҫтағы Ҡара диңгеҙ ярҙарында үҫә торған серле кипаристар сәскә атамы ул ысынында, әллә юҡмы, атҡанда ла уны шулай моңло шиғыр юлдарына һалырлыҡ күркәм атамы – бер кем дә белмәй быны. Фәҡәт шөңгөр шиғыр юлы, һамаҡлаған сағындағы ҡарттың тын һулҡылдауы, күҙҙәренән бытлығҡан ике йәш бөртөгө, аңлайышһыҙ үҙе бер донъя булып, кешеләрҙе тетрәтә. Күптәренең күҙ алдына сихриәтле зәңгәр диңгеҙ, салт ҡояшлы йәшел ярҙар, тәрән моңло кипаристар килеп баҫа ла уйға һала. Һәм ул серле кипаристар ниңәлер тап ошо олпат Кипарис ҡарт ҡиәфәтендә төҫмөрләнә...

Фәхерниса эш бүлмәһенә көндәгесә кешенән элек кереп ултырҙы. Яҙыу машинкаһының сепрәк көбөн асып ебәреүгә, яңы билдәһеҙ хис ялманы ҡыҙҙы: үҙе юҡта барабанға ҡыҫтырылған ҡулъяҙмала: **“Ренард Асылғужин**. *Автореферат*. Быяла ҡалпаҡ аҫтында тотолған тәлмәрйендең тышҡы шарттарға физиологик реакцияларында психологик функцияның кәүҙәләнеше” -- тип уҡыны ул; психиатор-тәжрибәсенең үткер бысағы аҫтында тереләтә ботарланған, йәки утҡа ырғытылған тәлмәрйендәр күҙ алдына килеп, өшөмтәл ҡалтыранды: ***сос уҙаман*** *өлгөргән!* Бүтән саҡта Ренардтың был сослоғо һәм өлгөрлөгө яғымлы йылмайыу ғына уятыр ине...

Тешен ҡыҫып, машинканы шығылдатырға тотондо. Көллө зиһене ҡалын быяла ҡалпаҡ аҫтына бикләнгән, “бөйөк фән мәнфәғәте хаҡына” ыҫпай һәм сос егет Ренард ҡулы аша тәненә электр тогы алған, осло әнә тәьҫирен кисергән, скальпелдән киҫкеләнгән йәшел һыртлы тәлмәрйендәр тирәһендә уралды. Ә асылда ҡыҙҙың йөрәк иғтибары телефон аппаратында, ул унан сикһеҙ түҙемһеҙләнеп көтә, нимәлер өмөт итә... Аппарат бер-нисә тапҡыр зыңғырланы, ҡыҙ, пружиналай атлығып, трубкаға йәбеште, ләкин көткән таныш тауыш килмәне...

“Тәжрибә барышында быяла ҡалпаҡ аҫтындағы тәлмәрйендең ҡылыҡтары шуны күрһәтте, -- тип текстың хәрефтәрен берәм-берәм аҡ ҡағыҙға шаҡырайтты Фәхерниса, -- ул, нерв системаһына яһалма тәьҫир арҡаһында, үҙенә тейешле тәбиғи яҙғы мөхиттә булмаһа ла, тап яҙғыса сарылдап йырлап ебәрҙе. Шулай итеп, *реципиент* битәбиғи тәьҫирәтте бик тәбиғи тәьҫорат итеп ҡабул ҡылды...”

Фәхерниса, төймәләргә баҫыуҙан ҡапыл туҡтап, башын өҫтәлгә һалды, күҙ алдары ҡараңғыланды. Һуңғы һөйләм, мыҫкыл һымаҡ яңғырашлы шиғыр итеп төҙөлгән эске рифмаһы, ритмы менән, сүкешләп тиҙығандай, мейене интектерҙе:

“Шулай итеп, *реципиент* битәбиғи тәьсирәтте бик тәбиғи тәьсорат итеп ҡабул ҡылды...” – Һыҙланып ыңғыраны: әҙәм балаларын да тап шундай реципиент яһап, яҙһыҙ йырлатырға итә түгелме?..

Телефондың шылтырауы уға йән өргәндәй булды. Теге шомло тыуған көн байрамлы кисәнән һуң да ике көн буйы телефон шулай һулығып шылтырағайны. Ғәйепле өндәшкән таныш тауыш килгәйне. Фәхерниса, трубканы алғаны, уны ишеткәне һайын, ҡунаҡ табынында табын хужаһын һуғып йығҡан һөмһөҙйән күҙ алдына килеп, сикһеҙ нәфрәтләнеп, бер һүҙ менән өҙгәйне. Шунан һуң ул өндәшмәне, ҡайҙалыр тәрән упҡынға инеп сумғандай булды, юғалды. Ҡыҙ, иңендәге тирмән ташы төшкәндәй, еңел һулап ҡуйғайны. Ә бына хәҙер шылтыратыусының ул түгеллегенән әсенеп, уны ер аҫтынан тартып сығарырҙай өҙгөләнә, теге остағы билдәһеҙ затҡа Рәхимйән тип өндәшә...

-- Эйе, химигыбыҙ унда эшләмәй хәҙер...

Иларҙай буҫлыҡҡан Фәхерниса салт боролоп ҡараны – Йәмил ине.

-- Ҡайҙа, ни булған? – тине саҡ тын алып.

-- Башҡа ҡалаға күскән, тиҙәр. Ренард дуҫы өҫтөнән ошаҡ яҙған бит... байрам табынымда ғауға ҡуптарҙы, үҙемде туҡманы, тип... Эштәре хана уның...

-- Бахырсыҡҡынам! – Вахтер апай инеп тыңлап тора имеш. – Ҡайһындай ҙа инсафлы, мөләйем егет ине! Уҡымышлы, ғалим әҙәм булһа ла, үҙе шундайын-шундайын оялсан ине. Йәй буйына ҡосаҡлап сәскә килтерҙе. Тик шуны ла үҙ ҡулынан тапшырырға ояла: Фәхерниса ҡыҙымдың яҙыу өҫтәленә йә Ренард Сәйфелмөлөкович аша һалдырта, йә минән бирҙертә ине...

-- Ә, нимә?! – Фәхернисаның күҙҙәре аҡайҙы. -- Уф! – Ҡыҙ ҡуш усы менән йөҙөн ҡапланы. – Ниндәй оят! Мин ул гөлдәр Ренардтан тип белдем бит...

-- Алырһың ул бөтмөштән! Раштыуала ҡар бирмәҫ *сосйән* бит ул! Улмы ул...

Вахтер апаһының һәр әйткәне йөрәгенә энә булып ҡаҙалған Фәхерниса, түҙә алмай, бүлмәнән сығып йүгерҙе...

12

Оло ғауғалы тамамланмыш тыуған көн табынынан һуң бер-бер артлы ялғанған ял көндәре дауамында тамам айнып, баш-күҙ алып, әүәлге ыҫпай егет хәленә ҡайтҡайны инде Ренард. Шул төндән һуң күрше-күләндең береһендә лә Кипарис ҡартты күргән-белгән булмағас, вокзалдарҙы ҡыҙырып сыҡты, ҡала үлекханаһына шылтыратып һорашты, береһендә лә ундай юҡ. Тешен ҡыҫып йәнә лә аҙна-ун көн кисергәс, башын баҫып уйланып ултырҙы ла, олаҡмыштың ҡыптыр туны менән ҡуян бүреген, баллон калушлы быймаларын ил аяғы һил мөҙҙәттә зират ҡоймаһы буйындағы сүплеккә илтеп яҡты. Бер-нисә тәүлек үтеп, шуларҙан көл ҡалыуына инанғас, тынысланып, милиция бүлегенә шылтыратты – кейенеп сығып киткән еренән алкаштың ҡайҙалыр олаҡҡанын һәм, моғайын, шешәләштәрендә һамҫып ятыуын хәбәр ҡылып, бындай хәлдәр элек тә йыш ҡабатлана торғайны, һеҙҙең ҡулға тарыманымы шул ахмаҡ, тип белеште.

Эшендә лә ошолай тип аңлатҡас, бығаса прогул яһамаған Кипаристың көтөлмәгән ҡылығына аптырай биреп ҡуйһалар ҙа, айнып ҡайтып шөғөлөнә керешеүен көтөргә, шуға тиклем ваҡытлыса кеше яллап торорға килештеләр.

Ренард әүәлгесә көндәлек эшенә елеп бара, әүәлгесә алсаҡланып һөйләшә, коридор яңғыратып көлә, әммә йөрәк тигәнең урынында түгел, нимәнелер шомланып көтә ине. Өҫтәүенә... өйҙә тап Ренардтың бүлмәһенең тәҙрә тәңгәлендә генә күҙ көйөгө: иҫке толь, ҡар менән көпләп суҡайтылған кипарислы ҡыуыш Ренардтан яҡты донъяны ҡаплап, эсте бошороп тора. Шул ғына етмәгәндәй, ләңкелдәк Мопсы ла бит тәҙрә төбөнә ырғып менә лә шунда төбәлеп өрә, хатта муйынсаҡлап хәжәтен үтәтергә сығарғанында ла, шыңшый-шыңшый, шул яҡҡа тартылып йонсота...

Ренард ошо Кипарис ҡарт ултыртҡан, кипарис тигән хәйерһеҙ ағастан кисекмәйенсә арынырға теләне. Зиратта ҡәбер ҡаҙыу шөғөлөндәге атаһының элекке таныштарын – мәңге иҫерек ике типты яллап килтереп, төшөмлө эшкә йәһәтерәк керешергә ҡыҫтаны, тик тегеләре үтә яй ҡыбырланы. Берене, ҡар аҫтынан саҡ-саҡ ҡына төҫмөрләнгән эҙ буйынса кипарислы ҡыуыштың артына үтеп, ҡыуыш төбөндә яңыраҡ ҡыш бауырында өңөлгән, әҙәм башы һыйырлыҡ тишектән үрелеп-үрелеп ҡараны, тик ҡараңғыла бер ни ҙә күренмәне. Ренардтың ашыҡтырып мыжыуына тамсы ла иғтибар итмәй, шешә боғаҙынан уртлап берәрҙе йотҡастары ғына, ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып, суҡалтайҙы һүтергә керештеләр. Тирә-яҡҡа ҡар бураны туҙҙырып, ҡар аҫтынан сыҡҡан толь ярпыларын бираҡтырып, ҡыуыш һайғауҙарын тартып ауҙарҙылар һәм... көтөлмәгән хәлдән ҡойолоп уҡ төштөләр: яланаяҡ-яланбаш, йоҡа эске күлдәксән генә Кипарис ҡарт үҙенең йәшел эскәмйәһендә кипарис олонон ҡосаҡлап ултырып ҡатҡан...

Милициянан килеп теңкәгә тейҙеләр: ҡайҙа туны, бүреге, тип ныҡынылар. Кейенеп сығып китте, алкашланып сисенеп ташлағандыр, тигәс, әгәр сисенеп ташлаһа, ҡайҙа улар, тип тере йәнде алдылар...

Ҡәбергә төшөргәндә Ренард Кипаристың табутын ҡосаҡлап иланы, зират янындағы “Батыр” кафеһында мул һыйлы хушлашыу табыны ойоштороҙо.

Тәфтишселәрҙең эше оҙаҡҡа һуҙылманы -- әжәле өсөн алкаш үҙе ғәйепле, тип таптылар...

Өфө, 1971.

ТОМБОЙОҠ

I

Спектакль аҙағынан театрҙың артҡы ишек төбө, ғәҙәттәгесә, балға һырыған һағыҙаҡ өйөрө шикелле ала-ҡола кейенгән нәҙек һираҡлы, ялбыр яллы егеттәр, шул уҡ егеттәргә оҡшаш ала-ҡола ҡиәфәтле, тик ни бары ҡаштары аҫтына күгәртеп һөрмә тартҡан, ҡаранан оҙон яһалма керпектәр йәбештергән, шул аҡшайған күҙҙәре менән генә нәҙберек енес икәнлектәрен төҫмөрләткән аҙмыш ҡыҙ-ҡырҡын – балет сәхнәһе йондоҙҙарының саманан тыш мөкиббән киткән алҡышсылары менән туп-тулы ине. Бер-береһен этәрешеп, артистар ҡайтырға сыға торған, ике яндан таш арыҫландар ажырайып һаҡлап ятҡан бейек болдорҙоң тирәһен уратып алғандар ҙа ишектең һәр асылып-ябылыуын ығы-зығылы шау-шоу менән оҙаталар, ҡайберҙәре “үҙҙәренең йондоҙҙары” артынан, ат ҡойроғона тегелгән тегәнәктәй, троллейбус туҡталышынаса күҙҙәрен тызырайтып китәләр.

Прима-балерина Сәғиҙә бер ҡосаҡ сәскә күтәреп күренгәндә был тынғыһыҙ йәмәғәт тап шул ҡайнашып торған мәл ине. Ҡыҙҙың тупһа аша һалған тәүге аҙымы уҡ, әйтерһең, сая ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғатты: тел шартлатып һоҡланыу аралаш күккә һәр төрлө берет, эшләпәләр оса башланы, фотоаппарат затворҙары шытырланы. Ә бер сеп-сей ерән һаҡал баҫҡан, ерән сәсе туҙғаҡбашланған, өҫтәүенә шундай уҡ сеп-сей ерән костюм кейгән мыҡты аҙәм, һыуыр һымаҡ йөнтәҫ тоҡом, иң алғы рәттә ҡарғып тороуы менән дә мөрәхәтһенмәй, яҫы балағын ялпылдатып килеп юлға һуҙылып ятты, ҡыҙҙың томбойоҡтай тынҡыс балтырҙарын ҡосоп алырҙай ымһынып, күҙҙең яуын ҡайтарырҙай ҡайын туҙы һымаҡ ап-аҡ түфлиҙәрҙең эҙен үбеп тилерҙе...

Юҡ, прима-балерина Сәғиҙә бындай сөсөләнеүҙәрҙе күтәрә алмай ине. Сығырҙан сығып борғаланыуҙарҙың береһен дә күрмәгәндәй, кешеләрҙең башы аша ҡарап тыныс атланы; көндәгесә арыған, хыялһыуланған, моңһоу ине ул. Аяҡ табанын яларҙай булып ятып ҡалған баяғы ерән һаҡалтайҙың яҙғы сағыу бөжәк – еңгәсәй төҫлө ҡанһыу-ҡыҙыл күҙҙәре генә күңел офоғонда бер мөҙҙәткә салынды, ҡыҙ хатта һулышын ҡыҫты, туҡтарға итте, әммә шунда уҡ сәйер хисе онотолдо – аяҡтары аҫтында ни бары әлеге мәхлүҡ-бөжәк, ҡыҙыл еңгәсәй генә, әйтерһең, үрмәләп бара ине. Юҡ, беҙ иҫәүән тип һанаған бабаларыбыҙ төптө иҫәүән булмаған – сәнғәт һарайының болдор-тупһаларын ажарлы таш арыҫландар менән һағауыллатып яңылышмаған. Матурлыҡ артҡы ишектән таратылмай, ҡыҙыл еңгәсәй күҙҙәр менән үлсәп-нарыҡлана алмай, Матурлыҡты арыҫландар ҡурсалап һаҡларға тейеш!.. Сәғиҙәнең күҙ алдында әле һаман тере тамаша залы, ундағы ҡуҙҙай янып баҡҡан йөҙәрләгән саф күҙҙәр, илаһилап алҡышлаған илһамлы йөҙҙәр һынлана, тамашасы күкрәгенең ҡәнәғәтләнеп гөрөлдәүе, йөрәкһетеп, ҡолаҡтарында шаулап тора. Ул хатта был йылы хисте, уны илһамдарға сумырып оҙатыусы илаһи көстө таш стена үтә лә һаман артында тоя ине – ҙур сәнғәттең ысын алҡышлауҙары ана ҡайһындай ул! Ә былар, -- Сәғиҙә ян-яғына күҙ һирпеп кенә ошо хаҡта уйланы, -- ә былар – саф алҡыштың йәмһеҙ төпөрәһе генә. Сөнки һәр нәмәнең үҙенең сиге бар, ә сәнғәттең сиген хәтәр аша атлаған, Матурлыҡтың артҡы яғына тексәйеп сыҡҡан тампашасы... себенде хәтенрләтә...

Аңғартмпаҫтан болоҡһотҡан был тойғонан ҡотолорға теләгәндәй, прима-балерина аҙымдарын йышлатты, ҡосаҡлап тотҡан гөлләмәһен күкрәгенә ҡыҫмаҡланы. Ҡуҙҙай дөрләү роза сәскәләре ҡыҙҙың һулышынан ҡуҙрап тоҡана кеүек ине. Араһындағы бары ике дана сәскә -- аҡ томбойоҡ сәскәһе генә йөрәгенең ап-аҡ ҡыҙылығҡа еткән хәтәр утлы үҙәгенән ҡурпығандай нурланып, утлы бәбәктәре ҡуша сатрашланып, ҡандай алһыу таждар йәнәшәһендә ап-аҡ сатҡы рәүешендә балҡыған. Эйе, тере бөрө-бәбәктәрен ҡапырайтып, сатҡыланып нурын тирткән ошо ике бөртөк аҡ гөл ҡыҙ күңеленә әллә ниндәй утлы-ҡуҙлы тилереүҙәр һала ине... Сәғиҙә был гөлләмәне сәхнә түренә яуҙырылған бик күп гөлдәр буранынан айырым-асыҡ таныны, һауала килеш үк һонолоп тотоп алды. Егете, -- эйе, егете! – уға һәр саҡ Ағиҙелдең тәрән һулышын бөркөлдөрөп килтермәле таңһыҡ бүләк ине был. Әммә ошо ғәҙәттәге ал ҡыуаныс араһына тәбиғәттең сихриәтле ҡуш һабағы итеп ҡурпытылған ап-аҡ ике генә бөртөк – ике аҡыҡ томбойоҡ – бөгөн ҡыҙҙың йөрәк башын иҫләмәҫтән семетеп алған, бөрөп тотҡан, табандарҙан планетаны тибәртеп шашҡын елкендергән тылсымлы көс ине шул. Әгәр эш улайға китһә, дөрөҫөн генә әйткәндә, ул прима-балерина булмаҫы борон үк әле, балет сәхнәһенә менеп беренсе “па” яһауҙан уҡ, нисәмә йылдар буйы ошо изге сәғәтте көттө...

II

Икеһенең күҙҙәре тәүбашлап һис бер абайламаҫтан, “Томбойоҡкүл”дe бейегәндә төкәште. Сәхнәгә яңы-яңы ғына сыҡҡан ҡауырһын ҡанатлы йәш солистканың һәр талпыныш-хәрәкәтен йотлоғоп тамаша ҡылған йөҙәр, меңәр күҙҙәр араһынан күңел тигәнең ни өсөндөр бер тәңгәлдә туҡталды. Унда Ағиҙел йылға пароходствоһының ҡупшы кейемен кейгән йәп-йәш матрос ултыра ине. Артҡа яллатып һыпырылған муйыл-ҡара сәс ырмауын өҫкә этәреп ҡалҡынған яҫы маңлай. Ҡаш дағалары аҫтынан сөм-ҡара күмер төҫлө яндырып, албырғатып, үҙәктәргә үткәҙгәнсе иҫәрләтеп баҡҡан күҙҙәр... Сәғиҙә сыҙай алманы: бейеп барғаны килеш ҡапыл әйләнеп, һирпелеп бер ҡараны. Егет шунда уҡ оялып башын эйҙе, аҙаҡ ҡыҙ уның яндырау-утлы ҡарашын, төндө тишеп тоҫҡалған прожекторҙай, бейеү бөткәнсе үҙ тәнендә тоҫмалланы. Әммә күҙҙәр, күңел пәрҙәһен тишеп өлгөргән күҙҙәр, инде хәҙер бер-береһенән оялып ҡасыр булды: егетте ләә, ҡыҙҙы ла – икеһен дә әллә ниндәй оялсан хис сорнаны ла елкетте. Ҡараштарҙы ҡушарлатҡан тетрәндергес баяғы мәлдә Сәғиҙәнең йөрәгенән бармаҡ остарына саҡлым ҡайнар ялҡын йүгерҙе, һәм был сихри секунд уны ҡапыл ҡауырһындай еңеләйтте. Ул һуҙылып-һуҙылып һауаға осҡанында планетаның тартыу көсөн бөтөнләй тоймай башланы, үҙен күктә ағылып йөҙгән аҡ болоттай хис итте...

Шул хәйерле секундтан һуң күпме елдәр иҫеп, күпме һыуҙар аҡты; аҡ томбойоҡ булып бейегән наҙлы тәпәйҙәр аҫтына күпме ҡайнар алҡыштар, аҫыл сәскәләр яуҙы, алдағы күпме спектаклдәрҙә ул ерҙең барлығын тоймай елкенеп бейене. Шунан алып теүәл алты йыл үтте, ябай балерина – прима-балерина

булып күтәрелде. Ә баяғы утлы ҡараш һаман бер тамсы ла һүрелмәй, партерҙағы шул бер тәңгәлдән уны һәр бер премьера спектаклендә кулуарҙар артынан уҡ сәхнәгә тартып ала, сәхнәнән йотлоғоп оҙатып ҡала ине. Был донъя бик ҡыҙыҡ бит ул: балерина, ирекһеҙҙән, шул тарафҡа, шул ҡарашҡа эйәләште, уны көндәренең ғәзиз бер нуры, туғаны итеп күрә, уны болоҡһоп көтә, уңһыҙ йәшәй алмай кеүек...

Йәйге гастролдәрҙә йөрөп зарығып ҡайтҡаны һайын, Сәғиҙә тәүге спектаклгә урамдан уҡ йөрәге менән лөпөрләп бейеп килә, ниндәйҙер сихри яҡынлыҡ, тартыу көсө тойоп килә. Иң-иң һағыныслы ҡараш шаршау асылып киткәс тә үҡ, шул таңһыҡлы бер тәңгәлдән уҡтала, Сәғиҙәнең ҡарашы ла шул тәңгәлгә туҡтала. Кешеләрҙе йөрәкһетеп бер-береһенән айырған, хатта уларҙы ҡаршы ҡуйған ғәмле донъя ошо мәлдә, тамаша залы менән сәхнә сәнғәт тылсымына төрөнөп арбалған иң илаһилыҡлы минуттарҙа, был икәүҙең бер ыңғайҙан өлпөрәп типкән йөрәге аша бергә килеп тоташа...

Ә бер заман көтмәгәндә сәхнәлә бейегән аҡ томбойоҡтоң яурындарын күк көмбәҙе ҡарағурғашланып баҫты, ер көрмәге ҡаурыйҙарын ҡуҙғалтмаҫлыҡ итеп тартты, епә-еңел ҡауырһын тән суйын менән тулышҡандай тойолдо, ауырлыҡты күтәрә алмай күҙҙәрҙән йәш ҡойолдо – матросы юҡҡа сыҡты... Эйе, юҡҡа сыҡты. Айҙан һуң да килмәне, ҡыштар үткәнсе лә күҙен күрһәтмәне. Йәй башынан театр илдең алыҫ яҡтарына гастролгә китте. Сәғиҙә, матросты ла карабы менән зәңгәр юлдар ылыҡтырғанға һанап (сөнки Ағиҙел йылға кәмәләре инде диңгеҙгә лә сығып йөрөй башлағайны), таныш күҙҙәр менән ҡабат осрашыуҙы көҙөн ҡайтҡас, туған ҡала урамдарында олпат олонло йүкәләрҙең һары япраҡ бурандары уйнағас, ә сәхнәлә өр-яңы сезон башланғас өмөт итте: театрҙың тантаналы яңырып тыуыу миҙгелдәрен матрос һис ысҡындырмай ине. Әмә икенсе сезонда ла илһамсыһыҙ ҡалырға, сөмөрөм күҙҙәрҙе күрмәй бейергә тура килде, бының ниндәй самаһыҙ асы икәнлеген сәхнәнән үҙегеҙ татып белһәгеҙ ине... Бер һүҙ менән әйткәндә, партерҙағы Ағиҙел матросы утлы ҡараштарын бөркөп һөйөнөп ултырыр урын, уны башҡа берәүҙәр биләһә лә, Сәғиҙә өсөн буш ҡалды, йәнһеҙ ҡалды...

Йөрәктәге иҫләмәҫтән алған яра һис кемгә лә һиҙелмәйенсә ҡанһырап бөтәшеп барғанда, матросы зәңгәр офоҡтарҙа һүрелеп юҡҡа сыҡҡандан һуң театрҙа өсөнсө сезон асылғанда, бер заман Сәғиҙә онотолоп йәнә ап-аҡ томбойоҡҡа әүерелгәндә, ҡапыл ғына ялҡын уртлап алғандай, һулышы киҫелде ҡыҙҙың, йөрәге туҡталды, тәнен залдан ойҡолған үрт ялманы. Аҡ томбойоҡ, моғайын, бейеүҙең иң күтәренке, сая хисле мәлендә, иң хәтәрле талпынышында ҡапыл туҡталып, ҡатып, һабағын аҫтан салғы киҫкән үләндәй ҡалтыранып ҡуйғандыр: алда ултырған йәш кенә бер тамашасы “ой!” тип йөрәкһеп тертләне. Шул ҡыҫҡа мәл бөтәһен дә хәл итте: балерина партерҙағы таныш ултырғыстан тура үҙенә йүнәлтелгән утлы ҡарашҡа сумды, дөрләп китеп йәнләнде, көлдән ҡалҡынған Феникс-ҡоштай тылсымланып талпынды. Ҡапыл гөртләп ялҡынланыу тамаша залын гөрләтте, алҡышлап ҡул сабыуҙар сәхнәне тетрәтте. Балеринаға бейеүҙән туҡтап тубыҡтарын бөгөргә, тамашасыны хөрмәтләп баш эйергә тура килде. Иҫ китмәле арауыҡта Сәғиҙә егетен таныны: инде ҡупшы һалдат кейеме кейенгән һәм уға алйырҙай бағынған тамашасы – тап үҙе, теге саҡтағы Ағиҙел

матросы ине! Ошонан һуң күрһәгеҙ икән күктәрҙең күкрәп киңәйгәнен, томбойоҡ тәпәйҙәре ерҙе, -- эйе, Ер шарын! – типсеп-тибәреп ебәргәнен!..

Егет тиҙҙән, моғайын, ҡабат үҙенең пароходствоһына урынлашты – йәшел һалдат формаһын зәңгәр йылғасы кейеменә алмаштырҙы. Тик был юлы матрос түгел – уҡалы погондар тағылған етәксе ҡор мундиры ине уның күҙгә күренеп ҡалҡынған, яҫырған мыҡты иңдәрендә. Үҙен сәхнәнән оҙатҡанда аяғөҫтө баҫып тороп, юғары күтәреп сапҡан көрәк ҡулдарында моторҙар менән булашыусы ысын хеҙмәт кешеһенең тамғаһын – ҡараһыу мазут төҫөн шәйләп, Сәғиҙә хыялый егетенең берәй машина, механизм тирәһендә эшләгәнен шәйләне, был иһә уның хыялында егетте ергә тоташып үҫкән төп имәндәй ҙурайтты, серләндерҙе... Ниңә йәшереп маташырға: Сәғиҙә, әллә инде үҙе яртылаш күккә сөйөлөп йәшәгәнгә, ергә батыбыраҡ торған кешегә -- ябай хеҙмәт эйәһенә танһығып тартыла ине.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Сәғиҙәнең артынан ҡалмай йөрөүселәр быуа быуырлыҡ әле. Ус туҙҙырып сәпәкәйләп ултырыусылар араһында ғына түгел, ә сәхнәлә бергә бейегән егеттәрең дә итәгеңә балауыҙҙай һыланып, татлы балдай яғылып ҡына баралар. Әммә йылдар йүгереп үтә торҙо, теге егете булмағас, ҡыҙ күңеле еңел-елпе ғишыҡ утын әллә ни һанламаны. Ул бары тик һауала осоп бейеү менән, үҙен һауала тотҡан баяғы хыялый көс – матросының, залда үҙе булмаһа ла, күңеленә һеңеп ҡалған утлы-татлы күҙ ҡараштары менән мауығып йәшәне. Уның өсөн, биғәйни, билде һындырырлыҡ ҡоскан ҡосаҡтар ҙа, ҡанатҡансы һурып үбер ирендәр ҙә юҡ ине. Таңғы ысыҡтай мөлдөрәмә ҡыҙ сафлығын, намыҫын да шул ике хаҡ тылсым – сәхнә һәм хыялый күҙҙәр өсөн юғары күтәреп һаҡланы. Мөхәббәттең түбән ерлекле талабына буйһонһа, баяғы ике хоҙайына бер юлы хыянат итер, күккә осорған ҡанаттары ҡыйылыр кеүек ине. Камиллыҡтың сигенә еткән һомғол тәндең ваҡыты менән үлтереп-тилертеп ымһыныуҙарын татыманы түгел татыны, әммә нәфсе тигән нәмәһен баҫырға ла өйрәнде. Алйырҙай булған саҡтарында яңғыҙ үҙе генә ҡалып сигарет ҡабып алыу ғәҙәте – хәтәр ғәҙәт – бәлки, ошоноң касафатылыр... Зарарлығын белә тороп, ваҡытында тыйылып ҡала алманы, иптәштәренә һиҙҙертмәй йәшереп тартты. Ләкин, йылдары ағылған һайын, тере йәнгә изге итеп тәбиғәттән тәғәйенләнгән нимәнеңдер етешмәүе, шунан ҡарышып баш тартыуҙың хәтәрлеге нығыраҡ тойола икән; әсе тәмәке төтөнө лә дәртте һүрелтә алмай, уғата йөрәкһетә икән: күпме генә күккә сорғолоп талпынһаң да, йәшлегеңдең һыҙылып ҡына үтеп китеп барғанлығын, Ҡош Юлдарын иңләп алырҙай ырғып оскан буй-һыныңдың шулай ҙа ерсән икәнлеген, шуға тартылып ятҡанлығын тояһың. Һәм баяғы партерҙағы танһыҡ тылсым күҙҙәренең йәшерен-серле саҡтыһын ғына түгел, ә теп-тере эйәһен дә уның бөтмәҫ хыялыйлығынан тартып алғың, ҡосоп күкрәгеңә ҡыҫҡың, бик-бик яҡынайтҡың килә...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, егетенең ҡыйыуһыҙлығы ҡыҙҙың теңкәһенә тейә башланы, йәшлек тигәнең елеп кенә үтеп бара бит инде...

III

Сәғиҙәнең күҙ алдында мыҡтыланды ул егет. Тәүҙә, хәтерҙә, матрос күлдәгенең иҙеүҙәрен ала-ҡола тельняшкаһы һыртлығынан яра асып ебәргән, ҙур ҡулдарын ҡыйыу юғары күтәреп сәпәкәйләгән мыҡты үсмер ине ул. Тора-бара эйәгендәге себей йөндәрен электр бритваһы йышып мөнтәсләгән һөмөрө ҡамыл төптәре алмаштырҙы, ҡарҙай аҡ нейлон күлдәк өҫтөнән муйынына йоморо төйөнләп ауыр галстук бәйләнде. Ҡулдарын да йышырағын үргә күтәрмәй генә, алдына һалған килеш кенә йыбанып саба башланы. Әммә күҙ ҡарашы әүәлгесә ҡомһоҙ, яндырай-утлы ҡалды. Сәғиҙә йәнә ләбер нәмәгә үҙе ләһиҙмәй ҡыуанғанын асыҡланы: утлы ҡараш эйәһе һаман яңғыҙ килә театрға. Дөрөҫ, ҡайсаҡта уның эргәһендә Сәғиҙә ҡасандан танып белгән, үҙ итеп күнгән бер үк ҡарт менән ҡарсыҡ (ата-әсәһе, буғай), әммә һис ҡасан да янына сәхнәләгенең йөрәк итен өҙөп алырҙай ҡыҙ-ҡырҡын ултыртканы юҡ. Йәшермәйек: ошо хәл һуңғы ваҡыттарҙа Сәғиҙәне айырыуса болоҡһотоп уйландырҙы. Иҫең китмәҫлекме ни: нисәмә йылдар икеһе тиң йөрәктәренең төптәренә үткәҙгәнсе рампа аша ҡарашып, әммә ергә төшмәйенсә ҡанат ҡағышып йәшәне! Һәм улар инде икеһе ләкүктә елкенеп арығанлығын, ер йылыһын табан менән тойорға ваҡыт еткәнлеген һиҙемләй кеүек ине. Ә бер спектаклдән һуң ошо хис уларҙың икеһенә ләкөслө әҫәрләнеү бөркөп һирпелде.

Сәнғәт менән тормош ҡуша үрелеп барған ошо гүзәл заманабыҙҙа һәр бер тере һабаҡтың, Ҡояшҡа үркелеп үҫкән гөлдәй, Матурлыҡҡа йөҙ бороп тартылыуын, шуға һыуһаған халыҡ һәүәҫкәрлеге үҙешмәкәр театр түңәрәктәренә уҡмашып ылығыуын, ҡаланың байтаҡ урындарында йәмғәт башланғысындағы сәнғәт университеттары күкрәп сәскә атыуын Сәғиҙә, әлбиттә, белә ине һәм шуларҙың бер-нисәһенә шефлыҡ та итә ине.

Бына бер заман Күк дөһөрләп ярылып киткәндәй булды: уға бөтөнләй иҫләмәгән тарафтан – Ағиҙел йылға пароходствоһында яңы асылған йәмғәт башланғысындағы сәнғәт түңәрәгенән саҡырыу килеп төштө. Ә иң мөһиме шунда: хатты елдереүсе курьер ҡыҙ йылтыр яры ҡағыҙға төрөлгән зиннәтле һуйҙан һабаҡ – күҙе асылып ҡына килгән аҡтан да аҡ томбойоҡ сәскәһе тапшырҙы, өҫтәүенә, нисектер, хәйләле мут йылмайып: “Ә быныһы һеҙгә үҙегеҙ белгәндең сәләме”, -- тине. Иҫең-аҡылың китер: ҡара яҙҙан томбойоҡто ҡайҙан эҙләп тапҡандыр, быныңөсөн, бәлки, дәүләт Ботаника баҡсаһының сихырлы “сим-сим” ҡапҡаларын астырып керергә ләкәрәк булғандыр – ҡыҙ өсөн тәрән сер ҡалды. Ул бары шуныһын йөрәге менән тойҙо: был – ***унан!..***

Йылға вокзалында ҡыҙҙы ысынлап та таныҡланған ҡара күҙҙәр ҡаршыланы, һәм таксиҙан сығырға йәһәт ярҙамлашып һонолған ҡул уның ҡулы менән татлы тоташып, бөтә тәне шунда уҡ уттай ҡыҙышып, беренсе тапҡыр йән түгел, ә тән тартҡан яҡынлыҡҡа – ҡул ҡыҫышып күрешеүгә әүерелде, ошо мәлдә икеһе тиң эстән дөрләп дерелдәне.

-- Сәғит, -- тип исемен әйтеп таныштырҙы егет, бер ус яҙғы аҡсәскәләр тотторoп.

-- Сәғиҙә... – Исемдәрҙең теүәллекле тап килеше ҡыҙҙы бераҙ ҡаушатты, ҡолаҡ остарынаса ҡыҙҙыртып ҡыҙартты – хаҡ яҙмыштың үҙенең ҡушыуы булып тойолдо уға. Шулай ҙа ҡыҙ баҙауын йәшерә алды, һурылып сығып барған йөрәген

ерсән тормош ҡанундарына буйһондороп, ҡәҙимге һалҡын ҡанлылығын ҡайтарҙы (һәр хәлдә, үҙенә шулай тойолдо). Сәғит, тулҡынланыуын һиҙҙертмәй, һис тә хыялый Күктән осоп төшмәгәндәй, ергә ирҙәрсә ныҡ баҫып, ҡыҙҙы ысын азаматтарса ҡултыҡлап алып китте – залда халыҡ йыйылып бөткәнсе, йәнәһе, уны үҙҙәренең “ялғашы” менән таныштырырға булды. “Ялғаш” тигәне – Сәғиҙә Ағиҙел йылғаһында йыш күргән, ҡырмыҫҡалай һарғылт кәүҙәһе даими билдән һыуға батып, үҙенән ун-егерме тапҡырға дәүерәк баржаларҙы, йәки буйы саҡрымға һуҙылмыш һалдарҙы тартып йөрөгән, мәңге тынғыһыҙ, мәңге эшсән буксир-теплоход ине. Алтын ҡомло пляждарҙа ятҡан саҡта балерина был “ҡырмыҫҡа”ларҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтә, әммә һис тә шуларҙың береһендә тап үҙенең ярты йәне атлығып китеп барғанлығын шәйләгәне юҡ ине. Ошо асыштан ҡыҙҙың йөрәге сыға яҙып талпынды, уға хәҙер йөкһөҙлөктән йүнкеп арт яғы һыу өҫтөнә ҡалҡынған ябайҙарҙан ябай буксир ҙа, унда ҡыбырҙаған ябай кешеләр ҙә донъяһының, йәненең бер иң ҡәҙерле киҫәге булып күренде, уның ошонда осоноп бейегеһе, сыңратып йырлағыһы килде...

Караптың эсен күрештереп, траптан кире ярға сығып барғанда ул түҙмәне: Сәғит менән икеһенә һушы китеп ҡарап торған, танауы ҡара мазутҡа буялған йәш матрос янында туҡталды. Ҡапыл иҫте китәргәне – бесәйҙеке һымаҡ йәм-йәшел күҙҙәре ине.

-- Исемең кем, азамат? – тип һорағанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

-- Алеша мин, ә ниңә? – тине егет, оялышынан тимгел-тимгел ҡыҙарынып.

-- Их Алеша, Алеша... – Ҡыҙ уны Сәғиттең үҙе белгән матрос сағына оҡшатты (тик бының күҙе йәшел ине) һәм, йәшлегенең хыялыйлығы менән мәңгегә хушлашҡандай, шул йәшел күҙле матростың түш кеҫәһенә усындағы сәскәләрҙең береһен алып ҡаҙаны...

Шул йәмғәт сәнғәт түңәрәгенең мөкиббән китеп тыңлаусылары менән кинәнеп осрашҡандан һуң, Сәғиҙәнең үҙенә лә мәңге яңы, мәңге серле Матурлыҡтың бығаса күреп беленмәгән бер сатҡыһы шаңдаҡланып һирпелгәндәй булды, әйтерһең, ихлас йылғасылар күңеле аша, уға һылыу Ағиҙелдең ҡыйылып оҫкан аҡсарлаҡлы таңдары, аҡ сабаҡлы тулҡындары пакландырып яғылды. Кисә тамамланғас, Сәғит уны баяғыса ҡултыҡлап оҙата сыҡҡас, әллә инде айырылышыуҙың асыһын алдан кисереп, ғүмерҙә булмағанса, такси туҡталышында улар йөҙгә-йөҙ яҡынлашты; икеһе тиң, һулыштары ҡапланып, әйтер һүҙҙәрен йотоп, баштары әйләнеп торҙо. Ҡыҙ үҙенең ни рәүешле “Волга” салонына инеп ултырғанын да шәйләмәне. Фәҡәт такси бераҙыраҡ киткәс кенә, йөрәге асырғанып, ***уның да*** бергә ҡушарлап инеп ултырмағанлығын, тере тирәк һабағынан тартып өҙөлгән япраҡтай, тегендә тороп ҡалғанлығын абайланы. Сәғиҙә өйгә һис ҡасан да булмағанса әҫәрләнеп, йөрәкһеп, шул уҡ ваҡытта киләсәктән ниндәйҙер мөғжизә өмөтләнеп ҡайтып инде. Шул өмөтө уны киске спектаклдә бейергә аҡҡоштай осортоп килтерҙе, сәхнәлә бығаса күрелмәгән илһамиәтле осонорға насип итте. Тамашасыларҙың шаулатып ҡул сабыуҙарынан, өҙлөкһөҙ “бис!” ҡысҡырыуҙарынан ярым алйыу, ярым иҫерек хәлдә ине ул тамаша аҙағында; сәхнәгә яуған аллы-гөллө сәскәләрҙең иҫәбе-һаны юҡ ине. Эйелеп алған гөлләмәләре ҡосағына һыймағас, артта

теҙелешеп торған сәхнәләштәренә таратып биреп, сәхнә ситенә кире әйләнеп килгәйне, бөҙрә-көҙрә һаҡалы һәм туҙғаҡ сәсе төҫөндәге сағыу-ерән костюм кейгән баяғы бер баламут, заманаһының иң модалы галстугында сағыу аҫылташ балҡытып, уға бик дәү сәскә бәйләме һондо, үтенесле зәңгәр күҙҙәрен ҡыҙҙың күҙҙәренә тура төбәп ялбарҙы – теге ваҡыт ул ҡайтырға сыҡҡанында ергә ятып уның аяҡтарын ҡосорға иткән, хатта эҙҙәрен үпкән әрһеҙ егет ине был. Гөлләмәһен үрелеп алғаны ыңғайында һуҡ бармағындағы ағалтын балдаҡтың гәүһәр ҡашы (бәлки яһалма таштыр – кем белһен!), бысаҡтай сатҡыланып, ҡыҙҙы сытырлатып күҙҙәрен йоморға мәжбүр ҡылды; шул ыңғайҙа Сәғиҙә үҙенең гөлләмә ҡоскан беләгендә ерән төклө һөмһөҙҙөң супылдаған еүеш ирендәрен, һаҡал мүктәрен тойҙо... Ытырғанып, гөлләмәһен рампа бүкәненә һалды, ҡосағында күкрәгенә ҡыҫып тотҡан бер гөлләмә генә ҡалды. Ерән һаҡаллы, костюмлы бәндә артҡы планға күсте – йөрәген елкеткән мөғжизә көтөү тойғоһона күмелде. Сөнки ҡыҙҙың ҡосағында килеш ҡалған, йөрәгенә тамыр йәйгән йыйнаҡ ҡына гөлләмәлә ике дана ап-аҡ томбойоҡ сәскә -- йылғасы егет менән үҙенең саф хыялый өмөтө тиртә ине. Ә томбойоҡ сәскәләре араһына беркетелгән аҡ ҡағыҙҙа тик бер тылсымлы яҙыу: “Көтәм!..”

IV

Егет иһә был минутта театрҙан сыҡҡан ерҙә -- арыҫландар һыны янында – ысынлап та көтә ине. Өҫтөнә ҡара костюм эсенән ҡарҙай балҡыу күлдәген кейеп, айбарлы галстук бәйләгән, һумалалай сәстәрен һындырып тараған. Бағананан ҡойолған неон яҡтыһында, сыҙамһыҙланып ҡымшанһа, майлаған һағыҙ төҫлө лаклы туфлиҙары, һумала сәсе сағыуланып ялтырай. Театрҙан ағылған халыҡ тарафына уҡталып, Сәғит бер нәмә уйлай: булырмы, изге сәғәт һуҡтымы?.. Йылдар һуҙымы буйынса шул бер изге сәғәтте өмөт итеп, ул үҙенә ерсән бәхет вәғәҙә иткән аҙмы ябай минуттарҙы ҡулынан ыҫкындырҙы, әкиәттәге Мәжнүндәй, ҡулдарын Күккә (йәғни сәхнәгә!..) һонған килеш йәшәне. Дөрөҫ, ул Мәжнүнсә тилереп кенә йөрөмәне, ә берҙән-бер мөхәббәте хаҡына, Матурлыҡ хаҡына үҙенең барлыҡ кешелек сифатын үҫтерҙе, тупланы. Сәхнәләге томбойоғо Күктәге Ҡош юлдарына сорғолғанында ул да уға тиң осорға теләне. Матурлыҡтың яҡынлығын йөрәк менән былай тойоу, уны ысын баһалау, уға тиң булырға теләп уҡталыу, әлбиттә, ябай ауыл малайына Күктән генә төшмәне. Тәүҙә уға үҙен уратып алған донъяны ысын таный белергә, Тәбиғилекте – яһалмалыҡтан, Матурлыҡты яманлыҡтан айыра белергә кәрәк ине. Ҡағыҙ сәскәләр, алтын бутал ялатылған ташҡурсаҡтар араһынан Тәбиғилекте, Матурлыҡты танып-белеп күтәреп алырға кәрәк ине. Дөрөҫөрәк әйткәндә, донъялағы Матурлыҡтың һис тә күктәрҙән түгел, ә табан аҫтарыбыҙҙағы ябай Ерҙән, Тәбиғәттән – үҙебеҙҙән үрккәнлеген, тимәк, тәүбашта үҙебеҙ саф булырға тейешлеген, кеше үҙен тәбиғәттең Аллаһы йә Ғазраилы итеп түгел, ә тәбиғи өлөшө, тере йәне итеп тойған саҡта ғына унда бөйөк Тәбиғилектең йәшнәп сәскә атҡанлығын, Матурлыҡтың күкрәп-балҡып тыуғанлығын белергә, уны ямандан ҡурсаларға һәләтле булыу кәрәк ине.

Эйе, күңел түренә бейеп кенә килеп кергән ошо Матурлыҡ алиһәһе уны ла шаҡтай юғары талпындырҙы. Ҡалаға ауылдан таҡыр асфальт ялтырауығы тартып килтергән асыҡ ауыҙ бер малайҙы, сихриәтле аҡ томбойоҡ наҙы менән арбап алып, гүзәллектең етенсе ҡат күгенә ашҡындырҙы – бөгөн ул ихлас күңелендә Матурлыҡ ҡорамының магына, ә үҙебеҙсә әйтһәк, бәгенә әүерелде. Ул ғына ла етмәһә, бергә эшләгән дуҫ-иштәрен шаҡ-ҡатырып, тигәндәй, махсус уҡыу йортоноң ситтән тороп уҡыу бүлегенә инде, уңышлы тамамланы. Күңеле менән генә түгел, эше менән дә үҙенең гүзәллек алиһәһенә -- Томбойоғона тиң булырға тырышты. Кисәге матрос егет бөгөн – зәңгәр юлдарҙың бер мыҡты хужаһы, теплоход механигы. Һәм был, уның уйынса, тормоштоң да билдәле бер этабы, түҙемлек һәм матурлыҡҡа уҡталышының ҡыуаныслы һөҙөмтәһе. Хәҙер инде тәүге үҫмер оялсанлығынан арынырға, күңел тартканыңдың буй етмәҫтәй бейек алиһә, прима-балерина икәнлеген оноторға, кәрәк булһа, ир-егеттәрсә ҡаты ҡосаҡлап, ҡытыршы ергә баҫтырырға, һулыштарҙан битте көйҙөртөп өндәшергә, күҙгә күҙ терәшеп һөйләшергә лә ваҡыттыр. Тураһын ғына әйткәндә, мәсьәләне ҡабырғаһына ҡуйырға. Әйтәйек, әҙәм балаһымы ул, әллә... Ерҙәме ул, әллә... Ниңә... ошо көнгәсә ул үҙен белештермәй осона, ергә төшөргә кәрәклеген онота (кейәүгә лә сыҡмай?..) Йәки, ҡәҙимге тереләрсә, кешеләрсә, ысынтылап егеттәр менән дә йөрөмәй? Әллә ысынлап та тәнһеҙ-есемһеҙ бер затмы ул – ахырғаса яңғыҙ башы ҡаңғырасаҡ, башҡаларҙы ла ҡаңғыртасаҡмы? Әгәр шулай булмаһа, бына минең эшсән ҡулым, ҡайнар йөрәгем: рампа аша күҙ атышып ҡына түгел, ә *кешеләрсә* йәшәргә лә ваҡыттыр!..

Егетебеҙ ҡыйыуланып ошо хаҡта хыяллай, үҙен батырайтып ҡуйырға самалай. Тик теҙ-быуын тигәндәрен тыйыуы ҡыйын икән. Әгәр шулай булмаһа, теге әкиәттәге егеттәй, ете йыл буйы өнһөҙ күҙләп йөрөмәҫ, күргәне һайын ҡойолоп төшмәҫ ине. Юҡ, ҡурҡыу-фәлән түгел был -- ҙурыраҡ, бөйөгөрәк. Уйлабыраҡ ҡараһаң, әллә ҡасан, Сәғиҙәнең күҙ ҡарашын тәүге осратканында уҡ, донъя йөҙө ҡамаштырғыс баҙрап киткәндәй булды, егеттең дә күкрәгенә, әйтерһең, баҙрап торған гәүһәр кереп ултырҙы. Теге көндә Ағиҙел ярында беренсе тапҡыр ҡыҙҙың ҡулдарын үҙ ҡулдарында тотоп, артынан такси ишеген ябып оҙатып ҡалғандан һуң, күкрәгенән гәүһәренең һурылып сығып китеүен, такси түрен сатҡылатып әллә ҡайҙа төн ҡабына инеп барыуын тойҙо. Бушап ҡалған тоҡтай шәлпәйеп, тубыҡ быуындары бәлкелдәп инеп йығылды өйгә. Күкрәктәге шул гәүһәрһеҙ һис йәшәп булмаҫтайын, уны кире ҡайтарырға кәрәклеген, шуның хаҡына изге сәғәт һуғасағын татлы һыҙланып тойҙо. Ғәҙәттәгесә ай элгәре алып ҡуйған театр билеттарын барлап ҡараны – иртәгә ла ул осонасаҡ “Томбойоҡкүл” спектакле ине. Бына ошо мәлдә ул, ғүмерҙә булмағанса, үҙҙәренең эштәге уңышһыҙлығы – теплоходтың ватылып ремонтҡа туҡтатылыуы өсөн эстән ҡыуанды. Әгәр “ялғаш” оҙайлыға ярға килеп һырнығмаһа, томбойоғоноң талпыныуҙарын, осоуҙарын яңынан ҡасан күрер ине!.. Төндө көскә уҙғарып, теплоходты заводҡа ҡыуғандан һуң кисен саҡ әйләнеп ҡайтып, ошо байрам кейемдәрен кейенде, ғәҙәттәгесә әсәһе ҡырҡып әҙерләп ҡуйған ҡуҙҙай алһыу сәскәләрҙе аҙһынып, үҙе баҡсаға инде, гөлләмәнең иң аҫылдарын алды. Ботаник

баҡсанан эләктергән гәүһәрҙәй күҙ ҡамаштырғыс ике ап-аҡ томбойоҡто ҡанһыу-ҡыҙыл сәскәләргә таж рәүешле ҡурпытты...

Бына әле шул хистәрҙән гөртләп ҡабынырҙай тора: атаҡлы прима-балерина таш арыҫландар араһынан кемгә күҙ төбәп сығыр? Әгәр егет күңеле алдамаһа... изге сәғәт һуҡты, тигән һүҙ. Күпме йөрөргә инде?!. Баҡса яғына аулаҡҡа алып китергә *ләә*, тәүәккәлләнеп, алдында теҙләнергә, изге тәҡдим яһарға... Эйе, икеһенең ғүмеренең таң йондоҙло сәғәте!

Килә, ап-аҡ беләгенә һалған алһыу роза менән ап-аҡ ике томбойоҡто күкрәгенә ҡыҫып килә!

Сәғит тәрән һуланы, күкрәк һандалында сүкеш ҡотороп-тулап һуҡты – прима-балерина, ҡосаҡлап тотҡан гөлдәмәһенә кинәнесле әүешеп, алыҫтан уҡ уның күҙҙәренә төбәлеп килә! Яңылышып ымһынмайым, тигәндәй, балҡыуыслы бәхетенә ышанмай, сытырлатып күҙҙәрен йомдо егет. Асты. Юҡ, яңылышмай: прима-балерина һаман, ап-аҡ сәскәләр өҫтөнән ап-аҡ ынйы тештәрен балҡытып, тура уға уҡтала:

-- Һаумы, һаумы, матросым!

-- Томбойоғом!.. – Сәғит ҡыҙҙың аҡҡош ҡанатылай ҡулын ике усы араһына алып үпте.

-- Осондортмасы инде! Сәхнәлә томбойоҡ булһам *да*, ерҙә яп-ябай үләнмен.

-- Юҡ! Ап-аҡ томбойоҡ сәскәһе һин ерҙә *ләә*!

Сәғиҙә бәхетле көлдө.

Ошо мәлдән алып ғүмер сәғәттәре тоташҡан һымаҡ ине. Быға*са* улар араһында күренгмәҫ быяла шаршау булып тотоп торған, ике йәнде хыялый күпер аша ғына тоташтырған сәхнә менән тамаша залын беркетеүсе, шул уҡ саҡта ике яҡҡа айырыусы ҡөҙрәтле сик хәҙер инде юҡ ине, бер-береһенә тартылыусы шашҡын хистәр дауылының магнит ҡырҙары ғына әлеге тилерткес саф яҡынлыҡтың *да*, бер үк саҡта алыҫлыҡтың да асылмаған ишектәре һымаҡ төкәлешә ине. Ошо ҡапма-ҡаршылыҡ, тәбиғәттең күҙгә күренмәҫ кәртәһе, хәтәр мәлдең серлелеген билдәләүсе аңлайышһыҙ тылсым һағын һаҡлай ине. Дарҫ-дорҫ типкән йөрәктәре тәбиғи яҡынлашҡан һайын, ҡырыҫ магнит ҡырҙары артҡа сикте, серлелек тарала барҙы, күкрәк һандалдарының туҡ-туҡ һуғыуы ғына тоташып һулҡылданы. Пүлстәрҙең, һулыштарҙың берәгәйлеген тойоу кинәт икеһен *дә* айнытты, был донъяға ҡайтарҙы, ә ул донъя шундай иркен, сикһеҙ төпкөллө ине. Һәм шуны аңланылар: шаулы-гөрлө таш ҡала урамы *ла*, баш осонан тауышһыҙ бызырлап ҡойолған аҡһыу неон нурҙары *ла*, күктә күҙҙәрен ҡыҫып көлгән һибелмә йондоҙҙар ҙа – береһе *лә* уларҙан башҡа юҡ ине, аҡ томанға шыйыҡланған татлы донъя икеһенең мейе ярым шарларына инеп һеңешкән ине. Етте, араларҙы тамам асыҡлар саҡ етте! “Анауы аулаҡ баҡсаға инәбеҙ ҙә...”

Ҡапыл әсе бензин һөрөмө аңҡыны, автомобиль боғаҙы ғыжылданы, тормозы сыйылданы. Тротуар буйлап ағылыусы ағай-эне ҡубынып шул яҡҡа эркелде, бейек бордюрға морон төртөп тынып ҡалған “Волга”ны уратып алды:

-- Уф, берәүҙе тапатҡандар...

-- Йәш кенә ҡыҙ...

Тубыҡланып бахырҙың кәүҙәһен ҡосаҡлаған бер ҡатыңкай үҙәге өҙөлөп сеңләй:

-- Уй балаҡайым, туй күлдәге кейер генә сағың бит!..

Сәғиҙә, ҡосағындағы гөлләмәне ҡанлы асфальтҡә һалып, ҡалтыранған ҡулын Сәғиткә һуҙҙы, етәкләшеп ҡаттылар. Машинаның тупаҫ тимер маңлайы, ҡыҙыл тәреле сумка, аҡ халатлы ханым юғары күтәреп сыптырлатҡан йылтыр һеməкле шприц, хәйерһеҙ тәғәрмәскә аҡ күбәләк ҡанатылай һыланып йәбешкән күлдәк итәге...

-- Аллаҡайым! Иҫән генә ҡалһа ярар ине! -- Өҙәләнде Сәғиҙә. Кемдәрҙеңдер юл фажиғәһе яҡты хыялдарына ҡарайып ара төшөүен тәрән кисергән егет өнһөҙ һыҙланды. Шул уҡ ваҡытта икеһе *лә* аңлайышһыҙ бер хис-тойғо кисереп, ошо мәлдә үҙҙәренең ниндәйҙер тылсым әмере менән әлдә тере, йәш, һыу һөлөгөләй таҙа һәм саф икәнлектәрен, ә алда сикһеҙ бәхетле ғүмер ятҡанлығын, шуның ҡәҙерен белеп ҡалырға кәрәклеген тәндәренең күҙәнәктәре менән һиҙеп-тойҙолар. Әммә был йәшерен хисте тышҡа сығарырға ярамай ине, баяғы бәхетһеҙ ҡыҙ ҡаршыһында был оло гонаһ ине. Өҫтәүеннә, тәғәрмәскә уралған аҡ күлдәк итәге, асфальттәге ҡыҙыл ҡан табы әленән-әле аңдарын томаланы, әллә ниндәй күңелһеҙ уйҙарға, иҫтәлектәргә тартты.

Һалҡын неон яҡтыртҡан юлдан өнһөҙ генә атланылар.

-- Матросым, ауыр көрһөнмә улай!

-- Их, ер йөҙөндәге ғүмеркәйҙәрҙең береһе *лә* үҙ ваҡытынан элек өҙөлмәһен ине! Ә бит мин дә... үҙ ҡулдарым менән... – Сәғит күптән оноторға теләгән бер хәтирәһен ҡабат яңыртып ҡалтыранды, үңәсен эскә тартты. Быға тиклем төпһөҙ күренгән Күк ҡабағы нисектер түбәнәйеп, ян-яҡ тарафтар тарайып, донъя ҡараңғыланғандай, ә тирәләге ҡарт йүкәләрҙең сутырмаҡлы олондары Еребеҙҙең хәсрәтле маңлайындай – кешеләрҙең һаман юҡҡа сыға барған йән шәфҡәтен ҡайтарып биреү уйын уйлап һыҙланыуҙан тәрән һырланғандар һымаҡ тойолдо. Ҡыҙ ҡырт-туҡталды:

-- Нимәне үҙ ҡулдпарың менән?

-- Их!.. Алты-ете йәштәрҙә булғанмындыр... Кәртә артындағы саңлыҡта “һабан һөрөп” уйнап йөрөйбөҙ шулай. Беҙҙе, ҡара танаулы ике малайҙы, кәртә аша ситән өйҙә яңғыҙ башы ғына йәшәгән Хәбирә ҡарсыҡ ҡул болғап саҡырып алды. Өйөнә индереп, балан ҡағы менән һыйланы. Арҡаларыбыҙҙан һөйҙө. “Хәҙер инде егет булып еткәнһегеҙ – икегеҙгә бер йомош ҡушайым әле”, -- тине. Итәктәребеҙҙе бөрөп тоттортоп, мейес араһында мырылдап ятҡан, күҙҙәре *лә* асылмаған бесәй балаларын һалды – итәк һайын өсәр бесәй балаһы. “Барығыҙ, уландарым, ауыл һыртына сығып, дөмөктөрөп килегеҙ. Тағы *ла* ҡаҡ менән һыйлармын үҙегеҙҙе”, -- тине. “Дөмөктөрөү”ҙең аслан нимә икәнен, моғайын, белмәгәнмендер ҙә, сөнки, һис кенә *лә* иҫем китмәй, өс йән эйәһен итәгемдә бөрә тотоп йүгерҙем. Ауыл осона сыҡтыҡ, һуңғы ямғырҙан һуң тәғәрмәстәр тапауынан балта төйҙәһеләй ялтырап ҡатҡан оло юл түтәһендә туҡталдыҡ. Мин “ни эшләйбеҙ икән?” тип аптырап торғанда, әшнәм бесәй балаларын берәм-берәм артҡы боттарынан тотоп ергә бәрҙе... Ҡалтырандым, итәгемдән төшөрөп ебәрә яҙҙым. “Һуҡ ошолай!” – тине әшнәм. Күҙҙәремде сытрлатып йомоп, баяғының

өлгөһөн ҡабатланым... Күҙҙәремде асып, юлдағы саң ҡатыш ҡан табын күргәйнем, әйтерһең, Күк кинәт түңкәрелде, үҙемдең дә башым юлдың төйҙәһенә зыңҡылданы... Өйгә алып ҡайтҡандар, иҫһеҙ-төҫһөҙ ятҡанмын... Сирҙән арынып торғанымда, мин инде икенсе кеше – бала килеш бала сағынан яҙған, күҙ төптәре сикһеҙ хәсрәт менән тулған йән инем...

-- Абау!..

-- Эйе, фажиғә...

Сәғиҙә тәрән моңһоулыҡҡа күмелгән, ниндәйҙер үҙ ҡайғыһын кисерә ине.

-- Уф!.. Исемдәребеҙ генә түгел, йәндәребеҙ ҙә игеҙәк икән шул беҙҙең, -- тине тәрән һыҙланып. – Үтә юғары ырғып, йәнем иҙелгән, шаңҡыған саҡтарым булды бит, әй, минең дә... шуны һис онотмайым... – Егете лә ергә текләп уйҙарға талып барғас, көрһөнөп дауамланы. – Хореография училищеһен тамамлап ҡына сыҡҡан, түбәм күккә тейерҙәй булып елкенгән саҡтарым ине. Сығарылыш кисәһенән һуң таң аткансы ҡала буйлап ҡыҙырҙыҡ, төнгө тып-тын баҡсаларҙа бейенек. Балдарын ергә түгелдереп сәскә атып ултырған бер ҡарт йүкәнең ышығында барҙы иң күркәм уйын. Ағас беҙҙең ҡыуанысты тойоп ҡуша елкенә, бәрхәт япраҡтары менән сикәләрҙе һыйпап һөйә, әсәйебеҙ һымаҡ иркәләй ине. Ошо минутта ул беҙгә тәбиғәттең хозур серен – ерҙәге мең-мең үләндәрҙең, таштарҙың, ағастарҙың да терелеген, беҙҙең һымаҡ уҡ йотлоғоп тын алырға, өҙә баҫып бейергә, ҡыуанырға, һыҙланырға ла һәләтле йән эйәләре икәнлеген белдерҙе. Ошо мәлдә бөтә донъя күҙ алдыбыҙҙа йәнләнде, мең төҫтә йәйғорланды. Был тылсымды кисермәгән кешеләр үҙҙәре һалҡын таш һымаҡ ине...

Шулай осондороп беҙҙе бейеткәндә, ҡарт йүкәнең иң үрҙәге ап-аҡ еңле ҡулы миңә ымһындырып һонолғандай тойолдо. Ул мине уғата юғарыраҡ ырғырға, аҡҡош һымаҡ талпынырға ҡоторта... Бына мин әхирәттәремдән уҙҙырып ырғыңданым, хатта үҙемде лә уҙып киттем, буғай. Ошо изге мәлдә аҡҡош ҡанаттарым нығынып, баллы йүкәнән йомарт һонолған ап-аҡ еңле тылсымлы ҡул мине иң ҙур бейеклегемә сорғолдорасағын тойоп, аяҡ остарымдан ерҙе тибәрҙем, ҡул осомдо ап-аҡ еңле тылсым ҡулына тиңәлткәнсе һонолдом. Усыма бал яғылыуы, ергә бал түгелеүе, ап-аҡ еңле ҡулдың шартлап һыныуы, ҡулымда ҡалыуы ғына хәтерҙә. Күҙемде асып ҡараһам, әхирәттәрем йүкә төбөнән һирпелгән, күптәре иламһыраған, ә мин ҡайырылып ҡанаған ап-аҡ йүкә ботағын услап торам... – Ишетелер-ишетелмәҫ кенә һулҡылданы. -- Әйт инде, ниңә миңә тылсым ҡулын йолҡоп алырға ине?.. Иң илағыс саҡтарымда хәҙер миңә көллө донъям ошо ҡанһыраған ҡарт йүкәнең күҙҙәре менән баға... үҙемә һонолған тылсым ҡулын йәнә ҡайырып һындырмаһам ярар ине, тип ҡурҡам...

-- Эйе... – тине Сәғит. – Аяныс...

-- Тәбиғәттең ул пак ҡулын кем һуң ҡасан кире ҡайтарып бирер? Ҡасан?..

Башын егет яурынына һалып барған Сәғиҙәнең күҙҙәренән ике бөртөк тәгәрләне, юлдашының ҡул һыртын сылатып бешерҙе. Икеһенең тиң рәхәт һулҡылдап һыҙланыуы улар өсөн әсе аяныслы ла, сикһеҙ ләззәтле лә ине. Сәғиттең күҙ алдын татлы ҡараңғылыҡ томаланы, башы, үкһеткес моңға тулышып, түбән эйелде. Сикәһендә ҡыҙҙың ебәк сәс бөртөктәренең ҡытыҡлауын тойомлап, ниңәлер аң төпкөлөндә ап-аҡ шау-сәскәгә күмелгән, әсә-олононан

ҡайырып алынған баллы йүкә ботағы төҫмөрләнде, шул ботаҡтың һыҙланып-асырғаныуы, әйтерһең, көллө донъя һулаған һауаға һеңеште. “Ул мине аңлай, аңлай! Әсенеүҙәребеҙ бер иш. Әлдә донъяла ул, ул бар әле!” – Ошондай нескәлекле хистән яңырып елкенде егет, эсендәге ауырттырғыс бер яраһына һиҙҙертмәй генә бальзам һалған, әммә үҙе ла бер ҡатарҙан һыҙланып барған был иҫ киткес яҡын йәнде һулышы менән һурып алырҙай булды. Эйе, кешеләрҙе кеше итеп тойорға мәжбүр иткән изге тойғо – Тәбиғәттең аҡ еңле ҡулын, сафлығын үҙ ҡулың һәм сафлығың итеп хис итеү – беҙҙең йөрәктәрҙә тере, моңдаш һәм тоташ икән. Ошо тоташлыҡты тоймаған, йәғни тойоу һәләтенән яҙған бәндә кеше лә түгелдер инде...

V

Спектаклдәрҙә Сәғиҙәгә рампа аша борғаланып иң ҙур, затлы гөлләмәләр бүләк итеүсе, ә театрҙан сыҡҡан ерҙә ҡаҡ асфальтҡә һуҙылып ятып ҡыҙҙың нәфис аяҡтарын үбергә яҫҡаныусы беҙ белгән сәмле һөйәрмән, сеп-сей ерән сәсле, ерән һаҡаллы һәм бер иш ерән костюмлы ир-азамат, Авиация институтының двигателдәр буйынса шәп белгесе Алғыр Ниәтшин ине. Танауына иҫ кергәндән үк ашамай-эсмәй, ҡыҙҙар артынан сапмай, тигәндәй, ғүмерен фәҡәт уҡыуға, белем алыуға арнап, утыҙ ғына йәшендә үк үҙ һөнәре буйынса төплө белгес – техник фәндәр кандидаты булырға өлгөргәйне. Йәшлек тигән елпелдәк ғүмерҙең һиҙҙертмәй генә үтеп барыуын тойоп, һиҫкәнеп үк уйланды егетең бер заман. Яртылаш яҙылған докторлыҡ диссертацияһын туҡтатыбыраҡ торорға ла аҙ-маҙ баш-күҙ алырға йәғни башлы-күҙле булырға ниәтләнде, ә бының өсөн иң кәмендә ваҡытты сарыф итергә -- ҡыҙ һөйөргә кәрәк ине. Ҡапыл уянған күңеле уны шаулы-йәнле донъяға – гүзәл заттар эйәләшкән төрлө күңел асыу урындарына, ә йәмле йәй көндәрендә Ағиҙел буйҙарына тартты. Шунда ғына ул ҡыҙ-ҡырҡындың таҫма телдән ҡолаҡ аша ғашиҡ булыуҙарына, бармаҡтағы, галстуктағы, яға һәм ең ҡаптырмаларындағы ялтырауыҡ аҫылташтарҙы күреүҙән иҙерәп йомшарыуҙарына һәм затлы автомобилгә, катерға ултырып гиҙеүҙәрен ысын бәхет итеп һанауҙарына ныҡ инанды ла шул йүнәлештәрҙе үҙләштерергә ғәлимдарса иҫәп-хисаплап кереште.

Заманының иң шөһрәтле автомобиле һаналған “Волга”ны ул күптән үк эйәрләгәйне. Инде килеп иҙелдең һыу юлдарында ла һис кемде еткертмәҫ өсөн, үҙ һыҙмалары буйынса катер яһаны һәм уға әлегәсә күрелмәгән, елдәй осортоп йөрөтмәле двигатель әмәлләп ҡуйҙы. Беренсе һынауҙан уҡ уның һыу юлында бер кемде лә еткертмәйәсәге, бер кемгә лә ал бирмәйәсәге асыҡланды. Моторының ҡолаҡ ярып шарылдаған тауышынан осраған һәр кем биҙәрләп, өҫтөнән жалыуҙар яҙып, милиция әһелдәре уны, йәғни “йылға хулиганын”, тоторға итеп ҡараһа ла, күҙ асып йомғансы катерында атлығып китеп юғалды, шуға күрә, “ерән һаҡаллы”нан башҡа, исем-фамилияһын да белә алманылар.

Милиция әһелдәре тораракҡ хәйләгә һалышып, кәмә туҡталыштарынан катерҙы ентекләп эҙләй, тейешле урындарға күҙәтсе ҡуйып һағалай башлағас,

яңынан эшкә тотондо ла елдерткесен амфибия итеп яһап сығарҙы – инде ул һыуҙан да, ҡоро ерҙән дә берҙәй еткертмәй үтә...

Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай, тигәндәй, ҡайһындай ғына гүзәл туташтар, ханымдар тап килһә лә, күңеленә йоп килмәй -- өс көндән һуң сәме ҡайта ла ҡуя. Һайланып йөрөй торғас, берҙән-бер аҫылйәргә йәне тартылыуҙан дүнмәне, ә, киреһенсә, күргәне һайын йөрәк ялҡыны нығыраҡ дөрләй барҙы – Балет театрының йәш примадоннаһы Сәғиҙә һылыу ине ул. Алғыр Ниәтшин ныҡ иҫәпле ғалимдарса ошоно теүәл бизмәнләп, артабан хисте тарҡатмаҫҡа, рампа артындағы алиһәнең күңелен көрмәкләп алыу өсөн бөтә көстө һалырға ниәтләнде...

Сәғит иһә был осорҙа эшендә яңы үҙгәрештәр кисерҙе. Ярға килтереп терәткән буксир кәмәһенең ватылыуы үтә етди икәнлеге асыҡланып, комиссия уны, кәмәне, баштан-аяҡ йүнәтеүгә мохтаж тип иҫәпләп, суднолар ремонтлау заводына оҙайлы ваҡытҡа ҡыуҙыртты, шуға күрә экипажды башҡа урындарға эшкә күсерҙеләр. Сәғит иһә йылға пароходствоһы башлығының тура үҙенә кереп, Ағиҙелдә тәбиғәтте бысратыуға һәм уның балыҡ, башҡа йәнлек байлыҡтарын йыртҡыстарса ҡаҡшатыуға, ҡоротоуға ҡаршы көрәшеүсе инспекция төҙөргә ваҡыт еткәнлеген дәлилләне, шуның буйынса үҙенең күптән үк уйлап йөрөгән тәғәйен тәҡдимдәрен әйтте. Башлыҡты ла был мәсьәлә борсоған булһа кәрәк, сөнки ихлас тыңланы ла кисектермәй хәл ҡылды: пароходствола тәбиғәтте һаҡлау буйынса инспектор һәм уның ярҙамсыһы штаттарын булдырырға, тиҙ йөрөшлө бер катерҙы шуларға беркетергә. Инспектор итеп, әлбиттә, Сәғит тәғәйенләнде, ә ул үҙенә ярҙамсы итеп ошоғаса бергә эшләгән йәш матрос Алешаны һайланы.

Бына бер заман йәмле Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары буйлап, йылғасыларҙы хайран ҡалдырып бортына ап-аҡ сәскә һүрәтләнгән һәм матур эре хәрефтәр менән “Томбойоҡ” тип исемләнгән кәмә елдерә башланы...

Сәғитте электән бер нәмә борсой ине: суднололарҙың көнкүреш ҡалдыҡтарын, сүп-сарҙы, хатта мазут һәм башҡа яғыулыҡ бысраҡтарын шапырлатып һыуға түгеп китәләр... Хилафлыҡты тамырынан үк киҫмәгә етәкселек тарафынан ҡаты ҡарар ҡабул ҡылыныуына, ә туҡталыш урындарында махсус сүп-сар һауыттары, яғыулыҡ бысраҡтары өсөн цистерналар ҡуйылыуына өлгәште ул, шул экологик сараларҙы инҡарлаусы әрпештәрҙе йылға юлдары буйынса көнө-төнө, тигәндәй, туҡтауһыҙ эҙәрлекләп, көн күрһәтмәй йонсотто. Ағиҙел буйында “Томбойоҡ” күҙгә салыныу менән үк суднололарҙың экипаждары һағая, итәк-салғыйҙарын йыйнарға тырыша...

Иң ҡыйыны – һыу өҫтәрен сыбарлаған эреле-ваҡлы шәхси катерҙарҙың ярым хулиган хужаларын тәртипкә күндереү ине. Бигерәк тә “ерән һаҡал” тип ләҡәпләнгән береһе теңкәгә тейә: ошоғаса күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән зәхмәт-моторын ҡолаҡ ярырҙай шарылдатып, артынан аҡ һыуҙа зәңгәр яғыулыҡ таптары ҡалдырып атҡан уҡтай осоп уҙа, ҡыуып етермен тимә...

Сәғит белә: был хулиган “ерән һаҡал” уҙған юлда томбойоҡтар киҫелә, балыҡ ыуылдырыҡтары ыуалып һәләк була, ҡамышлыҡта йоморткә баҫыусы өйрәктәр ояларын ташлап ҡаса... ләкин “ерән һаҡал”ды тотоп булмай, шулай уҡ шәхси кәмәселәр исемлегендә лә ундай шашҡын тиҙлекле катер хужаһы

теркәлмәгән. Шуныһы ла хәүефле: был азамат ҡала халҡының иң яратҡан, иң саф һыулы һәм һауалы ял итеү төйәгенә -- Ағиҙелгә тоташҡан, кәмәләргә инеү тыйылған иҫке үҙәндең – Томбойоҡкүл иңен буйлатып шарылдата икән яһил катерын...

Бер көн Сәғит Ағиҙелдә шул мөртәтте эҙәрлекләп маташҡанында ымһынып тороп ҡалды: уны еткертмәй, ҡырт ҡына боролоп, Томбойоҡкүлдең ап-аҡ сәскәгә күмелгән томбойоҡтарын яман шар-шор ярҙыртып инеп китеүен үҙ күҙҙәре менән күрҙе лә, йәһәт ярға төшөп, такси яллап, хулиганды ауламаҡҡа Томбойоҡкүл буйҙарын байҡап уҙҙы, әммә таба алманы. Шуныһы сәйер: томбойоҡтарҙы тураҡлап уҙған эҙе ярылып ята – үҙе юҡ, әйтерһең, йә һыу аҫтына сумған, йә һауаға боҫланған...

Ләкин нисек тә яһилдың эҙенә төшөү, вәхшилек һуҡмағын киҫеү – инспекторҙың мөһим бурысы ине.

VI

Ял көнөнөң таң-иртәһе ҡарҙай ап-аҡ шау-сәскәле алма баҡсаларының өҫтөндә аҡ бурандар уйнатып, һыҙғыр елле булып килде. Ҡала урамдары буйлап атлағанда ян яҡлап баш осонда аҡҡа алһыу ҡан һыҙатлы сәскә бәбәктәре туҙрап яуа, ҡайһы саҡта был хисапһыҙ күп тере күбәләктәр яуылай күренә, аяҡ аҫтында тере сәскә бәбәктәре тырпырап ята ине. Сәғит ҡыҙҙың беләгенән ҡыҫып ҡултыҡлаған килеш, уның аҡ туҙ түфлиҙәренең шыҡылдауын йөрәгендә кисереп-һанап барҙы: ошо асфальт түтәһенә көллө донъя башы бәрелеп ауа, янындағы ап-аҡ томбойоҡ сәскәһе лә уның ҡулынан ысҡыныр ҙа кемдәрҙеңдер аяҡ аҫтында ҡалыр һымаҡ тойолдо. Йөрәкһеткес-йоҡоһоҙ үткәргән төн шауҡымынан болоҡһоп, такси туҡтатты, йомшаҡ креслоға инеп ултырышҡас, ҡыҙҙың тығыҙ, йоморо яурын башын иңендә тойоп, саҡ ҡына тынысланды.

-- Ҡайҙа? – тине таксист.

-- Әйҙә, туп-тура дон офоҡҡа! – Сәғит үҙәк проспект осондағы күкһелләнеп томаланған йылға юҫығына ҡаратып ҡул һелтәне.

-- Томбойоҡкүлгәме?

-- Тап үҙе! – Тиҙ үк иҫенә килеп, юлдашына өндәште: -- Ғәфү ит, ҡала ситенә сығып елләнеп ҡайтыуға ҡаршы түгелме һин?

Сәғиҙә ҡапыл салон маңлайындағы көҙгөнән таксистың үҙенә төбәлгән ҡара-муйыл күҙҙәре менән осрашып, ынйы тештәрен балҡытып ебәреп йылмайҙы:

-- Әйттем бит инде: бөгөн мин һинең ҡолоң!

-- Елдерҙек! – тине таксист. Машина, ике бөйөрөн шпор типсегән ярһыу арғымаҡтай тертләп, торған еренән ырғылды, юл буйлап теҙелгән йүкә олондарын һанай-һанай осортоп алып китте.

-- Томбойоҡкүл... Их, томбойоҡтар балҡып сәскә атҡан саҡ! – тине Сәғит, ҡыҙға бер ҡарап алғас, эстән ҡапыл яғымлы йылы ялмалыуын тойоп, аҡ буранлы

борсоу ҡала урамдарының ҡотолғоһоҙ артҡа шыуып ҡала барғанлығына ҡыуанып.

-- “Томбойоҡкүл” ресторaны гөрләй унда – иртәнән кискәсә музыка, эс-бауырыңды өҙҙөртә генә, малай! Ә аш-һыуы! Закускаға телеңде йоторлоҡ итеп ҡыçала бешереп бирәләр, -- тине таксист.

-- Хоҙайым, ул йәнлекте ҡайҙан алалар икән?

Таксист күҙҙәре көҙгө аша Сәғиҙәгә төбәлеп-мөлдөрәп көлдө:

-- Тап шул уҡ күлдән, һеңлем. Балыҡтарын карбид ташлап тонсоҡтороп бөтөргәс ни, ҡыçалаларға ҡалды...

-- Уныһы ла бөтмәçме һуң?

-- Атайым бахыр әйтмешләй, бөгөн үçкән үләнде үҙем өҙөп ҡабам, ә минән һуң ҡыяҡ ҡалҡмаһа ла ярай. – Таксист күңелһеҙ көлдө. – Тәбиғәтте ҡороторға барыбыҙ ҙа мастакбыҙ! Беләһегеҙме, һеңлем, баранка өйрөлтөүҙе ташлап, шунда ҡыçала тотоусы булып китергә әле иçәп. Тамаҡ ялы ла елле, көс тә артыҡ сыҡмаясаҡ. Яға аçтына ҡаҙна иçәбенән бер “сүлли”ҙе һалаһың да, ҡуш аяҡты тубыҡҡаса Томбойоҡкүлгә сумырып, бәлеш төбө кимереп туйынған бесәйҙәй, морон аçтынан мырылдап ултыраһың. Ун биш минуттан аяҡтарыңды тартып алһаң, һәр ҡайһына берәр биҙрә ҡыçала көрмәлеп сыға...

-- Ой, ул тиклемде ҡайҙа ҡуйып бөтәһең?

-- Борсолмағыҙ, уның барыр юлы киң. Ҡыçала модала хәҙер, француздарҙың устрица тигән һерелдәүек хайуанлы баҡа ҡабырсағындай. Бөгөн бит беҙҙең башҡорт та, ат итенән бүгеп, шаҡы-шоҡо кимерә.

-- Аттың йылҡы икәнен дә онота башланыҡ инде, -- тине Сәғит. – Бөтә нәмә тимер-томорға ҡалып бара.

-- Йәтеш шул: тимер-томорға һоло ла, ҡамсы ла хәжәт түгел, -- тине Сәғиҙә.

-- Уның ҡарауы ер майының төтөнөн борлата ғына – ҡала урамында тын алып булмай...

-- Дәәә... – тине таксист, салонды тынлыҡ баçты. Күпмелер уйланып барғас, креслоға арҡаһы менән кирелеп, муйынын бора биреп ҡарап өçтәне: -- Беҙ – беҙ инде, ярар. Ҡолонсаҡтың ер тулатып кешнәүен дә күрмәй үçәсәк әҙәм балаһы ни эшләр? Үҙе донъяның ҡамсыһына әйләнеп үк ҡуймаçмы?..

Машина Ағиҙел аша тартылған селтәр күперҙе үтеп, аҡ күлдәкле коттеждар, коллектив алма баҡсалары, ҡускыл баçыуҙар араһынан ырғылды, салонға икһеҙ-сикһеҙ киңлектең йәшел һулышы урғылды. Шул йәшеллек ҡосағына әсе бензин һөрөмдәре таратып, күҙ күреме ерҙә эреле-ваҡлы төрлө машиналар, машиналар, машиналар ашҡынышып йүгерешә ине. Ошо бөтмәç бәйгегә текләп барыуынан ялығып, Сәғиҙә көрһөнөп ҡуйҙы:

-- Тимер ат тигәндән иçкә төштө. Бер йылды, “Аҡбуҙат”ты сәхнәләштергәндә, Хөсәйен Халиҡовтың операһын әйтәм, сәхнәгә тере ат индерҙеләр... Ғәфү итегеҙ мине, тупаçыраҡ яңғыраһа ла, бер башлағас бөтөрәйем... Беләһегеҙме, иң тантаналы кульминация мәлендә атҡынабыҙ ҡойроҡ аçтынан тупыр-тупыр үҙенең эре сәтләүектәрен ҡойолдора башламаһынмы! Сәхнә халҡы шымып ҡалды, тамаша залы гөж итте – үле бутафория менән тулы майҙанға тормош үҙе бөркөлөп кергәндәй ине! Ошо ғибрәттән шаңҡып,

режиссерыбыҙ үҙе – ул хәҙер мәрхүм инде – күнәк менән һеперткегә йәбеште. Бер һүҙ менән әйткәндә, аҡбуҙаттың тирәһендә ысын ғәрәсәт ҡупты. Әртистәребеҙ шау-яһалма кейемгә, париктарға төрөнгәнлектәрен онотоп, эстәренә ут йотҡандай, йәнләнеп киттеләр ҡапыл, быға са һис булмағанса рухланып уйнанылар. Аҙаҡ шаршау тамаша залының ҡотороп алҡышлауы менән ябылды.

-- Бына һеҙгә, кәрәк булһа, аҡбуҙат сәтләүеге! – Муйыл күҙҙәрен мөлдөрәтеп көлдө таксист.

-- Тетрәнгән режиссер ошонан һуң сәхнәгә ат сығарыуҙы тамам тыйҙы, хатта "Аҡбуҙат" тигән һүҙҙе лә тетрәнеп әйтә башланы. Ә әртистәр әле булһа мәрәкәне онотмай – үле ҡурсаҡ уйыны барғанда аҡбуҙаттың, тере донъяға ҡайтарып, сәхнәлә ҡапыл революция яһауын, сәтләүектәренең әскелтем хуш еҫе зерә татлы бөркөлөүен, берсә, көлөп, берсә, сабый саҡтың иҫтәлеге кеүек һағынып һөйләйҙәр...

-- Һағынып ҡына һөйләйбеҙ шул, -- тине таксист. – Тешһеҙ гуманистар беҙ.

Сәғиҙәнең, ниңәлер, муйыл күҙле был ихласйәнде семетеп алғыһы килә ине – ап-аҡ ынйы тештәрен йымылдатты:

-- Нимә, әллә үтмәй башланымы? Тештәр, тим.

-- Хәҙер улар ҙа тимерҙән ҡуйыла бит – филде лә фаршҡа әйләндерергә мөмкин, -- тине Сәғит.

-- Дәәә, тимер шул, тимер...

Әммә ҡыҙ төңөлмәне:

-- Бер уйлағанда, тимерһеҙ йәшәп ҡара хәҙер! Үҙ урынында тимер тештәр, тимер ҡулдар ҙа кәрәктер. Әйтәйек, мин белгән ҡайбер "гуманист"ар, бәғзе коллегаларымды әйтәм, үксәһенән юнып ташланған сөйәл өсөн дә әрнешеп әрләүсәндәр. Үҙе рәхәтләнеп бейей, ә хирургты "гуманһыҙ" тип тамғалай...

-- Ундай битәрләүселәрҙе мин дә беләм, -- тине таксист. – Ғәжәп нескә күңелле бер дуҫым бар – иҫ киткес сағыу хисле. Бар булмышы түп-түңәрәк: кешене лә, бөжәкте лә -- береһен дә йәберләмәй, бөтәһенә тигеҙ баға – апабыҙ Ҡояш кеүек. Шуның менән бер саҡ ауылға барып, уртаҡ һуғым алып һуйҙыҡ – "пенсияға сығарылған" аҡһаҡ ҡола. Миңә ни, эшем эйәһенә, салыусы ағай эргәһендә йылҡының башын шаҡарып тоторға тура килде. Мин ат башын тотҡанмын, ағай кешем бисмиллаһын әйтеп сала, ә нескә күңелле дуҫым артта күҙ йәштәрен ағыҙып үкһеп тора... Ә һуғым ашына йыйылғас, табында миңә бер ҡыҙарырға, бер буҙарырға тура килде – ни өсөн, тиһегеҙме? Көллө йәмәғәт алдында ул, уйынлы-ысынлы, тигәндәй, салған саҡта минең нисек ат башын шаҡарып тотҡанымды, күҙ йәштәрен ағыҙа-ағыҙа, түкмәй-сәсмәй һөйләне, ҡанһыҙ, выжданһыҙ, гөманһыҙ, тип "шаяртты". Ә табаҡ тулы һуғым ите боҫланып табынға килгәйне, күҙ йәштәрен һелкеп ташлап, ике еңен төрөп алған гөман эйәһе тирләп-бешеп ҡалъя һоғонорға, һоғондорошорға тотондо...

-- Абау!.. – тине Сәғиҙә, сирҡанып.

Таксист ялт-әйләнеп ҡараны:

-- Үҙегеҙ ҙә ҡыҫала мөнтәргә китеп бараһығыҙ түгелме?

-- Юҡ, киреһенсә. – Сәғит уйҙар сылбырынан арынды. – Тәбиғәт мәсьәләһендә һәр беребеҙ үҙен ҡаҙанға һалынған тере ҡыҫала хәлендә тойорға,

үҙендәге тере донъяның теүәллеген ҡурсалап ҡырталашырға, көрәшергә тейештер Ваҡыт!

-- Тура әйтәһең, туған. Йәшерен-батырыны юҡ: иң элек беҙҙең үҙебеҙҙәге теүәллекте, сафлыҡты ҡурсаларға кәрәк, тәбиғәт-әсәйҙең балаһы булырға кәрәк. Кеше үҙенең сафлығы менән матур. Юҡһа, ҡайсағында... Кисә шулай бер ханымды яртылаш юлда әҙәпле генә төшөрөп ҡалдырырға тура килде. Ни өсөн, тиһегеҙме? Бына ошо салонда, кирелеп ятып, тәмәке тартып бара. Ул ғына ла түгел: тәмәке төпсөгөн тәҙрәнән быраҡтыра... Машинаны ҡыҙыу артҡа сиктерҙем дә ишекте асып сығарҙым: был – бабаларҙың изге ере, анау ятҡан әшәкегеҙҙе асфальттан һөртөп алығыҙ, ҡәҙерле гражданочка, мин әйтәм. Үҙегеҙ гүзәл затһығыҙ, ә үҙегеҙ ауыҙығыҙҙан һаҫыҡ шайтан ыҫы таратаһығыҙ!.. Бррр!.. – Таксист сирҡаныс алғандай ҡалтыраны. – Беләһегеҙме, шундайҙарҙың ауыҙынан төшөп ерҙә бүртенеп ятҡан тәмәке төпсөгө нимәне хәтерләтә? Ҡара башлы шаҡшы ҡортто...

Сәғиҙә тертләп ҡуйҙы, Сәғит муйынын эскә тартты – күңеле болғанды ҡапыл.

Әлеге лә баяғы тәмәке бәләһе... Сәғит үҙен күпме генә өйрәтеп ҡараһа ла, зәхмәтле ул ыҫҡа ошо көнгәсә күнә алмай... Әйтеүе лә бик сәйер: хатта романдарҙы ла ул геройҙары ауыҙынан тәмәке ыҫы борҡолоп сығыу менән үк атып бәрҙе, йәки ундай урындарын "төшөрөп ҡалдырып" уҡыны. Һуңғы йылдарҙа фильмдәрҙең сигаретһыҙ бер кадры ла булмауы уны айырыуса алйытты, шуның арҡаһында драма театрын да үҙһенмәне (унда гел тарталар ине). Балетҡа йәне-тәне менән ылығыуы, моғайын, Сәғиҙәнең аҡ томбойоҡ сәскәһеләй сафлыҡ тылсымында; йәнә килеп был театр сәхнәләренең шаҡшы ыҫтан азат булыуындалыр. Бында уның идеалы – Сафлыҡ донъяһы ине, ә Сафлыҡ менән Матурлыҡ ҡуша йөрөй... Ошо сәйер һәм ғазаплы хәлдән арынырға теләп, үҙен ауырыуға һанап, егет бер мәл психиаторға ла күренеп ҡарағайны, әммә атаҡлы профессор ҡыуып сығарҙы уны:

-- Хәҙерге көндә, минең белеүемсә, һин түгел, ә тәмәке төтәткән донъя үҙе психик ауырыу" – тине ул. – Һин, егет, аяныс ыҫлы заманда тыуған киләсәк заман кешеһе – фажиғә шунда ғына. Бар, бирешмә, киләсәк заманың колоннаһында атла. Егерме бернсе быуатта кешеләр барыһы ла һинең шикелле булһа, Ер яңырып йәшәрәсәк!

Ошо уйҙар мейеһенән йәшен тиҙлегендә ҡыйылып уҙып, Сәғит үҙен бынан күп йылдар элек, Тыуған ауылында, бәләкәс малай сағында итеп күрҙе. Ҡасандыр үҙе ерәнеп сығып ҡаҫҡан келәт аҫтына үрмәләп инде, уйнағанда тәгәрләп киткән тубын эҙләргә йәнәһе. Таптым, тип барып ҡағылғаны – тирһе ейеп тарҡалып ятҡан ерәнгес сыҫҡан булды...

Шунан һуң бер көндө Сәғит клуб эргәһендә урамда уйнап йөрөй. Әшнәһе килеп ҡолағына шыбырлай: атайҙар кеүек ауыҙҙан төтөн борлатырға өйрәнәйек, йәнәһе. Ҡотҡо арбап ала, етәкләшеп йүгерәләр. Клуб тупһаһы төбөндәге күләүектә тәмәке төпсөгө табыла. Һарғайып бөткән гәзит ҡағыҙына төрөлгән, теге келәт аҫтындағы сыҫҡан һымаҡ бүртенгән, ҡағыҙы ейеп бүҫелеп киткән тәңгәленән тутыҡ-көрән бөртөктәре тарҡалып, күләүеккә һәр бөртөктән көрән-

һары лайла йәйелгән... Шулай ҙа төтөн борлатырға ымһыныу көслө ине: сыскан шаҡшылығын онотто Сәғит. Әшнәһенән уҙзырмаҡсы, ергә түше менән ятып, күләүеккә эйелде, тәмәке төпсөгөн, әшнәһен шаҡ-ҡатырмаҡҡа, һәүкәш һымаҡ теле менән ялмап алырға итте, тик... һулышына ҡапланған уҡшыҡыс һаҫы, әсе ыҫтан быуылып ситкә ауҙы...

Оҙаҡламай өлкәндәр уның сәйер яғын абайлап өлгөрҙөләр. Ғәжәпләнмәҫлекме ни: атаһын күреү менән үк бала уҡшып ҡоҫорға тотона, өйгә башҡа ир-ат ингәндә лә шул уҡ хәл ҡабатлана. Күҙ алдында сабый һарғайып һулый, күренмәҫ ҡот осорғос сир уны кимереп ашай, әммә фельдшер сырхау сирен аса алмай. Ә малай ләм-мим өндәшмәй. Оло ҡайғы кисергән ғаилә шуға иғтибар итә: сәйерйән көллө ир-атттан да биҙәрләмәй – ҡайберҙәре менән геләһин дә мин, хатта муйындарына аҫылына. Ауылдың бөтә ирҙәрен энә күҙәүенән үткәреп, сәйер улан үҙ иткән һәм ысын мәғәнәһендә ҡоҫоп һырт ҡайырған ике төркөмгә бүлгәс, башы ҡатҡан ата-әсәгә асы хаҡиҡәт асыҡланды: малай үҙһенмәгән ир-ат заттары, шул иҫәптән үҙенең атаһы ла, һәммәһе бер үк тәмәке тартыусы йәндәр, ә һөйкөмлө төркөмгә ҡарағандары – тәмәке тартмаусылар... Атай кеше шул көндә үк көйрәтеүен ташлағас, был асыштың дөрөҫлөгө малайҙың шат күҙҙәрендә сағылды, атаһын биҙәрләп ауырыуынан аҡрынлап ҡына айныҡты. Ләкин тәмәкегә булған ытырғаныуы ошо көнгәсә ҡалды...

-- Урыҫтың бер классик яҙыусыһы әйткән бит, -- тине Сәғит: -- "Тәмәке тартҡан ҡатын-ҡыҙҙы ҡосаҡлағанда мин үҙемде һаҫыҡ тәмәке төпсөгөн ҡосаҡлағандай тоям"...

-- Бр-р-р!.. – тине Сәғиҙә, баш сайҡап...

Таксист иһә фекерен йомғаҡланы:

-- Бигерәк тә тәмәкесе ҡатын-ҡыҙҙы енем һөймәй шул минең. Лев Толстой әйтмешләй, ундайҙарҙы көл тубалына оҡшатам... Ғәфү итегеҙ, тартмайһығыҙҙыр бит һеҙ?

Сәғит яурыны менән тойҙо: ҡыҙ кинәт электр тогы һуҡҡандай ҡалтыранды. Ләкин тиҙ үк иҫен йыйып, сая-шаян өндәште:

-- Тартһамсы һуң? Әллә төшөрөп ҡалдырыр инегеҙме? Мине лә?

-- Юҡ, мин һеҙгә улай тимәйем.

-- Ниңә?

-- Ғәфү итегеҙ, ә мин бит һеҙҙе беләм! – тине таксист йәнә көҙгөнән муйыл күҙҙәре менән тура төбәлеп. Сәғиҙә уның был һөжүмен баҙамай ҡаршыланы:

-- Бәлки, бәләкәс саҡта икәү бергә ҡыҫаланан бармаҡты ҡыҫыртҡанбыҙҙыр? Йә булмаһа теге, аҡһаҡ ҡола булып еткән, ҡырҡмыш тайҙың ялына йәбешеп йөрөгәнбеҙҙер?

-- Юҡ, сәхнәлә мин һеҙҙе ҡолонсаҡ итеп күрҙем. Һеҙ... һеҙ... – Таксист һүҙ таба алманы.

Мөрәхәтһенмәй тыңлаған Сәғит ҡулын тегенең яурынбашына һалды:

-- Етте, туҡтатығыҙ.

Таксист тормозға баҫты, тимер ат ҡапыл, тешкә ҡом ҡыҫылғандай, үҙәккә үткәргес сыйылданы.

-- Бәй, "Томбойоҡкүл"гә етмәнек тәһә?

-- Артабан үҙебеҙ, рәхмәт. – Сәғит усындағы өс һумлыҡты һондо.

-- Кәрәкмәй. – Таксист аҡсаны ҡул һырты менән этәрҙе.

-- Нисек була инде был?

-- Рәхим итегеҙ. – Ырғып төшөп, ишектәрҙе асып сығарҙы. – Ятбауырҙар түгел бит беҙ. Тере ҡолонсаҡҡайҙарыбыҙ, ҡыҫалаларыбыҙ хаҡына!

-- Бына һиңә кәрәкһә! – тине Сәғит. Борҡота сабып киткән "тимер ат"ты ҡарашы менән оҙатып, юлдашын ҡултыҡлап алды. – Был донъяла беҙ икебеҙ генә түгел икән дә. Көллө донъя, иламһырап, яндан елеп уҙып киткән ҡолонсаҡтарын һағына...

VII

"Томбойоҡкүл"гә ағай-эне эркелгән – ниғмәт тулы өҫтәлдәрҙә табын мәжлесе ҡыҙа, бер арала музыка саҡ ҡына тынып ял итә, умарта күсе гөжләгәндәй талғын ғына күмәк тауыш тирбәлә зал иңендә. Кешеләрҙең баш осона бормасланып күтәрелгән тәмәке төтөнө спиралдәре зәңгәр пружиналар булып түшәмде терәп тора. Әсе тормош тәжрибәһен етерлек татыған Сәғит, өйҙәрендәге үҙенең бүлмәһендә лә, теплоход каютаһында ла һис тәмәке еҫенә түҙмәһә лә, бындай күмәк ерҙең быулы һөрөмөнә күҙҙе йомоп барып инергә, кәрәгенсә сыҙамлыҡ һаҡларға күнектергәйне үҙен. Ҡолаҡҡа ҡырыҫ бәрелһә лә әйтәйек: йәмәғәт бәҙрәфенә лә бит беҙ бөтә уҡшыуҙарҙы тыйып, үҙебеҙҙе еңеп кенә керәбеҙ -- ә тартмаған кешегә иһә тәмәке ыҫын аңҡытыусы теләгән бер әҙәм тап шуны хәтерләтә... Ошо йәшкә етеп Сәғиттең йүнләп ҡыҙҙарға ла һырныҡмауының сәбәбе лә, бәлки, баяғынан киләлер: ғүмер баҡый ҡыҙҙар тирәһен, хатта улар үҙҙәре тартмаһа ла, зәңгәр төтөн сырмай бит... Һәр хәлдә, Сәғит ыҫлы ресторанға ҡыйыу аяҡ баҫырға тәүәккәлләнде, сөнки ғүмерлеккә яңғыҙ ҡалырға ла бер аҙым ғына хәҙер... Шулай ҙа ул инеү менән иҫ йыйып, йылтыр шешәләр теҙелгән барҙың арғы башына – күлгә ҡараған асыҡ верандаға ыңғайланы. Ылымыҡтар аңҡына ҡушылып йылға битенән ағылған дымлы һауаны ләззәтләнеп һулай-һулай, юлдашына бормаслы ултырғысты йәтешләп көйләргә ярҙамлашты.

-- Йәштәр, нимә эсәһегеҙ? – тине бар артында йылмайып торған, ҡурсаҡтай кершәнләнгән ханым. Икеләнеберәк ҡалған Сәғит урынына Сәғиҙә яуапланы:

-- Француз шарабы ҡушылған коктейль болғатып бирегеҙ.

-- Ҡабымлыҡҡа ҡыҫаламы?

Был тәҡдимдән ресторан күлгә әүшәрелгәндәй булды, Сәғит менән Сәғиҙәнең ҡарашы төкәлеште. Улар, моғайын, таксисты хәтерләне.

-- Юҡ, беҙгә уныһы кәрәкмәй, -- тине Сәғит. – Беҙгә ғәҙәттәге ҡабымлыҡ ярай.

Һалам буйлатып һурған утлы коктейлдән баштар шөйлә еңеләйҙе,залдағы геүләү ҡолаҡҡа шаҡтай яғымлыраҡ тойолдо. Күл өҫтөндә, әкиәттәгеләй ғәжәйеп килеп сығып, ҡандай алһыу ҡанатлы аҡбалыҡ йөҙә, һыуға кәйелеп осҡан энә ҡараҡтарын йоторға ҡырҡышып ҡарпый. Томбойоҡтоң яҫы япрағы өҫтөндә, кемдер ырғытҡан икмәк һыныҡы тирәһендә, күксәпсек бөтөрөлә.

-- Их, донъялар ниндәй хозур! – һыу ситенә яҡын ултырған Сәғиҙә, хистәргә бирелеп, күҙҙәрен ләззәтле йомобораҡ салҡайҙы. Шул ыңғайҙан ултырғысы ла һыуға әүешеп әйләнә бireп ҡуйҙы, ә егет, йөрәге “жыу!” итеп, ҡыҙҙы арҡаһынан тотто. Әммә прима-балеринаның бындай ғына хәрәкәттән йығылыры үҙе бер көлкө ине – кинәнеп йылмайыштылар, ә Сәғиттең ҡулында ҡыҙҙың таныҡ-тығыҙ, баҙыҡ тәненең серле тылсымлылығы йоғоп ҡалды...

-- Әллә берәй әйләнеп алабыҙмы? – тине ул, саяланып.

-- Әйҙә, булмаһа.

Зал түренә икеһенең эйәртенешеп уҙыуын, егеттең “һыңар ҡуллы бандит” (автомат) боғаҙына көмөш тәңкә төшөрөүен бөтә күҙҙәр ҡыҙыҡһынып күҙәтә кеүек ине. Көмөш йоткан төпһөҙ боғаҙҙан көр музыка урғылып сығып, быларҙы ла ҡоторонҡо үҙ көйөнә эйәртте, хәрәкәттәр дауылына өйөрҙө. Ҡыҙҙың һығылмалы нәҙек билен ҡул тейҙереп тотоу егет күңелендә нескә кисерештәр гаммаһын тоҡандырҙы – сабый саҡта беренсе тапҡыр күл буйында үтәҙек һыуҙы кисеп барып аҡ йондоҙҙай тырпай-балҡыу томбойоҡ сәскәһен оҙон-һуйҙан һабағынан услағанда ошондай уҡ рәхәт тойғо яралғайны йәнендә: тығыҙ һабаҡ һыу аҫтында уста шаян бөгөлөп-һығыла, ә һыу өҫтөндә аҡ йондоҙо тыныс ҡына тик тора...

Сәғиҙәгә егеттең ҡыланыш-килбәттәре, хәрәкәттәре нисектер ҡырыҫайып киткәндәй күренде. Һөнәре буйынса ир-ат тәненә ни ҡәҙәр яҡын булып та, ошоғаса бындайын да йөрәккә үткес ҡырыҫ яҡынлыҡ кисермәгәнлектәнме, көллө тәне эҫеле-һыуыҡлы булды, башы еңелсә генә зыңҡып әйләнде. Күңеленең төпкөлөндә үҙенең был хәүефле хәлгә төшөүенә, хәмер еленән ҡыҙыша биргән партнерының күрәләтә “дәүләт сиге”н боҙорға, тәртәне тибеп һындырырға маташыуына ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо уянһа ла, ғүмерҙә һис булмағанса, ҡаршылыҡ ауазын баҫты, һыуҙың ағышы ыңғайына йөҙөргә тәүәккәлләнде. Үткән юлы Сәғит оҙатып ҡуйғандан һуң бүлмәһендә көҙгө алдында оҙаҡ тексәйеп торғайны, шунда, борсоулы уйҙарына тарып, ирене мөйөшөндә генә һис бер әҙәм күҙенә лә салынмаҫлыҡ ҡылдан нескә һыҙылышлы йыйырсыҡтың (тәүге киҫәтелеүенең!) хыянатсыл ҡылысын абайлағайны... Был асыш уны йөрәгенә үткәҙеп һыҡтандырҙы, шул уҡ саҡта баш китерлек тәүәккәллек тә бирҙе: әле һуң түгел, ҡарт ҡыҙ исемен күтәрмәҫ элек талпынып ҡалырға кәрәк!..

Таҡмаҡ ҡайһылай башланһа, шулай уҡ ҡапыл тынды, бейеүселәр, магниты бөткән уҡмаш тупсыҡтар кеүек, төрлө яҡҡа тарҡалды. Сәғит менән Сәғиҙә лә, ҡулға ҡул тотоношоп, һыу ситендәге урындарына килде. Тик уларға тыныс ҡалырға насип итмәгән икән. Иҙеүҙәрен сисеп ебәргән, бешкән ҡыҫалалай ҡыҙарып бүртенгән иҫерек ике бәндә һөйрәлеп килеп инде лә эргәләрендә тукталды.

-- Әй, ағай кеше, соҡортайыңды бир әле! – тине, йәмһеҙ кикереп, алдағыһы. Сәғит өндәшмәне, эйелеп, стакандан коктейль һемереүен белде.

-- Күрмәйһеңме ни: сәпелдәтеп бөтмәгәндәр, -- тине арттағыһы. – Ҡарағыҙ әле үҙҙәрен: американдармы ни – һалам аша ғына ебәрәләр!

-- Хо-хо-хо, ә беҙ Рәсәйҙә йәшәйбеҙ. Рәсәйҙә беҙ ни рәүешле тұңкәргәнде күрһәтәйек уларға!

-- Ағай кеше, улай оҙаҡ бызмырлама, беҙгә стакан кәрәк, -- тип асыҡлыҡ индерҙе арттағыһы. Сикәләрен өтөп алған Сәғит бер уҡталғайны, Сәғиҙә тотоп ҡалды:

-- Ҡуй. Аңдары боларған бит.

-- Аҡыл көршәктәрен шаңҡытып айнытырға кәрәктер?

-- Ҡуй, ярамай.

Бар артындағы ханым көр сарбайланы:

-- Эй, йолҡоштар, һеҙгә ни кәрәк тағы? Милициямы?

-- Эх! – Стакан даулаусы үкенеп бармаҡ шартлатты ла ҡул һелтәне, Сәғиттән ситкә бороллдо. – Апаҡай, матурҡай, Сэм ағай һемерә торғаныңдан берҙе ҡойоп бирсәле!

-- Еткән инде һеҙгә, -- тине ханым, баш сайҡап. Шулай ҙа яртылаш морс һалынған һаламлы стакан һондо. Бәндә эсемлекте еҫкәп тә ҡараманы, йөҙөн сытырайтып, тырпай һаламы менән ҡуша күлгә һирпте:

-- Һаламлы был йыуынтыҡты ҡоба һыйыр тыҡшынһын, хо-хо-хо! – Пинжәгенең эске түш кеҫәһендә боҫоп ултырған йәшкелт шешәнең ауыҙын түбәнерәк ауыштырып, ҡулындағы стаканға бүлкелдәтте, әшнәһенә услатты. Тегеһе йотҡанын да көтмәй, шешә боғаҙынан тура үҙ боғаҙына ғорҡолдатты, бушанған шешәне күлгә атты. Яҫы томбойоҡ япраҡтары өҫтөндә ултырған тәлмәрйендәр супырлап һыуға сумды, ҡыҙыл ҡанатлы аҡбалыҡ та юҡҡа сыҡты.

-- Бына ошолай, ағай кеше. Һаламһыҙ-ниһеҙ, ҡабымлыҡһыҙ түңкәрә беләләр беҙҙә, Рәсәйҙә! – Абына-һөрләгә тышҡа тәпәйләнеләр. Күл өҫтөнән күҙен алмай ултырған Сәғиҙә, һыуҙағы шешәнең бүк-бүлк батыуын күреп, әсенеп һөйләнеп ҡуйҙы:

-- Эх, был беҙҙәге түңкәреү ғәҙәттәре!.. – Кәйефтәре боҙолоп, эсемлектәрен ҡалдырып сығып киттеләр. Саф һауала бераҙ хәл алып торғас, аҡ ҡайындар араһындағы һуҡмаҡтан яй ғына атланылар. Алма сәскәләрен туҙғытҡан иртәнге ел әллә тынған, әллә бында һил урман ышығымы – “ыш” иткән дә һиҙелмәй, көн алсаҡ, һыу бите ҙур көҙгөләй ялтлап ята. Сикәләргә сәпәған ҡайын тәлгәштәренән яҙғы сафлыҡ сайырланып яғылды, тәбиғәттең һутлы еүеш ирендәре суп-суп үбеп бара кеүек тойолдо. Уларға тиҙерәк оло юлға сығырға, такси туҡтатырға, Сәғиҙәне фатирына оҙатып ҡуйырға кәрәк. Иҫләмәй ҙә ҡалдылар: алдарында ҡыҙышҡан йәнле бер төркөм ир-ат күренде, араларында баяғы икәү ҙә бар ине. Яҫы-клүш балаҡтарын ялпылдатып, тар һуҡмаҡты быуып ҡаршы киләләр. Бына улар терәлә яҙып туҡталды, был икәүҙе, таймаҫ-тайпылмаҫлыҡ итеп, бөтә “фронт” менән ҡамтарыҡлап алды.

-- Ҡәҙерлеләрем, тартырға бармы? – тине, тымаулаған танауын шурылдатып, урҙа яурынлы, урыҫ һаҡаллы береһе. Иҫнәп киң асылған ауыҙы тәмәке төтөнө һарғайтҡан шырт ҡыл араһынан тере яралай сейләнеп күренде, унан тоҙло балыҡ еҫе, махра ыҫы ҡатыш әсе хәмер еҫе уҡшытып бөркөлдө, һулышты ҡапландырҙы.

-- Юҡ, тартмайым! – тине Сәғит, башын ситкә ҡайырып.

-- Әһә, ҡәҙерлекәйем, тартмайһың? Бәлки, бына был матур дамочка көйрәтәлер? Ә?! – Һаҡалтай, әшнәләренә мут күҙ ҡыҫып, тексәйеп яҡынланы,

бармаҡ шартлатып киҫәтте – хәҙер әкәмәт күрһәтәм, әҙер тороғоҙ, йәнәһе. Тегеләре беразам хихылданылар.

-- Мырҙалар, юлығыҙҙа булығыҙ! – Сәғит, алға уҡталып, һаҡалтайҙы Сәғиҙәнән этәрҙе; тик яндағы ике әҙмәүер шунда уҡ уны, ҡулдарын тупаҫ шаҡарҙы ла, бер ситкә елтерәтте:

-- Шым! Һелкенмәй генә шығайып ҡат, ағай кеше. Томшоғоңдо ҡайыртаһың килмәһә...

-- Сәғи-и-ит! Ҡотҡа-а-ар! – Ҡыҙҙың үкһеүе тетрәтте. – Уй, яуыздар, яуыздар!..

Егет ярһып ҡулдарын ысҡындырҙы ла, тотоусыларын ике яҡҡа һелкеп ебәреп, ярҙамға ташланғайны, тағы ла икеһе килеп етеп, ергә бөкләп һалдылар, өҫтөнә атландылар:

-- Сеү, архар! Ҡоралайыңа зыян теймәҫ, әгәр ҙә аҡыллы булһа.

-- Прима-балерина бит ул, ебәрегеҙ!

-- Әһә, шулаймы? Сисендереп тәпәйҙәрен күрәйек, хо-хо-хо!

-- Ҡотҡарығы-ы-ыҙ! – Сәғиҙәнең тауышынан тамам йәрәхәтләнеп, йән көсөнә тартышып ҡараны егет...

Автомобиль гөрөлдәп килеп туҡтағаны, ишеге шартлап асылғаны ишетелде.

-- Килеп етте, ниһәйәт, сәсрәмәгере “ерән һаҡал”! – Атланып ултырыусы бәндә Сәғиттең башын бушата биргәйне, ҡалҡына биреп ҡарап, ысынлап та “ерән һаҡал”ды таныны: йүгереп килеп ул Сәғиҙәне айпалаусы яуызды һуғып йыҡты, иҫенән яҙған һылыуҡайҙы ҡосағына күтәреп алып, машинаһы салонына индерҙе; моторын хәтәр ғыжылдатып, күҙҙән дә юғалды.

-- Әһә, булды – спектакль тамам! – тине атланып ултырыусы, ҡулдарын бушатып һәм ҡалҡынып. -- Ысҡындырығыҙ архарҙы! – Хатта береһе ҡулынан тартып торғоҙҙо: -- Бар, олаҡ, беҙҙең һиндә эшебеҙ юҡ!

-- Кемдә һуң эшегеҙ бар?

-- Кем мулыраҡ сумырһа, шуға хеҙмәт итәбеҙ, хо-хо-хо! Күрҙеңме “ерән һаҡал”ды? Аҡсаһын йәлләмәгәс, танауың аҫтынан прима-балеринаңды алып һыҙҙы. Алданыраҡ түләһәң, ул туташ, һис шикһеҙ, һинеке булыр ине. Бар, олаҡ, дүрт яғың ҡибла хәҙер!

Сәғит тештәрен шығырлатып тыңланы...

Төнө буйы, серем итә алмайынса, әйләнеп тә тулғанып сыҡҡан егет, артистарҙың репетициялар мөҙҙәтен саҡ көтөп алып, көндөҙгө сәғәт ун икеләрҙә театрға шылтыратты, саҡ табып килтерҙеләр.

-- Әү, тыңлайым! – Йәнгә үткес яғымлы, йылы тауыш.

-- Сәғиҙә... -- Телефон сымынан ҡапыл һалҡынлыҡ бәрҙе:

-- Ваҡытым юҡ! Ниңә мине эшемдән бүлдерәһегеҙ?!

-- Сәғиҙә... – Һуңғы ваҡыттарҙа үҙенән-үҙе урынлашҡан йылы “һин”дән һалҡын “һеҙ”гә күсеүҙе шаңкыбыраҡ ҡабул иткән егет, тотлоға-тотлоға, һүҙҙәрен йота-йота, “ерән һаҡал”дың ҡайһындай ҙа хәтәр бәндә икәнлеген, унан һаҡланырға кәрәклеген аңлата башлағайны ла, уғата артты өшөткөс һалҡынлығы:

-- Ха, кемдән ишетәм бины! Кем мине кисә яһил хулигандар ҡулына тапшырҙы, ә кем ҡотҡарып алды?!

-- Телефондан әйтеп бөтөрөп булмай, күрешәйек! Һөйләрмен...

-- Юҡ! Һеҙҙең ишене күргем дә, һөйләшкем дә килмәй! Бөттө! – Һулҡылдап илау салынып ҡалды ла элемтә ҡылы өҙөлдө.

VIII

Балет театры бийыл, сезоны ябылыу менән үк, гастролдәргә китмәне, ә әртистәрҙең һәммәһен йыллыҡ ялдарына тараттылар. Сәғиҙә лә ҡалала юҡ – Ҡафҡазғамы, Ҡырымғамы курортҡа киткән, тинеләр. Сәғит теге ваҡиғанан һуң, шаңҡып йөрөп, ҡыҙҙы күрә һәм аңлаша алмауына үкенде, шул уҡ ваҡытта Сәғиҙәнең төптө һанламауы йүнкетте.

Әмәлгә ҡалғандай, шул мөҙҙәттә "ерән һаҡал" да юҡҡа сыҡты, һыу өҫтө һәм яр буйҙары уның шарылдаҡ моторынан арынды. Шуныһына шөкөр иткән Сәғит шөйлә тынысланды, Сәғиҙәһен әсенеп уйлаһа ла, сабырлыҡ һаҡларға тырышты. Әммә йылға буйҙарын ныҡышып тентеүҙән туҡтаманы, сөнки "ерән һаҡал"дан башҡа ла йылғырҙар, тәбиғәтте вәхшәтләүселәр бар ине.

Сәғиҙәнең китеүенә ай ярым самаһы үткәс, ярҙамсыһы Алеша менән үҙҙәренең "Томбойоғ"онда Ағиҙел үрҙәрен бер талай гиҙеп йөрөп, көндәлек дозорҙан ҡайтып киләләр ине. Көтмәгәндә йылға иңдәрен баяғыса ҡолаҡ ярып шарылдау ҡалтыратты, инспектор кәмәһенә ҡаршы яҡтан дөрөүсе, алыҫтан уҡ таныш катер-амфибия күренде – "ерән һаҡал" тап үҙе! Ғәҙәтенсә, ҡоштай осортоп елә, ә кәмәнең ситендә, аҡҡош ҡанатылай ап-аҡ беләктәрен ағын һыуға сумырып, яҫы һалам эшләпәһен эйәге аҫтына тарттырып бәйләгән, ап-аҡ күлдәкле бер һылыуҡай ултыра. Инспекция "Томбойоғ"он күргәс тә, азамат моторын уғата яман үкертте лә, уҡтай атылып, тура быларҙың өҫтөнә тоҫкалдырҙы – ҡурҡышынан инспектор бер ҡырый янтайыр ҙа күҙенән ысҡынырмын, тигәндер... Тик Сәғиттең теңкәһенә үтә ныҡ тейгәйне шул – тешен ҡыҫып ҡаршы барыуын белде, ә Алеша рупорҙан тегегә туҡтарға бойороп һөрәнләне. Төкөшөргә илле метрҙай ғына ҡалғас, хулигандың нервыһы барыбер ҡаҡшаны: ажарлы амфибия, һул яғына ҡырт боролоп, Томбойоҡкүл йырынына инеп китеп юғалды, хатта ҡапыл ҡайырылғанда кәмә ситендәге әлеге эшләпәле һылыуының һыуға ҡолап ҡалыуын, ярҙам һорап ҡыскырыуын да һис бер иғтибарламаны...

-- Артынан төш! – тине Сәғит Алешаға кәмәнең рулен биреп. – Юҡ! Кисекмәҫтән "Томбойоҡкүл" ресторанына туҡталып, телефондан медицина тиҙ ярҙамын саҡыр! – тип бойороп оҙатты ла һыуға һикерҙе, батып барыусы ханымды ҡоро ярға һөйрәп сығарҙы. Битенә ҡапланған эшләпәһен алып ташлағас, йөрәге "жыу!" итеп туҡтағандай булды, белештермәй ҡысҡырҙы:

-- Сәғиҙәм! Томбойоғом, һин бит был!..

Ҡыҙҙың күҙҙәре асылды, ирен мөйөштәрендә еңелсә аптырау һыҙатланды:

-- Эйе, мин... мин... – Һулығып-үкһеп иланы...

IX

Бөгөн опера театрында яңы сезон асыу спектакле – йылдағыса “Томбойоҡкүл” балеты. Көн һаман кискә ауыша, спектакль башланыр сәғәт яҡынлай ҙа яҡынлай...

Сәғит, бүлмәһендә яңғыҙы ҡалып, Сәғиҙә хаҡында уйлай. Теге аяныслы көндә уны тиҙ ярҙам дауаханаһына үҙе оҙатып ҡуйһа ла, башҡа күрешкәне лә, шылтыратышҡаны ла юҡ: йәйге ялында ай буйына диңгеҙ ярында Алғыр Ниәтшин менән бергә булғандарын ишетеп көйөндө шул...

Һағышынан айный алмай, телевизор клавишаһына баҫа. Экрандағы кеше йөҙө томанланған күҙҙәренә көскә тоташа, тауышы меңәр саҡрымдағылай тоноҡланып ишетелә:

-- Бөгөнгө беҙҙең зәңгәр планетабыҙҙың хәле – үҙен араҡы, тәмәке һәм төрлө наркотиктар менән тынҡыслаған ахмаҡ әҙәм балаһыныҡы кеүек. Ул бахырҙың бауыры, бөйөрө, үпкәләре, йөрәге һәм башҡа эске органдары шул зарарлы матдәләрҙән нисек һыҡтап һыҙлаһа, киңгәһә, зәңгәр планетабыҙҙың да яҙмышы ҡыл осонда: күккә ашҡан ағыулы быуҙарҙан, ергә-һыуға һеңгән химикаттарҙан, күҙгә күренмәй йәйелеүсе бысраҡтарҙан арсаланырға хәле ҡалмай бара уның. Минутлыҡ рәхәткә алданып үҙенең мәңгелек ғүмерен әжәл алҡымына һалған әҙәм балаһы бөгөн инде яңғыҙ үҙен генә түгел, ә көллө тәбиғәтте, бөтә планетаны аяныс хәлгә тарыта. Әҙәм организмының да, зәңгәр планетабыҙҙың да ағыуҙарға ҡарышырлыҡ тәҡәте ҡороп бара – уның эске резервтарының да сиге бар. Шул критик сиккә етеү – үлем... Замандаштарым, белегеҙ! Үҙенең сафлығын юйған әҙәм – донъяның сафлығын быуа. Үҙенең сафлығын ҡайғыртҡан йән – донъяның сафлығын һаҡлай...

Сәғит клавишаны батыра, зәңгәр экран тоноҡланып һүрелә. Ҡайҙа ғына һуғылһаң да, әлеге лә баяғы бер балыҡ башы. Юҡ, былай ҡалыу мөмкин түгел!

Өҫтәлдәге ҡайырма календарҙе аса. Ике дана театр билеты ҡыҫтырылған. Эйе, ике, сөнки ул Сәғиҙә бейегән иң шәп “Томбойоҡкүл” спектакленә йәнә кемделер килтерергә ғәҙәтләнгән...

Сәғит күҙҙәрен йомған килеш театр билеттарына төбләп ҡата, оҙаҡ ойоп ултыра, күҙе йомоҡ килеш барып койкаһына йығыла.

Бына ул үҙен күңеленең ҡараңғы бушлығынан алыҫтағы зәңгәр планетаға бағып торғандай тоя. Юҡ, сағыу балҡышлы саф зәңгәр, юҡ! – ап-аҡ саф томбойоҡ был! Ғаләм төпкөлөнән һомғол һабағында тирбәлә. Япа-яңғыҙ аҡ томбойоҡ, берҙән-бер аҡ томбойоҡ. Ҡайһындай саф томбойоҡ!.. Ләкин һомғол һабаҡ буйлап үрмәләй-үрмәләй ҡара быу күтәрелә, томбойоҡҡа ҡылйыландай урала. Үҙе – ҡара, ә һаҡалы еп-ерән... Сәғит, ошо ҡотоҫкос ҡылйыландың беҙҙәй осло күҙҙәрен күрмәҫ өсөн, муйынын һындырырҙай артҡа салҡая, башын сатнатырҙай бәрә стенаға. Өнмө был, төшмө, әллә хәтәр һаташыумы?..

Ишек шаҡыйҙар икән. Әсәһе, кемдәрҙелер эйәртеп инеп, уның баш осонда тора. Төшлөгөн уҙған ҡояштың һүрән нурҙары тиртә тәҙрәнән. Ишек төбөндәгеләр тамаҡ ҡыра. Бәй, үҙебеҙҙең Алеша менән Дуняша – вахтасы

ҡыҙыҡай бит был! Эйәртенешеп килгәндәр. Ҡарағыҙ әле: ҡыҙҙарҙың һипкел-йондоҙҙар һибелеп биҙәлгән йөҙҙәре ниндәй матур – күктәрҙең сихри яҡтылығы ошо йөҙҙәрҙән башлана!

Күкрәгенән шатлыҡ тулҡыны сайпылған Сәғит айнып ырғып торҙо, ҡунаҡтарҙы түргә уҙырға ҡыҫтаны. Ләкин йәштәр бик ашығыс ҡына килгәндәр икән. Ҡыҙҙың шаян һипкелдәре менән йәм-йәшел егет күҙҙәре яңы йоҡонан уянғандай иҫәнгерәүле Сәғиттең күңелендә, нисектер, икеһе бергә ҡушылды – йәшкелт иҙел ҡосағында шат тирбәлеүсе аҡсарлаҡтар көтөүендәй сағыу ҡыуаныс тыуҙы.

-- Беләһегеҙме, Сәғит ағай, -- тине Алеша, күҙҙәренең саф йәшеллегенә бүлмәне күмелдереп, тулҡынланыуҙан һүҙҙәрен ҡыртылаш йотоп, -- Дуняша менән балетҡа тип килгәйнек, тик... тик... билет таба алмайбыҙ.

-- Тантаналы сезон асыу, "Томбойоҡкүл" бит әле... – тине ҡыҙ. – Шундай үкенес... Һеҙ, Сәғит ағай, телефондан шылтыратып, контрамарка алып бирмәҫһегеҙме икән?

Ошо мәлдә Сәғиткә донъя йөҙө ҡапыл яҡтырып, сафланып киткәндәй булды, уның күҙ алдында ап-аҡ томбойоҡ төҫмөрләнде. Йөрәгенең тулағанын башҡалар ҙа ишеткәндәй албырғанып, календәргә ҡыҫтырылған ике билетты алды, матростың түш кеҫәһенә төшөрҙө:

-- Хәйерле юл теләйем, дуҫтар, һеҙгә... Бөгөн... бөгөн... прима-балерина Сәғиҙә Салауатова бейей... – Ҡунаҡтарҙы ишектән оҙатып ҡалып, көҙгө янына килде, таушалған күлдәген һалып, ҡарҙай ап-аҡ нейлон күлдәген кейеп, иң айбарлы галстугын бәйләне. "Эйе, беҙҙәрҙең сезон ябыла – һеҙҙәрҙеке асыла!.." Контрамарканы үҙенә алырға тейеш...

Ҡәҙерле уҡыусым, күҙ һалһаңсы Ағиҙелдән күтәрелмеш киртләс-киртләс мәрмәр баҫҡыстар буйына! Унда, биш аҙымын бер баҫып, үҙенә ҡуша йылға елдәрен эйәртеп, мыҡты һынлы ағиҙелсе ҡалаға менеп бара. Баҫҡыстар артта ҡалды, егет, сажин аҙымдарын һалып, ике ҡулын ныҡ һелтәп, нурҙай тура урам буйлап ашыға. Елгә ҡаршы күкрәк киреп, ҡыйыу аҙымлап бара – Планетаның тәбиғәтен һаҡлаусы инспектор. Донъяның ул ағын да, ҡараһын да күрә белергә тейеш!

Сәғит шуны йөрәге менән тоя: икеһенең хушлашыу кисе түгел был. Томбойоҡтар ил күрке өсөн тыуа, томбойоҡтар хушлашмаҫҡа, мәңге бәхет килтерергә үркелә -- бына шуны белеү зарур беҙҙәргә.

Эйе, ҡара йәнле ҡылйыландар томбойоҡто уралып быумаһын өсөн, һәр беребеҙ үҙендәге ап-аҡ томбойоҡ сафлығын балҡытырға, Матурлыҡты арыҫландарҙай ҡурсаларға бурыслы.

25.12.1976

ФЕКЕРҘӘР

КОНТИНЕНТАЛЬ ИМПЕРИЯМЫ, ӘЛЛӘ ӨСӨНСӨ БӨТӘ ДОНЪЯ ҺУҒЫШЫМЫ?

Кешелек донъяһы тарихында октябрь, 1917 йылдан башлап, Ер шарына һәләкәтле түңкәрелеш менән янаусы, халыҡтарға ҡанлы фажиғәләр килтереүсе ай булараҡ уйылып ҡалған. Ләкин шуға ла ҡарамай, донъяның аҫтын өҫкә түңкәреүҙән ус йылытып байман табырға, тап шул октябрсыларҙай, бөтә донъяның бойороусыһы булырға хыялланыусылар ҙа әле булһа моронлай был донъяла. Календарҙа иҫкесә октябрь еткән һайын, уларҙың шул ҡысытма сире ҡуҙғала. Ҡысытманың шаҡшы вирусы билдәле – Рәсәй батшаһы (президенты, верховный правителе, большевистик диктаторы – бары бер!) хакимлығындағы бөйөктәрҙән-бөйөк империя шыттыртыу, ер йөҙөндәге барлыҡ "халыҡ-һарыҡ"тарҙы бер көтөүгә өйөрөп сыбыртҡы шартлатыу. Шуны төштәрендә күреп илереүсе әтрәгәләмгә тап быйылғы октябрь, ниһәйәт, рухи бүләк килтерҙе -- йөрәктәрен шартларҙай елкендертте: замандаштарының күпселеге нығыраҡ ярлыланғаны һайын сереп байыған ярым олигарх-монархист, урта ҡуллы кинорежиссер Никита Михалковтың һәм компанияһының "Право и Правда" тигән "мәғрифәтле консерватизм манифесы" иғлан ҡылынды. Төрлө битлектәр аҫтында илереүсе йәшелле-күкле империялистар шул "шедевр"ҙы уҡып, ҡысытҡан устарын ыуып ҡыуанды. Мәрхүм ҡыҙыл империяны һәм ҡыҙыл ҡанға буялған "бөйөк атайыбыҙ" Сталинды һағыныуҙан зар-илаған Мәскәү әҙибе-сәйәсмәне Александр Проханов: "Рукой Михалкова водил Господь Бог или ангел небесный" тип суҡынып тәбрикләһә, Рәсәй Федерацияһының Дәүләт Думаһында өҫтөнлөк итеүсе Берҙәм Рәсәй партияһы депутаттары шул "манифест"ы күптән көтөлгән таныҡ тәғлимәт рәүешендә алҡышлап ҡабул ҡылды, тип яҙҙылар. Тимәк, "Ҡанлы Николай-батша"ны һәм әҙәм балаларын дарға аҫыуҙар оҫтаһы "Верховный правитель Колчаҡ"ты данлап кинолар яһаусы империалист-монархистың "отрыжка"һы Рәсәй дәүләт сәйәсәтенең нигеҙ ташына һалыныры ла бик ихтимал. Әгәр шулай була ҡалһа, Кремль еле Ағиҙел ярына ла тиҙ үк ҡағылмаҫ, республика Ҡоролтайының берҙәм һулышына әүерелмәҫ, тип әйтмәгеҙ, сөнки унда бит бер кемдең дә депутаттары түгел, ә хакимлыҡ итеүсе Берҙәм Рәсәй партияһы исемлегенән һеперелеп килеп кергән, шул партия штабынан көйәҫләнмеш теләһә ниндәй елдәрҙе лә хуплап "бер тауыштан одобрямсь!" кнопкаһына ғына төртөргә, ауыҙҙарынан шул бер өндө генә сығарырға көйләнгән робот-чиновниктар Кремль ҡаҙансыһының ашлы сүмесена тилмереп ҡарап ултыра, ә республика мәнфәғәттәрен алға һөрөргә кәрәккәндә улар берҙәм һуҡыр ҙа, өнһөҙ ҙә. Дөрөҫ, үҙ ҡорһағын, тирәһен, карьераһын ғына ҡайғыртҡан, шуны ғүмерлек һөнәренә әүерелдергән робот-чиновниктар бер беҙҙә генә түгел, ә бөтә Рәсәй күләмендәге өҫкө ҡатлам булып тора. Фиғылдары -- көнгә

ҡарап төҫөн алмаштырыусы хамелеондар, тирһең: кисә СССР заманында ғәйәр коммунистар ине, бөгөн -- чекист Путин партияһында; ә Зюганов тәхеткә менһә, көт тә тор -- улар ҡабат коммунист; Жириновский үрләһә -- тоғро ЛДПР-сы; “лимонка” бомбаһына усы йәтешләнгән Лимонов хәрәкәте еңһә – ғәйәр лимоновсылар; михалковсы-монархистар нафталиндан сығып ҡарпыһа – башы-тояғы менән монархист булыр. Ҡыҫҡаһы, партиялар һәм лидерҙар күтәрелә лә төшә, ләкин робот-чиновниктар ҡатламы мәңге ҡала...

Дәүләт булғас, чиновниктары ла кәрәк, әлбиттә. Ләкин беҙҙекеләр ише бер өнлө, “бер тауыштан одобрямсь!” алҡышлы маңҡорттар – Рәсәй чиновниклығының иң юғары ҡаҙанышылыр, моғайын. Эшмәкәрлектәре шул сифатҡа барып етте ки, бөтә Рәсәйгә таныҡлы үлтереүсе-бандитты юғарынан кемдеңдер ҡушыуы буйынса иң юғары органға -- Федерация Советына Башҡортостандың сенатор-вәкиле итеп бер тауыштан һайлап ебәрҙеләр, бандит унда бер-нисә йыл буйына Башҡортостан халҡы исеменән эш ҡырып ултырҙы...

Һорау тыуа: үҙ фекерен, мәнфәғәтен алға һөрөү өсөн ике йөҙ йыл буйына ҡораллы яуҙарҙа көрәшкән ғорур халҡыбыҙҙың өҫкө ҡатламын кем һәм нисек, ни рәүешле ошондай өнһөҙ үлән хәленә еткергән? Етмеш йыл буйына үҙебеҙ алҡышлап тәбрикләгән, һәр сәйәси аҙымына “ободрямсь!” оранлаған ғәзиз Совет хакимиәте, большевиктар партияһы, әлбиттә. Сағыу миҫалын алыҫтан эҙләйһе юҡ -- Ҡыҙыл байраҡ орденлы большевик-уҙаманыбыҙ Шәһит Хоҙайбирҙиндың тәржемәи хәленән генә байҡайыҡ. 1920 йылда Ленин декреты менән автономияның тамырына балта сабылып, башҡорттоң үҙ фекерле, һүҙле лидерҙары хакимиәт органдарынан киткәс, урындарына Кремль тарафынан башҡорт милли хәрәкәтенең асыҡтан-асыҡ дошмандары йәки милли кадрҙарҙың Шәһит Хоҙайбирҙин ише “тыңлаулы”лары ултыртыла. Ләкин икенсе һорау: элекке үҙ фекерле, “тыңлауһыҙ” холоҡло был шәхес хакимлыҡ итеүсе режим өсөн ифрат кәрәкле сифатҡа ни рәүешле өлгәшкән?.

Сере ярылып ята: 1920 йылда Башҡортостанда ленинсы-большевик Шәмиғоловтың ҡанлы диктатураһы ҡоторонғас, Бөрйән-Түңгәүер кантоны советтарының I йыйынында кантон хәрби комиссары, 1917 йылдан РКП(б) ағзаһы Мөхәмәтйән Ғәлиулла улы Булатов (хәҙерге Баймаҡ районы Кәрим ауылынан), ҡанлы диктатураға итәғәтһеҙлек күрһәтеп, яуыз режимды ҡораллы көс менән ауҙарырға саҡыра, уны барлыҡ делегаттар, башҡарма ағзалары (икеһе урыҫ милләтенән), шул иҫәптән кантондың башҡарма һәм партком рәйесе Шәһит Хоҙайбирҙин үҙе, берҙәм тотанаҡлай. Тик аҙағы аяныс: баш ҡаланан билдәле палач Поленов етәкселегендә ҡырғын ғәскәре ебәрелеп, кантбашҡарма ағзарының йәмғеһе (шул иҫәптән ике урыҫ) яуыз башҡорт милләтселәре сифатында Баймаҡ төрмәһендә хөкөмһөҙ-ниһеҙ атып үлтерелә; ыңғайлыҡлы Шәһит Хоҙайбирҙин ғына тере ҡалдырылһа ла, вазифаларынан бушатылып, һәр төрлө түбәнһетеү, мыҫкыллауҙарға дусар ҡылына; оҙаҡламай республика партия конференцияһында уны, партия билетын тартып алып, ултырыш залынан мәсхәрәле ҡыуып сығаралар – бына шулай башлана шәхес рухының ҡаҡшап һыныуы, режим ҡуйған теләһә ниндәй шарттарға ла күндәм яраҡлашыуы. 1921 йылда уҙаманыбыҙ большевиклыҡ сифатына лайыҡ булып-булмауын билдәләгес

иң мөһим “синфи һынау”ҙы үтә: уны Үҫәргән кантонына махсус тикшереү комиссияһының рәйесе итеп ебәрәләр һәм ул шундағы башҡорттарҙы вәхшиҙәрсә ҡырып йөрөүсе урыҫтарҙың коммунистик батальонының ҡанлы ҡылыҡтарын аҡлап, партконференция исеменән сығартҡан ҡарары (ЦГАОО РБ, ф.22, оп.4, *д.*115, *л.*17) менән ҙур ышаныс ҡаҙанғас, большевиклыҡ карьераһындағы күкрәп үҫеш осоро башлана. Быны ул, моғайын, йәнен һаҡлап ҡалыу хаҡына эшләгән һәм уны, әлбиттә, бәндәләрсә аңларға, ғәфү итергә лә булалыр. Ләкин тап уның замандашы Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовтың: “Советтар Башҡортостан мосолмандарының йәнен ҡыйыр булһа, мин дә үҙ йәнем менән яуап бирәсәкмен”, -- тигән һүҙҙәре һәм шул һүҙҙәренә аҡтыҡҡаса тоғро ҡалыуы ла билдәле. Әммә, үрмәксенән күрмәксе, тигәндәй, яраҡлашыусы уҙаманыбыҙға башҡалар ҙа эйәрә – йылдар һуҙымында робот-чиновниктарыбыҙҙың әлегәсә дауам итеп сәскә атмыш “одобрямсь!” ҡатламы тәрбиәләнә. Бәндәләрсә ҡараһаҡ, бының өсөн уларҙы хәҙер хөкөм итеү ҙә ҡыйын, сөнки бәғзе ҡыйыу йәнле, “үҙһүҙле”ләрҙең ғәзиз йәндәре ҡыҙыл режимдың утлы көбәге осонда осланды. Тик шуныһы – сәйәсәттә талымһыҙлыҡ, ялағайлыҡ тәбиғәтенең ошо яңы заманғаса һуҙылған касафаты, ил өҫтөндәге “ҡаймаҡ”тың тап шундайҙарҙан тороуы, һәм баяғы ташҡүлсәйем Михалков манифесының да шулар тарафынан “берҙәм” хупланыу ихтималлығы бошондора. Сөнки факт алдыбыҙҙа: Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы ла республиканың дәүләт Ҡоролтайында “бер тауыштан” мөнтәп бөтөрөлдө...

Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йыртмаһын өсөн, баяғы Михалков кәүҙәләндергән “мәғрифәтле консерватор”ҙарҙың “Право и Правда” “тәғлимәт”енең ысын асылына керәйек.

Текст империализм сире киҙеүләткән ҡор-коллективтың ижад емеше икәнлеген Рәсәй монархтарына хас “Мы” исеменән хәбәрләнеүе дәлилләй. “Мы”ҙарҙың төп маҡсаты – “манифест”ың төп нигеҙҙәрен Рәсәйҙең буласаҡ яңы төп канунына -- Конституцияһына беркетеү.

Ҡыҙыл империалист Ленин дәһшәтле үҙ заманында урыҫ булмаған “ҡусты”ларҙы үҙ яғына ауҙара алыуы арҡаһында ғына аҡ империалистарҙың башына етеүе сер түгел. Ошонан тарихи һабаҡ алып, әлеге манифессы “өлкән ағай”ҙар ҙа “ваҡ милләт” тип йөрөтөлгән ҡустыларына ымһындырттыҡыс ем ташлай: “Принципиальное отличие новой Конституции России от ныне действующей состоит в том, что она должна быть основана не только на *Декларацию прав человека,* но и на *Декларацию прав народов”*, -- ти улар. Афарин! – күптән үк зарығып көтөлгән, талап ителгән ***халыҡтар хоҡуғы*** таныла, ниһәйәт! Ләкин алҡышлап ҡул сабырға иртәрәк икән әле: күҙҙәрҙе ҡыҙҙырткан йомарт ем – урыҫ түгел халыҡ-балыҡтарҙы ятыуынан ҡармап алып ярға бәрер өсөн йәтешләнгән ымһындырттыҡыс ҡармаҡ ҡына! Ем эсенә йәшерелгән икән уның асылы: “В России тысячелетний союз многочисленных народов и племен представляет собой...” -- Ошо урында: “...равноправных граждан общей Отчизны” -- тип осланһа, ниндәйен оло ҡәнәғәтлек кисерер, “ауыҙыңа бал да май, ағайым” тип кенә әйтер инек тә, ләкин ҡармаҡ осо ҡапыл тырпайып, ауырттырып сәнсә бит: *“...представляет собой уникальную* ***русскую нацию”,*** -- бына һеҙгә кәрәкһә!

һәммәбеҙ берәгәй ***урыҫ милләте*** икән дә!.. Шанлы юлбашсыбыҙ Никита Сергеевич Хрущев заманында уҡ был тәғлимәт “егерме йыл дауамында илебеҙҙә коммунизм төҙөү программаһы”на һалынып, Өфөбөҙҙә “бөтә башҡорттарҙың да паспортына милләте урыҫ итеп яҙыласаҡ, тотҡан дине лә православие буласаҡ” тигән хәбәр күптәрҙе шаңкытҡайны. Хакимдарҙарҙың Петр Беренсенән башлап хәҙергеләренәсә мөкәддәс хыялы бит был! Шул юҫыҡта төркиҙәрҙе суҡындыртып урыҫлаштырыу миссияһы ата-баба заманында урыны менән уңышҡа өлгәшһә лә, 1755 йылда шуға ҡаршы баш күтәргән Ғәйнә башҡорто Сураҡол Миңлебаев батыр Ҡазан яғынан һарҡылыусы тәрелеләрҙең юлын киҫеп, ауыҙ-моролдарын ҡанатып ҡайтарып ебәргәс, күшкәттәре тиҙ шиңде: батша хөкүмәте хатта татарҙарҙы христианлаштырыу сәйәсәтенән дә ваз кисеп, барлыҡ мосолмандарға, ниһәйәт, мәсеттәр төҙөргә, һуңғараҡ Ҡазанда типография асырға ла рөхсәт бирә (бөгөнгө беҙгә ҡарап танау сөйөүсе “мәғрифәтле” ҡазандар шуны белмәй). “Мы”ҙар инде быны ла иҫәпкә алған, христианлаштырыу юлында, ниһәйәт, уңышҡа өлгәшергә тамшана, күрәһең, сөнки буласаҡ “континенталь империя”ның дәүләт башында “Церковь и Верховная власть” (“Верховный правитель” Колчак һымаҡтыр) бойорманларға тейеш икән. Сиркәү тәреләре, ниһәйәт, һәр поганый-төркиҙең муйынына баулап тағылыр, тип өмөтләнәләрҙер -- империяла бер динлелек, бер теллелек тантана итһен өсөн сиркәүгә йәнәһе дәүләт үҙе ярҙам итәсәк. “Мы”ҙар быны һис кенә лә йәшермәй: “Нам свойственно особое *сверхнациональное*, ***имперское сознание...*** Россия – ***континентальная империя***, а не национальное государство”. Тимәк, бөйөк урыҫ милләте шуға лайыҡ, бөтә ҡитғаны яулап алырға “имеет Право!”. Сөнки, Рәсәй ул үҙе Евразия, тип раҫлайҙар был “Мы”ҙар һәм өҫтәүенә: “Россия-Евразия – это...геополитический и сакральный ***центр мира”***, йәғни Ерҙең Кендеге. Ә был Кендек рәүешендәге***“континенталь империя”ға*** Тын океандан – Атлантик океанғаса, Төньяҡ Боҙло океандан – Һинд океанынаса тоташ Евразия ҡитғаһы баш эйеп табынырға, билен бөгөп хеҙмәт итергә тейеш булып сыға – “манифест”ың “Право” өлөшө тап шулай аңлашыла. Ә “Правда” яғын шәйләп ҡараһаҡ, белмәйем, бөтә ҡитға тарафынан алҡышланып ҡабул ҡылынырмы икән ул бер милләткә генә биреләсәк гегемонлыҡ “право”һы -- бөйөк Ҡытай, Һиндостан, Төркиә халыҡтары, ғәрәп һәм Көнбайыш Европа илдәре “одобрямсь!” әйтерҙәрме һуң? Рәсәйҙә булған көс-ҡеүәт уларҙа ла етерлек бит?.. “Правда”ның һәләкәтле шойҡаны ята бында: ер йөҙөндә бер урыҫҡа ғына яраҡлы континенталь империя төҙөргә һаташыу -- кешелеккә ***өсөнсө бөтә донъя һуғышы*** менән янай...

Ә “ваҡ милләт”, “ҡусты” һаналған һәм тулыһынса “өлкән ағай” күҙенә ҡарап тилмергән, “ағай” бойороп ултырмыш юғарынан иҫкән елдәргә генә елберҙәгән беҙҙәргә ни эшләргә?! Халҡыбыҙҙың ҡаймаҡ булыуҙан туҡтап, асы туртаға әүерелгән өҫкө ҡатламының “континенталь” ваҡиғаны ҡайһылай кисерәсәге билдәле – “одобрямсь!”; бындай осраҡта “өнһөҙ һарыҡ” сифатында көйшәп ятҡан аҫҡы ҡатлам беҙҙәрҙе ни көткәне лә йомаҡ түгел. Өҫтән-аҫҡаса үҙгәрәйек, яңырайыҡ, туғандар!

Ә ғөмүмән алғанда, монархист Н.Михалков ҡәләменең үҙ көбөнә һыйыша алмай сәбәләнеүе яңы түгел, ул Петр Беренсе монархтың “Васыятнамә”һе нигеҙендә әтмәләнгән. Уҡып ҡарағыҙ.

10.12.2010

Һәйкәлдәр һәм һәптәндәр

Тәүҙә “һәптән” һүҙенең ысын мәғәнәһен барлайыҡ. Ысынын, сөнки уны хатта телсе ғалимдарыбыҙ ҙа белеп еткермәгәндәй -- 1958 йылда мәркәзебеҙ Мәскәүҙә донъя күргән башҡортса-урыҫса һүҙлектә “чудной, чудак” тип аңлатҡандар. Хоҙайға шөкөр, йылдар ағышында аҡыл эйәләребеҙ ҙә йөрөгән таштай шымарған -- башҡорт теленең 1993 йылғы һүҙлегендә ысынбарлыҡҡа яҡынайыу һиҙелә: “Һәптән – 1.Буштан-буш темеҫкенеп эшһеҙ йөрөгән кеше. 2.Өй тирәһендәге ваҡ-төйәккә тейеүсе, алып китеүсе кеше”.

Малай сағымда ауылыбыҙҙа бар ине тап шундайын йән эйәһе – күршетирәһенә ҡарата этлекле көндәлек ҡылыҡтарын бер “сирүшкә” (четвертушка – 250 грамм араҡылы шешә) бушатыуҙан башлаусы *һәптән* ҡушаматлы бер бабай. Инде хәҙер уйлайым: һәптәнлек сиренең тәьсире ошолай тик күрше-күлән, хатта ауыл менән генә сикләнһә, ниндәй шәп булыр ине! *Ләкин* малайлығымдан сыға барған һайын, һәптәнлектең тәьсире *лә* киңәйә барыуын тойҙом: ниндәйҙер бер һәптән тоташ йәмғиәтте – төркөмдәрҙе, ырыуҙарҙы, халыҡты, хатта милләтте ҡаҡшатырға һәләтле. Шуға күрә “һәптән” һүҙенең урыҫса теүәл эквивалентын табыуы ифрат ҡыйын: хулиган, мошенник, жулик, антиморалист, тлетворец... Эйе, ярым-изге *һантый* (чудак) тип әйтеп булмай бындай гонаһ шомлоғон!

Һәптән ҡулы кешелектең нескәлекле күңел ҡылын һынландырыусы һәйкәлдәргә ҡағылһа, минеңсә, йәмғиәткә уғата ҡурҡыныслы – әле һаналған һуңғы сифаты *тлетворец* (үлемесле, һәләкәтле, серетеүсе, тарҡатыусы) шойҡанын йәйелдерә гөнаһһыҙ күелдәргә. Шуға күрә мәҙәниәтебеҙҙең үтә мөһим был өлкәһендәге һәптәнлекте кисекмәҫтән таный ҙа, унан һаҡлана *ла* белергә кәрәк. Ә ғәмәлдә йоҡлап йөрөйбөҙ һымаҡ...

Төп гәзитебеҙ һаналған “Башҡортостан” 2011 йылғы 2 февраль һанындағы “Тәрбиә” рубрикаһы аҫтында “Изге сифаттар юғалмай. Йәш стәрлетамаҡтар Аркадий Гайдар рухына тоғро” тигән мәҡәләһе менән “ҡыуандырҙы” ғәләмде: “Стәрлетамаҡ ҡалаһында А.Гайдар исемендәге, үҙҙәре әйтеүенсә, Рәсәйҙә берҙәнбер, Пионерҙар һәм уҡыусылар һарайы эшләй... Бындағы Аркадий Гайдар исемендәге музей иһә балаларға илһөйәрлек тойғоһо өҫтәп, һәләттәрен үҫтереү теләгенә ҡанат ҡуя кеүек... Аркадий Гайдар граждандар һуғышы йылдарында Башҡортостанда алышҡан, Стәрлетамаҡта булған икән. Тап ошонда уға аҡтарға ҡаршы һуғышыусы Өсөнсө коммунистик батальон командиры итеп тәғәйенләнеүе тураһында мандат тапшырылған. 1973 йылда К.Маркс урамының 88-се йортонда был ваҡиғаға арналған иҫтәлекле таҡтаташ асыла...” (был ҡалала Аркадий Гайдар урамы *ла* бар, тип өҫтәйек).

Һүҙем юҡ: балалар өсөн яҙыусы -- хәҙер инде гүр эйәһе булмыш большевизм идеологияһына ныҡ һуғарылған әҫәрҙәр авторы, таланттан да мәхрүм ҡалмаған ҡәләм эйәһе булараҡ ҡына ҡарағанда, А.Голиков (һуңынан А.Гайдар) бындай хөрмәтләүгә лайыҡлылыр ҙа, бәлки. Ләкин сетерекле һорау: әҙиптәр өлөшөнә һирәк төшә торған ошондай ҙа оло ҡәҙер-хөрмәт ниңә "Рәсәйҙә берҙән-бер" икән? Тимәк, бының сәбәбе булған һәм Рәсәй күләмендә шуны аша атлап үтергә һис кем йөрьәт итмәгән йәки беҙҙәгеләй ҡыйыу һәптәндәре булмаған .Сөнки хөрмәтлебеҙҙең яҙыусылыҡ һөнәренән тыш бизмән табағын баҫып төшөрлөк икенсе төрлө "үнәр"ҙәре башынан ашҡан бит, ул хаҡта белгес-тарихсылар һөйләһен.

А.Бушков: «Восемнадцатилетний будущий писатель уже тогда, судя по воспоминаниям старожилов, был полным и законченным шизофреником — и лютовал с пугавшей сибирские окраины изобретательностью, самолично расстреливая ни в чем не повинных заложников и штемпелюя донесения в губернию печатью, которую прикладывал к глубоким порезам на собственной руке. Война началась вовсе уж людоедская — Калауров сдирал шкуру с выловленных гайдаровских сексотов чуть ли не самолично, Гайдар, согнав деревенских на открытое место, резал кинжалом глотки тем, в ком подозревал калауровских сторонников. Схватка была неравная. Аркашкины садистские выходки даже для того времени показались чрезмерными, и вместо того, чтобы вручить обещанный орден, вышестоящее начальство передало юнца в руки психиатров, а те написали такое заключение, что Гайдар покинул ряды Красной Армии со скоростью пушечного снаряда...» ("Волчья стая").

А.Буровский: «А параллельно с рассказом о космически громадном злодее Соловьеве (советтарға ҡаршы баш күтәреүсе. – Й.С.) формировалась легенда о великом воине Аркадии Гайдаре. До войны, до конца сталинщины, было не очень реально поднять его на щит – слишком многие помнили, чем на самом деле был славен Аркадий Гайдар, никакой не воин и не боевой командир, а каратель и палач, даже своих пугавший невероятной жестокостью. Известно, что первым «подвигом» А. Гайдара в Сибири было убийство 148 казаков в окрестностях села Тасеево. И остальные его «подвиги» точно таковы же, а боевых среди них, как ни старайтесь, не найдете – их нет. Вот о совершенно грязных убийствах и истязаниях мирного населения, включая женщин и детей, – об этом свидетельских показаний очень много. Взять хотя бы историю про то, как связанных хакасов, родственников тех, кто помогал отряду Соловьева, оставили на всю ночь на льду озера: чтобы назавтра, в свой день рождения, Голиков Гайдар мог бы попраздновать: собственноручно их утопить. Считается, что Голиков, исключенный из коммунистической партии и отправленный на лечение в Москву, никогда не подавал заявления с просьбой о реабилитации (воистину, свои же боялись). Но есть и поразительная версия, что все таки однажды заявление он в ЦК подал, и Сталин собственноручно начертал на этом заявлении: «Мы его, может, и простили бы. Но вот простят ли его хакасы» ("Сибирская жуть"/7).

Эйе, бындай үнәр ғилми телдә "садизм" (кеше үлтереп ләззәтләнеү) тип атала, шуға күрә палачты геройлаштырыу, күккә күтәреп маҡтау һәм хәтер

һәйкәлдәрендә мәңгеләштереү Поленов, Голиков кеүек яуыздар гиҙеп йөрөп ҡанһыратҡан Башҡортостан кеүек “автономиялы” төбәктәрҙә генә нәҡ һәптәндәр теләгәнсә мөмкин булалыр. “Для меня это было уроком, и каким! – тип ғәжәпләнә Буровский үҙе ләә. -- Можно, оказывается, раздуть биографию мелкого палача по убеждениям и многократного убийцы, раздуть саму его ничтожную личность, как надувают лягушек, вставив соломинку в задний проход, представить его, убогого, чуть ли не национальным героем. Можно галдеть про это ничтожество по радио и телевизору, называть его именем улицы и «бороться за право носить его имя» кружкам и школам. Но пена сойдет, потому что все это время Соловьевы живут себе на своей земле, в деревнях, основанных еще их предками”. Башҡортсалап әйткәндә, күпме генә йәшерһәң дә беҙ ҡапсыҡта ятмай бит – барыбер тишеп сыға. Заманабыҙ һәптәндәренең этлегенән саф күҙҙәре томаланған балалар, үҫеп еткәс, барыбер бит кемдең кемлеген беләсәк, һөҙөмтәлә рухи яҡтан имгәнеп, илдең сәйәси ғәҙеллегенә, етәкселәренең намыҫлылығына ҡарата тәрән шикләнеү, ышанмау тойғоһо нығынасаҡ. Һәм, әлбиттә, Аркашканың ҡанлы ҡылыҡтары тап башҡорт ерендә, башҡорт боғаҙында большевистик тәжрибәгә әйләнеүе ләә яҡшы билдәле буласаҡ, хатта уны ҡаһарманлыҡ өлгөһө итеп ҡәҙерләүсе биографтары ла яуызлыҡтың ҡайҙа ҡотороноуын танып үтергә мәжбүр бит: “**Аркадий Голиков воевал... сначала <u>в Тамьян-Катайском кантоне в Башкирии, потом в Сибири, в Хакасии</u>”.**

Билдәле булыуынса, А.Голиковтың ата-әсәһе икеһе тиң “революция дошмандарын юҡ итеү” теләге менән ҡыҙышҡан “иманлы” большевиктар, буйға үҫеп тиҙ өлгөргән Аркашка ла ғаиләләге шул рухта “иман”лана. Ҡулы бик иртә атыу ҡоралына тартылған, көбәк көҫәп устары ҡысыткан ғәйәр үҫмер урындағы большевиктарға ылығып, 1917 йылғы урам митингыларында Ленин юлынан бармаусыларҙы шомландыртмаҡҡа, үҙе әйтеүенсә, 302939 номерлы винтовкаға эйә була. Атып өлгөргәндерме, юҡмы, әммә өлгөрлөгө хаҡ: “В августе 1918 года Аркадий подает заявление: «В комитет партии коммунистов. Прошу принять меня в Арзамасскую организацию РКП. Ручаются за меня тов. Гоппиус, Вавилов». Решение Арзамасского комитета РКП(б) от 29 августа 1918 года: «Принять А. Голикова в партию с правом совещательного голоса по молодости и впредь до законченности партийного воспитания». Ә ул “папртия тәрбиәһенең тамамланып” ағза итеп алыныуы, В.Поленов менән бер үк осорҙа, башҡорттарҙың Әхмәтзәки Вәлидов етәкселегендәге милли хәрәкәтенә ҡаршы көрәшеүсе РСДРП(б)-ның Точисский рәйеслегендәге Белорет-Тирләп хәрби-революцион комитетында була. Быларҙы белмәҫ тә инек, әгәр ҙә ки тоҡтағы баяғы беҙ осо – тарихи документтар төртөп сыҡмаһа:

1. Заведующему пртархивом Башкирского обкома КПСС тов.Кузнецову.

На Ваше письмо от 2 января 1975, №3.

Поленова В.Е. я знаю с 1918 года. В этом году он при мне приходил к товарищу Точисскому П.В. с заявлением послать его на самый опасный участок фронта. В этом заявлении он отрекся от отца – лидера эсеровской организации.

Точисский выслушал Поленова, дал согласие зачислить его в партизанский отряд, который вел операцию против банды Валидова.

Мне известно, что в этом бою Поленов был тяжело ранен и в последствии лишился руки.

Работая в Белорецке я часто встречался с Поленовым. Мне помнится, что он работал, вроде, в военкомате.

Когда я учился в ВШПД (высшей школе партийных деятелей. – Й.С.) г.Москва, он был у меня в квартире – это было в 1928 году. Где он работал мне не известно. Но я знаю его как преданного Советской власти человека.

С уважением – (ҡултамғаһы танылмай). 24 января 1975 г. (ЦГАОО РБ, ф.9776, оп.2, д.988, л.13).

Билдәле булыуынса, Башҡортостандан киткәс тә ҡанлы ҡылыҡтары хатта большевиклыҡ ҡалыбына ла һыймай башлағас, ҡырғынсы А.Голиковты Красноярский крайында ҡулға алалар һәм, бераҙ ултыртып, аҡыл бирep сығаралар. Шундағы тәфтишләү протоколдарында ул үҙенең ҡайҙа һәм ҡасан партияға ҡабул ителеүе тураһында аныҡ мәғлүмәт бирә.

2. Партархив Красноярского краевого комитета №16-К. 16 февраля 1968;

г. Горький, Горьковский обком КПСС, партархив;

Башкирская АССР, г. Уфа, обком КПСС, партархив;

г. Москва, ЦК КПСС, сектор единого партийного билета.

...Обращаемся к Вам с просьбой выяснить вопрос партийности Аркадия Петровича Голикова (Гайдара)... который был начальником второго боевого района по борьбе с бандитизмом в 1921-22 гг. в Енисейской губернии.

В документах А.П.Гайдара, хранящихся в архиве, указывается, что он вступил в члены партии 23 августа 1918 года в Белорецкой организации Башкирской республики, п/б №819.

Просим подтвердить партийность А.П.Голикова.

По данным Красноярского партархива в июне 1918 года Голиков находился в Арзамасе и работал помощником секретаря горкома партии.

Зав. Партархивом крайкома КПСС Г.Кожевников.

Научный сотрудник А.Сливина.

Өфөнән бирелгән яуап:

Партархив Красноярского краевого комитета.

На Ваше №16-К от 16 февраля 1968 г. Сообщаем, что документов о вступлении в партию тов. Голикова А.П. в партархиве не имеется.

Зав. Партархивом Башкирского обкома КПСС В.Володина (ЦГАОО РБ, ф.9776, оп.2, д.1091, л.1-2).

Документтарҙың табылмауы һис кенә лә сәйер түгел, сөнки был саманан сыҡҡан золом эйәһе П.В.Точисскийҙың, хатта үҙенең партиялаштарын да ныҡ биҙҙертеп, шулар (ҡыҙыл каширинсылар) ҡулынан уҡ дөмөктөрөлөүенә бәйле:

Пздно ночью 18 июля (дөрөҫө 9-ынан 10 июлгә ҡаршы төндә, тип аныҡлана) 1918 г. вернулся Павел Варфоломеевич Точисский с заседания Ревкома домой. Он молча поужинал и лег спать... Вдруг тишина была нарушена конским топотом.

-- Это Каширин приехал меня арестовать, -- решил он (Точисский) и, взяв револьвер, тихо пошел к окну в кухне.

...Раздался выстрел и Точисский упал на пол. В квартиру ворвались озверевшие убийцы. А на утро, бросив труп на телегу из-под дегтя, убийцы увезли его на навозную свалку...

Зав. Отделом пропаганды и агитации Белорецкого горкома КПСС Борзинец (газета "Белорецкий рабочий" от 12 июля 1957 г.).

Һәм тағы:

Труп Точисского П.В. утром 18 июля под улюликанье эсеро-кулацкой толпы был выброшен из дома на телегу и с надругательствами отвезен на городскую свалку (навозную), где впоследствии был сожжен. И.Д.Каширин не только не принял мер к организации глубокого расследования убийства Точисского и организации его похорон, но и в дальнейшем своем приказе по Белорецкому социалистическому полку 2 сентября 1918 г. квалифицировал эти события как инцидент с Точисским и как недоразумение...

Секретарь Белорецкого горкома КПСС Сиражетдинов.

Йомғаҡлау:

Смерть П.В.Точисского, который был председателем ВРК г.Белорецка, послужила сигналом для расправы с представителями Советов в Белорецке и др. заводах Горного округа. Были убиты в Белорецке большевики Ульянов, Овсянников, в Узяне Портнов, в Инзере Ехлаков и другие. Были арестованы председатель Белорецкого Совета большевик Ф.Алексеев, начальник штаба Белорецких красногвардейцев Горшенин, избит и арестован секретарь партийного комитета т.Феоктистов и др.

По сведениям, сообщенным нам младшей дочерью Точисского, М.П.Точисской, проживающей в настоящее время в Москве, в 1932 г. на заседании Уральского землячества разбирался этот вопрос, но т. И.Д.Каширин отказался на нем присутствовать. Все это позволяет сделать вывод об ошибке И.Д.Каширина, выразившейся в попустительстве убийства Точисского, в силу отсутствия достаточной политической стойкости (ЦГАОО РБ, ф. 9976, оп.2, д.83, л.5, 12-13; д.52, л.34).

Шулай итеп, Белорет большевиктарының "һөйөклө" башлығы үҙенең ҡыҙыл массалары тарафынан уҡ дәһшәтле үлтерелеп, мәйете дегет арбаһында тиреҫлеккә бираҡтырылып яндырыла, үҙебеҙсә әйткәндә, көлө күккә осорола. Ул етәкләгән Комитет та туҙҙырылғанлыҡтан, шул болала, әлбиттә, партия архивы юҡҡа сыға – Точисский "бөркөттәре"нең партияға инеү ҡағыҙҙары ла күккә оскандыр. Әммә А.Голиков карьераһындағы ул мөһим дата А.Гайдар биографияһында ни сәбәптәндер Точисский һәләкәтенән һуңғараҡҡа күсереп яңылыштырғанға оҡшай; бәлки, ҡаҡшаған психикалы енәйәтсенең хәтере яңылышҡандыр. Уға ҡалһа, биографтары ла яңылыштыра, буғай: геройыбыҙ һынау шарты менән партияға Арзамаста 1918 йылдың 29 августында теркәлһә, тулы хоҡуҡлы ағза итеп алыныуы, уның үҙенең баяғы аныҡ раҫлауынса, Белоретта шул уҡ йылдың 23 августында була – осо-оҫка ялғанмай. "Вәлидов бандаһына ҡаршы" һуғыштарҙа тәжрибә туплаған йәш большевик "1918 йылдың декабрендә Ҡыҙыл Армияға китә" – моғайын, Башҡортостанда ҡырғынсылығын үтәгән регуляр армия сафыналыр.

Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә батырлыктар күрһәткәндән һуң, 1920 йылдың мартында А.Голиков “приезжает в Москву за новым назначением”. Тәжрибәле ҡырғынсыны абхаздарҙың боларышын баҫтырыусылар сафына оҙаталар: “здесь стояла 4-я рота 2-го батальона 303-го полка. Командовал ротой Аркадий Голиков”. Шул уҡ ваҡытта Тамбов крәҫтиәндәренең Совет хөкүмәтенә ҡаршы күтәрелеше ифрат көсәйгәнлектән (50 меңлек ике армия!), Ҡыҙыл Армияның ҡырғынсы частарын шул ихтилалды баҫтыртырға йүнәлтәләр һәм: “В июне 1921 года командующий войсками Тамбовской губернии М.Н.Тухачевский подписал приказ о назначении Аркадия Голикова командиром 58-го отдельного полка по борьбе с бандитизмом. 30 июня 1921 года Аркадий Голиков докладывал в штаб из Моршанска, что в командование 58-м полком вступил. Ему было 17 лет и 5 месяцев... Историки спорят, как в этот период жизни Гайдар зарекомендовал себя - толи как талантливый командир, толи как кровавый мясник”...

Совет Рәсәйе өсөн ҡурҡыныслы халыҡ күтәрелеше Уралда – Башҡорт АССР-ында ла дөрләүен дауам иткәнлектән, ҡыҙыл ғәскәрҙәр яңы “эшкә” йүнәлтелә: “После Тамбова осенью 1921 года Гайдар был отправлен в Башкирию для подавления оставшихся банд кулацкого и националистического толка частями особого назначения (ЧОН)”. Аныҡырағы: “10 сентября 1921 года командующий Приуральским военным округом Дукат подписал Голикову назначение. В приказе говорилось: "Прибывший из штаба ЧОН Республики бывший командующий войсками 5-го боевого участка по подавлению восстаний в Тамбовской губернии Голиков Аркадий Петрович направляется в Башкирскую республику" – палач заты элегерәк үҙе ҡанлап киткән башҡорт еренә тағы аяҡ баҫа, баш күтәргән башҡорттарҙың башын сабып өҙмәккә уға, әлеге “Башҡортостан” гәзитендә ғорур бәйән ҡылыныуынса, “өсөнсө коммунистик батальон командиры итеп тәғәйенләнеүе тураһында мандат тапшырыла”. Йәғни: “Голиков приехал в Стерлитамак, где находился штаб ЧОН Башкирии. А там незадолго до этого получили тревожное письмо из Тамьян-Катайского кантона: "Обстановка на месте сложная. Бандиты своей стихийной широтой дезорганизуют все советское строительство, сводят на нет все принципы Советской власти". Голиков был направлен в Белорецк (центр Тамьяно-Катайского кантона) командиром отдельного 3-го коммунистического батальона ЧОН. Вместе с батальоном он находился в Белорецке, Авзяне, других населенных пунктах”. Вазифаһын большевиктарса еренә еткереп үтәгәндер, сөнки: “30 сентября 1921 года он вновь приехал в Стерлитамак. В штабе ЧОН сделал обстоятельный доклад о положении в Тамьяно-Катайском кантоне и попросил командировать его в Москву за новым назначением. Следующим назначением была Сибирь, в Хакасию...”

Бындай батальондарҙа, әйтергә кәрәк, башҡорт большевиктарының да байтағы тоғролоҡло хеҙмәт иткән (уларҙың да портреттарын баяғы музейҙа шанлы А.Голиковтыҡы менән ҡушарлап ҡуйырға кәрәк ине), тап шулар биргән “Һәйҙәр” (яуға һәйҙәр/әйҙәр командир) ҡушаматын яҙыусы үҙенең псевдонимы итеп алған. С.Ш.Мырҙабулатовтың “баш күтәргән Ҡыҙыл Армия”һына ҡаршы ҡыҙыл башҡорттарҙың Мортазин, Зиннуров, Ырыҫколов, Юламанов

эскадрондары ла сая алышҡан; бында эште теүәлләгәндән һуң уларҙың ҡылыстары, Голиковтыҡы менән бергә, Себерҙә хаҡас ихтилалсылары муйынында айҡалған. Шуларҙы йәш быуындарға өлгө итеп күтәреүселәр республикабыҙҙа тырышып үткәрелгән милләт-ара татыулыҡ сәйәсәтенә зыян килтерә, сөнки башҡорт хәтерен ҡалдырыу башҡаларҙың да тарихи хәтерен яңылыштыра, кешеләрҙе әхлаҡи яҡтан тарҡата, серетә...

Ә бит Хоҙай-Бабайыбыҙ бәндәләрен иғтибарһыҙ ҡалдырмай: халыҡ хәрәкәттәрен ҡанға батырып баҫтырыусы Тухачевский, Мортазин, Каширин, Ырыҫколов, Юламанов кеүек геройҙарын йылдар үткәс Сталин үҙе ысын күңелдән рәхмәтләне – 1937 йылда берәм-берәм ҡулға алып, барыһын атып бөтөрәләр, тик Поленов һәм Гайдарға әүерелмеш Голиков кеүектәр янтайып тороп ҡала. Мыйыҡлы юлбашсы рәхмәтенең касафаты хатта ун йыл элек вафат булмыш Зиннуровҡа ла ҡағылмай ҡалмай – ҡорҙаштарының әсенеп яҙған хаттары шул турала:

Центральной Комиссии партийного контроля;

Башобкому ВКП(б).

Копия: Парткомиссии ПУРЕКА --

от Муртазина Мусы Лутовича, члена ВКП(б) с 1920 года, партбилет №0609519

ЗАЯВЛЕНИЕ

В городе Белорецке в 1923 году на центральной площади был похоронен умерший военком б. Тамъян-Катайского кантона тов. Зиннуров Ахмадей. Похороны были проведены пролетарской общественностью г.Белорецка с устройством памятника т.Зиннурову, как герою гражданской войны.

Покойный Зиннуров А. происходил из местных уроженцев, сын бедняка-башкира, сам шахтер. Был добровольцем Красной Армии с 1918 года, участвовал активно на всех фронтах, занимая командные должности, последняя должность командир 27-го башкирского кавполка, имел орден Красного Знамени и другие награды за боевые отличия, член партии с 1918 года.

Распоряжением председателя Белорецкого горсовета Вороничева 22 мая с.г. могилу снесли и труп вывезли на общее кладбище, после того, как он пролежал 12 с лишним лет.

Несмотря на протесты боевых соратников тов.Зиннурова, красных партизан, -- предгорсовета отказался дать какое-либо по этому поводу объяснения.

Такой поступок нельзя не квалифицировать иначе, как действием зарвавшихся классовых врагов, издевающихся над мертвым героем гражданской войны. Своими действиями Вороничев растоптал, оскорбил хорошее теплое чувство к своему герою-революционеру Зиннурову со стороны товарищей красных партизан и националов башкир – бойцов гражданской войны.

Безразличное отношение секретаря райкома Нургалеева поощряет контрреволюционные, антисоветские действия классового врага, забравшегося в шкуру советского работника.

Категорически протестую против такого действия, прошу произвести расследование и привлечь к суровой ответственности выше указанных лиц,

разоблачив в печати их контрреволюционные физиономии и восстановить памятник т.Зиннурову.

Муртазин.
7 июня 1935 г.

(Ғариза эйәһенең шәхсән үҙенә, 1920 йылғы башҡорт күтрелешен геройҙарса баҫтырышҡаны һәм большевистик “Белорет пролетариатын” һәләкәттән ҡурсалағаны өсөн, ҡала ҡапҡаһы алдына ҡуйылған һәйкәлде ләә ике йылдан һуң ватып ташлайҙар).

Здравствуй, тов.Муртазин М!

От Вашего зятя Султанова Искандара с Галимой, сыном Ринатом привет!

Горячий привет Вашей семье т.Муртазин!

22 мая 1935 года на основании постановления Белорецкого городского совета памятник тов.Зиннурову Ахмадию сломали и труп увезли на общую могилу. Когда разломали памятник и раскопали труп я был с тремя партизанами, в раскопывании трупа мы протестовали, в это же время мы сходили на квартиру председателя горсовета, спрашивали на каком основпании раскопывается труп т.Зиннурова Ахмадия. Он нам ответил, не ваше дело, этим распоряжается горсовет, а не вы.

Я обратно вернулся, пошел на Красную площадь, уже труп раскопали и гроб накладывают на телегу. Я спрашиваю, куда вы везете, там могила готова уже или нет? Ответили готова. Раз так, я с ними вместе пошел, приехали, общая могила, яма не готова, не начинали. Начали копать яму в 8 часов вечера, была готова к 11 часам ночи. Спустили труп, я ушел домой.

Как издевался горсовет – с улицы нанимали 3-х человек и сказали на Красной площади памятник разломайте и труп увезите в могилу, где попало.

Тов. Муртазин, когда раскопали труп в старой яме, то труп и цветы целы, ничего не сделалось. Людей на Красной площади собралось много и все удивляются, что такое дурацкое распоряжение, как хорошо был похоронен, и переносить на другое место. По этому случаю райком партии не знает, я сходил в райком, они мне сказали дай заявление – разберем. Я совместно с тов. Зиннуровым Гиляжем дал заявление в райком, никаких результатов нет.

Тов.Муртазин, если можно, прошу поставить этот вопрос в Реввоенсовете, т.к.Зиннуров заслуженный Краснознаменец.

Если Вам требуется материал мы отсюда Вам пошлем. Пршу дать ответ. С коммунистическим приветом – Султанов (ЦГАОО РБ, ф.9776, оп.2, д.575, л.167-168).

Һәптәндәрҙән һәптәнлеккә ҡаршы сара күреүҙе һорау – терһәгең менән һыуға таяныу менән бер, бөтәһе ләә “шиты-крыты”, әлбиттә. Ләкин шуны төшөнөү өсөн беҙҙең һымаҡ һармаҡтарға 70 йыллыҡ һәптәнлектә ҡуңлаған күҙҙәрҙе ҡанатҡансы тырнап асырға тура килде...

Нимәләргә генә риза булманыҡ, алҡышлап та ҡул сәпәкәйләп тә тәбрикләмәнек!

1918 йылда Баймаҡ советы рәйесе Л.А.Азанов Башҡорт хөкүмәтенең аҫыл сардарҙары Ғимран Мағазовты, Ғабдулла Иҙелбаевты бер төркөм яугирҙәре менән ҡуша һис ниндәй ғәйепһеҙгә яуыздарса аттырта. Һөҙөмтә: бөгөнгө Баймаҡ ҡалаһының иң матур үҙәк урамы шул шанлы Л.А.Азанов исеме менән аталған, администрация үҙәгендә шул һөйөклө үлтереүсегә һәм унан һуңғы ҡырғынсыларға граниттан мәңгелек һәйкәлдәр бар, -- хәйерле булһын, тарих бит, тип кисерәйек. Әммә шулар ҡатарында бөгөнгө гүзәл тормошобоҙ өсөн беренселәрҙән булып шәһит киткән ғәзиз батырҙарыбыҙ Ғ.Мағазов, Ғ.Иҙелбаев һәм уларҙың ҡорҙаштарына ла һәйкәл ҡуйылһа, шул уҡ үҙәктәге уларҙың һәм егерменсе йылғы халыҡ ихтилалы ҡорбандарының кәүҙәләре бираҡтырылған, ошоғаса ер менән тигеҙләп йәшерелгән иҫке шахтаны ла берәй ядкәрташ иҫкә төшөрөп торһа, башҡорт ҡалаһының урамдары башҡорт батырҙарының исемдәре менән дә билдәләнһә, был һәр яҡлап та ғәҙел, тәрбиәүи йәһәттән дә бик дөрөҫ булыр ине.

Ғүмеренең һуңғы йылдарында кәрәкмәгәнсә үҙаллы уйлана башлаған башҡорт лидеры Шәһит Хоҙайбирҙинды 1924 йылда Мәскәү Кремленең мыйыҡлы хужаһы мәркәз хәстәханаһына килтертеп, операция өҫтәлендә һуйҙыртҡас, шул йәтеш тәжрибәне 1925 йылда уҡ үҙенең сәйәси көндәше М.В.Фрунзеға ҡулланыуы тураһында киң таралған фараз бар (сөнки асыҡтан-асыҡ юҡ иттертергә 1937 йыл килеп етмәгәйне). Шәһит Хоҙайбирҙинды алмаштырған И.Х.Солтанов уҙаман да нимәһе менәндер “корифей”ҙың күңеленә хуш килмәй, олаҡтырыу алымдарын төрләндереү йәһәтенән был тәңгәлдә “от сердечной недостаточности” тигән, артабан 70 йыл буйына илдә уңышлы ҡулланылған ысул һынап ҡарала – таштай һап-һау ир Исмәғил Солтанов 1927 йылда “һаулығын нығытырға” Ҡырым шифаханаһына юлландыртылып, мәйете Өфөнөң хәҙерге Аҡ йорт баҡсаһы яныңдағы зыяратҡа Шәһит Хоҙайбирҙингә йәнәш ололап күмдертелә (1934 йылда Мәжит Ғафури уға йәнәш ерләнә), баш ҡалабыҙҙа И.Солтанов урамы барлыҡҡа килә (ҡайһы бер ҡәләмдәштәрем шуны “Й.Солтанов урамы” тип мине шаяртҡылайҙар). Хәйер, бер мин генә түгелдер шаяртылыусы. Үҙәк скверҙарҙың береһендә алыҫ яҡтарҙан аҙашыпмы килеп төпләнгән “ниндәйҙер” В.Маяковский һыны янынан уҙыусы уҡымышлылар: “Бәй, үҙебеҙҙең Ноғоман Мусин уҙаман тора түгелме бында?! Постаментындағы имзаһын ғына алмаштырғанда...” – тип мәрәкәләйҙәр, сөнки республикалағы һәр кемгә билдәле һәм тере ваҡытында уҡ бронзаланырға лайыҡлы халыҡ яҙыусыбыҙҙың буй-һынын, ҡиәфәтен ифрат хәтерләтә бит! Өҫтәүенә, “Совет дәүеренең бөйөк шағиры”н (И.Сталин) бейек постаментҡа күтәрткән ул 70 йыллыҡ “дәүер” күптән үк мәреткә китте, бөйөклөктәренең дә күбеһенең ҡото ҡалманы...

И.Х.Солтанов мәрхүмдең яҡты исеме әлегәсә урамды биҙәп торһа ла, есеме ниндәйҙер сәбәптән һәптәндәрҙең мәкеренә тарыны. Зыяратта йәнәш ятҡан Ш.Хоҙайбирҙингә, М.Ғафуригә ҡуйылған стандарт ҡәберташ та тәтемәне бахырға, ике аралағы исемһеҙ тупраҡ-түңәләсе ваҡыт һуҙымында сүгеп тигеҙләнде. Ниһәйәт, 80-енсе йылдар аҙағында зыяратты яңыртып тәрбиәләү башланғас, ғәҙеллекте ҡайтарыу өмөтө бар ине, ләкин һәләтле һәптәнлек йоҡлап ятмауын

белдерҙе – аралыҡтағы “исемһеҙ” ҡәбер үтекләгәндәй шымартып юғалтылды. Мәрхүмдең рәйһегән ағай-эненһе, яҡташтары (Усалы районы) тарихи ғәҙеллек хаҡына яҙыулы ҙур таҡтаташ килтереп һалғайны тейешле урынға, күп тә үтмәй, уныһы ла елләгәндәй осоп юҡҡа сыҡты – һәптәнлеккә кәртә юҡ!

Шулар түгелме ни “бөтә Союз старостаһы” М.И.Калининды (Лениндың уң ҡулын) башҡорттарҙың атай урынындағы һөйөклө ярлыҡаусыһы рәүешендә мәҙхиәләп нисәмә быуын кешеләребеҙҙең аңын томалаусы, баш ҡалабыҙҙың иң ҙур баҡсаһына уның исемен биреп, һаҡаллы һынын постаментҡа күтәреүсе, шул арҡала күптәрҙе төбәктән биҙҙертеп, үлеләрҙе көтөп торор (ҡала моргы тап шунда төҙөлдө!) шомло ергә әүерелдереүсе! Туң башҡорт ниңә үҙенең һөйөклө ярлыҡаусыһын (дөрөҫөрәге, ярҙан ауҙарыусыһын) танымай, тиһегеҙме?

1919 йыл, Каруанһарайлы Ырымбур-ҡалабыҙ.

Протокол закрытого заседания президиумов губисполкома, губкома, высшего командования фронта, 1-ой Армии и Оренбургских ответственных работников с участием товарища Калинина.

Повестка: 2. Башкирский вопрос.

Тов. Калинин. Вопрос о доверии или недоверии к Оренбургу Центром нет и быть не может. Автономия Башкурдистана – буфф (көлкөлө ҡыланыу, мәсхәрә. – Й.С.) для восточных народов. Мы башкирам не верим, гоним их солдат под Питер (ҡырҙыртыуға, әлбиттә. – Й.С.). Попытка Оренбургского губкома РКП создать башкирский партийный центр крайне важна и нужно, чтобы она дала реальные результаты.

Нам надо играть в их автономию, повсюду пролезать к ним и коммунизмом парализовать корни и остальные вредные стороны (ф.9776, оп.2, д.393, л.40).

“Атай”ыбыҙ Ғазраилдан да хәтәр – бер юлы тоташ халыҡтың йәнен алыусы!..

Башҡорт ерендәге бөйөк Рәсәй дуҫлығының мөһәбәт сорғолошо үткән быуаттың илленсе йылдарында баш ҡалабыҙ ҡапҡаһы алдында мәғрур һерәйтеп мәңгеләштерелде: зәңгәр күккә шешлексенең (шашлыҡсының) шеш-шампурылай ослайтылған ҡыҙғылт оҙон мөс (меч) бер-бер артлы дүрт ҡара ҡалъяны – Башҡортостан, Ҡазан, Әстерхан, Себер ханлыҡтары символдарын тишеп кереп үҙенә теҙгән; шул дәһшәтле көс-мөстән шомланыбыраҡ, буғай, һылыу ике һын -- Башҡортостан-әсәй менән Рәсәй-әсәй икенһе ике ярый ҡайырылып ғәмләнеп ҡалған, ә арттарындағы барельефта, яңы тыуып тора алмай маташыусы сабый-быҙауҙай, меҫкендәрсә тубыҡланып ҡурай тартыусы башҡорт... Шул йылдарҙа СССР Юғары Советына Башҡортостандан депутатлыҡҡа күрһәтелгән билдәле әҙип Илья Эренбург килеп киткәйне, баяғы барельефты күргәс, иң ҙур етәксебеҙ Зыя Нуриевтан: “Ниңә ҡурайсы башҡортто тубыҡландырттығыҙ?” – тип сетерекле һораған. Иртәгәһенә үк тейешле сара күреп, тубыҡланыусының ҡуш ҡулынан ҡурайын ҡырҡып ташлап тынысландылар. Шулай ҙа халыҡ ризаһыҙлыҡ белдерткәс, өҫтәлмә сара рәүешендә, Октябрь проспектында “Искра” кинотеатры алдындағы майҙанда ҡурай тартып тороусыны шыр-яланғас ҡиәфәттә яһап ҡуйғайнылар (әлегәсә зауыҡландырта ул мырҙа), баяғы әсе теллеләр уны “ҡурай тартып ыштанһыҙ ҡалған башҡорт” тип тамғаланы...

Калиниңдыңкынан ҡала икенсе ҙур баҡсабыҙ – М.Ғафури исемендә. Шағирҙың тағы “үҙ” урамы, йорт-музейы ла бар. 70 йыллыҡ Совет заманының урта ҡуллы ғына әҙибенең абруйын, мин күреп белгән айныҡ аҡыллы замандаштары һөйләүенсә, заманында ҡәләмдәше С.Ҡудаштай аҡтарға ылығып китмәй ҡалғаны (ҡурҡаҡлығы ебәрмәгәндер, бәлки) һәм аҙаҡ ғорур күкрәк киреп: “Ватансы мин – Совет ватаны булыу шарты менән ул ватан!” тип большевистик сәйәсәткә оҫта ялғанып һамаҡлағаны (әүәлге ҡәбер ташына ла шул һүҙҙәр яҙылғайны) өсөн ҡабартҡандарҙыр; режимдың бындай йомартлығы, йәшермәйек, Ғафуриҙан һуңғы ғафуриҙар өсөн дә ҡабатланды. Әйткәндәй, “ватансы”ның 20 йыллыҡ ижади юбилейы айҡанлы 1923 йылдың 9 майында БашЦИК ҡарары менән бүләк ителгән “халыҡ шағиры” дәрәжәһен алыу тантанаһы шөйлә ҡыҙыҡлы:

Газета “Власть труда”, орган Башобкома РКП(б), БашЦИК и Башпрофсовета. Год издания второй. 7 июня 1923 г. №126.

К юбилею М.Гафури.

Чествование юбиляра происходило вечером 3 июня в здании “Эрмитаж”...

По просьбе публики юбиляр под звуки марша “Аждаха” (марш, который посвящен поэту) и аплодисментов занимает свое место на сцене...

Торжество продолжалось до 5 часов утра (ЦГИА РБ, ф.Р-933, оп.1, д.74, л.130).

Бына һеҙгә, кәрәк булһа, Аждаһа – шиғриәттең ҡыҙыл режим аждаһаһын *беренсе* итеп тантаналы ҡарпытыу! *Унан алдағы* ысын беренселәрҙе хәтерҙән юйып ташлап, Башҡортостандың *иң беренсе* халыҡ шағиры яһау, шуға тиклем үк, бер түгел, ике *халыҡ шағиры* барлығын онотоу-оноттортоу:

Постановление Всебашкирского ЦИКа Советов рабочих, солдатских, крестьянских депутатов об учреждении Общества изучения быта, культуры и истории Башкирии.

...Образовать при научном отделе Наркомпроса общества по изучению быта, культуры и истории Башкирии, привлекая для работы лучшие научные силы Башреспублики, а также знатоков края и истории Башкирии, находящихся в других местах РСФСР.

...Действительными членами Общества БашЦИК утверждает:

1.Сулейманова Габдуллу – известный математик.

2. Фахретдинова Резаэтдина – ученый историк.

3.Бурангулова М. – Народный поэт.

4.Габитова Хабибуллу – Народный поэт.

5.Фахретдинова Габдрахмана – журналист-публицист.

6.Сагадеева Гидиятуллу и

7.Мрясова Сагита – педагоги.

Членов Общества БашЦИК обеспечивает академическим пайком и обеспечением вообще сообразно с обеспечением в РСФСР...

Председатель БЦИК Муртазин.

Секретарь БЦИК Терегулов.

16 февраля 1922 года, гор.Стерлитамак.

(ЦГИА РБ, ф.Р-933, оп.1, д.75, л.32).

Исемлектәге ике уҙамандың “Народный поэт” дәрәжәһенә иғтибар итегеҙ. Киләһе йылында ук “Аждаһа” маршы дөһөрҙәүендә “халыҡ”тыҡы ителәсәк бөйөгөбөҙ иһә “лучшие”лар исемлегендә күренмәй...

Миңә ҡалһа, М.Ғафуриҙың ярым-наҙан һәм талымһыҙ замандаштарын зауыҡландырған примитив ижады үткән быуат урталарында ук уҡыусыларын ялҡытып, әҙәбиәт тарихына күмелде. Үҙенең башҡортлоғонан да ваз кисеп, башҡа милләткә һырнығыусы, бөтә ижадында башҡорт тураһында түбәнһетеүле бер-ике һүҙҙән башҡа бер нәмә лә яҙмаған (“милли” хистәре лә татарса), Башҡортостан автономияһын күрә алмаған (замандаштарынан был хаҡта күп ишеттем) ҡәләм эйәһенән тырышып-тырмашып “башҡорт шағиры” яһауҙары төптө килешмәгән хәл. Башланғыс мәктәп шәкерте кимәлендә әтмәләнгән һәм сәхнәгә яраҡһыҙ “Ҡыҙыл йондоҙ” пьесаһына таянып ҡына унан драматург яһарға ла ярамай. Шуларҙы белә тороп, милли сәнғәтебеҙ көҙгөһө Башҡорт академия драма театрына М.Ғафури исемен көсләп тағыуҙы, өҫтәүенә, болдоронда бронза һынын суҡайтыуҙы (әсе теллеләр һәйкәлде “унитазда ултырған бабай” тип нарыҡлай, сөнки ултырғысы шуға оҡшатылған) нисек аңларға? Ә театрыбыҙҙың юл башында уҡ сәхнәһендә драмалары гөрләп барған, әлегәсә тамашасыларының иғтибарын яулаған драматургыбыҙ, ысын халыҡ шағиры, ә мәшһүр сәсәнлеге, Рәсәйҙә генә түгел, бөтә донъяға билдәле бөйөк Мөхәммәтша Буранғоловтың яҡты исеме ҡайҙа? Ниңә ошо театрға бирелмәгән, ғорур һыны бейек гранит постаментҡа баҫтыртылмаған? Һәптәнлекте кире ҡағыу бер ваҡытта ла һуң түгел: бөйөгөбөҙҙө үҙенең хәләл театрына ҡайтарып, туғандаш халыҡ әҙәбиәтенең классигы итеп һаналған “ултыраҡ бабай”ыбыҙҙың иһә исемен дә, бронза есемен дә, әгәр ҙә ул туғандарыбыҙ таныҡлаһа, һөйкәнгән һөйгәненә -- “Нур” татар драма театрына бүләк итергә булыр ине. Хәйер, уның өсөн үҙенең йорт-музейе, урам саты, баҡсаһы ла килешле.

Тормошобоҙҙа һәптәнлек киң ҡолас киреп йөрөп-ята, ул, башҡорттоң яңы заман тарихын этлекләштереүе менән генә мөрәхәтһенмәй, үткәндәребеҙгә бәйле хәтерҙе лә өҙөп рухыбыҙҙы ҡаҡшата, тарҡата – тамырҙарыбыҙҙы киҫеп маңҡортлоҡҡа этәрә. Беҙҙең эраға тиклем икенсе быуат башында йәшәгән Бабсаҡ-бабаның, шул быуат аҙағында даны Ҡытай императорҙарының һарайҙарынаса ирешкән Бәндәбикә-инәбеҙҙең, урта быуат Алтын Урҙа императоры Туҡтамыш-ханыбыҙҙың изге ҡәберҙәрен вәхшиҙәрсә аҡтарҙылар, аҫыл һөйәктәрен фән дәрәжәһе алыу хаҡына ятбауырҙарға, ябай ғына башҡортсалап әйткәндә, һатып ашанылар. Исемдәре билдәле – Рәсәй Федерацияһының Енәйәт кодексына ярашлы хөкөмгә тарттырырға кәрәк уларҙы. Бөтә кешелек донъяһы өсөн изге Шәке-тауҙы умырып йотоусыларҙы ҡоҫторторға, шундай уҡ изге Тора-тауға, Йөрәк-тауға, Ҡуш-тауға ҡул һуҙыусы яһилдарҙың ҡулын ҡыҫҡартырға, Яман-тауҙы яман хәлгә төшөрөүселәрҙән дә яуап алырға ваҡыттыр. Эсебеҙҙә йәнебеҙ барҙа ғүмер буйы һәптәнлектә ҡаңғырырға тимәгән бит.

17.02.2011

Тиңһеҙ икәү

Заманабыҙ ҡатмарлы: милләт яҙмышын хәл итерҙәй урындарҙа ҡапҡа асып-ябыусы булып күбеһенсә: “Яңылыҡҡа юл бирегеҙ – ҡорһағым һәм карьерам өсөн хәүефле, ә күнеккән иҫкене үткәреп көн күреү тыныс һәм хәйерле”, -- тип эш ҡылыусы ярым-наҙан чиновниктар (бойормандар) бойороп ултырғанда кәртәләрҙе аша ҡараусы ысын ижад кешеләренә юл ярыуы ифрат ҡыйын, хатта мөмкин дә түгел. Ләкин йырып сығыусылар һәр быуатта ла булған һәм ундайҙар бөртөкләп кенә һанала. Егерменсе быуат аҡыл титандары араһынан шөғөлдәштәренә тиңһеҙ, шуға күрә танылыуһыҙ һәм билдәһеҙ ҡала килгән ике башҡорттоң барлығын мәғлүм итәйем. Интеллектуаль ҡаҙаныштары үҙҙәренең егерменсе быуат ҡыҫаларына һыйышмай, егерме беренсе быуатҡа дөрөп сыҡты был икәү.

1. **Иршат Бикбулат улы Йәнбирҙин,** һөнәре буйынса хәрби гидролог, отставкалағы офицер. Был инсан башҡорт халҡы мәҙәниәтендә һис кемдең ҡулы теймәгән ғилми өлкәгә тотоноп, башҡорт *граффитиология* (төрлө нәмәләргә сыйылған иҫке яҙыуҙарҙы өйрәнеү) фәнен нигеҙләне һәм бик күп археФакттарҙы туплап, өйрәнеп, тарих өлкәһендә Башҡортостандың фәндәр донъяһы хәбәрдар булмаған асыштар яһаны. Ҡулъяҙма китаптарын ташҡа баҫтыртыу өсөн йылдар буйы нәшриәт һәм дәүләт биналары тупһаларын тапаһа ла, мораҙына ирешә алмай, ун ике томлыҡ “Иршаднамә”һен Иҫәнғол типографияһында нәшер итә башланы (алты томы сыҡты) һәм ошоғаса беҙҙә күрелмәгән Мәхмүд Ҡашғари әҫәрен башҡортсаға тәржемә итеп китап яһаны. Уның тиңһеҙ хеҙмәттәре көнө килгәс лайыҡлы баһаланасаҡ.

2. Ванцет Баһап улы Абдуллин, һөнәре буйынса география уҡытыусыһы. Тел белеме буйынса республикалағы, улай ғына ла түгел, донъя күләмендәге телсе-ғалимдарҙы уҙып, евразия халыҡтары телдәренең, һүҙҙәренең ҡайҙан һәм ни рәүешле килеп сығышы тураһында егерменсе быуатта һис көтөлмәгәнсә асыш яһап, ошоғаса күрелмәгән тәүтел этимологияһын төҙөүсе. З.Биишева исемендәге дәүләт “Китап” нәшриәтендә быуылып ятҡан ҡулъяҙмаларын нәшриәттең ул саҡтағы ғилми әҙәбиәт редакцияһы мөдире Зәйтүнә Хановаңың һорауы буйынса уҡып сығып, фекерҙәремде түбәндәгенсә яҙып биргәйнем:

Көтөп алынған хеҙмәт. Ошоғаса күптәргә билдәле булмаған, оҙаҡ йылдар ныҡышмаллыҡ талап иткән ҡатмарлы ғилми эше өсөн бер ҡайҙан да эш хаҡы алмайынса, түҙмер һабан үгеҙеләй өнһөҙ-тынһыҙ егелеп эшләгән, институт тиклем институттарыбыҙ ҙа тотонорға йөрьәт итмәгән тау дәүмәлле лингвистик хеҙмәтте бер үҙе тыуҙырған география уҡытыусыһы Ванцет Баһап улы Абдуллиндың “Өфөрикум (Уфарикум) — башҡорт этимологияһы” тигән ҡулъяҙмаһы тураһында бара һүҙ. Бер ыңғайҙан тәҡдим итеп китәйем: уҡыусыны баштан уҡ дөрөҫ юҫыҡлатыр һәм нигилистик шик-шөбһәләргә урын ҡалдырмаҫ

өсөн, был хеҙмәтте “Өфөрикум (Уфарикум)[78] — башҡорт теле һәм унан үрсегән башҡа телдәрҙең һүҙҙәр этимологияһы[79]” тип исемләү дөрөҫ булыр ине һымаҡ.

Эйе, көтөп алынған хеҙмәт. Сөнки ун туғызынсы быуат аҙағынан башлап тоташ егерменсе быуат буйына телсе-ғалимдарҙың башы осонда тоҫмаллауҙар рәүешендә маңлайҙарына бәрелә-һуғыла һауала йөҙөп йөрөнө ул, В. Абдуллин хеҙмәтенең төп заңы. Ҡитғаның төрлө яҡтарынан иҫкән “фән елдәре” зыялыларҙың танауы еҫ тойғандарына шуның таңһыҡ “озон аңҡышын” тойҙортоп елә ине. Егерменсе быуаттың йәнәһе кире ҡаҡҡыһыҙ “фәнни теория”һы сифатында тамам ҡалыплашып ҡатып ҡалған һәм дөйөм ҡабул ҡылынған традицион лингвистика ҡанундарына һыйышмай, көтөлмәгән тәғлимәткә әүерелә барған өр-яңы ҡараш — донъялағы бөтә телдәрҙең дә туғанлығын, улар араһында бер ниндәй ҙә “ҡытай стенаһы” тормауын, *бар*лыҡ телдәрҙең дә һүҙҙәренең бер оянан яралыуын тойомлатып раҫлатыусы шифалы “ел” ине был; ғалимдар был яңы йүнәлешкә “телдәрҙең ностратик теорияһы” тигән исем бирҙеләр.

Дөрөҫ, “ел”дең тынғыһыҙ көйәҫе ҡитғабыҙҙа йөҙ йыл элгәре үк елә башлағайны.

Туғандаш (ностратик) телдәрҙең глобаль ғаиләһе тураһындағы яңы идеяны XIX быуат башында уҡ Рәсәйҙең Тарту университеты ғалимы К.А. Херман иғлан ҡыла, хеҙмәттәше М.И. Эйзен күтәреп ала. XX быуат башында Дания ғалимы Х. Педерсен да ҡеүәтләй. Совет осоронда иһә ул йүнәлеш А.Б. Долгопольский һ.б. тарафынан тәрәнәйтеп үҫтерелә. Иртә вафат булған совет ғалимы В.М. Иллич-Свитыч донъя телдәренең сағыштырмаса фонетикаһын өйрәнә һәм дөйөм тамыр һүҙҙәренең сағыштырмаса һүҙлеген төҙөп ҡалдыра, шуның һөҙөмтәһендә ошо мөһим яңы йүнәлеш телдәрҙең ностратик (туғандашлыҡ) теорияһы рәүешендә нигеҙләнә. “Ностратик телдәр, — тип аңлата А.Б. Долгопольский, — телдәрҙең ***гипотетик*** макроғаиләһе; ул Евразияның һәм африканың төрлө-төрлө тел ғаиләләренән һәм телдәренән (һинд-европа, картвель, семит-хамит, урал, төрки, монгол, тунгус-манчжур, корея, дравид телдәренән) тора. Шулай уҡ этрусск, элам, япон, нивх, юкагир, чукот-камчат телдәрендә *лә* ностратик телдәргә ҡарағанлыҡ билдәләре бар”. Ошоға тиклем донъялағы һәр бер телде, йәки телдәр ғаиләһен икенселәренән бейек “ҡытай стенаһы” менән айырған һәм шул стеналар араһында әлһерәп ҡатып ҡалған иҫке лингвистик тәғлимәттән бер аҙым алға китеш ине был — бөтә телдәрҙең туғанлығын таныу. Ә шулай ҙа ошо алдынғы ғалимдар ҙа яртылыҡ юлда ҡалды: донъялағы бөтә телдәрҙең шәжәрә Тирәге (әсәһе) берәү икәнлеген һәм ул әсә әлегәсә иҫән-һау — *башҡорт теле* икәнлеген төшөнә *лә*, таный ҙа алманылар, шуға күрә *лә* был реаль берҙәйлекте реаллегенән айырып, телдәрҙең ***гипотетик*** (фараз ғына) макроғаиләһе, тип “томан ебәреп” атарға мәжбүр булдылар. Һорау тыуа: барлыҡ телдәрҙең туғанлығын таныһаҫ, бер туғандарҙың берҙән-бер әсәһен дә (тәүтелде) эҙләп табыу, исемен әйтеү фарыздыр бит?!.

Ә баяғы ҡатып ҡалған тәғлимәтселәргә килгәндә, улар һаман ҡитғабыҙҙың (һәм донъяның!) төп тел ғаиләләрен айырым-айырым икегә — **урал-һинд-европа**

[78] Китап тышлығына.

[79] Титул биткә.

һәм **урал-алтай** ғаиләләре төркөмдәренә бүлеп ҡарауҙарын дауам иттеләр. Был иһә лингвистикала бер аҙым да алға бармау, бер урында тапанып тороу ине. Үҙебеҙҙең арпалыҡлы (йәғни хөкүмәттән эш хаҡы алыусы) “ғалим” аталмыш күпселек фән кандидаттарыбыҙ, докторҙарыбыҙ һәм профессорҙарыбыҙ, академиктарыбыҙ ҙа был яғымһыҙ яңылыҡҡа һырт ҡайырып, балыҡ өнһөҙлөгө һаҡлап йәшәнеләр. Ышанмаһағыҙ, табаҡ-табаҡ яҙмаларын аҡтарығыҙ: ностратик теорияға бәйле берәй фекер остоғон ғына түгел, хатта “ностратик” һүҙен дә осрата алырһығыҙмы икән? Был йәһәттән “балыҡ”тарҙың барыһы мәреткә киткән, йәки, Туҡай әйтмеш, “мужик йоҡоһо” менән йоҡлайҙар, буғай. Хәйер, ваҡыт-ваҡыт мығырҙанып-һиҫкәнеп тә алалар: бисмиллалай яҫтанып ятҡан иҫке тәғлимәт ҡанундарын боҙоусыларҙың бөтәһен дә бер юлы: “Быны мин белмәйем — тимәк, ул юҡ, булыуы ла мөмкин түгел!” (йәғни “этого не может быть, потому что не может быть!”) — ҡағиҙәһе буйынса кире ҡаға-ҡаға, бушты юҡҡа ауҙарып, сүбек сәйнәп май сығарыу менән шөғөлләнәләр...

Егерменсе быуатҡа килеп кергәндә шулай ҙа “Башҡортостан” гәзитендә яңылыҡты күтәреп сығыусылар ҙа булды, тик улар бер ниндәй ҙә фән кандидаттары ла түгел, ә шуларға өлгө булырҙай ябай уҡытыусылар, хатта тракторсылар ҙа ине (мәҫәлән, шул уҡ географ В.Абдуллин, француз теле уҡытыусыһы Г.Ямалова һ.б.). Һуңғыһы, Гәүһәр Һылыу Ямалова, алыҫ Бөрйән урмандары төпкөлөнән “йоҡосо» баяғыларыбыҙҙың зитына тейеп: “Беҙҙең башҡорт халҡы үҙе, уның исеме, уның ауыҙ-тел ижады ғына түгел, уның теле лә үҙенең грамматик категориялары менән сал боронғолоҡҡа дәғүә итә”, — тип яҙҙы. Ә икенсе бер мөғәллимә, Гүзәл Яныбай ҡыҙы Хамматова, 2002 йылда донъя күргән монографияһында “башҡорт теле тамырҙарының башҡа телдәр, шул иҫәптән немец, инглиз, француз, грек, латин, испан, норвеж, фин, урыҫ, украин һ.б. телдәренең һүҙ байлыҡтары менән тарихи туғанлығы” хаҡында ҡыҙыҡлы дәлилдәр килтерҙе. Шуныһы ла фәһемле: әле һүҙ барған Ванцет Абдуллин этимологияһының үҙәгендә торған үҙебеҙҙең “Өфө” һүҙен Гүзәл Һылыу дат, һинд, инглиз, иврит, немец, норвеж, фин телдәрендәге шул уҡ һүҙҙәр менән сағыштырып, барыһы ла башҡорттоҡо менән бер мәғәнәлә икәнлектәрен инаныслы асыҡланы. Һәм бик мөһим һөҙөмтә лә яһаны: “...что бы расшифровать эту информацию, требовался *ключ*, нужно было компенсировать *недостающее звено*, заполнив прореху в слове ***индоевропейский,*** наличие которой, вольно или невольно, тщательно скрывали за счет его слитного написания, вместо того, что бы писать через дефис. И тем звеном были языки народов, обитовших и обитающих на огромной территории между Индией и Европой, что уже само по себе предполагает мысль о наличии *посредника”.* Асыҡ әйтә алабыҙ: бындағы “ключ”, “недостающее звено”, “посредник” тигән объект — үҙәк тел бар донъяла — ***башҡорт теле,*** тап Ванцет Абдуллин хеҙмәтендә хаҡлы рәүештә үҙәккә ҡуйылған тел! Һәм әйтелгән монография авторы ла дөрөҫләп бирә шуны: “Ядром же того недостающего звена оказался игнорируемый как индоевропеистами, так и тюркологами ***башкирский язык,*** чье своеобразие в том и состоит, что те элементы, которые *отличают от остальных тюркских языков, как раз и роднят его с европейскими”* (Г.Я.Хамматова. Магия древних слов. Уфа — 2002; 2, 46 — 48, 32-нсе

биттәр). Таш мәсеткә ағас мулла хәлендәге академиктарыбыҙҙың башы ла, ҡыйыулығы ла етмәгән төп хаҡиҡәтте ауыҙ тултырып әйтә алған был һылыу! Бының менән мин В.Абдуллин башҡарып биргән әлеге хеҙмәттең баһаһын төшөртөргә теләйем, сөнки һис тә юҡтан бар ҡылынмаған, ныҡлы реаль нигеҙҙән үҫеп сыҡҡан үҙ аллы ҡоролма ул, тип инанып раҫлайым, дәрәжәле "ғалим"дарыбыҙ хупламаясағын белә тороп та. Башҡорт тел белемендә "ғалим"лыҡ ҡылыусы бәғзеләребеҙҙең реаль хәлде реаль баһалай алмауҙарына йән көйә лә һорау тыуа: ундайҙарҙан фәнгә ни файҙа? Тап ошондай "мулла"ларға ҡараталыр, химия фәндәре докторы О.Ю.Охлобыстиндың ғибрәтле мәҡәле һүҙҙәре бар: "Әгәр һеҙҙең ғилми хеҙмәтегеҙ хәҙерге заман ҡараштары менән тулыһынса килешеп ярашһа — унда бер ниндәй ҙә яңы фекер юҡ, тимәк. Әгәр ҙә был хәл системалы рәүештә ҡабатланһа — һеҙгә үҙ профессияғыҙҙы (һис тә булмаһа темағыҙҙы) алмаштырыу тураһында етди уйланыу хәйерле. Әйткәндәй, "ғалим" — ул һис тә профессия һәм титул түгел, ә барыһынан элек фекерләү рәүеше. Диңгеҙсе лә, балта оҫтаһы ла, дәүләт эшмәкәре лә ғалим була ала; фәндәр докторы исемен йөрөткән бәғзе бер олпат әҙәм дә үҙ сиратында, тап ошолай уҡ, бер ҡасан да ғалим булмаған һәм булмаясаҡ та — яраҡлашыусанлығы юл ҡуймай" ("Химия и жизнь" 1989/9 журналы, 12-нсе бит). Тимәк, фәнни дәрәжәгә эйә булмаған В.Абдуллиндың да ғалимлығы ҡануни һәм беҙ уның хеҙмәтенә етди ҡарарға тейеш.

Шуны ла әйтергә кәрәк: был юлдарҙың авторы мин фәҡирегеҙ ҙә шул уҡ теманы үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында уҡ ҡуҙғата һәм эшкәртә башлағайным (тимәк, В.Абдуллин хеҙмәте юҡтан түгел!). Һөҙөмтәһе һикһәненсе йылдар башында "Ағиҙел" журналының тиҫтәләгән һандарында "Башҡорт хәтере" тигән исем аҫтында донъя күрҙе. Тик уның китап булып сығыуы бик оҙаҡҡа һуҙылып (тимәк, В.Абдуллиндың да юлы тап-таҡыр түгел!), яңы быуат башында ғына, ниһайәт, нәшер ителде (Йыһат Солтанов. Хәтерхитап. "Китап" нәшриәте, Өфө — 2002; 510 бит). Уның "Ут — Һыу — Ата — Әсә", "Башҡорт нисә йәшендә?", "Тәүтел тураһында төшөнсә", "Тәүтелдең тәбиғәте", "Һүҙҙәр оянан үрсей" тигән махсус бүлектәре тел белеменең әлеге мөһим проблемаларын аңлатыуға, хәл итеүгә арналды. Беренсе башлап беҙҙә ***тәүтел*** тигән термин ҡулланылып, уның тураһында аныҡ төшөнсә бирелде; донъялағы бөтә телдәрҙең дә берәгәй тәүтелдән үрсегәнлеге һәм тәүтелдең туранан-тура дауамланышы (бөтә телдәрҙең дә әсәһе) — ***башҡорт теле*** икәнлеге дәлилләнде. Ошоға тиклем лингвистикала берәгәй тәүтел төшөнсәһе юҡ, ә фәҡәт "праязык" (баба тел), йәғни һәр айырым телдең үҙенең айырым әсәһе тураһында ғына һүҙ бара, ә башҡорт теле был йәһәттән телгә лә алынмай ине. "Ностратик теория, — тип белдерҙем унда, — ғәмәлдә шуға алып килде: хәҙер *һәммә* телдәрҙең дә ҡасандыр бер телдән саталанып сыҡҡанлығы танылып, бөтә донъя телдәре бер олпат Тирәк рәүешендә шәжәрәләнеп күҙаллана... Быға һис тә ғәжәпләнер урын юҡ: иғтибарлабыраҡ баҡһаҡ, телмәрҙәребеҙгә ҡолаҡ һалһаҡ, үҙебеҙҙең бөгөнгө ошо туған телебеҙҙә үк бик күп һүҙҙәр, хатта тулы һөйләмдәр бер үк ваҡытта һинд-европа (мәҫәлән, урыҫ) теле кешеләренең дә туған теленең органик өлөшө икәнлеге һиҙелә.

Телебеҙҙең иң архаик ҡатламдары беленә шуның аша. Миҫал итеп “Урал батыр” эпосынан ике юл килтерәйек:

Батыр атанан (***патер-***атанан) ҡот йәйгән,
Матур әсәнән (***матерь-***әсәнән) һөт имгән...

Күренекһенсә, бөгөнгө һинд-европа телдәренең төп терминдары булған ***патер*** (“ата”) һәм ***матерь*** (“әсә”) һүҙҙәре тамыры менән үк беҙҙең туған тел шәжәрәһенә төпләнгән икән” (40, 38-енсе биттәр).

“Хәтерхитап”та үҙ ҡарашымды һәм раҫлауҙарымды донъялағы һәм донъя фәндәрендәге бик күп мәғлүмәттәр, факттар менән нигеҙләп, бөгөнгө көн (һәм киләсәк!) өсөн мөһим һөҙөмтә яһағанмын, тип уйлайым: “Тимәк, донъяның бөтә телдәре *лә* бер төптән үркәнләгән; үҙенә башҡа айырым төплө бер тел *дә*, раса *ла* юҡ донъяла. Төрлө тел ғаиләләренә уртаҡ бик боронғо тамыр һүҙ ҡатламдарына эйә булған башҡорт теле ғенә түгел, ә башҡорт халҡының үҙенең тәбиғи тән төҙөлөшө — антропологик күрһәткестәре *лә* дөрөҫләй быны” (22-нсе бит).

В.Абдуллин раҫлауҙарының, кемдер әйтмешләй, яһалма рәүештә уйлап сығарыу йәки фәстерең емеше булмайынса, үҙенә тиклемгеләр тарафынан эшләнә килгән ныҡлы нигеҙгә ҡоролоуын баҙыраҡ ҡалтайтыу һәм уҡыусыға В.Абдуллин хеҙмәтен яҡшыраҡ аңлатыу өсөн, ошо тәңгәлдә “Хәтерхитап”тың (ә *ул* иһә донъя фәндәре ҡаҙаныштарына таянып яҙылған) әлеге хеҙмәткә туранан-тура ҡағылышлы бер өҙөгөн барлайыҡ.

Унда тәүге ике һуҙынҡынан (“а” һәм “у”) — бөтә һуҙынҡыларҙың, ике тартынҡынан (“ҡ” һәм “б”) бөтә тартынҡыларҙың килеп сығышы бәйән ителә. Һәм: “Артабанғы һүҙ яһалыш өҫтә күрһәтелгән һуҙынҡы һәм тартынҡы теҙемдәрҙәге теләһә ниндәй бер һуҙынҡыға бер тартынҡының “йәбештерелеүе” (агглютинатив ысул) рәүешендә бара: аҡ, уб, ас, ус, *ал*, *ул*, ат, ут, ар, ур, аҙ, уҙ... Ошо рәүешле бөтә һуҙынҡыларға *ла* сиратлап бөтә тартынҡыларҙы *ла* йәбештереп сығып *була* һәм уларҙың һәр береһе, ғәмәлдә, мәғәнәле һүҙ яһай... Ошонан артабан һүҙ яһалыштың икенсе баҫҡысы китә: бер һуҙынҡы һәм бер тартынҡынан хасил бер ижеккә шундай уҡ икенсе, өсөнсө... ижектәрҙе теркәп йәбештереү: аҡ-уб (ағыу); аҡ-ас (ағас); аҡ-ас-ат (аҡ әсәй-атай йәғни “ата-әсә ағы”) — аҡа-сат (аҡ-сөт, аҡ-һөт); ас-аҡ (ысыҡ) — а-саҡ (а-сағ — сыу, йәғни “аҡ һыу”); һыу эпитеты “аҡ“ ижегенә Ҡояш эпитеты “ал” ҡушылып, аҡ-ал (аҡыл) — уғыл — ул хасил ҡыла; ә ал-аҡ — илаҡ, уб-ал-аҡ — балаҡ — балыҡ — бала — малай һүҙҙәрен бирә. Күренекһенсә, ғәҙәттәге һүҙ башындағы һуҙынҡылар һәм һүҙ ахырындағы тартынҡылар юйылып-юғалыусан була һәм һүҙҙәрҙең хәҙерге “сонтор” өлгөләре яһала: у-бала-ҡ — бала, а-сат — сөт (һөт), а-ҡуб — һув (һыу) һ.б. Ошолай ижеккә ижек ҡушылыуҙың да, тәүгеһенеке кеүек үк, һүҙ яһалыш йәһәтенән иҫәпһеҙ күп комбинациялары *була ала*. Йәғни “йәбештереү” (агглютинатив) ысул беҙгә, ғәмәлдә, шахмат таҡтаһында күпме комбинацияға юл ҡуйылһа (был — иҫәпһеҙ-хисапһыҙ!), шул тиклем үк һүҙ яһалыу мөмкинлеген бирә. Йәғни быға тиклем ҡасандыр булған, бар һәм буласаҡ һүҙҙәребеҙҙең көллөһөн *дә* — миллион-

миллион һүҙ запасын тергеҙә ала был ысул, теоретик планда ҡарағанда” (40, 44 — 45-енсе биттәр).

Ванцет Абдуллин хеҙмәтенең теоретик өлөшөндә лә һүҙ яһалыштың тап ошондай, йәки ошоға оҡшаш схемаһы күҙ уңында тотолғанлыҡтан, өҫтәге үҙемдең цитата менән сикләнеп, бында уныҡын анализлауҙы кәрәкһеҙ тип һанайым. Моғайын, ул да шуларҙы иҫтә тотоп, үҙенең схемаһын тәфсирләп биреүҙе, хаҡлы рәүештә, кәрәкһеҙ һанағандыр (сөнки “Хәтерхитап”та ул бар бит инде!) — бына ни өсөн мин унда етешмәгән аңлатманы өҫтәге цитата ярҙамында тултырырға булдым. Әммә теманы белгән кеше асыҡ күрә: В.Абдуллин был өлкәлә үҙенә тиклемдәрҙән ныҡ алға киткән, *башҡала*р эшләмәгәнде эшләгән.

Минең өсөн, мәҫәлән, агглютинатив ысул менән яһалған тәүтел һүҙҙәренең ниндәй ысул менән башҡа телдәрҙең һүҙҙәренә әүерелешен асыҡлау сер булып ҡала килде, ә ошоно асыу иһә лингвистиканың *боролош моменты* буласағы билдәле ине. Ванцет Абдуллин тап ана шул мәсьәләне сисеп бирҙе һәм әйтелгән *боролошто* яһаны — математик теүәллектә ҡағиҙәләне уны: ***“Рус һүҙҙәре башҡорт теленән агглютинатив һәм сингармонизм ярҙамында сыҡҡандар. Өндәр алмашыныуы һүҙ башында (префиксальная агглютинация), уртаһында (аффиксальная агглютинация) һәм һүҙҙәр аҙағында (суффиксальная агглютинация) күҙәтелә”.*** Ошоға бәйле теүәллекле таблицаһын да төҙөгән.

Ул төҙөгән этимологик һүҙлекте лә, ваҡ-төйәк кәмселектәрен иҫәпкә алмағанда, нигеҙҙә дөрөҫ тип һанайым һәм уны килделе-киттеле “ғалим”дарҙың үҙ аршинына үлсәп бесергә яҫҡаныуҙарынан ҡурсаларға саҡырам (йыуынты һыу менән ҡуша бәпесте сығарып түкмәйек). Сөнки, минеңсә, бәғзеләрҙең теңкәләренә тейеп, автор бик хаҡлы яҙа: “Великий русский язык происходит от величайшего башкирского языка. Почему так говорим? Потому что от башкирского языка происходили и другие языки (русский, немецкий, греческий, английский, французский, казахский, узбекский...) путем агглютинации и сингармонизма”.

Автор лингвистикала беренсе башлап тәүтелдең — башҡорт теленең һәм унан үрсегән башҡа телдәрҙең һүҙҙәр яһалышының төп ҡанунын эшләп биргән: бөтәһе 42 өн, шуларҙан төркөмләнә 11 тартынҡы — төп өн + 13 һуҙынҡы (тартынҡыларға теркәлеп һүҙ яһаусылар) + 9 өн — “С” хәрефен алмаштырыусылар + 9 өн-балласт йәғни һүҙҙәрҙе тулыландырыусылар — агглютинатив ялғаусы, күплек өндәр, приставки, суффикс өндәре һәм шуларҙан яһалған төп 9 һүҙ: Өфө, Әсә, Ил, Ам, Ир, Йән (Ән), Кәй (Ки), Ат, Ай.

Шулар ярҙамында донъялағы төп телдәрҙең барыһының да һүҙҙәре яһала һәм шулар аша ул һүҙҙәрҙең төҙөлөшөн үтәнән-үтә күрергә — анализларға була, ә был иһә математика теүәллегендә эшләүсе универсаль ҡорал (автор уны һүҙҙәр этимологияһында һынап күрһәткән). Ғалим шуны файҙаланыуҙың “Өфөрикум таблицаһы”н төҙөгән һәм ул бөтә телдәргә ҡарата ла математик теүәллекле ҡулланыла. Шуға күрә лә мин быны бөйөк химик Менделеевтың периодик таблицаһына тиңләйем һәм егерменсе быуаттың иң мөһим асыштарының береһе һанайым.

21.12.2003.

Үкенескә ҡаршы, мәшһүр Ванцет Абдуллин үҙенең хеҙмәтенең нәшриәттә китап итеп сығарылыуын көтөп ала алмайынса вафат булды, ҡулъяҙмаға ыңғай ҡарашлы З.Ханова ла ҡыҫырыҡланып эшенән киткәс, уҙамандың медик улы ҡулъяҙманы алып ҡайтып киткән – юғалмаһа ярар ине, тигән хәүеф бар; шул уҡ ваҡытта ул ҡалҡып килеп сығыр -- тере ҡуҙҙы һалам ҡаплап йәшерә алмаҫтар, тигән өмөт кисерәм.

08.03.2011

Телебеҙ һәм көнөбөҙ

(Башҡорт халыҡ үҙәге «Урал» йыйынында телмәр. 18.12.1989)

Башҡортостанда башҡорт теленең дәүләт статусын ҡабул итеү тураһында һүҙ барғанда Автономиялы (?!.) Башҡорт Совет Республикаһы етәкселәре, йәғни партия һәм совет аппаратсылары, «быны халыҡ теләрме икән һуң?..» ти ҙә, күҙен тултырып ике тарафҡа ҡарай: йәнәһе, ғәзиздәрҙән ғәзиз татар ҡәрҙәштәребеҙ ни әйтер? Урыҫ өлкән ағайҙарыбыҙ ни әйтер?..

Аппаратсыларыбыҙ фәҡәт тура ҡарарға, ошо ерҙең, республиканың төп халҡының күҙенә тура ҡарарға, ғына «онота»...

Белергә теләмәһәгеҙ ҙә белегеҙ, хөрмәтле чиновник-етәкселәр: был мәсьәлә башҡорт халҡының мәңгелек бөйөк референдумында — быуаттар референдумында әллә ҡасан уҡ тайпылышһыҙ һәм кире ҡаҡҡыһыҙ рәүештә хәл ителгән. Таш быуатта уҡ бабаларыбыҙ Урал батырыбыҙ толпары Аҡбуҙаттың Таш Өйө (Шүлгәнташ) мәмерйәһе ҡаяларына үҙенең ҡан төҫлө ҡыҙыл буяуы менән шул Аҡбуҙатты изгеләштереп һүрәтләгәндән алып — ошо көндәге рәссамыбыҙ Әхмәт Лотфуллиндың «Ауылда беренсе Май байрамы» исемле сағыу ҡыҙыл байраҡлы картинаһынаса булған тиҫтәләрсә мең йылдар буйынса барған ул бөйөк референдум. Туҙға яҙған һәм ташҡа яҙған, ҡайһы берҙәре бөгөн дә Урал ҡаяларында ҡысҡырып-шаңғырып торған, китаптарыбыҙ аша, үлемһеҙ эпостарыбыҙ, йыр-моңдарыбыҙ, йолаларыбыҙ, биҙәү сәнғәттәребеҙ аша уҙған ул бөйөк референдум. Түгелгән ҡандарыбыҙ, өҙөлгән баштарыбыҙ, емертелгән, яндырылған иҫәпһеҙ күп ауыл һәм ҡалаларыбыҙҙың харабалары аҫтында ла күмелеп ҡалмай үтәлгән ул бөйөк референдум. 1919 йылдың 22 мартында суверенлы Башҡорт Совет Республикаһының, суверенлы башҡорт теленең мәңгелек йәшәү хоҡуғы булып ҡыҙыл нәшриәттең үҙендә ташҡа баҫылып сыҡҡан ул быуаттарҙың бөйөк референдумы һөҙөмтәһе. Һәм иманыбыҙ камил: бер ниндәй ҙә яһил аппаратсының, йәки аппаратсыларҙың хитлығы ла сикләй алмаҫ ерле халыҡтың үҙ ерендә үҙ теленең үҙ аллылығына изге хоҡуғын! Башҡортостанда башҡорт халҡының бөгөнгө көн аҙсылыҡ тәшкил итеп, беҙгә өйҙәш булып килеп ингән башҡа халыҡтарҙың һан яғынан күпселек алып китеүен башҡорт халҡына ҡаршы мәкерле рәүештә файҙаланырға тырышыусы политикан-демагогтар ҙа яҡшы белһен: башҡорт халҡының ихтыярынан тыш башҡорт ерендә «яңы тәртип» урынлаштырыу бер ҡасан да, бер кемдең дә ҡулынан килмәйәсәк! Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генеральный

Ассамблеяһының ҡарары бар был хаҡта — аҙсылыҡлы ерле милләттең күпселектәр ҡысымындағы изге хоҡуғын ҡурсалау-яҡлау хаҡында.

Эйе, беҙҙең боронан килгән, мәрхәмәтле бабаларыбыҙ ишекте киң асып индергән ҡәҙерле өйҙәштәребеҙ бар был илдә. Татарҙарға, удмурттарға, марийҙарға, сыуаштарға һәм хатта урыҫтарға ла яуыз батша-батюшка тарафынан золом көнө, ғәрәсәт көнө ҡупҡан һайын, һыйыныр екәтно-геноцидтан ҡотолоп ҡалған. Өҫтәүенә, элекке ҡәтғи тыйылыуҙан арынып, ауыл һәм ҡалаларҙа мәсеттәр, мәҙрәсәләр һалырға, ташҡа баҫмаханалар асып, китаптар баҫтырып сығарырға хоҡуҡ алған. Ҡайһы бер татар авторҙары башҡа ҡәрҙәш халыҡтарҙың мәҙәниәтен түбәнһетеү, кәмһетеү ниәтенән яһилланып, революцияға тиклем үк татарҙың күпме мәсете, мәҙрәсәһе, матбағаһы булғанлығын һанап маһая икән, уларҙың был ысындан да ҙур ҡаҙанышын ҡайһы халыҡ үҙенең ҡайнар ҡанын түгеп тәьмин иткәнлеген онотмаһын ине. Әммә уларҙан рәхмәт һүҙе ишетеү өмөтө юҡ...

Башҡорттоң ҡанлы ҡорбандары арҡаһында ғына был ерҙә төйәкләнеү, идара ҡылыу хоҡуғы алған, һәм әлегәсә бында — Өфөлә суҡайып ултырған, ләкин йөҙө Ҡазанға боролған мөфтиҙән дә игелек көтөүе ҡыйын: ул үҙенең бай иғәнәһен, кисә бындағы телмәрселәрҙең береһе әйткәне хаҡ булһа, туранан-тура Ҡазанға юлландырыуына ла аптырамайыҡ.

Ошо көндәрҙә мин Алматыла ҡаҙаҡ халҡының бөйөк улы Жосопбәк Аймауытовтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы булып ҡайттым. Бик күп союздаш республикаларҙан, сит илдәрҙән йыйылғайны ҡунаҡтар. Татарстан күршеләребеҙҙән дә бар ине яҙыусылар вәкиле, баяғы яманатлы Ғаяз Исхаҡиҙың ялалы мәктүбен ташҡа баҫып сығарып, башҡорт халҡының йөҙөн йыртып мәсхәрәләгән «Ҡазан утлары» журналының бүлек мөдире Тәүфиҡ Әйди тигән мөртәт. Шул яһилдың кулуарҙарҙа төрлө республика вәкилдәренә Башҡортостан, башҡорт халҡына ҡарата белдергән ҡәбәхәт «ихтирам»ын ишетеп, Өфөләге былтырғы тантаналарҙа башҡорт халыҡ шағиры Мостай Кәримдең, беренсе секретарыбыҙ Хәбибуллин иптәштең «татар игеҙәк туғандарыбыҙ» хаҡында күпертеп туҡыған ҡыуаныслы вәғәздәрен ытырғанып хәтерләнем.

Баҡтиһәң, «иҫәүән» башҡорт халҡының яҙмышы бында Өфөлә түгел, ә Ҡазанда, кәм тигәндә ниндәйҙер шул Тәүфиҡ Әйдиҙәр тарафынан әйҙәлеп хәл ҡылына икән дә.

Беренсенән, татар халҡының йән иҫәбен улар бөгөндән үк теүәл ун миллионға еткергән (бығаса алты миллиондан ашыу тип белә инек). Ә «игеҙәк туған»дары башҡортто улар биш йөҙ меңгә ҡалдырған да һөҙөмтәлә теүәл бер миллион башҡортто татар итеп иғлан ҡылған һәм үҙҙәренә «ҡушҡан».

Икенсенән, Татарстан АССР-ы сиктәрен улар көнсығышҡа ҡарай Уралға киңәйтеп, башҡорттарға Урал артындағы административ өс районда ғына ил ҡороп йәшәргә рөхсәт ҡылғандар. «Бына шунда үҙегеҙҙең боҙоҡ телегеҙҙә һөйләшегеҙ, беҙ быға ҡаршы түгел», тип, күңел иреткес татар миһырбанлылығын да белдерҙе миңә Тәүфиҡ. «Беҙ — ун миллионлы халыҡ, бергә тупланыр өсөн беҙгә йәшәү киңлеге кәрәк!» тип нигеҙләп тә ҡуйҙы дәғүәһен... Мин ҡан ҡәрҙәш татар халҡын, уның яҙыусыларын хөрмәт итәм, ә шулай ҙа ҡыйын булһа ла

әйтәйем: шанлы 1945 йылда үҙ өңө Берлинда муйыны һындырылған биреле бер ефрейторҙың «йәшәү киңлеге» хаҡындағы билдәле доктринаһын, «драң нах остен» (көнсығышҡа поход) пландарын хәтерләтте был яман ашҡынмыштың дәғүәһе...

Ана шул дәғүәле фронтҡа ҡаршы фронт ҡора алдымы һуң беҙҙең республиканың етәкселек штабы?

Эйе, фронт бар, әммә уның кемгә ҡаршы тороуын аңлау ауыр. Сөнки:

ошоғаса егерме бер көнбайыш райондарыбыҙҙа, башҡорттар күпселек тәшкил итеүгә ҡарамай, ун һигеҙ урыҫ гәзите, егерме бер татар гәзите һәм... бер генә башҡортса (ул да булһа дубляж!) гәзит сығарыла;

фәнни яҡтан әллә ҡасан уҡ дәлилләнеп, тарихи факт булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт теленең бер йән, бер тән тәшкил итмеш өсөнсө диалектын — көнбайыш диалектты — милли башҡорт теле тәненән яһил рәүештә ҡырҡып ташлап, уны татар теле итеп иҫәпләүҙәрен, көнбайыш диалект башҡорттарын татар телендә һөйләшә тип раҫлауҙарын һәм шул нигеҙҙә һаман яһил политика үткәреүҙәрен дауам ҡыла ошо үҙебеҙҙең етәксе-аппаратсылар;

фән ҡаҙаныштарын ана шулай танымай, инҡар итеп, беренсе секретарь булып эшләй башлаған йылында уҡ ике йөҙ, ә шунан һуң тағы ла бер нисә йөҙ башҡорт мәктәбен яптырҙы ла татар мәктәптәре итеп астырҙы ошо үҙебеҙҙең үк тәүфиҡлебеҙ Хәбибуллин иптәш;

башҡорт халҡы күпләп Урал артына — Силәбе, Свердловск өлкәләренә ҡасып сығып бөтһөн, Башҡортостан башҡорттарҙан арынһын өсөн бөтә мөмкин булған экономик шарттарҙы ла тыуҙырҙы, тормошҡа ашырҙы етәксе аппарат.

Шулай булғас, биреләнмеш Тәүфиҡ Әйдиҙәр ҡайҙан — бында сығыш яһаусы хөрмәтле делегат Мир Мөхәмәтйәнов ағай әйткән баяғы Ыҡ йылғаһы аръяғынанмы, әллә бирьяғынанмы тороп эш ҡылғанлығын айырыу ифрат ҡыйын...

Бына ниңә кисәге бер оратор, күңелендә партияға ышаныу кризисын кисереп, «Башҡорт компартияһы» төҙөү тураһында һүҙ ҡуҙғалта. Ләкин Хәбибуллин иптәш һәм ул етәкләгән аппарат бөтә КПСС түгеллеген, һәм булмаясағын да белһен ине ул иптәш. Башҡортостанда ленинсы Быкиндар, Иҫәнсуриндар, Афзал Таһировтар компартияһы ла булған. Быны бөгөнгө яҙыусы-коммунистар һәр ваҡытта ла аппараттың күҙенә ҡарап әйтте һәм әйтә, ысын үҙгәртеп ҡороу, билдәлелек, ғәҙеллек, хаҡлыҡ өсөн көрәшен дауам итә. Етмәһә, бына ошо йыйын түрендә ултырған иптәштәрҙең, ғәмәлдә яңы тыуып килгән Башҡорт халыҡ үҙәге «Урал» етәкселәренең дә, байтағы коммунист икәнлеген онотмағыҙ. Коммунистар партияһының ысын милли политика платформаһы беҙгә һөйөклө Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ, башҡорт теленең һәм мәҙәниәтенең артабан ҡаҡшамай йәшәүе, сәскә атыуы хаҡына ең һыҙғанып эшләү хоҡуғы бирә. Быны мин һеҙгә үҙем дә коммунист яҙыусы, КПСС ағзаһы булараҡ әйтәм.

Йәнә шуны ла өҫтәйем. Кисәге бер хөрмәтле ораторыбыҙ, артыҡ хисләнеп китеп, буғай, үҙе лә теләмәйенсәлер, туҙға яҙмағыраҡ һүҙҙәр ҙә ысҡындырғаланы.

Ун һигеҙенсе быуаттағы геноцид тураһында. Уны уҙғарған яуыз урыҫ батшаһы ла, татар мырҙаһы ла юҡ инде хәҙер. Урыҫ халҡы һәм татар халҡы ул палачтар өсөн яуаплы түгел. Ул халыҡтар беҙҙең ут күршеләребеҙ, туғандарыбыҙ.

Америка аборигендарына теләктәшлек белдереүебеҙҙе бер оратор тәҡдим иткән рәүешле яҙып ебәрһәк, бөтә донъя бот сабып көләсәк беҙҙән. Сөнки АҠШ резервацияларындағы индейҙарҙың тормош-көнкүреш хәле беҙҙекенән кәм тигәндә биш тапҡырға яҡшыраҡ. Быйыл Өфөгә килгәнендә СССР халыҡ депутаты, Америкала булып ҡайтҡан Давид Кугультинов үҙе һоҡланып әйтеп китте бит быны.

Инде йыйын ҡарарына керетергә бер тәҡдим: «Халҡыбыҙҙың ҡоролтайының йәғни ҡоролоуының артабанғы тупланышын һәм нығынышын өҙлөкһөҙ дауам иттереү өсөн, үҙәгебеҙҙең үҙ матбуғаһын — журналын булдырырға. Ул журналды «Ҡоролтай» тип атарға[80]»...

Хазарҙар һәм аҙарҙар

Бәғзеләрҙең, бәлки, хәтерендәлер, бынан ун-ун биш йыл элек “Литературная газета”ла уның Татарстан Республикаһы буйынса үҙ хәбәрсеһе Б.Бронштейндың ниндәйҙер бер “экстремист” яҙармандың ҡазандарға һалған бәләһе тураһында сетерекле мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны: баяғы хәйерһеҙйән республиканың танылған лидеры – Татарстан президенты Миңтимер Шәймиевтың юғарылыҡлы абруйына аяҡ салырға яҫканып, уның тыуған ауылына барған да ата-бабалар зыяратындағы “еврейса яҙыулы” ҡәбер ташын һүрәткә төшөрөп алған, шуның менән татар президентының милләте сеп-сей еврей икән, тип фәтүә һалырға маташҡан. Өҫтәүенә, шикле асышын үҙ эсендә генә йомоп ҡалдырмай, төньяҡ күрше республика типографияһында брошюра итеп сығартҡан һәм оторо мәғлүмәтте тейешенсә төшөнмәгән йәмәғәт аңын болғатырға яҫканған. Ҡазан тиклем Ҡазан зыялыларына дыуамал тайҙы мәлендә үк эйәрләп: “Эйе, беҙҙең һөйөклө уҙаманыбыҙ зирәктәрҙән-зирәк затлы еврей типтәре – шуға күрә ул сикләнмәгән аҡыллы!” – тип илгә ишеттертеп ғорурланһалар, ялпы араһында ҡәҙимгесә “башҡорт типтәре” тип атап йөрөтөүгә ҡарағанда отошлораҡ булыр ине, моғайын. Ләкин тейешле органдар ҙа йоҡлап ятмай: теҙгенде йәһәт ҡармап алып, тай-тулаҡты һөрлөктөртмәй, хәтәр баҫманың тиражын шунда уҡ тулайым юҡ иткәндәр...

[80] Был тәҡдим бер нисә йылдан һуң бойомға ашырылды — «Ватандаш» исемле журнал сыға башланы.

Был миçалдан ғауғалы авторҙың да, төбәк түрәләренең дә, гәрсә дипломлы юғары белем эйәләре булһалар ҙа, үкенескә ҡаршы, үҙҙәре йәшәгән тарихи Башҡортостан тупрағының тарихынан шөйлә ғафил икәнлектәре күрәнә, сөнки ата-баба ерҙәрендә ташҡа сыймаҡлап ҡалдырылған сал ядкәрҙәр араһында башҡалары менән бер ҡатарҙан *еврей хәрефле* яҙыуҙарҙың да барлығы башҡорттар өсөн көтөлмәгән яңылыҡ түгел: боронғо башҡорт-болғар бабаларыбыҙҙың йәһүд (еврей) динле һәм яҙмалы бөйөк Хазар дәүләтенең биләмәләре Ҡара диңгеҙгә ҡойған Дунай, Дон йылғаларынан алып көнсығышҡа табан Урал тауҙарынаса киң арауыҡты иңләгәнен (картаны ҡарағыҙ) беләбеҙ. Һәм баяғы “сәйер” яҙыулы ҡәбер таштары ла, әлбиттә, башҡорт телендә яҙылы башҡорт бабаларыбыҙҙыҡы булған. Иғтибар иттертәйем: ғалимдарының байтағы тыныс “мужик йоҡоно” менән ойоп ятҡан Башҡортостанда тынғыһыҙ яңы фәнгә -- *граффитиологияға* нигеҙ һалып уятыусы мәшһүр инсаныбыҙ Иршат Бикбулат улы Йәнбирҙиңдың ун ике томлыҡ “Иршаднамә”һенең 4-енсе томы тап шул темаға арналып, бик күп археҙакттар килтерелгән, мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Йәнсура районы Үрген ауылындағы яҙыулы ҡәбер ташы һәм Юнай ауылы эргәһендәге яҙыулы сик ташбағанаһы:

12.22. Эпитафии села Урген Зианчуринского района Башкортостана.



12.35. Пограничный столб из села Юнай Зианчуринского района Башкортостана.



Тик шуныһы хәүефле: Йәнсура һәм башҡа районындарҙағы маңҡорт чиновниктарыбыҙ, төрлө сәбәптәргә һылтанып, боронғо ҡомартҡыларыбыҙҙың

байтағын юҡҡа сығарғандай, уткүрше республика тупрағында ла шул хәл булмаһын ине.

“Иршаднамә”нән (125-енсе бит) күренеүенсә, Хазар империяһының көнсығыш күршеһе Ҡарахандар дәүләтенең 999-1030 йылдарҙағы ханы Боғра Арыҫлан Мәхмүд ибн Нассир менән Хазар иленең Оло ҡағаны төҙөшкән килешеү нигеҙендә ике-ара биләмә сиктәре яңыртылып, Юнай ауылы эргәһендәге ташбағана ултыртыла, шуның һөҙөмтәһе өҫтәге картала ла сағыла, буғай.

Тарихи Башҡортостан ниңә Хазар дәүләтендә ҡалған, Эске Башҡортто (йәки Эске Скифияны) хазарҙар баҫып алғанмы, тигән һорау тыуыуы ла ихтимал. Яуабы ябай ғына: бер кем дә баҫып алмаған -- башҡорт-болғар бабалар үҙҙәре Ҡаф (Кавказ) тауҙары тарафына Уралдан хәрәкәтләнеп, ҡарҙаш илдәрҙе берләштереп, тарихи Хазар империяһын төҙөгән – боронғо сығанаҡтар шуны дөрөҫләй. Билдәле тарихсы М.И.Артамоновтың “История Хазар” китабына (*Л.*, 1962) иғтибар итәйек:

Тел яғынан хазарҙар болғарҙарға яҡын (115-енсе бит). Ә “болғар” этнонимы – “бажғар” (башҡорт) тигәндең саҡ ҡына үҙгәреше ул (Н.А.Баскаков.Русские фамилии тюркского происхождения.М., 1979, 249-ынсы бит). Йәғни болғар – шул уҡ башҡорт ул, шуға күрә был ҡәүемде *башҡорт-болғар* тип әйтеү һис яҙыҡ түгел.

Византия (Рум) авторҙары ғәҙәттә хазарҙарҙы *төркиҙәр* тип һанай, ғәрәп авторҙары ла шулай әйтә. Хазарҙар иһә үҙҙәрен сығыштары буйынса уғырҙарға, аварҙарға, ғуздарға, барсилдарға, унуғырҙарға, болғарҙарға һәм савирҙарға ҡанҡәрҙәш тип иҫәпләй (114).

Савирҙар һәм хазарҙар – шул уҡ болғарҙар (127-128), тимәк, болғар-башҡорттар.

Беренсе быуатта уҡ Птолемейға “пагирит”тар (башҡорт-бәжәнәктәр) билдәле булып, атаҡлы географ уларҙы үҙ картаһында “хорс”тар (хорезмдар) һәм баяғы савир-“савар”ҙар (йәғни Әсә-Бүрегә табыныусылар – үҫәргәндәр. – Й.С.) араһына урынлаштырған (130).

Ғәрәп авторы Ибн-Руста (X быуат башы) яҙыуынса, болғар халҡын өс бүлкә тәшкил иткән: “*берсула, әсегел, болғар*” (131). Минең тикшеренеүҙәр буйынса, быларҙың өсөһө ла хәҙерге башҡорт (боронғо башҡорт-болғар) халҡының төп-нигеҙе: *берсула* – бүре-әсә улы, йәғни изге Бүре-Әсәгә табыныусы Үҫәргән ырыуының көнсығыштағы ул (ир) тармағы (әлеге күбәләк-тиләүҙәрҙең бабалары); *әсегел* -- әсәк-ил, йәғни Үҫәргән ырыуының көнбайыштағы әсәк (әсә) тармағы (әлеге үҫәргәндәрҙең бабалары) – икеһе лә Эске Башҡорт йәки Эске Скифия кешеләре; *болғар* – башҡорт, йәғни изге Һыйыр/Болан-инәгә табыныусы бәжәнәк-башҡорттар – Тышҡы Башҡорт йәки Тышҡы Скифия кешеләре. Күренеүенсә, бик боронғо заманда уҡ Эске һәм Тышҡы Башҡорт ҡәүемдәренең берләшмәһе – *башҡорт-болғар халҡы* уҡмашҡан.

“Хазар” этнонимының һәм дәүләт атамаһының нисек барлыҡҡа килеүен боронғо Сирия тарихсыһы Михаил (1126 – 1199) бик боронғо тарихсы Иоан Эфесле (VI быуат, 586 йылда вафат) мәғлүмәтенә таянып яҙып ҡалдырған:

В царствование императора Маврикия (582—602 гг.) из Внутренней Скифии (Эске Башҡорттан – Уралдан! – Й.С.) вышли три брата с 30 тысячами скифов

(башҡорт-болғарҙар. – Й.С.). Они сделали путь в 65 дней, выйдя со стороны Имеонских гор (Урал тауҙары. – Й.С.). Так как на пути были реки, они шли зимой и достигли реки Танаиса (Тын/Дон йылғаһы. – Й.С.), которая... вливается в Понтийское море (Ҡара диңгеҙ. -- Й.С.). Находясь у границ Римской империи, один из братьев, именем Булгар, взял 10 тысяч человек, отделился от своих братьев и перешел Танаис к реке Дунаю, которая также вливается в Понтийское море, и обратился к царю Маврикию (Рум/Византия батшаһы. – Й.С.) с просьбой дать ему землю с тем, чтобы жить в дружбе с римлянами. Тот дал ему Верхнюю и Нижнюю Мизию и Дакию, защищенное место, которое со времен Анастасия (491—518 гг.) опустошал аварский народ. Они победили их там и стали защитой для римлян. Римляне назвали этих скифов *булгарами*. Два других брата пришли в страну алан, называемую Берсилия (Бүре-Әсә иле – үҫәргәндәр иле, хәҙерге Дағстан. – Й.С.), в которой римлянами были построены города Каспия, называвшиеся вратами Turaye (Дербент.— Й.С.). Булгары (жившие в Мизии и Дакии) и *пугуры* (пугуры – бугуре/бүре йәғни Бүре-Әсәгә табыныусы үҫәргәндәр. – Й.С.) — их (городов Берсилии) жители — были некогда христианами. Когда над той страной (Берсилией) стал господствовать чужой народ (йәғни башҡорт-болғарҙар. – Й.С.), они были названы *хазарами* по имени того старшего брата, которого имя было *Хазарик*. Это был сильный и широко распространенный народ».

Бүре-Әсә иленең дә (Берсилияның) ҡасан һәм нисек хасил булыуы билдәле. Ирекле энциклопедия Википедиянан күренеүенсә:

Барсилы, **берсилы** или **баслы** — средневековое племя, родственное хазарам и булгарам либо тесно связанное с ними. Армянские авторы упоминают барсил в качестве врагов Кавказской Албании в связи с событиями II — IV вв... Средневековые источники знают также **страну Берсилию**, или, в арабском варианте, **ал-Баршалию**, которая выступает исходным пунктом экспансии хазар в Европе.

Хәҙерге Дағстандағы Эльбрус (Ил Бүре-Әсә) һәм Төркиә Республикаһындағы Эльбурс (шул уҡ Ил Бүре-Әсә) тауҙарының исемдәре Берсилия иленең тап шунда урынлашыуын шаһитлай.

Византийские авторы называют Берсилию «самой дальней областью Первой Сарматии» (Феофан) или областью «рядом с Сарматией» (Никифор). Арабский историк ал-Белазури помещает её к северу от Дербента. По мнению современных историков, эти данные, скорее всего, указывают на область Северного Дагестана — либо же, если принимать во внимание сообщение «Армянской географии», где барсилы также увязаны с Сарматией (Юрматы иле. – Й.С.), но помещены в Поволжье, речь идёт о более широком регионе северного Прикаспия.

Килтерелгән мәғлүмәттәрҙең йәмғеһе Бүре-Әсә (Берсилия) илен нигеҙләүселәр ҙә Эске Башҡорттағы шул уҡ башҡорт-болғарҙар икәнлеген һөйләй. Быны хәҙерге болғар авторы Ивановтың тикшеренеүе лә нығыта:

«Първата страна, където Авитохол е управлявал е най-вероятно известната Берсилия или Барсилия, регистрирана в исторически документи още в 3 век.». БЕРСИЛия = БЕРС/БАРС+ИЛ – страна (ИЛ) БОРЗа. В БЕРСИЛии 5 городов:

САРАШЕН (примерно, на месте Астрахани), БАЛХ, БАЛКАР БАЛХ, СЕМЕНДЕР и БЕЛЕНДЖЕР (все четыре города, примерно, в низовье Терека и на территории Дагестан). БАЛКАР = БАЛК+АР = БУЛГ+АР, это понятно. БАЛХ = БАЛК = БУЛГ = ВОЛК, это тоже понятно.

Бөтәһе лә тап килә -- беҙҙәргә лә әллә ҡасан уҡ "понятно"! Тимәк, Уралыбыҙҙан юлланған бер туған өсәүҙең өлкәне Хазар, үҙе килеп урынлашҡан Берсилияны, Дунай яғында урынлашҡан ҡустыһының илен төп йорт Эске Башҡортҡа берләштереп, бөйөк Хазар ҡағанатын (670 – 969) төҙөгән.

Дин мәсьәләһенә килгәндә, Эске Башҡорттағы бабаларыбыҙ урта быуаттарҙаса тәүҙиндә булып (язычество), өс дин (ислам, христиан, йәһүд) миссионерҙары уларҙы үҙ диненә ҡаратырға өгөтләгән. Күрше ике ҡәүем (ислам динле ғәрәптәр һәм христиан динле румиҙар) гел хазарҙарға ҡаршы һуғышҡанлыҡтан, Оло ҡағаныбыҙ Болан VIII быуат аҙаҡтарында өсөнсө динде (ырын менән бер ҡатарҙан уның яҙмаһын да) дәүләтенә лайыҡлы итеп һайлай:

Скорее всего, хазарский вождь и часть знати приняли иудаизм в противовес исламу Арабского халифата и христианству Византийской империи, чтобы показать свою независимость (А.Шойхет).

Был тарихи ваҡиға бөйөк бабабыҙ Сәйет Йәғәфәр тәүәрихендә 787 йыл менән билдәләнгән. Хазарҙарҙың аҙарҙар (илдәренән аҙып-туҙып киткән йәһүд-еврейҙар) менән ҡатнашлығы бына шунан башлана һәм Шәймиев ауылында табылған еврей хәрефле яҙма ла һис юҡтан ғына түгел.

Башҡорт-болғар затлы хазарҙарҙың әүермәнлеге, уларҙың бер өлөшөнән *"ашкенази"* телле европа еврейҙарының килеп сығыуы тураһында төрлө фекерҙәр йөрөй һәм бәхәстәр ҡубына. Шул хаҡтағы бер-ике ҡыҙыҡлы сәхифәне урыҫ теленән тәржемәһеҙ күсерәм:

Евреи, которых нет

Лео Хейман, Служба новостей Копли, Тель-Авив.

Натан М. Поллок недоволен израильским правительством. Составленные им планы по празднованию в сентябре этого года тысячелетия Еврейско-Хазарского союза были без долгих разговоров отвергнуты.

Пожилой, кроткий на вид человек, эмигрировавший в Израиль из России 43 года тому назад, Поллок зарабатывает на жизнь, переводя научные тексты и работая корректором в одном издательстве. Однако крупным его увлечением, хобби и призванием являются исторические исследования.

Из 64 лет своей жизни 40 он провёл, пытаясь доказать, что 6 из 10 израильтян и 9 из 10 евреев, проживающих в западном полушарии, это не настоящие еврейские евреи, а потомки свирепых хазарских племён, бродивших по степям южной России много столетий тому назад.

По вполне понятным причинам израильские власти не особо стремятся дать официальное одобрение теориям Поллока. «Насколько нам известно, он может быть прав на все 100 процентов, - сказал один из вышестоящих правительственных служащих. - В принципе, он не первый из тех, кто пытается раскрыть связь между

евреями и хазарами. Многие выдающиеся учёные - как евреи, так и неевреи - рассматривали эти связи в своих исследовательских исторических трудах.

Но кто сегодня может сказать, сколько процентов хазарской крови течёт в наших жилах, если течёт вообще? И кто может заявить с какой-либо степенью научной точности, кто из евреев - евреи, и кто - потомки этого татаро-монгольского племени?.

По сути дела, наше предполагаемое происхождение от хазаров является центральной темой арабской пропаганды, - добавляет он. - Арабы утверждают, что большинство европейских евреев не имеют права жить в Израиле, поскольку они ведут род не от библейских евреев, а от татаро-монгольских племён-кочевников, в том числе от хазаров, массово обратившихся в иудаизм тысячу лет назад».

Мнения разделились

В Израиле научное мнение по этому поводу разделилось. Основную предпосылку никто не ставит под сомнение: группа в 12 тысяч евреев, спасаясь от преследований и войн на священной земле, на волне византийских и мусульманских завоевательных походов, совершила длительный сухопутный переход в Персию, пересекла территорию современного Казахстана в Средней Азии и нашла пристанище в Хазарском княжестве, занимавшим обширное пространство между Каспийским морем, рекой Волгой, уральскими горами, Чёрным морем и польскими границами.

В 965 году хазары впервые за 500 лет были побеждены князем Святославом Киевским. Хазарский князь Булан III сделал вывод о том, что князь Святослав вышел победителем в той войне потому, что его войска и наёмники были христианами, в то время как *его* кочевники были языческими верующими. В 965 г. князь и его знать приняли иудаизм, а в 966 г. был издан царский указ, объявлявший иудаизм единственной законной религией в Хазарском княжестве. Соплеменникам князя под угрозой смерти пришлось сделать себе обрезание, выучить иудейские молитвы и признать еврейских раввинов в качестве своих духовных лидеров.

Как только другие евреи, подвергавшиеся в то время преследованиям на Ближнем Востоке, в средневековой Европе и Испании, услыхали о новом Еврейско-Хазарском княжестве, начали распространяться слухи о том, что наконец-то явился мессия. В Хазарию последовало несколько волн миграций через Персию, Грецию и Польшу.

Поллак полагает, что традиционный русский антисемитизм, вероятно, берёт своё начало от той эпохи, когда говорящие на иврите хазары нападали на русские деревни, убивали мужчин, насильно уводили женщин, заставляли их принять иудаизм и брали их в жёны по полностью отработанным религиозным обрядам. Это объясняет то, почему такое множество европейских евреев - светловолосые и голубоглазые, со слегка заметным монгольским разрезом глаз, так же как и полное отсутствие семитских черт среди многих израильтян европейского происхождения.

Монголы разрушают империю

Процветающее Еврейско-Хазарское княжество было разрушено в 1239 году монгольским нашествием Бату Хана. После монгольского нашествия и завоевания оставшиеся в живых члены еврейско-хазарских племён переселились на запад и осели в Польше, Венгрии, Богемии, Австрии, Румынии и Украине.

Как можно установить, «хазарский» Вы еврей или «иудейский»?

Согласно Поллаку, если Ваши родители пришли из Польши и Ваше имя - Хальперин, Альперт, Хальперн, Гальперн и т.д., то Вы - стопроцентный хазар. На хазарском наречии «альпер» (алп-ир. – Й.С.) позначает «храбрый рыцарь»; это имя князь жаловал наиболее отличившимся воинам. Согласно учёному, такие имена, как Каплан, Каплон, Коппель и тому подобные, являются прямым доказательством хазарского происхождения. «Каплан» на хазарском языке означает «свирепый сокол». Коган, Канган, Каганович указывают на аристократическое происхождение от Кагана-Хагана, верховного священника князя Булана.

Данный материал вышел статьёй в журнале «American Mercury», осень 1967 г., Volume CIII, Number 486, page 39.

Минең ҡарашымса, “иврит” теленә йәнәш ҡулланылған “ашкенази” (“төньяҡтыҡылар”) тип йөрөтөлмөш икенсе еврей теле үҙенең аталышында уҡ сеп-сей “башҡорт”лоғо менән фашлана: *ашҡан-әзәй (әсәй).* Бында *ашҡан* – үҙ булмышынан уҙған, сиктән сыҡҡан, башҡаға әүерелгән; *әзәй* – тел, әсә теле, мәҫәлән, боронғо *әсәйли>сөйли/һөйләй.* Башҡорттоң ике фратрияһының һөйләштәрен (*анай-әзәк* йәғни бәжәнәк һәм үҫәргән һөйләштәре) берләштереп әйтеүҙән килеп сыҡҡаны ла ҡыҙыҡлы: *анай-әзәк>(ана)-йәзәк>язык* (хәҙерге урыҫ теле). Тимәк, “ашкенази” – үҙенең хаҡ-әсә теленән ашып-аҙып китеүсе, әүермән.

Ә үҙебеҙҙең XVI быуаттағы бөйөк тарихсы һәм дин башлығы, Башҡортостан дәүләтселлеген тергеҙеү өсөн 1580-82 йылдарҙа башҡорт-урыҫ һуғышындағы ҡаһарман етәксебеҙ, башҡорт-болғар тарихын бик боронғо замандарҙан алып бер йыйынтыҡҡа теркәп күсертеүсе Сәйет Йәғәфәр Садиров бабабыҙҙың “Джагфар тарихы”нда (ул интернеттың башҡорт порталына һалынды) хәҙерге рәсми тарихсыларыбыҙҙың күҙенә төрткән “сәйер”лектәр сәйерлеген юғалта һәм ҡайһы берәүҙәргә был мәҡәләләге аңлайышһыҙ урындар ҙа аңлашыла. Эсендә йәне булған башҡорт зыялылары ул бөйөк тәүәрихте уҡып сығыры алдынан мәшһүр ғалимәнең түбәндәге хеҙмәтенә иғтибарлы диҡҡәт итеүҙәрен теләйем.

Мусина И.Р.
История древней Руси - в булгарских летописях Бахши Имана «Джагфар Тарихы»
Приложение к книге Йордана Табова
"Когда крестилась Киевская Русь"

История одного и того же государства, одних и тех же событий, описанная в различных источниках разными авторами имеет иногда существенные различия. Даже «официальная» история государства, созданная «официальными» учеными, может меняться в зависимости от политической конъюнктуры в определенный период времени, что уж говорить о древних летописях, которые претерпели множество переписываний, переводов, пережили множество правителей, которые корректировали историю своих предшественников в зависимости от собственных интересов. Поэтому интересно взглянуть на историю Руси глазами ее соседей, которые могли сохранить в своих летописях сведения, утраченные или измененные в русских источниках. Болгария Волжско-Камская, как пишет Советский Энциклопедический Словарь, феодальное государство в Среднем Поволжье и Прикамье в 10-14 вв., имела торговые отношения с Арабским халифатом, Византией, восточными славянами, имела военное и торговое соперничество с Киевской Русью, позднее – Владимиро-Суздальским княжеством, покорена моногло-татарами к 1241г. Во 2-й половине 13 века образовались Болгарское и Жукотинское княжества, в 90-х годах 14 века разгромлены Тимуром [СЭС, с.155]. Сами булгары описывали свое государство как очень древнее и могущественное и, наверное, очень бы удивились, прочитав, как трансформировалась их великая многовековая история в несколько скудных строчек в СЭС. Попробуем взглянуть на историю Руси и соседних государств, глазами древнебулгарских летописцев. «Джагфар Тарихы» («История Джагфара») – единственный свод древнебулгарских летописей, дошедший до нас. Свод был написан в 1680 году по приказу вождя булгарского освободительного движения – сеида Джагфара – секретарем его канцелярии Иманом в восточной части Булгарии – Башкортостане. Видимо, сеид рассчитывал использовать этот труд для патриотической пропаганды. Бахши Иман (судя по имени, - он башкортский булгар) блестяще справился со своей задачей, включив в свод наиболее ценные булгарские летописи: «Гази-Барадж тарихы».(1229 – 1246 гг.) Гази Бараджа, «Праведный путь, или Благочестивые деяния булгарских шейхов» (1483 г.) Мохаммед-Амина, «Казан тарихы» (1551 г.) Мохаммедьяра Бу-Юргана, «Шейх-Гали китабы» (1605 г.) Иш-Мохаммеда и некоторые другие…» (Из Предисловия Ф.Г.-Х. Нурутдинова) [ДТ, с.5,6]. Этот свод булгарских летописей и будет одним из главных источников сведений по истории древней Руси в этой работе. История древних булгар и их правителей описана в «Джагфар Тарихы» с незапамятных времен до 17-го века, в ней тесно переплетена история Булгара, Болгарии, Руси, Хазарии, Венгрии и других государств. Когда читаешь эти булгарские летописи, удивляешься массе интересных подробностей о булгарских царях, русских князьях, и татаро-монгольских ханах, которые в «Джагфар Тарихы» (в дальнейшем «ДТ») иногда оказываются вовсе и не русскими и не татарами и не монголами, по крайней мере, в привычном понимании. Объем данной работы не позволяет подробно проследить всю историю Руси, описанную в «ДТ», поэтому, остановимся лишь на отдельных моментах. Сначала надо убедиться, что под непривычными нам именами в «Джагфар Тарихы» действительно скрываются знакомые действующие лица, т.к. в привычном «…«учебнике по истории» один и тот же реальный человек может быть представлен несколько раз – под разными именами и даже отнесен в разные эпохи! Но его реальная личность «размножилась» лишь на бумаге, а не в действительности». [ФОМ1, с.7].

1 А.«ДЖАГФАР ТАРИХЫ». РОД ДУЛО.

Начнем с Атилле Айбата, по прозвищу «Аудан Дуло». У него было и другое имя – ***Мышдаулы*** (Машаҡ-тау-улы йәғни Машаҡ-тауҙан тыуған тәүбабабыҙ Шүлгән тоҡомо -- Үҫәргән ырыуы башҡорто. -- Й.С.). С его сына Бел-Кермека начинается род Булгарских

царей. Его праправнук – Тубджак, у которого были правнуки – Бат-Боян и Аспарух . Младший брат Бат-Бояна - ***Атилькэсэ (Аспарух)***, его территория - ***.Бурджан***, он дружил с дядей ***Шамбатом***, который возвел город ***Башту (Киев)*** и отделился. Шамбат назвал свое государство - ***Дулоба***. С 619 г. Булгаром правит Курбат (сын Албури). Затем правит - Бат-Боян (сын Курбата). Правнук Бат-Бояна - Авар правит Булгаром с 727 г. по 759 г. Его сыновья: старший - Тат-Утяк, по прозвищу Сарачин, младший - Тат-Угек, по прозвищу Белермей. Сын Тат-Угека - ***Тамьян, хазарский военачальник***, отец Ильяса – хазарского военачальника, посадившего на Хазарский трон Исхака Аксак-Тимера. С 759г. по 787г Булгаром правит Тат-Утяк. Его дочь от урусски выдана за хазарского хакана Аскала и родила сына – ***Уруса***, сменившего на Хазарском троне Аксак-Тимера.

С 787 во главе государства стоит сын Тат-Утяка - Кан-Караджар, далее – сын Кан-Караджара – Угыр Айдар, который правит до 855 г. [ДТ, с.11-20]. *Все эти, несколько утомительные подробности, нужны нам, чтобы разобраться в родственных связях Русских князей, Булгарских и Болгарских царей, правителей Хазарии и Татаро-монгольских ханов. 9-й век - начинается время Рюрика, Аскольда, Дира, Олега «официальной» русской истории. Представим часть родословной, описанной в «ДТ» в виде схемы (Рис.1).*

1Б. ДРУГИЕ ИСТОЧНИКИ. **РОД ДУЛО**.

История Болгарии (Дунайской) Около 701 года умер Аспарух, и ему наследовал из той же династии Дуло Тервель (Тербеди), при котором болгарское племя приобрело большое влияние на судьбы Балканского полуострова. [ПОГ, с.74-75].

По представлениям древнебулгарских летописцев и правящие династии Булгарии, и Хазарии, и Болгарии Дунайской, и Руси и Венгрии имеют общие корни – род Дуло и множественные родственные связи, о которых «учебник истории» часто даже не упоминает.

2А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». УГЫР АЙДАР

Угыр Айдар правил Великим Болгаром с 815 или 816 по 855. Угыр Айдар – эмир Болгара и хакан всего Саклана [ДТ, с.32]. Сын Кан-Караджара и его жены – ***тетки бурджанского бека Йомырчака*** *(болгарский хан Омортаг или Амуртаг, Йомырчак [ДТИ]).* Мать Айдара - уруска Арья-Аслан, родная сестра матери Уруса. *(т.е. **Айдар и Урус – двоюродные братья**)* [ДТ, с.40]. Угыр (Игорь. -- Й.С.) Айдар воевал с «закованными в железо турками». ***В 9-ом веке турки «закованы в железо»***. При вступлении Айдара на трон к нему явился ***бек Болгара Барыс*** с изъявлением покорности *(**болгарский царь Борис I , современник Угыра Айдара). Умер в 855г.*** Сыновья: Угыра Айдара – Габдулла Джилки и ***Лачын (Олег)***.

3А-1. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». (9-Й ВЕК). АКСАК – ТИМЕР.

В 858 г. Ильяс (троюродный брат Угыра Айдара) поставил хаканом Хазарии сына Манаса - Исхака **Аксак-Тимера.** [ДТ, с.35]. Хакан Хазарии Исхак был хромым от рождения, а боевые знамена у хазар были железные, поэтому наши (булгары) прозвали разбойного хакана «Аксак Тимер», а после называли так всех особо ненавистных правителей. В 880 г. Исхак женился на дочери Алмыша, от моджарки. В 885 г. хакан уговорил Арбата (сына Алмыша) свергнуть отца [ДТ, с.44]. В 885 г. Внук Уруса - Арслан уговорил Исхака начать войну с баджанаками. Хазары – язычники при поддержке ***бурджан (болгар)*** и каубуйцев прикончили Аксак –Тимера вместе с его яхудскими наставниками. ***Лачын (Олег)* был женат на сестре** Исхака Аксак-Тимера до 870 г. Племянник жены Аксак Тимера (сын брата жены - Мала) – Тагай .

В 9-ом веке жил Хазарский правитель Аксак Тимер, имевший родственника жены – Тагая. В 13-ом веке жил Тимур-Аксак, имевший родственника жены – Тагая. Русская летопись называет Тагая «…гордый Ординьский князь Тагай…», с чего вдруг русская летопись выражает явную симпатию к представителю «ига», да и княжеским титулом его

называет? В этом же 13 веке жил и Тимур-Аксак. Так может быть это просто «размноженный» на бумаге один и тот же персонаж, части биографии которого оказались приписаны нескольким «тезкам» в разные эпохи? **Аксак-Тимер = Мурза-Тимур = Аксак-Тимур= Темир-Мурза = Тимур-Аксак .**

4А. **«ДЖАГФАР ТАРИХЫ». БУДИМ.**

4А-1. В 816 г. Будим назначен Айдаром *(за боевые заслуги и мудрые советы)* тарханом покоренного Балына . «Балын – 1) земля белорусов и великороссов; 2) Северо-Восточная Русь, Московская Русь (Московское-Русское государство); 3) город Суздаль, основанный на месте булгарского балика Балын.»[ДТ, с.352]. Будим восстановил Галидж и Урус, построил Шамлын, Джир и Мен. Его наместничество называлось Ак-Урус (*Белая Русь или Восточная Русь*), для отличия от урусской области в Кара-Булгаре *(Черном или Западном Булгаре).*

4А-2. Будим родился в городе Бичине или по сакланси, Будиме (Видин) и поэтому названный его именем. Поступил на службу к Кана-Караджару (отцу Угыра Айдара). Сыном Будима был Джир-Ас *(Дир или Дмир русских летописей)*. Внук Будима – Джун имел прозвище «БАТА». Правнук Будима - Барыс был женат на дочери царя Шамгуна (Симеона) [ДТИ]. *(Симеон - царь Дунайской Болгарии).*

5А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». АС – ХАЛИБ, ДЖИР-АС

(После 858г.) Джир, был сардаром анчийского (украинского) ополчения в Башту («Башту – официальное булгарское название города Киева, основанного в 620 году по приказу хана Курбата (Кубрата)» [ДТ, с.353]). Джир получил титул русского бека и правил под наблюдением хазарского наместника Ас-Халиба, а Башту выплачивал Хазарии дань и помогал войсками. В 860 г. [ДТ, с.36]. Ильяс (*фактический правитель Хазарии*) приказал Джиру и Ас-Халибу произвести внезапное и беспощадное нападение на город Рум (Византия). «Джир, тяготившийся хазарской властью и рассчитывающий на помощь Рума в борьбе с ней, первым принял лжеверу христианскую». Ас-Халиб убил Джир-Аса. Когда на трон в Башту посадили сына Лачына *(Олега)* – Угыра *(Игоря*), Салахби стал его соправителем. Ас-Халиб внезапно хотел убить Салахбии, но Джун «Бата» (сын Джира) был начеку и убил Ас-Халиба копьем. *Булгарские летописи о призвании Варягов не рассказывают. Салахби, один из немногих, кто мог бы быть «Варягом». По «ДТ» - он сын Эрека, командовал войсками и поддерживал Угыра (Игоря).* «В 882г. на Башту двинулся из Галиджа сын Эрека Салахби» [ДТ, с.43]. «На территории Швеции около 859 г. было несколько королей: Бьерн Прихолмный, его соправители Эмунд и Олаф. Сын Эмунда, Эрик, в 854 г. совершил поход на восток и обложил данью куров, эстов и финнов». [ГУМ, с.149]. *Возможно – булгарский Эрек и шведский Эрик – одно лицо.* Отец Джира – БУДИМ. *(ВАДИМ Храбрый*) Сын Джира – Джун по прозвищу «БАТА».

6 А-1. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». (9-Й ВЕК). УРУС

Хакан Хазарии. Отец Уруса – Аскал. Матери хаканов Айдара и Уруса были родными сестрами из урусского рода Услан. [ДТ, с.40]. Мать Уруса - дочь Тат-Утяка от урусски выдана за внука Кук-Куяна, сына Шадчина или Саксина - Аскала. Урус построил ***город Хин (по «ДТ» – хазарский город***). Сын Уруса - Чинавыз – хазарский наместник Галиджа (по «ДТ» – это Новгород) [ДТ, с.32-33].

<u>УРУСЫ по «ДТ» = РУССКИЕ, на всем протяжении многостраничного повествования.</u>

6А-2. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». (14-Й ВЕК) УРУС

В 1369 г. Азан (булгарский эмир) был оскорблен вероломством **урусов** и попросил кук-ордынского (по «ДТ» ***«кук» - северный***) хана Уруса помочь Булгару проучить неверных. Урус прислал своего брата хана Арабшаха с 4 тысячами кыргызов, многие из которых были каракалпаками – минцами (по ДТ «кара» - западный или черный) и

рвались свести счеты также с **кытайскими ногайцами. Арабшах выжиг стойбища монгытов** по Самаре, а затем перешел в Буртас и **очистил от татар** эту область.

7А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». ГАБДУЛЛА ДЖИЛКИ (855 - 882) После смерти Айдара газии подняли на ханский престол его старшего сына – мусульманина Габдуллу Джилки (855 год). Младший брат Джилки – Лачын *(Олег*) был другой веры «не расставшийся с суевериями». В 865 г. Джилки повелел своему сыну Алмышу возглавить Кара-Булгарский бейлик, а сам двинулся в Буляр, где его подняли на царский трон. После свержения Джилки бек Ильяс «В Батавыле…для вида поднял на кара-булгарский трон нового балтавара – покорного хазарам Лачына *(Олега).* Скончался Габдулла Джилки в 882 г. [ДТ, с.35-43].

7Б. ДРУГИЕ ИСТОЧНИКИ

Упоминаний о булгарских правителях – ближайших родственниках русских Рюриковичей в «официальной» версии русской истории обнаружить не удалось. Что это – вымысел булгарских летописцев или нежелание русских правителей вспоминать о родственниках - конкурентах на престол?

8А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ» ЛАЧЫН

Лачын (Олег) - сын Айдара, младший брат Габдуллы Джилки. После свержения Джилки, хазарский бек Ильяс (двоюродный брат отца Лачына) «…в Батавыле…для вида поднял на кара-булгарский трон нового балтавара – покорного хазарам Лачына (Олега) [ДТ, с.34-35]. Лачын был женат на сестре Исхака Аксак-Тимера, но долго не имел от нее детей, наконец, ***в 870 г.*** его терпение лопнуло, и ***он женился на моджарке (Моджар = Венгрия) [ДТ, с.42]. Вторая жена - башкортка. От нее – сын Угыр (Игорь), правил в Баштy (Киеве) до 882, после захвата Баштy Алмышем (племянником Лачына) ушел в Итиль*** (столицу Хазарии. -- Й.С.).

Олег, безусловно, был князем, причем наследственным князем…» [НИК, с. 170,171]

И так, «Олег, безусловно, был князем, причем наследственным князем…», булгарские летописи говорят о том же. «Пришлые» варяги на Руси не правили.

9А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». СМЕРТЬ ОТ ЗМЕИ И КОНЯ. ДЖОКЭ-УТИГ.

Башкорты, которых тюрки называли угырами…поклонялись алпу *(божеству)* Бараджу. Последний утигский правитель Буляра Джокэ-Утиг имел неосторожность сжечь гнездо Бараджа в угоду своей жене, потребовавшей от него возвести на этом месте город. В огне погибли все дети Бараджа, кроме одного, а сам он улетел на другое место и сказал на прощание Джокэ-Утигу: «Я всегда был покровителем хонов и останусь им, но ты за свое злое деяние умрешь от укуса моего последнего сына, а все дети твои будут убиты»..., но этот бек занялся поисками сокровищ в могилах своих предков. И вот, когда он раскопал одну могилу, то из земли вместо человеческих останков явились кости лошади. Это был предупреждающий знак Тангры, но Джокэ-Утиг не внял этому предупреждению и стал копать. Тогда из-под костей выполз **Змей,** сын Бараджа, и **укусил** бека, от чего тот немедленно **скончался**…[ДТ], с.10.

10А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». БАТ-УГЫР = СВЯТОГОР

Бат-Угыр правил Булгаром с 882г. по 895г. Бат-Угыр (БТГР) Мумин = *Святогор (СВТГР). В летописях «ДТ» имя Святослав пишется как Бат-Аслап, так что Бат-Угыр это - Свят-Угыр.* Сын Габдуллы Джилки, внук Айдара, двоюродный брат Угыра *(Игоря)*. Поднят на Булгарский трон после смерти своего отца Габдуллы Джилки в 882 г. В 895 г. сдал Болгар брату Алмышу. Его потомки унаследовали необыкновенную физическую силу **Бат-Угыра.** Потомок Бат-Угыра: Сал-Сал =***Челубей***. *См. ниже «**Поединок перед битвой**» Сал-Сал и Аслап.*

11А. **«ДЖАГФАР ТАРИХЫ». АЛМЫШ**

С 895 г. на Булгарском троне – Алмыш, сын Габдуллы Джилки. В 882 г. старший сын Алмыша - Арбат служил балтавару Лачыну в Хорысдане («Хорысдан – булгарский город на Украине, современный город Путивль»). Булгары называли его также «Батавыл», то есть «Княжеской Ставкой», отчего возникло современное название города «Путивль». Назывался также «Коростень» (искаженное «Хорысдан») [ДТ, с.383]. «Алмыш самолично подъехал к юрте и выбросил из нее дрожащего от страха дядю (Лачына), он не казнил брата отца, а отпустил его в Хазарию… Лачын (Олег) плача от унижения уехал с двумя своими женами в Итиль (Хазар дәүләтенең баш ҡалаһы. -- Й.С.) *и умер там от позора, а сына его от башкортки – Угыра (Игоря) – Алмыш оставил при себе…* При Лачыне Урусское бекство подчинялось ему, поэтому Алмыш двинулся к Башту (Киеву) с намерением принудить Ас-Халиба *(Аскольда)* подчиняться ему.» [ДТ, с.43]. Женитьба Алмыша на дочери Салара - Нушаби [ДТ, с.47-48]. От Нушаби у Алмыша было два сына – Ялкау и Мал, и дочь Зухра. Брат Алмыша – Мардан. В 885 Алмыш свергнут своим сыном Арбатом с Кара-булгарского трона. *После взятия Угыром Лачыни Джира (Ростова) в 925 г., Алмыш отправился туда для наведения порядка. На обратном пути на него напал медведь и он умер. Уланы подняли на трон Газана, которого называли и Хасаном и Казаном [ДТ, с.73-74]. Газан, Мал, Арбат, Ялкау Микаиль Арслан – сыновья Алмыша.*

Алмыш и его сын Арбат (см. ниже «АРБАТ») в русской истории фигурируют как венгры (Альмуш и Арпад), в Булгарских летописях - как булгары, сын Алмыша – Мал, как древлянскмй князь, Добрыня, сын Мала – и как русский воевода и как булгарский эмир Диу-Барын, Игорь, двоюродный брат Алмыша, Игорь – как русский князь, а ведь согласно Булгарским летописям (См. Родословную 1)., Алмыш и Игорь – двоюродные братья, значит, потомки сыновей Алмыша: Арбата, Мала и др. - такие же наследники престола, как и потомки Игоря – Святослава – Владимира. Видимо, русские летописи писала «Игорева» ветвь, уничтожая память о конкурентах.

12.А. . «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». МАРДАН. КУЧАК

Мардан - сын Габдуллы Джилки и мурдаски. Эмир Мардан умер в 924г, в память о нем провинцию Беллак стали называть также Марданом. Сын Мардана – Хаддад осенью 930 года, когда возмущение народа правлением Газана (сына Алмыша) достигло предела, он счел удобным для захвата трона и двинулся из своей станции Кубар или Хорысдан на Болгар, но неудачно. Из-за наступления Газана ушел к батышцам (вятичам) и они избрали его своим беком. Хаддад назвал себя Качкыном. А сам Хаддад Качкын и его потомки были опасны для правителей Булгара и Руси, как принцы рода Дуло, и значит претенденты на оба трона, поэтому и те и другие не жалели усилий для искоренения этой булгарской династии. Долгое время труднодоступность Батыша спасала дом Качкынов. Однако в 964 году Барыс (Святослав) отнял у них Кан (Муром), а в 1088 канские батышцы отняли у Батыша и Кисанскую (Рязанскую) область. Наконец в 1112 году Булымер-Карак (Владимир Мономах) штурмом взял Хорысдан в отместку за приют, данный Качкынами куманам Шарыхана, и оставил последнему потомку Мардана Хаддад – Шамгуну лишь небольшую область Кортджака. Еще раньше в 1088 году, в этой округе Ахад Моска поставил с разрешения Батыш-Шамгуна крепость Моска (Москва). Потом сын Хаддад-Шамгуна Кучак надумал бежать в Булгар и также получил прозвище Качкын. У Качака (Кучко Степан Иванович) были сыновья Яхам (Яким или Иоаким Степанович Кучко) и Аслан от сакланской бики и дочь Байгюлби (Улита Степановна Кучко) от батышки Банат, на ней женился балынский бек Хан-Тюряй (Андрей Боголюбский) и имел от нее сына Кинзяслапа(Изяслава), который умер от ран, полученных в 1164 г.) [ДТ, с.76-77]. Одного из сыновей Хан-Тюряя – Джурги (Юрий Андреевич Грузинский) булгары называли Хисам-Лачын, он был улугбеком Булгара,

женился на Гурджийской (Грузинской) царице Самар (Тамар). Самар была плохой женщиной и он ушел от нее вместе с сыном Бадри Аблас-Хином, который получил титул эмира. [ДТ, с.140], (жизнеописание Аблас-Хина (БЛСХН) в «ДТ» позволяет видеть в нем Пласкиню (ПЛСКН), известного по русским источника, хотя по русским источникам у Юрия Андреевича Грузинского детей не было.) Сын Аблас-Хина был Булгарским беком. Среди потомков Андрея Боголюбского есть Булгарские эмиры и беки, а бояре Кучко – прямые наследники царского трона Руси и Булгара.

12Б-3. «Имя Кучки осталось не только в легендах, но и в названиях местностей. В XV в. в Суздальской земле упоминается волость Кучка, а в Москве … Кучково поле, находившееся в районе позднейших Сретенских ворот… Москва носила двойное название: «Москва рекше Кучково»… «Москва, то есть Кучково». [ТИХ, с.17].

И так, бояре Кучко – наследники царского трона и Руси и Булгара. Удивительно, что, отбирая земли у Кучковичей и уничтожая их самих, суздальские, владимирские и московские князья не приписали им еще пару жутких преступлений.

А-1. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». (10-Й ВЕК). УЗБЕК

Узбек - хакан Хазарии с 944 г. [ДТ, с.86,87,96,98] Узбек – сын Моджара. Саманиды, опасаясь присоединения Хазарии к Булгару, сделали хаканом своего ставленника – сына Моджара ***Угез-бека или Узбека***. Матерью Узбека была дочь тюркменского хана Курука, служившего Саманидам. В 944 г. в Итиле Узбек стал хаканом. Юсуф с Малом *(Мал – сын Алмыша*) бежали в Кара-Булгар, но Кубар решил расправиться с ними руками Угыра Лачыни. Его послы передали Угыру, что хакан не будет противодействовать захвату Угыром Кара-Булгара, если урусский улубий надумает осуществить это. А в Кара-Булгаре тогда было немало городов – Хорысдан, Хурса, Сэбэр, Харька, Салтау, Чаллы и др. и Угыр весьма обрадовался. Для того, чтобы спровоцировать войну с Хорысданом он потребовал от Мала уплаты дани… [ДТ, с.86-87]. *История войны Игоря с древлянами и Малом.*

14А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». УГЫР ЛАЧЫНИ

Салахби (сын Эрека) сел в Башту (Киеве) в качестве соправителя сына Лачына (Олега) – Угыра (Игоря). [ДТ, с.44] Угыр став господином Башту, женился Ульджай (Ольге). Угыр прислал в Болгар послов с такими речами к Алмышу «Я слышал, брат (двоюродный брат), что ты мучаешь приверженцев нашей старой булгарской веры, к которым отношусь и я. Поберегись же, ибо я уже стал самостоятельным урусским беком и в состоянии помочь своим единоверцам!» [ДТ, с.58]. От Ульджай у Угыра сын Барыс (Святослав Игоревич).

15А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». УЛЬДЖАЙ

Угыр став господином Башту, женился на попавшей в плен Ульджай (Ольге) [ДТ, с.58] Сначала Ульджай была женой Худа Анатыша, сына Ас-Халиба (Аскольда), затем женой Салахби, затем –Угыра. О войне Ульджай (Ольги) с Малом см. ниже: «МАЛ».

16А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». АРБАТ

Арбат – глава Кара-булгарского войска. Старший сын Алмыша Арбат служил балтавару Лачыну (Олегу) в Хорысдане. Затем ушел в Моджар. Один из потомков Арбата, тоже Арбат – воевода Мосхи (Москвы). Этот Арабат – брат эмира Булгара – Отяка. Интересно, что Отяк женат на дочери кисанского (рязанского) бека Халиба (Глеб Ростиславович Рязанский), но у Глеба Рязанского, согласно «учебнику истории» была только одна дочь – Феодосия, выданная замуж за Мстислава Ростиславовича Храброго, и замужем она была лишь однажды. Т.е., в свободное от работы русским князем время, Мстислав = Отяк работал эмиром и царем Булгара. Кстати, отец Халиба Кисанского – Рыштаулы (Ростислав) - тоже имел высокое звание эмира, получил его, согласно «ДТ», за верное служение Державе, т.е. Булгару. Можно напомнить, что после поражения Глеба Рязанского, согласно русским источникам, ему настойчиво

предлагали уехать «из Рязани на Русь», следовательно, Рязань в то время, Русью не являлась. Далее «ДТ» пишут: «При нападении на Москву, сын Арбата - Нанкай укрылся в балике имени своего отца».

Улица «Арбат» в Москве, вероятно и названа именем воеводы Москвы – Арбата, тем более, что булгары знают о существовании балика «Арбат» в Москве.

17А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». МАЛ

Мал – любимец и наследник Алмыша. [ДТ, с.56], правитель Хорысдана. Мал возглавлял Кара-Булгарское войско (Даже после того, как попал в плен к Ольге) [ДТ, с.83]. Когда Угыр (Игорь) в третий раз потребовал у Мала дань, тот отказал. Началась война, в которой Угыр был взят в плен. Жена Мала, бывшая раньше женой Угыра и бежавшая от него по причине происков Ульджай (Ольги), велела разорвать улубия на куски и развесить их на дереве. (Кроме этого «дерева» в «ДТ» ничего похожего на слово «древляне» нет) Овдовевшая Ульджай двинулась на Хорысдан с балынским войском из галиджийцев (новгородцев) ибо анчийцы (украинцы) отказались воевать с булгарами. Мал попал в плен. В Башту Ульджай сделала его истопником в своей бане, затем заставила жениться на своей служанке, дочери одного из беков. Однако все это не помешало Малу остаться «действующим» военачальником, командовать Киевским войском и одерживать победы. Дети Мала: Диу-Барын (Добрыня), Тагай и дочь – жена Барыса (Святослава Сын Угыра Барыс (Святослав) женился на дочери Мала, а сын Мала эмир Диу-Барын (Добрыня) стал первым урусским бояром.

Мы узнаем много интересного о деде великого князя Киевского Владимира – Мале. Итак, Мал - наследник и любимец царя Булгара Алмыша. Дочь Мала – законная жена Барыса = Святослава. Мал – главнокомандующий киевскими войсками и после своего поражения от Ольги. Мал – отец русского воеводы Добрыни, который «огнем и мечом» крестил Русь.

18А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». ДИУ-БАРЫН

После поражения Мала, Ольга взяла его в плен. «Тем не менее Мал все же остался в чести. Сын Мала – эмир Диу-Барын стал первым урусским бояром…» [ДТ, стр.88]. «Их *(речь идет о русских)* кахины (волхвы), которые у хонов назывались боярами…» [ДТ, с.122]. Бояр – 1) жрец; 2) представитель, предводитель. [ДТ, с.355]. Диу-Барын командует войсками Булымера *(Владимира Святославовича).*

19А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». БАРЫС.

Барыс – сын Угыра Лачыни (Игоря Олеговича) и Ульджай (Ольги). В Башту Отчы-Субаш взялся исцелить смертельно больного Барыса, сына Угыра Лачыни, которого до этого безуспешно лечили балынские и румские врачи. Когда мать Барыса – Ульджай спросила его, почему он это сделал, Субаш ответил: «Мой отец сильно разбогател от продажи румских вещей, которые купил у Угыра, и считал себя обязанным ему. Поэтому я хочу помочь его сыну». – «Каковы будут твои условия?» - поинтересовалась бика. – «Если я исцелю Барыса, пусть он не принимает христианства», - сказал Отчы-Субаш. Он вылечил Барыса и дал ему новое имя Аудан …, и тот не принял христианства…» [ДТ, с.51-52]. Аудан = Оттон? Одд? Святослав погиб в 972г., а Оттон I умер в 973г. [ГУМ, с.643], Одд умер в 988 г. той же смертью «от змеи и коня», что и дед Святослава – Олег в 915 г. [НИК, с187-189]. По «ДТ», Лачын (Олег) умер от тоски, а не от змеи.

Из описания жизни, деятельности, родственных связей, обстоятельств смерти, понятно, что Святослав Игоревич русских источников и Барыс булгарских летописей – одно и то же лицо. Учитывая все «странности» поведения Святослава (Барыса) в отношении Болгарии, может быть, Борис-Святослав и Борис Болгарский - одно лицо?

Может быть, Борис II Болгарский - царю Петру не сын, а племянник (сын сестры царя Петра – княгини Ольги), т.е. Барыс-Святослав?

20А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». ЧАША ИЗ ЧЕРЕПА.

В 972г. Кура –хан подстерег возвращавшегося из Улак-Булгара Барыса и убил его. Кура-хан сделал чашу из черепа побежденного Барыса (Святослава) и пил из нее. [ДТ, с.100,101].

20Б. ДРУГИЕ ИСТОЧНИКИ. ЧАША ИЗ ЧЕРЕПА

20Б-1. В 972 г. Святослав, возвращавшийся из Болгарии Дунайской, был убит печенегами хана Кури, который велел изготовить из черепа киевского князя кубок и оправить его серебром. [Э-2, с.332], 20Б-2. В начале 9-го века Болгарский престол (Дунайской Болгарии) занял Крум. В 809 г. он взял Сердику (Софию). Попытка императора Никифора отбить болгар от этой важной крепости оказалась совершенно неудачной: зайдя слишком глубоко в страну, он попал в засаду; и сам император и все его войско были перебиты, а из черепа Никифора Крум сделал чашу, из которой он повелел «болгарским болярам» пить в память той победы. [ПОГ, с.83].

Трижды повторяется история изготовления чаши или кубка из черепа побежденного врага (Барыс – Кура-хан; Святослав – хан Куря; Никифор – хан Крум), причем все истории связаны с Болгарией Дунайской.

21. БУЛЫМЕР = ВЛАДИМИР СВЯТОСЛАВОВИЧ

21А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». После смерти Талиба (сына Газана и внука Алмыша), царя Булгара, в 981 году подняли на трон Тимара Мумина Баджанака, поддержанного казанчиями (казаками) и баджанакцами (печенегами). [ДТ, с.102]. Тимар взял у Булымера (Владимира Святославовича) письменное обязательство не принимать христианства и не препятствовать распространению истинной веры *(мусульманства)* на Руси. Чтобы крепче привязать Булымера к Державе (Ак Йорт), Тимар выдал за него свою дочь Бозок (мать Барыса и Халиба). После свадьбы, которая состоялась здесь же, в Булгаре, Булымер отплыл на Русь по Кара-Идели, а на следующий год семь булгарских правоведов отправились в Башту по Хорысданскому пути. Возглавлял их сын Насыра Кул-Мохаммед. Они обратили в ислам барынских и каубуйских беков, а также биев сакланских баджанаков (сакланы = урусы [ДТ, с.13], баджанаки = печенеги; *т.е.- русские печенеги*), и построили несколько мечетей в Башту, Караджаре, Батавыле, Хурсе и Барын-Диу. Но через несколько лет Булымер совершенно изнемог под бременем новой джирской дани и решил поправить дело за счет ограбления румских земель. В 988 году он внезапно вторгся в Джалду (Крым) и овладел тамошним румским городом. Перепуганный румский кан предложил тогда Булымеру – в обмен на Джалду и принятие им христианства – много золота и серебра и Дима-Тархан в придачу. Эти условия были настолько выгодны, что Булымер не устоял и принял условия румцев.» [ДТ, с.104]. После смерти Булымера на Руси началась война за главенство между его сыновьями. Мышдаулы *(Мстислав)*, сидевший в ***Дима-Тархане (Тмутаракани)*** и пользовавшийся поддержкой Рума (Византии), одержал верх. По его приказу побежденный Ар-Аслап (Ярослав) должен был вероломно умертвить одного из сыновей Булымера *(Владимира)* от Бозок – Халиба *(Глеба)* (Ар-Аслап не подчинился), а слуги самого Мышдаулы *(Мстислава)* зарезали другого сына Бозок – Барыса *(Бориса)*, как главного претендента на отцовский престол...» [ДТ, с.108]. *(Об участии Святополка в убийствах « ДТ» ничего не говорят).*

«ДТ» говорят о том, Владимир (Булымер) был <u>законным</u> сыном и законным наследником. «Учебник истории» считает Владимира незаконнорожденным сыном ключницы. Какой смысл булгарским летописцам улучшать родословную русских князей?

22. ПОЕДИНОК ПЕРЕД БИТВОЙ. САЛ-САЛ = ЧЕЛУБЕЙ. АСЛАП = ОСЛЯБЯ

22А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». САЛ-САЛ. АСЛАП

Булымер *(Владимир)* , в надежде на румскую помощь, отказался от уплаты джирской дани, и в 992 году Сал-Сал (см. Родословную, рис.1), потомок великого богатыря Бат-Угыра – *(Святогора)* с курсыбаем *(регулярная, хорошо вооруженная армия булгар, в основном из казаков)* и баджанаками *(печенегами)* обложил только что поставленный Булымером город Бер. На выручку его прибыл новый воевода улубия (Булымера) – Аслап, из рода таук, но Сал-Сал в поединке раздавил его руками, словно куренка, и вслед за этим обратил Бер в ничто. Перепуганный Булымер возобновил выплату джирской («Джир» по ДТ – Ростов) дани. Деньги награбил в войне против Улак-Булгара. В 995г. при помощи румских мастеров восстановил Бер и в память об Аслапе стал называть его Бер-Аслап.» [ДТ, с.104] *«ДТ» не сообщает о каком-либо поединке непосредственно перед Куликовской битвой.*

24. КУЛИКОВСКАЯ БИТВА

24А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». КАЛГА. ХЭЛЕК

[ДТ, с.217] Арабшах проявил свойственное кыпчакам самомнение и двинулся с тремя тысячами кыргызов к Сакланскому морю через владения Мамая. Мамай убил Арабшаха, устроив заговор с некоторыми кыргызскими биями. Народ раскололся, тысяча последовала за заговорщиками. Мамай тогда готовился к походу на выступившую против его власти Москву и был рад даже этой тысяче. Мамай вынудил **булгарского** эмира Азана отправить на Шир для соединения с Мамаем бека Сабана с 2 тысячами **черемшанцев** *(черемшанские казаки)* Чаллы-Мохаммеда, тысячей **башкортов, буртасской** тысячей Гарафа и тысячей кашанцев, а также с двумя туфангами Аса – ***ученика пушечного мастера Тауфика.*** Сабан отправился в Кыпчак и соединился с 80-тысячной ордой Мамая на развалинах крепости Хэлек. Перед битвой наши (булгары) **захватили в поле русского воина одетого в рясу папаза** *(В «учебнике истории» - русские захватили воина, одетого в рясу попа с мешком зелья, полагали, что послал его Иван Вельяминов)*. Сабан хотел допросить его, но Мурза-Тимур его убил, а Гараф за это убил Мурзу-Тимура. ***(вариант «поединка перед битвой». Участники те же: Воин в рясе и Мурза-Тимур. Все умерли)***. Русская конница была спрятана в лесу за болотом. И деревья в нем были подрублены для быстрого устройства завала в случае вражеского прорыва. И когда балынский бек (русский князь) увидел гибель своего левого крыла, то в ужасе бросился скакать прочь со своими ближайшими боярами. А бывшие в засаде приняли его за татарина (т.е. русские не смогли отличить своего князя от татарина) и свалили на него дерево, но бек остался жив. **У Мамая: монгыты, черемшанцы, степняки, крымцы, анчийские (украинские) казаки, <u>ногайцы, башкорты</u>,** Воевода балынцев Адам-Тюряй (*Дмитрий Боброк)* вывел 20-тысячную конницу из засады. Булгары бились с мангытами Джинтель-бия , с новыми ногайцами Джинтель-бия и с артанскими всадниками. Мамай убежал. Гарафа убили балынцы бека Астея. [ДТ, с.218]. **У урусского князя (*Дмитрия Донского)*: монгыты, ногайцы, артанцы и русские.** 24А-2. Упоминается также битва на поле **Хэлэк** . «… погибли на поле за Ял-Инешем, которое после этого стали называть Хэлэк кыры («Гибельным»). [ДТ, с.72]. *(приблизительно 1113г.)*

24А-3. В 7-ом веке произошла битва между Бат-Бояном и вождем хазар Калгой. «С обеих сторон пало 90 тысяч воинов, из которых 50 тысяч были хазарами, а Калга был зарублен Хумыком, и с той поры хазары называли речку Алмыш **«Калга».** [ДТ, с.20-21].

25. ХАЗАРЫ – ТАТАРЫ - КАЗАКИ = ХАЗАРЫ - ТАТАРЫ - КАЗАКИ

25А. «ДЖАГФАР ТАРИХЫ». ХАЗАРЫ – ТАТАРЫ – КАЗАКИ

25А-1. После смерти Талиба в 981 году подняли на трон Тимара Мумина Баджанака, поддержанного **казанчиями** и баджанакцами….[ДТ, с.102]. (т.е., в 10 веке – казаки?)

25А-2.1374г. Марджан (булгарский бек) став богатейшим казанчием, сохранил со своими **казаками** дух подлинного товарищества… ***Кыргызы называют булгар ногайцами. Кыпчакские кытаи прозвали себя ногайцами. [ДТ, с.214].***

25А-3. 1241 год. Эмир сказал хану **Бату**, чтобы он собрал анчийцев *(украинцев)* и каубуйцев в одно войско, и они будут верно служить ему. Бату так и поступил и велел войску называться татарским, ибо **татары называли всех служивших им (нетатар) «татарами»**. Но каубуйцы отказались, и тогда эмир предложил хану назвать воинов этого войска казаками. Слово **«казак»** у булгар означает доблестного бахадира, сражающегося без кольчуги в знак пренебрежения к смерти. Такие бахадиры дают обет не жениться до тех пор, пока не прославят себя воинскими подвигами. Бату понравилось это предложение и он утвердил его. А еще раньше **казацкое войско** эмир создал в Булгаре, и оно заменило **курсыбай.** [ДТ, с.187]. «…***в хазарской столице, которую булгары в раздражении называли Этиль, то есть «СОБАЧЬИМ городом», ибо частенько именовали белых хазар СОБАКАМИ…» [ДТ, с.28].*** *Многие татаро-монгольские правители, например: Тимур-Аксак, Урус, Узбек при описании их в 9-10- ом вв. по «ДТ» оказываются хазарами: Хаканы Хазарии – Аксак-Тимер, Урус, Узбек, а хан Бату, отразился в «ДТ», видимо, в биографиях и именах «Будима» («Вадима Храброго» русских источников), и* ***внука Будима – «Джуна , которого булгары звали БАТА». Будим и Бата были руководителями русских, украинских и наемных войск в Русском государстве****.*

КРАТКИЕ ВЫВОДЫ

История Руси и соседних государств, изложенная в «Джагфар Тарихы» во многом дополняет и уточняет известные из русских источников сведения. По некоторым вопросам есть существенные расхождения, но в целом булгарские летописи содержат массу полезного и просто очень интересного материала. Например, о происхождении первых русских князей, об их родственниках. Булгарский вариант Истории дает следующую картину: Айдар Угыр – отец Лачына. Лачын – отец Угыра, т.е. - Игорь Старый (или Рюрик) – отец Олега, Олег – отец Игоря (т.е. Игоря молодого). Однако, как и любые другие древние источники, булгарские летописи не миновали исправлений и изменений, вносимых в них историками, переводчиками и редакторами. Любопытно, что работа по внесению изменений в булгарские летописи продолжается и в настоящее время. Так в издании «Джагфар Тарихы» 1993г.: «Балын – 1) земля белорусов и великороссов; 2) Северо-Восточная Русь, Московская Русь (Московское-Русское государство); 3) город Суздаль, основанный на месте булгарского балика Балын.»[ДТ, с.352], а в Интернет-версии издания «Джагфар Тарихы» 1997г. после слова «балынский», дается разъяснение «византийский», например: «…балынский (византийский) правитель получил сведения…», « но внезапно Балынец (т.е. византийский император) отозвал их…»[ДТИ] . Каким образом, за 4 года, прошедшие между двумя изданиями «Джагфар Тарихы», Северо-Восточная Русь «переехала» в Византию, остается загадкой. Тем не менее, в «Джагфар Тарихы» можно почерпнуть массу интересных сведений, например о татаро-монгольском иге на Руси или о правителях Хазарии. Мы уже видели, что некоторые татаро-монгольские ханы, при их «переезде» на бумаге в более древние века, оказывались Хазарскими правителями. Но если Орда – регулярное русское войска в состав которого входили казаки, а хазары, как пишет В.И. Классен – это казаки, то все вполне логично. Так, например, Аксак-Тимер был Хазарским (т.е. Казацким) правителем, Аксак-Тимур был из племени мангыт, во главе которого стояли Чингизиды, и из которого произошли хан Урус, хан Эдиге-Мангыт, от которого произошел русский род Урусовых. Причем, мангыты = менкулы = мэнхолы = кыпчаки еще и христиане, еще и синеглазые и светловолосые, воюют между собой, воюют с булгарами и за них и против русских и против своих соплеменников, еще и за русских воюют во время «татаро-монгольского

ига». В Куликовской битве мангыты сражались против Мамая под командованием урусского военачальника, а часть казаков сражалась за Мамая. Булгарские летописи, рассказывая о походе царевича Арабшаха, просто отождествляют мангытов и татар с урусами, т.е. русскими, «Джагфар Тарихы» пишет, что Урус послал Арабшаха на урусов (русских), тот задание выполнил: разбил мангытов, татар и кытайских ногайцев. Хан Батый осуществлял «иго» на Руси при помощи созданного им казацкого войска. Русские, татары, монголы, хазары, казаки, булгары, болгары клонируются историками на страницах «учебника», часто сохраняя свои имена, но меняя эпоху. Например, Аксак-Тимер (хакан Хазарии) = Мурза-Тимур (ак-монгыт, глава черемшанских казаков) = Аксак-Тимур = Темир-Мурза (он же татарин - «печенегш» Челубей, он же - булгарский эмир Сал-Сал, руководитель казацко-печенежского войска) = Тимур-Аксак (мавераннахский эмир). Отяк (Булгарский царь) = Мстислав Удалой (Русский князь). Кучак (Булгарский эмир) = Кучко (Русский боярин). Арбат (основатель Венгерского царского дома) = Арбат (наследник Булгарского трона). Родной брат Арбата – Мал, древлянский князь, наследник Булгарского трона, командующий и Киевскими и Булгарскими войсками, дед великого князя киевского Владимира, а вот сын Мала – Добрыня, хоть и эмир, однако командовал русским войском и крестил Русь «огнем и мечом», кроме того, был волхвом и бояром. Список этот можно продолжать и продолжать.

Вывод из всего вышесказанного очевиден: на территории Руси и соседних государств шла междоусобная война. «Так называемого «татаро-монгольского» завоевания не было, то есть не было нашествия иноплеменников на Русь.» [ФОМ 1,с.43].

Асыҡ күренеүенсә, хәҙерге мәктәптәребеҙҙә, юғары уҡыу йорттарында уҡытылған һәм, ғөмүмән, дипломлы тарихсыларыбыҙ күҙ йомоп тылҡыған рәсми Рәсәй тарихы ылғый ялғандарҙан ғибәрәт икән; ул ялғанды йырып сығыу бурысы киләсәктең фидаиҙары өлөшөндә.

17.03.2011

Әсәһе Шәрифә инәй

Уҙамандар уҙаманы

Мин белгәндән әсәйем, олатайҙарым һәм оләсәйҙәрем, ғөмүмән, бөтөн Үҫәргән төбәге аҡһаҡалдары уны шулай тип ололап хәтерләй ине. Йылдар уҙа килә тарих менән ныҡ мауығып, архивтарҙа ярайһы уҡ соҡсонғас, был инсандың бөтөн башҡорт халҡы өсөн уҙамандарҙың уҙаманы булғанлығына инандым.

Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов элекке Ырымбур гөбөрнәһенең Орски өйәҙе 1-енсе Үҫәргән ылыҫы (волосы) Абзан-Мырҙабулат ауылында 1890 йылдың 15 апрелендә донъяға килгән. Был датаға айырым иғтибар кәрәк, сөнки ул, заманында минең аша киң матбуғатҡа сығарылһа ла, ҡаһармандың хатта осло ҡәләмле ауылдаштары тарафынан да ниңәлер иҫәпкә алынмай, шулар нәшер иткән “Башҡортса календар”ҙарҙа, улар артынса шулай уҡ “Башҡортостан. Ҡыҫҡаса

энциклопедия”ла, яңылыштырылып, “6 октябрҙә тыуған”, “Шәңгәрәй улы” тип яҙылып килде; Башҡортостандың Ҙур Энциклопедияһында ла, датаһы төҙәтелһә лә, “Шәңгәрәй улы” килеш ҡалған. Оло шәхес биографияһында кескәй кәмселектәргә лә юл ҡуйылмауы хәйерле.

Ул замандарҙа Мырҙабулат ауылынан 18 саҡрымға көньяҡтараҡ Ҡаҫмарт йылға тамағында һаҡмар буйлап урынлашҡан һәм был яҙманың авторы ла тыуып үҫкән 6-сы Үҫәргән ылыҫы Сәнкем-Биктимер ауылында тирә-яҡҡа даны таралмыш Мөхәммәткамал хәҙрәт Мөхәммәтшаһ улы Дәүләтшин (1912 йылда вафат) ахундың мәҙрәсәләре була (айырым башҡорт һәм ҡаҙаҡ), Сөләймән шул мәҙрәсәлә тәүге белемен ала; башҡорттоң да, ҡаҙаҡтың да буласаҡ зыялылары менән бергә ҡайнаша (был иһә уға революция йылдарында Башҡортостан көньяғының рухи юлбашсыһына әйләнергә ярҙам итә). Заманында бында танылған башҡорт шағирҙары Әбүлмәних Ҡарғалы (1782 — 1833), Һибәтулла Сәлихов (1794 — 1869) үҙҙәренең туған-тыумасаларына килеп йөрөгән, төбәктең рухи мөхитенә шағирәнә тәьҫирҙәрен һалған. Һибәтулла Сәлиховтың Сөләймән менән бергә уҡыған ейәне Ғәбдел-Әхәт Мөхәммәт-Садиҡ улы Сәйетбатталов та һуңынан, Сөләймән һымаҡ уҡ, физәкәр большевикка әйләнеп, 1918 йылда ошо Сәнкем-Биктимерҙә С.Ш.Мырҙабулатовтың рухи тәьҫирендә төҙөлгән көньяҡ Башҡортостан ҡыҙыл гвардияһының командиры һәм аҡтар ҡамауында ҡалмыш Орск ҡала оборонаһы башлығы булып китә, ә һуңынан Башҡортостан совет автономияһына аяҡ салыусы урыҫ һәм татар шовинистарына (шәмиғоловсыларға) ҡаршы физәкәр көрәшә (ул 1921 йылдың 6 февралендә Эстәрлетамаҡта Башглавмилиция башлығы вазифаһында вафат. — ЦГИА Р.Б., ф. Р-1252, оп. 2, д. 23, л. 2). Әйткәндәй, ахун Мөхәммәткамал Дәүләтшиндың иртә үлгән улы Фатих мулла, үҙенең ырыуҙашы юрист Юныс Юлбарыҫ улы Бикбов кеүек үк, Башҡортостан автономияһын һәм уның Хөкүмәтен ойоштороусыларҙың береһе була һәм Хөкүмәттең Финанс комитетын етәкләй; һәм шул уҡ ахун хәҙрәттең “Ҡөрьәнелхафиз” (Ҡөрьәнде яттан белеүсе) лаҡәбен алған ейәне Ғөбәйҙулла Тажи улы Ураҙов иһә баяғы ҡыҙыл гвардияның ҡыйыу рухлы большевигы сифатында граждандар һуғышында, М.Мортазин бригадаһының полк комиссары рәүешендә советтарҙың Польша фронтында батырлыҡтар күрһәтеп, 1920 йылда (Ә.Вәлидов хөкүмәте таралғас) Башҡорт Ваҡытлы Революцион Комитетының (БВРК) секретары булараҡ билдәле. Ә был ҡыҙыл гвардиясылар бөтәһе лә С.Ш.Мырҙабулатов-большевикты үҙҙәренең рухи тәрбиәсеһе, етәксеһе итеп таныҡлай. Н.Р.Бикбаевтың “Два периода контрреволюционной валидовщины, 1917 — 1920 г.г.” тигән ҡулъяҙма хеҙмәтенә теркәлмеш Хәмзә Мусаев (Яңы-Ғафар ауылынан башҡорт, шул әтрәт һуғышсыһы, 30-ынсы йылдарҙа Өфөләге Ҡыҙыл профессура вузы ректоры) рецензияһынан күренеүенсә, бындай ҡыҙыл гвардия әтрәттәре ул саҡта Башҡортостандың өс төбәгендә генә төҙөлгән: “Белоретта эшселәрҙән А.В. Пирожников иптәш командалығындағы ҡыҙыл партизан полкы... Тамъян-Ҡатай ылыҫы үҙәге Сермәндә — башҡорттарҙан Дауытов Шәйәхмәт етәкселегендәге ҡыҙыл партизан әтрәте... һәм йәнә 1918 йыл башында хәҙерге

Йәнсура[81] районында (Үҫәргән кантоны) Яңы-Ғафар (аҙаҡ татарға әйләндерелгән боронғо башҡорт ауылы — заманында беҙҙең Сәнкем-Биктимерҙән күсенеп ултырғандар. — Й.С.), Сәнкем-Биктимер, Һунарсы һәм Ырыҫҡол ауылдарында башҡорт Әхәт (Ғәбдел-Әхәт. — Й.С.) Сәйетбатталов етәкселегендәге һәм Жултый разъезы башлығы большевик Расщепкин иптәш ярҙамында башҡорт һәм татарҙарҙан ҙур ҡыҙыл партизан әтрәте ойоштороло, һуңынан ул Орск атлы һәм йәйәүле ҡаһарман ҡыҙыл гвардия полктарының нигеҙен тәшкил итте". Күренекһенсә, бында Сөләймән Мырҙабулатовтың исеме телгә алынмай, сөнки Бикбаевтың хеҙмәте яҙылған утыҙынсы йылдарҙа С.Ш. Мырҙабулатов күптән үк инде "Солтанғәлиевсы-яуыз милләтсе" рәүешендә Мәскәү Лубянка төрмәһендә ВОГПУ (һуңынан НКВД һәм КГБ) тарафынан язалап үлтерелгән, исеме тыйылған була. Минең яҡын ағайҙарым, олатайҙарымдың бөтәһе лә шул ҡыҙыл партизан әтрәте яугирҙәре булып, Ғәбдел-Әхәт Мөхәммәт-Садиҡ улы Сәйет-Батталовты — үҙҙәренең ҡыҙыл ғәскәри командиры, ә Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовты рухи юлбашсыһы итеп таныйҙар ине...

Сәнкем-Биктимерҙә Мөхәммәткамал хәҙрәт мәҙрәсәһен тамамлағас, С.Ш.Мырҙабулатов йәне һөйгән уҡытыусылыҡ эшенә мөкиббән бирелә, Башҡортостан ауылдарында, Ҡаҙағстан далаларында уҡыта. Батша хөкүмәте урыҫ уҡытыусыларын хәрби хеҙмәттән азат итһә лә, был ҡанун мосолман мөғәллимдәренә тәтемәгәнлектән (геноцидтың бер төрө), 1913 йылда уҙаманыбыҙ һалдат итеп алына ла 1917 йылдың аҙаҡтарынаса империалистик һуғыштың ҡанлы окоптарында ҡала. Шуның менән уның педагоглыҡ хыялы емерелә, мөғәллим булаһы урында шинель кейгән сәйәсмәнгә — инҡилапсыға әйләнә. Ҡанлы герман һуғышының үлемесле окоп һабаҡтарын баштан ашҡансы алып, үҙенән-үҙе сәйәсәткә ылыҡып, 1916 йылда уҡ ул үҙен большевик һанай (партияға рәсми теркәлеше 1918 йылда), фронттағы һалдат массалары араһында Бөйөк Октябрь революцияһын әҙерләүҙә әүҙем ҡатнаша. Шул маҡсат менән 1917 йыл аҙағында Көнбайыш фронттың бер төркөм большевиктары Рәсәй баш ҡалаһы Петроградҡа йүнәлтелеп, Смольныйҙағы "революция штабы"нан артабанғы сәйәси эш йөкләмәләре алып, Мәскәү аша үҙ яҡтарына — тәрән тылға оҙатыла. Шул иҫәптән С.Ш.Мырҙабулатов Ырымбур ҡалаһына ҡайтып, урындағы большевиктар менән тығыҙ элемтәгә керә лә мосолмандар араһында большевизм идеяларын тарата башлай, фронтта саҡта уҡ тырышып үҙе әҙерләшкән Октябрь түңкәрелешен шунда ҡаршылай. Сөләймәндең үҙенең дә, уның өгөт-нәсихәтен йотлоғоп тыңлаған яҡташтарының да күңеленә большевизм төшөнсәһе иң беренсе нәүбәттә шул партияның программаһында йән арбаткыс сағылған, ә һуңынан Иосиф Джугашвили (Сталин) ҡулынан аҡ ҡағыҙға яҙылып, Ленин менән икеһе бергә ҡул ҡуйған "Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары Декларацияһы" рәүешендә йөрәктәрҙе елкеткес үтеп инә:

---

[81] Йәнсура — 1934 йылда Ырымбур өлкәһенә "ҡырҡып" ҡалдырылған район һәм район үҙәге исеме. Урыҫтарҙа — "Зиянчура" тип, ә хәҙерге Башҡортостан рәсми органдары, шуларға эйәреп, "Ейәнсура" тип ҡабул ҡылһа ла, ғәмәлдә ул шәжәрәләге тарихи шәхес Йәнсура бабабыҙҙың исеменән килә һәм ерле халыҡ телендә лә Йәнсура булып ҡала — автор ҙа шулай яҙа.

“...Ошо йылдың июнендә Советтарҙың 1-се йыйыны Рәсәй халыҡтарының ирекле үҙ билдәләнешенә хоҡуғын иглан ҡылды.

Ошо йылдың октябрендә Советтарҙың 2-се йыйыны Рәсәй халыҡтарының был тартып алынғыһыҙ хоҡуғын уғата теүәллеклерәк һәм тәғәйенерәк дөрөҫләне.

Шул йыйындарҙың ихтыярын бойомға ашырып, Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәсәй милләттәре мәсьәләһе буйынса үҙенең эшмәкәрлек нигеҙенә түбәндәге башланғыстарҙы һалырға ҡарар итте:

1. Рәсәй халыҡтарының тиңлеге һәм суверенлығы.

2. Рәсәй халыҡтарының айырылып сығыуға һәм үҙ аллы дәүләт төҙөүгә тиклем ирекле үҙ билдәләнешкә хоҡуғы.

3. Бөтә һәм теләһә ниндәй милли һәм милли-дини өҫтөнлөктәрҙе һәм сикләүҙәрҙе ғәмәлдән сығарырға.

4. Рәсәй территорияһында йәшәгән милли аҙсылыҡ һәм этнографик төркөмдәрҙең ирекле үҫеше...

Республика исеменән Рәсәйҙең милли эштәр буйынса Халыҡ Комиссары: ***Иосиф Джугашвили (Сталин).***

Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәйесе: ***В. Ульянов (Ленин)”.***

Фронттан физакәр коммунист булып ҡайтҡан Сөләймән Мырҙабулатов үҙенең партиялаштарының был декларациялағы ике йөҙлөлөгө хаҡында шәйләмәй әле, милли мәсьәләлә Ленин партияһының халыҡтарға азатлыҡ, ирекле үҙ билдәләнеш хоҡуғы биреүенә мөкиббән ышана һәм ғорурлана, һөйөклө Башҡортостанын бойондороҡһоҙ социалистик дәүләт итеп ҡороруға хыяллана. Уның алдынараҡ ҡайтып өлгөргән окопташы Ғәлиәхмәт Айытбаев был ваҡытта Ырымбурҙа Башҡорт Ҡоролтайы тарафынан раҫланмыш Башҡорт Йөмһүриәтенең 22 инсандан хасил предпарламент (ваҡытлы хөкүмәт) ағзаһы булып өлгөргән (ер эштәре буйынса), Шәриф Манатов етәкселек иткән (урынбаҫары — Әхмәтзәки Вәлидов) хөкүмәт идараһына Сөләймән Мырҙабулатов та ингеләп йөрөй, ҡайһы бер көндәлек әңгәмәләрҙә милләт, ер, милли үҙ билдәләнеш тураһында ҡыҙыу фекер алыша. Бөтә донъя революцияһын дөрләтеү юлы менән Ер шарында пролетариат диктатураһын урынлаштырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған ленинсы-большевиктарҙың донъя-ғаләм тотҡаһы итеп *ярлыларҙы ғына* иғлан ҡылыуы Рәсәйҙең Сөләймәндәй ябай-ялпы күпселегенең күңел ҡылдарына сиртеп, уларҙы байҙарға ҡаршы аяҡландырған һәм синфи дошманлыҡ тәрбиәләгән ҡырҡыу дәүерҙә, моғайын, Шәриф Манатовтың, Әхмәтзәки Вәлидовтың, башҡорт йәмғиәтендә, большевиктар өйрәткәнсә, синфи ҡаршылыҡты, юҡтан булһа ла, эҙләп табып үҫтереү һәм һәр ерҙә синфи көрәш дөрләтәһе урында, “башҡортта бер генә синыф бар — башҡорт милләте” тип, синфи көрәштә үҙҙәренә таянсыҡҡа иң түбәндән фәҡир-фоҡор ҡатламы ғына эҙләп маташмауҙары, ә, байғуралар ҡатламы тип тартынмай, дәүләт төҙөү эшендә милләттең Урал тау түбәләреләй өҫкә сурайған иң өлгөр һәм булдыҡлыларына (йәғни “бай һәм кулак”тарына) таяныуҙары С.Ш.Мырҙабулатов һымаҡ окоптарҙа дары төтөнөнән ыҫланып һәм Ленин һүҙҙәренән таҫланып ҡайтҡан “фронт большевиктары”на үтә лә яманһыу һәм ятбауыр тойолғандыр…

һәр хәлдә, уҙаманыбыҙ, үҙе мөкиббән бирелгән коммунистар партияһының программаһына ярашлы, ерҙе миллиләштереү һәм ярлыларға бер тигеҙ итеп бүлеп биреү яғында тора, ә вәлидовсылар иһә ҡәҙимге йәмәғәти (община) һәм хосуси милекселекте һаҡлап ҡалыу яғында...

Икеһе тиң бер үк Ырымбурҙа, бер үк осорҙа сәйәсәт йөрөтһәләр ҙә, сәйәсәттең икеһе ике ҡаҙанында ҡайнағанлыҡтан, башҡорт милли хәрәкәтенең юлбашсыһы менән уның араһында яҡын танышлыҡ булмай әле: Әхмәтзәки Вәлидов уға, һуңынан С.Мырҙабулатовтың үҙенең хәтерләүенсә, әллә ни иғтибар ҙа итмәй шикелле, сөнки уны саф башҡорт рухлы "революционер тип һанамай". Сөнки, "Ярлы ыҙмаларға — тыныслыҡ!", "Ер — уны эшкәртеүселәргә бирелһен!", "Халыҡтарға — ирекле үҙ билдәләнеш хоҡуғы!" кеүек гүзәл шиғарҙарға (лозунгыларға) төрөнөп, шул хис менән фронттан ашҡынып ҡайтмыш Сөләймән Мырҙабулатов, Муса Мортазин, Харис Йомағолов, Таһир Имаҡов һымаҡ фиҙакәр большевиктар Башҡортостан үҙ билдәләнешен "Рәсәй-әсәй" Советтар хакимиәтенең үҙ йылы ҡулынан — Үҙәк (Мәскәү) менән туғандарса аңлашып-килешеп кенә ҡороп алырға эскерһеҙ ышана, шул юлда ең һыҙғанып көрәшә, сөнки улар тәү мәлдәрҙә төҫөн генә ҡыҙылға үҙгәрткән шул уҡ "Рәсәй-үгәй әсәй" империяһы ҡулындағы уйынсыҡ-курсаҡ булып хеҙмәт иткәнлектәрен йәки итәсәктәрен белмәй (тора-бара ауыҙҙары бешкәс кенә төшөнә). Һәр хәлдә, С.Ш.Мырҙабулатов шул ваҡытта уҡ коммунистик идеологияға һуҡыр инаныусы булмай, ахыры, сөнки, үҙе үк хәтерләүенсә, 1918 йылда Көньяҡ Урал большевиктарының атаҡлы башлыҡтары С.М.Цвиллингка, П.А.Кобозевҡа Орск өйәҙендә ҡыҙыл гвардия әтрәте төҙөү барышындағы милли мәсьәләлә ебәргән "хаталарын" (Баймаҡтағы Мағазов әтрәтен атыуҙарын) күҙҙәренә төртөп әйтә. Былар менән шулай тиң һөйләшкәс, әлбиттә, Мырҙабулатовтың абруйы ҙур булған.

Ырымбурҙа аҡ казак Дутов диктатураһы ҡарпығандан һуң сәйәси хәлдәр хөртәйеп, шуға тырышып хеҙмәт ҡылған татар Мосолман хәрби комитеты, Ырымбурға дөрөп килеүсе ҡыҙыл ғәскәрҙәргә ҡаршы тороу өсөн, мосолмандар араһында дөйөм мобилизация иғлан ҡылып, 1200 һалдатлыҡ полк төҙөгәс, Дутов хакимиәтендәге ҡалалағы большевиктарға һәм шулар яҡлыларға ысын һунар башлана. С.Ш.Мырҙабулатов, аҡ террорҙан йәшеренеп, үҙенең тыуған өйәҙ үҙәге Орск ҡалаһына күсә, ундағы тәүге большевиктар Степан Андреевич Долгоруков, Аркадий Николаевич Малышевский менән тығыҙ бәйләнешеп, Орск өйәҙенең компартия ойошмаһын башлап төҙөүҙә һәм 1918 йылдың 1 апрелендә тәүге ойоштороу йыйылышын үткәрешеүҙә әүҙем ҡатнаша. Һөҙөмтәлә аҡтар тылында РКП(б)-ның Орск комитеты донъяға тыуып, 1-се номерлы партия билете (архивта һаҡланған) ялҡынлы революционер С.Ш.Мырҙабулатовҡа хөрмәтләп тапшырыла. Ошонан һуң яҡташтары араһында "беренсе номерлы большевик" тип танылған уҙаман, өйәҙ буйынса артабан ниҙәр эшләргә иптәштәре менән һүҙ ҡуйышып, партияға башҡорттарҙы күберәк йәлеп итеү өсөн, тыуған ауылы Мырҙабулатҡа[82] ҡайта, бөтә Үҫәргән кантонына сәйәси эшмәкәрлеген йәйелдерә. Дары төтөнөнә ыҫланып ҡайтҡан һалдаттарҙы һәм ялҡын йөрәкле теләктәш

[82] Хәҙерге Абзанға.

йәштәрҙе әүҙем большевиклаштырырға керешә. Һөҙөмтәлә шул кешеләрҙән әле өҫтәрәк әйтелгән, командиры Ғәбдел-Әхәт Сәйетбатталов булған ҡыҙыл ғәскәр туплана, ул иһә артабан Орскиҙағы баяғы атлы һәм йәйәүле ҡыҙыл гвардия полктарының йәҙрәһен тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта Ырымбурҙағы Каруанһарайҙа урынлашҡан, тәүге мәлдәрҙә большевиктарҙың Советтар хакимиәтен таныған һәм аҙаҡ килеп Дутов менән дә уртаҡ тел таба алған Башҡорт Хөкүмәте лә кантондарҙа үҙенең ғәскәрҙәрен ырата, Ырымбур большевиктарының йөрәгенә шом һала. Башҡортостан автономияһына ҡаршы айырыуса үсләнеп йоҙроҡ төйнәгән, башында Самуил Цвиллинг торған Ырымбур большевиктары, ерле милли азатлыҡ даулаусы башҡорттарҙы күрә алмаҫ татар шовинистарын һәм уларға эйәрмеш Ғ.Шәмиғолов, Б.Нуриманов, Б.Шәфиев кеүек “башҡорт” ялағайҙарын үҙ сәйәсәттәрендә мәкерле файҙаланып, 1918 йылдың иҫке стиль менән 4 февралендә Башҡорт Хөкүмәтенең күренекле ағзаларын, шул иҫәптән Әхмәтзәки Вәлидовты, төрмәгә яптырта. Уларҙы үҙҙәренең Өлкә Шураһына (Советына) һайлап ебәргән башҡорт халҡының күҙен буяп аймылыш ҡылыр өсөн, “тулыһынса советтар нигеҙендәге” ҡурсаҡ автономия хөкүмәте – Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы (БВРС) әтмәләнә, бына уның етәкселек даирәһе: Ғәли Шәмиғолов (башҡорт битлеге кейгән татар, сәйәси һөнәре буйынса Башҡортостан автономияһының дошманы), Ғабдулла Дәүләтшин (А.Дәүләт, башҡорт казагы), Фәйзрахман Солтанбәков (татар), Ҡыҙрас Юлмөхәммәтов (башҡорт), Бәхтегәрәй Шәфиев (мишәрҙән әүерелмеш башҡорт), Ғариф Алпаров (татар), Хәйретдин Ильясов (башҡорт), Ж.Шәрипов (башҡорт), Сәғдислам Таһиров (татар), мәшһүр йырсы Ғәзиз Әлмөхәммәтов (башҡорт) һәм журналист Вәлирахман Ғәбитов (башҡорт). Һуңғы икеһе, күп тә үтмәй, яңы “хөкүмәт”тең асылына төшөнөп, буғай, БВРС-та эшләүҙән йәһәт тайшана — Әхмәтзәки Вәлидовсылар яғына сығып китә... БВРС-та иң юғары етәкселек вазифалары ошо рәүешле бүленә: Ғ.Дәүләтшин — БВРС рәйесе, Б.Шәфиев — уның урынбаҫары, Ғ.Алпаров менән Ж.Шәрипов беренсе һәм икенсе сәркәтиптәре була. Ошо етәкселек БВРС президиумын да тәшкил итә. Шуныһы ла фәһемле: 1918 йылдың ғинуар аҙаҡтарында Өфө өйәҙенең башҡорттары йыйынында шул өйәҙ шураһы рәйесе Баһау Нуриманов (Башҡортостан автономияһына аяҡ салыусы бәндә, Ғәли Шәмиғоловтың ялағайы) үҙенең дорфалығы, ҡылған эштәренә ил алдында хисап биреүҙән баш тартҡаны өсөн рәйеслектән бушатылғас (“Тормош” гәзитенең 1918 йыл 28 ғинуарҙағы 807-се һаны), сәйәси остазы Ғ.Шәмиғолов тәҡдиме буйынса уны, БВРС-та эшләргә тип, Ырымбурға саҡырып килтерәләр. “Ләкин Нуриманов Ырымбурға килгәндән һуң, БВРС-тан бөтә юл сығымдарын һәм подъемныйҙарын ала тороп та, шул үҙе алған аҡсаларын аҡлар өсөн генә булһа ла, БВРС-та бер генә көн дә, хатта бер генә сәғәт тә эшләмәне... — тип әсенә һуңынан Ғ.Дәүләтшин (уның ҡарауы, Башҡортостандың ысын автономияһына ҡаршы тырышып эшләй). Шәмиғолов үҙе лә был уйынсыҡ “хөкүмәт”тә, рәсми яҡтан ағза булып торһа ла, эшкә тигәндә хатта ҡыл да ҡыбырлатмай, сөнки... Ғ.Шәмиғолов менән Б.Нуримановтарҙың, ғөмүмән, Башҡортостан үҙ аллылығының (ул хатта советтар ерлегендә төҙөлһә лә!) яуыз дошмандары булыуҙарын эш үткәс, һуңлап ҡына аңлағанына үкенеп,

Ғ.Дәүләтшин фекерен ошолай дауамлай. — Ғәмәлдә партияға ҡаршы, Ленинға ҡаршы һәм советтарға ҡаршы (?.. – Й.С.) был *татарҙарҙан* хасил ваҡ буржуаз авантюрасы төркөмдөң башында билдәле авантюрист Шәмиғолов һәм уның ярҙамсыһы Баһау Нуриманов торҙо, ярлы башҡорт халҡына улар күпме бәхетһеҙлек, ҡан һәм күҙ йәштәре килтерҙе”...

Уйынсыҡ хөкүмәт БВРС-ҡа күҙҙәре ҡыҙып алданыусылар араһында С.Мырҙабулатовтың телгә алынған окопташ-арҡадашы, Ә. Вәлидов менән бергә төрмәгә ябылып сыҡҡан Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы Ғәлиәхмәт Айытбаев, Мырҙабулатовтың студент йәшташы Усман Ҡыуатов, билдәле “милләтсе” Таһир Имаҡов һәм ғәйәр большевик Муса Мортазин да бар ине: 1918 йылдың мартында улар ҙа ҡапыл ғына БВРС ағзалары булып ала. Шуға тиклем Т.Имаҡов менән М.Мортазиндың Ҡазанда 1918 йылдың февралендә йыйылған 2-се бөтә Рәсәй мосолман һалдаттары йыйынында башҡорттарҙан делегат булып ҡатнашыуы, шундағы Имаҡов етәкләгән һәм ун кешенән торған башҡорт фракцияһында Башҡортостан ерле милли автономияһы өсөн ҡырҡыу көрәшкәнлектәре билдәле. Мәҫәлән, татарҙарҙың “татар-башҡорт — бер милләт ул, шуға күрә айырым башҡорт автономияһы кәрәкмәй, ә берлектәге Иҙел — Урал штаты төҙөргә кәрәк”, тип дөрөҫәренән бер тамсы *ла* ҡаҡшамаусы башҡорт Т.Ғ.Имаҡов, бөтә йыйын ҡолағына һеңдереп: “Башҡорттар — үҙҙәре айырым бер милләт. Уларҙың үҙ ғөрөф-ғәҙәттәре, мәҙәниәте, сәнғәте һәм башҡа үҙенсәлектәре бар”, — тип дәлилләп, йәтеш тәҡдим дә керетә: татарҙар әйткән ундай штат төҙөлә ҡалһа, “иң башта Башҡортостан штатын раҫларға, ә шунан һуң шул Башҡортостан штатына Ҡазанды килтереп ҡушырға”...

Тап ошо көндәрҙә Каруанһарайҙағы вәлидовсыларҙың ҡулға алыныуы йыйынға мәғлүм булғас, башҡорт фракцияһының тәҡдиме буйынса, ҡулға алыу ваҡиғаһын тикшереү өсөн Ырымбурға ебәрергә тип, Таһир Имаҡов, Муса Мортазин, Мөхәммәтхан Ҡулаев, Усман Ҡыуатовтарҙан торған делегация билдәләнә. Әгәр улар Ырымбур большевиктарының яуыз акцияһын нахаҡ ҡылыҡ тип тапһа, ваҡиға бөтә Рәсәй күләмендә киҫкен шауҡымланып шаулар, Цвиллинг етәкселегендәге Ырымбур большевиктары Башҡорт Хөкүмәте ағзаларын, ғәфү үтенеп, тотҡонлоҡтан бушатыр, һөҙөмтәлә башҡорт милли хәрәкәте *ла* ҡырҡа боролош яһамаҫ — асыҡтан-асыҡ советтарға ҡаршы китмәҫ кеүек ине. Әммә, күктән таш яуғандай, Каруанһарай тәңгәлендә көтмәгәндә пәйҙә булған баяғы Ҡазан делегацияһына Ырымбур большевик етәкселеге тарафынан үҙҙәренең сәйәси уйынсығы БВРС аша ультиматум ҡуйыла: Ҡазандан килгән делегация бындағы вәлидовсыларҙы ҡулға алыуҙың һәм улар урынына яңы иғлан ҡылынған БВРС-тың ҡанунилығын дүрт сәғәт эсендә рәсми танырға тейеш, юғиһә...

Ҡыҫҡаһы, Ырымбур етәкселеге тарафынан үҙ кешеләрен өҫтәп керетеп “киңәйтелгән” тикшереү комиссияһында күшеккән тауыҡтарҙай мәсхәрәле аҙсылыҡта тороп ҡалған Ҡазан делегацияһы Зәки Вәлидов хөкүмәтен тыйырға һәм уның урынына БВРС-ты танырға ризалыҡ бирә *ла*... шуның хаҡына икеһе (Т.Ғ.Имаҡов, М.Л.Мортазин) БВРС ағзалары итеп үткәрелә һәм, үҙҙәре теләйме-теләмәйме, шәмиғолов-шәфиевсыларҙың шаҡшы сәйәси арбаһына мисәүләнә... Эйе, улар, моғайын, фронттан ҡайтҡан “үтә ҡыҙыл” большевиктар булараҡ,

буржуаз автономияға ҡаршы, совет автономияһы яҡлы. Сөнки совет автономияһын юллау ышаныслыраҡ, хәүефһеҙерәк — РСДРП(б)-ның программаһына милләттәрҙең ирекле үҙ билдәләнешкә хоҡуғы ап-асыҡ яҙылған бит (уның да ябай алдатҡыс ҡына икәнлеген был башҡорт уҙамандары әлегә белмәй)... Һәм бына өс ай үтер-үтмәҫтән БВРС тигән ҡурсаҡ автономия уны төҙөп уйнатыусы Ырымбур большевиктары тарафынан уҡ сүплеккә ырғытыла:

“1918 йылдың 30 мартында киске сәғәт 10-да Эшсе, Крәҫтиән һәм Казак депутаттары Советының Цвиллинг рәйеслегендәге ултырышының 3-сө һанлы протоколонынан күсермә.

Тыңланыҡ:

2. Революцион Автономиялы Башҡортостандың (йәғни ҡурсаҡ БВРС-тың. – Й.С.) Мосолман хәрби-революцион комитеты (татар шовинистарының ойошмаһы. – Й.С.) менән дәғүәләшеүе.

Ҡарар ҡылдыҡ:

Урыҫ революцияһының социаль тәбиғәте төрлө халыҡтар һәм милләттәр араһындағы ерле сиктәрҙе емереүен иҫәпкә алып, башҡорт хеҙмәтсән массалары аңының сиктән тыш түбән кимәлдә булыуы һәм башҡорт халҡы араһында синфи көрәштең булмауы сәбәпле, Гөбөрнә башҡарма комитеты федератив ерле-милли татар-башҡорт республикаһын төҙөүҙе революция мәнфәғәттәре өсөн *зыянлы* тип таный[83]. Шул сәбәпле Гөбөрнә башҡарма комитеты милләттәр эше буйынса комиссарға (Ғ.Шәмиғоловҡа. — Й.С.) бер үк ғәмәлдә Мосолман революцион комитетты *ла*, Автономиялы Башҡортостан Ваҡытлы Революцион Советын *да кисекмәҫтән таратырға* һәм улар урынына Мосолман эштәре буйынса Гөбөрнә комиссариаты ойоштороп, унда Башҡортостан эштәре буйынса өс кешелек коллегия билдәләргә, был коллегия составын раҫлауҙы Гөбөрнә башҡарма комитетына тапшырырға бойора” (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, *д*. 393, *л*. 78).

Ошо ҡарар нигеҙендә бер юлы Ырымбур гөбөрнәһенең дә, Башҡортостандың да барлыҡ башҡорт һәм татарҙары өҫтөнән идара ҡылыусы Ырымбур Гөбөрнә башҡарма комитетының Мосолман эштәре буйынса комиссары булып алған элекке татар байҙары кибетендә аршинлап ситса һатыусы приказчик Ғәли Шәмиғолов башҡорттарға ҡарата үткәрелгән был мәкерле сәйәсәттең асылын аса төшә: “Ырымбур советтар ҡулына күскәс, улар (советтар), Башҡортостан Хөкүмәтенең (йәғни вәлидовсыларҙың. — Й.С.) насар эшен күреп, Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советын ойоштороҙо, *ләкин* был Совет шул уҡ элекке автономиялы Башҡортостан хөкүмәте эҙенән китте һәм, башҡорт демократияһының (йәғни Башҡортостан автономияһы дошмандары Ғ.Шәмиғолов, Б.Нуриманов һәм башҡаларҙың. — Й.С.) талаптарын бойомға

[83] Ошо уҡ шовинистик фекер Орск өйәҙендәге Йылайыр урыҫтарының, Башҡортостан автономияһына ҡаршы көрәшеү өсөн, Ырымбурға итәғәтле “Преображенский Урыҫ Өйәҙе” һәм “Преображенский әтрәте” төҙөлөүен иғлан ҡылған 1918 йыл 20 февраль “крәҫтиәндәр йыйыны” ҡарарына керетелә: “1) Октябрь революцияһы яулауҙарын, 2) башҡорттарҙың культураһы түбәнлеген,... 5) башҡорттарҙың ерле үҙ аллылыҡ уйынын иғтибарға алып, йыйын кире ҡаҡҡыһыҙ рәүештә Башҡортостандың ерле автономияһына ҡаршы сыға, шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың тулыһынса мәҙәни үҙ билдәләнешен һүҙһеҙ таный” (ЦГАОО Р.Б., ф. 1832, оп. 4, *д*. 300, *л*. 5). Ергә табаның теймәһен, күктәге хоҙайҙарыңа — мәҙәниәтеңә генә йәбешеп йәшәргә иреклеһең, тимәк...

ашырыу, башҡа милләттәр демократияһы (йәғни Башҡортостан автономияһын күрә алмаусы урыҫ һәм татар шовинистары. — Й.С.) менән килешеү һәм яҡынайыу өлкәһендә уңышлы эшләү урынына, Башҡортостандың дәүләт сиктәрен һыҙып билдәләү менән шөғөлләнделәр (былары ла шовинистар ҡулындағы уйынсыҡ ҡына булып ҡалырға теләмәгәндәр, күрәһең. -- Й.С.)...

Советтарҙың Гөбөрнә башҡарма комитеты әгәр ҙә был Башҡортостан Советының эшен дауам иттерткән сүрәттә, ниндәй ҡурҡыныс янағанын һәм уларҙың дутовсылар (йәғни вәлидовсылар. — Й.С.) менән берлектә контрреволюция әҙерләүен алдан күреп, бөтә Ырымбур гөбөрнәһе буйынса Башҡортостан Советын (БВРС-ты) юҡ итергә лә уның бөтә эштәрен һәм мөлкәттәрен Ырымбур гөбөрнәһенең Милләттәр эштәре буйынса Гөбөрнә комиссариатына[84] тапшырырға ҡарар ҡылды.

Ырымбур гөбөрнәһенең Милләттәр эштәре буйынса Гөбөрнә комиссары: **Шәмиғолов**" ("Известия Оренбургского Ревкома" гәзитенең 1918 йыл 21 апрель 58-се һаны, 3-сө бит).

Тап шул осорҙа Сөләймән Мырҙабулатовтың тәғәйен ҡайһы автономия яҡлы булыуы, ҡатнашлығы асыҡ ҡына билдәле түгел, сөнки уны, Ленин-Сталин репрессияларының Башҡортостандағы буласаҡ беренсе ҡорбанын, ҡыҙыл хакимиәтебеҙ егерменсе йылдарҙан уҡ эҙәрлекләй башлаған һәм, ниһәйәт, 1930 йылда алып китеп яуыздарса юҡ итәндән һуң, уның менән ҡыҙыҡһыныу хәтәрләнә, шуға күрә уны белгән кешеләр ҙә белмәмешкә һалыша, белгәндә лә, һаҡлыҡ өсөн, рәсми хакимиәт үҙе ҡушҡанса, баштан-аяҡ "дошман" итеп тамғалай — ошо арҡала мәғлүмәттәр юйыла. Шулай ҙа репрессияларға тиклем яҙылған ҡайһы бер сығанаҡтарҙан күренеүенсә, С.Мырҙабулатов үҙ ауылында балалар уҡыта башлаған ул болғансыҡ осорҙа ла "ҡыҙыл большевик" көйөнсә ҡалып, Үҫәргәндең бөтә алты ылыҫында ла большевик түңәрәктәре ойоштороп, улар дәррәү эшләгән. Иң ҡыҙығы, 1918 йылда Башҡортостан тупрағы аҡтар ҡулына ҡалып, Башҡортостанда "большевизмдың хас дошманы" Әхмәтзәки Вәлидов хөкүмәте идара ҡылған заманда ла Үҫәргәндәге был большевик усағы ләүкеп-дөрләүҙән туҡталмаған. Ә бит Сөләймән һымаҡ фронттан большевиклашып ҡайтҡан башҡорттарҙы Башҡорт Хөкүмәте эҙәрлекләргә тотона. Хөкүмәт ағзаһы, "Башҡорт тауышы" гәзитенең (3-сө һаны, 1918 йыл) мөхәррире Хәбибулла Ғәбитов был хаҡта бына нимә белдергән: "Беҙ, Башҡорт Хөкүмәте эшмәкәрҙәре, осрашып, эшләгән эштәребеҙҙән хисап бирҙек, кәңәштәребеҙ һәм шатлыҡтарыбыҙҙы уртаҡлаштыҡ... Ҡарамышев әйтә, фронттан ҡайтҡан башҡорт һалдаттары халыҡты болғата башланы, ти. Большевизм менән зарарланған был ағымдар, төркөмдәр менән көрәшеү өсөн киҫкен саралар күреү кәрәк. Әгәр ошо мөҙҙәтте ысҡындырһаҡ, теләһә ниндәй ваҡиғалар килеп сығыуы ихтимал (дөрөҫ һиҙемләй: тап шундай большевиктарҙан торған альтернативлы БВРС — ялған хөкүмәт төҙөлә бит. — Й.С.). Беҙҙең беренсе бурыс шунан ғибәрәт: ялан хөкөмдәре аша был "халыҡты талаусылар"ҙы һәм большевик эйәрсендәренең тамырын ҡороторға". Ысынлап та, шул уҡ йылда Башҡорт Хөкүмәте кешеләре Башҡортостан автономияһына аяҡ салмыш Б.Нуримановты,

[84] Йәғни Ғ. Шәмиғолов ҡулына.

уйынсыҡ юлбашсы Б.Шәфиевты һәм С.Әнфиҙе тотоп аталар, ә беренсе һанлы партия билетына эйә булған “отъявленный большевик” имен ҡала (бәлки, ауылда юғалып тороуы арҡаһындалыр? Йәки уны яҡшы белгән элекке окопташы, хәҙер Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы Айытбаев арҡаһындамы?). Ә инде С.Ш.Мырҙабулатов 1921 йылда үҙ ҡулы менән яҙған докладта ошо хәленә аптырай биреп тә ҡуя: “Эшем буйынса бөтә кеше тарафынан мин ғәйәр (“отъявленный”) большевик тип танылғанлыҡтан, халыҡ араһында большевистик өгөт-нәсихәт алып барыуым хаҡында оҙаҡламай Башҡортостан Хөкүмәтенә лә еткерә башланылар. Әммә Башҡортостан Хөкүмәте, үҙемә билдәһеҙ ниндәйҙер сәбәп арҡаһында, мине имен ҡалдырҙы һәм мин баяғы эшемде дауамланым”. Бының сәбәбе, минеңсә, Ырымбур большевиктары Цвиллинг, Кобозев, Шәмиғолов, Нуримановтарҙың мәкерле асылын яҡшы белгән большевик Мырҙабулатовтың улар әтмәләгән БВРС-ҡа ышанмай, уға ылығып бармай, шикле ҡурсаҡ уйынын үтәнән-үтә күреүендә, ә вәлидовсылар хәрәкәтенең күпселек халыҡ хәрәкәте икәнлеген шәйләп, халҡы өсөн йөрәге менән янып, гәрсә үҙе, инанған большевик булараҡ, социалистик ирекле үҙ билдәләнеш яҡлы фиҙакәр көрәшһә лә, тормош үҙе көн тәртибенә ҡуйған, “буржуаз милләтсе” вәлидовсылар беренсе булып яулаған Башҡортостан автономияһына күңел төпкөлөнән ихлас теләктәшлек ҡылыуындалыр. Уның ошо ҡарашы һәм тойғолары халыҡтыҡы менән бергә уҡмашҡан, үрелгән, Көньяҡ Урал башҡорттарының дөйөм рухи донъяһын сағылдырған. Сөнки ҡыҙыл гвардиясы Ғариф Бесәнсе улы Сәйфетдинов (Сәнкем-Биктимер ауылынан) 1921 йылда үҙ фекерҙәрен ошолай теркәп ҡалдырған: “Башҡортостан Шураһын ҡыуып таратыуҙары башҡорт ялпыһын ҡаты ҡайғыға һалды. Көтөлмәгән хәлдән рухы төштө күптәрҙең. Ләкин Мырҙабулатов иптәш үҙенең хаттарында беҙҙе йыуатып: “Ваҡытлыса хәлдәр былар бөтәһе. Ваҡытлыса аймылыш. Оҙаҡламай көллөһө асыҡланыр, төҙәтелер. Беҙ, большевиктар, принципиаль рәүештә ваҡ милләттәрҙең ирекле үҙ билдәләнеше яҡлы”, — тип нығыта килде. Һәм бына ошо ваҡытта Мырҙабулатов иптәштең арымай-талмай эшләүе арҡаһында Үҫәргән төбәге большевизм усағына әйләнде”.

Милләттәрҙең Рәсәй эсендәге үҙ билдәләнешкә ынтылышын кире ҡағыу ғәләмәте, ғөмүмән, Урал большевиктарының ҡанына һеңешкән күптәнге сир икәнлеген 1918 йылдың 8(21) февралендә Екатеринбургтағы Урал Өлкә хәрби комиссариатынан совет Рәсәйенең Хәрби эштәр буйынса халыҡ Комиссары Лев Троцкийға атҡарылған белдереүе асыҡ һөйләй:

“Татар һәм башҡорт буржуазияһы Дутов менән тығыҙ берлектә Башҡортостандың һәм Уралдың башҡа төбәктәренең автономияһын иғлан ҡылырға йыйына. Беҙҙең контрреволюционерҙар тарафынан ҡыҙҙырылған был милли мосолман хәрәкәте -- советтарға ҡаршы үтәнән-үтә күренмәле сифатта. Шул уҡ ваҡытта ул Дутов авантюраһына ҡарағанда ла хәтәрерәк янаулы. Өфөлә, мәҫәлән, яҡшы ҡоралланған, тәртипле, автономия иғлан итеү айҡанлы әҙерләнгән биш мең кешелек татар-башҡорт полкы бар. *Татарҙар һәм башҡорттар менән беҙҙең бәрелеш ҡотолғоһоҙ...*

Шулай итеп, өлкә хәрби комиссариаты алдында Дутов башлығындағы контрреволюцияны быуыу һәм Уралдағы Советтар хакимиәтенә янаған татар һәм башҡорт буржуазияһының милләтсе ынтылыштары менән көрешеү бурысы тора.

Хәрби эштәр буйынса комиссар: (ҡултамға).

Комиссар ярҙамсыһы: **Н.Уфимцев**" (Гражданская война в Оренбуржье (1917 — 1919 гг.). Документы и материалы. Оренбург, 1958, 111-се бит).

Автономиясы башҡорттарҙы (ә улар — күпселек!) ҡанға тонсоҡтороп баҫтырыу өсөн, Башҡортостан урыҫтарын ашығыс рәүештә ҡоралландырыу башлана, мәҫәлән:

"Ырымбур Хәрби-Революцион комитетының 1918 йыл 23 февраль ултырышы 12-се һанлы протоколынан күсермә.

Тыңланыҡ:

1) Преображенский заводы делегацияһының контрреволюцияны баҫтырыу өсөн ҡорал һорап Хәрби-Революцион комитетҡа үтенесе.

Ҡарар ҡылдыҡ:

1) 100 мылтыҡ һәм һәр мылтыҡҡа тейешле 25-әр дана иҫәбенән патрондар бирергә" (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, *д*. 393, *л*. 79).

"Бөтә ылыҫ, станица, ҡасаба идараларына, советтарға, комитеттарға, бөтәһенә, бөтәһенә, бөтәһенә!

Революцион Комитет мәғлүмәттәре буйынса, Ырымбур гөбөрнәһе Орск өйәҙе башҡорттары крәҫтиән ҡасабаларына сапҡындар яһай, офицерҙар, юнкерҙар һәм һәр төрлө *сволочтар* менән бергә совет халыҡ хакимиәтенә ҡаршы әтрәттәргә ойоша. Революцияға ҡаршы көрәш алып барыуҙа авантюрасы Дутовҡа ярҙам иткән элекке Башҡортостан Өлкә Советы бында Революцион Комитет ҡарары менән ҡулға алынды.

Революцион Комитет бөтә башҡорттарға һәм уларҙың ойошмаларына кисекмәҫтән ҡоралһыҙланырға, бөтә ҡоралды урындарҙағы Советтарға һәм ҡыҙыл гвардияларға тапшырырға, уларҙа боҫоп ятҡан бөтә офицер һәм юнкерҙарҙы тотоп бирергә һәм юлбаҫарлыҡ сапҡындарын туҡтатырға бойора.

Әгәр өс көн эсендә ошо үтәлмәһә, Революцион Комитет *ҡулға алынған бөтә Башҡортостан Өлкә Советын атасаҡ, совет хакимиәтенә ҡаршы тороусылар рәүешендә шиҡ аҫтына алынған ауылдар артиллерия һәм пулеметтар уты менән ер йөҙөнән һепереп түгеләсәк*[85].

Ырымбур Хәрби-Революцион Комитеты.

Телеграмма 1918 йылдың 5 мартында (иҫке стиль менән 20 февралдә. — Й.С.) киске сәғәт 6-ла һуғылған" (шунда уҡ, *л*. 92).

Үҙҙәрен ҡурсаҡ итеп уйнатыусы Ырымбур большевиктары тарафынан ҡыуып таратылғас, Башҡортостанға (Мәләүезгә) күсенгән БВРС рәйесе

---

[85] һәм бына шундай уҡ икенсе бер документ — 1919 йылда Башҡорт Хөкүмәте Ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сығыуы айҡанлы аҡ "Верховный Главнокомандующий" Колчак штабынан 1919 йылдың 26 февралендә атҡарылғаны: "Беҙгә хыянат ҡылған һәм большевиктар яғына сыҡҡан башҡорттарға ҡарата уларҙың ауылдарын һәм ҡасабаларын бөтә халҡы менән ҡуша юҡ итеүгә тиклем булған иң рәхимһеҙ саралар ҡулланылырға тейеш" (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, *д*. 394, *л*. 20). Тимәк, башҡорттарға ҡарата сәйәсәттә Рәсәйҙең аҡ империяһы һәм ҡыҙыл империяһы араһында һис айырма юҡ икән.

Ғ.Дәүләтшиндың 1919 йылдың 26 июнендә Мәскәүгә Советтарҙың Бөтә Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитетына аттырған белдереүендә Башҡортостандағы ҡанлы ваҡиғаларҙың төбөндә нимә ятҡанлығы фашлана:

“1918 йылдың 3 февралендә 17 кешелек Башҡортостан Өлкә Шураһы (вәлидовсылар хөкүмәте. – Й.С.) ҡулға алына, ә һуңынан Иҙелбаев, Мағазов башында торған әтрәт кулактар Баранов һ.б. тарафынан атыла. Улар Орскиҙа һәм Ново-Покровский ҡасабаһында урыҫтарҙың милли йыйынын саҡыра, йыйын башҡорттарҙың автономияһын булдырыуға ҡаршы сыға. Улар православный Преображенский ревкомы төҙөй, уныһы башҡорттарҙың автономияһына ҡаршы аяҡлана — күсеп килеп төпләнеүсе кулактар, эсерҙар улар: доктор Остренко, Куликов, Правдухин” (ЦГИА Р.Б., ф. 1107, оп. 1, *д*. 75, *л*. 22 — 24). Әйткәндәй, телгә алынған Правдухин (әҙибә *Л*.Сейфуллинаның ире, 1937 йылда репрессияланған), башҡорт халҡын язалаусы палачтарҙың береһе А.Голиков (Аркадий Гайдар) кеүек үк, совет яҙыусыһы Валерий Правдухинға әйләнә. Баймаҡтағы ошо ҡанлы фажиғә оҙаҡламай Башҡортостанда тоҡанасаҡ ҡан ҡойошло граждандар һуғышының башланғысы булды һәм, күренеүенсә, уны Ырымбур большевиктары башланы.

Аҙағыраҡ Башҡорт АССР-ында 1920 йылғы хөкүмәт түңкәрелеше һөҙөмтәһендә Шәмиғолов — Мансырев режимы урынлашҡас, үҙе юҡтан файҙаланып коммунистар партияһынан сығарылған Сөләймән Мырҙабулатов 1921 йылда үҙенең партия ағзалығын тергеҙеүҙәрен һорап ғариза бирә, уны яҡшы белгән башҡорт революционерҙары иһә партияның юғары органдарына тотанаҡлау ҡағыҙҙары тапшыралар. Коммунист, элекке ҡыҙыл партизан Ғариф Бесәнсе улы Сәйфетдинов (Сәнкем-Биктимер ауылынан) ошолай шаһәҙәтнамәләй:

“РКП(б)-ның Өлкә комитетына, Үҙәк Комитетына.

Революцияның тәүге мәленән үк башҡорт массаларының хәсрәттәрен һәм хыялдарын төрлө бәндә төрлөсә аңланы һәм аңлатты. Уҙған 4 йыл һуҙымында Башҡортостанда ниндәй генә сәйәси ағымдар булманы! Күптәр яңылышты, күптәр күрәләтә хата юлдарҙан китте... Мин, коммунизм идеялары өсөн ҡорбан бирергә һәр саҡ әҙер коммунист булараҡ, үткәндәр тураһында, *ул* сәйәси ағымдар һәм эшмәкәрҙәр, уларҙың бер-береһенән ҡайһылай айырылыуҙары тураһында үҙемдең күҙәтеүҙәремде һәм фекеремде асып бирергә тейешмен.

Октябрь революцияһынан һуң, беҙҙең Ырымбур һәм Өфө гөбөрнәләрендә ниҙәр булғанлығы бөтәбеҙгә билдәле. Бер яҡтан, Учредительный собрание комитеттары ойошторолоп, үҙ эшенә ҡыҙыу тотондо, икенсе яҡтан, Октябрь революцияһы шиғарҙарына (*лозунгыларына*) ҡаршы яҫканыусы уғата нығыраҡ реакцион элементтар көсәйҙе. Төрлө миҫалдар ярҙамында улар Октябрь революцияһының һәләкәтле һөҙөмтәләр менән янауын дәлилләргә тырышты, Октябрь революцияһы яҡлыларҙы тантаналы рәүештә мылтыҡ көбәгенән үткәрҙе.

Кем һуң беҙҙең арала, батша сәйәсәте менән иҙелгән, һәр яҡлап артта ҡалған ҡараңғы халыҡ араһында, бөтәбеҙ өсөн аңлайышлы әсә телендә быларҙың барыһын дөрөҫ итеп аңлата, коммунизм рухында беҙҙе тәрбиәләй һәм тәғәйен был төбәктә эшләй ала ине һуң? *Ул* саҡ беҙҙә “Учредителселәр” хакимлыҡ ҡыла, ә

Ырымбурҙа һәм уның төбәктәрендә Ырымбур Мосолман хәрби советы ҡанаты аҫтында ойошҡан мосолман донъяһы хәрәкәт итә ине. Бына тап ошо осорҙа — 1917 йылдың 20 октябрендә Көнбайыш фронттан Ырымбур аша беҙҙең Үҫәргән төбәгенә электән үк беҙгә таныш С.Мырҙабулатов иптәш үҙенең арҡадаштары менән ҡайтып төштө һәм беҙҙә башында Мырҙабулатов иптәш торған сәйәси ағым башланды. “Учредиловсы” иҫке йүнәлеш Ырымбур Каруанһарайында эшләнеп таратыла ине, яңыһы — беҙҙәге Мырҙабулатов иптәш эшмәкәрлегенән. Революцион ялҡын алып ҡайтты ул һәм беҙҙе лә, Үҫәргән төбәге халҡын, революцион хәрәкәткә өндәне. Ауыл балаһы һәм уҡытыусы, ябай һалдат, шул уҡ ваҡытта талантлы өгөт-нәсихәтсе булараҡ, ул беҙҙе яңы хәрәкәткә ылыҡтыра алды һәм уҡытыусыларҙың, фронттан ҡайтҡан һәм революцияға көйләнгән һалдаттарҙың бер өлөшөн большевистик шиғар[86] аҫтында тупланы.

Күпмелер ваҡыт үтә, большевиктар шиғары Орск тимер юлы буйындағы бөтә башҡорт ауылдарын, тип әйтерлек, иңләп ала. Мин дә электән үк Мырҙабулатов иптәште үҙенең революцион түңәрәген ойоштороған большевик булараҡ белә инем, уның эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһынып, Бер-нисә иптәшем менән бергә уға ылыҡтым. Көнүҙәк шиғарҙары уның ошолар ине: “Бөтһөн һуғыш, бөтһөн Учредилка, бөтә хакимиәт — Советтарға!” “Йәшәһен большевизм, иптәш Ленин!” һ.б. Мәғәнәһеҙ һуғыш теңкәләренә тейгән халыҡ ысынлап та был шиғарҙарға ифрат ыңғай ҡараны һәм уның яҡлылары туҡтауһыҙ арта барҙы.

Октябрь түңкәрелешенән һуң, Ырымбур тирәһендә большевизмға ҡаршы көрәш көсәйә. Был реакция башында казаксылыҡ һәм уға буйһонған Ырымбур Мосолман хәрби советы тора ине. Каруанһарайҙағы Башҡорт Үҙәк Советы һәм Мосолман хәрби советы араһында ыҙғыш башланды. Башҡорт Советы Башҡортостан автономияһын иғлан ҡыла һәм үҙ ғәскәрен төҙөргә теләй. Мосолман советы беҙҙәм мосолман хәрби көсөн тарҡатыуға ҡаршы нәфрәт белдерә. Көрәш икеһенең дә файҙаһына булмағанса хәл ителә: Дутов тимер ҡулы менән Ырымбурҙа бойора һәм большевизмға ҡаршы аяҡлана. Большевиктар йәшеренергә, подпольеға китергә мәжбүр була; Мырҙабулатов иптәш, йыш урын алмаштырып, Орск ҡалаһы һәм Үҫәргән ылыҫы араһында боҫоп йөрөй, беҙгә йәшерен күрһәтмәләр бирә, йәшерен өгөт-нәсихәт алып бара. Ниһәйәт, Дутов һәм уның арҡадаштары ҡыйратыла, Мосолман хәрби советы ҡыуып таратыла, ләкин, һис бер көтмәгәндә, “мосолман хәрбисоветсылар” (татар буржуазияһы. – Й.С.) үҙҙәренең аҡ төҫтәрен ҡыҙылға алмаштырып, үҙҙәрен большевик тип иғлан ҡылып, элекке эшмәкәрлектәренең бөтөнләй киреһен ҡылырғы тотоналар, элекке уңышһыҙлыҡтары өсөн үс алып, Башҡорт Советына ябырылалар.

Башҡорттар араһында революцион большевик түңәрәктәре ойоштороу осоро ине был. Башҡорт Советын ҡыуып таратыу башҡорт массаларына ҡотоҫкос ауыр тәьҫир итте. Көтөлмәгән хәлдән күптәр төшөнкөлөккә бирелде. Һәм бына ошо ваҡытта Мырҙабулатов иптәштең арымай-талмай эшләүе арҡаһында Үҫәргән төбәге большевизм усағына әүерелде. Уның даими эш урыны (уҡытыусылыҡ) булған 1-се Үҫәргән ылыҫында большевиктар ойошмаһы асыҡтан-асыҡ һәм рәсми төҫтә йәшәп килде, ул “ үҙ теләкле йәштәр түңәрәге” тип аталып,

[86] Шиғар — лозунг.

программаһы — большевиктар программаһы ине. Башҡа ылыҫтарҙа ячейкалар йәшерен эшләне. Мырҙабулатов һәр саҡ “Большевик” ләҡәбе менән ҡултамға ҡуйыр, шуға күрә уны ул эш йәйелдергән төбәк кешеләре, хатта бала-сағаға тиклем, тап ана шулай “Большевик” тип атарҙар ине.

Мырҙабулатов иптәш, уҡытыусы булараҡ, бер ниндәй ҙә башҡа вазифалар биләмәне, ләкин халыҡтың, бигерәк тә һалдаттарҙың, бөтә йыйылыштарына ла килә һәм фекер алышыуҙар менән етәкселек итә ине. Шуға күрә ләҙ, большевиктар Ырымбурҙы алыу менән үк, Ырымбур тимер юлы буйындағы башҡорт массалары үҙҙәре теләп Ҡыҙыл Гвардияға яҙылдылар, улар бигерәк тә Мырҙабулатов иптәш шәхсән үҙе ҡайнап йәшәгән 1-се һәм 6-сы Үҫәргән ылыҫтарында күп булды. Ҡайһы бер урындарҙа ҡыҙыл гвардиясылар йәмһеҙ ҡыландылар[87], шуның менән халыҡ нәфрәтен ҡуҙғаттылар — Мырҙабулатов иптәш был хәлдәр менән һис килешә алманы һәм үҙенең хаттары менән уларҙы артабан булдыртмаҫҡа тырышты. Бында мин уның үҙемдә һаҡланып ҡалған, беҙҙең өсөн тарихи булған бер хатын килтерә алам: «Ғариф иптәш! Күп урындарҙа беҙҙең иптәштәребеҙ революцион эштә хата аҙымдар яһай, бигерәк тә *Абдулхай Батталов*[88]. Әгәр был юл менән китһәк, иртәгә үк алдыбыҙҙа ҡанлы йәштәр ағыҙған хисапһыҙ йөҙҙәр хасил буласаҡ. Беҙгә үҙебеҙҙең элекке план буйынса барырға, ойошҡан килеш, күпселек халыҡты үҙебеҙҙең яҡҡа ылыҡтырырға һәм улар ярҙамында өҫтөбөҙҙән революция дошмандарын һелкеп ташларға кәрәк. Әгәр ҙә ки массаларға таянмаһаҡ, ә алдан ныҡлап уйламайынса анархистарса хәрәкәт итһәк, ул саҡта халыҡ үҙе беҙҙе алып бираҡтырасаҡ. Ошоно һәр саҡ күҙ алдында тоторға һәм әҙәпле, һаҡ хәрәкәт итергә кәрәк. Ҡулыңды ҡыҫып — Большевик. 1918 йылдың 10 феврале”.

Датанан күренеүенсә, С.Ш.Мырҙабулатов Орскиҙағы ҡыҙыл гвардиясыларҙың Баймаҡтағы Мағазов кешеләренә ҡаршы мәкерле әҙерлектәрен ҡанлы фажиға булмаҫы элек киҫәтә, ләкин...

“Өҫтә телгә алынған Батталов иптәш, — тип асыҡлыҡ индереп дауамлай Ғ.Сәйфетдинов, — ул саҡта Үҫәргәндә ҡыҙыл гвардия әтрәтенең башлығы ине, һуңынан ул Эстәрлетамаҡта Башглавмилиция башлығы вазифаһында вафат булды” (ЦГИА Р.Б., ф. Р-1107, оп. 1, *д.* 113, *л.* 10). Башҡорт АССР-ы тарихында шаҡтай эҙ ҡалдырған, ҡағыҙҙарҙа Ғәбдел-Әхәт Садиҡ улы Сәйет-Батталов, Ғәбделхәй (Абдулхай) Батталов (Баталов, Батулов), Арыҫлан Баталов тип төрлөсә яҙылып йөрөгән был шәхесте ҡайһы бер тарихсылар, шул исем-ләҡәптәре буйынса өс кешегә һанап, тупаҫ хата ебәрә. Уларса барһаҡ, Сталинды ла (Джугашвили, Коба, Сталин), Ленинды ла (Ульянов, Иванов, Ленин) бер юлы өсәр кеше итеп ҡарарға тура килер ине...

Ырымбур большевиктарының башҡорт халҡын ҡанға батыра башлауын үҙ халҡының тоғролоҡло улы булған коммунист С.Ш.Мырҙабулатов тыныс ҡына кисерә алмай, әлбиттә -- репрессияларға сик ҡуйҙыртыу теләге менән Ырымбурға юллана. Бына уның үҙ ҡулы менән 1921 йылдың 28 ғинуарында яҙып биргәне: “Үҫәргән кантонында бер талай эшләгәс, *Ырымбурға Цвиллинг һәм Кобзев*

[87] Баймаҡ төбәгендәге башҡорт әтрәтен атыу күҙ уңында тотола.

[88] Йәғни беҙ белгән Ғәбдел-Әхәт Мөхәммәт-Садиҡ улы Сәйет-Батталов.

иптәштәргә барҙым, ҡыҙыл гвардия ойоштороу өсөн урындарға ебәрелгән иптәштәрҙең яңылыш эш ҡылыуҙарын уларға күрһәттем. Шунан һуң улар минең үҙемә ҡыҙыл гвардияны ойошторорға тәҡдим итте*л*әр, *л*әкин мин ҡабул ҡылманым, ә өгөт-нәсихәт эше алып барырға йөкл*ә*мә алып ҡайттым" (шунда уҡ, *л*. 2). Бынығы инде ҡанлы Баймаҡ ваҡиғаларынан һуң һәм тап шуға бәйле булғанлығына шик юҡ.

Ырымбур большевиктарының һәм, ғөмүмән, *Л*енин партияһының боҙоҡ милли сәйәсәте арҡаһында Башҡортостанда граждандар һуғышы ҡабынғас, С.Ш.Мырҙабулатов та, уның үҙе әйтмешл*ә*й, атаһының яңғыҙ атын менеп сығып китә *л*ә ике йыл буйына өҙлөкһөҙ һуғыш ҡырҙарында аҡтарға ҡаршы көрәшә. 1918 йылдың икенсе яртыһында беҙ уны, фиҙакәр большевик булараҡ, көньяҡ Башҡортостандағы Ҡыҙыл Армия ғәскәри бүлектәренең тилбер ойошторо*у*сыһы, сәйәси эшмәкәре, яугире итеп күрәбеҙ. Сөнки советтарға ҡаршы чехословактар фетнәһе һәм аҡ казактар хәрәкәте көсәйгәс, ул үҙенең мөғәллим арҡадаштарын һәм урындағы ҡыҙыл гвардиясыларҙы яҡындағы Төркөстан фронтына -- Ырымбурҙан сигенгәндән һуң Орск ҡалаһында аҡ ғәскәрҙәргә ҡаршы тороусы ҡыҙылдарға ҡушылырға эркелдерә, Орск өсөн бер-нисә айға һуҙылған ҡаты һуғыштарҙа мылтыҡ-ҡылыс тотоп үҙе *л*ә ҡаһармандарса алыша. Үлемесле киҫкен мәлдәрҙә ҡаушап төшкән ҡыҙыл яугирҙәрҙе үҙенең шәхси батырлығы, ялҡынлы коммунист һүҙе менән рухландыра ул. Өҫтә килтерелгән Ғариф Сәйфетдинов шаһәҙәтнамәһенән тағы бер өҙөк:

"1918 йыл баштарында чехословак хәрәкәте башланды, Ырымбур төбәге халҡы *л*а баш күтәрҙе. Беҙҙең ҡыҙыл гвардиясылар Көнсығышҡа сигенде. Мырҙабулатов иптәш үҙенең хаттарында беҙгә Төркөстан фронтына китергә кәңәш итә. Бына бер хатының йөкмәткеһе: "Ғариф Сәйфетдинов, Ғәбделәхәт һәм башҡа иптәштәр! Беҙҙең бөтәбеҙгә *л*ә көнсығыш йүнәлешендә күсенергә тура килә. Кем беҙҙең менән булды, беҙҙең менән эшл*ә*не — бөтәбеҙгә *л*ә Орск ҡалаһына юлланыу фарыз. Уҡытыусылар "курстарға кереү өсөн" һылтауы менән китһендәр. Ә беҙҙең ҡораллы иптәштәр, паролебеҙгә ярашлы, күсенеүселәргә юл асыуҙа ярҙамлашырға тейеш. Беҙ тиҙҙән Үҫәргән төбәгенән китәбеҙ. Бөтәгеҙҙең ҡулын ҡыҫам. "Большевик" иптәшегеҙ. 1918 йылдың 18 июле".

Уның күрһәтмәл*ә*ренә ярашлы, бөтә иптәштәр ҙә, тип әйтерлек, Үҫәргән төбәгенән китәл*ә*р. Был план дошмандарға *л*а мәғлүм булғандыр, сөнки юлда ҡайһы бер уҡытыусыларға һөжүм итте*л*әр. Мәҫәл*ә*н, Ғимадислам Әхмәров[89] иптәш казактар ҡулына эл*ә*кте һәм йыртҡыстарса үлтерелде. Мырҙабулатов иптәш тарафынан элемтә өсөн ҡалдырылған бер-нисә әҙәм тап шулай уҡ үлтерелде йәки үлемесле туҡмалды. Казактар ҡулы аҫтында тороп ҡалған ҡайһы берҙәре[90] йәшеренеп һәм, ниһәйәт, ҡасып китеп, 1919 йылда ғына килеп ҡушылдылар беҙгә". Аҡ казактар һәм башҡорттар ҡамауын көскә ярып сығып, Сөл*ә*ймән батыр хеҙмәт иткән Ырымбур һәм Орск ҡыҙылдары көньяҡҡа — Аҡтүбәгә сигенә, 1918 йылдың 28 сентябрендә Ә.Вәлидовтың аҡ башҡорт

---

[89] Ырыҫҡол ауылының "большевик-мулла"һы, хәҙерге Йәнсура районының "Һаҡмар" совхозы үҙәгенән Йәнсура (Бәкәтәр) ҡасабаһына барған юлда аҡтар һағауылы тарафынан атып үлтерелгән.

[90] Мәҫәл*ә*н, Сәнкем-Биктимер ауылынан большевик Ғөбәйҙулла мәғзүм Ураҙов, Ҡөрьәнде яттан белеүсе. 1920 йылда Башҡортостан Ревкомы сәркәтибе була.

ғәскәрҙәре ҡаланы ала; дөйөм аҡтар армияһы тарафынан йәнә Силәбе, Екатеринбург ҡалалары, Өфө, Ырымбур, Самара гөбөрнәләре һәм Пермь гөбөрнәһенең башҡорттар йәшәгән көньяҡ өлөшө ҡыҙылдарҙан азат ителә. Әммә 1918 йылдың июлендә Иҙел буйындағы бөтә совет ғәскәрҙәре дөйөм Көнсығыш фронтына берләштерелә һәм советтарҙың иң мөһим хәрби көс-ғәйрәте шул йүнәлешкә туплана. Сентябрҙә ҡыҙыу һөжүмгә күсеп, Ҡазан, Сембер ҡалаларын, октябрҙә — Самараны һәм Сызранде, ә ноябрҙә Өфө менән Силәбене ала, аҡтарҙың йәйге еңеүҙәре көҙөнә үк юҡҡа сыға. Был осорҙа С.Ш.Мырҙабулатов Орскиҙы ташлап ҡасҡан ҡыҙыл ғәскәрҙәр сафында Аҡтүбә ҡалаһына сигенеп, йәнә ҡамауҙа ҡала. Шуныһы ла фәһемле: бында ла улар, тап Орскиҙағы кеүек үк, “ҡыҙыл башҡорттар” сифатында үҙҙәренең туғандары аҡ башҡорт һәм аҡ казак ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыша.

Батырыбыҙ ҡамауҙағы аслыҡ-яланғаслыҡты, һәләкәтле алыштарҙы алғы һыҙыҡта ябай яугирҙәр менән бергә кисереп, йыш ҡына ут эсенә үҙе башлап инеп, һынмаҫ ғәйәрлеге менән ҡыҙыл әрмистәрҙең рухын күтәрә. Шул уҡ ваҡытта ул көслө сәйәсмән, талантлы өгөт-нәсихәтсе булып та ҡала бирә: марксизм-ленинизм тәғлимәттәрен урыҫсанан башҡортсаға ауҙарып таратыу, мосолман яугирҙәрен коммунистар партияһы сафына әҙерләп керетеү буйынса арымай-талмай эшләй. Ғариф Сәйфетдинов ошолай яҙа:

“Чехословак хәрәкәте көсәйгәндән көсәйҙе. Казактар тупландылар, беҙгә һөжүм иттеләр. Беҙ Орскиға сигенәбеҙ. Бер талай ваҡыт Батталов[91] иптәш Орск төркөмөнөң башлығы булды. Орск һәр яҡлап казактар менән сорнала. Ҡайһы бер ҡыҙыл әрмистәр ҡаса, шуның менән беҙҙе хәлһеҙләндерә. Ҡыҙылдарҙың рухы ҡаҡшай Орскиҙа. Ул рухты Мырҙабулатов иптәш һәм арҡадаштары өҙлөкһөҙ өгөт-нәсихәттәре менән нығыта. Егерме бишләп уҡытыусыны үҙе тирәһенә туплап, ҡоралландырып, үҙе алдан башлап һуғышҡа әйҙәй. Ҡыҙыл яугирҙәрҙең рухы күтәрелә, өгөт-нәсихәт эштәре ҡеүәтләнә. Резервтарҙан һәм төп көстәрҙән ярҙамһыҙ ҡалған аҙ һанлы ҡыҙыл ғәскәр ҡамаулы Орскиҙа оҙаҡ ҡала алмағанлыҡтан, ҡамауҙы йырып, Аҡтүбә ҡалаһына барып керәбеҙ. Тап бына шунда Мырҙабулатов иптәш үҙенең бер-нисә йөҙ генә башҡорт арҡадаштары менән бергә төп эште башҡарҙы. Ул, коммунистар партияһының урыҫ телендә яҙылған программаһын һәм шиғарҙарын башҡорттарҙың аңламауын иҫәпкә алып, үҙенең бер килке иптәштәре менән бергә уларҙы башҡорт теленә тәржемәләне, типография юҡлыҡтан, уларҙы ҡулъяҙма хәлендә яугирҙәребеҙ араһында таратты. Тәржемә эштәрендә Әхмәтшин, Хөсәйенов, Мусин, Мырҙабулатов иптәштәр ҡатнашты.

Мырҙабулатов иптәш, төп көстәргә ҡушылғанға тиклем, Аҡтүбә ҡалаһында үҙенең арҡадаштары менән бергә ябай ҡыҙыл әрмис сифатында эшләне. Ҡыҙыл гвардиясылар уларҙы күп тапҡырҙар командалыҡ һәм башҡа вазифаларға күтәрҙе, ләкин улар, ҡулдарына ҡорал тотоп фронтта булыу өсөн, ул вазифаларҙан баш тартты. Беҙгә уларҙың маҡсаты асыҡ ине: массалар араһында ҡалыу, сөнки яугирҙәр араһында үҙ теләклеләрҙән башҡа мобилизацияланғандары ла бар ине. Элемтә өҙөлөү сәбәпле, кейем-һалым да,

[91] Беҙгә мәғлүм Ғәбделәхәт Мөхәммәтсадиҡ улы Сәйетбатталов.

аҡса ла, башҡа кәрәк-яраҡтар ҙа юҡ ине. Шуға күрә ябай яугирҙәр араһында ҡәнәғәтһеҙлек көсәйә, уларҙы инандырыу һәм тынысландырыу өсөн, шулар кеүек үк ябай яугирҙәр исеменән һөйләргә кәрәк ине, һәм бына тап ошо бурысты Мырҙабулатов иптәш үҙенең төркөмө менән үтәне ләкин”.

Коммунист С.Ш.Мырҙабулатовтың әлеге Ғариф Сәйфетдинов әйткән өгөт-нәсихәт төркөмө, үҙҙәренең Аҡтүбә фронты ҡыҙыл ғәскәрҙәре араһында эш алып барыуҙан тыш, фронт аръяғындағы аҡтар сафында быларға ҡаршы һуғышыусы башҡорт полктарында ла йәшерен өгөт-нәсихәтен көсәйтә, ҡыҙылдар яғына сығырға өндәй уларҙы. Мырҙабулатов өгөтсөләре (заманында Сәнкем-Биктимер мәҙрәсәһендә ҡаҙаҡтар менән бергә уҡыған һәм ҡаҙаҡ телен, йолаларын яҡшы белгән кешеләр), ҡаҙаҡ далаларына ла үтеп инеп, Ырғыҙ, Турғай өйәҙҙәре ҡаҙаҡтарын аҡрынлап советтар яғына ауыштыра. Билдәле, ҡыҙылдарға ҡаршы Алаш-Урҙа менән берегеп көрәшеүсе Башҡорт Хөкүмәте лә йоҡлап ятмай. “Шул үк ваҡытта, — тип яҙа “Хәтирәләр”ендә (254-се бит) Әхмәтзәки Вәлидов Туған, — Алаш-Урҙа менән бергә Аҡтүбә фронтында еңеп, Төркөстан көстәре менән берләшеү юлындағы тырышлығыбыҙҙы ла кәметмәнек. Турғайҙа беҙҙән Ғәбделхаҡ Ғәбитов менән ҡаҙаҡ Азимбәк Биремжанов үҙҙәрен аямай эшләне. Алаш-Урҙа менән бәйләнеште, ул саҡ тимер юл аша элемтә ҡатмарлашҡанлыҡтан, атсапҡын менән тәьмин иттек. Ваҡиғалар ҡурҡыныс бер тиҙлектә үҫеүен дауам итте. Һамар, Аҡтүбәләге ҡыҙылдар, Дутов һәм Колчак кеүек дүрт дошман араһында ҡалдыҡ. Был ҡатмарлы дәүерҙә бәғзе ышанысһыҙ элементтарҙан да һаҡланыу кәрәк ине”...

1919 йылдың февралендә Башҡорт Хөкүмәте, Совет Хөкүмәте менән Килешеү төҙөшөп, ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң (бер үк ваҡытта, башҡорттар менән алдан һөйләшеп ҡуйыу буйынса, ҡаҙаҡтарҙың Алаш-Урҙа Хөкүмәте лә советтар яғына сыға), Аҡтүбә фронты бөтөрөлә; С.Ш.Мырҙабулатов һәм арҡадаштары, урындарҙа Советтар хакимиәтен тергеҙеү өсөн, үҙҙәренең Орск өйәҙенә ҡайтарыла. Ҡыҙылдарҙың 1-енсе армия командиры Г.Д.Гай яҙыуынса, “Башҡорт корпусының ғәскәри бүлектәре, Муса Мортазиндың кавалерия полкынан тыш, аҡрынлап ҡына Эстәрлетамаҡҡа, ә унан — Тоцкая станицаһы төбәгенә (Тоцкий лагерҙарына) күсерелде, шунда яңынан ҡыҙыл башҡорт полктары ойошторола башланы. Был полктар 1919 йылдың йәйендә үк Саранскиҙа ойошоп бөттө. Үҙгәртеп ҡороуҙан һәм таҙартыуҙан һуң, башҡорт йәйәүле һәм кавалерия полктары Петроград яныңа генерал Юденичҡа ҡаршы ебәрелде” (ЦГАОО Р.Б., ф. 1832, оп. 3, д. 162, л. 14 — 15).

В.И.Ленин етәкләгән Совет хөкүмәтенең башҡорт халҡына ҡарата үткәргән мәкерле сәйәсәтен бер йәшерен документ асып һала:

“Протокол закрытого заседания президиумов губисполкома, губкома, высшего командования фронта, 1-ой Армии и Оренбургских ответственных работников с участием товарища Калинина.

Повестка: 2. Башкирский вопрос.

Тов. Калинин. Вопрос о доверии или недоверии к Оренбургу Центром нет и быть не может. Автономия Башкурдистана – буфф (көлкөлө ҡыланыу, мәсхәрә. – Й.С.) для восточных народов. Мы башкирам не верим, гоним их солдат под Питер (ҡырҙыртыуға, әлбиттә. – Й.С.). Попытка Оренбургского губкома РКП создать

башкирский партийный центр крайне важна и нужно, чтобы она дала реальные результаты.

Нам надо играть в их автономию, повсюду пролезать к ним и коммунизмом парализовать корни и остальные вредные стороны" (ЦГАОО Р.Б., ф.9776, оп.2, д.393, л.40).

Ғазраилдан да хәтәр – бер юлы тоташ халыҡтың йәнен алыусылар!..

1919 йылдың мартында советтарҙың Көнсығыш фронтында Колчак армияһы көслө һөжүмгә күсә, Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре, ҡаршы тора алмай, Самараға табан сигенә башлай. Үҙенең Орск өйәҙе 1-се Үҫәргән ылыҫында урындағы советтарҙы аяҡҡа баҫтырып эшләп йөрөгән ҡыҙыл яугир Сөләймән батыр Мырҙабулатовты ла утлы өйөрмә ҡыҫҡа ғына ваҡытлы тыныс тормошонан кире ҡабат һурып ала: тимер юлдан Орск – Ырымбур – Самара йүнәлешендә тәртипһеҙ сигенеүсе ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең именлеген тылдан тороп тәьмин итеү өсөн ҡораллы әтрәт тупларға һәм тимер юлды киҫергә ынтылған аҡтарҙы тотҡарларға. Ҡаһарман үҙе ваҡиғаларҙы ошолайыраҡ тасуирлай: "Мин, аҡтар тарафынан ҡыйратылған ҡыҙыл ғәскәри бүлектәрҙең Эйек буйындағы ҡалдыҡтарын йыйнап, шулар менән бергә Эйекте кисеп, бөтә борам кәмәләрен яндырырға бойорҙом, шул арҡала дошман, Эйек менән Һаҡмарға килеп терәлгәс, ташҡын һыуҙы кисә алмай, ун көн торҙо тотҡарланып; шунан Һарыҡташҡа киттем, Орскиға һәм Ырымбурға телеграммалар һуғып, ғәскәр һораным. Орскиҙың күренекле коммунистары, үҙ вазифаларын ярҙамсыларына ташлап ҡалдырып, Ырымбурға тайған икән. Минең һорауға Ырымбурҙан бер пулеметлы утыҙ яугир ебәрҙеләр. Булған әтрәт менән бер талай ваҡыт Һарыҡташ һәм Дубиновка станцияларының араһындағы тимер юл һуҙымын аҡ казактар һөжүменән ҡурсалап, аҙаҡ Ырымбурға сигендек"...Эйек буйындағы Сөләймән Мырҙабулатовҡа бәйле был дәһшәтле ваҡиғаларҙың шаңдауы шуларҙың шаһиты булған Ғәбиҙуллә Биишевтең ҡасандырғы көндәлектәренән ҡыҙы тарафынан буталсыҡ итеп күсерелгән инша рәүешендә 90 йыл үткәс донъяға сығарыла: "Шулай бер көн Нуҡай ауылына ҡыҙылдар килеп инә. Ҡотҡосолар ҡотортоуы арҡаһында ауыл кешеләре төнө менән ҡыҙылдарҙың эйәр өҙәңгеләрен, айылдарын ҡырҡып сығалар ҙа *үҙ белдеге менән йөрөгән Сөләймән исемле кешегә хәбәр итәләр.* Ул шунда уҡ ауылға килеп, йоҡлап ятҡан, атһыҙ ҡалған ҡыҙылдарҙы ҡырып сыға. Ҡыҙылдарҙан бер-нисә кеше генә ҡасып ҡотола. Ә Сөләймән әтрәте менән Темәс яғына китә" (Башкирское воинство на защите интересов России. Уфа, 2007, 94-енсе бит). Бында, күренеп тора, ҡыҙыл Сөләймән ҡырған бәндәләрҙе "ҡыҙылдар" тип атау яңылыш.

Сөләймән батырҙың беҙгә таныш яугире Ғариф Бесәнсе улы Сәйфетдинов иһә ошолай яҙған: "...Беҙҙең фронт өҙөлдө, тип әйтерлек. Орск өйәҙендәге ҡыҙылдар Орск тимер юлы буйлап ағылды. Ырымбурға ҡарай сигенеүсе шул ҡыҙылдар тимер юл буйлап шылырға өлгөрә алмай ҡалды, бер-нисә аҡ казак полкы Һаҡмар йылғаһы буйлап Һарыҡташ, Дубиновка станцияларына ташланды. Һаҡмар йылғаһының ҡотороп ташҡан мәле ине. Тимер юлды казактар ҡулға төшөрһә, Орскиҙағы ҡыҙыл ғәскәрҙәр бүленеп ҡалыр ҙа ҡамауға алыныр, йәки бөтә эвакоорудиеларҙы һәм ылауҙы Дутовҡа ташлап ҡалдырырға тура килер ине.

һәм бына шул көсөргәнешле мәлдә Мырҙабулатов иптәш үҙенең ҡорҙаштары менән ярҙамға килеп өлгөрҙө. Ул үҙ кешеләре менән һаҡмар аша һалынған күперҙәрҙе шартлата, йылғаларҙағы борам кәмәләрен юҡ итә лә тимер юлды (атап әйткәндә, Дубиновка һәм Һарыҡташ станцияларын) аҡтарҙан һаҡлай. Уның ныҡышмалы үтенесе буйынса, Ырымбурҙан ярҙамға ҡырҡ кеше, бер пулемет ебәрелә һәм Мырҙабулатов иптәш бөтә яр буйҙарын һаҡлауҙы ойоштора, аҡ казактарҙан Һаҡмарҙы кистертмәй тота. Ғәжәп ҡеүәтлелек күрһәтә ул бында. Дутовҡа ярҙам ҡылған казактарға штраф һалына, халыҡ араһынан бөтә ҡорал һәм бомба монаяттары йыйып алынып, ҡыҙыл яугирҙәр ҡоралландырыла, яр буйҙарын ҡурсалаусы сапҡын эскадрондар төҙөлә, уларҙың төрлө хәйләкәр маневрҙары дошманды аймылыш ҡыла, сиркәү һәм мәсет манараларына күҙәтсе постар ҡуйыла. Бәләкәй генә төркөм менән ике аҡ казак полкы ҡыҫымын Һаҡмар аша үткәрмәйенсә тотоп тора ул ике аҙна буйынса, шулай итеп. Орскиҙа ҡалған ҡыҙыл ғәскәрҙәр шул арала Мырҙабулатов ҡурсалауында Ырымбурға эркелеп, бер өлөшө иһә уға (Мырҙабулатовҡа) ҡушыла ла эшелондарҙы арттан һаҡлап һуғыша-һуғыша сигенә Ырымбурға. Һыуыҡта көн-төн баткаҡ йырып, ямғыр аҫтында күшегеп, ал-ял белмәй эшләү Мырҙабулатов иптәштең һаулығына эҙһеҙ ҡалмай, әлбиттә: Ырымбурҙа ул ҡаты ауырып йығыла ла дауаланырға Самараға оҙатыла”. Был ваҡытта ул, һыналған һәм физәкәр коммунист булараҡ, Ырымбурҙағы 1-се Ҡыҙыл Армия (сәрдары Гай) штабының сәйәси бүлегенә эшкә беркетелгән була. Аҙаҡ мәғлүм булыуынса, Октябрь түңкәрелеше осоронан Ырымбур большевиктарының күптәренә билдәле С.Ш.Мырҙабулатовты Көнсығыш фронт етәкселеге айырым иҫәпкә ала һәм Башҡорт Хөкүмәте менән ике-ара Килешеү буйынса яңыраҡ ҡына танылған Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республикаһына яуаплы эшкә тәғәйенләүҙе күҙ уңында тота. Шул йәһәттән Әхмәтзәки Вәлидовҡа ваҡытлыса Сарански ҡалаһында урынлашҡан совет башҡорт хөкүмәтенең ғәҙәттән тыш комиссияһы (БЧК) рәйесе итеп үҙҙәренең ышаныслы кешеһе коммунист Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовты тәҡдимләйҙәр ҙә Вәлидовтың бер шарты менән килешәләр — Мырҙабулатовты һынау мөҙҙәте үткәнгә тиклем рәйес вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп алырға. Вәлидовтың был һаҡсыллығына 1917 — 1918 йылғы Ырымбурҙағы ҡайнап торған башҡорт милли хәрәкәте осоронда Сөләймәндең уға килеп ҡушылмауы, һуңғы сәғәттәргәсә Ырымбур большевиктары араһында ҡалыуы сәбәпсе булғандыр... Шулай итеп, шул уҡ айҙа ВЦИК вәкилдәре рәүешендә Н.В.Зарецкий менән башҡорт коммунисы Харис Йомағоловты ла күҙ-ҡолаҡ булырға БВРК-ға юлландырғандары кеүек үҡ, йәшермәйек, Сөләймән Мырҙабулатовты ла партияһы йәш республика нигеҙҙәрен Мәскәү сәйәсәтенә йәтешләп һалышырға ебәрә. Эйе, иң беренсе сиратта Мәскәү сәйәсәтен үткәрттерергә...

С.Ш.Мырҙабулатов үҙенә хас егәрлелек менән яңы эшкә тотона. Бер үҡ ваҡытта ул РКП(б)-ның Башҡортостан республика ойошмаһының урындарҙағы тәүге ячейкаларын төҙөшөүҙә лә үҙенең коммунист ҡорҙашы — Башревком рәйесе һәм бер үҡ ваҡытта ВЦИК-тың һәм РКП(б) Үҙәк Комитетының Башҡортостандағы вәкиле Х.Й.Йомағолов менән ҡулға-ҡул тотошоп эшләй; бик

күп башҡорт уҙамандары партияға туранан-тура Мырҙабулатовтың тәҡдиме, улар өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыуы аша ҡабул ҡылына (хәҙерге коммунистар иғтибарына!). Шул йылдарҙың шаһиты (коммунист) Ғ.М. Рәхмәтуллин Сөләймән Мырҙабулатовтың тап Саранск осоро тураһында 1921 йылда ошолай яҙып ҡалдырған: "...Мырҙабулатов иптәш бында ҡыҙыл әрмистәр араһында *коммунистар партияһы исеменән эш итеүсе һәм партия программаһы менән таныштырыусы берҙән-бер өгөтсө булды.* Бына шуға күрә ләй уны башҡорт ярлылары революция түңкәрелешенең иң тоғро улдарының береһе һананы, шулай уҡ хәҙер ҙә башҡорт ялпыларының тормошон еңеләйтәсәк яҡты юлға алып барыусы тоғро етәксеһе һанай. Шуға ла уның партия эшмәкәрлеге башҡорттар араһында ғәжәп ҙур тәьҫирле, партия өсөн дә ифрат ҡиммәтле булды. Тап уның тәьҫире һәм өгөтө арҡаһында ошоғаса бик күп башҡорт ярлылары партия сафтарына ылыҡтырылды, әгәр шулай артабан да дауам итһә, киләсәктә уғата ҙурыраҡ уңышҡа ирешер инек. Бөтә намыҫлы башҡорт коммунистары ғына түгел, ә башҡа милләтле иптәштәр ҙә ысын йөрәктән уның үткән эшмәкәрлеге тураһында, коммунистик идеалдарҙы башҡорт ялпылары араһында таратыусы ҡиммәтле эшмәкәр булыуын хәбәр итерҙәр, тип ышанам" (ЦГИА Р.Б., ф. Р-1107, оп. 1, *д*. 113, *л*. 12).

Шул рәүешле, 1919 йылда БВРК-лағы иң яуаплы вазифаларҙың икеһен "Мәскәүҙең ике ҡулы" биләй. Әммә был ике ҡул (Йомағолов, Мырҙабулатов), Мәскәүебеҙҙең бөйөк юлбашсылары һис кенә ләй көтмәгәндә, РКП(б) Үҙәк Комитетының йәшерен мәнфәғәттәрен төптө онотоп, Башҡортостан автономияһын нығыту яғына ҡайыра башлай; өҫтәүенә, дәүләтселлек өлкәһендә генә түгел, ә партия ҡоролошонда ла ирекле үҙ билдәләнешкә ынтыла. Башҡортостан хөкүмәтен күҙәтергә һәм йүнәлтергә Йомағолов менән бергә шымсы-вәкил итеп юлландырылған инструктор-ревизор Н.В.Зарецкийҙың Мәскәүгә ҡайтҡас та яҙып тапшырған һәм 1919 йылдың 29 октябре менән тамғаланған докладына ҡарағанда, унда башҡорт автономияһы рухындағы "Совет Башҡортостаны коммунистарының Ваҡытлы Үҙәк Бюроһы" төҙөлгән (5 кешелек, араларында Н.В.Зарецкий ҙа бар) һәм уның үҙ органы — "Башревком һәм Совет Башҡортостаны коммунист-большевиктарының Үҙәк Бюроһы Хәбәрҙәре" тигән, редколлегияһында Х.Йомағолов та ағза булып торған үҙ гәзите булдырылған... Инструктор-ревизор шул эштәргә бәйле ныҡ киҫәтә Мәскәү түрәләрен: "Вәлидовта Ҡырғыҙ[92] Ревкомы менән берләшеү ынтылышы бар (бына ни өсөн аҙаҡ Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан араһына Ырымбур, Силәбе, Свердловск буфер өлкәләре ҡороп айырғандар туғандаш ике халыҡты! – Й.С.) һәм әгәр Башревкомдың Ырымбурға күсеүенә юл ҡуйһаҡ, был хәлдәр был республикаларҙың ҡушылыуына мөмкинлек бирәсәк, йәғни, минең фекеремсә, улар менән айырым-айырым эш ҡылыу еңелерәк, шуға күрә Башревкомдың Ырымбурға күсеүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәктер... "Башҡорт юлбашсылары" тип йөрөтөлгәндәргә әйләнеп ҡайтып, шуны әйтәм: беҙгә улар менән яҡшы мөнәсәбәттә ҡалыу икеле... Әммә бөтә был эш, һис шикһеҙ, автономия флагы аҫтында барырға тейеш" (ЦГАОО Р.Б., ф. 9776, оп. 2, *л*. 38 — 40). Һәм шул мәкерле

[92] Ҡырғыҙ — хәҙерге ҡаҙаҡ.

эштәрен тырышып үтәйҙәр ҙә: Ракай (Рычков К.М.) 23.01.1920 Өфөнән Мәскәүгә -- Ленин, Троцкий, Енукидзе иптәштәргә һуҡҡан телеграммаһында былай ти: "...русские власти и группа стали усиленно информировать центр неправильно, а на месте держали себя самым вызывающим образом, благодаря чему был вызван целый ряд недопустимых недоразумений, особенно ярко выявились враждебные отношения с приездом товарища Артема... Накануне моего отъезда из Стерлитамака тов. Артем на пленарном заседании Башревкома от имени обкома, которого в действительности нет и членом которого не состоит, и группы центровиков ультимативно предъявил ряд требований Башревкому, дав на размышление пять минут. Башкиры были озадачены и не успели обменяться мнениями в такой краткий срок, после этого Артем объявил от имени центрального правительства РСФСР, что все сношения с Башревкомом отныне прерываются, что Башревком отныне считается незаконным правительством Башреспублики, после этого от башкирских учреждений именем тоже [не]сущест[вующего обкома] были отозваны коммунисты..." (Б.Х.Юлдашбаев төҙөгән документтар йыйынтығы,3 (II) том, №679. Артабан бирелә: Б.Х.Ю.). Был юлдарҙан РКП(б) Үҙәк Комитетының һәм Совет хөкүмәтенең Башҡортостан автономияһының киләсәгенә ҡайһылай ҡарауҙары асыҡ күренә... Мәскәүҙән тәғәйенләнгән һәм үҙҙәрен РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ағзалары итеп һанаған, Башҡорт Хөкүмәте өҫтөнән бойороп ҡына ултырырға керешкән урыҫ-татар большевиктар төркөмө менән бер тигеҙ һөйләшерлек башҡорт коммунист Башревком ағзалары араһында тик берәү – Сөләймән Мырҙабулатов ҡына булғанлыҡтан, БВРК рәйесе Харис Йомағолов башҡорт лидерҙарын тиҙләтеп партияға алыу бурысын ҡуя һәм был бурыс коммунист С.Ш.Мырҙабулатов тарафынан еренә еткереп үтәлә. Әле әйтелгәндәр Мәскәү эмиссары Э.М.Юхневич шикәйәтнамәһендә дөрөҫләнә: "Я в то время поступил на службу в секретариат Башревкома (теперь управделами). Юмагулов почему-то в то время не обращал внимания на партийную работу. По инициативе некоторых товарищей была все-таки организована коммунистическая ячейка при Башревкоме, в которую вошло около десятка партийных товарищей, но действительных членов РКП было только трое, именно: тов. Мурзабулатов (б. председатель Башчрезвычкома), тов. Мажаев (секретарь наркомпроса) и я" (шунда уҡ, №677, 419-ынсы бит). Шул йылдарҙың шаһиты (коммунист) Ғ.М. Рәхмәтуллин Сөләймән Мырҙабулатовтың тап Саранск осоро тураһында 1921 йылда ошолай яҙа: "...Мырҙабулатов иптәш бында ҡыҙыл әрмистәр араһында *коммунистар партияһы* исеменән эш *итеүсе һәм партия программаһы менән таныштырыусы берҙән-бер өгөтсө булды.* Бына шуға күрә лә уны башҡорт ярлылары революция

Саранскиҙағы туйҙа ҡатнашыусылар

түңкәрелешенең иң тоғро улдарының береһе һананы, шулай уҡ хәҙер ҙә башҡорт ялпыларының тормошон еңеләйтәсәк яҡты юлға алып барыусы тоғро етәксеһе һанай. Шуға ла уның партия эшмәкәрлеге башҡорттар араһында ғәжәп ҙур тәьҫирле, партия өсөн дә ифрат ҡиммәтле булды. Тап уның тәьҫире һәм өгөтө арҡаһында ошоғаса бик күп башҡорт ярлылары партия сафтарына ылыҡтырылды, әгәр шулай артабан да дауам итһә, киләсәктә уғата ҙурырак уңышҡа ирешер инек. Бөтә намыҫлы башҡорт коммунистары ғына түгел, ә башҡа милләтле иптәштәр ҙә ысын йөрәктән уның үткән эшмәкәрлеге тураһында, коммунистик идеалдарҙы башҡорт ялпылары араһында таратыусы ҡиммәтле эшмәкәр булыуын хәбәр итерҙәр, тип ышанам" (ЦГИА РБ, ф. Р-1107, оп. 1, д. 113, л. 12).

Фәриҙә Мырҙабулатова

Саранскиҙа саҡта Мырҙабулатовтың шәхси тормошонда ла бер үҙгәреш була: Башҡорт хөкүмәтендә эшләгән фарсы революционере Исмәғил Муһлиә менән Ғәрифә Мансурованың никах туйында Сөләймән үҙенең буласаҡ хәләл ефете Фәриҙә (Ғәрифәнең бер туған апаһы) менән таныша, ике йылдан һуң өйләнешәләр. Ә.В.Туғандың “Хәтирәләр” китабына теркәлгән туй ҡатнашсылары фотоһында был туташ туй күлдәкле һеңлеһе янында ултыра, артҡы буйҙа һулдан беренсе -- С.Ш.Мырҙабулатов (С.М. тип билдәләнде).

Хөкүмәтебеҙҙең Саранскиҙан Башҡортостанға (Өфө гөбөрнәһендә килеш ҡалдырылған Эстәрлетамаҡ ҡалаһына) күсеп ҡайтыу мәсьәләһе Башревкомдың 1919 йыл 31 июль ултырышында ҡаралып, күскендәрҙең бер өлөшө — 4 августа, икенсеһе 5-дә сәфәр сыға. “Саранск ҡалаһынан эвакуацияланырға тейешле

кешеләрҙең 1919 йыл август айына ҡарата исемлеге" тигән документта Башҡортостан Хөкүмәтенең һәр органының аталышын, уларҙың кешеләренең фамилияларын күрәбеҙ (ЦГИА Р.Б., ф. 1107, оп. 1, *д*. 102, *л*. 99).

Өфө етәкселеге башҡорт автономиясыларын штыктар тоҫкап ҡаршылай, тиһәк тә яҙыҡ булмаҫ:

"Мәскәү, Кремль, наркомпрод Цюрупаға Өфөнән хәрби телеграмма. Алыныу номеры 9564/т, 12 сентябрь 1919 йыл.

Йомағолов һәм Ҡарамышев йөҙөндәге Башревком Губревкомға килде, Бәләкәй Башҡортостан территорияһындағы бөтә совет аппараттарын үҙҙәренә тапшырыуҙы талап иттеләр... Башревкомдың ҡылығы йүнһеҙ, улар, йәнәһе, урыҫ совет хөкүмәте башҡорттарҙы талай һ.б. тип һанай... Башревком менән конфликт буйынса, Сембер аша тура үткәргестән бөтә тулылығы менән директивалар биреүегеҙҙе һорайбыҙ.

Өфө Губревком рәйесе: **Евлампиев**.

Губкомпартия рәйесе: **Кривов**" (ЦГИА РБ, ф. 1107, оп. 1, *д*. 102, *л*. 89.).

Һуғышҡа әҙерлек тап һуғыш сығҡандағыса ҡыҙыу бара:

"Йәшертен. Доклад.

Гарнизон башлығының доклады буйынса, хәҙерге ваҡытта Өфөлә 16000 һалдат, 5 900 мылтыҡ, 4 туп, 5 пулемет, 150 000 мылтыҡ патроны һәм 75 дана йәҙрә бар. Башҡортостандың яуға ҡуҙғалыуы осрағында беҙ 5 000 штыкка иҫәп тота алабыҙ, һәр һалдаттың 30 дана патроны буласаҡ.

Башҡортостандың ике бригадаһы һәм бер еңел батареяһы (4 туп) һ.б. булыуын иҫәпкә алғанда... беҙ ошо көс һәм сарыфка иҫәп тота алабыҙ".

Өфөнән тороп Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республикаһын *РСФСР-га дошман* сит дәүләт рәүешендә ҡарау, шуға бәйле Башҡортостан территорияһында темеҫкенлек агентуралары йәйелдереп, йәшертен мәғлүмәттәр йыйыу һәм шулар нигеҙендә *башҡорттарға ҡаршы һуғышҡа әҙерләнеү*...

Шуныһы мөһим: йәш республика етәкселәре Өфө большевиктарына башҡорт халҡын көпә-көндөҙ үкертеп талауҙарын ап-асыҡ итеп әйткән. Өфө етәкселеге Мәскәүҙән һораған ул директивалар, бәлки, алынып та өлгөрөлмәгәндер (ә бәлки, өлгөрөлгәндер?), ләкин ғәйәр өфөләр, уткүршегә ҡарата тыныс сәйәсәт үткәреүҙе ситкә ташлап, башҡорттарҙы ***ҡораллы көс менән*** *тар-мар ҡылырға* ***ысын һуғыш*** *әҙерләй.* Хөкүмәтебеҙ урынлашҡан Эстәрлетамаҡҡа Мәскәү шымсы-вәкиле һәм бойорманы итеп ебәрелгән бер төркөм большевиктар, Өфө һәм Ырымбурҙыҡылар менән аҫтыртын берләшеп, башҡорт лидерҙарын быраҡтырырға хөкүмәт түңкәрелеше әҙерләй, ләкин Туҡ-Соран ревкомы рәйесе Мөхәммәтша Буранғолов (булсаҡ башҡорт халыҡ сәсәне) тарафынан фетнәләре көнәлгәре фашланып, 1920 йылдың 16 ғинуарында БВРК-ның ашыҫ ултырышында мәкерле төркөмдө (Измайлов Абдрахман, Шәмиғолов Ғәли, Мостафин Сәғди, Муценок) "ваҡытлыса ҡулға алырға" ҡарар сығарыла (шунда уҡ, №634, 369-ынсы бит), әммә шулар араһында төптө нахаҡтан Сөләймән Мырҙабулатов та төрмәгә ябыла. Фетнәселәрҙең ҡулға алынмай ҡалғандары (Мәскәү вәкилдәре Сергеев-Артем, Самойлов, Дудник, Ярослав) ваҡиғаларҙың тиҫкәреһен әйләндереп, "башҡорт фетнәһе" тураһында мәркәзгә яр һала, һөҙөмтәлә тотҡондарҙы

кисекмәçтән азат итеү тураһындағы Ленин телеграммаһы һуғылып һәм башҡорт милләтселәрен ауыҙлыҡларға Төркөстан фронтынан Фрунзеның 200 һыбайлы ғәскәре ебәрелеп, бөтә ғәйеп "милләтсе Йомағолов" өçтөнә өйөлә һәм ул мәңгелеккә ҡайтмаçҡа Мәскәүгә "саҡыртып алына"; һәм бына РКП(б) өлкә комитетының 20 ғинуар ултырышында сығарылған ҡарар: "Командировать тт. Измайлова и Мурзабулатова в ВЧК, тт. Шамигулова и Мустафина -- в политуправление Республики, тов. Шамигулова -- в ЦК, тов. Ярослава -- в ЦК РКП и ВЦИК со всеми материалами". Күренеүенсә, Башҡортостандағы киçкен ваҡиғалар тураһында мәғлүмәтте Мәскәүҙә, башҡорттарҙың үҙҙәренән түгел, ә Башҡорт Автономияһы дошмандарынан алалар. Юламандарҙың Шәмиғолов менән Ярославынан башҡаларын Өфөлә тотҡарлап, эшкә димләһәләр ҙә, С.Ш.Мырҙабулатов ҡырҡы баш тарта -- кире Эстәрлетамаҡҡа ҡайта һәм 30 ғинуарҙа республиканың Мәғлүмәттәр идаралығында инструктор булып эш башлай (ЦГИА Р.Б. ф. Р-1252, оп.2, ед. хр.14, л.52). Оҙаҡламай уны Тамъян-Ҡатай кантонындағы тәртипһеҙлектәрҙе тикшерергә хөкүмәт һәм партия өлкә комитеты тарафынан махсус вәкәләтле ревизор итеп ебәрәләр һәм ул ундағы В.Поленовты, алдағы көндәрҙә башҡорттарҙың ҡанын эсәсәк яуызды, "республиканың дошманы" рәүешендә фашлай, уны хөкөмгә тарттырыуҙарын һорай, ләкин партия әһелдәре буласаҡ палачты ел-ямғыр тейҙертмәй ҡурсалап, Башҡортостанда Шәмиғоловтың ҡанлы диктатураһы ҡоторонған осорҙа Бөрйән-Түңгәүер кантонына сикләнмәгән хоҡуҡлы хаким итеп тәғәйенләйҙәр...

Уҙаманыбыҙҙың артабанғы тәржемәи хәлен, артыҡ оҙонға һуҙмаç өсөн, тәрәнерәк ҡыҙыҡһынғандарға документтарҙан ғибәрәт китапты (Йыһат Солтанов. Сөләймән Мырҙабулатов: заманы һәм көрәше. Өфө - 2006) күрһәтеп, ваҡиғаларҙы урыҡ-һурыҡ хәбәрләүгә күсәйек.

Шул 1920 йылда Шәмиғолов – Мансырев диктатураһына ҡаршы башҡорт халҡының ҡораллы милли-азатлыҡ көрәше – ихтилалы башлана һәм Сөләймән Мырҙабулатов туған халҡының шул дәһшәтле һуғышы менән етәкселек итеп, ике йөҙ йыл дауамындағы башҡорт ихтилалдары тарихында беренсе тапҡыр уны еңеүгә килтерә. Ошоноң арҡаһында башҡорт халҡы үҙенең милли йөҙөн, автономиялы Башҡортостан республикаһы рәүешендәге үҙ дәүләтселлеген, ер йөҙөндә үҙ еренең аçаба-хужаһы булып йәшәү хоҡуғын мәңгелеккә юҡ ителеүҙән ҡурсалап ҡала алды, был ихтилал бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының булмышын һәм яҙмышын тәьмин итте. Еңеүле ихтилал арҡаһында Мәскәүҙең милли сәйәсәте йомшарып, совет тарихында беренсе тапҡыр республика хакимиәте башына башҡа милләт килмешәктәре түгел, ә башҡорттарҙан Әхмәҙулла Биишев (партияның өлкә комитеты сәйәси секретары), Муса Мортазин (БашЦИК рәйесе), Муллаян Халиҡов (Башсовнарком рәйесе) һ.б. килде; башҡорт теле, тарихта беренсе тапҡыр, урыç теле менән бер ҡатарҙан республиканың дәүләт теле итеп раçланды. Башҡорт телендә матбуғат, китап баçыу эштәре яйға һалынды. Башҡорттарға юғары уҡыу йорттарына кереү өсөн өлөштөр (вакансиялар) булдырылды һәм башҡалар, һәм башҡалар...

Тора-бара хөкүмәттә Наркомзем булып эш башлаған С.Ш.Мырҙабулатов Советтарҙың 1921 йылдың 1-4 июлендә барған II Бөтөн Башҡортостан йыйынында

шул вазифаһында раҫлана. Күп ғазаптар кисереүсе халҡы өсөн йәне әрнегән уҙаман 1921 йылғы аслыҡта башҡорт халҡын ҡырып бөтөрөү өсөн Мәскәү вәкилдәре асҡыртын бойомға ашырған геноцидты, тәғәйен һандар килтереп, асыҡтан-асыҡ фашлай, аслыҡ касафатын бөтөрөү, бигерәк тә ер мәсьәләһендә ғәҙел закондар булдырыу хаҡына ныҡышмалы көрәшә. 1922 йылдың 28 февралендә партия Өлкә комитеты оргбюроһының Е.Г.Пестун (Мәскәү вәкиле) ҡатнашкан ултырышында тап ошо хаҡта Башнаркомзем С.Ш.Мырҙабулатовтың тәрән эстәлекле доклады тыңлана, уның фиҙаҡәр эшмәкәрлегенә «Наркомземдың удар эше итеп танырға» тигән юғары баһа бирелеп, ер тураһында ул күтәргән бөтә мәсьәләләр буйынса ла эшлекле ҡарар ҡабул ҡылына. Әммә иң-иң мөһиме -- Башнаркомзем С.Ш.Мырҙабулатов тәҡдим иткән ер тураһындағы хөкүмәт фармандарының проекттарын хуплау һәм: «Был фармандар РКП обкомы тарафынан хупланды һәм партияның бөтә ағзалары, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн, көстәрен егергә бурыслы», -- тигән ҡушымта менән нығытылып ҡуйылыуы ине (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 6, *д*. 4, *л*. 29.). Һөҙөмтәлә шул уҡ 1922 йылдың 2-4 мартында БашЦИК тарафынан «Ерҙе баҫып алыуҙар тураһында», «Үҙ белдекле күсеп килеп ерегеүҙе тыйыу тураһында», «Биләмә эсендәге ҡортом тәртибе тураһында» башҡорт халҡы яҙмышындағы тарихи 5, 6, 7-се фармандар бер-бер артлы матбуғатта илгә иғлан ҡылына, фармандарға БЦИК рәйесе эштәрен ваҡытлыса башҡарыусы Хоҙайбирҙин, Совнарком рәйесе Халиҡов, Башнаркомзем Мырҙабулатов, ВЦИК-тың тулы хокуклы вәкиле Пестун үҙе ҡул ҡуйған һәм БЦИК сәркәтиплеге мөдире А. Львов дөрөҫләгән. Ерекмән улы, ер кешеһе С. Ш. Мырҙабулатовтың иң мөкәддәс ниәтенә ирешеү көнө ине был -- документтарҙың бөйөк баһаһын, ***Халыҡ тантана итте***, тип кенә билдәләү мөмкиндер. Совет Башҡортостаны осоронда һәм, ғөмүмән, Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, ер мәсьәләһе буйынса, ниһайәт, төп халыҡтың мәнфәғәттәрен дә ғәҙел иҫәпкә алыусы иң тәүге лә, һуңғы ла була шикелле был канундар (1922 йылдың 27 апрелендә ВЦИК Президиумы ҡарары менән юҡҡа сығарыла). Туранан-тура Мәскәүгә буйһондортолған һәм башҡорт автономияһының дошмандары оялап алған Башчека темеҫкәндәре Мырҙабулатовтың һәр аҙымын һағалап “компромат” эҙләй, ҡаһармандың башы осонда ҡара болоттар ҡуйырғандан-ҡуйыра...

«Ғәҙәттән тыш йәшертен. 1922 йылдың... апрель көнө (махсус рәүештә числоһы ҡуйылмай ҡалдырып яҙылған -- алдан алдыртып, ер тураһындағы баяғы тарихи фармандарҙың Үҙәктән кире ҡағылыу мәленәрәк тура килтереү өсөн әтмәләнгән булһа кәрәк был ҡағыҙ. -- Й.С).

Башобком Контроль комиссияһына № 165 меморандум.

Баш. ОГПУ (БашЧК-ның яңы исеме. -- Й.С) агентура мәғлүмәттәренән -№... (тағы номер һаны ҡуйылмай ҡалдырылған. -- Й.С) агентура эше буйынса, 456,45,260,426,629 һәм 738-се номерлы (һәй, маладис чекистар – нисәмә-нисә агент егелгән эшкә! -- Й.С.) шикайәтнамәләр буйынса.

Башнаркомземда нарком Мырҙабулатов һәм уға буйһоноусыларҙың ҡылыҡтары һәм эше тураһында...»

Ошондай оҙон баш аҫтында чекистарҙың артабан дүрт пункттан ғибәрәт «фашлау»ҙары килтерелә (иншалап бирәбеҙ):

1. Мырҙабулатов һәм уның урынбаҫары Хәсәнов ҡала ойошмалары хеҙмәткәрҙәренән хасил «коллективтарға» (йәғни ҡомһоҙ чиновниктарға. -- Й.С.) Наркомзем фондынан орлоҡ игене биреүҙән баш тартып, бөтә ғаризаларын ҡала хужалығы идараһына йүнәлтә (бик дөрөҫ, ғәйепләргә нигеҙ юҡ бында, беҙҙеңсә! – Й.С.), шул уҡ ваҡытта «хосуси хужалык эйәләре булған үҙенең яҡындарына һәм таныштарына, мәҫәлән, Фәхретдиновка, Ибраһимовҡа, Хәйҙәр Ҡолсуринға һәм Ҡыуатовка орлоҡ игене бирҙертәләр». Бынығы ла бик ғәҙел һәм канунлы, сөнки һаналған фамилиялар ныҡ асығыусы Үҫәргән кантоны ерекмәндәре, ә был кантон иң таланған, иң асыҡҡан, иң күп ҡырылғандарҙың береһе бит. Ошоно дөрөҫләгәндәй, Мәскәү вәкиле Е.Г.Пестун 1922 йылдың 6 мартында «Петроградская правда» гәзитенең мөхәрририәтенә былай тип яҙа: «Башҡортостан иң ауыр айҙар кисерә, бер *Үҫәргән* кантонында ғына ла 1000 кеше астан үлде, 27 кешене үлтереп ашау осраҡтары теркәлгән. Ауылдарҙа РКП һәм РКСМ ағзалары хәйерселектә, халыҡ менән бер ҡатар ҡырылалар. Апрелдә ни булырын күҙ алдына килтереү ҡыйын...» (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 5, д. 23, л. 57). «Меморандум» пункттарын барлауҙы дауамлайыҡ.

Каптенармус Лосянский әйтеүенсә (ғәйәр чекистар документҡа нигеҙләнеп түгел, ә кемдеңдер ғәйбәт һүҙенә таянып ғәйепләйҙәр), Наркомзем Мырҙабулатов үҙенең асығыусы хеҙмәткәрҙәренә Башнаркомзем келәтенән он бирергә рөхсәт иткән. Бынығы ла урынлы, сөнки тоташлай аслыҡ йылында үҙ хеҙмәткәрҙәренең аҫҡа үлеүен, йәки эште ташлап аҙыҡ эҙләп сығып китеүен көтөп ултырмай уңған етәксе.

3. Башнаркомземдың Хужалыҡ бүлегендә ***«документтар буйынса»*** 23 шешә спирт, бер-нисә (ниңә «бер-нисә», ә тәғәйен һан түгел?) мең бот иген сарыф ителгән, ә шулар бүлек кенәгәһенең керемдәр исемлегенә теркәлмәгән, тип, аппарат бүлек мөдиренең иҫәп-хисап буйынса әрпешлеген дә туранан-тура Наркомземдың үҙенә йәбештермәкселәр. Наркомземда асығыусылар файҙаһына аҡса йыйыу өсөн кисәләр (бал кисәләре, лотерея кисәләре һ.б.) уҙғарылыуы, шуның өсөн, «ҡайҙандыр алынып» (документ юҡ, ә «моғайын, ветбүлектәндер», тип юрала!..), табынға спирт ҡуйылыуы шикәйәт ителә лә шунда уҡ шул спирттың нәҡ шунда (асығыусылар файҙаһына үткәрелгән кисәләрҙә) тотонолоуы төптө «онотолоп», әлеге 23 шешә спирт йәнәһе Мырҙабулатовтың кәләш алыу туйында эселгән, тип, фокуссылай бармаҡ осонан һурып алып раҫлана. Туй үткәреү өсөн нарком 16, 17 һәм 20 февралдә бөтәһе ике ярым бот (ҡырҡ кило!) он яҙҙыртып (урлап түгел!) алған, тип тә оло ғәйепләнә (туй табынында бөтә дәүләт эшмәкәрҙәре, тип әйтерлек, катнашҡан). Канцелярияға ҡағыҙ-ҡәләм һатып алыу өсөн тотонолған аҡсаның да бер өлөшөн йәнәһе Мырҙабулатов, Хәсәнов, Сәлихов үҙләштергән, тип, бер ниндәй ҙә дәлилһеҙ (документтарға һылтанығыҙ) ғәйепләйҙәр.

4. Эстәрлетамаҡтан мөфтөй Халиҡов (Башҡортостандың беренсе үҙ аллы Дини идаралығының беренсе мөфтөйө) тигән ерекмәнгә 32 бот сәсеү орлоғона рөхсәт биреп ярҙам күрһәтеү ҙә оло гонаһ һанала.

«Меморандум»дың ҡойроғона һөйрәлтке ләтағылған:

«Кемгә нимә йөкмәтелеүе:

Башобкомдың Контроль комиссияһына -- РКП(б) ағзаһы Мырҙабулатов иптәш тарафынан ҡылынған енәйәттәрҙе партдисциплина көсө аша туҡтатыу йәһәтенән тейешле саралар күреү бурысы. БОГПУ-ға ғәйепләүнамәләр килә тора (темеҫкендәре шәп эшләй! – Й.С.) һәм улар артабан да, килеп етеүе менән үк, һеҙгә ебәреләсәк. Карарығыҙ тураһында БОГПУ-ға хәбәр итеүегеҙҙе һорайбыҙ.

Аңлатма: БОГПУ-нан Контроль комиссияһына шул уҡ әҙәмдәр тарафынан 200 бот совхоз ононоң (баяғы тәүге документтағы асығыусы дәүләт һәм хөкүмәт эшмәкәрҙәренә таратып бирелгән он. – Й.С.) урланыуы тураһында ғәйепләүнамә ебәрелде.

ОГПУ-ның Иктисад бүлеге башлығы: **Аксенов**» (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 2, д. 488, л. 5).

Иғтибар итәйек: «*РКП(б) ағзаһы Мырҙабулатов*» тураһында һүҙ бара бында -- 1921 йылғы «бөйөк таҙартыу»ҙан һуң да ул партия сафында тора биргән. Һәм был юлы ҡаһарманды бер һуғыуҙа юҡ итеү -- партиянан да сығарыу, Ревтрибуналға ла тарттырыу өсөн мәкерле эш ҡуйыртыла.

Ул аслыҡ ғәрәсәтендә дәүләт органдары эшмәкәрҙәрен аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүсе махсус хеҙмәт булмаған, уҙамандарҙың ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү Башнаркомзем хәстәрлегенә ҡараған. Шуны бик яҡшы белә тороп, бәләһеҙгә бәлә өйәләр:

«Башнаркомзем Мырҙабулатов иптәште, нарком урынбаҫары Төхвәтуллин иптәште, начглавсельхоз Сәлиховты, завхоз Таһировты һәм хозподотдел мөдире Урманцев иптәште 200 бот он һәм 40 бот бәрәңге байлығын әрәм-шәрәм итеүҙәре өсөн ғәйепләүсе 1958-енсе номерлы эш буйынса доклад.

Эштең асылы. 1921 йылдың 20 октябрендә Константин совхозынан билдәһеҙ маҡсат өсөн 100 бот он һәм 40 бот бәрәңге ҡайтарылған... Бер-нисә көндән һуң, Башнаркомзем урынбаҫары Төхвәтуллиндың әмере менән һәм нарком Мырҙабулатовтың хәбәрдарлығында завхоз Таһиров ул ондан, алдан әҙерләнгән исемлек буйынса, эшсе Йәғәфәров аша түбәндәгеләргә өләшеп биргән:

Наркомвоен һәм БашЦИК рәйесе Мортазинға дүрт бот он (бер бот үлсәм 16 килограмға бәрәбәр. — Й.С.).

Наркомздрав Ҡыуатовҡа ике бот он.

БашЦИК рәйесе урынбаҫары Халиҡовҡа дүрт бот он.

Наркомзем Мырҙабулатовҡа бер ярым бот он.

Һәм яуаплы вазифалы кешеләргә:

Ғәлекәйевкә (РКИ-ҙан) дүрт бот.

Сәлиховҡа (Наркомземдан) бер ярым бот. Бөтәһе ун ете бот он.

Бәрәңге:

Ҡыуатовҡа ике бот.

Ибраһимовҡа биш бот.

Ивановҡа биш бот.

Сәлиховҡа биш бот.

Мутинға ике бот.

Мырҙабулатовҡа биш бот.

Төхвәтуллинға биш бот. Бөтәһе утыҙ туғыҙ бот бәрәңге»...

29 октябрҙә төндә Урманцевтың келәтендәге ҡалған алтмыш бот ондо, тип әйтелә темеҫкеннамәлә, билдәһеҙ бәндәләр урлап алып киттеләр (чекистарҙың үҙҙәренең ҡылығы булыуы ихтимал). Чекистар Урманцевтан йәнә Наркомзем келәтендәге йөҙ бот ондоң төрлө наркоматтарҙа эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә исемлек буйынса таратылып бирелеүен дөрөҫләүсе документтар алалар. Күренеүенсә, 200 бот он менән 40 бот бәрәңгене бер кем дә бер ҡайҙан да урламаған, ә, күренекле хөкүмәт эшмәкәрҙәре һәм уларҙың ғаиләләре, шулай уҡ хөкүмәт аппаратының башҡа хеҙмәткәрҙәре аҫҡа үлмәһен өсөн, заманаһы тәртибендәге ҡағыҙҙарға теркәлеп, шуларҙы тәьмин итеүгә тотонолған. Әммә ғәйепләүнамәнең йомғаҡлауында наркомдарҙың был ҡәҙимге көнкүреш сараһына әүерелмеш үҙтәьминәт ысулы менән тамаҡ туйҙырыуҙарын «халыҡ милкен урлау менән бәрәбәр» тип тамғалайҙар; ә аҙыҡ-түлекте совхоздан ҡайтартып тараттырыусы Башнаркомзем Мырҙабулатов менән уның урынбаҫары Төхвәтуллинды һәм Мортазиндың урынбаҫары Халиҡовты үҙҙәренең юғары вазифаларын шуға файҙаланыуҙа ғәйепләйҙәр (ЦГАОО Р.Б., ф. 22, оп. 5, *д*. 8, *л*. 65).

Башнаркомземды алмаштырыу мәсьәләһе Башобком бюроһында ике тапҡыр -- 1922 йылдың 17 май һәм 9 июнь ултырыштарында ҡарала *ла* һуңғыһында Башнаркомзем эшен ваҡытлыса башкарыусы итеп уның урынбаҫары Төхвәтуллин раҫлана, ә «Мырҙабулатов иптәш Обкомпомголда эшләргә ҡалдырыла» (ЦГАОО РБ, ф. 22, оп. 6, *д*. 3, *л*. 70, 80). Ошонан һуң уҙаман *ул* ойошмала бөтә көсөн һәм талантын асығыусылар хәлен яҡшыртыу хеҙмәтенә арнай. Билдәле булыуынса, күпме генә көсәнеп бысраҡ атһалар ҙа, дошмандары С.Ш.Мырҙабулатовтың аҡ намыҫын керләй алмаған, шуға күрә *ул* партиянан да сығарылмаған, Ревтрибунал хөкөмөнә *ла* тарттырылмаған. Улай ғына *ла* түгел, Башҡортостан күгендәге яҡты есемдәр араһында *ул*, әүәлгеләй, беренсе дәүмәлле йондоҙ булып балҡыуын дауам иткән: Өфө гөбөрнәһен Бәләкәй Башкортостан республикаһына ҡушып Оло Башҡортостан - БАССР барлыҡҡа килгәс тә *ул* 1922 йылдың 6-7 июлендә партияның шул ике өлкә ойошмаһы пленумдарының берләштерелгән ултырыштарында бер тауыштан БЦИК Президиумы ағзаһы итеп раҫлана, шул ҡарар 18 июлдәге БЦИК ултырышында һәм берләштерелгән яңы БашЦИК-тың 21 июлдәге №2 фарманында раҫлана (ЦГАОО РБ, ф. 122, оп. 1, *д*. 6, *л*. 1-4; ЦГИА РБ, ф. 394, оп. 5, *д*. 10, *л*. 380 һәм ф. 101, оп. 1, *д*. 83, *л*. 6). Уҙаман һаман халыҡ файҙаһына арыу-талыу белмәй эшләй, уның һынмаҫ рухы һаман ғәҙеллек, халыҡ бәхете өсөн көрәшкә өндәй. Ул һаман үҙенең аҡкадаштары араһында -- фидаиланып Башҡортостанға хеҙмәт итеү юлында.

Әммә Кремль мыйыҡлыһының мәкерле ғәмәл дәфтәрендә ҡаһармандың исеме күптән үк ҡара исемлеккә теркәлгәйне шул. Державаның дилбегәһен яйлап ҡына Лениндың ҡулынан һыпырып ала башлаған «милләттәр белгесе» Сталиндың ҡаҡшамаҫ ҡануны бер: державаның офоғона уның ҡулы һыҙып сикләгән хаҡ кимәлдән бер кемдең дә башы өҫкәрәк сурайып сығырға хаҡы юҡ (*милли* республикаларҙан – бигерәк тә!)... Сурайған баштарҙың береһе, Е.Г.Пестун,

шул йылда уҡ Башҡортостандан алынып, түбәнерәк вазифаға Донбасс яғына олаҡтырыла, ә ныҡ сураймыш милли кадр С.Ш.Мырҙабулатов иптәш Сталиндың бына-бына киң ҡолас йәйәсәк тоталитар репрессияларының 1923 йылғы генераль репетицияһындағы тәүгеләрҙән-тәүге ҡорбан ролен үтәргә тәғәйенләнә -- бер атыуҙа нисәмә ҡуянды алмаҡсы мәкерле йән. Эш шунда: автономиялы республикаларҙы баяғы үҙе һыҙған кимәлдән сығартмай тотор өсөн, артыҡ сәмле милли эшмәкәрҙәрҙе бөтәһен бер юлы өркөтмәккә, бөтөн Союз күләмендәгерәк ҡуркыныс ҡараҫҡы кәрәк; быға тиклемге «вәлидовсылыҡ» ҡараҫҡыһы, беренсенән, тәьҫир көсө Башкортостан менән генә сикләнеп, икенсенән, Вәлидов үҙе сит илгә олаҡҡанлыҡтан, дөйөм өркөткөс вазифаһын үтәй алмай башлаған, быныһы бер. Икенсеһе, Вәлидовһыҙ ҡалғанда ла Башҡортостан, бөтә донъя ялпыларына Ленин үҙе өлгө ҡылған иң беренсе автономиялы республика рәүешендә, улар өсөн иң мөкәддәс *милли* һәм *ер* мәсьәләләрендә, баяғыса, ауыҙлығын сәйнәп өҙөргә үрһәләнеп, зарарлы өлгө бирә бит башҡаларға. Өсөнсөһө, былтыр ғына РКП(б)-ның X йыйынында Сталин иптәш «Милли мәсьәлә буйынса партияның нәүбәттәге бурыстары тураһында» доклад яһағандан һуң, фекер алышыуҙа ҡупҡан зарарлы бәхәс. Наркомнац Сталин иптәштең үҙ ҡулы аҫтында эшләгән татар коммунисы Мирсәйет Солтанғәлиев, Сталин иптәштең заманға ифрат мөһим ҡалтайтылмыш «бөйөк державасы шовинизм» һәм «буржуаз милләтселек» терминдарын партияға аслан аңлатып биреүенән ҡәнәғәтһеҙлек белдереп, уларҙы үҙенсә тылсымлап, бигерәк тә «буржуаз милләтсе» термины тәңгәлендә зарарлы һүҙ ҡуйыртты... Һәм бына күҫәк:

«Вәлидов һәм Солтанғәлиев (татарлашҡан башҡорт) -- иҫке дуҫтар, фекерҙәштәр ине. Вәлидов та, Солтанғәлиев та бер маҡсат ҡуйҙылар үҙ алдарына -- «Туран дәүләтен төҙөү».

Башҡортостанда вәлидовсы контрреволюцион ойошмалар йәнәшәһендә Солтанғәлиевтың контрреволюцион төркөмдәре йәшәне һәм хәрәкәт итте. Был төркөмдәр менән Әҙеһәмов, Мортазин, Халиҡов, ***Мырҙабулатов*** *һ.б. етәкселек итте»* (КГБ белешмәләренән).

Сөләймән Мырҙабулатов яҙмышы БАССР-ҙың баш ҡалаһы Өфөлә 1923 йылдың 28 майында РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты президиумының ябыҡ ишек артындағы ифрат йәшерен ултырышында ***коммунист Мырҙабулатовтың*** үҙенән башҡа хәл ҡылына. Ултырҙаштар: президиум ағзалары Герасимов, Халиҡов, Ашрапов, Беляев, Ҡушаев, Фогель, Нехаев, Трегубенков, Бычков; Контроль комиссияһы ағзалары Юрцен, Готовцев, Опарин; саҡырылып килеүселәр: А.Х.Белогуров (БОГПУ башлығы), Ю.Н.Паперный (Аҙыҡ-түлек наркомы), А.К.Әҙеһәмов (Мәғариф наркомы) һәм... кем тип уйлайһығыҙ?!. -- әлеге лә баяғы шул Шәмиғолов -- 1920 йылда геноцид сәйәсәте үткәртеп башҡорт халҡын ҡырҙырткан һәм С.Ш.Мырҙабулатов ихтилалы арҡаһында Башҡортостандан тәкмәстерелеп олаҡтыртылған, шунан һуң РКП(б) Үҙәк Комитеты янындағы Көнсығыш халыҡтары коммунистик ойошмалары бюроһына ҡара йыландай кереп оялаған советтар осоро тәфтиләүе Ғ.К.Шәмиғолов... Емтек таҙараһылай, ҡан еҫен таныҡлап, Сталиндың тоғро ҡулы, күҙ-ҡолағы булып ҡыйғырлап килеп

төшкән... Шулай ҙа был хөкөм залына, әле әйтеүебеҙсә, төп ғәйепләнеүсе С.Ш.Мырҙабулатовтың үҙен яҡын юлатмайҙар, ҡурҡалар...

Ултырҙаштар, юғарынан төшөрөлгән милли-сәйәси йөкләмәне ҡаршылыҡһыҙ теүәл үтәп, ҡырҡыу милли мәсьәләне хәл ҡылыу буйынса Сталин иптәш тәжрибәһен ифрат байыҡтыралар (был тәжрибә, әлбиттә, 1937 йылғы репрессияларҙа уларҙың үҙҙәренең да башына етә). Ултырыш ҡарарының тейешле өлөшө ашығыс рәүештә тейешле органға атҡарыла:

«Ифрат йәшертен.

РКП(б) Башобком президиумының 1923 йылдың 28 май ябыҡ ишек артындағы ултырышының №26/46 протоколынан күсермә.

Тыңланыҡ: милли мәсьәлә буйынса партияның XII йыйыны резолюцияларын тормошҡа ашырыу өсөн ғәмәли саралар билдәләүгә бәйле ошо йылдың 7 июнендә Мәскәүҙә милли өлкәләр һәм республикаларҙың яуаплы эшмәкәрҙәренең кәңәшмәһен сакырыу хаҡындағы; шулай уҡ Наркомнац Коллегияһының элекке ағзаһы, партияға ҡаршы һәм советтарға ҡаршы эше өсөн ғәйепләнгән һәм шуға күрә партиянан сығарылған Солтанғәлиев эше буйынса ЦКК рәйесе докладын тыңлау тураһындағы РКП Үҙәк Комитеты телеграммаһы. Герасимов иптәш доклады.

Ҡарар ҡылдыҡ: ...4. Мырҙабулатов һәм Бикбауов тарафынан Солтанғәлиев менән элемтә тотоуҙы, улар тарафынан татар-башҡорт массалары араһында яуаплы совет башҡорт эшмәкәрҙәрен күҙҙән төшөрөүҙе теүәл аныҡлап, Мырҙабулатовты һәм Бикбауовты яуаплы вазифаларынан бушатыуҙы, артабан Башҡортостанда бер ниндәй ҙә эштә файҙаланыуға юл ҡуймай, уларҙы ***которонҡо һәм зарарлы милләтселәр рәүешендә*** БССР сиктәренән тышҡа бөтөнләй һөрөргә кәрәкле тип һанарға.

Күсермә дөрөҫ һәм БОГПУ башлығы Белогуровҡа йүнәлтелә.

РКП(б) Башобкомы эштәре менән идаралыҡ ҡылыусы: (ҡултамға)» (ЦГИА РБ, ф. Р-1107, оп. 1, *д*. 113, *л*. 16).

Ошоғаса башҡорт дәүләт эшмәкәрҙәренән бер кем дә -- Вәлидов та, Йомағолов та -- ошондай рәсми ҡарар менән олактырылмағайны, ә «саҡыртылып» ҡына алынғайны. Хатта яһил БашЧК, ҡабаланып, ваҡытынан элек ҡулға алып өлгөргән Ә.Ә.Биишевте *лә*, М.Мортазин, М.Халиҡов кеүек аҡкадаштарының тырышлығы аҡһаһында, Эстәрлетамаҡ төрмәһенән сығарып, дәүләт эшмәкәрҙәренә тәғәйенләнмеш уңайлы вагонда оҙаткайнылар бит Мәскәүгә...

Мәскәү сәйәси һөргөнөндә интеккән Мырҙабулатовтар ғаиләһе, ниһәйәт, тыуған илгә ҡайтырға рөхсәт ала: 1926 йылдың 7 июнендә Мәскәүҙәге Башвәкәләтлек тарафынан бирелгән танытмала уның Йылайыр Сельпромхозы (хәҙерге Ҡыуандыҡ ҡалаһында урынлашҡан) һорауы буйынса иленә ҡайтарылыуы әйтелә, был -- ҡаһармандың Мәскәүҙәге сәйәси һөргөнөнөң ахыры, иң һуңғы эҙе, буғай. Ҡыуандыҡҡа ғаиләһе (әсәһе Шәрифә инәй ҙә бергә) менән килеп ерегеүен 1927 йылдың ғинуарындағы һайлау хоҡуғынан мәхрүм ҡылыныусылар исемлеге *дәлилләй*:

«...958. Мырҙабулатов Сөләй.

959. Мырҙабулатова Фәриҙә, 26 йәштә.

960. Мырҙабулатова Шәрифә, 67 йәштә» (ЦГИА РБ, ф. Р-834, оп. 2, *д*. 4а, том. 2, *л*. 603).

Тоталитар режимдың рәхимһеҙ ҡанундарына ярашлы, ҡаһарман менән бергә уның һис бер сәйәсәткә ҡатнашмаған ҡатыны, әсәһе *лә* гражданлыҡ хоҡуҡтарынан мәхрүм ҡылынған...

Тыумыштан ук ерекмән һәм мөкиббән мөғәллим булараҡ, тыуған төбәктә кооперативтар, колхоздар ойоштороу, ауылдарҙа яңы мәктәптәр һалдыртып астыртыу (мәҫәлән, Иҫәнғол, Муйнаҡ, Сураш, Юлдаш, Мырҙабулат-Абзан, Самаҙы, Аҡбирҙе, Бужан, Ергәйеш, Үтәғол, Ҡыуандыҡ, Әлибай, Элмәле, Ҡалмаҡ ауылдарында) эшенә ең һыҙғанып керешә, ерле халыҡ ихтыяждарына юғарынан эшлекле иғтибар юллап, һәр урында якташтарының абруйлы һәм ҡеүәтле яҡлаусыһы, илсеһе булып йөрөй. 1928 йылдың мартында уны Йылайыр кантон аппаратына эшкә *алалар* (нәшриәт эштәре буйынса). Шул 1928 йылдың 13 октябрендә, 14 ноябрендә, 11 декабрендә һәм 1929 йылдың 30 ғинуарында бирелгән танытмалар буйынса, уның *башҡорт телен ғәмәлгә ашырыу һәм башҡорт яңы әлифбаһы* комиссияларының сәркәтибе булып эшләүе күренә. *Л*әкин әсе-сөсөнө күп татыған уҙаман, тәжрибәле элекке чекист булараҡ, Мырҙабулатов үҙенең башы осонда эленеп торған Сталин балтаһының хәтәр янауын тойған һәм күҙәтсе дошмандарынан нисек тә күҙ яҙҙыртырға теләгән, буғай. Йылайыр кантон үҙәгенән ҡапыл ғына төпкөл ауылға китеүе һәм район етәкселегенән үҙе хаҡында ыңғай танытма яҙҙыртып алыуы беҙҙе шул хаҡта уйланырға мәжбүр итә:

«Был танытма иптәш Мырҙабулатов Сөләймән Гәрәй улына уның, ысынлап та 1928 йылдың 15 апреленән алып 1929 йылдың 25 ғинуарынаса Йылайыр кантисполкомында башкорт телен ғәмәлгә ашырыу сәркәтибе һәм башҡорт яңы әлифбаһы сәркәтибе булып эшләгәнлеге һәм үҙенең вазифаларын бөхтәлекле, намыҫлы һәм үҙ эшен белеп башҡарыуы һәм бер ниндәй ҙә хилафлығы булмауы тураһында бирелде.

КИК рәйесе: **Редин**.

КИК сәркәтибе: **Мөхәмәтйәнов**, № 18, 1929 йылдың 30 ғинуары» (ЦГИА РБ, ф. Р-834, оп 2, *д*. 69, *л*. 2, 6, 11, 14, 15, 28, 30, 56).

Шул ук йылда ул Йылайырҙан күсенеп, үҙе ҡасандыр мәғрифәтле мәҙрәсәһендә уҡыған, һуңынан уға уның ҡыҙыл гвардияһының йәҙрәһен биргән, ә 1921 йылғы аслыҡта халҡы тоташлай, тип әйтерлек, ҡырылып бөтөп, егерме өйгә генә ҡалған һәм яйлап һүнеп барған, әммә күңеленә ифрат яҡын Сәнкем-Биктимер (Ҡаҫмарт йылға тамағында) ауылына ғаиләһе менән килеп, егеп йөрөгән һарысай атын дөйөм маяға һалып, элекке ҡыҙыл гвардиясы ҡорҙаштарын шундағы тәүге «Большевик» колхозына берләштерә, уның тәүге рәйесе итеп һайлана. 1930 йылдың йәмле йәйендә ул бөтөн Башҡортостан советтарының баш ҡалабыҙ Өфөлә сакырылған X юбилей йыйынында ҡунаҡ рәүешендә ҡатнаша, шундағы бер төркөм делегаттар һәм ҡунаҡтар бергәләшеп төшкән фото (унда минең атайым да бар) -- ҡаһармандың беҙгә билдәле булған һуңғы һүрәте...

КГБ белешмәләренән:

«1929-1933 йылдарҙа Өфөлә һәм БАССР-ҙың Йылайыр районында вәлидовсылар Әҙеһәмев Абдулла, Мутин Илдархан, ***Мырҙабулатов Сөләймән,*** *Бикбаев Рәшит, Теләүбирҙин, Имаҡов, Муллабаев һ.б. етәкселегендәге контрреволюцион милләтселекле баш күтәреү ойошмаһы, 58 кешеһен ҡулға алып, фашланды һәм юҡ ителде».*

1992 йылда КГБ-нан (Мәскәү) алынған мәғлүмәт: "Мурзабулатов Сулейман Шахингареевич... к моменту ареста проживал в дер. Чанкино Сунарчинского сельсовета Усергенской волости Зилаирского кантона.

Арестован 30 февраля (көн һаны яңылыш, сөнки календарҙа 30 көнлөк февраль юҡ. – Й.С.) 1930 года и как активный участник так называемой "султангалиевской контрреволюционной националистической организации" постановлением ОГПУ от 28 июля 1930 года осужден к расстрелу". Ҡайһы бер авторҙар ошо датаға һәм чекистарҙың приговорҙы көнөндә үк ғәмәлгә ашырыу йолаһына таянып, быны С.Ш.Мырҙабулатовтың атып үлтерелеү датаһы итеп яҙалар, *ләкин был дөрөҫ түгел:* ярты йыл буйына уны язалайҙар, нимәләрҙер әйттертергә тырышаларҙыр – яла яҡтыртып бөтә башҡорт етәкселәрен репрессияларға тырышыу булһа кәрәк.

Кремлдең мыйыҡлы ҡатилы ҡабат ҡуҙғатҡан баяғы шул «солтанғәлиевщина» ялаһы менән иң юғары язаға дусар ҡылынған һәм, дәүләт именлеге өсөн ифрат хәтәр дошман рәүешендә, хатта төрмә эсендә *лә* исем-фамилияһы йәшерелеп, яңғыҙаҡлы камерала 51-се номер менән ултыртылған, палачтарына баш бирмәүсе был ғорур тоткон, халҡыбыҙҙың милли ҡаһарманы Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов, дәһшәтле *Лубянка* зинданында 1931 йылдың 9 ғинуарында боҙ ҡаткан тар карцерҙа түшәмдән өҙлөкһөҙ ағыҙылған боҙло һыу аҫтында аяҡ өҫтө тороп ҡата...

Милли каһарманыбыҙ Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовтың шанлы исеме Өфө, Эстәрлетамаҡ, Белорет, Баймаҡ, Ырымбур, Орск, Ҡыуандыҡ ҡалаларының, Иҫәнғол, Темәс, Йылайыр ҡасабаларының ғорурлығы булырлык һәм, ғөмүмән, бөтөн башҡорт халҡының намыҫы *ул.* Батырҙар һәм уҙамандар менән тулы тарихыбыҙҙа уҙамандар уҙаманы булып ҡалды һәм *ул* мәңге онотолмаҫ.

23.03.2011

Суд над строптивым или спасение Карасакала
(Заголовок и ниже следующие эпиграфы внесены мною позже)

1. Карасакал, руководитель башкирского восстания 1739-40 годов. Карасакал был смелым воином, народным организатором, начитанным; совершал хадж в Мекку и Медину. Башкиры сложили о Карасакале песни и легенды.

И.Г.Акманов (Башкортостан. Краткая энциклопедия, стр.367).

2.Потери башкир в восстании 1737-40 годов: убиты 18.134 человек, взяты в плен и отправлены в Рогервик на тяжелые работы 3.236 человек, проданы

русским помещикам (на рабство) 5.983 человек, многим отрезаны носы и уши. Общие потери составили 28.190 человек.

П.И.Рычков. История Оренбургского края... стр.488).

3. «Желаю от господа бога здравствовать ея и в., потом вам, генерал-лейтенанту *Л.Я.*Соймонову. От меня владельца Шуны, контайшина сына, вам высокопревосходительному генералу-лейтенанту и *большому брату* Соймонову премного кланяясь... доношу вам, превосходительному генералу: нынешнею весною ездил я, владелец Суну контайшин, порубил оных каракалпаков, побрал многие пожитки и детей брал в полон; ныне еще еду со многим войском и буду требовать у оных каракалпаков называемаго Хадже хана и *башкирцев*, которые у них каракалпаков живут... *которые ныне состоят вам русским и нам неприятелями*. И желаю ехать, взяв Ходжея хана и живущих *башкирцев* и явится з заслугою и отдать их своею рукою... А что вы требуете меня, называя *башкирцем* и каракалкпаком, то я сущей владелец Суну, контайшин сын; и ежели впредь меня будете требовать, то прошу писать, называя Суною.

Оное переводил переводчик Араслан Бекметов».

Из послания Карасакала своему "большому брату" г.-*л. Л.*Я.Соймонову. Материалы по истории Башкирской АССР, часть I. М.-*Л.*, 1936, стр. 478.

4. Карасакал не был ни башкиром, ни батыром, а был проходимцем-авантюристом, провокатором, тайным шпионом князя Урусова и генерала Соймонова... Для того, чтобы восстановить историческую правду и раскрыть подлинное лицо Карасакала, требуется заново написать историю данного восстания. Такую большую работу смогут совершить только те историки, которые верны исторической правде.

Ахмет-Герей Янгалин,
кандидпат исторических наук (журнал "Агидель", 2010 №6).

5. Первому секретарю Башкирского обкома КПСС тов. Шакирову М.З. 14.04.1987.

Хочу обратить Ваше внимание на серьезный просчет в идеологической работе республики, а если конкретно — в нашем литературном цехе. С этим очень серьезным и ответственным вопросом я счел нужным обратиться непосредственно к Вам, ибо надеюсь, что наш обком сумеет исправить допущенную ошибку на месте. Ведь речь идет о ставшем уже достоянием тысячей читателей нездоровой публикации (Б.Рафиков. Карасакал. Исторический роман, журнал «Агидель» номеры 10,11,12 за 1986 г.), грубо исказившей историческую правду о башкирском восстании первой половины 18-го века и тем самым нанесший вред основам дружбы башкирского и русского народов — делу интернационального воспитания, ибо в этой публикации сделана попытка воспеть как национального героя

зловещего пришельца — направленного на Урал для подрыва Россию изнутри *турецкого тайного агента Карасакала,* который, коварно объявив себя потомственным башкиром и поборником башкирской свободы, сумел временно обмануть часть народа и *выступил* под исламским флагом *за отделение Башкортостана от России и провозглашение там отдельного мусульманского ханства под эгидой оттоманской Турции...* К сожалению, благодаря прямой поддержки руководителей Союза писателей (А.М.Мирзагитов, А.С.Гареев) и их приспешников (Р.Г.Султангареев, Р.Н.Баимов, Г.З.Рамазанов) полусырой опус этот в спешном порядке был опубликован в самый канун 70-летия Великого Октября... Кампания умиленного восхваления злополучного сочинения по телевидению и радио была начата еще с конца 1985 года, несмотря на то, что к тому времени опус не был еще даже завершен, не говоря уже об элементарной правиле порядочности восхвалителей — предварительного обсуждения текста в творческой секции прозы. Дело дошло до того, что еще никому не известное сие «произведение» высокопоставленного автора (секретаря правления Союза писателей) выше указанными его приятелями высокого ранга в нарушение писательской этики было восхвалено с трибуны партсобрании (27 января 1986 г.), а в проект решения собрании был навязан пункт, отметивший злополучный «Карасакал» как выдающееся достижение башкирской исторической прозы. Одним словом, руководство усиленно толкало литературного «кота в мешке» к немедленному изданию. Осознав пагубности такого опрометчивого шага, я, как коммунист и писатель, был на приеме у главного редактора журнала и секретаря партбюро тов. Гареева и предупредил: «Прежде чем опубликовать, семь раз отмерьте, ибо Карасакал — сомнительная личность, а автор, к сожалению, не блещет эрудицией». На что Гареев отрезал: «Это не твое дело. Мы, руководители, сами знаем, что нам делать!» Главредактору, чтобы убедиться в несправедливости своих слов, было бы достаточно полистать доступные труды специалистов и документы о башкирских восстаниях 1704-11 и 1735-40 годов...

Такой принцип деятельности руководства и послужило главной причиной появления на страницах журнала в 1986 году ряда серых и по сути вредных опусов, сочиненных «людьми при должностях», в том числе названный здесь «Карасакал» и другой явный литературный брак — повесть самого главредактора Гареева «По ухабистым дорогам»... С подписью главредактора Гареева подобные ляпсусы опубликовались и прежде, например, вот такие «жемчужины» родной словесности (приходится воспроизводить ужасное сквернословие из журнальных страниц, за что прошу прощения):

Урыҫ, урыҫ — у...раҡ,
Ыштан төбө тупраҡ.
Кафыр менән дуҫлашҡандар

Беҙҙән йөрөһөн йыраҡ («Агидель», 1983/9, стр. 44).

Подстрочный перевод:

Русский, русский — пердун,
В штанах — дерьмо (буквально — почва).
Те, которые подружились с кафром (т.е. с русским),
Должны нас остерегаться.

И еще:

Ҡапый ҡорһаҡ Усман
Ҡоштабаҡҡа ҡоҫҡан.
Ышанына сы...ҡан.
(«Агидель», 1983/9, стр. 35).

Подстрочный перевод:

Брюхатый Усман
В большую тарелку наблевал.
В штаны насрал.

А события в контексте происходят в наше — советское время... Даже в самой захудалой эскимосской яранге, затерянной за полярным кругом и все же выпускающей у себя в уголке стенную газету, подобные «творческие шедевры», не говоря уже об их *антирусской направленности,* тотчас были бы выброшены в мусорную корзину как продукт нездравомыслия. Однако наш главредактор журнала и одновременно секретарь партбюро А.С.Гареев без колебаний подписал их в печать, опубликовал 52-х тысячным тиражом и отправил в народ на повседневную потребу. Такое стало возможно не за полярным кругом, а в наших условиях в солидном печатном органе Союза писателей БАССР, руководимом тов. Мирзагитовым. Дело это усугубляется еще тем, что заместитель главного редактора журнала Султангареев, непосредственно отвечающий за прозу в журнале, в кое-каких вопросах тоже полный профан, т.е мыслит на уровне своих начальников. Ведь не кто иной, как он, коммунист, в республиканском активе творческой интеллигенции, состоявшегося в Доме политпросвещения сразу после XXVII съезда КПСС буквально ошарошил публику, умоляя от секретаря обкома разъяснения: «Укажите, пожалуйста, как нам поступить: этих решений XXVII съезда партии в своей работе нам исполнять, или нет?» Комментарии излишни...

Само судилище

Зал “суда”: Дом Союза писателей БАССР. 28 мая 1987 г. Повестка дня: Историческая концепция романа Б.Рафикова «Карасакал» на основе письма т.Султанова З.А. первому секретарю обкома КПСС.

Протоколист — А. Филиппов. (Так как протокол для меня остался не доступным, излагаю процесс по своей записи, сделанной по ходу обсуждения).

Секретарь партбюро **М. Гафуров** оглашает письмо Султанова и один за другим прочитывает отзывы на роман следующих историков (сами они не присутствуют):

1. Акманов, Рахматуллин. Вывод: никаких материалов об отделении от Росси нет. (Дипломированные лжецы!).

У Игнатьева есть, однако это не подтверждается историческими документами. Миндигул Юлаев — башкир, его объявили ханом.

Ссылка на «Материалы по истории БАССР»: восстание распространяется по Сибирской, Ногайской дорогам. Провозглашение хана сыграло положительную роль. Анализ романа — положительный, все дается там правильно на основе исторических источников.

Роман написан со знанием дела, автор основательно изучил исторические материалы.

2. Асфандиаров. Роман — положительное явление. Большая изыскательская работа проведена автором. Ему удалось.

Главная сила в романе — народные массы.

Все имена соответствуют исторической действительности. Стремление оставаться в составе России. (Вот лжец!..). Идейно выдержан.

Прения:

1. А.Филиппов. Большое расхождение между письмом З.Султанова и отзывами ученых. Это может быть, потому что это — история, мало освещенная.

Далее А.Ф. анализирует причины башкирских восстаний первой половины 18-го века в сравнении с восстаниями яицких казаков. Казаки как будто подопытные.

Цитата от Оренбургского писателя Пистоленко об Урусове (восхваляет Карасакала как молодого башкира). Объективная оценка, говорит Филиппов. Споры, говорит он, по-моему из-за каких-то мелочей. Карасакал, Батырша — были на уровне Салавата.

З.Султанов. Хо!

М.Гафуров. Что?!

З.Султанов. Ху, говорю!

2. Г.Ибрагимов (отсутствует, его письмо провозглашает публике **М.Садыкова**).

Дается анализ романа «Карасакал». «Батша тарихсыларының баһаһына таянып, башкорт күтәрелештәрен хөкөм иттеләр быға тиклем. Был хата булды».

«Царистская иллюзия».

(Положительная оценка романа).

3. Г.Хусаинов. Султанов и остальные стоят на противоположных рубежах в трактовке истории. Методика исследования Султанова какова? Цель письма?

Неужели мы, писатели, до такого уровня опустились? Султанов показал свое моральное лицо. (В своей реплике З.Биишева поддерживает Г.Хусаинова).

Далее Г.Хусаинов прославляет Карасакала. Говорит, что даже буржуазные историки его прославляли. Некоторые из них Карасакала называли авантюристом.

Мы — советские писатели, мы должны разобраться, кто такой Карасакал?

Султанов следует по толкованиям буржуазных историков.

Роман идейно выдержан со своей концепцией.

Делает анализ романа (положительный).

Обращаясь злобно Султанову: «Карасакал — турецкий агент», — говорите, но таких документов нет. Например, Шамиля тоже объявляли английским агентом.

Султанов придерживается *сталинской концепции* относительно истории, говорит он.

Очернительством нашей истории занимаешься ты, товарищ Султанов!

4. З.Биишева. Читала исторический очерк Г.Хусаинова (о Карасакале), роман Рафикова, очень понравились мне. (Роман Б.Рафикова она оценивает очень высоко).

З.Султанов. Зайнаб-апай, этого ведь недостаточно, чтобы дать верную оценку историческим событиям.

З.Биишева. Султанов занимается мелочами.

З.Султанов. Нет, грубое искажение исторической истины – это не мелочи!

З.Биишева. Писатель не обязан придерживаться документов, он должен творить образ. Имеет право на вымысль.

З.Султанов. Зайнаб-апай, Вы в своем романе “На берегах Ика” касательно событий 1919 года Ваших земляков братьев Каримовых назвали “красными партизанами” и возвели в ранг героев, но в действительности были они обыкновенными бандитами-убийцами, которых военком Н.Салтяшев заслуженно застрелил.

З.Биишева. Роман очень хороший. Мы не должны очернить своих героев, таких, как Карасакал. Наш патриотический долг требует этого.

5. **Г.Шафиков**. Большая ответственность эта — тема Карасакала.

Говорит с некоторым оттенком критики романа, но в целом положительная оценка.

6. Р.Баимов. Роман обсудили в секции. Провакационное обвинение Султанова, мы должны будем это осудить. Такие поступки должны быть осуждены.

7. Д.Буляков. Я — председатель ревкомиссии Союза писателей. Около года Союз писателей занимается только разбором жалоб. Литературу надо писать чистыми руками, а не писать жалобу. Письмо написано из-за личных побуждений, злобы. У автора (Султанова) это пятая жалоба по счету. Это чья-то рука. Кто-то руководит автором письма. Например, когда недавно шла молва, что

меня собираются выдвигать председателем Союза писателей БАССР, он написал жалобу на меня...

З.Султанов. Это была не жалоба, а разоблачение Вашего плагиатства – Вы оттяпали кусок от моего неопубликованного еще романа.

Д.Буляков. ...а теперь, когда идет молва о том, что Булата Рафикова собираются выдвигать главным редактором журнала «Агидель», он жалуется на Рафикова. Это все для того, чтобы нас не выдвигали.

Мы не должны докатиться до анархии. Демократию Султанов использует в корыстных целях. Предложение: рассмотреть поведение автора письма на собрании. Очернительством занимается. Он — настоящий сталинист.

З.Султанов. А кто же Вы сами тогда? Троцкист?

8. Р.Султангареев. Цель автора письма ясна. Редакция его роман не опубликовала — с этого и началось. Я задавал вопрос секретарю обкома не в Доме политпросвета, как пишет он, а в Доме актеров...

З.Султанов. В основном, значит, я прав!

Р.Султангареев. ...значит, автор лжет. Поэтому и в остальном он лжет.

9. Муса Гали. Делает анализ романа. Первая попытка освоить очень интересную и важную тему, в этом смысле автор выполнил свою миссию. Концепцией романа я согласен.

10. А.Магазов. Две диаметрально противоположные позиции: Султанова и рецензентов. Обе стороны ссылаются на документы. Нужно нам тоже знать документы, заглянуть в них. Мы должны были заранее ознакомиться с текстом письма и рецензиями историков. Но этого не было.

Второе. Сказали, что историки придут, а они не пришли. Автор письма пришел, но они (историки) не пришли, а мы хотели бы заглянуть им в глаза.

Я согласен с выступающими. Мы почему так легко хотим отмахнуться от Карасакала? Разве такие личности много у нас в истории?

З.Султанов. Такого немного, но истинных героев очень много.

А.Магазов. Концепция Султанова не выдерживает критики. Роман положительный. Но Бәпәнәй и Ҡараһаҡал несколько идеализированы. Классовые положения башкирского народа завуалированы.

11. Н.Асанбаев. Я два года болею, не смог прочитать роман Рафикова. Искать тут только плохое не стоит (для наших будущих мероприятий).

Почему З.Султанов написал такое письмо? Я не одобряю. Но надо разобраться. Может, он в обиде. Почему не помогаем Султанову, чтобы напечатать его роман? Мы должны ему тоже помочь.

12. А.Гареев (гл. редактор журнала). Я еще раз убедился, что мы не ошиблись опубликовав роман «Карасакал».

(Восхваляет роман).

Султанов настолько озлоблен, он говорит (пишет), что я, Амир Гареев, являюсь депутатом горсовета, а я не являюсь.

13. М.Садыкова. Прочитала роман с большим интересом. Насчет освещения личности Карасакала: из архива кто что возьмет, так и напишет.

Писатель имеет право трактовать по-своему.

З.Султанов. Искажать историческую правду?

14. А.Мирзагитов (председатель Союза писателей БАССР). Наконец, у нас появилась историческая романистика. Мы можем обсуждать и пойти дальше. Политическая постановка об искажении идейной концепции романа — мы такого искажения не нашли. Мы доказали, что никакого искажения мы сегодня не обнаружили.

Приходится выразить сожаление, в письмах Султанова как отрицательные герои фигурируем мы, руководители.

Поддерживаю Диниса Булякова насчет осуждения Султанова.

15. М. Гафуров (секретарь партбюро). Никто концепцию Султанова не поддержал. Письмо в целом очень тенденциозно. Он ссылается в основном на книгу изданной в 1936 году.

З.Султанов. Да, но это ведь академический сборник исторических документов!

М.Гафуров. В письме явные натяжки и передержки (например, вопрос Султангареева секретарю обкома).

Роман, еще не опубликованный, был восхвален на партсобрании, говорит он. В постановлении было сказано: Ғ.Ибраһимовтың һәм башҡаларҙың романдарына иш булып, ошо тарихи романдарға өҫтәлергә тора «Ҡараһаҡал», тип. Намеренная натяжка. Нецензурные вещи («Урыҫ, урыҫ»...). Это не антирусская в концепции, у автора текста в журнале иная позиция. Это — дразнилки. Автор письма сознательно вводит в заблуждение обком партии. Товарищ Султанов поступил нечестно.

Единое мнение: концепция романа идеологически правильная.

16. К.Аралбаев (инструктор отдела Культуры обкома партии). Объясняет прохождение подготовки к обсуждению (в обкоме, парторганизации).

Нашим историкам не верить нельзя. Правильно они оценили роман положительно. Фальсификации истории нет.

З. Султанова. Если Вы так самоуверенны в этом, советую прежде всего прочитать башкирское историческое предание «Ҡарас менән Ҡараһаҡал» — «Карас и Карасакал». А здесь для сведения присутствующих приведу лишь одно замечание, высказанное из уст башкирского народного сасяня Ҡараса в присутствии самого Карасакала: «Ведь он (Карасакал) — пришелец со стороны и может стать в нашей стране всего лишь заплатой». (Башкирские предания и легенды. Уфа, Башкирское книжное издательство, 1985; стр. 118).

Если позволите, в своем последнем слове я выскажу **некоторые мысли (дополнения) к письму от 14 апреля 1987 года, врученному мною 22 апреля первому секретарю Башкирского обкома КПСС т. Шакирову М.З.**

1

Чтобы в связи с текстом письма не было превратных толкований о значении и места в жизни общества исторической литературы, знании истории в нашей духовной жизни, хочу привести некоторые строки из критической статьи «Поверка историей» известного литератора Виктора Кочеткова, опубликованной в «Литературной газете» от 22 апреля 1987 г., где речь идет о нашей

«душеохранительной зоне», призванной противостоять в этом мире, полном разными катаклизмами, всеобщей духовной деградации и смерти, наступающие обычно в периоды исторических разломов.

Что же составляет эту душеохранительную зону? Из всех ее компонентов автор выделяет правдивое «*историческое знание, без которого нет ни гражданина, ни патриота, ни подлинного строителя новой жизни. Историческое знание — это корневая связь с прошлым, это кровное родство со всем, что воздвиг народ на путях своей истории. Историческое знание — это тот свет, который через века и нам светит*». Отрицание или забвение этой истины, говорится в статье, чреваты для народа и всей страны с далеко идущими пагубными последствиями. Ибо «*историческое беспамятство... было одной из главных причин ухудшения нравственного климата в нашем обществе, о чем теперь много говорится со всех трибун. Случилось то, что всегда случается, когда отмахиваются от чего-то важного и обязательного. Прошлое перестало быть великим учителем настоящего. От него ждали не уроков, а согласного кивания головой. От него ждали не мудрости и строгости, а комплиментов и реверансов. Что из этого получается, мы все теперь знаем, пережив и «культ личности», и «волевое руководство», и «застойный период»...* (Конец цитаты).

Как известно, это теперь осознано не только со стороны выдающихся мыслителей той или иной страны, народов, но и в глобальном масштабе, всем мыслящим человечеством, чему свидетель в частности резкое возрастание в последнее десятилетие во всех национальных литературах значения исторической темы, усиленное проникновение авторов почти всех жанров в недра истории. Стало это присущим и для всей многоязычной советской литературе, в том числе и башкирской, и мы в этой области имеем уже ощутимые результаты — я имею в виду исторические романы Галия Ибрагимова, Яныбая Хамматова, Кирея Маргана. Одновременно необходимо заметить, что это направление было для наших авторов почти неизведанным, они зачастую работали полагаясь на свою интуицию, на свой страх и риск, в силу этого нередко были обречены не только на удачи. Но они были на передней линии фронта и вели «разведку с боем», отвоевывая таким образом плацдармы для передвижения других, всей литературы. Во многом интересный, богатый фактурой и дышащий трепетным авторским индивидуализмом видения мира многоплановый роман К.Маргана «Бөркөт ҡанаты», как уже неоднократно отмечалось в печати, к сожалению, страдал неким перекосом в сторону явной примитивизации народного духа и жизни, что привело к ощутимому снижению идейно-художественного уровня произведения. Потом появились романы «Кинйә», «Төньяҡ амурҙары» уважаемых старейшин башкирской прозы Г.Ибрагимова и Я.Хамматова, добросовестно сверенные с документами и исторически достоверные, после которых мы все как будто в некоторой степени вздохнули с облегчением. Но облегченный вздох этот, как мне кажется, был еще преждевременным — в трудных дебрях исторического романа, как оказался, поджидал нас другой серьезный подвох, а именно перекос в другую сторону, в сторону лакировки и идеализации некоторых исторических личностей, совершенно не заслуживших этого, что привело, к сожалению, и даже фальсификации некоторых страниц

многострадальной нашей истории. Если конкретно говорить, речь идет об объемистом сочинении нашего коллеги Булата Рафикова (Карасакал. Исторический роман, журнал «Агидель», 1986 г., №№10,11,12)...

2

Да, возможны разные толкования разными людьми одних и тех же исторических документов, показаний очевидцев и событий, но в данном случае никто из серьезных исследователей, если он конечно сознательно не выступает на ложный путь из-за своих узкогрупповых и корпоративных соображений, то есть за «честь мундира» или для сокрытия своих прошлых исследовательских промахов и ошибок, то никто из них не возьмется отрицать суть бепенея-карасакаловской политической программы, четко выразившийся в их практических делах с целью отделения Башкирии от России и объявления там мусульманского ханства в вассальной зависимости от Турции, то есть их намерения по сути предательски присоединить Башкирию в лагерь исконних зарубежных врагов России; никто из серьезных исследователей не возьмется также носителей этой сепаратистской программы объявлять борцами за единства Башкирии с Россией, а явных сепаратистов-феодалов — российскими патриотами. Но наш коллега Рафиков, к сожалению, на всем протяжении своего сочинения (в журнале “Агидель”) пытается бесплодно утверждать именно это, в каждом удобном случае упорно выдавая черное за белое. Но, как говорится, шила в мешке не утаишь. Правда она всегда одна и бескомпромисна. Ее нельзя изменить ни с помощью большинства голосов на сходках, как это случилось здесь, ни с приемом угрожающей демонстрации кем то из высокого служебного кресла. История только тогда история, когда она полная правда. И черное в истории останется черным, даже в том случае, когда не четыре, как у нас, а четыреста кандидатов и докторов наук одновременно и единогласно будут утверждать обратное. Потому что рано или поздно правда возьмет свое, восторжествует истина...

3

Борцы за народную свободу уже следующего поколения — руководители Крестьянской войны (Салават Юлаев, Кинзя Арсланов и др.) полностью освободились от пагубной для нашего малочисленного народа и всего освободительного движения политической программы пришельца Карасакала и выступили совместно с русскими и другими народами за единую свободную Россию (конечно, в их понимании) — это было громадным шагом вперед, прогрессом, являвшимся залогом борьбы и победы также следующих поколений вплоть до Великой Октябрьской социалистической революции, выдвинувшей из недр башкирского народа таких выдающихся интернационалистов-ленинцев, как Ш.Худайбердин, Б.Шафиев, Б.Нуриманов и др. Однако семена «карасакаловщины» тоже, как своего рода идеологический сорняк, на нивах истории скрытно продолжали свой род, засоряя и отравляя идеалы народной борьбы, например, фанатичную душу Батырши... Однако автор «Карасакала», к

сожалению, на данный урок истории не обратил внимания, ибо не сумел связать отдельные периоды и факты истории с предшедствующими и последующими им явлениями, то есть отсутствует у него взаимосвязь, целостное понимание истории. Потому что он в данном случае выступает не как самостоятельный исследователь истории, историк (но писатель, взявшийся за сочинение исторического романа, таким быть обязан!), а является лишь своего рода компилятором высказываний некоторых наших горе-историков, хватая верхушки из их сочинений, отвечающие установкам их незрелой концепции. Поэтому и выбор его, Б.Рафикова, ограничен почти одним историком И.Г.Акмановым. Слов нет, он способный историк, немало сделавший в узкой своей области. Но не надо забывать, что он над своей трудной темой (башкирские народные восстании первой половины 18-го века) работал в годы отсутствия гласности и преобладании ошибочной концепции Устюгова, огульно объявившей эти восстании реакционными. Тогда сама тема была почти под запретом, что вынуждал исследователей говорить полуправду (а это, как известно, хуже неправды). Вот в таких условиях, по-видимому, историк был вынужден некоторые негативные стороны указанных восстаний (например, политическая программа Карасакала и Бепенея) затушевывать или же говорить о них полунамеком, а самих этих личностей даже облагораживать. Иначе просто запретили бы тему, это мы теперь хорошо понимаем. Но наступили новые условия. Однако наш писатель, автор «Карасакала», очевидно, работы указанного историка принял за чистую монету и вместо того, чтобы их критически рассмотреть и творчески осмыслить, пошел по легкому пути, поступил по инерции. Вот почему оставил он без внимания исследований другого замечательного советского историка А.П. Чулошникова (кстати, фактически сам Акманов опирается на его труды), который уже в 30-х годах, как известно, сумел верно оценить эти восстания как прогрессивные для борьбы народов России, но в то же время сумел очень правильно указать на их негативную сторону, подтверждая документами. Несерьезное отношение писателя к своему профессиональному долгу, неоправданная спешка и ловкачества на пути публикации с использованием для этого своего служебного положения привели автора к явной неудаче, которую он при нормальных условиях прохождения рукописи мог бы вполне избежать. Но это уже относится к нравственным качествам литератора...

4

Тем, кто углубленно интересовался с историей кочевых и полукочевых (как башкиры) народов, в частности древних тюрков, монголов, манчжуров, очень хорошо известно, что у них, особенно представителей из ханской династии, не было раз и навсегда нареченных, эквивалентных современному, неизменных личных имен. Об этом пишет известный специалист по древнетюркской истории Л.Н.Гумилев, об этом же пишет знаток жизни кочевников средневековья С.А.Плетнева. Таким образом, в семейном кругу некий сын мог именоваться, например, Байбулат, а в приютившей его ставке калмыцкой тайши он — Суну батыр, в обществе сасянов и абызов он был известен как Хажи, для черни

назывался Карасакал, а после провозглашения его султаном стал он носить уже ханский титул Гарей (как известно, в глубокой древноси так именовался прославленный самостоятельный башкирский хан). Эта древняя традиция среди башкиров как реликт наблюдается до сих пор: почти в каждой деревне можно встретить людей, носящих одновременно по несколько имен (например, одно — официальное, для паспорта, второе — для узкосемейного пользования, третье — как кличка для улицы)... Я убежден, известный нам человек под кличкой Карасакал — один из потомков последнего хана Сибирского Кучюма, чингизид, тоже широко пользовался с этой древней традицией многоименства, его к этому принуждали еще сами обстоятельства, ибо он, чтобы захватить бывшее так называемое «владение отцов», башкирский престол, до поры до времени вынужден был наряжаться то под башкирскую маску, то под чалму святого Хажия, а свое подлинное кучюмовское происхождение, ненавистное башкирскому народу, тщательно скрывал, иначе, как уже сказано, башкиры его запросто могли убить или поймать и выдать русским властям, как они до этого с Аблай-ханом (сыном Кучюма) и поступили. (Как видно из документов, в последний период восстания башкиры относительно Карасакала также открыто выразили такое же намерение, ибо они к этому времени успели его раскусить)...

5

Термин «султан» в своем изначальном значении это сюзерень, то есть правитель какого-нибудь удела, обласи, страны вассальной зависимости от хана (императора, короля). А в нашем случае это правитель в вассальной зависимости от турецкого султана, то есть ставленник Турции. Сам турецкий император традиционно тоже назывался султаном, а это показывает, что основатель трона оттоманской Турции сам тоже когда-то был от кого-то зависимым султаном. А в наших примерах кучюмовские потомки ни Мурат Кучюков, ни Байбулат Хасянов (Карасакал) первоначально правителями не были, а как потомственные чингизиды, которым «полагался» трон, в поисках «вакансий» на престол скитались по степи. У них в жилах текла ханская кровь и больше ничего, поэтому до поры до времени никто султанами их и не называл. Для этого кто-то из суверенных государей должен был их на этот сан возводить — в данном случае это тайно сделала оттоманская Турция; по крайней мере можем твердо заявить, что султановскому сану Мурата Кучюкова предшедствовал его тайный визит в Константинополь к турецкому султану, а сородича его Байбулата Хасянова (Карасакал) — трехмесячное пребывание в 1737 году летом турецкого чрезвычайного посла (Векиль) в соседней с Башкирией ханской орде Абулхаира. Как известно, Карасакал до поры до времени свое султанство скрывал и об этом заявил только в самой последней и критической стадии восстания, в связи с чем участникам восстании им была обещана «с моря» 80-тысячная турецкая подмога. Вот это и показывает, кто стоял за новоявленным «султаном»... Провакатор Карасакал однажды обманул наш народ, но предки наши сумели его раскусить (посмотрите названное выше башкирское историческое предание «Ҡарас менән Ҡараһаҡал» — «Карас и Карасакал»). Давайте же теперь и мы, спустя 250 лет, не

будем сами себя обманывать, снова выдавая пришлого извне провакатора и авантюриста за национального героя башкирского народа.
Подитоживая свое последнее слово скажу: я не отрекаюсь от своего мнения о Карасакале. Ваш суд – это сплетни из бабушкиной кухни. Но на этом примере можно увидеть на каком уровне находится наша историческая наука.

15.05.1987

Коротко о наших госсимволиках

I. Начнем с византийского двуглавого орла – герба Российской империи. Что русские цари эту символику переняли от Византии – всем уже известно. Но откуда раздобыли ее сами византийцы – у греков ведь такого не было? Ответ: символика им досталась от древних скифов-башкир – своих соседей.

Наша историческая родина, занимавшая по площади значительную часть евразийского континента, в географическом и этно-политическом аспекте представляла собой единое целое, разделенное условно на две половины: Внутренняя Скифия и Внешняя Скифия (Птолемей) или Внутренний Башкорт и Внешний Башкорт (арабские географы). Является это реликтовым этно-духовным состоянием первородства человечества, разветвленного на материнскую фратрию ***Усярган*** (мифических потомков первопредки Шульгана) и отцовскую фратрию ***Башкорт*** (мифических потомков первопредка Урала). Между ними в центре стоял мифически *оберег* Столп Имира (Мира) в виде священного *Терека*/*Торока*, воплощенный в виде горы *Тора-тау* (буквально Фаллос-гора, находится в Ишимбайском районе Республики Башкортостан), оно же священное дерево Терек. Ведь недаром герой усяргано-шумерского эпоса Гильгамеш на вершине священной горы водружет магический кедровый Столп. Это был, как мы знаем из мифологии народов мира, охранный Столп-оберег для всего континента, стерегущий оба его половины, названные, как мы уже знаем, Внутренний Башкорт (юго-западная часть) и Внешний Башкорт (северо-восточная часть).

У меня нет никаких сомнений на счет того, что современный алтайский народ является единокровным осколком древних башкир, об этом свидетельствуют антропологические и этнопсихологические данные, также язык, мифология этих двух древнейщих народов, сохранившие в своей памяти множество мифов общего для нас языческого периода развития. Так вот, возведенный Гильгамешем охранный Столп Мира удивительным образом полно и ярко воспевается в героическом эпосе алтайского народа (Маадай-Кара, М., 1973):

> 45. В долине между семью большими горами-крепостями
> Стоствольный вечный *Терек*
> Под лучами Луны и Солнца,
> Как золото сверкая, стоит...

Здесь слово “Терек”, ошибочно переведенный на русский язык как “тополь”, одновременно означает и “Дерево”, и “Опора (Земли)” т.е Столп Мира, в то же время “Терек” (Торок) это Фаллос Господа Всевышнего Имира или гора Тора-тау...

65. На вершине семиколенного вечного Терека
Две одинаковые, с конскую голову, золотые *кукушки*
70. Днем и ночью гулко кукуя,
Перекликаясь сидят...
Они знают, кто когда умрет,
Знают, кто сколько проживет.

Башкиры до сих пор верят в такую же сакрально-магическую силу кукования кукушки “сакыра”...

80. *Посередине* семиколенного железного Терека
85. *Два одинаковых черных беркута сидят,*
Когти их острые как алмаз...
Под тремя небесами они
Лунокрылых птиц не пропускают,
90. Через три Алтая они
Четвероногих зверей не пропускают –
Глубь неба караулят
Эти два черных беркута...
95. Сторожат, чтобы неизвестными путями алыпы не прошли,
Караулят, чтобы узкими тропами богатыри не прошли...
Два черных беркута моих
100. Землю Алтая сторожат...

Точно такой Мировой Столп с двумя орлами *посередине* присутствует на башкирских хараусах – лобных повязках наших матерей (см. Народное искусство башкир, Л. “Советский художник”, 1968, стр.74). Заметте: на узоре харауса -- стилизованное изображене Столпа Мира в центре мифических Верхних и Нижних миров (их начертания изображают одновременно и четырех священных дорог); на верхней (правой или северо-восточной) половине пространства, олицетворявщий собой полуконтинент (Внешний Башкорт) – знакомые нам стерегущие два орла; на нижней (левой или юго-восточной) половине континента (Внутренний Башкорт) тоже те же два орла. Значит, на гербе отражено неразделимое единство двух половин одного государства и напрода.

Башкирский харауыс

Знаменательно то, что именно от башкирского слова “hарауыс” происходит известный всем интернациональный термин “герб”: hарауыс>hарабс>hербс>hерб/герб. Как говорится, если

бы я был президентом, как раз этот харауыс-герб сделал бы центральным узором государственного герба республики...

Как видим, из главных элементов нашего герба посредством символизации была получена и византийско-русская главная символика, только в ней двух орлиных туловищ свели к одному, но с теми же двумя головами и "острыми как алмаз когтями"... Византия была, как и сложившаяся позже нее Российская империя, многонациональной и немаловажную роль в этом государстве играли скифы-башкиры. Даже император их, византийцев, носил титул башкирского названия: ***василевс***>бас-ил-абыс (баш-ил-абыз) т.е. буквально *глава-страны-ученый муж;* есть и другая трактовка: бас-илбас т.е. буквально *глава глав всех стран* (император). Сей монарх, восседавший на троне, держал в руке ***скипетр*** (жезл), знак неограниченной власти, что тоже назывался по-башкирски: ***скептрон***>секептторон (грубо говоря, трахающий-встающий т.е. Фаллос-Тора-тау)...

О новоявленном гербе Республики Башкортостан и говорить не стану – настолько он выглядит (лично для меня, конечно!) лубочным и искусственно-примитивным... Помнится, в свое время на конкурс проектов герба были представлены и другие интересные предложения, учитывающие историко-духовный мир народа в тесной связи его с мировой историей и мифологией, но по настоянию наших ученых-консультантов они были оставлены без внимания...

II. О семипалом цветке курая на флаге. К сожалению, пока все твердо уверены в том, что семипалый цветок курая символизирует *семь* родов *(семирод),* будто бы образующих башкирский народ. Но почему только семь? Почти каждому ведь известно, что древний башкирский народ сложился из ***двенадцати*** основных родов, а не из семи. То есть семь родов из числа этой двенадцати в древности населяли северо-восточную половину прародины (Внешний Башкорт), и пять – юго-западную (Внутренний Башкорт), это было единое государство и народ. Однако современные рьяные изобретатели нашей госсимволики, может быть, не знали об этом, а может быть кое-что и слышали, но не сочли нужным углубить свое и так по их мнению глубокое знание, или же в служебной спешке они не успели заглянуть даже на всем известный фундаментальный труд профессора С.И.Руденко "Башкиры" (М.-Л., 1955, стр. 50), где ясно и понятно говорится: "В домонгольское время, по преданию, башкиры разделялись на ***двенадцать*** основных родов, из которых ***семь*** были расположены на территории бывшей Уфимской провинции, а ***пять*** – в зауральской ее части". Выходит, семипалый цветок на флаге республики символизирует только половину народа – жителей бывшей Уфимской провинции, называемая теперь в основном Республика Татарстан, а другая половина является вроде бы как бесхозная, выброшена *за борт,* как любил говорить товарищ Сталин. Выходит, современная Республика Башкортостан юридически никого не представляет? Или же вопреки всякому здравому смыслу представляет только население зарубежной республики. Об этом я пишу уже не первый раз...

Почему так случилось? Очень просто: в начале прошлого века один наш просвещенный шакирд (потом он же известный фольклорист), записавший из уст сказителя предание о союзе *семи* и *пяти* родов башкир, почему-то на уме у себя

выделяя только семерых, над текстом поставил условный рабочий заголовок "Семьрод". Но сомнительно, чтобы башкир-сказитель пользовался таким специфичным русским термином, скорее всего он рассказывал легенду без названия. Прошли годы и при издании названного текста другой советский ученый заметил этот "Семирод" и с обоими руками схватился за названный заголовок, выгрышный тогда в политическом отношении, усматривая в нем добрый признак устремления разобщенного башкирского народа к централизации под эгидой "присоединения к Русскому государству" (БХИ, эпос, третья книга, Уфа-1982, стр.21). И, как говорится, пошла гулять молва как ветер по губернии. Не смотря на то, что в другом солидном башкирском эпосе "Кусяк-би" (БХИ, эпос, вторая книга, Уфа-1973, стр.293) яснее ясного сказано, что у башкирского сюзерена Масем-хана ходили в подчинении все ***двенадцать*** вассальных биев-родоначальников, а территория государства была разделена на четыре дороги-области (с тремя родами на каждой)...

III. Следующий из всего этого вопрос: почему цветных полос на флаге именно три, а не четыре? Ведь у нас испокон веков были двенадцать основных родов разделенных на ***четыре дороги*** (из Центра континента -- Столпа Мира -- на все четыре стороны света расходились четыре дороги, являющиеся парными отрезками двух священных дорог ***Кюн-Уфи*** и ***Конгур-Буги***). А именно:

Дорога Кюн-Уфи или Шульгана – дорога Материнской (Эсэ) фратрии

Как видно из древних мифов, после рождения близнецов от первых прародителей на Континенте Евразии, их потомки раздвоились, со временем эти разошедшие концы отдалялись друг от друга, в результате чего произошли два древних перворода – фратрии. Позже главари фратрий (первопредки) в разных частях континента стали называться по разному: к примеру, близнецы Урал -- Шульган, Ромул -- Рем, Ахурамазда -- Анграмайнью…

Название дороги усярганов-башкир Кюн-Уфа (Көн-Өфө/Канифа) произошло, думается, от слов Кюн-Апа<Аба<Ама 'Солнце-Мать', а это значит, что она является дорогой Шульгана-Волчицы-Солнца, северо-восточная часть которой протянулась от «Пупа Земли» Аркаима на Дальний Восток до Желтого (Тихого) океана приблизительно по местностям Акмулла – Семипалатинск – Абакан – дальше по городам Монголии Кобоо, Улан-батор – и российским Улан-удэ – Чита – вдоль берегов Амура до устья, там переломилась направо вдоль берегов Желтого (Һары/Корейского) полуострова с продолжением до Желтого моря. Флаг этой дороги был желтого цвета, а люди носили одеяния преимущественно желтого цвета. Вот что важно знать: река Амур прозвана именем Господа Всевышнего Имира/Умера, башкирское значение этого слова «Жизнь»... Так-как каждодневное «***желтое*** Солнце» там по утрам восходило на краю материка «из-под моря», огибая *верхушку горы* – ***ос-таг,*** то усярганцев-башкир этой земли называли также ***ос-таг>остяк>истяк,*** и их флаг желтого цвета тоже назывался ***стяг.***

Другая часть дороги Кюн-Уфа протянулась от Аркаима на юго-запад приблизительно по такому маршруту: Волгоград – Астрахань – Тбилиси – Баку –

Ереван и через Кавказ, Турцию, Сирию по верховьям рек Евфрат и Тигр (древнешумерские земли) и городов Халеб – Дамаск – Амман (Иордания) – по берегам Шульганского (Мертвого) моря через городов Акаба – Эт-Тур и дойдя до мыса Синайского полуострова дорога эта перломлялась в сторону «**красно**-заходящего Солнца» -- юго-запад до устья Суэцкого канала и до реки Нила, обхватывая своей «лапой» Красное море – край Красного (Атлантического) океана. Флаг этой дороги имел красный цвет и назывался ***алям*** (от слова *алый-красный*), люди носили одежду преимущественно красного цвета. По этой дороге древние (XXIV век до н.э.) усярганцы-башкиры под руководством своего славного царя Усярган-Саргона совершили великий военный поход с завоеваниями Месопатамии, Египта и оставляя там свой глубокий след. Можно с уверенностью утверждать, что древние башкиры успешно осваивали земли от Агидели до Нила, что подтверждается наскальной географической картой, начерченной нашими предками на горах Алтая (рис.45), обнаруженная научной экспедицией под руководством известного ученого А.П.



Рис.45. Древняя наскальная карта: от Агидели до Тигра (названия объектов проставлены мною).

Окладникова (Петроглифы Горного Алтая, Новосибирск – 1980, стр.88, рис.3):

Дорога Кунгур-Буги или Урала -- дорога Отцовской (Ата) фратрии

Фратрия Ата, во главе которой стоял «Боз-Кар улы» ’льда-снега-сын‘ Урал, занимал северо-восточную часть континента (Внешний Башкорт), преклонялся своему первопредку Уралу. От сокращенного от «Боз-Кар улы» «Кар-ул» произошел титул главаря «король»; от него также произошли названия орудий труда «корал», а также имя героя эпоса тюркских народов Гур-ул, Арал, Урал. Потомки Урала добывали руду из недр Уральских гор, отливали оружия, возделывали землю, отражали вражеские нашествия – тем и жили. Кстати,

название первого орудия труда для пашни земли также произошел от того же «Кар-угл» - каруг>*кюряк* (лопата). Другой синоним слова плуг в древнерусский язык вошел как орал -- одинаковый с «Уралом», оратай же (пахарь) – произошел от «Орал-атай» (Урал-батя – отец). У нас «Орал-атай» существует как Орат – *ир-ат* (мужчины), в виде Эрота проник в древнегреческую мифологию… Мужчины Уральских гор нападали на врагов с кличем «Орал» (русское слово *орал* -- кричал); клич – оран – русские до сих пор понимают как «орать»; до сих пор наши солдаты идут на наступление с криком «Ура!».

На далеком южном берегу континента дорога Кунгур-буга, «переломившись» в устье Ганги, направляется на плодородные земли к берегам Персидского залива. «Край света» на южном кончике дороги упирается на граничивший континент Синий (Индийский) океан, поэтому людей, проживающих на этой развилке дороги Кунгур-буги, привлекал синий цвет – у них и знамя было синего цвета и называлось оно от первой части старинного слова ***болоҡ-һыу*** ’синяя-вода‘>болоҡ>***флаг***. Если направиться в путь с окраины Индийского океана до Урала, то эта южная развилка великой дороги протягивается к северу с начала от города Сатагам (башк. Сата-Кан – развилина реки Канак/Ганг), что на устье реки Ганга, к северу -- мимо города Ланхпау по верховью Ганги через Кашмир-Пакистан он доходит до Кабула и простирается через Кушка – иранский Мешхед (башк. Масгут/Массагет) – Ашхабад – Кунград – Гурьев – Орск, затем по верховью р. Яик к горе Атас (Магнитогорск). О том, что дорога проходит через эти местности, говорят названия древних городов: Башкорт (Афганистан), провинция Башгерд и гора Бажарт (Иран), город Кангырт (между Аральским и Каспийским морями)… В городе Аркаиме, что южнее горы Атас на расстоянии 200 *км* у подножья горы Аркаим, там, где соединяются реки Оло Караган с Утяганом, был расположен караван-сарай или обсерватория – место пересечения дорог Кунгур-буги с Кюн-Уфу. Процветавший цивилизованный для своего времени город существовал ещё 2 тыс. лет до времен города Трои и прославился на весь свет своими бронзой, золотом, серебром и другими сокровищами Урала. Символ свастики, олицетворяющий воссоединение четырех частей света, эти две дороги Кунгур-буги и Кюн-Уфи, часто встречаются в украшениях Аркаима (журнал «Вокруг света», №3, 1989, С.36-41). Знамя этой дороги назывался, как уже было сказано, от слова ***болак*** ’синяя вода‘ – ***флаг,*** и имел синий цвет; люди носили одежду преимущественно синего цвета.

Среди эпосов «Старшой Эдды» есть чудесная «Песнь о Хледе», ее во всех отношениях можно назвать чисто башкирским эпосом. Он замечателен еще тем, что там назван древнейший наш город Аркаим/Архейм.

В эпосе даны верные географические координаты древнейшего Внутреннего Башкорта со столицей город Аркаим (готы-усярганы), а где-то далеко на востоке на другой дополнительной северо-восточной развилине дороги Кунгыр-Буга находился Внешний Башкорт (печенеги-башкиры или гунны). Эта гунно-башкирская дорога протянулась, думается, от Аркаима по направлению через современных городов Омск – Новосибирск – Томск – Красноярск – Братск – Усть-Кут – Бодойбо – Алдан – Охотск – Магадан – Эленск – Уэлен и через нынешний

Берингов пролив до земли Аляска (по-башкирски Алыска ’идти очень далеко‘) и дальше по континенту Северной Америки. На Аляске у Берингово пролива имеется гора Брукс (Буре-эсэ – Волчица) и река Юкон (Йыу-Кан ’вода-река кангинцев-башкир‘); от Берингова пролива до залива Гудзон обитают коренные жители *атапаски* (ата-паски-р -- «отцовские башкиры», то есть приверженцы Отца Урал-батыра). Там же в мифе индейцев *каяу* (слово кая/каяк/кейек – значит волк; они, как и усярганцы, приверженцы волка-волчицы) повторяется сюжет о двух первородах-фратрий из башкирской писаной истории «Ахуале Сынгыз»: человеческая дева, оплодотворенная лучами Солнца, рождает близнецов, одна из которых превращается «в водного дракона» (Шульган!), а другой, превратившись на десять гор (Урал!), дает тем самым обиталище для людей племени *каяу*, родоначальник которых, как у башкирских *кипчаков*, был рожден из дупла дерева.

Южные соседи (китайцы) печенегов-башкир вдоль дороги Кунгыр-буга восприняли многое из их духовной культуры, вплоть до того, что первооснователем китайской государственности является северный «варвар» (печенег-башкир) Хуан-ди (Куандык?). Китайский мифический герой Паньгу, как и башкирский Имир, был рожден из Хаос-Мрака и имел, как и Энкиду-Урал, парные бычьи рога. Он жил на высокой горе из яшмы (Уральские горы!), а после смерти его тело дало начало, как и в мифах об Имире и Урал-батыре, мирозданию со всей живностью на земле; его дыхание превратилось в ветер и облаков, голос – гром небесный, левый (женская половина Имира!) глаз – Солнце-Мать, правый (мужская половина Имира!) – Луна-Отец, руки и ноги – четыре стороны света, позвоночник – пять высоких гор (Тора-тау, Шаке-тау, двуглавый Куш-тау, Юрак-тау?); кровь – это все реки, сухожилия и кровеносные сосуды – дороги на земле, мышцы – почва, волосы – звезды на небе, зубы и кости – драгоценные металлы и камни, сперма – жемчуг и яшма, пот – дождь и роса... – все точно так же, как и в эпосе «Урал-батыр». Ученые считают, что китайцам миф о Паньгу был внесен со стороны *(140:39)*, значит, от печенегов-башкир. Китайцы считали, что далеко на западной горе (Урал!) живут люди «с варварским одеянием» (башкиры!), которые поклоняются, как и написано у Ибн-Фадлана, *двенадцати великим богам (141:347).*

И так, дорога Кунгыр-Буга это есть «Кюн-Кара-Бага» ’Солнце Темное (т.е. Луна) Оберегающее‘ – дорога Коровы-Луны.

Хочу уведомить еще вот о чем: современное понятие «океан» -- бескрайняя водная гладь, на которые выходили концы всех четырех дорог, в древности назывался *тиңһеҙ/тингхез* (теперь *диңгеҙ* – море) в значении ’необъятный, несравнимый‘ и каждый обозначался общепринятым своим цветом (синий, темный, желтый, красный).

Дорогу Кунгыр-Буги на ее юго-восточной (синей) оконечности омывал Кук тингхез – Синий (Индийский) океан, а на северо-западной (темной) – Кара тингхез или Черный (Сев. Ледовитый) океан, реликтовым названием которого осталось там Карское (Черное) море.



Сверху вниз символы пра-предков: Имир, Шульган, Урал

Дорогу Кюн-Уфу на ее северо-восточной (желтой) оконечности омывал Хары тингхез – Желтый (Тихий) океан (имеется там реликтовое название – Желтое море), а на юго-западной (красной) – Кызыл тингхез – Красный (Атлантический) океан, осталось там реликтовое Красное море.

Указанным цветам соответствовали цвета флагов дорог и преимущественный цвет одеяния людей.

Дорога Кунгур-Буги имел символ в виде силуэта шестиконечной человеческой фигуры (голова – две руки – две ноги – фаллос=6) Урала-мужчины – шестиконечная звезда. Главных стражей этой дороги называли *Богатырь* – от слова Буга-тур 'Бык-тур'.

Дорога Кюн-Уфи имела символ в виде силуэта шестиконечной человеческой фигуры (голова – две руки – две ноги=5) Шульгана-женщины – пятиконечная звезда. Главных стражей этой дороги называли *Витязь* – от слова Би-атас 'главарь – сын славного отца'.

Символом всех восьми дорог, пересекающихся якобы на пупе Имира, служила восьмиконечная звезда. Все эти символы, в том числе Свастика, представлены как национальные орнаменты башкир.

В итоге получаем:

а) на восток до Желтого моря – т.н. Желтая дорога;

б) на запад до Красного моря – т.н. Красная дорога (общее название обоих – дорога Кюн-Уфе или Канифе);

в) на север до Черного (Кара или Карского) моря – т.н. Черная дорога;

г) на юг до Синего (Индийского) моря – т.н. Синяя дорога (общее название обоих – дорога Кунгур-Буга).

Столп Мира или Центр континента имел объединенный стяг с полосами всех четырех цветов всех четырех дорог, расположенные одна за другой сверху вниз в следующем порядке:

1. Желтая полоса;
2. Черная полоса;
3. Красная полоса;
4. Синяя полоса...

Все эти данные были почерпнуты путем глубокого комплексного изучения из кладези башкирской и мировой старины.

IV. Гимн наш по своему ультрасоветскому "стандартизацию" (мне так кажется) мог бы успешно обслуживать любую постсоветскую республику: в безликой безнациональной музыке нет теплоты и *моңа* для башкирской души. Сочиненный в содружестве двух доморощенных михалкова с регистаном текст тоже отдает казенной затхлостью и дешовой бравадой...

29.03.2011

Наши вечные праздники

Из трех чудес Башкортостана можно назвать три башкирских народных праздника: ***Науруз и Нардуган***, соблюдаемые с далеких первобытных времен праязыка и прарелигии и ***Каргабуткахы*** – со времен ***Великого Потопа или Ноева Ковчега.*** Первые два связаны якобы с днями рождения мифических первопредки и первопредка человечества ***Шульгана*** (21 марта в день летнего солнцестояния по современному календарю) и ***Урала*** (25 декабря в день зимнего солнцестояния). Рассмотрим сюжет из мифологии, связанный с этими событиями.

Рождение Шульгана и Урала. Согласно мифу, на юго-западе Урала из утробы "женской" половины тела (Им) прапредкагермафродита Господа Всевышнего Имира, расположенной на устье реки Им-аба (Им-омут, т.е. женский детородный орган) – современной реки Эмба должна была родиться девочка-первопредка юго-западной фратрии человечества (одна из будущих близнецов Шульган или Рем или Гильгамеш). Но этому помешала смерть прапредка Имира (его кончина была необходима для образования Вселенной) и будущая первопредка женской фратрии Шульган оставалась пока нерожденной в утробе (семеннике) женской половины (Им), превращенной в гору ***Машак*** (мешок, утроба). Происхождение названия горы таково: Аба-асак 'холм-материнский'>абасак>басак>***Машак.*** Упрощенная этимология того же названия такова: ама-асак 'женщина-мать т.е. Шульган и ее повивальная бабка Волчица'>масак>***Машак.*** Как было уже мною многократно сказано (об этом подробнее в книге: Йыһат Солтанов. Хәтерхитап. Уфа, 2002, на башкирском языке или "XI том. Хатерхитап – Книга-память на сайте <зигатсултанов.рф>), Уральские горы якобы представляют собою набор частей застывшего тела Имира и сохраняют до сих пор свои соответствующие башкирские названия. Соответственно этому нашими предками были разработаны священные символики: Господь Всевышний Имир (прапредок) изображался как восьмиконечная звезда или развилка восьми дорог; первопредка Шульган – как пятиконечная звезда (т.е. фигура женщины); первопредок Урал – как шестиконечная звезда (т.е. фигура мужчины с фаллосом), для наглядности даю рисунки.



Сверху вниз символы: Имир, Шульган, Урал

Точно таким же образом на северо-востоке Урала из мужской стороны пары яичек Имира, а точнее, из его застывшего в виде горы ***Нары-тау***, конечно, через фаллоса Тора-тау ("Тора" по-башкирски фаллос, буквально -- 'стоит') должен был родиться будущий первопредок северо-восточной фратрии человечества (один из будущих близнецов Урал или Ромул или Энкиду). Но его появление на свет также было отсрочено смертью прапредка Имира и наш первопредок Урал оставался пока нерожденным в утробе (семеннике) мужской половины Имира, превратившегося в гору ***Нары-тау*** ("Нарасида" – семенник). Упрощенная этимология названия той же горы такова: ан-ары 'мать-корова и ее побочный сын-мужчина т.е. Урал'>***Нары.*** Оставался нерожденным потому, что прежде их, человеческих первопредков рождения, должны были появиться на свет их будущие молочные кормилицы

Шаке (Волчица) и ***Ина*** (Корова); по велению Небесной Души Господа Всевышнего все так и произошло: родились они, молочные матери, из пары грудей Имира, застывших в виде гор, эти горы в древности назывались ***Эмей Куш-тау*** (букв. 'Грудь Парная гора'), а у древних географов писались как Имай, Хумай, Умай, Юмай. Современное название этой двуглавой горы также ***Куш-тау***...

На схеме А показаны священные дороги, по которым проходили священные

Волчица и Корова к священным горам Машак-тау и Нары-тау (сплошные линии)

и пути их обратно вместе с новорожденными Шульганом и Уралом (пунктирные

линии). Напомним: прародителем и прародительницей земных богов и богинь

являются детородные органы Имира (мужской и женский). Это священные горы

Тора-тау (фаллос Имира) и Эмба-тау (вагина Имира). В привязке к местности они



Схемы священных дорог Волчицы и Коровы -- молочных матерей первопредков Шульгана и Урала.

показаны на схеме Б (внизу слева), здесь же повторяется первая схема с привязкой ее к современным топонимам Республики Башкортостан. Согласно мировой мифологии рождение наших первопредков и их молочных кормилиц происходило таким образом: Урал родился от горы Нары-тау (правое "мужское" яичко Имира), а Шульган родилась от горы Машак-тау (левое "женское" яичко Имира), а Корова, кормилица Урала, родилась от уничтоженного теперь Стерлитамакским Содовым комбинатом Шаке-тау (считался левым соском груди Имира – продолженинм горы Куш-тау) и Волчица, кормилица Шульгана, родилась от Юрак-тау (считался правым соском груди Имира – продолжением горы Куш-тау). Чтобы исполнить предназначенную им роль повивальной бабки и кормилиц первопредков человечества, Волчица и Корова прошли долгую, утомительную дорогу от мест их рождения через гору ***Тукан-тау*** (считается, что она -- пуп Имира), там скрестились их пути и пошли они дальше (прямая линия между пунктами 5 – 1 путь Волчицы, между пунктами 2 – 4 путь Коровы). Обратный маршрут Коровы с младенцем Уралом пролег через пещеру Аскын, (пункт их краткой остановки для отдыха), дальше до Юрак-тау и до места их постоянного жилища -- Первой Теремы (Юрты) – в местечко ***Талас***,



Родовая тамга усырганцев-башкир.

путь этот обозначен пунктирами (4 – 5 – 6); такой же путь прошла Волчица с младеницей Шульганом через места их краткой остановки для отдыха пещеру Инаяк (или Киңдер) до Шаке-тау и Талас, обозначена она на схеме точечной линией (1 – 2 – 3). Дороги эти считались священными, принадлежавшими людям и животным. Схема этих скрещивающихся путей-линий принята как родовая тамга усярганцев-башкир (приведенный на рисунке образец реконструирован на основе личных родовых знаков башкир из деревень Юлдыбай и Кузяш, поставленные ими под документом 31 мая 1804 года. – ЦГИА РБ, И-2, дело 190, л. 31) и в форме креста на Андреевском флаге россиян. Эти узоры ("андреевский крест") воспроизведены как национальный орнамент на башкирском ковре (см. рисунок).

К глубокому сожалению, священной горы Шаке-тау теперь уже нет – уничтожена руками современников для производства каустической соды...

Рождение первопредков-близнецов происходило якобы следующим образом: одна из священных молочных кормилиц Шаке (Волчица) пришла к названной горе ***Машак*** и начала лизать промерзшую скалу, она растаяла и 21 марта (по современному календарю) из недр скалы появилась первопредка женской фратрии человечества Шульган, затем Волчица вскормила ее своим грудным молоком и привела ее к современной священной горе Шаке-тау ('Волчица-гора'), а потом первопредка перебралась через реку Агидель в местечко Талас.

Точно таким же образом и другая священная молочная мать Ина (Корова) 25 сентября якобы способствовала появлению из скалы горы ***Нары*** будущего первопредка мужской фратрии человечества Урала, вскормила его своим молоком и привела к современной священной горе Йурак, откуда первопредок также перебрался через реку Агидель в местечко Талас. Название горы Йурак происходит от слова һйурак (корова белая) – Йурак-тау...

Первопредки Шульган и Урал, достигнувшие уже зрелого возраста, в Таласе ставят Первую Терему (Юрту) -- купол с основанием в виде круга, повторяющего линию горизонта. Этот Первый Круг, где были якобы размещены первопредка-женщина Шульган (золотое Солнце) и первопредок-мужчина Урал (сияющий Месяц-Луна), назывался *Алтын Урата*[93] или *Алтын Урда* – ***Золотая Орда,*** а внутри он был разделен, согласно известному канону, тоже попалам на 2 равные половины: левая – женская половина (месторасположение Шульгана с ее потомками -- первородом Усяр-Кан или башкирские роды Усярган и Канлы), и правая – мужская половина (месторасположение Урала с его потомками -- первородом Себер-Абар или башкирские роды Самар/Шумер и Абар/Авар). Подобное (левое

Башкирский национальный орнамент на ковре – "андреевский крест"

[93] Урата – окружение, круг.Библейское название города Аркаима тоже Урата (Арада).

и правое) расположение интерьера в старых башкирских избах сохранялось долго, вплоть до нашего времени (например, в моей родной деревне Санкем-Биктимер).

Приплод этих первородов из первого круга расселился во внешний круг Первой Теремы, образовав второй круг, называемый *Ак Урата* или *Ак Урда* – ***Белая Орда,*** тоже разделенный на женскую и мужскую половины**.**

Когда потомки Урала и Шульгана размножились настолько, что заняли весь окоем, все поднебесное пространство, появился третий круг – *Кук Урата* или *Кук Урда* – ***Синяя Орда.***

Все три названия кругов, или исторических этапов равития человечества впоследствии были использованы чингизидами как названия своих государств, то есть не в хронологическом, а в пространственно-географическом смысле.

Краткие выводы. Науруз – по календарю 21 марта, день летнего солнцестояния или день рождения первопредки Шульгана (библейской Хавы/Евы). Так как Хаба/Ḥаya или Набо/Небо это есть по-башкирскому ’небесные воды‘, получается: Науруз>Набо-ырыс, буквально ’небесный приплод, дитя‘ то есть наша первопредка Шульган. А второй праздник Нардуган – по календарю 25 сентября, день зимнего солнцестояния или день рождения первопредка Урала (библейского Эдема/Адама). Урал/Арал означает Ар-ул/Ер-ул то есть ’Земли сын‘, так как родился он от скальной Нары/Норы – или Нары-тау. От этого, по-видимому, происходит “нараси” -- ’младенец‘.

Каргабуткахы (Грачей каша). Как было уже сказано, этот священный праздник соблюдается у нас со времен Великого Потопа. После долгих мытарств по всемирной водной стихии ковчег Ноя-пророка пристала к черной земной суше, разведанной черным Грачом Карга и названной “гора-Насар” (слово *насар*/*ницир* является синонимом *яман*), то есть современная гора Яман-тау -- самая высокая вершина на Урале. Событие это воспето в шумерском эпосе:

У горы Ницир корабль остановился.
Гора Ницир корабль удержала, не дает
качаться.
Один день, два дня гора Ницир держит корабль, не дает качаться.
Три дня, четыре дня гора Ницир держит корабль, не дает качаться.
Пять и шесть гора Ницир держит корабль, не дает качаться.
При наступлении дня седьмого
Вынес голубя и отпустил я;
Отправившись, голубь назад вернулся:
Места не нашел, прилетел обратно.
Вынес ласточку и отпустил я;
Отправившись, ласточка назад вернулась:
Места не нашла, прилетела обратно.
Вынес ворона и отпустил я;
Ворон же, отправившись, спад воды увидел,
Не вернулся; каркает, ест и гадит.
Я вышел, на четыре стороны принес я жертву…

(Поэзия и проза Древнего Востока, М., 1973, стр.215)

Значит, Каргабуткахы – праздник благодарного жертвоприношения священному Грачу, ошибочно переведенному в тексте как Ворон. Гора Ницир (на современном башкирском языке Насар) называется ее синоним Яман (Яман-тау).

Пора уже, наконец, хотя бы нам самим осознать эти праздники исконно башкирскими.

07.04.2011

ЙӨКМӘТКЕһЕ

КОММУНИСТ. Роман.....

ПОВЕСТӘР

ХЕҘМӘТ.....
ТЕГӘНӘК.....
КИПАРИСТАР СӘСКӘ АТҠАН САҠТА.....
ТОМБОЙОҠ.....

ФЕКЕРҘӘР

Континенталь империямы, әллә өсөнсө бөтә донъя һуғышымы?
Һәйкәлдәр һәм һәптәндәр
Тиңһеҙ икәү
Телем – яҙмышым
Хазарҙар һәм аҙарҙар
Уҙамандар уҙаманы
Суд над строптивым или спасение Карасакала
Коротко о наших госсимволиках
Наши вечные праздники